# БАШКОРТ ХАЛЫК ИЖАДЫ

## ЭПОС



III
ТОМ

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## EPOS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ЭПОС

# BASKURT HALIK FOLKLORU

## EPOS

УФА
«КИТАП»
1998

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## III ТОМ

## ЭПОС



ӨФӨ
«ҠИТАП»
1998

ББҠ 82.3 Баш
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев,* |*Наил Бикбулатов,*| *Салауат Галин, Нур Зарипов, Фәнүзә Нәҙершина, Зиннур Ураҡсин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов.*

Төҙөүсеһе — **Әхмәт Сөләймәнов.**

Инеш мәҡәлә *Мөхтәр Сәғитовтыҡы.* Һүҙ ахырын *Әхмәт Сөләймәнов* менән *Рөстәм Рәжәпов* яҙҙы.

Аңлатмалар *Мөхтәр Сәғитов* менән *Әхмәт Сөләймәновтыҡы.*

Томдың яуаплы мөхәррире — *Нур Зарипов.*

Нәшриәт мөхәррире — *Гөлназ Исхаҡова.*

**Күсереп баҫтырғанда томға һылтаныу мотлаҡ.**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Кадим Аралбаев, Раиил Бикбаев,* |*Наиль Бикбулатов,*| *Салават Галин, Нур Зарипов, Фануза Надршина, Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов.*

Составитель — **Ахмет Сулейманов.**

Предисловие *Мухтара Сагитова,* послесловие — *Ахмета Сулейманова* и *Рустама Рязапова.*

Комментарии *Мухтара Сагитова* и *Ахмета Сулейманова.*

Ответственный редактор тома — *Нур Зарипов.*

Редактор издательства — *Гульназ Исхакова.*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

Б 29 **Башҡорт халыҡ ижады.** Өсөнсө том. Эпос. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1998. — 448 бит.

Күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» туплаимаһының сираттағы баҫмаһы. Китап «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» һ. б. эпостарҙан төҙөлгән.

$Б\frac{4702110500 - 154}{М\ 121(03) - 98}41-98$ **ББК 82.3 Баш**

ISBN 5-295-01573-4 (т. 3)
ISBN 5-295-01393-6

© Составление Сулейманова А. М., 1998

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

*Был томға 1972 йылда донъя күргән йыйынтыктағы (БХИ: Эпос. 1-се китап. Яуаплы мөхәррире Әхнәф Ибраһим улы Харисов) әҫәрҙәр тулыһынса индерелде.*

*Арабыҙҙан бик иртә киткән күренекле фольклорсыбыҙ, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, филология фәндәре кандидаты Мөхтәр Моффазал улы Сәғитов (1933—1986) әҙерләгән ул тәүге баҫмала һәр эпик ҡомартҡының сағыштырмаса иң тулы бер тексы һәм иң әһәмиәтле версиялары, варианттары ла бирелгән ине. Ошо принципҡа таянып, яңы баҫмаға уларҙың быға са ташҡа баҫылмағандарының йәнә бер нисәүһе өҫтәлде. Йыйынтыҡҡа инмәгәндәренең йөкмәткеһе тураһында мәғлүмәттәрҙе «Аңлатмалар» бүлегенән алырға була. Ул бүлек, М. М. Сәғитов төҙөгән томдағы мәғлүмәттәргә ҡушымталар өҫтәп, яңынан эшләнде.*

*Томды әҙерләгәндә текстар архивтағы нөсхәләре менән өр-яңынан сағыштырылды: элек иҫәпкә алынмаған стиль, лексик, фразеологик үҙенсәлектәре ҡайтанан тергеҙелде, быға са төшөрөп ҡалдырылған урындары киренән өҫтәлде. Шундайҙар сәбәп менән әҫәрҙең архивта һаҡланған нөсхәләренән төшөп ҡалған «ярсыҡтары»н йөкмәткенең эске логикаһы талап иткән кимәлдә яңынан тергеҙергә тырышылды. Ундай өҫтәлмәләр, фәндә ҡабул ителгән тәртипкә ярашлы рәүештә, ҡырлы йәйәләр эсенә алынды.*

*М. М. Сәғитовтың яҡты иҫтәлегенә хөрмәт йөҙөнән, тәүге баҫмаға ул яҙған инеш мәҡәлә үҙгәрешһеҙ ҡалдырылды. Шул уҡ ваҡытта, уның яҙылышына сирек быуат үтеүен, эпос ғилемендәге үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, мөхәрририәт өҫтәлмә мәҡәлә биреүҙе хуп күрҙе. Был эште аспирант Рөстәм Рәжәпов ҡатнашлығында («Урал батыр» һәм «Авеста», «Урал батыр» эпосының Алтай эпостары менән оҡшашлыҡтары һәм уртаҡлыҡтары» бүлексәләре) филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Сөләймәнов атҡарҙы.*

*«Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпостарын архивта һаҡланған нөсхәһе буйынса сағыштырыу эшен Шәүрә Шәкурова атҡарҙы. Томды әҙерләүгә шулай уҡ филология фәндәре кандидаты Миҙхәт Мәмбәтов та булышлыҡ итте.*

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫ

### 1

Эпос — башҡорт фольклорының иң ҙур һәм иң бай төрҙәренең береһе. Боронғо дәүерҙән үк үҫеш юлын башлаған эпик әҫәрҙәр, кешеләрҙең тәбиғәт һәм тормош хаҡындағы аң-ҡарашын, уларҙың ышаныуҙарын, ғөрөф-йолаларын сағылдырып, халыҡтың поэтик тарихы булып быуындан быуынға күсә, һаҡлана килгән.

Фольклорҙың башҡа төрө кеүек үк, эпостың да һүрәтләү объекты булып реаль тормош тора. Боронғо мифологияға нигеҙләнеп тыуған эпос әҫәрҙәренә тормошто ғәҙәттә фантастик пландараҡ һүрәтләү характерлы булһа, һуңғыраҡ осорҙарҙа барлыҡҡа килгән әҫәрҙәрҙә реалистик һүрәтләүгә ынтылыш көслө.

Башҡорт эпосы өсөн дөйөм халыҡ, хатта кешелек донъяһы әһәмиәтендәге темаларҙы, идеяларҙы күтәреү характерлы, тормош көрәпештәрен, мөһим ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә масштаблылыҡ, күп планлылыҡ хас. Бындай эпик әҫәрҙәр башҡа жанр әҫәрҙәренән ысынбарлыҡ көрәнештәрен, булып үткән ваҡиғаларҙы монументаль образдар аша дөйөмләштереүе һәм типиклâштырыуы менән айырыла.

Башҡорт эпосының репертуары бай, тематикаһы күп төрлө, ә йөкмәткеһе күбеһенсә героик характерҙа. Уның жанр формалары ла төрлө-төрлө.

Башҡорт халыҡ эпосын йыйыу һәм өйрәнеүҙең оҙайлы ғына тарихы бар. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем рус халҡының алдынғы ҡарашлы ғалимдары, шулай уҡ башҡорттарҙың үҙҙәре араһынан сыҡҡан айырым һәүәҫкәрҙәр ауыҙ-тел әҫәрҙәрен йыйыу, донъяға сығарыу буйынса байтаҡ эш башҡарғандар һәм ҡайһы бер ғилми күҙәтеүҙәр ҙә яһағандар.

Туранан-тура башҡорт эпосын яҙып алмаһа ла, шуны һаҡлаусы һүҙ оҫталары, йырсылар хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәрҙе XVIII быуат аҙаҡтарында Көньяҡ Урал байлыҡтарын өйрәнгән

рус ғалимы И. И. Лепехин юлъяҙмаларында осратабыҙ[1]. Башҡорт эпосын беренсе булып яҙып алыусы һәм баҫып сығарыусы итеп хаҡлы рәүештә Тимофей Беляевты күрһәтергә кәрәк. Ул заманының уҡымышлы ҡурайсыһы тарафынан (үкенескә ҡаршы, кем икәнлеге әйтелмәгән) халыҡтан яҙып алынған «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтенең ҡулъяҙмаһы менән таныша һәм, 1809 йылда уны руссаға тәржемә итеп, 1812 йылда Ҡазан университеты типографияһында баҫтырып сығара[2].

Китапта Т. Беляев: «Ҡурайсы тарафынан йыйылған ҡулъяҙма башҡорт хикәйәһе ошоноң менән тамам. Быны тәржемә итеп бөтөүгә мин уның икенсе киҫәген дә табып тәржемәләй башланым. Был киҫәктә ҡурайсы, башҡорт ҡәбиләһенең башлығы хаҡында хикәйә итеүҙе тамамлап, уның тоҡомдары тураһында һөйләүен дауам итә», — тип иҫкәрмә яһаған. Һуңғы йылдарҙа Ленинградта табылған «Алдар менән Зөһрә» эпосы Беляев әйткән ана шул икенсе киҫәк булырға тейеш.

Күренекле рус ғалимы һәм яҙыусыһы В. И. Даль 1833—1841 йылдарҙа Ырымбур губернаһында хеҙмәт итә. Ул башҡорт фольклоры менән ҡыҙыҡһына. Беренсе башлап «Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәрен яҙып ала һәм «Башкирская русалка» исеме менән 1843 йылда «Москвитянин» журналында (№ 1) рус телендә баҫтыра. Ҙур булмаған баш һүҙендә В. И. Даль Дим буйы башҡорттарына, уларҙың тарихына, йолаларына, шулай уҡ ер-һыу исемдәренә бәйле легендалар хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын Л. Суходольский ҙа яҙып ала һәм, рус теленә тәржемә итеп, әҙәби яҡтан бер аҙ эшкәртеп, донъяға сығара[3]. Л. Суходольский тәржемәлә тексттың шиғри өлөштәрен дә һаҡлай. Аҙаҡта бирелгән аңлатмаларҙа, башҡорт эпосын тикшереүселәр өсөн мөһим күҙәтеүҙәр яһауына ҡарамаҫтан, Л. Суходольский ҡайһы бер яңылыш фекерҙәр ҙә үткәрә. Мәҫәлән, башҡорт, шулай уҡ башҡа төрки халыҡтары фольклорында мифологик элементтарҙың ҙур урын алыуын ул, был халыҡтарҙың мәғрифәттән ситтә тороуҙарынан килә, тип аңлата. Шулай уҡ ул Заятүләкте пассив герой тип, ә дини образ булған Хыҙырҙы төп герой итеп иҫәпләй. Ысынында иһә Хыҙыр әҫәргә бик осраҡлы килеп ингән образ, ул хәрәкәт үҙәгендә тормай.

Көнсығыш халыҡтары фольклоры белгесе Г. И. Потанин үҙенең «Дала эпосында диңгеҙ ҡыҙы»[4] тигән хеҙмәтендә Л. Суходольский вариантына мөрәжәғәт итә. Ул «Заятүләк менән Һыу-

---

[1] Лепехин И. И. Дневные записки путешествия по разным провинциям Российского государства в 1770 г. Ч. 2. СПб., 1802. С. 113.

[2] Беляев Т. Куз-Курпяч. Башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года. Казань, 1812.

[3] Суходольский Л. Башкирская легенда о Туляке // Вестник русского географического общества. 1858. Ч. 24. № 12. С. 65—72.

[4] Потанин Г. И. Дочь моря в степном эпосе // Этнографическое обозрение. 1892. № 1—4. С. 38—69.

һылыу»ҙы башҡа төрки, шулай уҡ монгол халыҡтарының эпик әҫәрҙәре менән сағыштыра, ҡыҫҡаса уның сюжетына, типологик оҡшашлыҡтарына туҡтала. Ғалимдың был тикшеренеүе ҙур иғтибарға лайыҡ. Шулай ҙа хеҙмәтен ул асылда «күсеп йөрөмәле сюжеттар» позицияһынан сығып яҙған. Һыу аҫты донъяһы, диңгеҙ ҡыҙы тураһындағы сюжетты ниндәйҙер тарихи сәбәптәр арҡаһында бер халыҡтан икенсеһенә күскән булырға тейеш, тип аңлата. Оҡшаш тормош рәүеше кисергән халыҡтарҙың рухи культураһында ла оҡшаш моменттарҙың булыуын Потанин иҫәпкә алмай, төрлө халыҡ фольклорында осраған типологик сюжеттарҙы тик бер-береһенән үҙләштереүгә генә ҡайтарып ҡалдыра.

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында башҡорт фольклорын йыйыуҙа А. Г. Бессоновтың эшмәкәрлеге мөһим урын алып тора. Башҡорт телен яҡшы белгән А. Г. Бессонов, күп йылдар буйына Өфө, Пермь, Ырымбур губерналарындағы башҡорт ауылдарында булып, ҙур һәүәҫлек менән әкиәттәр, легендалар, шулай уҡ «Алпамыша менән Барсынһылыу» тигән эпик әҫәрҙең бер вариантын яҙып ала һәм уларҙы руссаға тәржемә итә. Әммә А. Г. Бессонов йыйған башҡорт әкиәттәре ул үҙе иҫән саҡта донъя күрә алмай, бик күп йылдар үткәс кенә айырым китап булып баҫыла [5], «Алпамыша менән Барсынһылыу» әҫәре лә шул китапҡа ингән.

XIX быуат аҙағында, XX быуат баштарында башҡорттар араһынан халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныусы айырым ғалимдар, мәғрифәтсе яҙыусылар, һәүәҫкәр эшмәкәрҙәр күтәрелеп сыға. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1897 йылда Ҡазанда сыҡҡан «Ядкар» китабында «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан бер өҙөк урынлаштырған; Сәлимгәрәй Солтанов Һамар ҡалаһында сыҡҡан «Самарская газета»ның 1902 йылғы 83-сө һанында «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының бер вариантын рус теленә тәржемә итеп баҫтырған. Шул уҡ әҫәрҙең икенсе бер вариантын 1909 йылда Мәжит Ғафури Асылыкүл буйында ял иткән ваҡытында яҡындағы ауылдарҙан килгән ҡурайсыларҙан яҙып ала һәм 1910 йылда Өфөлә «Заятүләк белән Сусылу» тигән исемдә айырым китап итеп сығара. Фазыл Туйкин үҙенең 1915 йылда Өфөлә сыҡҡан «Нардуған» тигән шиғырҙар, йырҙар йыйынтығына «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының бер өҙөгөн «Боронғо башҡорт йыры Мораҙым» исеме менән урынлаштырған. 1916 йылда Фәйзи Вәлиев «Аң» журналының 14-се һанында «Жик Мәргән» әҫәрен бер аҙ эшкәртеп баҫтырған.

XX быуат башында башҡорт эпосы әҫәрҙәрен яҙып алыуҙа Мөхәммәтша сәсән Буранғоловтың хеҙмәте бик ҙур. Ул 1910 йылда Ырымбур губернаһы Этҡол волосы Иҙрис ауылының мәшһүр ҡурайсыһы Ғәбит сәсәндән һәм шул уҡ волостың Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Хәмит сәсәндән «Урал батыр» эпосын яҙып ала. 1907 йылда М. Буранғоловтың көньяҡ Башҡортостанда киң

---

[5] Башкирские народные сказки / Составление и перевод А. Г. Бессонова. Под редакцией Н. К. Дмитриева. Уфа, 1941.

таралған «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға» әҫәрҙәрен яҙып алыуы билдәле. Ун йыл уткәс, 1917 йылда, хәҙерге Көйөргәҙе районы Бабалар ауылы сәсәне Ғәтиәтулла Бикҡужиндан «Аҡбуҙат» эпосын яҙып алған.

Шулай итеп, Октябрь революцияһына тиклем үк рус ғалимдары һәм башҡорттар араһынан күтәрелеп сыҡҡан эшмәкәрҙәр тарафынан башҡорт эпик фольклорының байтаҡ гүзәл өлгөләре яҙып алына, ҡайһы берҙәре баҫылып та сыға. Әммә был осорҙа әле халыҡ ижады ҡомартҡыларын йыйыу һәм өйрәнеү күбеһенсә осраҡлы рәүештә башҡарылған айырым һәүәҫкәрҙәр эшенә ҡайтып ҡала. Поэтик мираҫты ғилми яҡтан өйрәнеү эше иһә башланғыс хәлендә генә була.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы башҡорт халҡын, Рәсәйҙең башҡа бөтә халыҡтары һымаҡ, социаль һәм милли иҙеүҙән бөтөнләйгә азат итте, уға социалистик тормош шарттарында экономик һәм культура йәһәтенән күкрәп үҫеү мөмкинлеге тыуҙырҙы. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлөү менән Мәғариф халыҡ комиссариаты эргәһендә халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү бүлеге ойошторола, 1922 йылдың башында башҡорттарҙың культураһын һәм көнкүрешен өйрәнеү йәмғиәте («Ғилми йәмғиәт») төҙөлә. «Ғилми йәмғиәт» тарафынан байтаҡ ҡына эпик фольклор материалы туплана, һәм уның органы булған «Башҡорт аймағы» журналында, шулай уҡ «Яңы юл», «Сәсән» журналдарында ауыҙ-тел ижады өлгөләре баҫыла [6].

Халыҡтың этнографияһын, поэтик ижадын өйрәнеүҙә Ғ. Вилданов, Х. Ғәбитов, С. Мирас, Ғ. Дәүләтшин кеүек эшмәкәрҙәр ҙур ғына көс һалалар. М. Бәхтийәров, З. Наушируан һ. б. ил өйрәнеүселәр фольклорҙы ғилми нигеҙҙә системалы йыйыу өсөн ҡулланмалар баҫып сығаралар [7]. Был методик ҡулланмаларҙың, шулай уҡ ҡулланма рәүешендә яҙылған мәҡәләләрҙең, ҡайһы бер кәмселектәре булыуға ҡарамаҫтан, үҙ заманында практик ярҙамы ҙур булды.

1930 йылдарҙа, бигерәк тә СССР яҙыусыларының беренсе съезында М. Горькийҙың халыҡ ижадын юғары баһалап, уны тупларға, өйрәнергә саҡырған сығышынан һуң, бөтә илдә фольклорҙы йыйыу һәм баҫып сығарыу эштәре киң йәйелдерелә. Башҡортостан милли культура институты тарафынан республиканың төрлө райондарына ғилми экспедициялар ойошторола, урындарҙа һәүәҫкәр корреспонденттар менән даими элемтә булдырыла.

---

[6] Вилданов Ғ. Башҡорт ҡашҡалары // Башҡорт аймағы. 1925. № 1, 78—86-сы б.; Вилданов Ғ. Башҡорт әкиәттәренән берәүһе // Шунда уҡ, 1927. № 3. 69—71-се б.; Ҡобайырҙар // Шунда уҡ, № 4. 17—19-сы б.; Дәүләтшин Ғ. Мәсем хан // Шунда уҡ. 1929. № 7. 7—88-се б.; Мирас С. Башҡорт бейҙәре һәм хандары миҙгелендәге матур әҙәбиәттән үрнәктәр // Сәсән. 1928. № 11—12. 10—12-се б.

[7] Бәхтийәров М. Халыҡ әҙәбиәтен йыйыусыларға // Башҡортостан хәбәрләре. 1921, № 8; Наушируан З. Халыҡ әҙәбиәте материалдарын йыйнау тураһында // Башҡорт аймағы. Өфө. 1927. № 4. 51—63-сө б.

Фольклор дөйөм милли культура байлығы итеп баһалана, уны туплау бөтә халыҡ эше итеп иғлан ителә.

Башҡорт фольклорын ғилми нигеҙҙә йыйыу һәм өйрәнеү эшен яйға һалыуҙа Мәскәү ғалимдарының, яҙыусыларының ярҙамы ҙур булды. 1938 йылда билдәле рус фольклорсыһы Ю. М. Соколов, СССР Яҙыусылар союзының фольклор секцияһы ултырышында башҡорт ижадына баһа биреп: «Беҙҙең алда бай халыҡ поэзияһы донъяһы асылды. Был поэтик байлыҡты башҡорт халҡына ғына түгел, ә рус халҡына, шулай уҡ Советтар Союзының бөтә халыҡтарына, хатта бөтә донъя халыҡтарына еткереү өсөн, башҡорт работниктарына һәр яҡтан ярҙам итеү һәм үҙебеҙгә лә ошо юлда бар көстө һалыу — беҙҙең изге бурысыбыҙ», — тине [8].

Мәскәү ғалимдарының практик ярҙамы, Милли культура институты хеҙмәткәрҙәренең ҙур тырышлығы менән 30-сы йылдарҙа бик күп фольклор материалдары, шул иҫәптән эпик әҫәрҙәр тупланды. Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә үткәрелгән экспедициялар ҡиммәтле һөҙөмтә бирҙе. Был йылдарҙа бигерәк тә Мөхәммәтша Буранғоловтың, урындағы корреспонденттарҙан Әхмәт Исламғоловтың (Йомағужа районы), Хәдим Ҡәнзәфәровтың (Балтас районы) эшмәкәрлеге ҙур булды. Йыйыу эшендә шулай уҡ Али Карнай, Ғәйнан Әмири, Ғ. Сәләм кеүек яҙыусылар активлыҡ күрһәттеләр. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә һәм айырым йыйынтыҡтарҙа халыҡ эпосына ҡараған байтаҡ материал баҫылып сыҡты [9].

Был осорҙа башҡорт эпосын өйрәнеү буйынса байтаҡ ҡына мәҡәләләр ҙә баҫыла. Халыҡ ижады әҫәрҙәрен аңлатыуҙа, уларҙы популярлаштырыуҙа Ә. Усманов, Ж. Лоҡманов, А. Ҡудашев, М. Буранғоловтарҙың билдәле хеҙмәте бар.

Шулай ҙа башҡорт фольклорын, бигерәк тә уның эпос жанрын өйрәнеүҙә етди аҙым 50-се йылдарҙа ғына яһала. Традицион жанрҙарҙы эсенә алған өс томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының донъяға сығыуы [10] башҡорт фольклористикаһында мөһим ваҡиға булды; ауыҙ-тел әҫәрҙәрен артабан фәнни нигеҙҙә өйрәнеүгә ҙур этәреш яһалды.

Башҡорт фольклорын системалы рәүештә йыйыу һәм өйрәнеү эшен күбеһенсә СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты алып бара. 60-сы — 70-се йылдар эсендә Институт Башҡортостандың төрлө райондарында, шулай уҡ Ҡурған, Силәбе, Пермь, Екатеринбург, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттар араһында

---

[8] ҒА: ф. 3, оп. 12/274. 42-се б.

[9] «Ҡараһаҡал менән ҡара ат» көйөнөң тарихы һәм йырҙары // Октябрь. 1939. № 8—9. 79—82-се б; Аҡбуҙат // Октябрь. 1940. № 5. 48—53-сө б.; Юлай менән Салауат // Ҡыҙыл Башҡортостан. 1940. 22—25 сентябрь; 1941. 7—10 сентябрь; Иҙеүкәй менән Мораҙым // Октябрь. 1940. № 6—8.

[10] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том / Төҙөүсеһе, кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1954; 2-се том / Төҙөүсеһе, баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1959; 3-сө том / Төҙөүсеһе, баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Ә. Н. Кирәев. Өфө, 1956.

фольклор экспедициялары үткәрҙе. Ошо экспедициялар тарафынан хәҙергәсә билдәһеҙ булған байтаҡ эпик ҡомартҡылар табылды, билдәле булғандарының әһәмиәтле варианттары яҙып алынды. Тупланған бай материал башҡорт эпосын киңерәк планда дөйөмләштереүгә, уның тәбиғәтен асыуға мөмкинлек бирҙе. Шуның һөҙөмтәһендә Кирәй Мәргәндең «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» (Өфө, 1961) тигән китабы баҫылып сыҡты. Был монографияла башҡорт эпосының социаль-тарихи нигеҙе, милли ерлектә тыуған, шулай уҡ ситтән үҙләштерелгән сюжеттар тикшерелә.

Һуңғы йылдарҙа эпик ҡомартҡылар хаҡында матбуғатта байтаҡ ҡына ғилми мәҡәләләр баҫылды. 1962 йылда Өфөлә «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтенең рус телендә сығыуына 150 йыл тулыу айҡанлы ғилми сессия уҙғарылды, һәм уның материалдары айырым йыйынтыҡ рәүешендә баҫылды [11].

Башҡорт эпосын ғилми яҡтан өйрәнеүгә Ә. И. Харисовтың айырым хеҙмәттәре арналған. Бигерәк тә уның 1965 йылда сыҡҡан «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар» тигән китабында традицион фольклор жанрҙарының йөҙөн билдәләүгә, тәбиғәтен асыуға, эпик әҫәрҙәрҙе фәнни анализлауға, уларҙың поэтикаһын һәм тарихи ерлеген тикшереүгә ҙур урын бирелә.

1956 йылда Башҡорт дәүләт университетының асылыуы республикабыҙҙың культура тарихында ҙур ваҡиға булды. Уҡытыусылар етәкселегендә алып барылған фольклор йыйыу эшенә филология факультеты талиптарының әүҙем ҡатнашлыҡ итеүе ыңғай күренеш алды. 1958 йылдан алып талиптар Башҡортостандың төрлө районларына экспедицияға сығып, байтаҡ фольклор материалдары тупланылар.

## 2

Халыҡтың гүзәл эпик әҫәрҙәрен — ҡобайырҙарын йәки поэмаларын, әйтештәрен, хикәйәттәрен һ. б. — ижад итеүселәр һәм уларҙы быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килеүселәр күбеһенсә сәсәндәр, йырсылар, ҡурайсылар булған [12].

Героик поэмаларҙың, ҡобайырҙарҙың үҫеше иң элек сәсәнлек сәнғәте менән бәйләнгән. Сәсәндәр халыҡтың ижтимағи тормошонда ҙур роль уйнағандар. Илгә яу килгәндә, улар халыҡты дошманға ҡаршы көрәшкә өндәгәндәр. Ил эсендә тыуған бәхәсле мәсьәләләр ҙә, ғәҙәттә, уларһыҙ хәл ителмәгән. «Йәйләүлек, тибенлек өсөн ырыуҙар араһында ыҙғыш-талаш сыҡһа, сәсәндәр һөйләшкән», ырыуҙар килешә алмаһа, бәхәсте хәл итеү өсөн, «майҙан яһап, ҡайһы ырыуҙың аты уҙһа, батыры йыҡһа, сәсәне, йырсыһы, ҡурайсыһы, бейеүсеһе еңһә, шул ырыуҙың теләге өҫтөн

[11] Народный эпос «Кузый-курпес и Маян-хылу». Материалы научной сессии / Под редакцией А. Н. Киреева и А. И. Харисова. Уфа, 1963.

[12] Буранғолов М. Башҡорт халыҡ поэзияһы. ҒА: ф. 3, оп. 12/445. 1-се б.

һаналған. Был шарттарҙы боҙоп та яу менән һөжүм яһаған ырыу булһа, ул ырыуҙы ант боҙоусы күреп, бүтән сит ырыуҙар ҙа уға ҡаршы аяҡланғандар» [13].

Элек-электән үткәреләә килгән йыйындар, һәр төрлө мәжлестәр сәсәндәр ҡатнашлығынан тыш үтмәгән. Сәсәндәр, ғәҙәттә, халыҡ мәнфәғәтен күҙәтеп, уны яҡлап сығыш яһағандар, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы сыҡҡандар. Шул сәбәпле тел оҫталарының халыҡ араһында дан алғандарын ғына сәсән исеме менән йөрөтөр булғандар.

Сәсәндәр үҙҙәренең халыҡ алдындағы изге бурысын түбәндәгесә аңлатҡандар:

Яманлыҡты яҡламаç,
Дошман хәтерен һаҡламаç,
Яҡшылыҡты һөйәр ул,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул [14].

Яҙма ҡомартҡыларҙа боронғо сәсәндәр хаҡында мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Әммә халыҡ хәтерендә байтаҡ легендар сәсәндәр һаҡланып ҡалған. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында, мәçәлән, йәше йөҙҙән ашҡан данлы Һабрау сәсән күрһәтелә. Халыҡ хәтерендә шулай уҡ үҙенең зирәклеге менән теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтан еңел ҡотолоп сығыр, үткер телле, йор һүҙле Ерәнсә сәсән һаҡланған һәм киң билдәле фольклор геройына әүерелгән. Был популяр сәсән образы ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ фольклорында ла бар.

Легендаларҙа ҡайһы бер сәсәндәрҙең ниндәй ырыу йәки ҡәбиләгә ҡарағанлығы әйтелә. Мәçәлән, Ҡобағош сәсәндең үçәргән ҡәбиләһе батыры булыуы һәм уның XVI быуат урталарында йәшәгәнлеге беленә. Икенсе бер риүәйәттә ул мең ҡәбиләһе батыры итеп күрһәтелә. Ҡобағош сәсәндең ябай халыҡ ҡатламынан сыҡҡанлығы билдәле. Ул үҙе тураһында ошолай тигән:

Түрә түгел, ҡарамын,
Түрә түгел, ҡарамын,
Толпар менгән хандарға
Яуға ҡаршы барамын, ау,
Яуға ҡаршы барамын [15].

Тарихи риүәйәттәргә ҡарағанда, XVIII быуаттың тәүге яртыһында тиләү ҡәбиләһенең Ҡарас исемле сәсәне булған. Уның образы «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» тигән хикәйәттә кәүҙәләнә; «Ҡарас менән Аҡша» тигән икенсе хикәйәттә уның ҡаҙаҡ феодалдары ойоштороған сапҡындарға ҡаршы батырҙарса көрәше һүрәтләнә. XVIII быуат сәсәндәренән Башҡортостандың хәҙерге Учалы районы Әүешкүл һәм Яугүл йәйләүҙәрендә йәшәгән Мәхмут сә-

[13] Бурангулов М. Шунда уҡ.
[14] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. Өфө, 1954. 65-се б.
[15] Бурангулов М. Юғарыла күрһәтелгән ҡулъяҙма әçәр. 12-се б.

сән хаҡында байтаҡ риүәйәттәр һаҡланған. Ул яҡшы ҡурайсы һәм әкиәтсе лә булған. Ҡайһы бер сығанаҡтарға ҡарағанда, Ҡараһаҡал, Батырша ихтилалдарында ҡатнашҡан. «Йәйәүле Мәхмүт» исемле халыҡ йыры уның иҫтәлеген һаҡлай.

Шулай уҡ Байыҡ исемле сәсән булғаны билдәле [16]. Ул Златоуст өйәҙе Мырҙалар волосы Мәхмүт ауылында йәшәгән. Уның сәсәнлек даны Башҡортостанға ғына түгел, ә алыҫ ҡаҙаҡ далаларына ла таралған булған. Заманында ул бик күп ярыштарҙа, бәйгеләрҙә ҡатнашҡан. Хатта ҡаҙаҡ далаларына сығып, Аблай хандың Бохар исемле атаҡлы аҡынын әйтештә еңеүгә өлгәшкән. Байыҡ сәсән, 1814 йылда 102 йәшкә етеп, француз яуынан ҡайтҡан башҡорт һалдаттарын ҡурай тартып ҡаршы алған. Ошо көй аҙаҡ «Байыҡ», «Ҡарт Байыҡ» исеме менән халыҡ араһында таралған, ә сәсән һәм ҡурайсының үҙе хаҡында «Байыҡ-Айҙар» тигән ҡобайыр сығарғандар.

Халыҡтың эпос әҫәрҙәрен киләсәк быуынға еткереүҙә ҙур роль уйнаған элекке Тамъян-Ҡатай кантоны Тиләү волосы (хәҙерге Әбйәлил районы) Яңы Балапан ауылында йәшәгән Ишмөхәммәт Мырҙаҡаев (1781—1878) оҫта сәсән булған һәм байтаҡ ҡына сәсәндәр ижадына йоғонто яһаған. Ул Тамъян-Ҡатай кантоны башлығы Ҡаһарман Ҡыуатовта (1766—1868) ҡурайсы булып йөрөгән. «Урал батыр» эпосын башҡарыусы Ғәбит сәсән дә (1856—1921) оҫталыҡҡа ана шул Ишмөхәммәт сәсәндән өйрәнгән, уның репертуарын үҙләштергән. XX быуат башында йәшәгән Ғәбит һәм Хәмит (Баймаҡ районы), Сабирйән Мөхәммәтҡолов, Таһир, Хәйрулла Ишмурзиндар (Бөрйән районы) бер үк ваҡытта сәсән дә, ҡурайсы ла булғандар.

Сәсәндәр ғәҙәттә хеҙмәтсән халыҡ вәкиле булып сығыш яһағандар. Арала талантын феодаль аристократияһына хеҙмәт итеүгә биреүселәр ҙә булмаған түгел, әлбиттә. Билдәле, халыҡ ундай сәсәнде үҙһенмәгән. «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтеше»ндә, мәҫәлән, бейгә тоғро хеҙмәт иткән, халыҡ аңын томалап, илде йоҡоға талдырған Аҡмырҙа сәсән тәнҡитләнә. Халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы Ҡобағош сәсән Аҡмырҙаға былай ти:

Ябалаҡтай ҙур ханға,
Йөндәй осор юҡ данға
Илен ҡоштай бәйләгән,
Тотоп ханға һыйлаған —
Илендәге бей булһа;
Төндәй, илде ҡаплатҡан,
Тирбәтеп илде йоҡлатҡан,
Ант итеп ханға бирелгән,
Теле яндай кирелгән
Аҡмырҙа булмай, кем булһын, ау,
Аҡмырҙа булмай, кем булһын! [17]

---

[16] ҒА: ф. 3, оп. 12/445, 121—137-се б.: Ағиҙел. 1970. № 9, 94—101-се б.
[17] Шунда уҡ, 9-сы б.

һәләтен иҙеүселәрҙе данлауға биргән сәсәндәрҙең ижады үҙҙәре менән бергә, хатта үҙҙәренән дә алда үлер һәм онотолоп ҡалыр булған. Халыҡ сәсәндәренең исеме иһә күңел түрендә һаҡланған һәм беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

Эпик әҫәрҙең тулылығы, сюжетының төҙөклөгө, композицион яҡтан йыйнаҡлығы йыш ҡына сәсәндәрҙең индивидуаль һәм коллектив ижад һәләтенә бәйләнгән. Сәсәндәр башҡарған эпик әҫәрҙәр ғәҙәттә проза аралашҡан шиғри юлдарҙан йәки шау шиғри текстан торған. Сәсәндең башҡарыу һәләте, һөйләү оҫталығы ул хикәйәләгән әҫәрҙең поэтик тәбиғәтендә сағылыусан. Бер үк әҫәр бер сәсәндән яҙып алынғанда ҙур күләмле булыуы, шиғри юлдарҙың өҫтөнләк итеүе, ә икенсеһенән яҙылғанда, күләме бәләкәйерәк, ә шиғри юлдары аҙыраҡ булыуы, өсөнсө сәсәндән яҙып алынған шул уҡ әҫәрҙең инде шау прозанан ғына тиерлек тороуы — бөтәһенән элек сәсәндең шәхси һәләтенә, уның башҡарыу үҙенсәлегенә бәйләнгән.

Башҡорт эпосы күбеһенсә ырыу-ҡәбилә тормошон, феодализм осорон сағылдыра. XIX быуатта Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең формалаша башлауы, нығыныуы сәсәнлек сәнғәтен әкренләп һүнеүгә килтерә. Боронғо эпик форма һәм традициялар яңы тормош талаптарына яуап бирмәй, яңы йөкмәткене сағылдыра алмай башлай. Яңы тормош шарттарында сәсәндәр асылда боронғонан мираҫ булып ҡалған әҫәрҙәрҙе башҡарыусы һәм һаҡлаусы булып ҡына ҡалалар.

Эпик әҫәр, башҡа фольклор ҡомартҡылары кеүек үк, тыуған мәлендә шәхси ижад емеше булған. Ләкин ул аҙаҡ телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, билдәле үҙгәрештәргә осрай, шымара. Шулай итеп, әҫәрҙе эшкәртеүҙә, камиллаштырыуҙа төрлө быуын сәсәндәре ҡатнашлыҡ итә, һәм ул күмәк ижадҡа әйләнә. Быуындан быуынға һөйләү аша күсеү арҡаһында айырым сюжеттарҙың юғалып ҡалған булыуы ла ихтимал. Шуныһы ла мөһим, ҡайһы бер эпик әҫәрҙәр телдә йәшәү менән сикләнмәй. Һуңғыраҡ дәүерҙә айырым уҡымышлы сәсәндәр, һәүәҫкәрҙәр теге йәки был поэтик әҫәрҙе ҡағыҙға төшөрөп ҡуйыр һәм күсереп таратыр булғандар. 1812 йылда рус телендә баҫылып сыҡҡан «Ҡуҙыйкүрпәс»те Тимофей Беляев башҡорт ҡурайсыһы ҡулъяҙмаһынан алғанлығын әйтә. «Күсәк бей» поэмаһының да яҙма рәүештә таралғанлығы билдәле.

## 3

Башҡорт эпосының репертуары бай һәм ҡатмарлы. Унда «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Күсәк бей», «Зөһрә менән Алдар» кеүек башҡорт халҡына ғына хас әҫәрҙәр менән бергә, йөкмәткеһе һәм сюжеты яғынан башҡа төрки халыҡтар менән уртаҡ әҫәрҙәр — «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Буҙйегет» кеүек ҡомартҡылар бар.

Йөкмәткеһенә ҡарап, беҙҙең эпосты шартлы рәүештә төп ике төркөмгә бүлергә мөмкин: героик эпос, социаль-көнкүреш эпосы.

Беренсе төркөмгә: «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Алпамыша», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Күсәк бей», «Ҡарас менән Аҡша» һ. б. инә. Икенсе төркөмгә «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар», «Буҙйегет» һ. б. ҡарай.

Әлбиттә, эпостың был ике төркөмө араһында ныҡлы бер кәртә үткәреү мөмкин түгел. Әҫәрҙең ҡайһы төркөмгә инеүен билдәләр өсөн, тәүҙә унда ниндәй теманың өҫтөнлөк алыуын, уның ниндәй планда хәл ителеүен асыҡларға кәрәк. Героик, йәки батырҙар тураһындағы эпоста көрәш темаһы өҫтөнлөк итә. Ә социаль-көнкүреш эпосында ғаилә, мөхәббәт, кәсеп, көнкүрештәге хайуандар һәм улар менән кешеләрҙең мөнәсәбәтен сағылдырған темалар өҫтөнлөк ала.

Йыш ҡына осраҡта бер үк әҫәрҙә тыуған ил өсөн көрәш героикаһы ғаилә, мөхәббәт өсөн көрәш менән бергә үрелеп китә. Шуға ул әҫәрҙең ҡайһы төргә ҡарауын да ҡырҡа ғына билдәләүе ҡыйын була. Мәҫәлән, Тимофей Беляев версияһындағы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренең варианттарында ғаилә, мөхәббәт өсөн көрәш темаһы мифик дошмандарға, илбаҫарҙарға ҡаршы батырҙың героик көрәше менән аралашып китә. Был версияла хатта көрәш героикаһы асылда өҫтөнлөк ала, тип әйтергә мөмкин. Әммә күпселектә, йәғни Ҡоншаҡ версияһына ҡараған варианттарында, көнкүреш тематикаһы өҫтөнлөк иткәнлектән, ул әҫәр, нигеҙҙә, көнкүреш эпосы итеп ҡарала.

Башҡорт эпосы, нигеҙҙә, ике ижтимағи формация ысынбарлығын — община-ырыу ҡоролошоноң емерелеү осорон һәм феодализм дәүерен сағылдыра. Хронологик-тематик йәһәттән килгәндә инде, башҡорт эпосы буйынса яҡынса ошондай бүленеш үткәреп булыр ине:

1. Ырыу йәмғиәтенең емерелеү осорон сағылдырған эпос:

а) мифологияға нигеҙләнгән героик поэмалар йәки ҡобайырҙар: «Урал батыр», «Аҡбуҙат»;

б) малсылыҡҡа бәйле социаль-көнкүреш һәм ғаилә тормошо тураһындағы ҡобайырҙар йәки хикәйәттәр: «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», «Заятүләк менән Һыуһылыу».

2. Феодализмдың башланғыс осорон сағылдырған эпос:

а) ырыу-ҡәбилә татыулығы һәм берҙәмлеге идеяһын үткәргән, шул фонда социаль-көнкүреште һәм ғаилә мөнәсәбәттәрен һүрәтләгән хикәйәттәр: «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар»;

б) ырыу-ара көрәште һүрәтләгән поэмалар: «Күсәк бей».

3. Феодализмдың үҫеү осорон сағылдырған героик поэмалар: «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән», «Буҙйегет» әҫәре лә нигеҙҙә ошо төркөмгә ҡарай.

4. Феодализмдың һуңғы осорона ҡараған героик поэмалар (йәки хикәйәттәр): «Ҡарас менән Ҡараһаҡал», «Ҡарас менән Аҡша», «Тәүеш Мәргән», «Салауат батыр», «Байыҡ-Айҙар сәсән» һ. б.

Ырыу йәмғиәте дәүерендә кешеләр бик ябай, примитив ҡоралдар менән эш иткәнгә күрә, хеҙмәт етештереүсәнлеге бик түбән булған. Шул сәбәпле улар тәбиғәт көстәренән әле бойондороҡло булғандар. Тәбиғәт кеше өсөн ғәжәйеп серле һәм көслө булып күренгән. Серле тәбиғәт донъяһы, йыһан һәм уның есемдәре боронғо кеше аңында йәнләндерелеп ҡабул ителгән, һәм был хәл кешене һәр төрлө ышаныуҙарға, инаныуҙарға килтергән. Ҡ. Маркс: «Һәр мифология тәбиғәт көстәрен тик хыял ярҙамында ғына буйһондора һәм ойоштора; һәм ул ошо тәбиғәт көстәрен тамам буйһондорғандан һуң ғына бөтә» [18], тигән.

Серле тәбиғәт донъяһын аңлатырға теләү кешеләр аңында төрлө мифтар барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булған. Төрлө ерлектә тыуғанға күрә, һәр халыҡ мифологияһының йөкмәткеһе, поэтикаһы үҙенсәлекле булып ойошҡан. Фольклористика фәнендә эпостың, ғөмүмән, сәнғәттең боронғо мифология нигеҙендә тыуыуы күптән инде иҫбат ителгән. «Грек мифологияһы, — ти Ҡ. Маркс,— грек сәнғәтенең арсеналы ғына түгел, ә уның нигеҙе лә» [19].

Башҡорт эпосының да мифология нигеҙендә тыуыуы һәм ул өлгәшкән поэтик ҡаҙаныштарҙы файҙаланып үҫеп китеүе асыҡ күренә. Был йәһәттән «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» һ. б. асыҡ миҫал була алалар.

«Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» идея-тематик һәм образдар берелеше яғынан бер-береһе менән бик тығыҙ бәйләнгән әҫәрҙәр.

«Урал батыр» — халыҡтың боронғо аң кимәлен, ҡарашын һәм хыялын сағылдырған монументаль поэтик ҡомартҡы. Уның сюжеты боронғо эпос өсөн характерлы мотивтарҙан һәм деталдәрҙән тора. Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар Урал тауы һәм Ағиҙел, Нөгөш, Яйыҡ, Һаҡмар йылғалары буйында, Шүлгән күле тирәһендә бара. Унда өс быуын геройҙар яҙмышы тасуир ителә. Урал батыр, аждаһа-йыландарҙы ҡыйратҡандан һуң, Йәншишмәнән алынған һыуҙы үҙе эсеүҙән баш тарта һәм, уны бөркөп, тәбиғәт донъяһын мәңге үлемһеҙ яһай. Урал үлгәндән һуң, уның юлын уландары дауам итә.

Урал батырҙың яуыз дошмандары булып башҡорт мифологияһында киң таралған аждаһа, дейеү, ендәр, йыландар һәм уларҙың батшалары (Әзрәҡә, Ҡатил һ. б.) сығыш яһайҙар. Әҫәрҙә батырға ярҙам иткән ыңғай мифик заттар ҙа бар. Улар — күк һәм ҡоштар батшаһы Самрау, уның ҡатындары Ҡояш менән Ай ҡыҙҙары — Һомай менән Айһылыу. Был образдарҙы һүрәтләүҙә боронғо башҡорттарҙың күк, ҡояш, ай, йондоҙҙар хаҡындағы космогоник ҡараштары бик асыҡ сағылған. Борон күк есемдәре кеше һәм хайуандар образында күҙ алдына килтерелгән, һәм улар эпик әҫәрҙәргә лә тап шулай килеп ингән. Айырым алғанда, Етегән йондоҙо хаҡындағы мәғлүмәттәр бик ҡыҙыҡ. Әзрәҡә батша Самрауҙың йондоҙҙан йондоҙға осоп йөрөр Аҡбуҙатын урлатыу өсөн ете дейеүен ебәрә. Дейеүҙәр Аҡбуҙатты тота алмайҙар һәм,

[18] Маркс Ҡ. и Энгельс Ф. Соч. Т. 12. Ч. 1. С. 203.
[19] Шунда уҡ.

кире Әзрәҡәгә ҡайтырға ҡурҡып, ҡуктә тороп ҡалалар, ете йондоҙға әүереләләр.

Батырҙың уң ҡанаты булған мифик толпар Аҡбуҙатты һурәтләүгә был героик эпоста ҙур урын бирелгән, ә «Аҡбуҙат» әҫәрендә ул тағы ла ныҡыраҡ үҫтерелгән. Ғөмүмән, башҡорт фольклорында йылҡы образы бик киң таралған. Боронғо башҡорттар атты культҡа әйләндергәндәр, изгелекле хайуан тип ҡарағандар. Был яҙма сығанаҡтар менән дә раҫлана. Мәҫәлән, 922 йылда Волга, Урал буйында булып киткән ғәрәп илсеһе ибн Фаҙлан, башҡорттар ун ике раббыға табына, шул раббыларҙың береһе — йылҡы, тип яҙып ҡалдырған.

«Урал батыр»ҙа боронғолоҡто сағылдырыусы мотивтарҙың береһе итеп геройҙарҙың йыш ҡына төрлө ҡиәфәткә инеүен күрһәтергә кәрәк. Шүлгән дейеүҙәр илендә аждаһаға әүерелеп йөрөй; һыу аҫты батшаһы Әзрәҡәнең улы Зәрҡум йә балыҡ, йә көшөл, йә иһә йылан була ала. Күк батшаһы Самрауҙың ҡыҙҙары Һомай менән Айһылыу ҙа һын алмаштырыусан: беренсеһе — аҡҡош, икенсеһе өйрәк ҡиәфәтендә йөрөй ала.

Әҫәрҙә ерҙең, тауҙарҙың, йылғаларҙың, ҡаҙылма байлыҡтарҙың, ә кешеләр тормошонда малсылыҡтың нисек барлыҡҡа килеүен аңлатырға тырышыуҙа ла боронғо ҡараш, боронғо аң ята. Быларҙың барлыҡҡа килеүе туранан-тура эпик геройҙарҙың изгелекле эшмәкәрлегенә бәйләп аңлатыла. Мәҫәлән, Урал батыр, Аҡбуҙатҡа менеп, диңгеҙ эсендә дейеүҙәр менән һуғыша. Уның дейеүҙәрҙе ҡырып үткән юлында тауҙар хасил була: ҡыйратылған мифик дошман өйөмө ҡалҡыулыҡҡа, тауға әйләнә. Әзрәҡәнең кәүҙәһенән, мәҫәлән, Ямантау барлыҡҡа килә. Ә инде изгелекле Урал батырҙың кәүҙәһе төрлө хазина таштарға бай бейек тауға — Урал тауына әйләнә. Урал батырҙың һөйәктәре алтын-көмөшкә, аҫыл таштарға әүерелә. Шулай уҡ Урал батыр, үрҙә әйтелгәнсә, Йәншишмә һыуын һирпеп, тәбиғәт донъяһын мәңге үлемһеҙ яһай. Урал батырҙың улдары — Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар — алмас ҡылыс менән ергә сабып, һыуһыҙлыҡтан интеккән халыҡҡа йылға йыралар. (Дүрт батыр йырған дүрт йылғаға ошо батырҙар исеме бирелә.) Һомай, Урал батыр үлгәндән һуң, барлыҡ ҡоштарҙы эйәртеп ергә төшә: Уралда ҡош-ҡорт үрсеп китә. Урал батыр тарафынан еңелгән Ҡатил батшаның үгеҙе, һыйыр тоҡомон эйәртеп, ә Аҡбуҙат, йылҡы өйөрөн эйәртеп, Урал буйына килә.

Поэмала Урал батыр бала саҡтан уҡ ғәйрәтле, ғәҙеллекте яҡлаусы, изгелекле итеп һүрәтләнә, һәм ул ошо сифаттары менән ағаһы Шүлгәнгә ҡаршы ҡуйыла. Урал батыр кешелекте мәңге үлемһеҙ итеүҙе, уны һәр төрлө яуыз дошмандарҙан ҡотҡарыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Уның әҫәрҙә тасуир ителгән бөтә эшмәкәрлеге ошо изге бурысты фиҙакәр рәүештә үтәүгә йүнәлтелгән. Әҫәрҙә кешелек, тереклек — мәңгелек, әммә кешеләр, тереклек эйәһе быуын-быуын килеп-китеп тора, һәм был — мәңгелек закон тигән философия үткәрелә. Кеше донъялағы бар нәмәнән дә көслө, өҫтөн тора тигән идея үҫтерелә. Көнсөллөк, дан артынан ҡыуыу арҡаһында, мифик дошманға һатылып, Урал батырға ҡаршы көрәш-

кән Шүлгәндең еңелеп ҡалыуын һүрәтләп, эпос тик кешеләр бәхете, улар мәнфәғәте өсөн көрәшкән кеше генә маҡтауға, данға лайыҡлы тигән фекерҙе раҫлай.

«Урал батыр» өс быуын кешеләре тормошон сағылдыра, тип үрҙә әйтелгәйне инде. Был өс быуын образдары: Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ; уларҙың улдары — Урал менән Шүлгән; Уралдың улдары — Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар. Эпик фольклорҙа балалар, ғәҙәттә, аталары башлаған изге эште дауам итеүселәр итеп һүрәтләнә. «Урал батыр»ҙа был ҡағиҙә ныҡ һаҡланған.

Был эпик әҫәрҙә кешелектең бик боронғо дәүере өсөн характерлы тормош рәүеше сағылыуын айырым-асыҡ әйтергә кәрәк. Кешеләр айырым төркөм, ырыуҙар булып, ҡырағай йәнлектәргә һунар итеп көн күрәләр. Был заманда әле йәнлек итен сей көйө ашау ҙа бар. Шулай уҡ кешеләрҙең әле йорт хайуандарын белмәгәнлектәре күренә. Эпос күп йәһәттән боронғо дәүерҙә үк формалашҡан һәм, бик оҙайлы осорҙар кисереп, беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Шул сәбәпле унда төрлө осорҙар эҙе һаҡлана. Мәҫәлән, әҫәрҙә ҡырағайлыҡ дәүеренә характерлы һыҙаттар ҙа, унан күп һуңғы община-ырыу ҡоролошоноң емерелеү дәүеренә хас күренештәр ҙә, аҙаҡ килеп ҡол биләүселек ҡоролошона хас деталдәр ҙә урын алған.

«Урал батыр» әҫәренең нигеҙендә реаль тормош ысынбарлығы ята. Тик был тормош боронғо ауыҙ-тел ижадына хас художестволы фантазия менән һуғарылып һүрәтләнгән. Был йәһәттән Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһының президенты мәрхүм Ҡ. И. Сатпаевтың «Урал батыр» хаҡында әйткән фекере бик әһәмиәтле. Ул әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең бер кәңәшмәһендә: «Башҡорт легендаһында, Урал батыр үҙ ирке менән үлемһеҙлектән баш тартҡандан һуң, уның һөйәктәре аҫыл хазиналарға һәм алтынға, ә ҡаны ер майына — нефткә әйләнә, тиелә. Был, ерҙең үҙе кеүек үк, бик боронғо легенда. Башҡорт халҡы уны күп быуаттар элек, фән нефтте Көньяҡ Урал тирәһендә асҡанға тиклем үк, ижад иткән. Ошонан һуң фольклор әҫәрҙәрендә халыҡ аҡылы һәм халыҡтың тормош ысынбарлығы хаҡында ҡарашы ятҡанлығын кем кире ҡағыр!» [20] тигән.

«Аҡбуҙат» ҡобайыры асылда «Урал батыр»ҙың логик дауамы булып тора. Унда төп герой — Һәүбән Урал батыр һәм уның улдары тормошҡа ашырып өлгөрмәгән эштәрҙе үтәй: яуыз дейеүендәрҙең, аждаһаларҙың һыу аҫты донъяһын һәм уларҙың батшаһы Шүлгәнде тар-мар итә. «Бында Һәүбән батырҙың героик эше фантастика менән реаллектең бик оҫта ҡушылышы планында тасуир ителә» [21]. Әҫәрҙең мөһим бер үҙенсәлеге шунда ла: һүрәтләнгән ваҡиғалар икеһе ике осорға ҡараған үҙ аллы ике сюжеттың бергә органик ҡушылышы планында бара. Шул сәбәпле эпик

---

[20] Академик К. И. Сатпаев (Сборник, посвященный памяти выдающегося советского ученого). Алма-Ата, 1965. С. 241—242.

[21] Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 81-се б.

геройҙың көрәше лә ике йүнәлештә күрһәтелә. Урал батырҙың дейеүҙәр тарафынан урланған Аҡбуҙатын, тылсымлы алмас ҡылысын алыу өсөн, Һәүбәндең һыу аҫты батшалығына сәйәхәте, Шүлгән батша ҡыҙы Нәркәсте осратыуы, Аҡбуҙат менән алмас ҡылысты ҡулға төшөргәндән һуң Шүлгән батшалығын тар-мар итеүе, уның дейеү-аждаһаларын баҡа һәм һәр төрлө ҡул йәнлегенә, ендәрҙе ярғанаттарға әүерелдереүе, урлап килтерелгән ер ҡыҙҙарын геройҙың азат итеүе, кешеләргә күл төбөнән йылҡылар сығарып биреүе, Аҡбуҙат өсөн дейеүҙәрҙән ҡаяны тиштереп һарай эшләтеүе һәм Нәркәсте кәләшлеккә алып ҡайтыуы әҫәрҙең мифологияға һәм фантастикаға нигеҙләнеп тыуған боронғо сюжет һыҙығын тәшкил итә. Был сюжет һыҙығы үҙ йәһәтендә боронғо героик эпос өсөн характерлы булған төп мотивтарҙың береһе — геройҙың кәләш артынан сәйәхәткә сығыу мотивы менән тулылана. Ошо боронғо сюжет тәүтормош (община-ырыу) ҡоролошонон емерелә башлау осорон сағылдыра.

Әҫәрҙең икенсе сюжет һыҙығы феодал мөнәсәбәттәрҙең башланыу, синфи айырымлыҡтарҙың көсәйеү осорона тура килә. Унда Һәүбән батырҙың халыҡты иҙеүсе яуыз Мәсем ханға һәм уның бейҙәренә ҡаршы көрәше һүрәтләнә. Эпик батыр залим ханды юҡ итеп кенә ҡалмай, ә хан бойороғо менән ҡанаттары ҡырҡылған Һомай ҡошто (Урал батыр һәләк булғандан һуң, уның ҡатыны мәңгегә Һомай исемле аҡҡош булып ҡалған була), диңгеҙ артындағы батшалыҡҡа ҡоллоҡҡа һатылған ете батырҙы ҡотҡара һәм уларҙы ете ырыуға баш итеп ҡуя. Әҫәрҙә икенсе сюжет һыҙығы үҫешендә реалистик һүрәтләү фантастик һүрәтләүҙән өҫтөнөрәк тора. Ике сюжеттың бергә ҡушылыуы һөҙөмтәһендә ике осор идеяһы үрелеп китә.

Һәүбән батыр кешелектең мифик дошмандары һәм уларҙың башында торған һыу аҫты донъяһы батшаһы Шүлгән менән генә көрәшеп ҡалмай, ә ер өҫтөндәге Мәсем хан һәм уның бейҙәре иҙеүенән ябай халыҡты ҡотҡарыу өсөн дә көрәшә. Идеаль герой, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, ерҙә лә, һыу аҫты донъяһында ла дошмандарын тар-мар итә, кешеләрҙе яуыз йәндәрҙән ҡотҡара.

«Аҡбуҙат»та, уны «Урал батыр» поэмаһы менән бәйләп, бер бөтөн итеп тороусы байтаҡ поэтик деталдәр бар. «Урал батыр»ҙа һүрәтләнгән Һомай, уның тоғро ярҙамсыһы Аҡбуҙат, алмас ҡылыс, шулай уҡ Ҡәһҡәһә образдары «Аҡбуҙат»та ла бирелгән. Ике әҫәрҙә лә геройҙар, дошмандарына ҡаршы көрәшкәндә, ҡорал итеп алмас ҡылыс, тылсымлы таяҡ ҡулланалар.

Социаль-көнкүреш циклына ҡараған «Заятүләк менән Һыуһылыу» — үҙенең образлы идеяһы, поэтик тәбиғәте менән лиро-эпик ҡомартҡы. Хикәйәттең төрлө ваҡытта яҙып алынған варианты күп, шуларҙың байтағы Октябрь революцияһына тиклем үк баҫылып сыҡҡан.

Был әҫәрҙең «Аҡбуҙат» менән ҡайһы бер уртаҡлығы бар. Мәҫәлән, икеһендә лә геройҙың һыу аҫты донъяһына барып ҡайтыуы һүрәтләнә. Һәүбән батыр унда Урал батырҙың Аҡбуҙ толпарын һәм мең йыл буйы күл төбөндә тутыҡмай ятҡан алмас ҡылысын

алырға һәм шулар ярҙамында кешеләрҙе илбаҫарҙар иҙеүенән ҡотҡарыу теләге менән бара. Заятүләктең һыу аҫтына сәйәхәте үҙенә кәләш эҙләү менән аңлана. Ғөмүмән, эпик фольклорҙа геройҙың ҡыҙ эҙләп ситкә сығып китеүе — бик киң таралған күренеш. Уны фольклористика фәне ырыусылыҡ осорондағы экзогамия — фәҡәт сит ырыуҙан ҡатын алыу йолаһының художестволы сағылышы тип аңлата. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында, «Аҡбуҙат»тағы кеүек үк, егет һыу батшаһы ҡыҙына өйләнә һәм, бик күп мал эйәртеп, ер өҫтөнә сыға. Әҫәрҙең һәр вариантында Һыуһылыуҙың Заятүләкте үҙ янында, һыу аҫтында ҡалдырырға тырышыуы ла бар. Ошо күренеш «Аҡбуҙат»та ла урын алған. Һәр осраҡта ла батырҙар һыу аҫтының хозур донъяһын үҙ тыуған иленә алмаштырмайҙар, ер өҫтөнә сығалар. Ырыусылыҡ ҡоролошо осоронда ир-егеттең үҙ ырыуынан ситләшеүе, ситтә ҡалыуы ҙур ғәйеп һаналған. Үҙ ырыуы мәнфәғәтен күҙәткән батыр ғына ысын батыр итеп ҡаралған.

Был ҡомартҡының бөтә варианттары ла берҙәй идея-поэтик кимәлдә түгел. Ҡайһы берҙәрендә ислам дине йоғонтоһонда тыуған образдар һәм деталдәр бар. Мәҫәлән, С. Солтанов һәм М. Ғафури яҙып алған варианттарҙа Заятүләкте һәр төрлө хәүефтән һаҡлаусы, доға өйрәтеп, ҡыйынлыҡтан ҡотолоу юлын күрһәтеүсе Хыҙыр образы бирелә.

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың күпселек варианттары төп геройҙарҙың һәләкәте менән тамамлана. Донъя мәшәҡәттәре менән мауығып киткән Заятүләк һөйләшелгән ваҡытта Балҡантауға ҡайтып етә алмай. Ул, тау башында үлеп ятҡан Һыуһылыуҙы күреп, үҙен-үҙе һәләк итә. Заятүләк менән Һыуһылыуҙы, боронғо йола буйынса, тау түбәһенә мендереп, таштан уба яһап ерләйҙәр.

Башҡорт халҡының эпик мираҫында хайуандар культына бәйле әҫәрҙәр үҙенсәлекле урын алып тора. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ана шундайҙарға инә. Был ҡомартҡыларҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар Шүлгән күле, Каспий диңгеҙе буйы, шулай уҡ Көньяҡ Урал тирәһендә бара.

Йылҡыны, ғөмүмән, малды ҡулға эйәләштереү боронғо кешеләр тормошона, уларҙың аң-ҡарашына ҙур үҙгәреш алып килә. Был күренеш ырыу экономикаһында мөһим роль уйнай башлай. Йылҡының кеше тормошондағы урыны уны изгелекле хайуан образы итеп күтәрә, йылҡы малы культҡа әйләнә. Малды ҡулға эйәләштереү үҙ яйында тәүтормош ҡоролошоноң емерелеүенә, синфи айырымлыҡтарҙың тыуыуына булышлыҡ итә. Кешелек йәмғиәте үҫкән һайын йылҡыға, ғөмүмән, малға ҡарата ҡараш та үҙгәрә: элекке изгелекле һаналған хайуандар байлыҡ табыу сараһы булып китәләр.

«Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» әҫәрҙәрендә изге һаналған хайуандарҙың кешеләргә (дөрөҫөрәге, хужаларына) насар ҡарағандары өсөн риҙаһыҙлыҡ белдереп «баш күтәреүҙәрен» һүрәтләү аша феодализмдың башланыу осорона хас булған социаль ҡаршылыҡтар һәм бәрелештәр сағыла.

«Ҡара юрға» менән «Аҡһаҡ ҡола» сюжеты өсөн уртаҡ бер деталь бар: икеһендә лә, тап «Аҡбуҙат» әҫәрендәге һымаҡ, Шүлгән күленән йылҡы сығыу күренеше бирелгән. «Ҡара юрға»ла Ҡушлаҡ батыр ят бер үткенсегә һунар шоңҡарын Шүлгән күле төбөнән сыҡҡан йылҡы өйөрөнә алмаша. Күлдән сыҡҡан мал аҙаҡ үрсеп, Ҡушлаҡ батырҙың улы байып китә, ә уның тоҡомдары байыулы ырыуы булып китәләр. Аҡһаҡ ҡола Шүлгән күленә инеп ҡолонлаған бейәнән тыуа.

Аҡһаҡ ҡола ла, Ҡара юрға ла, Ҡуңыр буға ла — әүҙем эпик герой функцияһын башҡаралар. Аҡһаҡ ҡола, хужаһына асыу итеп, йылҡы өйөрөн алып ҡаса, ә Ҡара юрға эйәһенә күрше ырыу йәйләүенән кәләшлеккә ҡыҙ урлап алып ҡайта. «Ҡуңыр буға»ның күпселек варианттарында Төньяҡ Урал башҡортоноң үҙ ҡыҙын Каспий диңгеҙе буйында йәшәгән бер ырыу кешеһенә кейәүгә биреүе хикәйәләнә. Ҡыҙға инселәп бирелгән тананан Ҡуңыр буға тыуа. Ҡуңыр буға, һыйыр малдарын эйәртеп, инәһенең тыуған еренә ҡасып ҡайта. Был өс мал образы аҡыллы, кәрәк урынында хәйләкәр, ғәҙеллек һаҡлаусы итеп күрһәтелгән. Ҡара юрға, тәүҙә үҙен яҡшы тәрбиәләргә эйәһенән вәғәҙә алмай тороп, уға кәләш алып ҡайтмай. Боронғолар, изгелекле хайуан культы йолаһын боҙоу фажиғәгә килтерә, тип ҡарағандар. Антын боҙоп, вәғәҙәһен үтәмәгән хужаһын Аҡһаҡ ҡола тибеп үлтерә.

Хайуандар хаҡындағы эпик әҫәрҙәр күләм яғынан бәләкәй, композицион яҡтан ябай, сюжеттары бик йыйнаҡ. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» әҫәрҙәренең шиғри һүҙҙәренә халыҡ үҙенә айырым көйҙәр ҙә сығарған. Шул уҡ исемдәр менән йөрөгән был көйҙәр боронғо башҡорт йыр музыкаһы мираҫына ингән.

Ырыу ҡоролошонан бер баҫҡысҡа юғары торған феодализм кешелек тормошона ижтимағи һәм социаль-сәйәси яңылыҡтар, яңы мөнәсәбәттәр алып килә. Башҡорт эпосы, поэтик йылъяҙма булараҡ, бына ошо тарихи үҙгәрештәрҙе, феодал мөнәсәбәттәрҙең урынлашыу процесын сағылдырған, осорҙоң героик образдарын тыуҙырған, прогрессив идеалдарҙы күтәргән. Ырыу ҡоролошо осоронда героик әҫәрҙәрҙең төп темаһы мифик образдарҙа кәүҙәләндерелгән тәбиғәт көстәренә ҡаршы көрәш, кешеләрҙең ошо көстәр өҫтөнән хакимлыҡ урынлаштырыуға ынтылышынан тора. Феодализм дәүерендә, бигерәк тә уның башланғыс осоронда, ырыуҙар татыулығы һәм берҙәмлеге, тыуған ерҙе илбаҫарҙарҙан һаҡлау үҙәк темаға әйләнә.

Эпик ижадта ырыу-ҡәбиләләрҙең берҙәмлеге ғәҙәттә ике ырыу йәки ҡәбилә вәкилдәренең ҡауышыуы аша сағылдырыла. Был идея-тематик проблема тыуған илде баҫҡынсыларҙан һаҡлау мотивын да үҙ эсенә ала. Феодализмдың башланғыс осорон сағылдырған «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар», «Күсәк бей» әҫәрҙәрендә ырыу-ара мөнәсәбәттәр айырыуса асыҡ сағылдырылған. (Был эпик әҫәрҙәр «Башҡорт халыҡ ижады»ның 4-се томында бирелә. Улар хаҡында һүҙ ҙә шул томдың инеш мәҡәләһендә булыр. — Ә. С.)

## 4

Башҡорт эпосы әҫәрҙәренең ҡайһыһына ғына ҡараһаң да, унда һүрәтләү алымдарының ныҡлы уртаҡлығы күҙгә ташлана. Хәйер, ул бер беҙҙең эпос өсөн генә хас күренеш түгел. Ғөмүмән, бөтә төрки-монгол халыҡтарының традицион эпик фольклорында образдар әҫәрҙең башынан аҙағына тиклем ғәҙәттә бер генә планда, бер генә төрлө сифаттар менән — ыңғай йәки кире итеп һүрәтләнеүсән. Шуға күрә һәр әҫәрҙең төп образдары ла, ярҙамсы образдары ла икегә — ыңғай һәм кире образдарға бүленә. Мәҫәлән, Урал батыр, Һәүбән батыр, Заятүләк, Ҡуҙыйкүрпәс, Алпамыша һ. б. гел ыңғай яҡтан ғына һүрәтләнә. Улар халыҡ һәм ил мәнфәғәтен яҡлаусы, изге идеалдар өсөн көрәшеүсе булып күҙ алдына баҫа. Кешелек бәхете өсөн көрәшеүсе Урал батыр яуыз мифик йәндәрҙе аяуһыҙ ҡыра, янып-көйөп ятҡан тәбиғәтте, Йәншишмәнән алынған тереклек һыуын бөркөп, үлемһеҙ яһай, ошо фиҙакәр эше менән ул идеаль герой дәрәжәһенә күтәрелә. Идеаль геройҙы һүрәтләүҙә эпик әҫәр ижадсылары иң аҫыл, иң сағыу биҙәктәрҙе йәлләмәгән булһалар, аждаһа-дейеүҙәр, уларҙың батшалары Әзрәҡә, Ҡатил һәм шуларға һатылған Шүлгән образдарын тиҫкәре сифаттар менән кәүҙәләндереүҙә лә һаранлыҡ күрһәтмәгәндәр. Был образдар әҫәрҙе тыңлаусыла ерәнеү, нәфрәт тойғоһо тыуҙырырлыҡ итеп бирелгән.

«Аҡбуҙат»та ла образдар бирелеше шундай. Беренсе төркөмдө халыҡ бәхете өсөн көрәшеүсе Һәүбән батыр, аҡыл эйәһе Тарауыл ҡарт, Нәркәс һ. б. тәшкил итә. Икенсе төркөмгә Мәсем хан, Аҡбулат бей, һатлыҡ йән Ҡәһҡәһә, һыу аҫты батшаһы Шүлгән образдары инә. Бында Урал батырҙан таралып киткән геройҙар ҙа (Сура батыр, Урал батырҙың ейәндәре лә) телгә алына. Әҫәрҙең төп геройы Һәүбән батыр, Мәсем хан, Аҡбулат бей кеүек ер өҫтөндәге дошмандар менән генә көрәшеп ҡалмай, һыу аҫты батшаһы Шүлгән, хыянатсы Ҡәһҡәһә менән дә көрәшә. Герой, башта әйтелгәнсә, һыу аҫты донъяһына төшөп, Урал батырҙың Шүлгән батша урлаған Аҡбуҙ толпарын, алмас ҡылысын алып сыға. Шулар ярҙамы менән халыҡты Мәсем хандың иҙеүенән ҡотҡара, хандың байлығын кешеләргә тарата, уларға Шүлгән күленән сыҡҡан малдарҙы өләшә.

Төрки халыҡтар фольклорында геройҙарҙың бер нисә быуынын һүрәтләгән әҫәрҙәр ғәҙәти хәл. Миҫал итеп, әзербайжандарҙың «Көроғло», алтайҙарҙың «Алтай-Бучай», ҡырғыҙҙарҙың «Манас» исемле героик поэмаларын күрһәтергә мөмкин. Бындай эпик әҫәрҙәрҙә геройҙың улдары, шулай уҡ ейәндәре — икенсе һәм өсөнсө быуын геройҙары ғәҙәттә аталарының эшен туранан-тура дауам итеүселәр булып һүрәтләнәләр. «Аҡбуҙат» ҡобайырында Һәүбән дә — икенсе быуын батыры. Ул атаһы Сура батырҙың Мәсем хан тарафынан үлтерелеүе сәбәпле өҙөлөп ҡалған изгелекле эштәрен дауам итә: халыҡты иҙеүсе Мәсем ханды үлтерә, Шүлгәндең һыу аҫты батшалығын бик ныҡ ҡаҡшата, Шүлгән

һарайында ҡоллоҡта ҡартайған әсәһен, Ҡәһҡәһә тарафынан урланған ер ҡыҙҙарын ҡотҡара. Шулай уҡ ул Мәсем хан тарафынан ете диңгеҙ аръяғындағы батшалыҡҡа ҡоллоҡҡа һатылған (Урал батыр улы Иҙелдән тыуған) ете батырҙы азат итеп, ете ырыуға баш һала.

Башҡорт эпосының форма үҙенсәлеге булып унда халыҡ шиғырының проза менән аралашып килеүе тора. Хәйер, был күпселек төрки халыҡтары эпосына хас күренеш. Ҡаҙаҡ жырҙары, үзбәк, ҡарағалпаҡ, төрөкмән һәм башҡа халыҡтарҙың дастандары, яҡуттарҙың олонхоһы шуны дөрөҫләп тора.

Эпос әҫәрҙәрендә шиғыр менән проза текстары нисбәте төрлөсә була. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Күсәк бей» поэмаларында шиғри юлдар текстың иң ҙур өлөшөн тәшкил итә. Ә «Алпамыша», «Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәрҙәрендә шиғри юлдар текстың яртыһынан кәмерәк өлөшөн алып тора. «Күсәк бей»ҙең бөрйән версияһына ҡараған варианттары, нигеҙҙә, прозанан ғибәрәт. Ошо уҡ хәл «Ҡуҙыйкүрпәс» (Т. Беляев версияһы), бигерәк тә «Алдар менән Зөһрә» хикәйәттәренә хас. Был ике ҡомартҡы беҙгә үҙ оригиналында түгел, ә русса тәржемәлә килеп еткән. Уларҙың шиғри өлөшө лә тәржемәсе Т. Беляев тарафынан проза менән бирелгән булыуы бик мөмкин.

Башҡорт эпосының шиғри формаһына, уның үлсәменә килһәк, унда күп төрлөлөк күренә. Был, беренсенән, халыҡ эпосының синкретик ижад булыуынан килһә (классик шиғыр ҙа, мәҡәл менән әйтем дә, йомаҡ һәм әйтеш тә бергә үрелеп килгән), икенсенән, башҡорт халҡының этник составы төрлө булыуы менән дә билдәләнә булһа кәрәк. Мәғлүм булыуынса, башҡорт халҡының формалашыу процесында бик күп ырыу һәм ҡәбиләләр ҡатнашҡан. Һәр ырыу дөйөм халыҡ культураһын тыуҙырыуҙа үҙ өлөшөн индергән, уға ниндәй ҙә булһа үҙенсәлек өҫтәгән тип ҡарарға нигеҙ бар. Әммә шиғыр формалары һәм күп төрлө шиғыр үлсәме араһында 7—7, 7—8 ижекле юлдарҙан торған, ә строфалары хатта иләләп юлды эсенә алған, асыҡ ритмлы һәм теҙек рифмалы ҡобайыр формаһы — иң киң таралғаны һәм иң характерлыһы.

Академик Ф. Корш төрки халыҡтарының ауыҙ-тел поэзияһындағы 7—7 ижектән торған үлсәмде бик борондан мираҫ булып килгән шиғри форма тип ҡарай[22]. Әлбиттә, ҡобайыр шиғыры 7—7 ижекле юлдарҙан ғына тормай. Мәҫәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа, шулай уҡ «Аҡһаҡ ҡола» әҫәренең ҡайһы бер варианттарында шиғри юлдар, нигеҙҙә, 9—9, 9—8 ижекле үлсәмгә ҡоролған:

Өйөр ҙә өйөр малың ҡалыр,
Уны нисек итерһең, балам?
Нисек итерһең, балам?

---

[22] Корш Ф. Древнейший стих турецких племен. СПб., 1909, С. 15.

Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булыр,
Уны нисек үтерһең, балам?
Нисек үтерһең, балам?

(«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»)

Күп юллы ҡобайыр строфаһында әйтелә торған төп фекер ғәҙәттә йә тәүге, йә аҙаҡҡы (шулай уҡ тәүге менән аҙаҡҡы) юлдарға һалыныусан, ә ҡалған юлдар әйтелгән фекерҙе ентекләп, асыҡлап, раҫлап килеүсән:

Алтмыш йылҡы араһында
Атлығып торған алты ат юҡ:
Айыл етмәҫ ала ат юҡ,
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ,
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ,
Күгәрсен түш күк ат юҡ,
Сыбай ҡашҡа кир ат юҡ,
Йондоҙ ҡашҡа һары ат юҡ, ти.

(«Аҡһаҡ ҡола»)

Йәки:

Уралып ятҡан Уралда
Аҡбуҙаттай ат менеп,
Ыласындай тиҙ елеп;
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Ил-йорт менән хушлашып,
Булырҙай менән дуҫлашып,
Булмаҫтай менән үсләшеп,
Яуға ҡаршы яу сабыр
Батыр-батыр ирҙәр бар! [23]

Был өлгөләрҙең тәүгеһендә төп фекер беренсе һәм икенсе юлдарҙа бирелгән, ә ҡалған алты юлда ниндәй аттарҙың юҡлығы үҙ төҫтәре, билдәләре менән һанап күрһәтелгән. Икенсе өлгөлә төп фекер беренсе һәм туғыҙынсы юлдарға һалынған, ә ҡалғандарында батыр ирҙәрҙең яҡшы сифаттары теҙеп әйтелгән.

Ҡобайыр строфаһын ойоштороуҙа, уның аһәңлелеген формалаштырыуҙа рифмаларҙың әһәмиәте ифрат ҙур. Ҡобайыр рифмаларының байлығына һәм күп төрлөлөгөнә, шулай уҡ уларҙың сиратлашыу системаһына айырыуса асыҡ миҫал итеп Аҡбуҙатты ентекләп тасуирлаған поэтик юлдарҙы күрһәтергә мөмкин.

Үрҙә, ҡобайыр формаһының күп төрлөгө башҡорт эпосының синкретик булыуынан килә, тип әйтелгәйне. Ҡобайырҙа бигерәк тә мәҡәлдәр, әйтемдәр күберәк ҡулланылыусан, һәм улар ҡобайыр поэтикаһына үҙенсәлек алып киләләр. «Ғөмүмән, мәҡәлдәр

[23] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. 66-сы б.

һәм уларға оҡшаш тапҡыр һөйләмдәр менән фекер йөрөтөү ҡобайырҙар өсөн хас алым. Ихтимал, бөгөнгө халыҡ мәҡәлдәренең ҡайһы берҙәре ҡобайырҙарҙағы ана шул тапҡыр һөйләмдәргә, ундағы афоризмдарға ҡайтып ҡалалыр ҙа»[24].

Мәҫәлән:

Көтөү типкән мал булһа,
Уны сайҙа бүре алыр;
Ил ташлаған ир булһа,
Көнө етмәй гүр алыр, ау,
Көнө етмәй гүр алыр.
Ата һуккән аш юйыр,
Әсә һуккән йәш ҡойор;
Дау сығарған ҡан ҡойор,
Яман әҙәм ил буяр, ау,
Яман ирҙән ил туйыр[25].

Эпоста батырҙың физик көсөн, шулай уҡ уның зирәклеген төрлө юлдар менән һынау күренеше киң таралған. Зирәклекте, ғәҙәттә, ҙур тормош тәжрибәһе туплаған сәсән, ырыу аҡһаҡалы йәки хан һынап ҡарай. Һынауҙа йомаҡ йыш ҡына ҡулланыла. Йомаҡ әйтеү һәм уның яуабын табыу ҡобайыр жанрының үҙенә бер художество алымы булып тора.

Ҡобайыр поэтикаһында диалог ҙур ғына урын тота. Геройҙарҙың ҡара-ҡаршы әйтешеүҙәре, һөйләшеүҙәре диалогҡа ҡоролған шиғри юлдар менән бирелә. Диалог башҡорт эпосының мөһим бер төрө һаналған әйтештәрҙә айырыуса киң таралған, һәм ул әйтеш жанрында төп композицион роль уйнай.

Эпик әҫәрҙәрҙә гипербола алымының әһәмиәте ҙур. Был алым бигерәк тә боронғораҡ осорҙо сағылдырған әҫәрҙәрҙә йыш осрай. Геройҙы, уның таянысы булған толпарҙы, шулай уҡ геройҙың дошмандарын һүрәтләгәндә гипербола айырыуса күп ҡулланылыусан. Эпик поэзияла һүрәтләү сараларынан сағыштырыуҙар, эпитеттар ҙур урын тота.

Башҡорт эпосында бер әҫәрҙән икенсе әҫәргә күсеп йөрөүсән юлдар, поэтик деталдәр, мотивтар бар. Фольклористика фәнендә уларҙы «дөйөм урындар», «эпик клише» йәки «трафареттар» тип атап йөрөтәләр. «Дөйөм урындар»ҙың теге йәки был эпик әҫәргә килеп инеүенә бигерәк тә ҡобайырҙы башҡарыусы сәсәндәр сәбәпсе булған тип ҡарарға кәрәк. Сәсәндәр үҙҙәре ижад иткәндә лә, бүтәндәр ижад иткәнде башҡарғанда ла әҙер поэтик деталдәрҙе, һүрәтләү сараларын, портреттарҙы, айырым юлдарҙы, эпизодтарҙы, теге йәки был мотивтарҙы ҡулланыр булғандар. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосында ла, «Аҡбуҙат» эпосында ла Аҡбуҙатҡа бирелгән бер үк характеристика ҡабатлана. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуныр буға», «Ҡара юрға» әҫәрҙәрендә малдарҙың эйәһенә ҡа-

[24] Шунда уҡ. 17—18-се б.
[25] Шунда уҡ. 61-се б.

рата үпкәһе бер үк шиғыр юлдары менән бирелә тип әйтерлек.

Башҡорт халыҡ эпосы үҙенең тематикаһы, йөкмәткеһе, формаһы яғынан күп төрлө булған кеүек, уның башҡарылыу рәүешендә лә төрлөлөк бар. Әҫәрҙең проза өлөшө, ғәҙәттә, һөйләнелә, ә шиғыр өлөшө, нигеҙҙә, үҙенә бер талғын ғына көй менән көйләп башҡарыла. Көйләп башҡарыу тыңлаусыларға әҫәрҙе үтемле яһай, уның эстетик тәьҫир көсөн арттыра. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, эпос әҫәрҙәренең үҙ заманында нindәйерәк көйгә һалынып башҡарылыуы әлегә яҡшылап өйрәнелмәгән.

Һуңғы йылдарҙа фольклор экспедициялары тарафынан байтаҡ ҡына эпик әҫәрҙәр үҙҙәренең әйтелеү көйҙәре менән бергә яҙып алынды. Сағыштырып ҡарағанда, эпос әҫәрҙәренең башҡарылыу көйҙәре бер-береһенән һиҙелерлек айырылып торғаны күренә. Бер үк әҫәр көйөнөң дә вариациялары бар. Был йәһәттән «Алпамыша» көйө миҫал була ала. Әҫәрҙе көйләп башҡарыуҙың мөһим бер үҙенсәлеге шунда: башҡарыусы шиғри тексты гел генә бер көй менән көйләмәй, бәлки бер төркөм строфанан икенсеһенә күскән һайын көйҙөң яңынан-яңы вариацияларын бирә, биҙәктәр өҫтәй. Шул сәбәпле аудиторияла башҡарыусыны ялҡмайынса тыңларға мөмкинлек тыуа.

Фольклористика фәнендә эпос ырыусылыҡ йәмғиәте емерелеү осоронда барлыҡҡа килә башлаған, тигән фекер башҡорт эпосы миҫалында ла раҫлана. Мифологияға нигеҙләнеп, быуаттар тәпкөлөндә тыуған боронғо эпик әҫәрҙәрҙә геройҙың ғаилә ҡороу, ырыу мәнфәғәте, шулай уҡ кеше бәхете өсөн мифик дошмандарға ҡаршы көрәше һүрәтләнгән булһа, феодализмдың башланғыс һәм нығынған осоронда инде ырыуҙар татыулығы һәм берҙәмлеге идеяһы беренсе планға ҡуйыла, ә герой ырыу эсендә генә сикләнмәй, эре ҡәбиләләр берекмәһе, дөйөм халыҡ мәнфәғәтен яҡлап көрәшә. Антагонистик синыфлы феодализм дәүеренә ҡараған әҫәрҙәрҙә инде эпик геройға яңы бурыс — социаль иҙеүгә, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы көрәшеү бурысы өҫтәлә.

Ҙур художестволы дөйөмләштереү ҡеүәһенә эйә булған эпос — ҡобайырҙар (поэмалар) һәм хикәйәттәр, Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәр үҫә һәм нығына башлау менән, ижад ителеүҙән туҡтай. Яңы заман яңы йөкмәтке, яңы поэтик формалар талап итә. Әммә халыҡтың бөйөк таланты, оло хыялы менән тыуҙырылған гүзәл эпик мираҫ бөгөн дә кешеләрҙе зауыҡландыра, уларҙа батырлыҡ һәм гуманизм, ғәҙеллек һәм илгә тоғролоҡ тәрбиәләүгә хеҙмәт итә.

*Мөхтәр Сәғитов*



## УРАЛ БАТЫР

**[Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ булғаны, өлкән улдары Шүлгәндең ата һүҙен тотмағаны, әсә һүҙе йоҡмағаны; Самрау ҡыҙы Һомайҙың аҡҡош булып тотолғаны, йәнә ҡотолғаны]**

Борон-борон борондан
Кеше-маҙар бумаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
У * тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Буған *, ти, бер урын.
Анда * буған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт мән
Йәнбикә [1] тигән ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, аларға *
У урында юл асыҡ.
Бы * ҡарт мән * бы ҡарсыҡ
Ҡайҙан мында * килеүен,
Ата-әсә, ер-һыуын
Ҡайҙа тороп ҡалғанын
Үҙҙәре лә онотҡан,
Икәүҙән-икәү шу * ерҙә
Башлап ғөмөр * һөргәндәр,
Тора-бара у икәү
Ике уллы ла буғандар:
Шүлгән буған олоһо,
Урал буған кесеһе;
Бүтән кеше күрмәйсе,
Тик йәшәгән дүртәүһе.
Донъя-маҙар йыймаған,
Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,
Ҡаҙан аҫып, ут яғып,
Алар донъя көтмәгән.

Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,
Үлем [2] барын белмәгән,
Бар нәмәгә үлемде —
Үҙем мин, тип һанаған.
Һунарҙа ат менмәгән,
Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;
Менәренә — арыҫланды,
Балығына — суртанды,
Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,
Эте тотҡан йәнлекте,
Ҡан һурырға һөлөктө
Үҙ иштәре яһаған.
Бик борондан буғанмы,
Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы,
Бара-тора шу ерҙә
Йола булып киткәнме, —
Йыртҡыс йәнлек тотто иһә,
Йәнлек иркәк * булды иһә,
Ирле-бисә икәүһе
Башын сәйнәп ашаған,
Шүлгән мән Уралға,
Эте мән арыҫланға,
Шоңҡар мән суртанға
Ҡалған яғын ташлаған;
Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы буһа,
Ирле-бисә икәүһе
Йөрәгене һайлаған.
Үлән емшәр йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡаҙаған,
Һөлөгөнән һурҙырып,
Ҡанды һыуһын яһаған *.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үҙе йәнлек тотҡансы,
Баш-йөрәкте ашауҙан,
Һыуһынға ҡан эсеүҙән
Балаларын тыйғандар,
Һис ярамай, тигәндәр [3].

Ай үҫәһен көн үҫеп,
Балалары иҫ белеп,
Шүлгәненә ун ике,
Уралына ун тулып,
Берһе * арыҫлан менәм тип,
Берһе шоңҡар сөйәм тип,
Маҙаһына тейгән һуң,
Икеһен дә саҡырып,
Былай тиеп әйткән, ти:

— Икегеҙ ҙә — баламһыҙ,
Күҙемдәге ҡарамһыҙ,
Тешәр сағыҙ * уҙмаған,
Быуынығыҙ ҡатмаған;
Ҡулға суҡмар тотарға,
Ҡошҡа шоңҡар сөйәргә,
Әле арыҫлан менәргә
Миҙгелегеҙ етмәгән.
Мин ни бирһәм, ашағыҙ,
Мин ҡушҡанды эшләгеҙ;
Күнегергә һыбайға —
Ана, болан менегеҙ,
Сыйырсыҡтың тыуына
Яғылбайҙы сөйөгөҙ;
Һыуһаһағыҙ уйында,
Ана, аҡ һыу эсегеҙ,
Ҡапырсаҡҡа[4] тутырған *
Ҡандан ауыҙ тартығыҙ, —
Тип быларға тағы ла
Йола өйрәтеп ҡуйған, ти.
Ҡан эсеүҙән балларын
Тағы ла бер ҡат тыйған, ти.

Берҙә-бер көн * буғанда,
Ҡарт мән ҡарсыҡ икәүләп
Ау ауларға киткәндә,
Шүлгән, Урал икәүләп
Торлаҡта аулаҡ ҡалғанда,
Аталары киткән һуң,
Байтаҡ уаҡыт үткән һуң,
Ике бала һөйләшеп,
Ашауҙан һүҙ асҡанда, —
Шүлгән уйлап торған да,
Ҡан эсеүҙән атаһы
Тыйғаныны * белһә лә,
[Аталары киҫәтеп]:
«Ҡан эсмәгеҙ!» — тиһә лә,
Шүлгән, Уралды димләп,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Йәнде ҡыйып һунарлау
Ҡомарлы эш * бумаһа,
Һыуһағанда ҡан эсеү
Тағы тәмле бумаһа,
Атамдар йоҡо ҡалдырып,
Аяҡ-ҡулын талдырып,
Һәр көн икәү ҡаңғырып,
Беҙҙе өйҙә ҡалдырып,
Йөрөмәҫ ине һуңар тип.

Урал, әйҙә, бумаһа,
Ҡапырсаҡты асайыҡ,
Һәр беренән аҙ-аҙлап,
Берәр тамсы эсәйек,
Ҡандың тәмен беләйек.

Урал:

— Атам һүҙен тотамын —
Мин ҡан эсмәй үҫәмен,
Егет булып үҫмәйсе *,
Төп йоланы белмәйсе *,
Бер ил гиҙеп йөрөмәйсе,
Ысынлап та донъяла
Үлем юғын күрмәйсе,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын,
Һөлөк һурған ҡанды мин
Ҡапырсаҡтан эсмәмен.

Шүлгән:

— Кеше еңәр Үлемдең
Мында килеп сыҡмаҫын,
Беҙҙе килеп тапмаҫын
Атам һөйләп бирҙе бит;
Бары йәнгә беҙ — Үлем
Тип тағы ла әйтте бит!
Инде ниҙән өркәһең,
Ҡан эсеүҙән ҡурҡаһың?

Урал:

— Тилберлектә, тиҙлектә,
Көслөлөктә, ҙурлыҡта,
Түҙемлектә, һаҡлыҡта,
Һиҙгерлектә — көндөҙ ҙә,
Төндә йоҡлап ятҡанда —
Арыҫлан, болан, ҡаплапы,
Айыуы, тағы бүтәне —
Алар беҙҙән кәмме ни?
Ташҡа һуғылып тояғы,
Үлән төртөлөп аяғы
Һис бер саҡта аҡһамай;
Йәйге эҫелә өҫ һалмай,
Ырашҡыла тун тимәй *;
Берәй йәнгә уҡталһа,
Һис тә суҡмар йөкмәмәй *;
Беҙҙәй, тағы меңәргә *,

Ҡошҡа шонҡар сөйәргә *
[Кәрәген һис белмәгән];
Суртан арбап балыҡҡа,
Эт өскөтөп * йәнлеккә
[Ыҙалау ни — күрмәгән];
Шонҡар, эткә, арыҫланға,
Өмөт бәйләп суртанға,
Һунарында интекмәй —
Теш-тырнағы — ҡоралы,
Үҙ ҡулында теләге,
Һис тә талмай беләге,
Һис аҙамай йөрәге,
Йәшәп килгән ҡапланы,
Юлбарыҫы, арыҫланы;
Шулай батыр булһа ла,
Барының ҡотон алһа ла,
Аяғын бәйләп һалған һуң,
Муйнына бысаҡ һалған һуң,
Ике күҙе йәшләнеп,
Йөрәге һуға түгелме?
Атам беҙгә һөйләгән,
Беҙ әле һис күрмәгән,
Беҙҙең ерҙә бумаған,
Яуыз үлем — беҙ, тиеп *
Уйламайҙар тиһеңме?
Сабағына — суртаны,
Йомранына — көҙәне,
Ҡуянына — төлкөһө, —
Барын теҙеп уйлаһаң:
Көсһөҙөнә — көслөһө
Үлем була түгелме?
Үлемдән ҡурҡып ялдымға *
Сумып ятҡан балыҡҡа,
Ҡаяла сыр-сыу килешеп,
Өркөп осҡан ҡош-ҡортҡа
[Ау ҡороп, уҡ сорғатып],
Тотоп, башын сәйнәгән,
Йөрәген ярып ашаған;
Көсһөҙ һанап барыһын,
Аулап, ҡомарын асҡан *,
Ямандарҙың яманы,
Шу йоланы табыусы,
Ерҙә үлем сәсеүсе —
Ошо аймаҡта беҙ дүртәү
Булабыҙ һуң түгелме?
Иң Үлемдең яуызы,
Бары йәнде ҡыйыусы,
Тип, барыһы уйлашып,
Беҙҙе Үлем һанашып,

Бары беҙгә ҡарышы
Суҡмар итеп тырнағын,
Шонҡар итеп йөрәген,
Бары бергә тупланып,
Бергә килеп уҡталып,
Беҙҙең өҫкә ташланһа, —
Атайым беҙгә һөйләгән,
Беҙ әле һис күрмәгән
Үлем шунда беҙҙең дә
Күҙ алдына баҫмаҫмы?
Тигән һүҙҙе ишеткәс *,
Шүлгән бер аҙ уйлаған —
Шүлгән һаман үҙ һүҙен,
Аңа * ҡарап, ҡуймаған, —
Ҡапырсаҡтан аҙ-аҙлап
Ҡанды һемереп эскән, ти,
Атаһына әйтмәҫкә
Уралдан һүҙ алған, ти.

Күп йән тотоп, һунарҙан
Ата-әсәһе ҡайтҡан, ти.
Йола буйынса, күмәкләп,
Табын ҡороп дүртәүләп,
Бары йәнде ботарлап,
Былар ашҡа утырған.
Арала һүҙ сыҡҡан, ти.
Ашағанда уйланып,
Урал былай тигән, ти:
— Атай, мына бы йәнде,
Ҡасып һинән, боҫһа ла,
Йән аямай ҡасһа ла,
Һис ҡотҡармай тотҡанһың,
Барына бысаҡ һалғанһың.
Беҙҙе шулай берәй йән
Килеп эҙләп тапмаҫмы?
Беҙгә бысаҡ һалмаҫмы?

Й ә н б и р ҙ е:

— Көнө бөтәр һәр йәнгә
Беҙ үлеме булабыҙ;
Ҡайҙа ғына ҡасһа ла,
Ҡая, шырға боҫһа ла,
Беҙ уларҙы табабыҙ,
Беҙ бысаҡты һалабыҙ.
Кешене тотоп ашарлыҡ,
Аңа бысаҡ һалырлыҡ
Мында бер йән тыумаған,
Беҙҙе тотоп һуярлыҡ
Үлем мында бумаған.

Борон беҙ тыуған ерҙә,
Атайҙар үҫкән ерҙә
Үлем була торғайны:
Бик күбеһе йәштән үк
Ятып үлә торғайны.
Анда дейеү килгән һуң,
Күп кешене үтереп,
Дейеү ашап киткән һуң;
Ерҙең өҫтөн һыу ҡаплап,
Ҡоро ере бөткән һуң;
Ҡасҡан-боҫҡан кешеләр
У тирәнән киткән һуң,
Үлемгә иш ҡалманы,
Эшләргә эш булманы.
Ҡасҡан кеше барҙыр, тип,
Күрәһең, уйлап торманы:
Әсәң мән беҙҙең ҡасып
Киткәнде у күрмәне.
Мында кеше бумаған,
Килеп аяҡ баҫмаған,
Шуңа Үлем бы ерҙе
Килеп эҙләп тапмаған.
Беҙ килгәндә, мында әле
Йәнлектәр ҙә аҙ ине,
Ере лә йүнле кипмәгән,
Уаҡ-уаҡ күллек, һаҙ ине.

Урал:

— Атай, Үлемде эҙләһәң,
Аны табып буламы?
Тап килтереп тотҡан һуң,
Һуғып-йығып буламы? [5]

Йәнбирҙе:

— Үлем тигән яуыз у —
Күҙгә һис тә күренмәй,
Килгәне һис беленмәй
Йәшәй торған януар у.
Аңа тик бер сара бар:
Дейеү батша ерендә,
Әйттеләр, бер шишмә бар,
Анан һыу эскән кеше[гә]
Һис тә үлмәй йәшәү бар,
Тип һөйләне ололар, —

тип Үлем тураһында һөйләгән дә, ашап бөткәс, ҡапырсаҡтарҙы китереп, ҡан эсәргә буғандар. Йәнбирҙе ҡарт, ҡапырсаҡтарҙың

буҫкәргәнен күргән дә уландарынан [ҡанды] кем эскәнлеген ҡыҫып һорай башлаған. Шүлгән, берәү ҙә эсмәне, тип алдаған. Йәнбирҙе ҡарт, һуйыл таяҡ алып, балаларын алмаш-тилмәш һыптырырға тотонған. Урал шунда ла ағаһын ҡыҙғанып, әйтмәй серәшһә лә, Шүлгән түҙмәгән, үҙ ғәйебен һөйләп биргән. Йәнбирҙе ҡарт тағы ла өҫтәп һуғырға [итә] башлағас, Урал атаһының ҡулынан барып тотҡан да былай тигән, ти:

— Атаҡайым, уйласы,
Ҡулыңдағы һуйылға
Күҙ йөгөртөп * ҡарасы!
Бы һуйыл да йәш буған —
Ҡабығынан әрселгән,
Осо-башы йәнселгән,
Бөкһәң, шарттап * һынарҙай
Ҡыу таяҡҡа әүерелгән.
Һин киҫмәҫтән борон(да),
Үҫкәнендә урманда,
Еләҫ елдә ялбырҙап,
Япраҡтары елберҙәп
Торған ағас буғандыр;
Бал ҡорттары, ҡоштары
Алмаш-тилмәш ҡунғандыр;
Беҙҙәй, балалар, төҫлө,
Көләс йөҙлө буғандыр;
Ҡоштар ҡунып һайраған,
Оя ҡороп йәшәгән —
Ботаҡтарын һайлаған
Һөйкөмлө ағас буғандыр;
Имсәк имгән балалай,
Тамырҙарын тарпайтып,
Ер дымыны имгәндер.
Тамырынан аҡтарғас,
Ботағыны ботағас,
Балғаң * буған ташындай,
Ҡошҡа сөйәр шөңҡарҙай,
Балыҡ тотар суртандай,
Ҡан һурыусы һөлөктәй,
Йәнлек аулар көсөктәй, —
Һуҡҡың буған түгелме?
Маңлай тирен һыпырып,
Күп йыл ғөмөр уҙзырып,
Ер өҫтөндә тапмаған,
Төҫөн күреп белмәгән,
Йөрәгең һис тартмаған
Үлем тигән яуызды, —
Тағы һуҡһаң баланды,
Үҙ торлағың эсендә,
Балаларың өҫтөндә, —

Ҡөсһөҙҙәргә көслөнән,
Балаларға атанан
Ҡилгәнене күрергә
Әҙерләндең түгелме?
Бөгөн ағам үтерһәң,
Иртән мине үтерһәң,
Балаларың үлгән һуң,
Яңғыҙ тороп ҡалған һуң,
Ҡартлығыңды күргән һуң,
Бөкөрәйеп, татарғап *,
Арыҫланыңа менә алмай,
Һунарыңа сыға алмай,
Шоңҡарыңды сөйә алмай,
Аларға ем бирә алмай;
Арыҫланың да, көсөк тә,
Шоңҡарың да, һөлөк тә, —
Бары аска тилмереп,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Ас зарыҡҡан арыҫланың
Бәйҙә тороп уҗарып *,
Асыуынан уҡталып,
Билең бөгөп, үҙеңде
Ботоң-ботса ботарлап
Апташлаһа * бер саҡта,
Үлем тигән яуызды
Ҡаршы алыу торлаҡта,
Атай, туры килмәҫме?

Тигән һүҙен ишеткәс, Йәнбирҙе ҡарт Шүлгәнде туҡмауҙан туҡтаған да: «Үлемдең күҙгә күренмәй килеүе лә бар шу. Үлем килгәндер, мине шу ҡоторталыр. У Үлемде берәйһе күрмәй бумаҫ, йәнлек, ҡош-ҡортто йыйҙырып, һорашырға кәрәк», — тип уйлаған да барын да саҡырған, ти. Бары ла килгәндәр, төрлө һүҙҙәр һөйләгәндәр. Урал барына ла ҡарап, былай тигән, ти: [6]

— Үлем тигән яуыздың
Төрөн һанап беләйек,
Көслө көсһөҙҙө ейгән
Йоланы беҙ өҙәйек.
Арабыҙҙан, һанаһаҡ,
Һәр нөгәрҙе ҡараһаҡ:
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис берәү йәшен ҡоймай, —
Ҡайныһы * тамыр ашап,
Ҡайныһы үлән емшәп
Һаман ғөмөр иткәнен,
Йыртҡыстарға ем өсөн
Балаһын үрсеткәнен
Барығыҙ ҙа беләһеҙ.

Аларға Үлем ят түгел,
Беҙ уйлаған йән түгел *,
Ҡан һыуырған, ит ейгән —
Береһе лә дуҫ түгел.
Йыртҡыслыҡты бөтөрәйек,
Яңғыҙ ҡалған Үлемде
Бергә эҙләп үтерәйек!
Тигән һүҙгә йыртҡыстар,
Аларға ҡушылып Шүлгән дә, —
Бары ҡаршы кигәндәр:
Төрлө һүҙҙәр буған, ти.

Ҡоҙғон, сығып алғараҡ,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Мин Үлемде табыуҙан
Һис тә ҡурҡып тормайым,
Аны тотоп биреүгә
Һис саҡта мин күнмәйем.
Ҡарт буһам да, бы эштән
Мин бер үҙем баш тартам,
Тағы өҫтәп шуны әйтәм:
Көсө еткән көсһөҙгә
Һис һунарлыҡ ҡылмаһа;
Әсәнән тыуған берәү ҙә
Бы донъяла үлмәһә;
Ер уттары *, ағастар
Йолаға буйһонмаһа;
Үҙ миҙгеле еткәндә,
Көҙгө ҡырау төшкәндә,
Һис йәшеллек бөтмәһә, —
Анда беҙгә ни файҙа?
Ҡуян һымаҡ, ҡайһылар
Йылға ике-өс түлләһә;
Төндә йөрөп, йәшелдең
Барыһын да утлаһа;
Бүтән йәндәр ҡаңғырып,
Ашарына тапмаһа;
Өйөр-өйөр тыу булып [7],
Ҡаҙ, өйрәге, аҡҡошо,
Шыбыр-шыбыр ҡойоноп,
Һыу өҫтөнө ҡаплаһа;
Ғөмөрөм бушҡа уҙа, тип,
Ярым бушҡа туҙа, тип,
Һис бер йылға аҡмаһа;
Ерҙә шундай йола, тип,
Ерҙе ҡаплай бары, тип,
Ҡойоноршар, эсәрҙәр —
Беҙгә тынғы бирмәҫтәр, —
Тип, шишмәләр сыҡмаһа,

Ерҙәге һыу тынсыһа, —
Шу сакта без нишләрбеҙ?
Ҡайҙан утты табырбыҙ,
Һыуҙы нисек эсәрбеҙ?
Башым һалып, яу асып,
Күп сағында талпынып,
Аслыҡ, тарлыҡ күрһәм дә,
Күп зарығып йөрһәм дә,
Мин ҡан эсмәй, ит еймәй,
Үләкһәнең күҙ майын
Өс көндә бер соҡомай,
Һис донъяла торалмам —
Үлемде эҙләп табырға
Мин һүҙемде бирә алмам.

Һ а й ы ҫ ҡ а н:

— Үлемдән ҡурҡар йән буһа,
Ҡотолорға юл эҙләр,
Түл йәйергә уйлаһа,
Илде гиҙеп, яй эҙләр *, —
Тигән былар уйҙарын.
[Ҡоҙғон һайыҫҡан әйткәнен]
Юлбарыҫ та, ҡаплан да,
Бүре, бурһыҡ, арыҫлан да,
Типкес-йырткыс ҡоштар ҙа,
Ҡарпыр балыҡ — суртан да —
Бары йырткыс хуп күргән.
Бөтә үлән емшәгән,
Торна, өйрәк, кыр ҡаҙҙар,
Туғаҙаҡ мән сел, ҡорҙар,
Бала сығарып, түл йәйеп,
Балларры ла ҡош булып,
Үҙ алдына осҡансы,
Йәй миҙгеле уҙғансы,
Шыр урманлыҡ эҙләргә,
Байманлыҡта * түлләргә,
Тип барыһы уйлаған.
Ҡоралайы, боланы,
Ҡыҙыл сикә ҡуяны,
Аяғына маһайып,
Бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән.
Турғай, майсыл, сыйырсыҡ,
Сәүкә, ҡарға, буҙ сәпсек,
Мыр*-маҙарҙы ашағас,
Һүҙ әйтергә оялған.
Кәкүк тағы: «Оям юҡ,
Балам тигән ҡайғым юҡ;
Бала — бауырым, тигәндәр,
Бала өсөн янғандар [8]

Ни теләһә — миңә шу», —
Тип уртаға һалған, ти.
Бары төрлөсә һөйләп,
Төрлөһө-төрлө уйлап,
Һис берлеккә килмәйсе,
Ҡырҡа бер уй әйтмәйсе,
Тарҡалышта ҡалған, ти...

Ҡарт мынан һуң һиҫкәнгән;
Яңғыҙ ауға сығарға
Ҡарт, ҡарсыҡ та шикләнгән.

Берҙә-бер көн дүртәүләп
Былар ауға киткән, ти,
Күп ерҙәрҙе үткән, ти;
Күп йән алып, шатланып,
Ауҙан былар ҡайтҡан, ти.
Аулап алған ҡоштарҙың,
Бәйләп һалған йәндәрҙең
Араһында бер аҡҡош,
Аяғыны бәйләгәс,
Башын ҡырҡып ташларға
Бысағыны ҡайрағас,
Ҡанлы йәшен түккән, ти,
Үҙ зарыны әйткән, ти:
— Ил күрергә сыҡтым мин,
Ер ҡошонан түгелмен —
Йәшәй торған илем бар,
Илһеҙ етем түгелмен.
Ерҙә һис кем тыумаҫтан,
Берәү аяҡ баҫмаҫтан,
Ҡуш булырға йәр эҙләп,
Ерҙә һис кем тапмағас,
Бүтән йәндән һайларға
Берәүен тиң күрмәгәс, —
Күккә осоп йәр эҙләп,
Айҙы, Ҡояшты [9] күҙләп,
Үҙенә йәр һайлаған,
Икеһен дә арбаған,
Бар ҡоштарға баш буған
Самрау тигән атам бар.
Ике балаһы буған,
Балаһы ла, үҙе лә
Һис ауырыу күрмәгән,
Үҙҙәре лә, балаһы —
Һис берәүһе үлмәгән.
Шулай данлы атам бар.
Әле лә батша атайым;
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Үҙ илемә ҡайтайым.

Мине бүлеп ашап та,
Сәйнәп мине йотоп та
Барыбер аш бумамын,
Аш булып мин һеңмәмен:
Йәншишмәнән һыу алып,
Әсәм тәнем йыуҙырған
(Барығыҙға билдәле
Үҙ нурына һуғарған
Ҡояш тигән әсәм бар),
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Атам барыбер табыр у,
Қилеп яулап алыр у.
Самрау тигән батшаның
Һомай [10] тигән ҡыҙымын;
Алтын сәсем тарҡаһам,
Нурға илде күмәмен:
Қөндөҙ ергә нур һибәм,
Қисен айға нур бирәм.
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Илемә мин ҡайтайым;
Йәншишмәнең һыу юлын
Һеҙгә әйтеп китәйем.

Тигән һүҙҙе ишеткәс, Йәнбирҙе ҡарт мән Йәнбикә ҡарсыҡ улдарына кәңәш иткәндәр. Шүлгән һаман ҡошто ашау яғында, Урал ҡотҡарыу яғында булып, талаш киткән. Урал ҡошто Шүлгәнгә бирмәй, тартып алған да, ситкәрәк и[л]теп ҡуйған. Ҡошто йыуатып: «Ҡайғырма, хәҙер тамаҡланам да үҙенде ата-әсәңә и[л]теп ҡайтырам!» — тип аталары янына килеп утырған *. Былар ашарға утырғас, ҡош һау ҡанатын һелеккән — өс ҡауырһыны төшкән. [Шуларҙың] һынған ҡанатынан сыҡҡан ҡанға буяп, ергә ташлаған икән — өс аҡҡош килеп, ҡыҙҙы күтәреп алып киткәндәр. Йәнбирҙе ҡарттар Йәншишмәнең юлын һораша алмай ҡалыуҙарына үкенгәндәр.

Ҡарт шунда уҡ Шүлгән мән Уралға ҡоштар ҡарап осҡан яҡҡа ғаба күҙ яҙмай китәргә, арттарынан күҙәтеп барып, Йәншишмәнең урынын табырға, әгәр юлда Үлем осораһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡушҡан. Ике улын ике арыҫланға мендереп оҙатҡан, ти.

## [Уралдың Ҡатил батшаны ҡыйратып дан алғаны, халыҡты иреккә сығарғаны]

Урал, Шүлгән — икәүләп,
Қөн, [аҙна,] ай, йыл һанап,
Қүл, йылға аша һыу кисеп,
Қүп урмандар, тау ашып,

Һаман алға киткәндәр;
Бара торғас, бы икәү
Бер йылғаның ситендә,
Бер ҙур ағас төбөндә,
Баҡыр һандыҡ янында
Бер ҙур таяҡ ҡулында
Аппаҡ һаҡал бер картҡа [11]
Былар барып еткән, ти,
Барып сәләм биргән, ти.
Ҡарт та ҡаршы алған, ти,
Юл башыны быларҙың
Ҡарт һорашып белгән, ти.
Үҙ уйҙарын былар ҙа
Ҡартҡа һөйләп биргән, ти.
Ҡарт уйланып торған да,
Былар уйын белгән дә,
Һаҡалыны һыпырып,
Быларға күҙ йөгөрөтөп,
Ике юлды күрһәтеп,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Мына һеҙгә ике юл:
Һулға китһәң, юл буйы —
Уйын-көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйсе,
Барлығын да белмәйсе,
Рәхәт йәшәп байманда: *
Бүре, һарыҡ — яланда,
Төлкө, тауыҡ — урманда
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самрау ҡошҡа баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис Үлемгә юл ҡуймай
Йәшәп килгән бер ил бар [12];
Яҡшылыҡҡа — яҡшылыҡ
Ҡыла торған йола бар.
Уңға китһәң, юл буйы —
Илау-һыҡтау төн буйы [13]:
Яуызлыҡта дан алған,
Аҡһаҡалдан [14], батшанан
Ҡайғы-этлек күреүсе,
Ҡанлы йәшен түгеүсе
Ҡатил * батша иле бар;
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар.

Ҡарттан былар ишеткәс,
Юлдар серене белгәс,
Урал, Шүлгән — икәүһе
Шыбаға тотоп араһы

Юл бүлергә уйлашҡан,
Үҙ араһы һөйләшкән:
Һулға китеү — Уралға,
Уңға китеү — Шүлгәнгә
Шыбағалы юл буған.
Шүлгән мыңа күнмәгән,
Мин уҙаман әле, тип,
Мин барамын һулға, тип,
Шүлгән һулды һайлаған,
Үҙ тигәнсе даулаған.
Урал күнгән уң яҡҡа,
Шүлгән киткән һул яҡҡа.

Урал уңға киткән һуң,
Оҙон юлға төшкән һуң,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти,
Күп тауҙарҙы ашҡан, ти;
Бара торғас, бер тауҙың
Итәгенә еткән, ти.
Бүре талап, өҙгөләп,
Һырҙай ҡанға туҙғандай
Телгеләнгән арҡаһы,
Айырылған елкәһе;
Сүплек типкән тауыҡтай
Ҡул-аяғы ярылған;
Тамыр ашап, ер ҡаҙып,
Ауыҙ-бите ҡарайған;
Ҡырау һуҡҡан үләндәй
Йөҙө-төҫө һарғайған;
Сутлап юнған ағастай
Балтыр ите һулыған;
Бер уңалған ағастай *
Елек башы сурайған
Бер ҡарсыҡҡа һырышҡан;
Көнгә янған тәндәрен,
Һырт ҡаплаған сәстәрен [15],
Һуплап юнған ағастай
Балтыр ите, беләген,
Ауҙа туйған ҡыйғырҙай
Кәпәйеп торған күкрәген,
Ҡуға * аша йылмылдап
Торған күлдәй күҙҙәрен,
Бал ҡортондай ыҡтымат *
Нескә, һылыу билдәрен, —
Оялыпмы, ҡурҡыпмы, —
Ышыҡланып * маташҡан
Бер ҡыҙы мән ҡарсыҡҡа
Урал барып тап буған.

Урал яҡын барған, ти,
— Ҡурыҡмағыҙ, — тип әйткән, ти. —
Мин киләмен йыраҡтан.
Үҙем тыуған торлаҡтан,
Бала инем киткәндә.
Күп илдәрҙе үткәндә,
Мин кешегә теймәймен,
Аның ҡанын ҡоймаймын —
Үлем тигән яуызды
Үтерергә уйлаймын.
Әйҙә, яҡын килегеҙ,
Ил хәлегеҙ һөйләгеҙ.
Тигәс, былар йылмайған,
Урынынан ҡуҙғалған.
Туҙған сәсен әсә лә,
Ҡолағына ҡыҫтырып,
Урынынан ҡуҙғалып,
Бер аҙ күҙен ҙурайтып,
[Әйтер] һүҙен асҡан, ти,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Йыраҡ илдән килгәнһең;
Изге уйҙа икәнһең.
Ай егетем, белһәң һин,
Беҙҙең илдә булһаң һин,
Ҡатил батша, аҡһаҡал
Эштәрене күрһәң һин;
Ауырыу-һыҙлау күрмәйсе,
Үлем башҡа килмәйсе,
Ҡатын-ҡыҙҙы, ир-атты,
Айырмайсы * йәш-ҡартты,
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Арыуҙарын һайлатып,
Йыл да бер ҡат йыйҙыра,
Һарайына алдыра;
Ҡыҙы һайлай егетен,
Үҙе һайлай ҡыҙ-ҡырҡын,
Ҡалғандарын тағы ла
Аҡһаҡалдар ҡарайҙар,
Үҙҙәренә һайлайҙар;
Ҡалындарын * аямай,
Ҡанлы йәшкә ҡарамай,
Тереләтә, һау көйгә
Ҡыҙын күлгә һалдыра,
Ирен утҡа яндыра;
Атаһы өсөн, үҙе өсөн,
Аҡһаҡалдар дапы өсөн,
Үҙе тыуған көнө өсөн,
Йыл да бер ҡат тәңре [16] өсөн
Ҡанлы ҡорбан уҙҙыра.

Мына мин дә ун бала
Ҡүргән әсә донъяла.
Дүртен һайлап алдылар,
Бишен һыуға аттылар.
Ҡартым, йөрәге һыҙлағас,
Бер балаһы ҡалмағас,
Ҡарап тороп түҙмәне,
Нишләрене һиҙмәне:
Йән асыуҙан уҡталып,
Балаһыны ҡыҙғанып,
Аҡһаҡалға ынтылды,
Меҫкенкәйем шу көндө,
Күҙ алдымда үкһетеп,
Тереләй ергә күмелде.
Ҡинйә балам ҡалғайны,
Аҡһаҡалдар килгәйне,
Алам, тиеп әйткәйне,
Бала бауыр буғанға,
Алып ҡастым урманға.
Беҙҙәй әсәле бала,
Ҡасҡан ир-ат күп мында,
Барыһы ла, ҡан илап,
Йөрөй ҡасып урманда.
Егет, изге икәнһең,
Яҡшы уйҙа килгәнһең,
Ары барма, ҡайт кире,
Ҡанлы ергә килгәнһең,
Яуыз илгә килгәнһең.

— Һыуҙар кисеп, тау ашып,
Күп йыл буйы килгәнмен,
Күп юлдарҙы уҙғанмын;
Күҙ йәшергән Үлемде
Эҙләп мында тапмаһам,
Башын сабып өҙмәһәм,
Әйткәнемә етмәһәм,
Барын ерҙән йыймаһам,
Урал булып йөрөмәмен!
Күҙгә күренгән Үлемгә
Кеше ҡанын ҡойорға
[Ҡанын ҡойоп, йәнене]
Аларға юл ҡуймамын.
Тигән һүҙен әйткән дә,
«Һау булығыҙ», — тигән дә,
Арыҫланына менгән дә
Ҡатил батша йортона
Урал ҡарап киткән, ти.
Бер нисә көн үткән, ти,
Шундай ергә еткән, ти:

Бер әсәнән тыуғандай,
Бер төҫ кейем кейгәндәй,
Барыһы ла шәп-шәрә
Бер төркөм халыҡ йыйылған,
Аллы-артлы теҙелгән:
Ирҙәр, ҡыҙҙар айырылып,
Урам-урам ҡуйылған.
Аҡһаҡалдар төрткөләп,
Тигеҙһеҙен тигеҙләп,
Ҡамсылап гел һуҡҡылап
Йөрөһәләр ҙә, һүҙ әйтмәй,
Тел дә ҡыбырҙаталмай
Торған халыҡтарға барған,
Майҙанға бы күҙ һалған.
Бы төркөмдән ситтәрәк,
Ун биш аҙым ҡырҙараҡ,
Күҙе-башын сәмәртеп *,
Йөрәктәрен һыҡтатып;
Балалары ҡурҡышып,
Үҙ-араһы һөйләшеп,
Ҡайғырышып, илашып
Торған ата-әсәләр
Янына барып туҡтаған,
Хәл-әхеүәл һораған,
Үҙ теләген һөйләгән.
Урал һүҙен бары ла
Йотлоғошоп тыңлаған.
Араһынан бер ҡарты
Былай итеп һөйләгән:
— Егет, һинең төҫ-башың,
Аптырашлы ҡарашың,
Арыҫлан менеп килешең
Сит булырҙай күренә.
Беҙҙең илдә батша бар,
Аҡһаҡалдан түрә бар;
Мына бы халыҡ эсендә
Төрлө ырыуҙан кеше бар.
Һәр йыл батша тыуған көн
Ата-әсәһе хаҡы өсөн,
Батша тыуғас, һыу алып,
Йыуған ҡойоһо өсөн
Һәр ырыуҙан йыл һайын
Ҡорбан бирер йола бар.
Батшаның тыу биҙәге —
Ҡара ҡоҙғон ҡошо бар,
Шул ҡоштарҙы йыл һайын
Һыйлай торған көнө бар [17].
Ана, егет, күрәмһең,
Ул ҡоштарҙы беләмһең,

Ҡилеп тауға ҡунғандар,
Ем булырын белгәндәр.
Ҡойоға ҡыҙҙар һалған һуң,
Ҡыҙҙар анда үлгән һуң,
Барын алып ҡойонан
Ҡоҙғондарға ташлайҙар,
Алар шунда ашайҙар.
Мынау бәйле егеттәр
Һәр ырыуҙан килгәндәр, —
Батша ҡыҙы йыл һайын
Тәүҙә һайлай бераүһен;
Анан ҡала батша үҙе
Ҡолдар һайлай һарайға;
Анан тороп ҡалғаны —
Тәңре өсөн ҡорбанға.
Тип һөйләп тә бөтмәгән,
Әйтер зарын әйтмәгән,
Алтын тәхет өҫтөндә
Батша ҡыҙы утырған,
Дүрт яғынан дүрт ҡоло
Тәхетене күтәргән,
Баҫмалатып артынан,
Бер аҡһаҡал эйәргән,
Юлын башлап алдынан
Аҡһаҡалдар эйәрткән.
Килеп еткән былар, ти,
«Тигеҙ, яҡшы тороғоҙ,
Батша ҡыҙы килә бит,
Яҡты йөҙлө булығыҙ!» —
Тип бераүһе әйткән, ти.
[Э]рәт боҙоп торғанды
Ҡамсыһы мән һуҡҡан, ти.
Батша ҡыҙы шу саҡта
Килеп еткән майҙанға;
Урал да рәт боҙмаған,
Барып торған ыңғайға;
Батша ҡыҙы, аралап,
Бар егетте һайлаған,
Араһынан оҡшарҙай
Бер егет тә тапмаған.
Аҙаҡ сиктә, яҡынлап,
Уралға килеп еткән, ти,
Туҡтап тороп шу ерҙә
Уралға һүҙ ҡушҡан, ти,
Ҡулына алып бер алма,
Уралға ҡыҙ биргән [18], ти.

Батша ҡыҙы майҙанда
Оҙаҡ һөйләп тормаған,

Уралды алып барырға
Аҡһаҡалға ымлаған.
Ҡыҙ тәхеткә утырған,
Тағы ҡолдан күтәртеп,
Һарайға ҡайтып киткән, ти,
Халыҡты ситкә тарҡатып
— Батша ҡыҙы һөйҙө бит!
— Батша кейәүе булды бит! —
Тип, барыһы шау килеп,
Аҡһаҡалдар [зыу] килеп,
Халыҡты ситкә тарҡатып,
[Урал ҡашына килгән].
— Әйҙә, һарайға, егет,
Батша ҡыҙы көтә, — тип,
Уралға йола аңлатып,
Бер аҡһаҡал шу сакта
Юл башларға булған, ти:
— Кейәү булдың беҙгә, — тип,
Арҡаһынан һөйгән, ти.
Урал быға күнмәгән,
Аҡһаҡалға эйәреп,
Һарайға ул китмәгән.
— Мин йоланы белмәйем,
Эш аҙағын күрәйем,
Аҙаҡ барһам, барырмын,
Ҡыҙҙы эҙләп табырмын, —
Тиеп Урал әйткән, ти,
Аҡһаҡалдар һүҙҙәрен
Урал кире ҡаҡҡан, ти;
Аҡһаҡалдар, ҡорсайып *,
Ҡыҙға әйтә киткән, ти.

Күп тә ваҡыт уҙмаған,
Халыҡта шау-шыу бөтмәгән,
Аҡһаҡалдар юл башлап,
Дүрт батырын эйәртеп,
Ҡолдан тәхет күтәртеп;
Бураланған * дөйәләй,
Ҡанһыраған айыуҙай,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Күҙ ҡабағын тойҙороп,
Ужар сәсеп, мат ҡурып *,
Ҡабан суҫҡа елкәле,
Филдәй йыуан балтырлы,
Ҡымыҙ тулған һабалай,
Имәнес йыуан ҡорһаҡлы,
Ужарынан халыҡтың
Башын ергә эйҙереп,
Ҡатил батша килгән, ти

Барыһын да аралап,
Ир-ҡол һайлап үткән, ти.
Быныһы һарайға барыр,
Быныһы ҡорбанға булыр, тип
Ҡол һайлауын бөткән, ти,
Ҡыҙ һайларға килгән, ти.

Ҡыҙҙар һайлап йөрөгәндә,
Бер һылыуға еткәндә,
Аҡһаҡалды саҡыртып:
— Тешен ҡара, — тигән, ти.
Алһыу йөҙөн ҡаплаған
Ҡулын ҡыҙҙың алған, ти;
Күкрәктәрен ҡапшаған,
Билен тотоп ҡараған,
Ҡыҙҙың битенән үбеп,
— Һарайға бы ярар, — тип, —
Бүтәндәрен ҡарағыҙ,
Араһынан үҙегеҙ һайлағыҙ,
Ҡәрәгенсә алығыҙ, —
Тиеп батша әйткән, ти,
Аҡһаҡалға ҡушҡан, ти.
— Ҡалғандары әсәмдең,
Мине йыуған ҡойомдоң
Ҡорбанына ҡалыр, — тип
Аҙаҡ һүҙен әйткән, ти.
Асыуланып, шу саҡта
Ҡыҙы килеп еткән, ти,
Урал янына килеп,
Үпкә һүҙен әйткән, ти:
— Егет, һине һайланым
Һарайыма барырға.
Алма биреп ымланым,
Мине тиңгә алманың;
Һарайыма барманың,
Кире ҡаҡтың һүҙемде,
Бөтә ҡолдар алдында
Ҡара иттең йөҙөмдө.
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Батша төшкән тәхеттән:
— Ҡайһы ырыу егеттән
Минең ҡыҙым хурланған? —
Тип Уралға килгән, ти,
Төкөрөк сәсеп ауыҙҙан,
Һүҙен һөйләп киткән, ти:
— Һин минең кемлегем,
Ҡатил батша данлығым,
Кеше түгел, бы илдә —
Мин биләгән һәр ерҙә —

Ҡошо-ҡорто, йәнлеге
Ишетеп тә, күреп тә,
Гүрендәге үлек тә
Аңлағанын беләһең!
Ҡыҙым әйткәс, бармайсы,
Нимә уйлап тораһың?
Ниңә йолам боҙаһың,
Ниңә бармай һуҙаһың?
— Батша тигән нәмәне,
Кеше һуяр йоланы
Ишетеп тә, белеп тә,
Нисә йылдар йөрөп тә,
Һис бер ерҙә күрмәнем,
Барлығын да белмәнем.
Мин ят[19] йола һөймәнем,
Үлем тигән яуызды
Үтерергә әҙләйем.
Йоланан да ҡурҡмайым,
Үлемдән дә өркмәйем.
Кеше түгел, ҡошто ла,
Ниндәй үлем килһә лә,
Килеп ҡулын һалһа ла,
Аны биреп Үлемгә,
Ҡул ҡаушырып тормаймын!
Мына, ҡарап торайым,
Бар йоланды күрәйем,
Иң ахырҙа үҙ уйым
Һиңә әйтеп китәйем.
Тигән һүҙен ишеткәс,
Уралдың ят, сит кеше
Икәнлегене белгәс,
Аҡһаҡалдар, батырҙар,
Батша яҡлы ҡарт-ҡоролар,
Батша ҡыҙын Уралдан
(Аңа ҡыҙҙы биреүҙән,
Аны кейәү ҡылыуҙан)
Барыһы ла көнләшкән.
Үлем көткән бары халыҡ
Мыны ишетеп ҡыуанып,
Үҙ-араһы һөйләшкән.
Батша мыңа шашҡан, ти:
— Мындай тиңтәк һайлама,
Күҙең юҡҡа талдырып,
Юҡ кешегә ҡарама,
Ҡайтсы, балам, ҡайт, әйҙә,
Һарайына кит, әйҙә, —
Тип ҡыҙына әйткән, ти. —
Ҡорбандарҙы тотмағыҙ,

Ҡыҙын һыуға ташлағыҙ,
Ирен утҡа атығыҙ.
Бы егетте быуғаулап,
Аҙаҡ миңә илтегеҙ, — тип,
Дүрт батырға ҡушҡан, ти.
Үҙе, тәхеткә ултырып,
Башҡарыуҙы көткән, ти.

Аҡһаҡалдар ҡыҙҙарҙы,
Ҡулы бәйле ирҙәрҙе, —
Ҡыҙын һыуға ташларға,
Ирен утҡа ташларға
Ҡуҙғалыша башлағас,
Халыҡ сыр-сыу илашҡас,
Урал **ырғып сыҡҡан, ти,**
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Мин күренмәҫ Әжәлде[20]
Юҡ итәргә сыҡҡанмын;
Ҡан эсеүсе батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын.
Халыҡ илашып торғанын
Күҙ алдында күргәндә,
Халыҡтың ҡанлы үлеме
Халыҡҡа ҡулын һалғанда,
Үлем мән яу асыр
Батыр ҡарап торормо?[21]
Яуыздарға юл ҡуйып,
Батыр ҡурҡып ҡалырмы?
Кит, аҡһаҡал, артабан,
Төш, ҙур батша, артабан,
Ҡолдар ҡулын сисегеҙ,
Ҡыҙҙар ҡулын сисегеҙ!

Тигән[22] һүҙҙе ишеткәс,
Батша ҡыҙарынған, ти,
Тиреһенә һыймаҫтай,
Батша бүртененгән, ти[23].
Батырҙарына ҡарап:
— Үлем эҙләп йөрөһә,
Ҡанға һыуһап тилмерһә,
Күрһәтегеҙ Үлемде,
Танытығыҙ илемде!
Тиеп асыуланған, ти,
Батша фарман биргән, ти[24].
Тәне йөнтәҫ айыуҙай,
Үҙҙәре ҙур дейеүҙәй

Дүрт батыры килгән, ти,
Уралға ҡаршы торған, ти [25].
— Алышҡамы, тартышҡамы? —
Һайла берҙе, — тигән, ти.
— Үҙегеҙ әрәм бумағыҙ,
Үҙегеҙҙән көслөрәк
Берәй хайуан һайлағыҙ, —
Тигәс, былар көлгән, ти.
— Ай-һай, батыр икәнһең! —
Тип батша ла, бары ла,
Мыҫҡыл итеп ҡуйған, ти.
Ҡатил батша асыуҙан
Ни әйтергә белмәйсе,
Уйлап-нитеп тормайсы:
— Ҡанһыраған икән бы,
Йәнһерәгән икән бы,
Һарайымды күтәргән
Үгеҙемде китерең!
Үгеҙ ҡылыр ҡылыҡты,
Һеҙ, батырҙар, тик тороң!
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Бары халыҡ ҡурҡҡан, ти,
Уралды бары ҡыҙғанып:
— Әрәм була егет! — тип,
Халыҡ күҙ йәш түккән, ти.
Атаһына ялбарып,
Ҡыҙы ла килеп еткән, ти.
— Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле,
Миңә биргән антың бар;
«Кейәү һайла үҙең», — тип
Миңә әйткән һүҙең бар.
Бы егетте һайланым,
Кейәүем тип уйланым,
Һөйләшергә егеттең
Һис яйына ҡуйманың.
Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле! —
Тип ҡыҙы әйтһә лә,
Ҡанлы йәшен түкһә лә,
Ҡыҙы һүҙен алмаған,
Ҡыҙ яйына ҡуймаған.
Ерҙе тырнап, үкереп,
Шылағайын ағыҙып,
Тауҙай үгеҙ килгән, ти.
Урал алдына килеп,
Ҡарап баҫып торған, ти:
— Егет, ергә атмамын,
Сереп, туҙан булғансы,

Елгә осоп бөткәнсе,
Мөгөҙөмдә ҡаҡлармын, —
Тип Уралға әйткән, ти.
— Мин дә әрәм итергә,
Үгеҙ, һине тырышмам,
Яфаланып, көс түгеп,
Һинең мән сайҡашмам.
Донъяла һин кешенән
Көслө юғын таныр һың,
Үҙең түгел, тоҡомоң [мән]
Кешегә ҡол булырһың! —
Тигән һүҙгә үгеҙ ҙә
Асыуланып ынтылған,
Мөгөҙөнә алырға
Уралға ул уҡталған.
Урал батыр буғаны *
Мөгөҙөнән алған, ти.
Тырышҡан, ти, үгеҙ ҙә,
Тырмашҡан, ти, үгеҙ ҙә [26] —
Ысҡыналмай Уралдан,
Тубығынан батҡан, ти;
Көсөргәнеп тырышҡас,
Ауыҙынан үгеҙҙең
Ҡап-ҡара ҡан аҡҡан, ти;
Өҫкө теше төшкән, ти,
Үгеҙ хәлһеҙләнгән, ти,
Сәсәп, әлһерәгән, ти.
Мыны күреп батша ла,
Аҡһаҡалдар, бары ла
Аптырауға ҡалған, ти.
Урал әрәм итмәгән:
Батҡан ерҙән үгеҙҙе
Күтәреп алып ҡуйған, ти.
Үгеҙҙең бар тояғы
Урталайға ярылып,
Араһына ҡом тулып,
Һырҙай ҡанға туҙған *, ти.

Урал:

— Ҡулым тейгән мөгөҙөң
Кәкерәйгән көйөнсә,
Тешең төшкән ауыҙың
Өҫкө тешең үҫмәйсе [27],
Айырылған тояғың
Һис тә берекмәйенсә,
Үҙең түгел, балаң да
Мәңге ҡалыр шул көйсә.
Кеше көсөн күрҙең һин,

Хәлһеҙлегең белдең һин,
Ҡешегә мөгөҙ сайҡама,
Еңәрмен, тип уйлама! [28] —
Тигәс, үгеҙ ҡурҡҡан, ти,
Аҡһаҡалдар, батша ла
Аптырауға ҡалған, ти [29].

Ҡатил серен бирмәгән:
— Бер табандан уҡтал! — тип
Дүрт батырға ымлаған.
Батырҙар ҙа килгән, ти.
— Йәнең сыҡһа ҡулымда,
Тәнең ҡайҙа ташлайым?
Сорғатҡансы үлмәһәң,
Ҡайһы илгә сөйәйем? —
Тип бер батыр Уралға,
Алып [30] һүҙен әйткән, ти.
Урал мынан ҡурҡмаған,
Дүрт батырға ҡаршы ул
Алға табан атлаған.
— Дүртегеҙ ҙә килегеҙ,
Үлем эҙләп йөрөгән
Батыр көсөн белегеҙ;
Ҡулығыҙҙа йән бирһәм,
Арыҫланыма бирегеҙ;
Көсөгөҙ етһә ташларға,
Йәншишмәгә сөйөгөҙ.
Инде һеҙ ҙә әйтегеҙ:
Минең ҡулға төшһәгеҙ,
Күбәләктәй осһағыҙ,
Ҡайҙа ҡарай сөйәйем?
Дейеүҙәрҙе ҡыйратып,
Йәншишмәнән һыу алып,
Кире һеҙгә килгәндә,
Һеҙҙе эҙләп йөрөгәндә,
Он-талҡандай итегеҙҙе,
Күбәләктәй йәнегеҙҙе
Ҡайһы ерҙән табайым? —
Тигәс, былар көлгән, ти,
— Көсөң етһә атырға,
Һыртты ергә һалырға,
Батша, аҡһаҡалдарҙың
Алдына ҡарай ташларһың, —
Тип мыҫҡыллап ҡуйған, ти.

Дүрте берҙән уҡталып,
Йәбешкән, ти, батырға.
Алышҡан, ти, былар ҙа.

Урал тотоп берене
Олаҡтырған батшаға,
Ҡалған өсөн бер юлы —
Аҡһаҡалдар алдына.
Ер һелкенгәндәй булған,
Аҡһаҡалдар, батша ла,
Олаҡтырған батыр ҙа
Он-талҡанға ҡалған, ти,
Күҙҙән ғәйеп булған, ти.
Ҡан илаған әсәләр,
Һыҡтап торған аталар,
Ҡулы бәйле балалар, —
Барыһы ла күргән, ти,
Ябырылып Уралдың
Ҡулын килеп үпкән, ти.

Урал һарайға барған, ти,
Бары халыҡты йыйған, ти,
Ҡасҡан-боҫҡан — барыһына
Үҙ йортона ҡайтырға
Урал фарман биргән, ти.
Аранан баш һайлатып,
Урал китмәк буған, ти.
Халыҡтар йыйын ҡорған,
Урал да бергә буған.
Халыҡ эсендә иң ҡарты
Былай тиеп әйткән, ти:
— Егет тә егет икәнһең,
Егет, батыр икәнһең;
Йөрәгеңә таянып,
Беләгеңде һыҙғанып,
Беҙҙәйҙәрҙе ҡыҙғанып
Килгән егет икәнһең,
Батша асыуын ҡуптарған,
Һиңә ҡаршы өскөргән,
Шу айҡанлы беҙҙәрҙе
Шатлы азат иттергән * —
Батша ҡыҙы булды бит,
У сәбәпсе булды бит.
Һине һөйөп шаулашты,
Атаһы мән даулашты;
Батша ҡыҙын ал, егет,
Бергә гөмөр ит, егет! [31]
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Барыһы ла димләшкәс,
Урал алмаҡ буған, ти.
Ҡыҙҙы алып туй яһап,
Бер аҙ ҡалмаҡ буған, ти.

**[Уралдың Зәрҡумды үлемдән алып ҡалғаны, уның менән атаһы Кәһҡәһә батшаға барғаны, сер һарайын асҡаны, Гөлөстанды үҙенә алғаны]**

Бер нисә көн буған һуң,
Ҡыҙҙың туйы уҙған һуң,
Урал тағы киткән, ти,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти;
Бара торғас, бер ерҙә,
Бер ҡая тау битендә,
Уйпат-сая эсендә
Арыҫланынан төшөп[32],
Ял итәргә ятҡанда,
Йылан ыҫлаған тауыш
Ҡолағына салынған;
Ырғып тороп урынынан
Тирә-яғын ҡаранған.
Йыраҡ түгел, яҡында,
Бер ҡулҡаның янында:
Бейеклегән ҡараһаң, —
Арыҫлан аша күренмәҫ;
Оҙонлоғон үлсәһәң,
Йөҙ аҙымда түкәлмәҫ *,
Оҙонлоҡта бер йылан,
Ҡулҡа эсенән һөҙөп,
Тотоп алған бер болан.
Ай, айҡаша, ти, былар,
Һай, сайҡаша, ти, былар;
Аҙаҡ сиктә түҙалмай,
Ай-вайына ҡалдырмай *,
Сәсәп йығылған болан.
Арт һанынан боландың
Шунда уҡ ҡапҡан, ти, йылан.
Урал барған йөгөрөп:
Йылан ҡойроғон болғап
Дулай, ти, ағас һындырып.
Уралды ла йотарға
Ҡойроҡ мән һуҡҡан, ти,
Урал урап йыландың
Ҡойроғонан тотҡан, ти.
«Ебәр боланды!» — тиеп,
Йыланға Урал әйткән, ти.
Йылан бер һүҙ әйтмәгән.
Ул боландың арт һынын
Йылан һаман сәйнәгән.
Болан шунда уҡ үлгән,
Урал ҡарап торған, [ти]:
Тырышҡан, ти, был йылан
Үҙ теләген итергә,

Боланды йотоп бөтөргә
Тырышһа ла, бумаған:
Ҙур мөгөҙҙә туҡтаған;
Ҡойроғо мән шаҡарған,
Анда ла мөгөҙ һынмаған;
Ергә һуҡҡан боланды, —
Анда ла мөгөҙ һынмаған;
Бара-тора йыландың
Һис тәҡәте ҡалмаған:
Йотһа, мөгөҙ ебәрмәй,
Ҡыçһа, кире тибәлмәй;
Аптыраған, алъяған,
Һис тә эше сыҡмағас,
Йылан, башын сәкәйтеп,
Былай тиеп ялбарған:
— Ай, егетем, ярҙам ит,
Ҡәһҡәһәнең [33] улымын,
Зәрҡум [34] тигән егетмен,
Ярҙамыңа ҡарыуға *
Мин дә ярҙам итәрмен.
Юлымда юлдаш бул тиһәң,
Юлыңа бергә китәрмен;
Ынйы-мәрйен һораһаң,
Һарайыма барырһың,
Теләгәнсә алырһың,
Миндә ҡунаҡ булып ҡалырһың.
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Урал һорау биргән, ти,
Урал яуап биргән, ти:
— Һис [тә] ҡарыу ҡылмаған *,
Бер кешегә теймәгән,
Ҡан эсмәçтәй боланды,
Ит еймәçтәй * боланды,
Минең дошман Үлемгә
Асмарланың * боланды,
Миңә һөйлә серене,
Миңә әйт һин барыны,
Миңә бүләк кәрәкмәй,
Миңә һарай кәрәкмәй,
Мин сыҡҡанмын илемдән
Ҡоткарырға кешене,
Яҡлашырға барыны [35]
Яуыз дошман Үлемдән.

Зәрҡум:

— Ай, егетем, әйтәйем,
Бар серемде һөйләйем:
Беҙгә яҡын бер ерҙә,

Ҡоштар торған ҙур илдә,
Самрау [36] тигән батша бар.
Шул батшаның Ҡояштан
Тыуып төшкән ҡыҙы бар.
Мин һораным — бирмәне,
Һин — йылан, тип ҡыҙы ла
Мине тартып килмәне.
Мин атама ялындым,
Көнөн-кисен ялбарҙым,
Атай, шуны ал, тинем,
Һис бумаһа иленә
Утлы яуың ас, тинем.
«Бөгөн ауға сыҡ, — тине,
Йылан туның кей, — тине;
Ун ике тарбаҡ мөгөҙлө
Болан табып ей, — тине;
Шуны йотһаң, донъяла
Төрлө төҫкә керерһең,
Кешеләрҙең һылыуы,
Бер егет, ир булырһың [37],
Ҡош иленә барырһың,
Самрауҙың бер ҡыҙын
Үҙең һайлап алырһың», —
Тигәс, [ауға] сыҡҡайным,
Боланды ла йотҡайным;
Инде хәлем ҡалманы:
Ауыҙыма кипләнгән *
Мөгөҙө һис һынманы.
Егет, мине хур итмә;
Бер изгелек ит, егет,
Миңә ярҙам ит, егет;
Атама бергә барайыҡ,
Ни теләһәң — алайыҡ.
Атамдан байлыҡ һорама:
Донъяла һылыу ҡыҙ бирер,
Анһына ла алданма;
Һарай тулы мал бирер,
Анһына ла алданма;
Энйе-мәрйенден барын
Атам түгер алдыңа, —
Анһына ла алданма!
Аҙаҡ сиктә атайым:
«Энйе*-мәрйен һөймәгән,
Байлыҡҡа баш эймәгән,
Ай, һылыу ҡыҙ, тимәгән,
Бы донъяла йөрөп тә,
Ишетеп тә, күреп тә
Һис берәүҙе тапманым,

Бирер нәмәм ҡалманы,
Инде үҙеңә туҡтаным.
Егетем, әйтсе теләгең,
Ҙур эшеңә бүләгең», —
Тейер һиңә атайым.
Алдан әйтеп ҡуяйым:
«Аждаһа туның һал, — тирһең, —
Ҡош туныңды кей, — тирһең,
Ҡош телеңде сығарып,
Ауыҙыма бир», — тирһең.
Атам һине ҡурҡытыр,
Ташҡа төкөрөп күрһәтер,
Ташты һыуҙай ҡайнатыр.
Әгәр тауға төкөрһә,
Тау ҙа ирер, һыу булыр,
Ағып бары шу саҡта,
Бер үҙәнгә йыйылыр,
Осо-сиге күренмәҫ
Ялтыраған күл булыр.
Аныһынан да ҡурыҡма һин,
Һаман телен һора һин.
Атам телен үпкән һуң, —
Күңеле йомшап киткән һуң:
«Ни һорайһың бүләккә?» — тип.
Һиңә ҡарап әйткән һуң:
«Бер ҙур илдә батшаның
Яҡшылыҡҡа — яҡшылыҡ
Ҡылыу эшен беләһең,
Үҙ һөйгәнең ни буһа,
Шуны миңә бирәһең», —
Тигәс, атам ни бирер,
Энйе башлы таяғын [38]
Бирһә, аны алырһың.
У таяҡтың даны шу:
Һыуға төшһәң, батмаҫһың,
Утҡа инһәң, янмаҫһың;
Күренмәҫкә теләһәң,
Һис бер йән дә күралмаҫ,
Дошман һине эҙләһә,
Һис сағында табалмаҫ.
Тигән һүҙен ишеткәс,
Урал мөгөҙҙө һындырған,
Йылан, боланды йотҡас,
Шунда уҡ бер егет буған.

Уйламаҫтан-нитмәҫтән,
Былар һүҙен бөтмәҫтән,
Бер һыҙғырыу ишеткән,

Зәрҡумдың йөҙҙәре
Ағарынып, буҙ буған.
Урал: «Ни?» — тип һораған.
Зәрҡум шу саҡ: «Ни тиргә?»
Ысыныны әйтергә
У Уралдан йәшергән.
«Атам белде серемде,
Мин һөйләгән уйымды;
Был егеттән яҙлыҡһам,
Мыны йотмай ебәрһәм,
Атам йөрәге ташыр,
Асыуынан мине аҫыр;
Йотарға көс алалмам,
Ҡойроғомдо боғалаҡ
Тағы ла мин ҡылалмам.
Атама илтеп тапшырһам,
Аяғына баш орһам,
Аҙ-маҙ яза алырмын,
Үлемдән мин ҡалырмын...»
Тигән уйҙы уйлаған.
Тик Уралға әйтмәгән.
— Атам әҙләй сығарған, —
Тип Уралды алдаған.
— Әйҙә, егет, барайыҡ,
Беҙҙә ҡунаҡ булайыҡ,
Атамдан [, тим,] бүләккә
Мин әйткәнде һорайыҡ, —
Тип Уралды көсләгән,
Һарайына димләгән.
«Йылан илене күрәйем,
Бар серене беләйем,
Яҡшылыҡҡа яманлыҡ
Була икән донъяла,
Бергә барып күрәйем.
Егет һүҙе бер булыр,
Тартынмайсы, барайым.
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ
Була ҡалһа, күрәйек,
Үлем еңәр йөрәктең,
Аны йығар беләктең
Батырлығын һынайыҡ», —
Тиеп Урал уйлаған,
Барыу юлын һайлаған.
— Һау булһам, кире килермен.
Һинең мән булырмын;
Килмәһәм, оҙаҡ көтмәҫһең,
Ситтә ятып ҡалмаҫһың,
Төҫәүелләп юлыңдан,
Илгә ҡайтып китәрһең,

Минән сәләм әйтерһең, — тип
Арыҫланға әйткән, ти,
Маңлайынан үпкән, ти,
Шунда ҡуйып киткән, ти.

Бергә киткән, ти, былар,
Күп тау үткән, ти, былар.
Күккә олғашҡан ҙур тауҙай
Ҡара күргән алдында,
Нәжәғәйҙәй ялтыраған
Ут уйнай, ти, янында.
Күк томандар ҡаплаған,
Ут һөрөмө бөркөлгән
Нәмә күргәс юлында,
Урал:
— Ни? — тип һораған.
— Һарайҙарҙы һаҡлаған,
Тау түгел ул, йылан, — тип,
Зәрҡум аны аңлатҡан.
Барып еткән, ти, былар,
Шунда күргән, ти, Урал:
Тимер ҡойма янында
Уралып ятҡан буйында
Туғыҙ башлы бер йылан —
Һаҡсы икәнен белгән.

Зәрҡум башлап барған, ти,
Туғыҙ башлы йыланға:
— Асҡыс килтер! — тигән, ти.
Йылан шыжлап һыҙғырған,
Тау-таш ауғандай булған,
Бер саҡ тауыш ҡуҙғалған:
Тау ишелә икән, тип
Урал шунда уйлаған.
Алтышар башлы дүрт йылан
Асҡыс һөйрәй икән, ти,
Шул асҡыстың тауышы
Шундай шаулай икән, ти.
Шул ҙур асҡысты алып,
Һарайҙы асҡан, ти, барып.
— Әйҙә, егет, инә тор,
Мин атама барайым,
Мыңда алып киләйем, —
Тип Зәрҡум киткән, ти,
Уралды шунда япҡан, ти.

Бер саҡ һарай тирәһе:
Бағы, төрлө әреһе
Йылан килеп тулған, ти;

Төрлө һүҙҙәр буған, ти,
Урал тыңлап торған, ти.
Ун бер башлы бер йылан:
— Сират миңә ашарға —
Ун ике баш яһарға,
Батшаға иң [-иң] яҡын
Вәзиренән булырға.
Туғыҙ башлы бер йылан:
— Юҡ, был кеше батшаның
Серен алды улынан,
Вәғҙә алды ҡулынан;
Мыны батша йә үҙе,
Йә бумаһа мин йотам;
Мин батшаның бар серен
Үҙе башымда мин тотам.
Батша аны ашамаҫ,
Улын яҡлап ҡотҡарғас,
Ашаһа ла, баш үҫмәҫ.
Юҡҡа йыйылып тормағыҙ,
Ымһынышып йөрөмәгеҙ,
Һеҙгә теймәҫ, көтмәгеҙ, —
Тигәс, бары таралған.
Туғыҙ башлы ҙур йылан
Шу тирәлә уранған:
Ҡапҡаға яҡын килгән, ти,
Бер ҡыҙ төҫлө буған, ти,
Урал янына инеп,
Арбамаҡсы булған, ти,
Уралға ҡул һуҙған, ти.
Урал ҡулын ҡыҫҡан, ти,
Бармаҡтары осонан
Йыландың ҡан тамған, ти
Йылан түҙмәй асыуҙан
Ут бөрөкмәк буған, ти;
Урал, сәсеп ғәйрәтен,
Боғаҙынан алған, ти.
— Һин бит серҙе белеүсе,
Кеше ашап ятыусы,
Баш үҫтереп йөрөүсе,
Ҡәһҡәһәнең бар серен
Башың һаҡлап тороусы, —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Аптырауҙа ҡалған, ти:
— Ай, тәң(е)рем икәнһең,
Мин һис саҡта белмәнем,
Кешеләр, тип уйланым.
«Улың серҙе кешегә
Һөйләй, батшам, тигәйнем», —
Тиеп, йылан Уралдың

Аяғына йығылған,
Бил урталай һығылған.
Еçкәнепме, һиҙепме:
— Юҡ, юҡ, тәң(е)рем түгел, һин —
Ҡеше еçе аңҡыны.
Ысын кеше икәнһең!
Батша улы һөйләгәс,
Бөтә серҙе белгәнһең,
Серҙе аңлап килгәнһең, —
Тиеп ырғып торған, ти,
Ауыҙ асып, ажғырып,
Утын бөрөкмәк буған, ти.
Урал ҡурҡып тормаған,
Башына бер орған, ти —
Бер башынан сылтырап,
Иҙәнгә асҡыс ҡойолған,
Һигеҙ баштан тағы ла
Һигеҙ батыр бар булған.
— Барыбыҙ ҙа кеше инек,
Илебеҙҙә ир инек,
Йылан беҙҙе ашаны,
Үҙенә баш яһаны;
Яр йыландың йөрәген —
Алтын асҡыс табарһың,
Сер һарайын асарһың,
Теләгенде аларһын, —
Тип тегеләр әйткән, ти.
[Урал шулай иткән, ти,]
Урал серен алған, ти,
Сер һарайын асҡан, ти:
Ынйы мән биҙәлгән,
Ебәк мән урапған,
Йөҙө-башы һарғайған
Бер һылыу ҡыҙҙы күргән;
Ҡыҙ янында — бер ишек,
Шуны барып асҡан, ти;
Бер тәхеттең янында
Ынйы таяҡ күргән, ти.
— Алсы, егет, таяҡты —
Теләгенә маяҡты, —
Тип кешеләр әйткән, ти.
Шу саҡ һарай ишеген
Бер аҡ йылан асҡан, ти.
«Бы кем мында инеүсе,
Һис кешегә теймәçтәй
Таяғымды алыусы?»
Тигән һүҙҙәрен әйткәс,
Йылан килеп Уралға,
Йотайым, тип уҡталғас,

Урал тотоп алған, ти,
Аҡ йыланды йыҡҡан, ти,
Өҫтөнә менеп утырып,
Ошо һүҙҙе әйткән, ти:
— Кеше юяр * Үлемде
Эҙләп сыҡҡан батырмын,
Үлем яҡлы берәүҙе
Ерҙә имен ҡуймамын;
Атым Урал буғанда,
Затым кешенән булып,
Бы донъяға тыуғанда,
Кешегә ярҙам итәрмен,
Илем байман итәрмен,
Кешегә дошман буғандың
Барын тар-мар итәрмен.
Батша булһаң, бир фарман:
Бөтә йылан йыйылһын,
Кеше ейгән баштары
Бары ергә эйелһен, —
Барын турап бөтәрмен,
Кире кеше итәрмен.
Яуыз Үлем юлдашы,
Кешегә дошман ҡулдашы
Бөтә йылан-яуызды, —
Барын тар-мар итәрмен!
Тигән һүҙен ишеткәс,
Батырлығын һынағас,
Йылан да буй биргән, ти.
— Таяғым киткәс ҡулымдан —
Көсөм һиндә, — тигән, ти.
Батша фарман биргән, ти,
Бар йыланды йыйған, ти;
Кеше ашап үҫкәндең
Бары башын киҫкән, ти,
Бары кеше буған, ти.
Бар һарайҙы астырған,
Бикле ҡыҙҙар, кешенең
Барыһын да ҡотҡарған.
[Шунан йыланға килеп]:
— Хәҙер улыңды тап, — тигән,
Эҙләп алып кил! — тигән,
Бергә алып килергә
Кеше яһап * ебәргән.
Бары халыҡ та килгән, ти,
Бикле ятҡан һылыу ҡыҙ —
У ҙа бергә сыҡҡан, ти;
Барыһы ла килгән, ти,
Уралды һырып алған, ти:
— Тоңре бирмәҫ ярҙамды

Беҙгә, егет, аҡарҙың,
Ил ҡаплаған яуыҙдың
Утлы яуын аҡарҙың.
Инде, егет, нишләйек,
Нindәй бүләк бирәйек?
Тәңре, тиһәк, кешеһең,
Ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?
— Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй.
Ил батыры шул булыр —
Кеше һөйәр ир булыр.
Һеҙҙең шатлыҡ — минеке,
Минең шатлыҡ — һеҙҙеке.
Илдең барын йыяйыҡ,
Күмәкләп туй ҡылайыҡ,
Арағыҙҙан берәүҙе
Башлыҡ һайлап ҡуяйыҡ.
Йыланға ҡаршы күп яу асҡан,
Күп йыл буйы һуғышҡан,
Араһында быларҙың
Алғыр тигән ир булған, —
Шуны башлыҡ ҡылған, ти.
Аның иптәше буған,
Аның ҡыҙы Гөлөстан
Ҡәһҡәһәлә ҡол булған.
Һарайҙағы тап буған
Ҡыҙҙы бары, димләшеп,
Уралға бирмәк буғандар
[Урал ҙур уйға ҡалған].
Бы халыҡтың уйҙарын —
Ҡыҙҙы алыр туйҙарын
Бер аҙ һуңлатмаҡ буған;
Әзрәҡәне еңгәнсе,
Туйҙы туҡтатмаҡ буған.
Араһында бер ҡарты,
Иң олоһо, өлкәне,
Донъяла күп күргәне:
— Батыр буған ирҙәрҙе
(Һәр йыл ғүмер бер батыр)
Иле өсөн яратыр.
Быуын-быуын үтәр ул,
Киләсәк быуын етәр ул,
Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтәр ул.
Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,
Ил батыры — батырҙан,
Батыр ирҙән тыуар ул;
Атанан күреп, уҡ юныпу
Атанан күреп, яу асып,
Ил эсендә үҫәр у,

Батырҙан батыр тыуғанда,
Атаһындай булғанда,
Бер быуын тип һанаған
Илдә ғөмөр итәр у.
Ундай батыр аҙ булыр,
Булһа ла, яңғыҙ һин булыр.
Бы ҡыҙ батырҙан ҡот йәйгән,
Батыр ҡыҙҙан һөт имгән, —
Һиңә тиңдәш булыр у,
Батырға әсә булыр у, —
Тигәс, Урал тыңлаған:
Гөлөстанды алған, ти,
Бер ҙу-ур туй ҡылған, ти.
Бергә ҡунаҡ булған, ти.

**[Шүлгәндең дейеү батшаһы Әзрәҡә хәйләһенә эләккәне, Әзрәҡә мәкерен үтәргә Самрау батша иленә барғаны, Һомайҙың уны һарай аҫтына япҡаны]**

Шүлгән бер аҙ киткәс тә,
Тағы осрап бер ҡартҡа,
Ни эҙләүен был яҡта,
Барын һөйләп биргәс тә,
Ҡилгән саҡта юлында
Осраған бер ҡартҡа, —
Бы ҡарт тағы Шүлгәнгә,
Сер йәшермәй, әс тартмай,
Былай тиеп әйткән, ти:
— У осраған кешегеҙ —
Минең ҡустым булыр у,
У ҡустым да бер илдә
Тыуып үҫкән ине у.
Анның йөҙө хәҙер ҙә —
Ап-аҡ һаҡал, сал ҡарттыр,
Саҡ йәнене аҫырарҙай,
Үҙе ҡаҡшау, ябыҡтыр.
Мына мине күрәһең, —
Бер егеттәй тийәрһең,
Уны «ҡустым» тигәнгә,
Бы ҡарт алдай, тийәрһең.
Анның сере шу, егет, —
Аны яҡшы бел, егет:
Беҙҙең илдә йолала
Барыһы ла туғандай,
Бер әсәнән тыуғандай;
Илде талап йөрөмәҫкә,
Илдә ҡан да ҡоймаҫҡа;
Артыҡ ҡалта * текмәҫкә
Ил эййеһен йәшереп,

Ергә күмеп ҡуймаҫҡа;
Тапҡан-таянған бары
Һис айырым булмаҫҡа;
Ҡөслөнөкө — байман, тип,
Еҫерҙе * сит күрмәҫкә;
Ҡыҙға әсә буғанды
Хур әсә, тип кәмһетеп,
Балаһыны һыуға атып,
Андай йола ҡылмаҫҡа,
Тигән илдең анты бар.
Ҡустым шуны тотманы,
Ҡөсө еткән йәндәрҙең
Барын ҡырҙы, ашаны,
Үлем тигән яуызға
Дуҫ, дошманын табырға,
Илдә күп ҡан ҡойорға
Йола таба башланы.
Шуңа аны был илдән,
Тыуып үҫкән еренән
Бөтәһе лә берлектә
Ситкә ҡыуып ташланы.
Хәҙер илдән йыраҡта
Үҙе йәшәй тарлыҡта,
Ғөмөрө үтә зарлыҡта;
Шуңа аның төҫ-башын
Үлем, ҡартлыҡ ҡапланы, —
Тиеп бы ҡарт һөйләгәс,
Шүлгән эште аңлаған,
Барып илде күрергә,
Ниҙәр барын белергә
Ҡарттан юлын һораған.
Ҡарт йәшермәй һөйләгән.

Ай киткән, ти, йыл киткән,
Күп йылға, тауҙар үткән,
Ҡайҙа ғына төп буһа,
Шунда ятып йоҡлаған.
Барып сыҡҡан бер ергә,
Осораған бер күлгә,
Ситен ҡуға уратҡан,
Томбойоҡтар япрайып,
Тик [39] ағастай, сәскә атҡан;
Һаҙмыт түгел, ҡырсын төп,
Өйрәк, аҡҡош, ҡыр ҡаҙы
Йөҙөп йөрөй — шундай күп.
Күлдә ятҡан балығы,
Ялтуш, сабаҡ, суртаны
Бергә йөҙөп уйнайҙар,
Бер-береһенә теймәйҙәр.

Быны күргәс, туҡтаған,
Арыҫлан йөнөнән алып,
Мәҫкәү яһамаҡ буған,
Мәҫкәүенә һап эҙләп,
Ҡуйы таллыҡҡа ҡарап,
Атлап алға киткәндә,
Тал төбөнә еткәндә:
Талда һайрап утырған
Һандуғасты ҡушарлап,
Әберсендәр теҙелгән;
Яғылбай ҙа ҡарсыға,
Тағы турғай күренгән.
Тау битенә күҙ һалһа, —
Ҡуй-һарыҡ та, бүре лә,
Әтәс, тауыҡ, төлкө лә
Бер тирәгә йыйылған...
Шүлгән, күреп, туҡтаған,
Ҡарт һүҙене иҫләгән;
«Тәү батшаға барайым,
Һарай серен беләйем,
Ҡайтыуҙа юл ыңғайы
Барын аулап алайым»[40], —
Тиеп Шүлгән уйлаған,
Арыҫланына менгән дә
Үҙ юлына ыҡлаған.
[Китеп] барған сағында,
Ҡасып утырған Зәрҡумға
Юлда осорап[41] тап булған.
Зәрҡум мынан һорашҡан,
Шүлгән танмай һөйләшкән.
Зәрҡум үҙен Әзрәҡә[42] —
Дейеү батша улы тип,
Сер йәшереп алдашҡан.
Әзрәҡәгә барырға,
Күп бүләктәр бирергә,
Бергә алып китергә;
Йәншишмәнән һыу алып,
Теләгәнсә бирергә
Зәрҡум аны димләгән;
Шүлгән серҙе белмәгән.
Былар бергә киткән, ти,
Былар күп ер үткән, ти.
Шу саҡ ергә тоташҡан,
Үҙе күккә олғашҡан
Шүлгән ҡара күргән дә:
«Болот микән, тау микән?»
Шүлгән, арыҫлан уйлаған
Тау тир инең — ҡайнай, ти,
Болот тиһәң — шаулай, ти.

Шүлгән мыңа аптырап,
Юлдашынан һорай, ти
[Юлдашы булған Зәрҡум]:
— У күренгән ҡарасҡы —
Һарайҙы һаҡлап тороусы,
Беҙҙе күреп килеүсе
Ҙур дейеүҙең бәрәүһе.
Туҡта, һин аҙ көтөп тор,
Ошо урында тороп тор,
Мин тәү барып әйтәйем,
Ҡунаҡ килде, тиәйем.
Беҙҙе килеп алыр ул,
Ҙур һарайға илтәр у», —
Тип Шүлгәнде ҡалдырған,
Үҙе дейеүгә барған,
Юлдашымды, үҙемде
Һарайға илт, тип һораған.
Дейеү хәбәр иткән, ти,
Батша серҙе һиҙгән, ти,
Дейеүҙәргә ҡушкан, ти.
Ике толпар етәкләп,
Батыр ирҙәй олпатлап,
Ҙур ҡунаҡтай йүнәтләп,
Бер ҙур дейеү килгән, ти,
Шүлгән мән Зәрҡумды
Һарайға алып киткән, ти.
Һарайға барып еткән һуң,
Шүлгәнде Зәрҡум ҡалдырып,
Хәбәр итеүен белдереп,
Үҙе һарайға ингән, ти,
Батшаға ҡул биргән, ти,
Әзрәҡәнең янында
Атаһыны күргән, ти.
Ҡәһҡәһә мән Әзрәҡә
Урал турында уйлашып,
Икәү-ара һөйләшеп,
Аптырашып, алъяшып
Ултырған саҡ икән, ти.
Һынсы * дейеүҙәр килеп,
Бер ҡарт дейеү бик белеп:
— Анау саҡта, ай, батшам,
Бер йәш бала тыуғанда,
Анын тауышы килгәндә,
Күктә осҡан дейеүҙәр
Бары ҡолап төшкәйне.
Аны урлап алырға,
Үтереп юҡ ҡылырға
Барған дейеү, ендәрҙең,
Бала текләп ҡарағас,

Тотарға тип уҡталғас,
Барған бере ҡурҡыуҙан
Йөрәге ҡубып үлгәйне.
Шу баланың сыҡҡанын,
Илтә яҡын килгәнен,
«Алам...» тигән уйының
Йәншишмәгә төшкәнен —
Шишмә ҡурҡып ҡайнауын
[Кемдер әйтеп уҙғайны],
Ярты һыуы кәмегән,
Тиеп хәбәр алғайның —
Ҙур ҡайғыға ҡалғайның.
Шаһым [43], сара эҙләйек,
Былай буш ҡул тормайыҡ [44];
Берәй кеше табайыҡ,
Самрау ҡоштоң Аҡбуҙын [45]
Кеше аша алайыҡ,
Һис булмаһа — урлайыҡ, —
Тигәс батша уйланған,
Былай тиеп һөйләгән:

— Аҡбуҙатты алырға,
Аңа эйә булырға,
Йә бумаһа, у атты
Бы донъянан юйырға
Ете дейеү ебәрҙем.
Күктә торған буҙ аттың
Урынын үҙем күргәҙҙем.
Алар барып баҫтырҙы,
Тота алмағас, яҡшылап,
Яндарына саҡырҙы.
Ат уларға килмәне —
Дейеүҙәрем, ғәрлектән,
Кире илемә ҡайтманы:
Күктә ҡалды хур булып,
«Етегән» тигән исемдә
Мәңге ҡалды ут булып [46].
Һис бумаһа һаратын
Алайым, тип уйланым.
Айҙан тыуған ҡыҙы бар —
Аны урлап ҡараным.
Ҡыҙы тотҡон буһа ла,
Аты бүләк буһа ла, —
Аты һаман кимәне,
Һис теләгем бумаңы *.
Хәҙер беҙгә шу кәрәк:
Кеше буған [47] ир кәрәк,
Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы
Арбай алыр ир буһын,

Ҡыҙ, яратып егетте,
Аҡбуҙ мән булатты
Бүләк итерҙәй буһын.
Буҙ ат менәр ир тапһаҡ,
Ҡыҙ теләһә, ҡыҙ биреп,
Мал теләһә, мал биреп,
Бей булам тип ымһынһа,
Берәй илгә бей [48] ҡылып,
Ул егетте арбаһаҡ —
Беҙ Уралды еңербеҙ,
Ер өҫтөндә кешенән
Һис бер тарлыҡ күрмәбеҙ,
Тигәнебеҙ * итәрбеҙ,
Барын ҡулда тотарбыҙ! —
Тигәндән һуң Әзрәҡә,
Зәрҡум алға сыҡҡан да,
Батшаға баш эйгән дә:
— Мин Уралдың ағаһын
Апкилдем дә, — тигән, ти,
Үҙ хәйләһен аңлатып,
Теҙеп һөйләп биргән, ти.
Барыһы ла шатланған,
Зәрҡум батша алдында
Маҡтау алып дапланған.

Шүлгән һарайға ингәс,
Батша урын күрһәткән,
Бик йүнәтләп *, олпатлап,
Таҡ * янына утыртҡан,
Зәрҡумды улым тип,
Ҡәһҡәһәне — ҡустым тип,
Алдап-йолдап таныҡҡан.
Ни теләһә, шу әҙер, —
Ҙур ҡунаҡтай һыйлатҡан,
Бар байлығын күрһәткән;
Һарай ҡыҙҙарын йыйып,
Һылыуҙарын күҙләткән.
Төркөм-төркөм ҡыҙҙарҙың
Бары һайлап ҡуйғандай,
Күҙҙең яуын алырҙай,
Күргәндәр таң ҡалырҙай.
Күмәк ҡыҙҙың эсендә,
Буҙ таштарҙың янында
Бөртөк ятҡан энйеләй,
Күктә балҡып йәмләнгән
Йондоҙҙарҙың айындай,
Һылыуҙарҙың битендә
Айырым торған миңендәй,
Типһән-туғай үләнеп

Йәмләп торған гөләндәй —
Һылыуҙарҙың һылыуы
Айһылыуҙы күргәс тә,
Шүлгән күҙен текәгән,
Һис түҙмәйсе шу ерҙә
Зәрҡумға бы һөйләгән.
Зәрҡум аны һеңлем тип,
Үҙеңде кейәү итәм, тип,
Шүлгәнде у алдаған,
Шүлгән мыңа йән атҡан;
Атама хәҙер әйтәм тип,
Зәрҡум аны йыуатҡан.
Әзрәҡә эште аңлаған,
Алап һалып[49] Ҡот тауға[50],
Бар дейеүҙе йыйнаған.
Айһылыуҙы саҡырып,
Аулаҡ ергә алдырып,
Урланған ҡыҙ икәнен
Һис Шүлгәнгә әйтмәҫкә,
Һарайҙан сығып йөрөмәҫкә,
«Мин әйткәнсә йөрөмәһәң,
Башың өҙөп ашармын,
Ҡәүҙәң утҡа ташлармын»
Тигән һүҙен аңлатҡан,
Айһылыуҙы ҡурҡытҡан.
Данлы туйы буған һуң,
Шүлгән кейәү буған һуң,
Ҡыҙ ҙа һылыу буғанға,
Ҡыҙ ҙа мыны һөйгәнгә,
Шүлгән шуңа мауығып
Һарайға у йотолған,
Бөтә эшен онотҡан...

Берҙә-бер көн Зәрҡумға
Саҡырып алып, Шүлгәнгә
[Хәйләкәр хаким Әзрәҡә]
Самрау батшаның ҡыҙыны,
Булат, Аҡбуҙатыны
Ала торған юлыны;
Аҡбуҙатҡа менгән ир,
Булат ҡылыс тотҡан ир —
Бөтә донъя йөҙөндә
Иң ҙур батыр булыуҙы,
Барын баш эйҙереүҙе
Теҙеп һөйләп аңлатҡан,
Төрлө яҡлап самалап
Ҡул тамырыны тартҡан *.
Әзрәҡә мыны аңлатҡас,
Һомайҙы ил маҡтағас,

Яуға ҡалһа, аҙағы
Дейеү ҙә, бирәм, тигәс,
Шүлгән бармаҡ буған, ти,
Һомайҙы алмаҡ буған, ти.
Зәрҡум, Шүлгән икәүһе
Үҙ-араһы һөйләшеп,
Бер дейеүгә атланып,
Самрау батша иленә
Бергә китмәк буған, ти.

Берҙә-бер көн һарайға
Батша, былар йыйналған
Үҙ-ара сер төйнәгән. —
Былар бер дейеү менгән,
Күҙ асып, күҙ йомғансы,
Шүлгәндәр барып еткән.
Былар дейеүҙән төшкәндәр,
Шунда кәңәш ҡорғандар.
Һүҙ ыңғайы килгәндә,
Зәрҡум һөйләп киткән дә,
Урал турында һүҙ асып,
Былай тиеп әйткән, ти:
— Мынан бик йыраҡ түгел
Ҡәһҡәһә тигән батша бар.
Анда йылан иле бар.
У батшаның ҡулында
Яуға ҡаршы ут буған,
Теләгәндә — һыу буған,
Ел-дауылдар ҡуптарған
Бер хикмәтле таяҡ бар.
Аңламаҫтан-нитмәҫтән,
Аны батша көтмәҫтән,
Бер батыр ир килгән дә,
Урлапмылыр, нисектер,
Шул таяҡты алған да —
Батшаһыны һөргән, ти,
Бөтә илен алған, ти.
«Мин у — Урал батыр!» — тип,
Үҙе батша буған, ти, —
Тип Зәрҡум Шүлгәнгә
Барын һөйләп биргән, ти.
Шүлгән Урал һаулығын
Ишетеүгә шатланған.
Урал өҫтөн булыр тип,
«Мин йөрөнөм, ил гиҙҙем,
Илдә батыр танылдым», —
Тип Урал маҡтаныр,
Илгә ҡайтҡас һөйләнер,
Барына яҡшы күренер», —

Тиеп Шүлгән Уралдан
Бер яғынан көнләшкән.
Аҡбуҙ атҡа менгәндә,
Булат ҡулда буғанда,
Бер ни ҡаршы килмәç, тип
Икәү-ара һөйләшкән.
Шүлгән мән килһә лә,
Серҙәш булып йөрөһә лә:
«Һомайҙы Шүлгән алыр ҙа,
Аҡбуҙатҡа менәр ҙә,
Ҡулға булат тотар ҙа
Беҙҙән өçтөн булыр, тип
Ул да эстән көнләшкән.
Шүлгән мән бер булайым,
Батырлығын күрәйем
Йә үтереп Уралды,
Таяғымды алайым,
Тигәнемде ҡылайым,
Барынан үс алайым», —
Тиеп Зәрҡум уйлаған;
Шуға маҡтап таяҡты
Шүлгәнгә у һөйләгән.

Былар килеп еткәндәр,
Һарайға күҙ һалғандар,
Һарай алды туп-тулы
Ап-аҡ ҡоштар күргәндәр.
Ҡош тыуынан берәүһе
Бы икәүҙе күргән дә
Ситкә айрылып сыҡҡан,
Ҡош тыуына * ҡарата
Оран биргәндәй булған, —
Күҙ асып, күҙ йомғансы
Бары ҡоштар таралған.
Айырылған яңғыҙ ҡош
Быларға күҙ һалған, ти,
Күҙәтепме торған, ти;
Былар яҡын барған, ти,
Һомайҙы атап һорағас,
Өйҙә юҡ у тигән, ти.
Былар һорашып бөтмәгән,
Оҙаҡ ваҡыт үтмәгән,
Ҡош тыуҙары барыһы,
Яңғыҙ торған берәүһе
Ҡош тундарын һалған да
Һылыу ҡыҙға әйләнгән.
Шүлгән күргән барыһын.
Аралағы берәүһен
[Күҙгә элгән дә күҙләгән]

Ни тийәргә белмәгән,
Үҙе үҫеп, ил гиҙеп,
Мындай һылыу күрмәгән.
Йөҙө айҙай балҡыған,
Күкрәктәре ҡабарып,
Һылыу булып ҡалҡыған.
Тирә-яғы, бар ҡыҙ ҙа,
Һарай алды, бар ер ҙә
Шул һылыуҙан йәм алған,
Бары шунан йәнләнгән
Һымаҡ төҫлө тойолған;
Күҙ алдында, бар донъя,
Гүйә, аңа эйелгән!
Һомай тигән ошолор,
Тиеп эстән уйлаған.
Ҡыҙҙар серҙе бирмәгән,
Шикләнгәнен ҡыҙҙарҙың
Бы икәү ҙә һиҙмәгән;
Аралағы яңғыҙы,
Алға сығып бер үҙе,
Кус башлығы — инәләй,
Ҡунаҡ көткән кешеләй:
— Ил аралап йөрөгәнһеҙ,
Һомай ҡыҙҙы белгәнһеҙ,
Аңа төбәп килгәнһеҙ,
Әйҙә, һарайға инегеҙ,
Һомай ҡайтыр, көтөгөҙ,
Бергә ҡунаҡ булығыҙ, —
Тип быларҙы өндәгән;
Һарай ишеген асып,
Ҡунаҡтарҙы ымлаған,
Былар ҙа һүҙ асмаған,
Һомай үҙен әйтмәгән.

Былар һарайға ингән, ти,
Ҙур ҡунаҡтай кәпәйеп,
Былар түргә уҙған, ти.
Аҙ-маҙ ип-һип иткәс тә,
Һарайҙы томан баҫып,
Быларҙың һушы ҡасып,
Һарайҙа шау-шыу тулып,
[Аяҡ аҫтында иҙән]
Ике уртаға ярылып,
Шүлгән, Зәрҡум икеһе
Ер аҫтына осҡандай,
Ямға * ҡолап төшкәндәй,
Үҙен һиҙгәндәй буған.
Тирә-яғын һәрмәгәс,
Бер-берене тапмағас

[Ямда икәнде белгәс],
Быларҙа ҡурҡыу тыуған,
Икеһе лә иҫ йыйғас,
Ары-бире йөрөгөләп,
Тирә-яғын ҡармалап,
Һис сер белмәй алъяғас,
Шүлгән аптырап утырған.
Зәрҡум уйлап тормаған,
Бер йыланға әйләнеп,
Ярыҡ-маҙар юҡмы, тип
Сығарға юл эҙләгән.

Һомай белгән бы серҙе,
Сaҡырып алған бер ҡыҙҙы;
Ямды һыуҙан баҫтырған,
Һалҡын һыуҙы таштырған
[Шүлгән башын аштырған],
Аны һыуҙа йөҙҙөрөп,
Аптырауға ҡалдырған.
Зәрҡум көшөл буған, ти,
Һыуҙа йөҙөп йөрөгән, ти.
Һомай быны башҡарғас,
Шүлгән янына барған, ти.
— Ҡараңғыға осҡан һуң,
Күңелең ҡурҡыу алдымы?
Миңә бысаҡ ҡайраған
Сағың алға килдеме?
Ҡурҡыуыма ҡурҡыуың
Ҡарыу буһын, егетем;
Ҡан көҫәгән, йәш түккән,
Күптәр башына еткән,
Ҡан эсергә уҡталған
Уҫал йөрәгең бөтһөн,
Бәғерле йөрәк үҫһен.
Йөрәк майың ireһен,
Бөтә йәнде үҙендәй
Һөйәрҙәй күңел тыуһын;
Ҡыҙғаныусан йәш йөрәк
Уйыңа башсы булһын.
Шуңа саҡлы бы ерҙә,
Тере көйө шу гүрҙә
Башың ҡаңғырып ятһын.
Үҙенә юлдаш һайларлыҡ,
Яҡшы юлды табарлыҡ,
Илдә даны булырлыҡ
Яңы кеше ҡалырһың,
Яҡшыға юлдаш булырһың,
Йыландарҙан ҡасырһың,
Аны дошман беләрһең!

Тигән һүҙен әйткән дә
Һомай сығып киткән дә *.

**[Уралдың Һомай һарайына барғаны; Йәншишмә һыуын табыу өсөн, Һомай ҡуйған шартты үтәп, уның һеңлеһе Айһылыуҙы табып алып килгәне.]**

Бер ҡыҙ йүгереп килгән, ти,
Берәү килде тигән, ти.
[Уның Урал икәнен]
Ҡыҙ сыҡҡас та, таныған,
Тик Уралға әйтмәгән.
Урал ҡыҙҙы күрһә лә,
Һомайҙыр тип белмәгән.
Һомай яҡынлаған һуң,
Урал күҙен һалған, ти:
Аның усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай,
Ҡәйтәндәр [51] мән биҙәлгән
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпеге үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш
Күҙ алдына тулҡынған;
Бал ҡортондай нәҙек бил
Борғаланып уйнаған;
Гүйә, күптәнге танышы,
Ҡөмөштәй саф тауышлы;
Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан
Бер ҡыҙ күргәс, Урал да
Ни әйтергә белмәгән;
Үҙе күргән — Һомай тип
Уйына ла алмаған.
Бы ҡыҙ оҙаҡ тормаған,
Уралды үҙ артынан
Һарайына ымлаған.
Урал һарайға ингәс,
Иҫән-һаулыҡ һорағас,
Урал ҡайҙа буғанын,
Юлда ниҙәр күргәнен,
Барын теҙеп һөйләгәс,
Ҡыҙ Уралға ҡарата
Былай һүҙен башлаған:
— Йә, егетем, төҫ-башың
Алыҫ илдән күренә,
Беҙҙең яҡҡа килеүҙән
Теләгең барлыҡ беленә.

Һүҙең һөйлә, тыңлайым,
Ҡулдан килһә йомошоңа,
Ярҙамсыңдан булайым.

Урал:

— Үҙем мин йәш буһам да,
Биш ил барын белдем мин:
Берһендә үҙем тыуҙым мин,
Икеһен йөрөп күрҙем мин,
Ҡалған тағы икәүһен
Күрергә тип сыҡтым мин.
Ҡайҙа ғына барһаң да,
Кемде генә күрһәң дә,
Береһе үҙен шаһ тиә,
Икенсеһе баш эйә,
Көслө көсһөҙҙө ейә,
Теләгәнсә ҡан ҡоя.
Исеме бар донъяла,
Үҙе күҙгә күренмәç;
Берәү аңа кәр ҡылмаç *,
Аяғы-ҡулы һис анын
Балға * тотоп йонсомаç;
Арыçлан менеп һунарҙа
Үҙе йәнлек юлламаç;
Үҙ теләген табырға
Үҙе юлдаш эҙләмәç —
Үлем тигән яуыз бар,
Шунан алыр ҡоном бар;
Шуны табып үтереп,
Ил ҡотҡарыр уйым бар.
Һунарлаған сағымда
Ҡулға төшкән бер ҡоштан
Һеҙҙең илдә Үлемдән
Ҡотолорға юл бар тип
Ишеткәйнем мин йәштән.

Һомай:

— Илдә, егет, үлмәçлек,
Үлемгә буй бирмәçлек,
Бик борондан донъяла
Йәшәп килгән яҡшылыҡ.
Инде үҙең теләһәң,
Донъяла һис үлмәçкә
Ҡара ергә кермәçкә —
Минең илдә бумаған,
Аны берәү күрмәгән,

Дейеү батша биләгән
Йәншишмәһе һыуы бар.
Аны барып алырға,
Һиңә ярҙам бирергә,
Теләгең бар ҡылырға
Минең һиңә шартым бар.
Ҡайҙа буһа барырһың,
Үҙең уйлап белерһең;
Йылан илен үткән ир,
Унда һулға сыҡҡан ир *,
Үҙең юлын табырһың.
Минең илдә булмаған,
Ишетеп тә күрмәгән,
Бөтә донъя ҡош төҫөн
Үҙ өҫтөндә биҙәгән
Бер ҡош эҙләп тапһаң һин,
Аны табып бирһәң һин,
Минән ярҙам күрерһең,
Шишмәнән һыу алырһың,
Теләгеңә етерһең.

Урал:

— Мин, алыҫтан ил гиҙеп,
Яман-яҡшыны күреп,
Үлемде табып үлтереп,
Ҡотҡарырға кешене,
Тындырырға барыны
Уйлап сыҡҡан батырмын.
Һиңә ҡошоң табайым,
Һинән ярҙам алайым,
Бүләгеңә шарт итеп,
Мин дә бер һүҙ әйтәйем:
Алтын тейәр йөгөм юҡ,
Энйе тағыр кемем юҡ,
Яҡшынан бүтән уйым юҡ;
Үлемдән бүтән берәүҙән
Юллай торған дауым юҡ.
Миңә биргән бүләгең,
Ил теләген алырға,
Илде байман ҡылырға,
Үлемгә ҡаршы барырға,
Аны тар-мар итергә;
Серәшеп яу асҡанда,
Үлем юлым баҫҡанда,
Ҡан илаған кешенең
Күҙ йәшене һөртөрҙәй,
Миңә юлдаш булырҙай,

Яуҙа ҡорҙаш булырҙай
Бүләк бир, тип һорайым.
Ул бүләгең ни булыр —
Әйтсе, белеп китәйем.

Һомай:

— Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,
Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тауҙан-таштан өркмәҫтәй,
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙенә тиң күрмәҫтәй,
Типһә, тау-таш сорғотоп,
Сапһа, диңгеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта-тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,
Әзрәҡәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Әсәйемдән бирелгән,
Донъялағы йөрәгем —
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем —
Аҡбуҙ толпар [булыр ул].
[Шуны һиңә] бирәйем.
Йөҙөн тут [һис] баҫмаҫтай,
Һис берәү кәр ҡылмаҫтай *
Утҡа ҡаршы — ут булыр,
Һыуға ҡаршы — һыу булыр,
Ен-дейеүҙең барыһын
Үлемендәй ҡурҡытыр,
Ҡуй-һарыҡтай өркөтөр
Булат ҡылыс бирәйем.
Тигәс, Урал күнгән, ти,
Ҡыҙ теләген эҙләргә
Сығып китмәк буған, ти.
Урал ҡунаҡ буған, ти,
Бер нисә көн торған, ти.
Һомай үҙен әйтмәгән,
Шүлгән бикле тимәгән,
Урал тағы һиҙмәгән.
Урал торған, ти, таң мән,
Битен йыуған, ти, һыу мән,
Бер табында утырып,
Тамаҡланған, ти, ҡыҙ мән.
Ҡыҙ теләгән бер ҡошто
Табырға эш ҡушҡан, ти —

Урал юлға сыҡҡан, ти.
Таяҡ алып киткән, ти.
Таяғын ат иткән, ти —
Бик күп көндәр үткән, ти.
Бара торғас, бер саҡта
Тау ураҡкан бер яҡта:
Һайыҫҡан да, ҡоҙғон да
Йән барлығын һиҙмәгән,
Һис бер кеше бумаған,
Дейеү-ен дә у ергә
Килеп аяҡ баҫмаған —
Үркәс-үркәс ҡаяһы,
Төрлө ағас эйәһе *.
Башына күҙең һалһаң,
Юғары тора болоттан,
Бөтә йәмде үҙендә
Һаҡлап килгән электән —
Шундай бер тау күргән, ти;
Болот ярып, үрмәләп,
Тау башына менгән, ти.
Тирә-яҡҡа күҙ һалып,
Оҙаҡ ҡарап торған, ти:
Алыҫтан күҙгә салынған,
Йондоҙҙай булып сағылған
Бер яҡтылыҡ күргән, ти,
Урал [, уйлап тормаҫтан,
Шуға] тоҫҡап киткән, ти.
Барып етеп, ҡараһа,
Әйләндереп күҙ һалһа:
Таш урынына көмөштән
Ситен тәңкә биҙәгән,
Буйындағы сәскә лә
Ҡаты елгә борсолмай,
Шаҙраланып өҫтәре,
Ел дә тейеп тулҡынмай,
Ҡояш нуры төшкәндә
Ем-ем иткән энйеләй
Бер һылыу күл күргән, ти.
Бы күлдең өҫтөндә [ҡош]
Тирәләй ҡош йыйналған,
Бөтә төҫкә биҙәлгән
Бер һылыу ҡош йөҙгәнен
Урал айыра күргән *, ти.
Ҡош һиҙмәҫтән, шу ерҙә
Урал бер ҡош буған, ти,
Ҡош янына барған, ти.
Төҫөн-башын ҡараған,
Таяғы мән арбаған.

Ҡыҙ теләгән ҡош бы, тип,
Урал шундуҡ уйлаған.
Ҡош Уралдан шикләнмәй,
Осмаға ла уҡталмай,
Уралға ҡарай килгән, ти.
Урал, йола белмәгәс,
Ҡошҡа туры * уҡталғас,
Ҡош Уралдан һиҫкәнгән,
Осмаҡ булып уҡталған;
Урал барып тотҡан һуң,
Ҡошто ҡулға алған һуң,
Тағы тапты дошман, тип,
Ҡош ҡайғырып уйланған.
Урал ҡошто күтәреп
Ҡырға сығып барғанда,
Теләгем булды тигәндә,
[Был] ҡош телгә килгән дә:
— Ай, егет, һин туҡта әле,
Миңә үҙең әйт әле:
Дейеүме һин, енме һин? —
Ысын уйың әйт әле?
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Ҡешеләй бы ҡош һөйләгәс,
Урал таңға ҡалған, ти.
Бер аҙ барғас, бер ерҙә,
Шишмә буйы туғайҙа:
Ҡоштоң ниндәй [ҡошлоғон,
Ҡеше булһа,] кемлеген
Урал һорай башлаған,
Ҡош бер аҙ уйланып,
Үҙ алдына һөйләнеп,
Текләп ҡарап торған да:
— Күҙең йомоп, күрмәй тор,
Ҡулың алып ҡанаттан,
Һис еремдән тотмай тор!
Тигәс, Урал уйланған:
«Был ҡош осһа, артынан
Ҡарсыға булып ҡыуарһың,
Һыуға сумһа, артынан
Суртан булып сумарһың», —
Тип таяҡҡа ымлаған,
Ҡош әйткәнсә эшләгән *.
Күп тә үтмәй тағы ла:
— Егет, күҙең ас инде,
Әйтер һүҙең әйт инде!
Тигәс, Урал ҡараһа:
Ҡуңыр һылыу, ҡыйғас ҡаш,
Эйәк-бите уйылған,
Һул битенең уртаһы

Күҙ ҡаралай миңләнгән;
Йүрмә-йүрмә ишелеп,
Ике яҡлап, сикәләп,
Тамсы гөлдәй елберҙәп,
Иң башынан һалдырып,
Оҙон сәсен матурлап,
Өсмә яһап төшөргән *;
Оҙон керпеге аша
Ҡара күҙен йылмайтып,
Бит уймаһын уйнатып,
Көләс йөҙөн көлдөрөп,
Дертләп торған күкрәген
Уралғараҡ ыҡлатып;
Һөйләп киткән шулай тип:
— Ай, егетем, һин былай
Килеп нисек юлыҡтың?
Мында килеп сығарға
Ни бәләгә тарыҡтың?
Ай, егетем, бел шуны:
Ҡарап көлгән йөҙөм дә,
Әйтеп торған һүҙем дә —
Сер сисеү у, егетем.
Мыға саҡлы мин былай
Һиндәй егет күрмәнем,
Дейеү килмәҫ урынға
Һин килер тип белмәнем.
Һыуҙа балыҡ булырҙай,
Күктә йондоҙ булырҙай
Ҡулда көсөм бар ине,
Китәр юлым бар ине.
Һине күргәс, бар уйым —
Ел тараткан болоттай,
Ҡаса торған бар юлым —
Йүгереп бөткән һуҡмаҡтай,
Күҙ алдымдан киттеләр,
Бары юйылып бөттөләр.
Мин бер саҡта ҡыҙ инем,
Иркә үҫкән бала инем, —
Дейеү мине урланы,
Кейәүгә биреп зурланы *,
Кейәүем егет-ир ине,
Бергә оҙаҡ торманы:
Кейәүем тағы юғалды,
Йөрәгемде ҡайғы алды.
Дейеүҙәрҙән ҡастым мин;
Илгә ҡайтһам, атама,
Бөтә тыуған илемә
Яу килер, тип ҡурыҡтым мин.
[Дейеү тағы табыр тип,]

Мине килеп алыр тип,
Тағы ҡайғы һалыр тип,
Һис донъяла бумаған,
Кеше төҫөн белмәгән
Бер ҡош булып остом мин;
Һис бер кеше тапмаҫлыҡ,
Килеп аяҡ баҫмаҫлыҡ
Ошо күлгә килдем мин.
Тигән һүҙен ишеткәс,
Ҡыҙҙың серен аңлағас,
Урал уйын һөйләгән,
Тик бер ҡыҙға ҡош эҙләп
Сыҡҡан уйын әйтмәгән.
«Мин юлымда уңманым:
Эҙләп килгән ҡошомдо
Был күлдә лә тапманым», —
Тиеп Урал уйлаған.
Ҡайтыр өсөн иленә
Ҡыҙға ярҙам итергә
Ниәтләгән ниәтен
Урал ҡыҙға һөйләгән
[Тыңлап бөткәс Уралды, ти,
Ҡыҙ үҙе лә һүҙ алды, ти]:
— Егет, тыңла һүҙемде,
Асыҡ күрҙең йөҙөмдө,
Айһылыу тигән атым бар,
Илде тотҡан атам бар,
Күктең Айы — әсәм бар,
Һөйгәнемә бирерҙәй
Һарысай тигән атым бар, —
Һыу теләһәң, һыу табар,
Яуҙа юлдашың булар,
Егет, һүҙем тыңласы,
Һүҙем ҡырын һалмасы:
Һин эҙләгән у ҡошто
Бы тирәнән тапмаҫһың.
Атам минең ил гиҙгән у,
Күк йөҙөндә осҡан у,
Бөтә ерҙә буған у,
Бар ҡоштарҙы күргән у.
Беҙҙең илгә барайыҡ,
Атайымдан һорайыҡ.
Һин теләгән ҡошоңдо
Атам табып киләр у,
Мине дейеүҙән ҡотҡарһаң,
Теләгәнең бирер у.
Беҙҙең илде хуп күрһәң,
Мине үҙеңә тиң күрһәң,
Әйҙә, беҙгә барайыҡ,

Икәү бергә булайыҡ,
Бергә ғөмөр һөрәйек.

Урал:

— Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Бүләгеңде алмайым,
Илеңдә мин ҡалмайым;
Ысынлап та ҡош буһаң,
Ҡыҙға юрый әйләнһәң,
Һине алып ҡайтайым,
Үҙем белгән һарайға
Һине итеп * бирәйем.
Анда барғас, һөйләрһең,
Үҙ теләгең әйтәрһең,
Теләһәң, ҡош буларһың,
Теләһәң, ҡыҙ буларһың;
Һине алар хурлаһа,
Теләгеңде бирмәһә,
У саҡ һине яҡлармын,
Үҙ илеңә итәрмен *.
Тигәс, ҡыҙ ҙа күнгән, ти,
Яҡшылығын Уралдың
Тел төбөнән белгән, ти.
Ҡош туны[ны] кейгән дә
Бергә китмәк буған, ти.
[Икәүләшеп әлеге]
Бер таяҡҡа менгәндәр,
Былар юлға сыҡҡандар,
Тауҙар ашып киткәндәр —
Күҙ асып, күҙ йомғансы
Былар ҡайтып еткәндәр.
Ҡыҙҙар ҡаршы килгәндәр,
Ҡошто бары ҡосаҡлап,
«Айһылыу!» — тип алғандар.
Урал мыны ишеткәс,
Аптыраған, таң ҡалған.
Айһылыу ҡош туныны
Һалып ҡыҙға тотторған.
— Әйҙә, егет, керәйек:
Һинең ҡайтҡан һарайың —
Минең ҡайтыр һарайым,
Икеһе лә бер икән, —
Тип Уралға әйткән, ти.
Урал тағы бигерәк
Аптырауға ҡалған, ти.
[Аптырауға ҡалһа ла,]
Һомай ҡошто алған, ти.
[Ҡош бер хәбәр һалған, ти]:

Һомай:

— Һай, егетем, егетем,
Батыр егет икәнһең,
Мин һораған ҡошомдо
Дейеүҙән алып килгәнһең, —
Тигәс, Урал аптырап,
Бөтә серҙе һөйләгән:
«Аны алған у күлдә
Дейеү-маҙар күрмәнем.
Барған-йөрөгән юлымда
Һис ауырлыҡ тойманым.
Нисек анда икәнен,
Ҡош тунында йөрөгәнен
Ҡайҙан аны белдең һин,
Минә эҙләргә ҡуштың һин?» —
Тиеп Урал һорағас,

— Дейеү нисек белмәне,
Киткәнеңде күрмәне? —
Тиеп, Һомай Айһылыуға
Аптыраулы һүҙ ҡушҡас,
Һылыу шунда һиҙгән, ти,
Апаһының яңылыш
Уйлағанын белгән, ти.
Дейеүҙәрҙән үҙенең
Ҡасып, күлдә булғанын,
Урал барып шу күлдән
Аны эҙләп тапҡанын —
Барын теҙеп һөйләгән.
Атаһының һарайын,
Аны берһе белмәгән.
Һомай мыны ишеткәс,
Уралдан сер тартмаған:
Үҙе Һомай икәнен,
Үҙе Уралды белгәнен
Барын һөйләп аңлатҡан.
Һомай шунда уҡ атаһын
[Самрау — күк батшаһын]
Бүлмәһенә саҡыртҡан.
Атаһы килеп ингәс тә
Айһылыуға күрешкән;
Күҙ йәш түгеп ҡыҙынан
Бөтә хәлен һорашҡан.
Атаһына [Айһылыу
Сер йәшермәй] Уралдың
Хәлен һөйләп, таныҡан.
Атаһы тыңлап торған да,
Серҙе аңлап белгән дә,

Уртаға һалып үҙ уйын,
Ҡалдырмайынсы һис төйөн,
Айһылыуҙың ҡайтҡанын,
Дейеүҙәрҙән ҡасҡанын,
Ике ҡыҙы, Уралға
Хәҙергә сер тотарға
Тигән һүҙен әйткән, ти.
«Дейеү белһә, яу асар,
Һис уйламаç, ил баçар, —
Тиеп әйтеп үткән, ти.
Айһылыу ҙа йонсоған,
Күп ҡайғыла борсолған,
Әсәһен дә һағынған.
Айға барһын ҡунаҡҡа,
Байман тапһын аулаҡта,
Саҡырырбыҙ кәрәктә», —
Тиеп һүҙен бөткән, ти
Атаһының һүҙенә
Ҡыҙҙары ла күнгән, ти.

Һарайҙа ял иткәс тә,
Бер нисә көн үткәс тә,
Атаһы мән апаһы
Әсәһенән бирелгән
Айһылыуҙың бүләге —
Һары атын саҡыртҡан,
Айһылыуҙы бер төндә
Былар Айға оҙатҡан.

**[Ҡыҙы Һомайҙы, Аҡбуҙатын, булат ҡылысын Уралға бирергә Самрау батшаның риза булғаны; Уралдың Шүлгән менән осрашҡаны, ағаһының яуыз уйлы кеше булып сыҡҡаны; Һомай йыйған майҙанда Шүлгәндең хур булғаны, Уралдың халыҡты хайран ҡалдырғаны]**

Бер нисә көн Урал да
Бәçле ҡунаҡ * буған да,
Берҙә-бер көн таң мән
Йоҡоһонан торған да,
Һомайҙы саҡырып алған, ти:
— Мин әле бик йәш саҡта,
Атам һине атҡанда,
Барыбыҙ ҙа һунар тип,
Һине һырып алғанда,
Муйынына ырмау һалғанда,
Йәнең алҡымға кигәндә,
Ысынлап та белепме,
Йән асыуҙан ҡурҡыпмы,
Һин телеңә кигәйнең:

«Ҡотолорға Үлемдән
Йәншишмә бар», — тигәйнең.
Һинән шуны ишеткәс,
Үлемде тапһаҡ, тотарға,
Илдән башын юярға,
Шишмәнән һыу аларға,
Мәңге йәшәһен ил тип,
Илгә һыуын бирергә
Тигән уйға кигәйнек,
Икәү юлға сыҡҡайныҡ.
Күп ер китеп, сер белгәс,
Юлды икәү бүлгәйнек,
Юл буйында ни барын
Һорашып та белгәйнек.
Ағам китте һул яҡҡа,
Мин тайпылып уң яҡҡа,
Айырылып киткәйнек.
Күп йыл йөрөнөм, ил күрҙем,
Әйткән һүҙең онотмай,
Һеҙҙең илгә боролдом —
Илең аша уҙманым,
Бармайым тип торманым,
Һарайығыҙ алдына
Арыҫланымды бәйләнем.
Һарайыңа ингәндә,
Уйым һөйләп үткәндә,
Арала һүҙ киткәндә,
Үҙ бауырың * эҙләргә
Миңә йомош ҡушҡанда,
Мин дә аны тапҡанда,
Һин бер бүләк әйткәйнең.
Мин эҙләгән Үлемдән,
Һин әйткәйнең телеңдән:
«Ҡотолорға юл табып
Мин бирермен», — тигәйнең.
Аҙаҡ һүҙең әйт, һылыу,
Ни әйтерһең, көтәйем,
Мин ишетеп китәйем.»
Тигән һүҙен ишеткәс,
[Һомай уйға ҡалған, ти]
Атаһына барған, ти,
Атаһына бар уйын
Йәшермәйсе әйткән, ти.
— Һөйһәң, ҡыҙым, барырһың,
Аҡбуҙ атың бирерһең;
Яҡты донъя йөҙөндә
Рәхәт торорһоң, балам,
Уралдай уҡ батырға
Әсә булырһың, балам.

Урал батыр хаҡына
Шүлгәнде лә сығар һин,
Бөтә илде саҡыр һин,
Батыр ирҙе туйла һин,
Һис берәүе ҡалмаһын —
Барын йыйып һыйла һин.
Тигән һүҙен тыңлаған,
Атаһы уйын аңлаған,
Шүлгәнде лә сығарған,
Бөтә илде йыйнаған,
Алҡындырып һыйлаған.
Урал үҙен һөйгәнен
Һомай асыҡ тоймайсы,
Тел төбөнә белмәйсе,
Аҡбуҙатты биреүҙән
Һомай тәүҙә эс тартҡан *.

Шүлгән, Урал — икәүһе
Берен-бере табышҡас,
Ҡөтмәгәндә осрашҡас,
Ике туған шатлығын
[Йәшерә алмай торған, ти],
Юлда күргән барыһын
[Бәйән итмәк булған, ти].
Урал барын һөйләгән.
Шүлгән тыңлап утырған,
Барын уйлап уҙҙырған:
«Урал былай дан алһа,
Атама данлы ҡайтһа,
Батыр булып маҡталыр,
Бары эштә баш булыр,
Минең һүҙҙәр аҫ ҡалыр», —
Тип эсенән көнләшкән.
Шуңа Шүлгән Уралға
Бар серене сисмәгән
(Әзрәҡәлә буғанын,
Мында ниңә килгәнен,
Һис береһен әйтмәгән).
У Уралды үтереп,
Үҙе данлы ир булып,
Һомайҙы ла үҙе алып,
Аҡбуҙатҡа атланып,
Булат ҡылыс ҡулланып,
Дан алыуҙы уйлаған.
Шүлгән асыулы буғанын,
Һәр саҡ һалҡын йөрөгәнен,
Аның шомо барлығын
Урал ҙурға ҡуймаған:
«Тик ябыулы ятҡанға,

Уңайһыҙға ҡалғанға», —
Тиеп кенә уйлаған.

Берҙә-бер көн буғанда,
Шүлгән таңдан торғанда,
Ҡомһарылып, ҡаш төйөп
Утырғанын күргән дә
[Аптыраған, ти, Һомай].
«Батыр иргә арыҫ та * —
Донъялағы ҡырыҫ та *
[Менге булыр алыҫта],
Икәү бергә менгәшеп,
Бер-берене күҙләшеп,
Күләгәләй йөрөрҙәр,
Баҫмалатып киләрҙәр,
Алмашлап тап буларҙар.
Батыр буған ир-егет
Еңмәҫ нәмә бdroarмы?
Батырмын тигән батыр ир
Яуызға юл ҡуярмы?
Утҡа ҡаршы һыу булар ул,
Яуға ҡаршы тау булар;
Үҙенә түгел, барына
Ауырлыҡта юл булар;
Батырҙан ил тарыҡмаҫ,
Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис талыҡмаҫ.
Күккә менәр баҫҡысһыҙ,
Ерҙе асар асҡыһыҙ,
Яҡшынан эскәне — һыу булар,
Ямандан эскәне — ыу булар,» —
Тиеп Урал йыуатҡан.
Һомай һаман ышанмай,
Ысын сергә төшөнмәй,
Ағай-эне икәүҙең
Ҡыланышын күҙәткән.
Алмаш-тилмәш алар мән
Һомай һәр саҡ һөйләшкән,
Бар йолаһын аларҙың
Һомай төпсөп һорашҡан.
Уралды у күргәс тә,
Батырлығын белгәс тә,
Яҡшылығын һиҙгәс тә,
Уралға күңел бәйләгән,
У Уралды һайлаған.
Шүлгән ҡомһоу йөрөгәнгә,
Һаман шиге буғанға;
Ике туған һөйләшеп,

Икәү-ара серләшеп
Утырғанда, Шүлгәндең
Батыр булып, дан алып,
Һытыҡ йөҙөн күргәнгә,
Һомай анан шикләнгән.
Урал ятһа йоҡларға,
Биш көн тотош йоҡлағас,
Шүлгәндән ҡыҙ шикләнгәс,
Ҡыҙҙар ҡуйған һаҡларға.
Шүлгән ятҡан бер яҡта,
Айырымланған торлаҡта.
Шүлгән, уйы сыҡмағас.
Һомай һис юл ҡуймағас,
Берҙә-бер көн торғанда,
Уралды у күргән дә
[Әйтер һүҙен әйткән, ти],
Шүлгән былай һөйләгән.

Ш ү л г ә н:

— Һин күп ерҙә буғанһың,
Күп ил йөрөп күргәнһең,
Батыр булып, дан алып,
Инде мында килгәнһең,
Самрауҙың иленә
Килеп аяҡ баҫҡанһың,
Инде нимә уйлайһың?
Беҙҙең теләк ошонда
Икәнен асыҡ белмәйһең.
Самрауға яу асайыҡ,
Аҡбуҙатын алайыҡ,
Беребеҙ таяҡ тотайыҡ,
Беребеҙ Аҡбуҙ менәйек;
Бөтә илдә баш булып,
Барыһыны мат ҡурып *,
Көслө батша булайыҡ.
Һин таяғың бир миңә, —
Ошо илде емерәйем,
Самрау ҡоштоң ҡыҙыны
Үҙемә тартып алайым,
Мин бит — туған ағайың,
Аҡбуҙатың менәйем,
Мин дә данлы булайым!

У р а л:

— Былар һис тә кешегә
Бер яуызлыҡ итмәгән,
Үтереп, ҡан ҡоймаған,
Кешегә дошман бумаған.

Беҙ икәүләп барайыҡ,
Дейеү илен алайыҡ,
Анда тотҡон булғандың
Барына юл асайыҡ.
Ҡыҙ алырға уйлаһаң,
Аҡбуҙатын һайлаһаң,
Ҡыҙы һөйһә, ҡыҙын ал,
Бүләк итһә, атын ал.
Ҡыҙ алам тип, яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Бушҡа тиктәҫ ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ;
Ҡан ҡойоусы даны алып,
Илгә яман ҡайтмайыҡ.
Әзрәҡәне еңәйек,
Шишмәнән һыу алайыҡ,
Үлгәнгә йән бирәйек,
Кешеләрҙе донъяла
Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ!
Тигәс, Шүлгән уйланған,
Төрлө юлдар һайлаған.

Берҙә-бер көн аулаҡта,
Һомай буған торлаҡта,
Шүлгән барған янына,
Ҡулын һалған яурынына.
Шунда һүҙен асҡан, ти,
Һөйөү уйын әйткән, ти.

Ш ү л г ә н:

— Донъялағы донъяла
Ҡайтты тинең һин үҙең;
Арабыҙҙа яман уй,
Ҡанға батыр яман туй
Арабыҙҙа булмаҫ у,
Тип уйланым мин үҙем.
Дуҫлыҡҡа күңел береккән.
Айырылмаҫтай ереккән,
Беҙ ҙә — илдә ҙур батыр,
Йөрәгебеҙ сыныҡҡан.
Һин тыңлаһаң, әйтәйем,
Бер серем бар, һөйләйем,
Тел өҫтөнә тел ҡуймай *
Яуабыңды көтәйем.
Инде һүҙем алмаһаң,
Асыҡ яуап бирмәһән,
Үҙ ярағым ҡурәйем,
Үҙ юлымда булайым.

Һарайыңа килгәс тә,
Күҙ алдымда күргәс тә,
Күңелемде арбаның,
Күҙең миңә һалманың.
Мине әллә таныпмы,
Ужарымды * иҫкә алып,
Шуңа минән ҡурҡыпмы,
Әллә мине һынапмы,
Ҡараңғыға бикләнең.
Һөйләшкән һуң, һөйөпмө,
Әллә Урал килепме,
Ҡараңғынан сығарҙың,
Һарайыңа саҡырҙың.
Асыҡ йөҙөң күргәс тә,
Барын хәҙер оноттом;
Һиндәй һылыу бумаҫ тип,
Эҙләп һис кем тапмаҫ тип;
Миңә ҡулын бирерме,
Үҙе һөйөп килерме? —
Тип күңелем елкеттем.
Теләһәң, бергә булайым,
Һөйһәң, һине алайым,
Ҡарыулашһаң тағы ла,
Үҙ уйымды ҡылайым.
Тигән һүҙен ишеткәс
[Һомай серен сисмәгән],
Ҡырҡа яуап бирмәгән;
Һомай аҡыллы буған,
Уралды мин һөйәм тип
Тағы серен әйтмәгән.

Һ о м а й:

— Егет, һүҙең тыңланым,
Эс серенде аңланым,
Шулайҙыр тип уйланым.
Мин бер батша ҡыҙымын,
Ҡыҙҙарының ҙурымын.
Егет, уйың уй буһын,
Теләгеңә юл буһын,
Бер ҙур майҙан ҡорайым,
Батырлығың һынайым,
Шунда даның күрәйем.
Буҙ атым бар йыраҡта,
Әсәм биргән бүләккә,
Майҙаныма шул киләр,
Батыр буһаң, ул беләр.
Майҙанымда Буҙатты
Ҡулыңа алып менәлһәң,

Булатыны алалһаң,
Шундай батыр булалһаң,
Буҙым бүләк ҡылайым;
Атама әйтеп туй яһап,
Үҙеңә йәр булайым.
Тип яуабын биргән, ти.
Шүлгән мыға күнгән, ти.

Һомай майҙан йыйған, ти,
Аҡбуҙатын саҡырған,
Күк күкерәп, шау килеп,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,
Тау-таш, ҡая аҡтарып,
Бөтә йәнгә шом һалып;
Йондоҙ һымаҡ атылып,
[Аҡбуҙ толпар атлығып,
Күктән килеп төшкән, ти,
Һомай һылыу алдына
Килеп башын эйгән, ти.
Аҡбуҙ шунда туҡтаған,
Бөтә майҙан һоҡланған.
Һыртына эйәр һалынған, ти,
Эйәренең башына
Алмас ҡылыс тағылған;
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Башкүнәктәй * танаулы,
Һарымһаҡтай аҙаулы *;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;
Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Муйындары бер ҡолас.
Ҡыйғыр, бөркөт ҡабаҡлы;
Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап бышҡырыр;
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Алан-йолан ҡаранып;
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Ауыҙлыҡ сәйнәп, ярһыуҙан
Ауыҙҙарын күпсетер;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр;
Осраған бер кешене
Хайран итер, уйлатыр, —

Бына ошондай Аҡбуҙ у,
Күҙ күрмәгән ят буҙ у][52].

Һомай һыпырып башынан,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Күктә торҙоң йондоҙҙай,
Батыр көтөп, зарығып.
Кеше ҡаны бумаған
Батырҙарҙы ырғытып;
Мин һайлаған батырҙың
Береһен һанға алмаған,
Үҙең һайлап батырың,
Миңә табып бирмәнең.
Мына килде батырҙар,
Һине көтөп ятырҙар.
Батырлығын һайлапмы,
Матурлығын һайлапмы,
Берһен үҙең алаһың,
Үҙеңә юлдаш ҡылаһың, —
Һиңә иптәш ир булыр,
Миңә һөйгән йәр булыр.

Аҡбуҙат:

— Матур миңә дан бумаç *,
Өçтөмдә йөрөр йән бумаç.
Шаулап болот ҡалыҡҡанда,
Ҡойон-дауыл сыҡҡанда,
Күктә ҡош та осалыр,
Ҡамғаҡ осһа, яр табып,
Уҙа елдән боçа алыр.
Мин сапҡанда — ел ҡубар,
Таш та ятып түҙәлмәç,
Һыу тулҡыныр, ҡайнашыр,
Һыуҙа балыҡ йөҙәлмәç.
Ҡаф тауына[53] типһәм мин,
Он-талҡандай ыуалыр,
Тирә-яҡта йән буһа,
Бере ҡалмай, ҡыйралыр.
Эйәремдең ҡашында
Булат-алмас ҡылысым
(Күп йыл аны һуғарған
Үҙ янында ҡояшым)
Бөтә донъя ирерлек
Утҡа һалһаң, — иремәç,
Донъялағы бар нигә *
Йөҙө тейеп тубарылмаç *;
Етмеш батман[54] ауырлыҡ
Күтәреп күккә сөймәгән,
Өс бармағы осонда
Төшөрмәйсе тотмаған

Ҡеше — батыр ир булмаҫ,
Аны һелтәп сабалмаҫ.
Шундай батыр бумаһа,
Миңә юлдаш булалмаҫ,
Мин сапҡанда, у батыр
Миндә утырып түҙә алмаҫ;
Батыр булам тигән ир,
Мине алам тигән ир
Ҡөсөн шулай һынаһын,
Анан мине менәргә
Баҙнат итеп уйлаһын.
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Бары эште аңлағас,
Тау битенә барғандар,
Етмеш батман ауырлыҡ
Бер-ҙур таш [ты] тапҡандар,
Бөтә ҡоштар килгәндәр,
Ҡуптарырға буғандар.
Ай тартҡандар, ти, былар,
Йыл тартҡандар, ти, былар —
Таш урындан ҡупмаған:
Бары аптырап, ташлаған.
Һомай Шүлгәнгә ҡарап:
— Алып ташла! — тигән, ти.
Шүлгән барып уҡталған,
Тирә-яҡлап һәрмәнгән,
Ҡутарырға серәнгән,
Ҡөсөргәнеп маташҡан,
Ҡөсөн һалып айҡашҡан,
Баҫҡан ерҙә тубыҡтан
Шүлгән ергә батҡан, ти.
Ай айҡашҡан, ти, Шүлгән,
Йыл айҡашҡан, ти, Шүлгән —
Таш һис ҡуҙғалышмаған,
Шүлгән, сәсәп, алъяған,
Күтәрәлмәй ташлаған.
Һомай Уралға ҡарап:
— Күтәреп ҡара! — тигән, ти.
Урал ташҡа барған, ти,
Ағаһы хурға ҡалғанға
Урал асыуланған, ти,
Йоҙроҡлап һуҡҡан, ти, —
Таш тәгәрәп киткән, ти.
Урал алған ҡулына,
Ташты атҡан һауаға, —
Таш киткән, ти, атылып,
Күрер күҙҙән юғалып.
Бары күккә баҡҡан, ти,
Таш төшөрөн көткән, ти.

Иртә ине, төш буған,
Төш тә ауып, кис буған —
Күктә тауыш шаулаған.
Таш килгәнде күргәнгә,
Төшһә, вайран буғанға,
Бөтә ҡош-ҡорт илаған:
Зинһар, ергә төшмәһен, тип,
Илде харап итмәһен,
Тип, барыһы Уралдан
Ялбарышып һораған.
Һыңар ҡулын һуҙған, ти, —
Урал ташты тотҡан, ти;
«Ҡайһы яҡта Әзрәҡә?» —
Тип һорашып алған, ти;
Әзрәҡәнең иленә
Урал ташты атҡан, ти.
Бөтәһе лә ҡарашҡан,
Аптырашып уйлашҡан,
Ҡайҙа барып төшөр тип
Үҙ-араһы һөйләшкән.
Буҙат килеп, шунан һуң,
Уралға баш эйгән, ти:
— Мин — һинеке, батыр! — тип,
Уға буйын биргән, ти.
Самрау батша шу саҡта
Үҙе килеп сыҡҡан, ти,
Уралға ҡул биргән, ти:
— Ҡейәүем бул! — тигән, ти.

Бөтә илен йыйғандар,
Былар ҙур туй ҡорғандар,
Ил батыры бул һин, тип
Уралға дан биргәндәр.
Шүлгән мыны күргән һуң,
Урал ҙур дан алған һуң,
Шүлгән мыңа түҙмәгән,
Эсенән бик һыҙланған.
Урал аны ҡыҙғанған,
Айһылыуҙы димләргә,
Шүлгәнгә аны бирергә
Һомай, Урал уйлашҡан,
Самрауға аңлатып,
Өсәү-ара һөйләшкән.
Айһылыуҙы ҡайтартып,
Тағы илде саҡыртып,
Айһылыуҙы бирергә,
Шүлгәнгә туй яһарға
Самрау ҙа күнгән, ти:

— Башҡарайыҡ бы туйҙы,
Аман булыр, — тигән, ти.
Һомай туйы барғанда,
Уйын-көлкө буғанда,
Ер тетрәп киткән, ти,
[Бары] аптырап киткән, ти.
Төрлө уйға сумғандар,
Бы ни булар? — тигәндәр.
Ҡараһалар: күк йөҙөн
Ҡып-ҡыҙыл ут алған, ти;
Барыһы ла тағы ла
Аптырауға ҡалған, ти.
Һис кем мыны аңламай,
Ни тип әйтергә белмәй,
Шулай алйып торғанда,
Дейеү микән бы, тейеп
Бары шомға ҡалғанда,
Күктән, сыр-сыу илаулап,
Берәү төшөп килә, ти,
Бары ҡарап тора, ти.
Ҡара көйгән ялҡынды,
Күктәге ут-тулҡынды
Тотоп алған, ти, Урал.
Ҡарағандар, ти, былар:
Айһылыу ҡыҙ буған, ти,
Ҡайтып килгән сағында
Ялҡын сорнап алған, ти.
— Һауаға таш атҡанын
Ҡарап торҙом күктә мин,
Ташты буйға атҡанын
Тағы күрҙем күктә мин.
У таш диңгеҙ ашаға
Соргап китте йыраҡҡа,
Әзрәҡәнең иленә
Барып төштө бер саҡта.
Ерҙе ярҙы уртаға,
Ялҡын сыҡты һауаға;
Ялҡын мине ялманы,
Һис тәҡәтем ҡалманы,
Һушым китеп йығылдым.
Саҡ-саҡ йыйып һушымды,
Былай таба боролдом.
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бары мыңа шашынғас;
«Әзрәҡәгә шау һалды!» —
Тип Самрау шатланған.
Шүлгән мыны белгән, ти,
Айһылыуҙы күргән һуң,
Әзрәҡәнең Шүлгәнгә

Ҡыҙым тиеп кәләшкә
Биргән ҡыҙы Айһылыу
Икәнен һиҙенгән һуң:
«Дейеү ҡыҙым тигәне,
Үҙ ҡыҙым, тип биргәне —
Барыһы ла буш икән», —
Тиеп Шүлгән уйлаған.
— Дейеү мине япты, — тип, —
Мин дә анан ҡастым, — тип,
Шүлгән барын алдаған,
Айһылыу мыңа ышанған.
Һомай күргәс Шүлгәнде,
Йылан [мән] икәү килгәнде,
Һомайҙы йылан алам тип,
Һәр саҡ һорап йөр(ө)гәнде —
Һомай белгәс, һиҫкәнгән,
Һомай мынан шикләнгән.
Ике батыр кейәүем
Ил өҫтөндә терәгем
Булыр тиеп, Самрау
Үҙ эсенән шатланған.

**[Серле таяҡ ярҙамы менән туфан күтәртеп, Шүлгәндең халыҡты ҡырырға маташҡаны, Зәрҡум менән икәүләп дейеү батшаһы Әзрәҡәгә ҡасҡаны; Уралдың Әзрәҡәне, батша дейеүҙәрен тураҡлағаны, шулар емтегенән тауҙар яһағаны]**

Һарайға Һомай ҡайтҡас,
Зәрҡум янына төшкәс,
Шүлгән мынан шомланған.
«Зәрҡум серҙе асыр, — тип, —
Миңә бәлә тағыр, — тип, —
Нисек буһа, юл табып,
Урал таяғын алып,
Бары һыуҙан баҫтырып,
Ҡыран-яран итәргә;
Аҡбуҙатҡа менәргә,
Һомайҙы ла алырға,
Әзрәҡәгә китәргә», —
Тиеп Шүлгән уйлаған.
Шул урында Уралға
Былай тиеп һөйләгән:
— Мин дә бер дан табайым,
Әзрәҡәгә барайым,
Илен баҫып алайым, —
Тип таяғын һораған.
— Икәү бергә барайыҡ,
Бергә барып ҡарайыҡ, —
Тиеп Урал ҡараған,

Шүлгән мыңа күнмәгән,
Урал таяҡты биргән.
Һомай ямдан сыҡҡансы,
Зәрҡум мән һөйләшеп,
Бөтә серҙе белгәнсе,
Шүлгән, таяҡ алғас та,
Һомайҙы ла көтмәйсе,
Айһылыуҙы күрмәйсе,
Самрауға әйтмәйсе,
Ҡырға сыға һалған да,
Таяҡты бер һуҡҡан да,
Барын һыуҙан баҫтырған,
Бөтәһен дә шу саҡта
Аптырауға ҡалдырған.
Зәрҡум мыны күргәс тә,
Ҙур бер балыҡ буған да,
Янына барған Һомайҙы
Шу урында ҡарпыған.
Зәрҡум ҡыҙын ҡарпығас,
Күктә Ҡояш тотолған,
Аҡбуҙатҡа белдергән,
Аҡбуҙ дарьяға сумған,
Дарья гөрләп ҡайнаған.
Һомайҙың да юҡлығын
Барыһы ла аңлаған.
Аҡбуҙ дарьяны быуғас,
Зәрҡумға юл булмағас,
Һомайҙы у ебәргән,
Зәрҡум үҙе тотолмай,
Ҡаса һалып өлгөргән.
Һомай кире ҡайтҡан һуң,
Бөтә серҙе әйткән һуң,
Урал эште аңлаған,
Дошман булды ағам, тип
Үҙ эсенән уйлаған.
Бөрөккән һыуы ҡороғас,
Зәрҡум барып ҡушылғас,
Аҡбуҙатҡа ҡаршы
Таяҡ көсө етмәгәс,
Зәрҡум, Шүлгән киткән, ти,
Әзрәкәгә еткән, ти,
Бөтә серҙе әйткән, ти.
Әзрәкә бик ҡайғырған,
Бар дейеүҙе йыйҙырған,
Һарайға һаҡ ҡуйҙырған.
Ҡәһҡәһә мән Шүлгәнде,
Зәрҡум дүрт-биш дейеүҙе
Ғәскәренә баш ҡылған.
Күктә ҡоштар осмаҫлыҡ,

Ерҙә кеше йөрмәçлек,
Ерҙе һыу мән ҡапларға,
Күкте ут мән ҡапларға
Бар дейеүгә бойорған.

Берҙә-бер көн бар ерҙә
Күк-күмгәк һыу эркелгән,
Күк йөҙөндә ҡып-ҡыҙыл
Ялҡынлы ут бөркөлгән.
Күктә ҡош-ҡорт осалмай,
Ерҙә бер йән торалмай,
Аптыраған, алйыған;
Ҡошо-ҡорто, йәнлеге
Йылан-батша ерендә,
Бейлек ҡорған илендә.
Кешеләрҙең бейлеге
Бары бергә йыйылған,
Уралға килеп ялбарған.
Урал ҡарап ҡалмаған,
Ерҙе басҡан һыуҙан да,
Күк ҡаплаған уттан да
Урал ҡурҡып тормаған, —
Урал менгән Аҡбуҙын,
Ҡулына алған булатын,
Дейеүҙәргә ҡаршы
Ҡанлы һуғыш, яу асҡан.

Ай һуғышҡан, ти, Урал,
Йыл һуғышҡан, ти, Урал,
Утҡа өтәргә бирмәгән, —
Ҡайыҡ яһап бар кеше
Һыуға батып үлмәгән [55].
Урал аяуһыҙ һуғышып,
Дейеүҙәрҙе ҡырған, ти;
Шул саҡлы улар үлгән, ти, —
Киң диңгеҙҙең өҫтөндә
Тау барлыҡҡа килгән, ти.
Аҡбуҙ һыуҙы йырған, ти,
Юлы ҡалҡып ҡалған, ти;
Урал барған юлдарҙан
Халыҡ эйәреп барған, ти.
Көн һуғышҡан, ти, Урал,
Төн һуғышҡан, ти, Урал.
Ҡаты яуы барғанда,
Дейеүҙәрҙе ҡырғанда,
Әзрәҡәгә тап булып,
Икәүһе ҡаршы тороп,
Ҡылысҡа ҡылыс килеп

Һуғышҡандар, ти, былар,
Алышҡандар, ти, былар.
Әзрәҡә сабып ҡараған,
Ут та бөркөп ҡараған;
Уралды у сапҡанда
Күк күкерәп торған, ти;
Уралға ут бөрөккәндә
Һыуҙар ҡайнап торған, ти.
Урал унан үлмәгән,
Һушынан да таймаған,
Булатыны алған да,
Әзрәҡәне сапҡан да —
Ҡылыс диңгеҙгә сумған,
Ер һелкенгәндәй буған:
Әзрәҡә һушһыҙ йығылған,
Имәнес ҙур кәүҙәһе
Һыуҙы урталай бүлгән;
Халыҡҡа менеп торарға,
Йәйерәп хәл йыярға
Ҙур бер ямаҺ тау [56] буған.
Урал алға сапҡан, ти,
Аты диңгеҙ ярған, ти;
Аты барған урында
Һыу алмаҫлыҡ юл булып
Ҙур тау ҡалҡа барған, ти;
Һыу эсенән бары халыҡ
Шунда сыға барған, ти.

**[Уралдың Ҡатил батша ҡыҙынан тыуған Яйыҡ атлы, Гөлөстандан — Нөгөш, Һомайҙан — Иҙел атлы өс улы мән Шүлгәндең Ай ҡыҙы Айһылыуҙан тыуған Һаҡмар атлы улының Уралға килгәне, оло батырға тоғро юлдаш, яуҙа таҫыллы ҡулдаш булып, яуыз йәндәрҙе еңгәне; Урал менән Шүлгәндең яҫҡышып алышҡаны]**

Урал күп йыл һуғышҡан,
Күп дейеүҙәрҙе ҡырған,
[Шул мәлғүндәр кәүҙәһенән]
Күп тау барлыҡҡа килгән;
Урал яуға сыҡҡанда
Яңы тыуған балалар ҙа
Ат менерҙәй ир буған.
Урал барған ер буйлап,
Һыҙылып ятҡан тау буйлап
Яҡшы толпар атланған
Яу батырҙай ҡораллы
Дүрт йәш батыр килгәндәр,
Килеп сәләм биргәндәр.

Беренсеһе:

— Ҡатил батша ҡыҙынан
Һинән тыуған улыңдыр;
Һигеҙ йәштә ат мендем,
Ил аралап күп йөрҙөм *,
Бер ерҙә бер ҡан күрҙем —
Үҙе ергә һеңмәйҙер,
Үҙен ҡоҙғон эсмәйҙер;
Аҡһаҡалдар, ҡоҙғондар
Көн дә килеп еҫкәйҙер.
Әсәмә ҡайтып һөйләнем,
Бар серене һораным;
Әсәм миңә әйтмәне,
Утырып үкһеп иланы,
Ни әйтергә белмәнем,
Аптыраным, алйыным,
Һис серене белмәнем.
Ил аралап күп йөрҙөм,
Күп кешеләрҙе күрҙем,
Йәшен-ҡартын осраттым,
Ҡан турында һораштым.
Берһе асыҡ әйтмәне,
Былай тиеп һөйләне:
«Атаң беҙгә тәңреләй [57]
Ярҙам итте, балаҡай.
Атаң хаҡын һаҡлайбыҙ,
Әсәң хәтерен һаҡлайбыҙ.
Һин — атаңдан ҡот йыйған,
Һин — әсәңдән һөт имгән,
Аларға уртаҡ бала һин,
Беҙгә дана * бала һин.
Әсәңдән үтеп, балаға
Уртаҡ серен әйтмәбеҙ:
Атаң ҡәҙере хаҡына
Әсәңә ант иткәнбеҙ.
Бар, балаҡай, ҡайт өйгә,
Әсәңдән һорап күр, бала,
Әсәң әйтһә бар серен,
Үҙең уйлап бел, бала», —
Тигәс, ҡайттым өйөмә,
Тағы барҙым әсәмә,
Әсәм һис тә әйтмәне,
Минән серен йәлләне.
Мин утырып иланым, —
Ул һаман да әйтмәне,
Урын һалып ятҡырҙы,
Йоҡлатырға бәпләне.
Мин дә һүҙен тыңланым,

Мин йоҡлаған булайым,
Ни һөйләр, тип уйланым.
Мине йоҡлай типмелер,
Әллә онотопмолыр, —
Әсәм үкһеп иланы, —
Башын баҫып уйланды,
Ошолай тиеп һөйләнде:
«Уралым китте — юғалды,
Ҡабат ҡайтып килмәйҙер;
Улы етте — ат менде,
Аны атаһы белмәйҙер.
Атаһындай тыуғандыр,
Йөрәге ҡуш буғандыр.
Яуыз атам ҡандары
Әле шиңмәй яталыр,
Бала күреп ҡайта ла,
Һорап йәнгә тейәлер;
Инде нисек итәйем,
Әйтмәй нисек түҙәйем?
Әйтһәм, серҙе белер у,
Атаһыны эҙләр у,
Башын ситкә аҙҙырыр,
Мине яңғыҙ ҡалдырыр», —
Тип әсәйем зарланғас,
Мин дә торҙом, таң атҡас.
Ҡан янына барҙым мин,
Ҡанды урап йөрҙөм мин:
«Эй һеҙ ҡандар — ҡан икән,
Атам ҡойған ҡан икән;
Атам Урал килгәндә,
Яу асҡандар һеҙ икән,
Батыр ҡулы тейгәнгә,
Һыуынмаймы ҡанығыҙ?
Ҡаның бысраҡ буғанға,
Ҡоҙғон да эсмәй, ер йотмай,
Күпсеп ята ҡанығыҙ», —
Тигән һүҙем әйткәйнем —
Ҡанлы бы күл ҡайнаны;
Яман тауыш шауланы,
Ҡан күленән ситкәрәк
Бер аҡ ташҡа сәсрәгәс,
Ҡан ҡыймылдай башланы,
Серҙе һөйләй башланы:
«Оло бабаң Ҡатилдың
Ҡоллап алған дүрт батыр,
Бабаң ҡушҡас, яу астыҡ,
Яуыз ҡанға олғаштыҡ;
Ер ҙә эсмәй ҡаныбыҙ,
Көн киптермәй ҡаныбыҙ,

Ҡоҙғондарҙан һорайбыҙ,
Алар ҙа эсмәй ҡаныбыҙ,
Урал атаңа бар әле,
Беҙҙең сәләм * әйт әле:
Сара тапһын, терелтһен,
Үҙеңә юлдаш булырлыҡ
Яуға сабыр ир итһен», —
Тигәс, серҙе белдем мин,
Әсәмә һөйләп бирҙем мин.
Әсәм уйлап торҙо ла,
Тауға ҡарай барҙы ла,
Ҡоҙғондарҙы йыйҙы ла,
Бер ҡоҙғондо оҙатты,
Һәр көн сығып күҙәтте.
Бер нисә көн уҙғас та,
Ҡоҙғоно килде шау мән,
Ауыҙы тулы һыу мән.
Әсәм ҡанға түкөрттө, —
Барыһын да терелтте.
Дүрт батырға ҡарата
«Атамда хур буһағыҙ,
Анан этлек күрһәгеҙ,
Уралға дуҫ булһағыҙ,
Атайым мән дуҫтарын
Донъянан юҡ итегеҙ;
Улым мән Уралды
Эҙләй бергә китегеҙ,
Барып сәләм әйтегеҙ...»
Тигән һүҙен әйткәйне,
Батырҙар ер ҡаҙҙылар,
Барыһын терелә́й күмделәр.
Дүрт батырҙы эйәртеп,
Атам — Урал икән, тип,
Урал улы — Яйыҡ, тип
Һине эҙләп килдем мин,
Һиңә ярҙам итергә
Билем биштән быуҙым мин.

Икенсеһе:

— Минең әсәм — Гөлөстан,
Мин алтыға еткәндә,
Йылап, Шүлгән ҡабатлап
Илде талай килгәндә,
Бар кешенең ҡото осоп,
Илдән ҡасып киткәндә,
Әсәм һине уйлаған,
Шу ҡайғынан ҡалғыған *.
Аяғына баҫалмай,

Урынында ятҡанда,
Илдә йылан яу асты,
Бөтә ерҙе һыу баҫты.
Балаһына, ҡартына
Ҡайыҡ яһап барына,
Барын тейәп ҡайыҡҡа,
Яңғыҙ үҙем яу астым.
Яуҙа илде бирмәгәс,
Һыуҙа берәү батмағас,
Үҙем йәш бер балалай
Күҙҙәренә сағылғас,
Зәрҡум килеп туҡталды,
Ҡылыс алып уҡталды.
Мин дә ҡарап торманым,
Балаһынып ҡалманым:
Ҡылыс алып айҡаштым,
Аңа һис көс бирмәнем,
У һуҡҡанда йығылмай,
Батырҙарҙай сайҡаштым.
Зәрҡум татауранғас *,
Аны яҡлап дейеүҙәр
Тағы ла өҫтәлеп уҡталғас,
Аңа ла көс бирмәнем,
Дейеүен дә, Зәрҡумды
Быуын-быуын тураным.
Хәлһеҙләнгән көйө тороп,
Әсәм килеп ҡул һалды,
Йәшләндереп күҙҙәрен
Былай тиеп һөйләнде:
«Атаң — Урал батырым,
Анан тыуған Нөгөшөм,
Батыр булып тыуғаның,
Атаңа ҡулдаш буғаның.
Мен толпарға һин, балам,
Атаңа юлдаш бул, балам!» —
[Шулай] тигәс... һөйҙө лә,
Толпар тотоп бирҙе лә
Миңә юлды өйрәтте,
Мине яуға оҙатты.

Өсөнсөһө:

— Минең әсәм — Һомайҙыр
Көн дә күккә менә лә
Нимәнелер тыңлайҙыр.
«Ай, Уралым, нишләйһең?
Мин янамын, белмәйһең.
Дейеү-ендәр тупланды,
Бары бергә йопланды, —

Ил ҡаплаған диңгеҙҙе
Нисек йөҙөп сығарһың?
Ҡан аулаған дейеүҙе
Нисек еңеп сығарһың?» —
Тип аһ ороп ялбарҙы,
Үҙ алдына зарланды.
Миңә теклəп торҙо ла,
Бер көрһөнөп алды ла:
«Балам, иртә тыуһаңсы,
Ат менәрлек буһаңсы,
Күп йыл яуҙа йонсоған
Атаңа терәк булһаңсы!» —
Тип, мине [ул] бәпләйҙер,
Үҙе һыҡтап илайҙыр;
Мине бала типмелер,
Миңә серен әйтмәйҙер.
Төндә икәү ята инек,
Берәү ишеккә һуҡты,
Ишек селпәрә килде, —
Өйгә бер дейеү керҙе,
Әсәмә ҡулын һуҙҙы.
«Илгә ҡыран һалғандың,
Илде тар-мар ҡылғандың,
Таш аттырып ҡая-тауға,
Дейеүгә ут һалғандың
Йән һөйгәне Һомаймы?
Уралға Буҙат биреп,
Тау ярҙырған Һомаймы?
Булат ҡылыс тотторол,
Бар дейеүҙе ҡырҙырып,
Байман тапҡан Һомаймы?
Хәҙер башың киҫәмен,
Киҫеп ҡаның эсәмен;
Ҡәүҙәң утҡа атамын,
Башың ташлап Уралға,
Аны һалып ҡайғыға,
Ярты көсөн аламын!» —
Тип әсәмә уҡталды,
Мине күргәс, туҡталды:
«Урал ҡотонан тыуған
Батыр бала түгелме?» —
Тиеп үҙе һөйләнде.
Әсәм бер һүҙ әйтәлмәй,
Шомға ҡалып уйланды,
Йәшләндереп күҙҙәрен
Анан ҡаты шикләнде.
Үҙем бала тимәнем,
Һис ни уйлап торманым,
Дейеүгә мин ташландым —

Бер башынан ут сәсте,
Бер башынан ыу сәсте.
Ул бер алды, мин — алдым,
Өҫтөнә менеп атландым.
Ҡулымда һуҡҡы юҡ ине,
Тас яланғас ҡул ине;
Шулай ҙа көс бирмәнем,
Дейеүгә юл ҡуймаһым,
Тубарлата башланым *:
Ҡыҫып алдым муйынынан,
Ҡан бөркөттөм ауыҙынан,
Тағы өҫтәп бер һуҡтым, —
Албырғаны, ҡаҡшаны,
Баҫыр хәле ҡалманы.
Тағы ынтылып бер һуҡтым —
Тау ҡолатҡандай иттем.
Дейеү ятып йән бирҙе,
Һарай эсе ҡан тулды;
Әсәм билдән ҡан кисеп,
Һыуһаның, тип һыу бирҙе,
«Батырҙан батыр тыуғанһың,
Атаңдай батыр буғанһың;
Ҡәүҙәң бала буһа ла,
Йөрәгең йәш буһа ла,
Инде үҫеп еткәнһең.
Атаң яңғыҙ тилмерә,
Ауыр көндәр кисерә;
Атаң яңғыҙ бумаһын,
Дошман яуы еңмәһен,
Бар атаңа, юлдаш бул,
Яуға сабыр ҡулдаш бул», —
Тиеп әсәм димләгән,
Атаһыны эҙләгән
Иҙел тигән улың мин,
Һиңә төбәп килдем мин.

Д ү р т е н с е һ е:

— Минең әсәм — Айһылыу,
Атам Шүлгән буғандыр,
Һиңә туған буғандыр,
Дейеүҙәр мән киткәндер,
Аҙаҡ күп ҡан ҡойғандыр;
Яҡшыға дошман буғандыр,
Әсәм барып хур буған,
Шу саҡ унан мин тыуҙым,
Ҡайғыһынан һары алған.
Әсәм оҙаҡ түҙмәне,
Мине саҡырып янына

Былай тиеп һөйләне:
«Ҡараңғы төн ятҡыртҡан
Айҙан тыуған бала инем,
Әсәм һөйгән дана инем;
Шүлгәнгә дейеү биргәнгә,
Әсәм бер яҡ ҡапланы:
Шүлгәнгә атам биргәнгә,
Әсәм бер яҡ ҡапланы;
Ҡайғы баҫты йөҙөнө,
Миңдәр баҫҡан битене.
Көн дә йөҙө үҙгәрә,
Нуры кәмеп, хурлана;
Элек көндәш буһа ла,
Ҡояштан ул нурлана.
«Атам тағы хурланды,
Шүлгәнгә биреп алданды,
Ҡайғыһынан китепме, —
Хәҙер күҙҙән юғалды.
Кейәүгә тигән бүләгем —
Һары толпар бирәйем;
Балам, атҡа мен, тине,
Иҙел мән бар, кит, тине;
Урал атаң юлынан,
Балам, яуға сап, тине,
Һаҡмар батыр бул, тине,
Атаң эҙләп тап, тине,
Һис аямай сап, тине.
Егеттәрҙән бы һүҙҙе
Үҙ [ҡолағы] ишеткәс,
Балалары үҫкәнен,
Батыр булып еткәнен
Үҙ күҙе мән күргәс,
Батырлыҡтарын белгәс,
Урал батыр ҡыуанған;
Тағы ғәйрәте артып,
Урал атҡа атланған,
Бары көстө туплаған,
Төрлө яҡтан бишәүләп
Дейеүгә яу башлаған.
Ай һуғышҡан, ти, былар,
Йыл һуғышҡан, ти, былар.
Ҡаты яҙҙың берһендә
Ҡәһҡәһәне ҡолатҡан —
Диңгеҙ ярып, дулатҡан,
Асы тауыш сығартҡан,
Күк күкрәтеп, олотҡан,
Ҡәүҙәһен өйөп, диңгеҙҙә
Тағы бер тау яһатҡан.
Тылсымлы диңгеҙ[е] Шүлгәндең

Ҡап урталай быуылған,
Һыуҙа йөҙгән дейеүҙәр
Ике яҡҡа бүленгән.
Шүлгән мыңа аптырап
Ни эшләргә белмәгән,
Үҙ яғында ҡалғандың
Барыһыны йыйнаған;
Урал тағы юл сапҡан,
Дейеүҙәргә яу асҡан.

Ҡаты яуҙар барғанда,
Күктә уттар бөркөлөп,
Диңгеҙ һыуы эркелеп,
Һыуҙар ҡайнап торғанда,
Шүлгән, Урал икәүһе
Бер-беренә тап буған.
Икәү-ара яҫҡышып,
Төрлө яҡлап алышып,
Таяғы мән Уралға
Асыуы мән уҡталған,
Урал айбанмайынса,
Булат ҡылысын алып,
Ҡаты айбарын * һалып,
Урал таяҡҡа сапҡан —
Таяҡ киткән сәсерәп,
Күктә тауыш — күкерәп,
Диңгеҙ бөтөп, күл булған;
Һыуһыҙ ҡалып дейеүҙәр
Аптырашып хур буған.
Урал тотҡан Шүлгәнде,
Аҡбуҙаты, улдары
Ҡырған дейеү, бүтәнде.
Ҡара көсө мән Шүлгән
Уралға кәр ҡылмаған *,
Алышһа ла, түҙәлмәй,
Шунда ергә йығылған.
Һаҡмар килеп Шүлгәнгә,
Ҡылыс алып, уҡталған;
Урал тыйғас, Һаҡмар ҙа
Сапмайынсы туҡталған.
Урал бар халыҡты йыйып,
Шүлгәнде уртаға ҡуйып:

— Йәштән яуыз үҫтең һин,
Урлап ҡан да эстең һин.
Атам һүҙен тотманың,
Яуызлыҡҡа ыҡланың,
Яҡшылыҡты ташланың.
Ҡанда йөҙҙөң яуың мән,

Ил ҡапланың һыуың мән,
Ил үртәнең утың мән,
Дейеүҙәрҙе дуҫ иттең,
Ҡешеләрҙе хур иттең;
Яуызлығың ат иттең,
Йөрәгеңде таш иттең,
Атам йөҙөн ят иттең,
Әсәм һөтөн ыу иттең.
Бергә юлдаш булдым мин,
Яуҙа ҡулдаш тинем мин;
Ҡыҙ һайланың — буй ҡуйҙым *,
Ат һайланың — яй ҡуйҙым *;
Дан эҙләргә теләнең —
Теләгеңә буй бирҙем *.
Ҡулыңа таяҡ тотторҙом, —
Яҡшылыҡтан күҙ йомдың,
Ҡан ҡойорға ынтылдың;
Илде утта ҡалдырҙың,
Күбен * һыуға батырҙың,
Дейеүҙәргә буй биреп,
Дейеүҙәргә алданып,
Ҡеше ҡаны түктерҙең.
Һөттәй таҙа берәүҙең —
Күҙ ҡаралай икәүҙең
Берен димләп бирҙерҙем,
Йөрәгең аҡ булыр тип,
Һине маҡтап һөйҙөрҙөм.
Һин һүҙеңдә торманың,
Яуызға ҡаршы барманың,
Атам һүҙен тотманың,
Бөтә илде һыу иттең,
Ҡеше ҡанын ҡоярға
Дейеүҙәрҙе өскөттөң *,
Ер өҫтөндә эркеттең [58],
Тигеҙ ятҡан ер йөҙөн
Оңҡар-шоңҡар иттерҙең [59]
Дейеүҙән тау өйҙөрҙөң.
Яманлыҡты яҡшылыҡ
Еңгәнен хәҙер белдеңме?
Ҡешеләрҙең донъяла
Өҫтөнлөгөн күрҙеңме?
Хәҙер бөтә дейеүең
Йәнлеккә төйәк тау булыр,
Ҡәһҡәһәнең яуҙары —
Аяҡһыҙ ҡалған яу булыр.
Ер үбеп, ант итмәһәң,
Халыҡ алдында баш эйеп,
Аҡ һүҙеңде бирмәһәң,
Бөтә халыҡтың күҙ йәшен

Үҙ өҫтөңә алмаһан,
Атам килгән сағында,
Ғәйепләмен тимәһәң,
Башың сарҙай сорғотоп,
Он-талҡандай итермен;
Күбәләктәй йәнеңде
Төнгө томан ҡылырмын;
Ҡаныңа буяп кәүҙәңде,
Әзрәҡәнән бар буған,
Ямантау тип аталған
Тауға илтеп күмермен.
Башына йән килмәҫтәй,
Килеп хәлең белмәҫтәй,
Яҡшылап телгә алмаҫтай,
Бер үлән-зат үҫмәҫтәй,
Бите көнгә ярылған,
Ҡасҡан-боҫҡан йыланға,
Яуыз уйлы бөркөткә,
Ҡан көҫәгән ҡоҙғонға
Ҡунып, йәнлек аңдырға
Яуыз тағы * булырҙай
Ҡара ҡая итермен!
Тигән һүҙен Уралдың
Шүлгән тыңлап торған да,
Урал [һөйләп] бөткәндә:
«Урал ҡуймаҫ, үтерер!» —
Тип йөрәге ҡурыҡҡан да:
— Үҙ тылсымым яһаған
Диңгеҙемдең ҡалдығы,
Уҫаллығым шомлоғо
Күлдән битем йыуайым,
Һис яуызлыҡ ҡылмаҫҡа,
Йоланан баш тартмаҫҡа,
Һинең мән берлектә,
Кешеләр мән дуҫлыҡта
Ил батыры булырға,
Илдә тыныс ҡалырға,
Урал, юлың үбәйем;
Ысын туған булайым,
Бергә торлаҡ ҡорайым,
Атам-әсәм күрәйем,
Аларға һүҙ бирәйем», —
[Тигән, Урал батырҙан]
«Ҡандан үҫкән бит итең,
Күлдә йыуып таҙармаҫ
Ҡанһыраған йөрәгең
Яҡшылыҡҡа баҫалмаҫ;
Ҡанда йөҙөп, ут йотҡан
Кешеләр һине ишкә алмаҫ;

Ҡәһәрҙә таштай ҡатырған,
Кешеләргә ут буған,
Бәғерлектең тоҡомо
Тыумыштан [уҡ] юҡ буған
Һинең ыулы йөрәгең,
Таш ирер, [ул] иремәҫ,
Яҡшылыҡты тиңһенмәҫ,
Кешеләрҙе ишһенмәҫ.
Кешеләрҙе һөйһәң һин,
Бергә йәшәп, ил ҡороп,
Батыр булам тиһәң һин,
Кешеләргә дошманды
Үҙеңә ҡаршы яу һана,
Дошман ҡанын күл итеп,
Битең йыуар һыу һана.
Кешеләргә яу асып,
Буштан-бушҡа ҡан ҡойоп,
Яуызлыҡты дан һанап,
Яҡшылыҡты хур яһап,
Олпатланып, маһайып,
Кәперәйгән тәнеңде,
Рәхәтләнгән йәнеңде,
Ҡарайып бөткән ҡаныңды, —
Үткәнеңде уйлатып,
Йөрәгеңде һыҙлатып,
Тәнең һыҙлап ҡаҡайһын,
Йәнең һыҡтап ағарһын;
Йөрәгеңдәге ҡара ҡан
Кибеп ҡабат ҡыҙарһын,
Шунда кеше булырһың,
Илдә бергә ҡалырһың,
Яуҙа батыр буларһың.»
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Шүлгән ҡабат һораған,
Үҙ теләген һөйләгән:
— Һыбайға менгән арыҫланым
Ике һөрөнөп йығылды,
Ике тапҡыр һуғылды,
Тәнендә ҡандар күренде,
Күҙенә уттар сағылды, —
Аяғыма йығылды;
Өсөнсө тапҡыр һөрөндө —
Миңә ҡарап үкенде.
Ҡабат һис тә һөрөнмәм,
Тип арыҫланым елкенде.
Мин дә ҡабат һуҡманым,
Телем мән дә һүкмәнем.
Ағаң булған Шүлгән дә

Ике тапҡыр юғалды,
Һөрөнгән арыҫландай
Ҡуңелеңә шом һалды;
Өсөнсөгә — китәйем,
Дейеүҙе тар-мар итәйем,
Ҡара йөҙөм йыуайым,
Аҡ йөҙ мән алдыңда
Килеп ерҙе үбәйем,
Кешеләргә иш булып,
Бергә торлаҡ ҡорайым.

Урал:

— Намыҫ тапар ир буһа,
Өмөтө бумаҫ көнөнән;
Ил быуынын һанаған
Көнөн айырмаҫ төнөнән:
Йыртҡыс буған йәндәргә
Ҡара төнө көн булыр,
Күҙе ҡалғыр байғошто
Төндә аулап, шат булыр.
**Кешеләргә төн ине —**
Һиңә яҡты көн ине.
Ҡалғып торған кешене *
Ҡырып, ҙур дан эҙләнең,
Кешегә дошман дейеүҙе
Үҙеңә дуҫ һайланың;
Кешенең ҡара төнөндә
Айы ҡалҡыр тимәнең,
Айы батһа, таң атып,
Көн килерен белмәнең.
Инде күрҙең күҙ[ең] мән
Кешегә көн килгәнен,
Дейеүең мән үҙеңә
Ҡара төнөң килгәнен;
Дейеү йөҙгән диңгеҙҙең
Ергә әйләнеп ҡалғанын,
Әзрәҡә тигән батшаңдың
Ҡаялы тау буғанын;
Уҫал да мән аҡ ҡыҙҙан *
Һаҡмар батыр тыуғанын;
Ил ҡорорға ҡыҙғанын.
Йылан ейгән ирҙәрҙең,
Анда бикле ҡыҙҙарҙың
Көләс йөҙлө буғанын,
Алдыңа килеп тыуғаның *,
Инде күреп, ышанһаң;
Кешегә ҡаршы сайҡашып,
Уҫаллыҡтан яу асып

Мәңге еңелмәҫеңде
Бер туҡталып уйлаһаң,
Уҫаллығыңа баш булып,
Ҡешелекте һайлаһаң,
Үҙ арыҫланың һүҙенән
Өлгө алырлыҡ буһаң, —
Мин дә бер юл ҡуяйым,
Һинән яҡшылыҡ көтәйем.
Атамдың хаҡы өсөн,
Әсәмдең хәтере өсөн
Тағы ла бер һынайым,
Теләгеңде бирәйем.
Тип Шүлгәнде оҙатҡан.

**[Үлем күрә алмай ҡаңғырған ҡарттың әйткәне; Уралдың Йәншишмәне уртлағаны, тамсыһын да йотмағаны, тирә-яҡҡа һипкәне — ер йәнләнеп киткәне]**

[Һорнайҙарын һыҙғыртып,
Ҡырҙан ҡырға ҡыҙыртып],
Бар халыҡты йыйҙыртып:
— Күҙгә күренгән Үлемде
Илдән ҡыуып юҡ иттек,
Ҡан эсеүсе дейеүҙең
Барын ҡырып тау иттек.
Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек,
Бар кешегә бирәйек.
Күҙгә күренмәҫ Үлемдән,
Килер ауырыу-һыҙлауҙан
Кешеләрҙе ҡотҡарып,
Барыһыны шат ҡылып,
Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ.
Тип Урал һүҙ асҡанда,
Аһ-ваһ итеп зарланып,
Үлем саҡырып-ялбарып,
Бар һөйәге ҡаҡшаған,
Тәнендә ит ҡалмаған,
Ата-әсә, берен дә
Кем буғанын белмәгән
Бер ҡарт килеп еткән, ти,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Бик күп быуын күрҙем мин,
Бик күп ерҙә булдым мин,
Һис нәмәне тоймаған,
Бер нәмәнән ҡурҡмаған,
Бала — атаһын белмәгән,
Ата — балам тимәгән
Осорҙо ла күрҙем мин;

Ҡешеләр бергә тупланып,
Үҙ-араһы йопланып,
Ҡөслө ырыуҙар көсһөҙҙө
Талауын да күрҙем мин;
Йылан, дейеү, батшалар
Ҡеше затын эҙәрләп,
Тапҡан ерҙә берәмләп
Ашап башын үҫтереп,
Ҡайныһын * ҡол иттереп,
Ил өҫтөндә түш киреп,
Ҡешеләрҙе буҫтырып *,
Ҡан илатҡан осорҙа
Егет тә булып үҫтем мин.
Үлемде лә белмәнем,
Етемде лә күрмәнем,
Дейеү илде ҡаплағас,
Йылан күпте ашағас,
Үлем күҙгә сағылғас,
Миңә лә көн килер, тип;
Минең ҡулдан килмәһә,
Илгә бер ир тыуар, тип;
Дейеүҙәр мән йыланға
Бер көн ҡыраң һалыр, тип,
Ҡешеләрҙең бер көндө
Шатлыҡ туйы булыр, тип,
Һыҡтап йөрәге һыҙған,
Ҡан илап күҙе тонған
Ҡешеләрем йылмайып,
Йөрәктәре шатланып,
Рәхәт һулыш алыр, тип,
Ерҙә байман ҡорор, тип, —
Шуны көтөп яттым мин,
Үлемгә йән бирмәҫкә,
Туйҙан тороп ҡалмаҫҡа,
Йәншишмәнән һыу эстем мин.
Үлем күп саҡ осраны,
Өҫкә ҡандар сәсрәне,
Үңәсемдән күп алды,
Боғаҙға бысаҡ күп һалды,
Ҡандарымды һарҡытты,
Һөйәгемде ҡыйратты, —
Шунда ла буй бирмәнем,
Йәнемде ал, тимәнем;
Йәнем бирмәй серәштем,
Үлем мән [мин] көрәштем.
Инде туйҙы күрҙем мин,
Шуңа мында килдем мин,
Һеҙгә сәләм бирҙем мин,
Халыҡтың көләс йөҙҙәрен

Күҙ алдымда күрҙем мин,
Кеше, кеше тигәндең
Батырлығын һиҙҙем мин.
Инде үлһәм дә ҡайғым юҡ:
Ҡалҡып ятҡан ҙур юлың
Кешегә төйәк булырлыҡ;
Дейеүҙән өйгән тауҙарың
Кейеккә торлаҡ булырлыҡ.
Һәр ҡайһыһы йәйерәп
Йоплаңып түлен йәйерлек *;
Быуын-быуын үрсешеп,
Бергә уйнап-көлөшөп,
Байман табып ерләшеп,
Үткәндәрен йырлашып,
Көн итерҙәй ил булып
Торасағын белдем мин.
Егетем, батыр икәнһең,
Күҙ ҡарамдай һаналған
Илгә ҡашҡа * икәнһең;
Быуын-быуын буйына
Маҡталырлыҡ икәнһең.
Быуын-быуын әсәңдән
Тыуыуынды көттөрҙөң;
Ил ырыҫын табырға
Атаң һиңә ҡот биргән,
Әсәң һиңә һөт биргән;
Дошманға таш йөрәкле,
Дуҫына аш йөрәкле
Батыр итеп үҫтергән,
Тәү арыҫланға атланған,
Яҡшылыҡҡа ынтылған
Йөҙө көндәй һылыуға,
Һыны тиңһеҙ һылыуға —
Һомайға һин тап буғанһың.
Утҡа ҡаршы ут булыр,
Һыуға ҡаршы һыу булыр,
Елгә ҡаршы тау булыр,
Яуға ҡаршы яу булыр
Аҡбуҙатҡа атланып,
Дейеүҙәргә яу асҡан;
Ерҙән диңгеҙ киптергән,
Ергә ырыҫ сәстергән,
Илгә байман таптарған
Һине ҡашҡа тип белдем,
Һинең алдыңа килдем.
Күбәләктәй йәнем бар,
Бер йотомдай ҡаным бар,
Әлберәгән тәнем бар;

Һөйәк-һаяҡ ҡыйралған,
Тик тарҡалмаҫ һыным бар.
Хәҙер уйым тарҡалды,
Йәшәр хәлем ҡалманы;
Үлем саҡырып ҡараным,
Буй бирергә уйланым.
«Йәншишмәнән һыу эстең —
Миңә ҡаршы көс иттең,
Мәңге йәнең алалмам,
Һине үлек итәлмәм;
Көсөң бөтөр — ҡалырһың,
Үлә алмай дуларһың,
Тәнең сереп, ҡорт ашар,
Шунда ла һин үлмәҫһең,
Һис донъянан китмәҫһең,
Алйып-ҡаңғып бөтөрһөң», —
Тип йәнемде алманы,
Үлем баҙнат ҡылманы.
Егет, һиңә килдем мин,
Килеп хәлем әйттем мин.
Ҡолаҡ һалһаң һүҙемә,
Әйтә торған һүҙем бар;
Илгә йола булырҙай
Һынап белгән эшем бар:
Донъяла мәңге ҡалам, тип,
Донъялай * ғөмөр һөрәм, тип,
Үлемгә буй бирмәҫкә,
Аны йола итмәҫкә,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.
Донъя — у бер баҡ * икән;
Йән эйәһе донъяла
Донъя быуынынан һанаған.
Ҡайһы быуын таплаған,
Ҡайһы аны аҡлаған,
Төрлө төҫкә биҙәгән, —
Бары үҫемлек, гөл икән;
Беҙ Үлем тип һанаған,
Яуыз у тип ҡараған —
Бағтың туҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Сүпләп, бағты бушатҡан,
Анан донъя ташлатҡан
Бөтмәй торған йола икән.
Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ.
Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Донъяны матур төҙөгән,

Бағты мәңге биҙәгән —
У ҙа булһа яҡшылыҡ.
Ҡуккә лә осор — яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ — яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге ейер аш булыр.
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бөтә серҙе аңлағас,
Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти;
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын һөҙөп алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы алып һипкән, ти.
«Тау буйҙары йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаған,
Халҡы йырлап хуплаған,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланған
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торған ер буһын!»
Тигән һүҙен әйткән, ти.
Һыу күп һипкән еренән
Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,
Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,
Эҫегә лә кипмәҫлек,
Ҡорт, мыр-маҙар * төшмәҫлек,
Япырағы төрөлөп,
Беҙәнәктәй * буған, ти,
Мәңге йәшел ҡалған, ти.
Айҙар, көндәр уҙған, ти,
Халыҡ торлаҡ ҡорған, ти;
Бер-беренә йөрөшөп,
Уйнап бергә, көлөшөп,
Ҡоҙа-ҡаҙна булышып,
Йәше-ҡарты йоплашып,
Ҡанлы яуҙан тынышып,
Байман табып, тын эсеп,
Рәхәтләнеп ҡалған, ти.
Шүлгән быны ишеткәс:
«Шишмә һыуы түгелгәс,
Хәҙер мине яҡлаусы,

Кешене аҙлап сүпләүсе,
Бара-бара аҙ-маҙлап,
Донъянан юҡ ҡылыусы
Үлем тигән яу ҡалды,
Аңа иркенлек булды.
Миңә ярҙам итәр у,
Кешене тар-мар итәр у», —
Тиеп уйлап ҡыуанған,
Бар дейеүҙе йыйнаған,
Барына быны һөйләгән.
Уралға баш эймәҫкә,
Кешегә һыу бирмәҫкә
Бар дейеүгә ҡушҡан, ти.

**[Дейеүҙәргә асыу итеп, Уралдың Шүлгән күлен йотҡаны, эскә үткән йылан-саяндың батыр йөрәген теткеләгәне; үлер алдынан Уралдың әйткәне; Урал тауы буйында кешеләр күбәйгәне, ҡош-ҡорт ишәйгәне; шул сәбәптән эсер һыу етмәгәне; Иҙел, Һаҡмар, Яйыҡ, Нөгөш йылғаларының барлыҡҡа килгәне; кешеләрҙең, ҡытлыҡты ла, йотлоҡто ла, дейеүҙәр ҡылған этлекте лә онотоп, байман йәшәп киткәне]**

Быны бер саҡ тағы ла
Һыуға барған ҡыҙҙарҙы,
Юлға сыҡҡан ирҙәрҙе
Дейеүҙәр аңдып ятҡан, ти:
Һыуға барһа, йотҡан, ти,
Юлда булһа, быуған, ти,
Йығып, ҡанын һурған, ти,
Йөрәгене алған, ти;
Ҡаяла ҡалған йыландар
Кешеләрҙе саҡҡан, ти.
Кешеләр мынан зарланып,
Бары ҡурҡып, ялбарып,
Уралға бары килгәндәр,
Уралға һөйләп биргәндәр.
Урал халыҡты туплаған,
Дейеүҙәрҙе һаҡлаған *;
Дейеүҙәр, мыны белгәс тә,
Ер йөҙөнә сыҡмаған.
Урал ҡарап тормаған:
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштө,
Һаҡмар, бүтән батырҙы
Яуҙарына баш ҡылған;
Булат ҡылысын алып,
Үҙе Аҡбуҙын мengән;
Айбарланып, шау һалып,
Аҡбуҙатын дулатып,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,

Һыуҙа тулҡын ҡайнатып,
Шүлгән күленә барған.
— Күлең уртлап бөтөрәм,
Һыу ҡалдырмай ҡоротам,
Кешегә тынлыҡ бирмәгән
Ҡалған-буҫҡан дейеүҙән,
Яу булыусы Шүлгәндән
Бар халыҡты ҡотолтам!
Тиеп, күлде уртлаған,
Күлдәр ҡайнай башлаған,
Дейеүҙәр ҡурҡып шаулаған,
Шүлгән барын туплаған.
Урал күлде һура, ти, —
Дейеүҙәр эскә тула, ти,
Берәм-берәм Уралдың
Йөрәк-бауырын телә, ти.
Дейеү бик күп тулған һуң,
Йөрәгене телгән һуң,
Урал күлде бөрөккән, ти,
Ҡырға сыҡҡан дейеүҙе
Батырҙары тотҡан, ти.
Урал хәлдән тайған, ти
[Хәлдән камил ҡалған һуң],
Бар өмөтө бөткән һуң,
Аяғына баҫалмай,
Ҡабат яуын асалмай,
Урал шунда йығылған,
Бар[ы] кеше йыйылған,
Ил бәхете ине, тип
Бары һыҡтап илаған.

— Күрҙегеҙ барын күҙ мән:
Һыу уртлағанауҙыма
Дейеүҙәр тулды яу мән,
Йөрәгемде телделәр,
Ҡулдан көсҭө алдылар.
Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм,
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Уйым-уйым күлдәрҙең
Барында дейеү буласаҡ,
Уҫаллығын ҡыласаҡ,
Эсегеҙгә керәсәк.
Дейеүҙәрҙең ҡоһоро *
Барығыҙға тейәсәк,
Шунан барың үләсәк.
Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
Хараплыҡҡа төшмәгеҙ,
Дейеүҙәргә буй биреп,
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ.

Дейеүҙәргә яу асып,
Диңгеҙҙе дейеүҙән әрсеп,
Ерҙә торлаҡ табыштым,
Кешеләрҙе яуыздан
Ҡотҡарырға тырыштым.
Менһәм, Буҙат бар ине,
Ҡулда булат бар ине;
Яу тупларлыҡ еремдә
Талай илем бар ине;
Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине.
Шулар ҡәҙерен белмәнем,
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым,
Уңмаҫ юлды һайланым.
Улдарым, тыңлаң, һеҙгә әйтәм,
Бигерәк, илем *, һиңә әйтәм:
Батыр, батыр буһаң да,
Батыр беләкле тыуһаң да,
Илдә йөрөп, ил күрмәй,
Тубығыңдан ҡан кисмәй,
Йөрәгең батыр булалмаҫ.
Яуызға юлдаш бумағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Мин әрсегән еремдә
Кешегә байман табығыҙ:
Яуҙа буһа, баш булып,
Кешегә ил ҡороғоҙ,
Данлы батыр булығыҙ.
Олоно оло тейегеҙ,
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе тейегеҙ,
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.
Күҙенә сүп төшөрҙәй,
Күҙһеҙ булып ҡалырҙай
Еҫерҙәрҙең алдында
Күҙенә керпек булығыҙ.
Аҡбуҙатым, булатым
Илдә тороп ҡалыр у;
Өҫтөнә менеп сабырҙай,
Яуҙа ҡылыс һелтәрҙәй
Батырға менер ат булыр,
Батыр бумаҫ ирҙәргә
Менәр атым ят булыр.
Әсәгеҙгә әйтегеҙ,
Минән риза буһындар:
«Ирем, хуш бул!» — тиһендәр.

Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ буһын атығыҙ,
Кеше буһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!
Тигән һүҙен әйткән дә
Урал батыр үлгән, ти.

[Урал батыр үлгән һуң]
Халыҡ ултырып барыһы
Башын түбән эйгән, ти;
Күктән йондоҙ атылып,
Һомайға оран биргән, ти.
Һомай, ҡош тунын кейеп,
Шунда уҡ осоп килгән, ти,
Үле ятҡан Уралдың
Ауыҙынан үпкән, ти
— Ай, Уралым, Уралым,
Йәнеңә килеп етмәнем,
Аҙаҡ һүҙең ишетеп,
Күңелемде баҫманым.
Һинә йәшләй осорап,
Шатлығымдан ҡыҙ булып,
Ҡош тунымды һалғайным;
Яуыздарға яу асып,
Яҡшылыҡҡа юл асып,
Аҡбуҙатҡа менгәнгә,
Булат ҡылыс тотҡанға
Иң бәхетле бер булып,
Мин оҙатып ҡалғайным.
Йәнеңә килеп етмәнем,
Ауыҙыңдан үпмәнем,
Ни әйтерең белмәнем,
Инде хәҙер нишләйем?
Ни әйтергә белмәйем.
Ҡыҙ булып кемгә ҡарайым?
Һомай исмем ҡалһа ла,
Кешеләр ҡош тиһә лә,
Ҡош тунымды һалмайым,
Ситтәр күҙен алырлыҡ
Ҡабат һылыу бумайым.
Һиндәй батыр таба алмам,
Батырға әсә була алмам,
Аҡбуҙатың, булатҡа
Батыр һайлап бирә алмам.
Ҡош көйөмә ҡалырмын,
Тыу йомортҡа һалырмын;
Балам буһа, ҡош булыр,

Һинең керһеҙ уйыңдай,
Төҫө буһа, аҡ булыр.
Инде нисек итәйем?
Үҙең сапҡан юлыңа,
Һыҙылып килгән тауыңа
Гүрең ҡаҙып күмәйем,
Һиңә бәхет теләйем *.
Үҙең сапҡан ҙур юлың
Билен һис һыу ҡырҡалмаç.
Һинән ҡалған ҙур тауың
Үҙ ҡуйынына алыр у.
Һинең мән берлектә
Мәңге илдә ҡалыр у.
Өҫтөн астың диңгеҙҙең,
Өҫтөңдә батыр булдың һин,
Буйына ил ҡорҙоң һин;
Ҙур тауыңдың ҡуйынында
Илгә затлы булырҙай,
Кешегә татлы булырҙай,
Йәндәй һанап йөрөрҙәй
Тағы ла затлы булырһың,
Юғалмаç алтын булырһың;
Кешегә данлы һаналып,
Донъяға батыр булырһың!
Тигән һүҙен әйткән дә
Уралды тауға күмгән, ти,
Үҙе осоп киткән, ти,
Илдән ғәйеп буған, ти.

Урал юлы — бейек тау,
Урал гүре — данлы тау —
Урал булып ҡалған, ти.
Байтаҡ йылдар уҙған һуң,
Һомай Уралын һағынған:
Уның юлы буйынан
Осоп йөрөп, талпынған,
Уралға килеп *, ҡаяла
Уралды уйлап моң сәскән,
Аҡҡош булып түл йәйеп,
Аҡҡош тыуын үрсеткән.
Мыны бары белгән, ти,
Урал тоҡомо [60] ҡоштар, тип
Бер туғандай күрешеп,
Ау аулауҙан тыйышып,
Аҡҡош тотоп еймәçкә,
Тип һәр кемгә әйтешеп,
Аҡҡош үрсеп киткән, ти;
Аҡҡош ите кешегә
Шуға харам икән, ти.

Һомай түҙмәй осҡан, ти,
Бер килгән, ти, киткән, ти;
Тыныс ил тип берәмләп
Кош-ҡорттарҙы эйәртеп,
Үҙ артынан эркелтеп,
Тағы Уралға килгән, ти;
Шуңа эйәреп Уралда
Ҡош-ҡорт, йәнлек тулған, ти.

Ҡоштар киткәнен белгәс,
Тыныс ил тип ишеткәс,
Ҡатил үгеҙе тоҡомон
Үҙе башлап эйәртеп:
«Данлы Урал буйында,
Аның матур буйында,
Аның тапҡан илендә,
Аның яуы ҡулында *
Бергә ғөмөр һөрәмен», —
Тип [оран һалған да], ти [61],
Бар тоҡомон йыйған, ти.
Уралға [ап] килгән, ти,
Кешегә буй биргән, ти.

Аҡбуҙат та, ил гиҙеп,
Йылҡы тоҡомон йыйып,
Бар йылҡыға баш булып,
Барып алып килгән, ти.
Кешеләргә ылығып,
Менәренә ат булып.
Йылҡы ла түлләп киткән, ти.

Ай, көн һайын Уралға
Бары йәнлек тулған, ти,
Шу йәнлектәр, ҡош-ҡорттар
Килеү көнө кешегә
Ай, йыл һанап белеүгә
Исем булып киткән, ти [62].

Урал батыр үлгән һуң,
Гүрендә ерһеп бөткән һуң,
Гүре балҡып торған, ти,
Барыһы ла күргән, ти,
Йыйылышып барған, ти,
Бер ус тупраҡ алған, ти,
Бары данлап тотҡан, ти,
Бара-тора у ерҙә
Алтын булып киткән, ти.

Ҡош-ҡорт, йәнлек күбәйгәс,

Шишмә һыуы етмәгәс,
Ҡулдән ҡурҡып эсмәгәс,
Халыҡҡа һыу етмәгәс,
Иҙел батыр, Яйыҡҡа,
Нөгөш батыр, Һаҡмарға
Халыҡ йыйылып килгән, ти:
«Нишләйбеҙ?» — тип, барыһы
Аптырашын әйткән, ти.
Иҙел уйға ҡалған, ти,
Атаһының булатын
Үҙ ҡулына алған, ти;
Аҡбуҙатҡа менгән дә,
Бөтә халыҡты йыйған да:
— Эсә торған һыуҙа ла,
Йәшәп килгән донъяла,
Яуыз бөтмәй, йән тыумаҫ,
Тыуһа ла, тыныс йәшәмәҫ.
Шүлгәнгә яу асайыҡ,
Барын тар-мар яһайыҡ!
Һыу ҙа булыр кеше өсөн,
Тыныс булыр ил өсөн!
Тиеп һүҙен бөткәндә,
Яу асырға торғанда,
Һомай килеп еткән, ти,
Былай тиеп әйткән, ти:
«Батырҙан тыуған ир батыр
Аптырауҙа ҡалырмы?
Донъяла тыуған бер йәндең
Уйлап башы етмәгән,
Күңеленә килмәгән
Диңгеҙенә юл һалыр,
Дейеүҙәрен тау ҡылыр,
Бөтә диңгеҙ ҡоротоп,
Йөрөгән юлын ил ҡылыр», —
Тип кем генә уйлаған?
Атаң үҙе үлһә лә,
Булаты ҡалды ҡулында,
Буҙаты ҡалды янында.
Атаң дейеүҙән тау өйһә,
Сапҡан ерен юл итһә,
Яман һыуҙы бөтөрһә,
Илде бергә туплаһа, —
Һеҙгә аҙаҡ атағыҙ:
«Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
Эсеп әрәм бумағыҙ», —
Тип әйткәйне түгелме?
Шүлгәнгә яу асһаң да,
Аны тар-мар итһәң дә,
Күленән ил мандымаҫ,

Әсә һөтөндәй булып,
Илде мәңге һуғармаç!..

Һомай һүҙен[63] ишеткәс,
Иҙел уйға ҡалған, ти;
Аҡбуҙаттан төшкән, ти,
Атаһының булатын
Ҡулына тотоп алған, ти,
Бейек тауға менгән дә
Ирәмәлләп торған, ти.
Халыҡ бары ла Иҙелдең
Ни эшләүен көткән, ти.
«Атайымдың ҡулында
Булат дейеү тураны;
Уралдан тыуған ул булып,
Халыҡты һыуһыҙ ҡаңғыртып,
Батыр исеме күтәреп,
Һыу табалмай тилмереп
Тороу ирлек буламы?» —
Тигән дә Иҙел, ирәйеп,
Тауҙы яра сапҡан, ти,
Көмөштәй бер аҡ йылға
Шылтырап шунда уҡ аҡҡан, ти;
Тауҙы буйлап киткән, ти,
Әҙрәҡәнән бар буған
Ямантауға еткән, ти.
Тау йылғаны быуған, ти,
Иҙел килеп уҡталып,
Билен өҙә сапҡан, ти, —
Йылға ары аҡҡан, ти;
Иҙел баçып торған тау,
Ирәмәлләп сапҡан тау —
Йылға сығып аҡҡан тау —
Ирәмәл[64] булып ҡалған, ти.
Йылға быуған ҙур тауы,
Өҙә сапҡан урыны —
Ҡырыҡты[65] булып ҡалған, ти.
Иҙел батыр тапҡан һыу,
Шылтырап матур аҡҡан һыу
Иҙел[66] булып ҡалған, ти.
Бары килеп эскән, ти,
Һыу аҡҡанын күҙәтеп,
Бөтәһе лә ҡыуанып,
Былай тиеп әйткән, ти:

«Иҙел батыр тапҡан, ай, Аҡ йылғаһы
Шылтырап та аға ла үҙәндән,
Тәмле Иҙелкәй һыуҙары ла
Бөтөрәлер һыу көçәгән уйҙарҙы,
Ҡыуандыра ҡан илаған илдәрҙе.

Ғөмөрҙәр үк теләп ил йырланы,
Батыр тыуған тип үк Уралдан.
    Тәмле, ай, Иҙел һыуҙары ла,
    Бөтөрәлер һыу көҫәгән уйҙарҙы шу,
    Ҡыуандыра ҡан илаған илдәрҙе» [67].
Тип барыһы ла маҡтаған,
Ҡан илауҙан туҡтаған.

Бар халыҡ эркелеп,
Бер Иҙелдең буйында,
Йәмле туғай, уйында *
Торлаҡ ҡора башлағас,
Ай-йыл һанап түлләгәс, —
Илдә кеше күбәйгән,
Иҙел буйы тарайған.
Дүрт батыр бер йыйылып,
Бергә утырып уйлаған;
Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмарҙар
Тағы урын эҙләгән.
Иҙел һымаҡ былар ҙа
Алмашлашып бер-берен
Булат[ы] мән сапҡан, ти —
[Урғылып һыу сыҡҡан, ти]
Шылтырашып аҡҡан, ти,
Уларҙан да өс йылға
[Мәңгелеккә ҡалған, ти].
Былар халыҡты йыйғандар,
Дүрт батырға бүлгәндәр;
Дүрт йылғаны буйлатып,
Торлаҡ ҡороп тарҡалып,
Айрым донъя ҡорғандар.
Дүрт батырҙың исеме
Дүрт йылғаға ат булып [68],
Онотолмаҫ зат булып,
Быуын-быуын ҡалғандар.



## УРАЛ БАТЫР

*(версия)*

Борон-борон заманда, Урал тауы ла, Ағиҙел дә әле юҡ саҡта, шыр урман эсендә йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Оҙаҡ ғүмер иткәс, әбей үлеп киткән, ә бабай береһе Шүлгән, икенсеһе Урал исемле ике үҫмер улы менән тороп ҡалған, ти.

Бабай һунарға йөрөгән, ә Шүлгән менән Урал өйҙә ҡалыр булған. Айыу тиһәң — айыуҙы, бүре тиһәң — бүрене, арыҫлан тиһәң — арыҫланды тере көйө тотоп алып ҡайтыуҙы бабай үйынға ла күрмәгән, ти, — ул шулай көслө булған. Ни өсөн тиһәң, бабай һунарға гел генә бер ҡалаҡ йыртҡыс йәнлек ҡаны эсеп китә икән. Шул ҡанды эсеп алдымы — уға ана шул йыртҡыстың көсө өҫтәлер булған.

Йола буйынса, йыртҡыс кейекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә уның ҡанын татып ҡарарға яраған. Шуның өсөн бабай үҙенең улдарына: «Бәләкәйһегеҙ әле, кейек ауларға йәшегеҙ етмәгән, минән күрмәксе турһыҡтағы ҡанға ауыҙығыҙҙы тейҙерәһе булмағыҙ тағы — һәләк булырһығыҙ», — тип, гел генә киҫәтә торған булған.

Берҙән-бер көндө, аталары һунарҙа саҡта, Шүлгән менән Урал янына бик һылыу бер ҡатын килгән дә:

— Атайығыҙ менән бергә һунарға йөрөмәйенсә ниңә өйҙә ултыраһығыҙ? — тип һораған, ти.

Шүлгән менән Урал:

— Йөрөр инек тә, атайыбыҙ алып бармай, йәшегеҙ етмәгән әле тип, өйҙә ҡалдыра, — тигәндәр.

Шунан һуң теге ҡатын:

— Өйҙә ултырып, йәш еткереп булалыр шул! — тип көлгән, ти.

— Ә нимә эшләргә һуң?

— Анау турһыҡтағы ҡанды эсергә кәрәк, — тигән теге ҡатын. — Шуны бер генә ҡалаҡ эсеп алдыңмы — бер көн эсендә үк ир еткән егеткә әйләнәһең, арыҫландай көслө булаһың.

Шүлгән менән Урал:

— Атайым ҡан һалынған турһыҡ янына яҡын барырға ла ҡушманы. Эсһәгеҙ — һәләк булаһығыҙ, тине. Беҙ атайыбыҙҙың һүҙен тотабыҙ, — тигәндәр.

Шунан теге ҡатын:

— Һеҙ бәләкәйһегеҙ шул әле. Атайығыҙ ни әйтһә, шуға ышанаһығыҙ, — тигән. — Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫландай көслө егеттәргә әүерелеп, рәхәтләнеп һунарға йөрөргә, ә атайығыҙға өй һаҡлап ултырырға тура килә. Бына шуны белеп алған да, атайығыҙ турһыҡтағы ҡанды үҙе генә эсеп йөрөй, ә һеҙгә күрһәтмәй ҙә... Ихтыяр үҙегеҙҙә, әйттем дә бөттөм, — тип, теге һылыу ҡатын юҡ та булған, ти.

Был ҡатындың әйткәненә ышанып, Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды, ә Урал, атаһының һүҙен ныҡ тотоп, ҡанға яҡын да барманы, ти.

— Шүлгәндең турһыҡтан бер ҡалаҡ ҡанды алып йотоуы булды — айыуға әүерелеүе булды, ти. Шунда уҡ теге һылыу ҡатын инеп, Уралға:

— Бына күрҙеңме — туғаның ни эшләне! — тип һыны ҡатып көлә икән. Үҙе шунда уҡ: — Хәҙер мин уны бүре яһайым! — ти икән.

Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне — теге бүрегә әйләнде, ти. Бүренең маңлайына бер сирткәйне — арыҫлан булды, ти. Шунан теге ҡатын ана шул арыҫланға атланып алды ла үҙ юлына саптырып сыҡты ла китте, ти.

Был ҡатын тигәнебеҙ юха йылан булған икән. Һылыу ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юха йыландың хәйләһе арҡаһында. Шүлгән, үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған; бер ҡараһаң — айыу, икенсе ҡараһаң — бүре йәки арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә, йөрөй торғас, бер күлгә батып үлгән, ти.

Ә Урал тиңдәше юҡ батыр егет булып үҫеп киткән. Ул, атаһы кеүек, һунарға йөрөй башлаған мәлдә генә тирә-яҡты үлем ҡурҡыныСы солғаған: күлдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған, ағас япраҡтары һарғайып бөткән, тын алыуы ауырлашҡан. Кешеләр үлгән, малдар ҡырылған. Донъяны ҡыҙырып, бөтә тереклекте ҡоротоп йөрөгән Әжәлгә ҡаршы бер кем бер ни эшләй алмаған.

Урал батыр Әжәлдең үҙен тотоп үлтереү хаҡында хыяллана башлаған, ти. Атаһы уға үҙенең атаһынан ҡалған, һелтәгәндә йәшен уттары сығара торған алмас ҡылысын биргән дә:

— Был ҡылыс менән бөтә нәмәне ҡыйратып була, тик Әжәлде генә үлтереп булмай. Шулай ҙа һин уны ал, кәрәге булыр, — тигән. — Ҡайҙалыр, бик алыҫта Тереһыу тигән бер шишмә ағып ята икән. Ана шул Тереһыуҙың бер тамсыһы үлеп ятҡанды терелтә, ауырып ятҡанды һауыҡтыра, ә Әжәлдең үҙен үлтерә икән. Әжәлде шул шишмә һыуына тотоп һалырға кәрәк. Унан ҡотолоу өсөн башҡа әмәл юҡ, — тигән.

Урал, атаһы биргән ҡылысын тағып, башы һуҡҡан яҡҡа сы-

гып китте, ти. Эй китте, эй китте, ти, был, бара торғас, ете юл сатына килеп сыҡты, ти. Шунда ул бер ҡартҡа тап булып:

— Бабай, Тереһыу шишмәһенә ҡайһы юл менән барырға? — тип һораны, ти.

Бабай ете юлдың береһен күрһәткәс, Урал батыр:

— Ә ул бынан алыҫмы, нисә көнлөк юл? — тип һораны, ти. Шунан бабай:

— Уныһын инде, балам, мин әйтә алмайым. Ҡырҡ йыл буйы мин ошо ерҙә уҙғынсыларға Тереһыу юлын күрһәтеп торам, иллә-мәгәр ошо ғүмер эсендә унан әйләнеп ҡайтҡан бер кешене күргәнем юҡ әле, — тигән. Быға өҫтәп, бабай йәнә шулай ти:

— Улым, бер аҙ барғас, йылҡы өйөрөнә осрарһың, шул өйөрҙә бер Аҡбуҙат булыр. Булдыра алһаң, шуны менеп ал.

Урал батыр, бабай менән хушлашып-аманлашып, Тереһыу юлы менән китеп барҙы, ти. Китә торғас, теге бабай әйткән йылҡы өйөрөнә барып сыҡты, ти. Ҡараһа — йылҡы өйөрө араһында:

Башы йүгән күрмәгән,
Һыртына эйәр теймәгән;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;
Һарымһаҡтай аҙаулы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Ҡыйғыр-бөркөт ҡабаҡлы;
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы;
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр
Аҡбуҙат тора ине, ти.

Урал Аҡбуҙатҡа иҫе китеп ҡарап торҙо-торҙо ла әкрен генә янына барҙы, ти. Аҡбуҙат бер боролоп ҡараны ла ятһынмай-нитмәй тик торҙо, ти. Шунан Урал йәһәт кенә Аҡбуҙҙы менеп алып, саптырып китмәксе булғайны, Аҡбуҙ асыуланып Уралды шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, кем, теге атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти. Урал тырышып-тырмашып батҡан еренән сыҡты ла яңынан Аҡбуҙатҡа барып атланды, ти. Аҡбуҙ Уралды йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы Урал ергә тубыҡтан батты, ти. Ул тағы тырышып-тырмашып тора һалды ла йәнә Аҡбуҙға атланып, уға талпан һымаҡ йәбешеп алды, ти. Аҡбуҙ, күпме генә тырышмаһын, был юлы өҫтөндәге Уралды осортоп төшөрә алманы, ти. Шунан Аҡбуҙ Уралды баш тартҡан яҡҡа ҡарап елдереп алып китте, ти.

Эй бара, ти, Урал, эй бара, ти. Оҙон-оҙон яландарҙы, тау-таш ерҙәрҙе, соҡор-саҡыр урындарҙы үтте, ти. Бер ҡара урмандың

уртаһына еткәс, Аҡбуҙ туҡтаны, ти. Урал, ни булды икән, тип, ергә һикереп төштө, ти. Шул ваҡыт Аҡбуҙ, телгә килеп: «Беҙ хәҙер Тереһыу юлын бүлеп ятыр туғыҙ башлы дейеү пәрейе янына килеп еттек. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Ҡәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң дә, мин килеп етермен», — тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙҙың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ә Аҡбуҙ шунда уҡ юҡ та булды, ти.

Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәгән бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп ҡала. Урал ҡыҙҙы туҡтатып:

— Эй, һылыу, ҡайҙа китеп бараһың? Тоғоңда нимә ул, бик ауыр күренә? — тип һорай.

Шунан ҡыҙ илай-илай үҙ ҡайғыһын һөйләп бирә. Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы күптән түгел генә дейеү урлап алып килеп, үҙенә ҡол иткән икән. Ҡарағаш, туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһына уйнар өсөн, иртәнән кискә саҡлы йылға буйынан ҡырсынташ ташый икән. Урал ҡыҙҙы йәлләп китеп:

— Ҡана, һылыу, үҙем күтәрәйем, — тигәйне, Ҡарағаш уға:

— Юҡ-юҡ, егет, минең менән бергә бараһы булма, дейеү һиҙеп ҡалһа, үҙеңде шунда уҡ юҡ итер бит! — тип әйтте, ти.

Әммә Урал, үҙенекен итеп, таш тултырылған тоҡто туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы йыйылышып торған урынға хәтле күтәреп алып бара. Уралдың ташты ергә ҡойоуы була — дейеү балаларының бер-береһенә таш атышып уйнап китеүҙәре була. Улар атышып уйнаған арала Урал эргәләге бер ҡарама ботағына бау менән ат башы хәтле бер таш аҫып ҡуя ла үҙе, ҡасып-боҫоп ҡына, дейеү йошәгән мәмерйә алдына үтеп китә.

Дейеү балаларының уйындары оҙаҡҡа бармай — таштары төрлө яҡҡа атылып, юғалып бөтә. Шунан улар оҙон бау менән ҡарамаға аҫып ҡуйылған ҙур ташты күреп ҡалып, шуның тирәһенә йыйылалар. Береһе, мәрәкә күреп, ташты атындырып ебәрә, таш кире килеп, тегене һуғып йыға. Дейеү малайы йығылған урынынан асыуланып тора һалып, ташты бөтә көсө менән осорта һуҡҡайны, таш был юлы дейеү малайының башын иҙә һуғып уҡ ҡуйҙы, ти. Башы ярылған туғанының үсен алмаҡ булып, ташты дейеүҙең икенсе малайы һуғып ебәрә. Ләкин уныһы ла шунда уҡ, башы ярылып, йән бирә. Туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы ошолай, береһе артынан береһе ҡырыла торһон, беҙ дейеүҙең үҙенә күсәйек әле.

Юлдың тауҙы киҫеп үткән ерендә генә, бер ҡараңғы мәмерйә алдында, туғыҙ башлы дейеү ята, ти. Тирә-йүне әҙәм һөйәктәре менән тулы, ти. Урал батыр алыҫтан уҡ:

— Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыуға китеп барам! — тип һөрәнләй.

Дейеү быға бер ҙә иҫе китмәй генә, юлға арҡыры төшкән көйө ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» — тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти. Урал батыр дейеү ҡырына килеп баҫҡанын

һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шулай ҙа ҡаушап ҡалмаған. Дейеүгә ул:

— Алыштанмы, сабыштанмы? — тигән.

Дейеү, быңдай ҡыйыу егеттәрҙе бик күп күреп тә, быға һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, — тип яуап ҡайтарған.

Шунан былар тауҙың иң ҡалҡыу еренә менеп алдылар ҙа тирләп-бешеп көрәшә башланылар, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, төш ауып, көн кискә һарҡты, ти. Бына бер заман дейеү Уралды күтәреп алып ырғытты, Урал биленән ергә батты, ти. Шунан дейеү уны батҡан еренән тартып сығарҙы ла йәнә көрәшә башланылар, ти. Дейеү Уралды йәнә атып бәрҙе, ти. Был юлы инде Урал муйынынан ергә батты, ти. Дейеү уны ике ҡолағынан тотоп тартып сығарҙы ла, яңынан көрәшә башланылар, ти.

Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, кис булып, эңер төшә башланы, ти. Бына бер заман әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал елтерәтеп күтәреп алды ла быраҡтырып та ебәрҙе, ти. Дейеү биленән ергә батты, ти. Шунан Урал уны батҡан еренән тартып сығарҙы ла йәнә көрәшә башланылар, ти. Урал дейеүҙе тағы элеп алды ла һелкеп һалды, ти. Был юлы дейеү муйынынан ергә батып, туғыҙ башы туғыҙ яҡҡа ҡарап һерәйеп ҡалды, ти. Урал дейеүҙе тартып сығарҙы ла яңынан көрәшә башланылар, ти. Дейеү алан-йолан ҡаранырға ла өлгөрмәне, Урал уны ҡапыл элеп алып, йән асыуы менән шул хәтле атып бәрҙе, ти, дейеү ергә һенде лә ҡуйҙы, ти. Яуыз дейеүҙең башына ҡиәмәт килеүе шул булды, ти.

Ҡарағаш, бисара егеттең һөйәктәрен йыйып алып, күмеп ҡуяйымсы тип, тау башына менһә, Уралды һау-сәләмәт көйө күреп, шатлығынан илап ебәрә. Шунан ул, бөтөнләй ғәжәпкә ҡалып:

— Дейеү ҡайҙа китте һуң? — тип һорай.

Урал батыр:

— Дейеүҙе мин ергә һеңдерә һуҡтым, — тип әйтеп тә өлгөрмәй, улар баҫып торған урындан өс-дүрт аҙым ғына ситтәрәк бөркөләп-бөркөләп төтөн күтәрелеп сыға, ә төтөн артынан ялҡын сыға башлай.

Быны күреп, Ҡарағаштың:

— Был ни хәл? — тип һорауына, Урал батыр:

— Мин шошо урында дейеүҙе ер аҫтына тыҡҡайным. Ер был хәшәрәттең емтеген үҙенең ҡуйынына алыуҙан ерәнде, күрәһең. Бына шуға күрә ул янып, төтөнө сығып ята, — тип яуап бирә.

Был тау шошо яныуынан туҡтамаҫ була. Шул көндән алып уны Янғантау[69] тип йөрөтә башлайҙар.

Дейеүҙең башына еткәс, Урал батыр был тау башында оҙаҡ тормай; кеҫәһенән теге өс бөртөк ҡылды алып өтөүе була — Аҡбуҙаттың ҡаршыға тып итеп килеп баҫыуы була. Шунан Урал батыр, Ҡарағашты үҙе менән бергә ат өҫтөнә ултыртып, Теречыу юлы менән саптырып китеп тә бара.

Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти. Оҙон-оҙон яландарҙы, таулы-ташлы ерҙәрҙе, соҡор-саҡыр урындарҙы үттеләр, ти. Бара торғас, Аҡбуҙат туҡтаны ла, телгә килеп: «Беҙ хәҙер Тереһыуға яҡынлаштыҡ. Әммә уның юлын ун ике башлы дейеү пәрейе бүлеп ята. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Ҡәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң дә, мин килеп тә етермен», — ти.

Урал Аҡбуҙҙың өс бөртөк ҡылын өҙөп ала, ә Аҡбуҙ шул арала юҡ та була. Шунан Урал Ҡарағашҡа:

— Һин ошо ерҙә мине көтөп тор, дейеүҙең башына еткәс, килеп алырмын. Бына һиңә ҡурайымды ҡалдырам. Юлым уңһа, ҡурай осонан һөт тамыр, уңмаһа, ҡан тамыр, — тип дейеү менән алышырға китә.

Бына алда Тереһыу сылтырап ағып ята, ти. Ул тауҙан ағып сыға ла шунда уҡ әллә ҡайҙа, ер аҫтына китеп юҡ та була икән. Тереһыуҙы өйөм-өйөм әҙәм һөйәктәре уратып алған. Ауырыуҙы һауыҡтыра, һауҙы үлемһеҙ итә торған был шишмәне, бер тамсы һыуын да бирмәйенсә, ун ике башлы ҡарт дейеү үҙе һаҡлап ята икән. Урал батыр күҙ күреме ерҙән үк:

— Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыу алырға килдем! — тип һөрәнләй.

Дейеү, бер ҙә ыжламайынса, Тереһыу алдында ҡуҙғалмай ята бирә. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» — тип ҡысҡыра, ә дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башлай. Урал батыр дейеү ҡаршына килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Шунда ла ҡаушап ҡалмай. Ул дейеүгә:

— Алыштанмы, сабыштанмы? — ти.

Дейеү, ындай ҡыйыу егеттәрҙе байтаҡ күреп тә, бығаса һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, — тип яуап ҡайтара. Урал батыр:

— Ярай, улай булһа, — тип, билендәге алмас ҡылысын һурып алып, уңлы-һуллы сатрашлап һелтәгәйне, тирә-яҡҡа йәшен уттары сәселеп китте, ә дейеүҙең күҙҙәре шунан сағылып торҙо, ти. Урал: «Ярай, улай булһа», — тип йәнә бер тапҡыр әйтте лә ҡылысы менән дейеүҙе тураҡлай ҙа башланы, ти; ҡылыс һелтәнгән һайын, дейеүҙең ун ике башының береһе ҡырҡылып төшә торҙо, ти.

Был ваҡытта Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт тама. Ҡарағаш, быны күреп, бик ныҡ һөйөнә.

Ләкин күп тә үтмәй, дейеүҙең бөтә көсө менән үкереүен ишетеп, тирә-яҡтағы вағыраҡ дейеүҙәр, аждаһалар ярҙамға килә. Урал батыр уларға ла бирешмәй: уның ауыр кәүҙәһен күтәргән аяҡтары, тайшанмайынса, һаман ергә батҡан көйө, башы болотҡа тейерҙәй булып юғары күтәрелгән көйө тора, ә ҡулындағы ҡылысы, йәшен уттары сығарып, уйнап ҡына тора.

Бына бер заман, бөтә дейеүҙәрҙе, аждаһаларҙы ҡыйратып бөттөм тигәндә генә, Урал батырҙың өҫтөнә һанһыҙ күп ен-пәрей

көтөүе килеп ябырыла, — тын да алдырмайҙар, күҙ ҙә астырмайҙар, бөрөп алып баралар егетте.

Был ваҡытта баяғы ҡурай осонан ҡан тамды, ти. Ҡарағаш, быны күреп, бик ныҡ борсола. Шунан ул, күп уйлап тормай, ҡурайҙы аҡа ла өҙҙөрөп-өҙҙөрөп әллә ниндәй, ишетер ҡолаҡҡа ягымһыҙ бер бейеү көйөн тарта башлай.

Теге ен-пәрейҙәргә шул ғына кәрәк икән: улар, үҙҙәренең бейеү көйөн ишетеү менән, бөтә донъяларын оноталар, Уралды яңғыҙ ҡалдырып, ҡурай тауышы ишетелгән яҡҡа йүгерешәләр ҙә шунда барып, тыйыла алмайынса, бейергә керешеп тә китәләр.

Урал батыр, ен-пәрейҙәр донъяһын ҡыйратып, Тереһыу шишмәһен дейеү ҡулынан ҡотҡарҙым, хәҙер инде уның тереклек һыуы кешеләргә булыр тип шатланып, шишмә эргәһенә килһә, унда бер тамсы ла һыу юҡ икән. Ни өсөн тиһәң, был һуғышта исән ҡалған дейеү пәрейҙәре, Тереһыу әҙәм затына ҡалмаһын тип, эсеп ҡоротҡандар икән. Урал батыр шишмә янында күпме генә ултырмаһын, бер тамсы ла һыу сыҡмаған.

Урал батыр быға бик көйөнә. Шулай ҙа уның дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы пыран-заран килтереп ҡырып ташлауы файҙаһыҙ булмай: бөтә тирә-яҡҡа йәм керә, үләндәр, ағастар йәшәрә, ҡоштар һайраша, кешеләр йөҙөндә шатлыҡ балҡый.

Урал батыр, үҙенең Аҡбуҙын менеп, алдына Ҡарағашты ултыртып ала ла Тереһыуҙы ташлап китеп тә бара. Был урында Урал тураҡлаған дейеү пәрейҙәре, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡала. Ана шул тауҙы халыҡ телендә Ямантау тип йөрөтә башлайҙар.

Урал менән Ҡарағаш, ирле-ҡатынлы булып, донъя көтә башлайҙар. Уларҙың өс улы була: өлкәне — Иҙел, уртансыһы — Яйыҡ, кинйә улдары — Һаҡмар.

Хәҙер инде был тирәгә Әжәл дә һирәк килә. Ни өсөн тиһәң, ул бәһлеүән Урал батырҙан, уның йәшен уты сығарыр ҡылысынан шөрләй икән. Бына шул арҡала халыҡ бик ишәйеп китә. Шул тиклем күбәйә, хатта эсер һыуы ла етмәй башлай. Урал батыр, был ауыр хәлде күреп, берҙән-бер көндө ҡынынан ҡылысын тартып ала ла, баш өҫтөндә өс тапҡыр һелтәп, аяҡ аҫтындағы ерҙе уйҙыра саба. Шунан:

— Бына ошо ерҙә ҙур һыуҙың башы булыр! — ти. Үҙе шунда уҡ өлкән улы Иҙелде саҡырып килтереп: — Бар, улым, аяғың тартҡан яҡҡа сығып кит тә халыҡ араһында йөрө, иллә-мәгәр бер ҙә ҙур ағым һыуға барып етмәйенсә артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! — ти.

Атаһы һымаҡ ауыр кәүҙәле Иҙел, аяғының тәрән эҙен ҡалдыра-ҡалдыра, көньяҡҡа ҡарай сығып китте, ти. Атаһы уның артынан күҙ йәштәрен мөлдөрәтеп ҡарап ҡалды, ти. Сөнки ул Иҙелдең кире әйләнеп ҡайтмаясағын белеп тора ине, ти.

Эй бара, ти, Иҙел, эй бара, ти, туҡтап хәл йыйыуҙы ла белмәй, ти. Бик оҙаҡ барғас, уңға ҡайырылып китә, шунан төньяҡҡа йүнәлә. Эй китте, ти, Иҙел, эй китте — ай үтте, йыл үтте, шунан ул көнбайышҡа юл тотто, ти. Бара торғас, ҡамышы ҡама

менән тулған ҙур бер йылғаға килеп етә был[70]. Шунан Иҙел артына әйләнеп ҡараһа, уның эҙенән киң йылға булып ап-аҡ һыу урғылып ағып килеп, ошо ҡамалы йылғаға ҡоя башланы, ти.

Бына шул көндән алып йәмле Ағиҙел йылғаһы барлыҡҡа килде, ти.

Иҙел батыр оҙон юлға сығып киткән көндө уның атаһы теге ике улын да шундай уҡ шарт менән илгә сығарып ебәрә. Ләкин улар ағаларына ҡарағанда ҡыйыуһыҙыраҡ, түҙемһеҙерәк булалар: Иҙел батыр һымаҡ, бер үҙҙәренең генә шундай оҙон, ауыр юлды үтергә йөрәктәре етмәй.

Һаҡмар, үҙенең тыуып-үҫкән еренән алыҫлаша башлағас, яманһыулап китеп: «Ни эшләп әле мин әллә ниндәй ят ерҙәрҙә япа-яңғыҙым ҡыҙырып йөрөйөм? Яйыҡ ағайыма барайым да ҡушылайым, бергә йөрөүе еңел дә, күңелле лә булыр», — тип Яйыҡҡа барып ҡушыла.

Ҡайһылай ғына булмаһын, халыҡ Иҙелгә генә түгел, Яйыҡ менән Һаҡмарға ла бөткөһөҙ рәхмәт уҡый, ә Урал батырҙың үҙенә ана шундай данлы улдар үҫтергәне өсөн оҙон ғүмер теләй.

Шулай ҙа йөҙ ҙә бер йәшкә еткән Урал батырҙың ғүмере күп ҡалмаған икән. Уның ҡартайып, хәлһеҙләнә башлауын күптән көтөп йөрөгән Әжәл бик яҡынлашҡан. Бына хәҙер Урал батыр хәл өҫтөндә ята. Уның янында, изгелекле батырыбыҙҙан айырылабыҙ инде тип ҡайғырышып, бөтә тирә-яҡ халҡы йыйылған. Шул ваҡыт әле генә әллә ҡайҙан ҡайтып төшкән ир уртаһы бер кеше йыйылған халыҡты икегә айырып үтә лә үлем түшәгендә ятҡан Урал батырға:

— Эй, батырҙарҙың батыры Урал атабыҙ, һин түшәккә ятҡан көндө үк мин, халыҡтың һорауы буйынса, һыуын теге заман ен-пәрейҙәр эсеп бөтөрөп киткән Тереһыуға барғайным. Ул бөтөнләй үк ҡороп бөтмәгән икән: мин, унда ете көн, ете төн ултырып, һуңғы тамсыларынан бына бер мөгөҙ тереклек һыуы йыйып алып ҡайттым. Бына хәҙер шул һыуҙы халыҡ исеменән һинә бирәм. Ҡәҙерле Урал атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә, халыҡ бәхете өсөн мәңге йәшә! — тип мөгөҙҙө түшәктә ятҡан Урал батырға һона.

— Тамсыһын да ҡалдырмай эс, Урал батыр! — тип үтенә халыҡ.

Шул мәлдә Урал батыр әкрен генә тороп аяғына баҫа, Тереһыуҙың һуңғы тамсылары һалынған мөгөҙҙө уң ҡулы менән ала, шунан халыҡҡа баш эйеп, рәхмәт белдерә лә мөгөҙҙәге һыуҙы уртлай. Ләкин һыуҙың бер тамсыһын да йотмай, ә бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап — бөтә тирәяҡҡа бөркөп ебәрә. Шунан үҙе:

— Мин — бер кеше, һеҙ — күп кеше; мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын; ерҙә кешеләр шат, рәхәт йәшәһен! — ти.

Урал батыр шулай тип әйтеп бөтөрөүгә, барлыҡ тирә-яҡ үҙгәреп, яңырып китә: аяҡ аҫтына йәм-йәшел үлән түшәлә, ағастар яңы япраҡ яра, ер өҫтөндә төрлө-төрлө еләктәр, ағаста төрлөтөрлө емештәр ҡыҙарып бешә, гөлдәр, сәскә атып, күҙ яуын алып

тора, аҫыл ҡоштар килеп һайрай башлай, шылтырап шишмәләр аға, ҡуйы ҡамыш менән уратылған түп-түңәрәк күлдәр барлыҡка килә, шул күлдәрҙә, шулай уҡ Ағиҙелгә, Яйыҡҡа, Һаҡмарға килеп ҡушылған яңы йылғаларҙа быға тиклем күренмәгән аҡкоштар ҡаңғылдашып йөҙә, баш өҫтөндә аҡсарлаҡтар сырылдашып осоп йөрөй башлай.

Бына шул йәмле донъяла кешенең йәшәгеһе килеп кенә тора. Шунда туҡһан йәшлек бер сәсән халыҡ алдына сығып, ҡалҡыуыраҡ ергә баҫып ала ла былай тип һамаҡлай:

Ай, тыуған ер, тыуған ер —
Олатайҙар торған ер,
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған тыуған ер.
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай;
Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы ҡурай сәләктәй;
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йәйрәп ятҡан еребеҙ!

Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп еребеҙ;
Алырын аңдып йөрөгән
Бүреһе күп еребеҙ;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп еребеҙ;
Ыҫпай баҫып йөрөгән
Төлкөһө күп еребеҙ;
Балығы аттай тулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп еребеҙ!
Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер;
Йылҡылары сыңырлап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырып,
Көтөү-көтөү йөрөгән ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йөҙ ҡуй булып үрсер ер;
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөр ер;
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

Ҡарт сәсән ана шулай үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матур-

лығына һоҡланып ҡобайыр әйтә. Тап бына шул ваҡытта Урал батыр үҙе донъя ҡуя.

Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыуыраҡ бер ергә күмә, шунан һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыға. Көн үтә, йыл үтә, Урал батырҙың ҡәберенән кеше өҙөлмәҫ булып китә. Уның ҡәберенә услап-услап һала торғас, шул тиклем күп тупраҡ өйөлә, хатта ҡәбер өҫтөндә бик ҙур бер тау барлыҡҡа килә.

Ана шул тауға халыҡ Урал тигән исем биргән дә инде. Унда Урал батырҙың һөйәктәре әле лә һаҡлана икән: ҡаҙһаң, Урал тауынан сыға торған бөткөһөҙ күп алтын-көмөш, төрлө-төрлө аҫыл таштар тигәнебеҙ ана шул Урал батырҙың аҫыл һөйәге икән ул. Урал батырҙың ҡаны ла һыуынмаған. Күп ғүмер үткәнлектән, төҫө-сифаты ғына үҙгәргән: ер майы[71] тигәнебеҙ — тап ана шул оло Урал батырҙың кибеү белмәҫ ҡаны икән ул.

## АҠБУҘАТ *

Борон-борон заманда, атаһы үлгәс, әсәһе юғалғас, биш-алты йәшендә Һәүбән тигән бер бала етем тороп ҡалған, ти. Ауыр эштәр эшләргә йәш буғас, өйҙән-өйгә йөрөп, йөҙ һыуын түгеп, һоранып тамаҡтанып көн үткәргән, ти. Берҙә-бер көндө яланға сығып киткән. Туғайҙағы шишмәне — көлдәй, әрмәнде тауышын — гүйҙай, әттек, йыуа, ҡуҙғалаҡты һыйҙай күреп ҡыуанған, ти. Бара торғас, ҡурай тауышы ишеткән, шаңдаған да шу яҡҡа ҡарап ыҡтаған, һаҙҙыҡтар кисеп, үҙән буйҙап * Иҙел ҡарай аттаған, ти. Ырғыҙ [72] байҙа һыйыр көткән Тарауыл ҡарттың [73] янына барып сыҡҡан, ти. Тарауыл ҡарт Һәүбәндән иһән-һауҙыҡ, ер-һыуын, ауыл-ырыуын [ораны, ағасы, ҡошо ни, һауыты нимә, шуны] һорашҡан. Һәүбән атаһы үлеүҙән баштап әсәһе ғәйеп булғанды, үҙ тормошон баштан аяҡ энәһенән ебенә саҡты һөйҙәп биргән, ти. Тарауыл ҡарт, Һәүбәндең һүҙен ишеткәс, бик ҡыҙғанған, тәрән көрһөнгән, ти.

— Үҙ көнөм дә, балам, ауыр; һеҙҙәйҙәрҙе курһәм, бигерәк йөрәгем һыҙҙап китә шу, — тигән, ти. Оҙаҡ уйҙап утырған да, ау ауҙай торған ҡорамалдарын йүнәтә баштаған, ти.— Балам, анауы күлгә барып әйҙәнәйек әле бумаһа, берәр суртан мәскәүҙәп бумаһ микән, — тигән дә, ти, бер ҡулына мәскәуен, бер ҡулына һыҙмаһын [74] тотоп, Һәүбәнде эйәртеп апкиткән *, ти. Юлда барғанда, Һәүбәнгә Тарауыл ҡарт үҙенең хәлен һөйҙәп барған, ти:

— Балам, байҙың бисәһе һаран, көн буйына ашап-эсергә бер тәгәс ҡатыҡ, бер баш ҡорот ҡына биреп ебәрә, уның мән тамаҡ аһырауҙар ҡыйын. Бына ошолай йөрөп, һыҙмам мән ҡош атам, мәскәү мән суртан мәскәүҙәйем. Кис ҡайтып киткәндә, ҡармаҡтарымды әрмәнде мән емдәп, йәйенгә утыртып ҡайтып китәм. Шулайтып тамаҡтанмаһаң, йән аһырыуҙар ҡыйын, — тигән, ти.

Һәүбән, Тарауыл ҡарт артынан эйәртенеп барғанда, ҡарттың ҡулындағы ҡорамалдарына ҡарап-ҡарап ҡыҙығып ҡуйған да:

— Олатай *, ошолай һыҙмам буһа, мин дә ҡош атырға өрәнер

инем. Юҡ бит! Ҡош атып алһам, асҡа ҡаңғырып та йөрөмәһ инем, — тип әйткән, ти. Тарауыл:

— Шулай булыр ине шу, — тигән дә бик оҙаҡ өндәшмәй барған, ти. Ҡулындағы һыҙмаһы Һәүбәндең атаһының һыҙмаһы буғанға, бала берәй нәмә уйҙап әйтмәне микән, тип шиктәнгәндәй буған да:

— Балам, атайың бахыр бик һунарсы, мәргән кеше ине. Аның бик матур һыҙмаһы була торғайны, хәҙер ҡалмағандыр шу, — тигән, ти. Һәүбән:

— Шулай... «Бар ине. Атайың үлгәс, кәфендек алырға бер нәмәһе лә бумағас, әсәйең бахыр атайыңдың һыҙмаһын биреп, кәфендек алды», — тип һөйҙәйҙәр ине, — тигәс, Тарауыл ҡарт күҙ йәштәрен һөрткән дә:

— Кәфендеге бумағас, үҙенең иһке-боһҡоһо * мән ураштырып ҡына ҡуйһа ла, арыу булыр ине лә бит. Арыуыраҡ күмәйем, тигәндер инде. Нисек итһен, күп йылдар бергә ғүмер иткән юлдашы буғас ни, — тигән, ти. Һәүбән:

— Ай, олатай, әле һин уны һөйҙәйһең, буғаны буған инде. Атайым, бахыр, үлгәс, өсөн, етеһен, ҡырҡын уҡытырға, хәйерлеккә бер нәмәһе лә бумаған. Зарҙанып, [әсәйем] ил араһына әҙҙәнеп сығып киткән. «Шу китеүҙән, ҡайтмай, ғәйеп булды» — тип һөйҙәйҙәр [75]. Мин, у саҡта бик бәләкәй буғас, асығын белмәйем, — тигән, ти. — Әсәйем ғәйеп буған инде, атайымдың һыҙмаһы ғына булһа ла, былай асҡа ҡаңғырып һөрөмәһ инем, ҡош-маҙар атырға өрәнер инем, — тигән.

Шу һүҙҙәрен әйткәс, Тарауыл ҡарт, бик оҙаҡ бер һүҙ ҙә әйтмәй, уйҙап барған да, ҡапыл, бер нәмә уйҙаған кешеләй, туҡтаған:

— Балам, йәшем алтмышҡа етте. Йәшәгән саҡты йәшәмәм инде. Һин йәш бала әле, ҡаңғырып йөрөмә. Мә, бы һыҙманы һиңә бирәйем, бер ҡомартҡы итеп тотарһың. Кемдән алғаныңды берәүгә лә әйтмә. Ундай һыҙма Уралда юҡ, — тигән дә һыҙманы Һәүбәнгә биргән. Һәүбән ҡыуанысынан ништәргә лә белмәгән, Тарауыл ҡартҡа рәхмәттәр әйткән, ти. Былар суртан мәскәүҙәп, уны бешереп тамаҡтанып, бергә ятып ял иткәндәр. Көн кискә һарышҡас *, һауҙашып, икеһе ике яҡҡа киткәндәр, ти.

Һәүбән көн, ай, йыл һанап үһкән, һыҙма мән һунарға йөрөй баштаған. Ул арыу ғына һунарсы булып ун ете-ун һигеҙ йәштәргә еткән, ти.

Берҙә-бер көн, күл яғалап йөрөгән[ен]дә, бы бер алтын йөнлө өйрәк йөҙөп йөрөгәнен күргән, ти. Уны-быны абайҙап тормаған, тоҫҡай һалып атып йыҡҡан да, сисенә һалып, йөҙөп барып тотҡан. Күл ситенә яҡындата баштағас, теге алтын өйрәк, телгә килеп, һөйҙәй баштамаһынмы!

Һәүбәнгә алтын өйрәк:

«Егет, атҡан һунарың —
Өйрәк түгел, белһәң һин,
Күлдә йөҙөп уйнаған,

Данлы Шүлгән батшаның
Йәндәй күргән ҡыҙы мин.
Ай егетем — күҙ ҡарам,
Мине күлдән сығарма,
Күбәләктәй йәнемдән
Йәштегемде айырма.
Ни һораһаң бирәйем,
Юлыңда ҡорбан булайым;
Өйөр-өйөр мал, тиһәң,
Барын һиңә бирәйем», —

тигән һүҙҙәрҙе әйтеп, Һәүбәнгә ялбарған, ти. Һәүбән, бы һүҙҙәрҙе ишеткәс, үҙе аяҡтаныրҙыҡ * ергә саҡты йөҙөп апкигән дә туҡтаған. [Туҡтаған да] аптырап, ни әйтергә белмәй торған, ти. Өйрәк һаман шу һүҙен ҡабаттағас, уны һыуҙан сығармай ғына, үҙенең хәлен әйтә башлаған.

Һ ә ү б ә н:

— Атам-әсәм ғүмере
Ярҙы үткән тарҙыҡта,
Көн иткәндәр ҡолдоҡта,
Мин үҫкәнмен аслыҡта.
Икеһе лә юҡ хәҙер,
Етем ҡалдым йәштектә,
Морон терәр ер бумай,
Буй үҫтерҙем хурҙыҡта.
Бөгөн тәүге һунарҙа
Юлыҡтым мин монарға,
Шулай ҙа мин ебәрмәм,
Теләһәң дә сумарға.

Ө й р ә к:

— Ирәмәлдәй [76] һарайға
Алтын таштар тутырған;
Төрлө төҫтә йылҡылар
Өйөр-өйөр көттөргән;
Бер ынтылып өргәндә,
Тау-таш, ерҙе онтаған,
Ҡылыс киҫмәҫ муйынды
Батырҙарҙы туптаған;
Бөтә байҙыҡҡа тороҙҙоҡ,
Тарҙыҡта серҙәш булырҙыҡ,
Аҡ батша [77] тигән атамдың
Һөйөп менгән аты бар.
Бөтә йылҡы ҡото [78] — у:
Ут юҡта, у ут бирер,
Һыу юҡта, у һыу бирәр;

Осһоҙ-ҡырһыҙ диңгеҙҙән
Осоп сығыр ҡош булар;
Ялы аппаҡ ебәктәй,
Төҫө талғыр — буҙ ғына,
Һигеҙ күҙҙән * төҙ генә
Ҡайнап сыҡҡан тояҡты
Баһып тора, беҙ генә!
Ҡамыш ҡолаҡ, баҡыр күҙ,
Бәбәге лә аҡ ҡына;
Мундаһы бейек, тар бөйөр,
Суртан тәнде, нығ ҡына;
Ҡарсыға морон, киң танау,
Ҡуш аҙауҙы *, һоһа теш *,
Осло эйәк, ас яңаҡ,
Ҡуш урайҙы, — шу ғына.
Шу буҙ атты бирәйем,
Уралында — һин үҙең,
Һыу илемдә — мин үҙем
Бәхетте ғүмер итәйек.

Һ ә ү б ә н:

— Тәмде һүҙгә алданып,
Ҡыу баш ҡалдым * донъяла.
Бирер малың янда юҡ,
Һүҙең мән алдама.

Ө й р ә к:

— Батша ҡыҙы Нәркәс мин,
Һине алдап тораммы?
Донъя малын ҡыҙғанып,
Ергә сығып үләмме?
Бы күл — минең һарайым,
Көн дә ҡоштай ҡойонам;
Ер ҡояшы * сыҡҡанда,
Көлөп йөҙөп ҡыуанам.
Егет, мине алһаң да,
Ергә сыҡһам, мин үләм;
Өйөңә апҡайтһаң да,
Бер ҡабымдыҡ ит булам.
Егет, һиңә ике һүҙ,
Һайҙап, береһен тыңдарһың,
Береһен һайҙай белмәһәң,
Алйоттоҡта үләрһең.
Егет, мине өбәр ҙә
Бер ҡарамай алға кит,
Бөтә төһтән өйөрҙәп *,
Йылҡы сығар, шуны көт.

Һауымы еткән һыйырҙар
Мөҙөлдәп сығар быҙауһыҙ,
Алпандап * баһыр ҡуйҙары,
Мегерәп сығар ҡуҙыһыҙ *,
Ҡул шауҙатып, ҡул ярып,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,
Аҡбуҙ сығар — мал ҡото,
Бөтә малдан һуңдатып.
Маңдайынан һыйпаһаң,
Телгә килеп, һөйҙәр у,
Ни теләһәң, бар эшең
Һис ҡарыуһыҙ эштәр у.
Алтынданған эйәрҙең
Ҡашына ҡамсы эленгән,
Болғар күндән * матурҙап,
Башына йүгән кейелгән.
Ҡумы *, айылы — барыһы
Бергә ҡушып тегелгән,
Мәңге унан алмаҫҡа
Беркетелеп ҡуйылған.
Уттар * буһа, у үҙе
Башы һуҡҡан яғына,
Һорап тормаһ *, китәр у,
Бер бөртөктәй ҡыл үртәп
Саҡырғанда, киләр у.
Бөтә малың бөтәһе лә,
Буҙ ат ҡалыр янында,
Юлдаш булыр юлында,
Батыр булыр яуында.
Ебәр, егет, китәйем,
Барына әмер итәйем,
Һыу илендә мин — һылыу,
Рәхәт гөмөр итәйем.

Һ ә ү б ә н:

— Һылыу, һүҙен тыңданым,
Мин дә бер уй уйҙаным:
Икәү киттек алға, аттап,
Мал килерен күрәйем.
Һыуһыҙ үләмен, тиһәң,
Сарыҡҡа һыу ҡоямын,
Үҙеңде көнгә тейҙермәй,
Шу сарыҡҡа һалайым;
Әйткән һүҙең тап буһа *,
Һине азат ҡылайым;
Һин дә фаруан * көн ит, тип,
Теләк теләп ҡалайым.

Өйрәк:

— Мин күлгә суммайсы,
Малдар сыҡмаҫ далаға,
Саҡырыуға кимәһтәр,
Һөйҙәп бирмәй атама.
Мине алып һин, егет,
Һис тә мандый алмаһың:
Күгәрсен туным[79] киймәгәс,
Мине төндә күрмәхһең *;
Йәр тип мине һөйәргә,
Ҡуйынында тапмаһың.
Ергә сығып ҡыуарһам,
Нәркәс һылыу тимәхһең...
Ер егетен ер һөйәр —
Тәне ерҙән яралған;
Һыу ҡыҙының бар ере
Нурҙан, уттан яралған.
Ҡояш һине йылытыр,
Мине майҙай иретер,
Минән аҡҡан бер тамсы
Илең ҡыуҙай * ҡоротор.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Һәүбән ышанған да өйрәкте ебәргән. Үҙе артына ҡарамай, өйрәк өйрәткәнсә, алға аттай биргән, ти. Бер аҙ ғына киткәс тә, йылҡы сырҡыраған, һыйыр мөңрәгән, ҡуй-һарыҡ баҡырған тауыштар ишетелә башлаған. Бына бер саҡ елдауыл ҡубып китмәһенме! Һәүбән алға аттай ҙа алмай башлаған, аптыраған, ништәргә лә белмәгән. Егет түҙмәгән, артына әйҙәнеп ҡараған. Ҡараһа, ни күҙе мән күрһен, ер ҡаптаған мал сыҡҡан[80]. Ә теге Аҡбуҙаттың күлдән саҡ [башы мән] муйыны ғына сығып килгән мәле икән. Һәүбәндең артына ҡарағанын күргәс тә, Аҡбуҙат күлгә кире сумған, ти. Аҡбуҙаттың күлгә кире сумғанын күргәс, бына теге малдар, берен-бере тапарҙай булып, өркөшөп, Аҡбуҙат артынан бере ҡалмай сумышып бөткән дә ҡуйғандар, ти.

Ел-дауыл туҡтаған. Һәүбән, үҙ күҙенә үҙе ышанмай, аптырап, ништәргә белмәй, уйҙанып торған да күл ситенә лә барып ҡараған — унда ла нам-нәшән * юҡ, тып-тын. Утырып уйҙаған, уйҙаған да мәхрүм булып ҡайтып киткән, ти.

Йәйҙәүгә ҡайтһа, ни күҙе мән күрһен, бөтә тирмә аҡтарылып бөткән, бала-саға, ҡарт-ҡоро, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын — барыһы бергә йыйылып, аптырашып һөйҙәшеп торалар, ти. Улар янына, таяғын таянған, оҙон сыбыртҡыһын яурынына һалған әлеге Тарауыл ҡарт та килеп, ауылда аҙған-туҙған малын һорашып:

— Мынау беҙҙең сиктәрәк мал көтә инем. Мынау шәп ғәрәсәтдауыл сығып китте лә, малдар ҙа, үҙем дә, ҡайҙа баҫып торғанды, ҡайҙа барып бәрелгәнде белмәй, тарҡалышып бөттөк. Бына шул аҙған-туҙған малдарымды эҙҙәп, һеҙҙең йәйҙәүгә килеп сыҡтым әле, — тип һөйҙәгән сағында [ғына], Һәүбән дә килеп өлгөр-

гән, ти. Һәүбән, ҡарт-ҡороноң һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, тыңдап торған да һүҙ ыңғайына Тарауыл ҡартҡа:

— Олатай, бы ниндәй күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән дауыл булды һуң у? — тип һорағас, Тарауыл ҡарт:

— Ай, ҡустым, бының сере бик ҙур. Былай дауыл беҙҙең быуында буғаны юҡ. Олатайҙар һөйҙәүе буйынса, хәтерҙә ҡалғаны ғына бар. Улар һөйҙәй торғайны: «Борон-борон саҡта бөтә донъяны һыу баҫҡан, беҙҙең олатайҙар бумаған, Урал тауы сыҡмаған[81], бы тирәлә дүрт аяҡты йән йөрөмәгән. Тик дейеүҙәр йәшәгән, һыу батшаһы баш буған саҡта, Урал тигән батыр килеп яу асҡан. Уның Аҡбуҙ толпары юлынан Урал тауы бар буған *. Дейеүҙәрҙе ҡырған урында һыу ҡороп, сағылдар ҡалыҡҡан. Һыу батшаһы еңелә баштағас, төпһөҙ, ялдым-ятыу урынды эҙҙәп, бына ошо һеҙҙең яндағы күлгә сумған. Ул күлдең төбө юҡ, ер ахтындағы даръяға тоташҡан. Шуға һыу батшаһын Урал батыр тоталмаған. У һыу батшаһының аты Шүлгән буған[82]. Шуға Шүлгән күле тип атағандар. Урал батыр үлгәс, Шүлгән батша Урал батырҙың Аҡбуҙатын урҙатҡан. Урал батырҙың улдары ла үлеп бөткәс, һыу батшаһы, Аҡбуҙатты менеп, миҙгел-миҙгел Урал буйына сығып әйҙәнә икән[83]. Аҡбуҙат күлдән сыҡҡанда, үҙ батырҙарын иҫенә төшөрөп, елкенеп ҡанаттарын ҡаҡһа, шунан, ҡанат еленән, тау-таш ҡолатырҙыҡ дауыл ҡуба, бер нәмә ҡалмай аҫтыөҫкә әйҙәнә», — тип һөйҙәй торғайнылар. Бы дауылды мин шулай түгелме икән тип уйҙайым, — тип һөйҙәгәс, Һәүбән һыу ҡыҙының һүҙенең ысындығына ышанған. Тарауыл ҡартҡа ла, бүтән берәүгә лә күргәнен һөйҙәмәгән: ҡулынан кимәгән көйгә дауыл ҡуптарып йөрөй тип асыуҙанырҙар, тип уйҙаған.

Һөйҙәшеп бөткәс, Тарауыл ҡарт үҙ юлына китә баштағас, Һәүбән уны туҡтатҡан да:

— Олатай, һин кем булаһың? — тип һораған, ти. Тарауыл ҡарт үҙенең кем икәнен һөйҙәп биргәс тә, иһенә төшөрә һалып:

— Олатай, һин мине танымайһыңмы? — тип һорағас, Тарауыл ҡарт, Һәүбәндең буй-һынына, төһ-башына * ҡарап, баштан-аяҡ күҙен йөрөткән дә:

— Юҡ, ҡустым, бер ҙә сырамыта алмайым бит. Күҙем [дең нуры] ҡайтҡан, нуры! — тип көрһөнөп ҡуйған да, өһтәп, — Ҡустым, бы саҡты буғас, танып китәйем. Һин кем балаһы булаһың? Төһ-башыңа ҡарағанда, ир һымаҡ күренәһең. Сура батырҙың берәй ярсығы түгеме? — тип һорағас, Һәүбән ҡарттың һыҙма биргәндәренә саҡты барын да һөйҙәгәс, Тарауыл Һәүбәнде ҡосаҡтап үпкән дә, ти:

— Ай, ҡустым! Сура батыр — арыҫлан ине, ул барҙа, бы һыу [әйәһе], ен батшаһы, ер өһтөнә сығып, аяҡ баһа алмай ине әле. Улым, мин биргән һыҙма бармы? — тигән, ти. Һәүбән:

— Бар, олатай, уны йәндән артыҡ аһырайым *, бына ул һыҙма! — тип, һыҙмаһын күрһәткәс, Тарауыл ҡарт һыҙманы ҡулына алып тотоп ҡарап торған да үпкән, ти. Һәүбәнгә кире биргәндә:

— Ҡустым, мыны биргәндә, һин бала инең, мин мының серен әйтмәнем. Бы һыҙма — атайыңдың һыҙмаһы. Бы һыҙма — Урал

батыр балаларынан ҡалған ҡомартҡы. Һыу батшаһы ошо һыҙманан ғына ҡурҡа. Ныҡ һаҡта, бераүгә лә әйтмә, — тип, үҙ уйҙарын һөйҙәп бөткән дә үҙ юлына киткән, ти. Һәүбән алтын өйрәк турында һөйҙәмәгән, ти.

Һәүбән алтын өйрәкте андып күп йөрөгән. Айҙар, йылдар үткән, күл ситендә ҡунып һағалап та ҡараған, һис осрата алмаған, ти. Бүтән ҡош-йәнлектән күп һунарҙар алған, Тарауыл ҡартҡа шыбаға сығарып [84] биргән, уның янына барып та йөрөгән, һаман да алтын өйрәкте һөйҙәмәгән, ти.

Берҙә-бер көн Һәүбән Тарауыл ҡарт янына барғас, һүҙҙән һүҙ сыҡҡанда күл батшаһы тураһында һөйҙәүен һораған, ти. Тарауыл ҡарт:

— У батшаның сығып-нитеп йөрөгәнен күргән кешене белмәйем. Бер саҡ күл ситендә йөрөгәндә, бер ҡатын осраны. Теге ҡатын:

«Мынау күлдә бер алтын өйрәк йөрөйсе, у ниндәй өйрәк икән?» — тигәс тә, икәүҙәп күл ситенә бара һалып ҡараныҡ. Беҙҙе күргәс тә, күлгә сума һалып юғалды. Мин көндөҙ ҡабат ҡараштырғыланым, көндөҙ һис у өйрәкте күралманым. Тағы бер осрағанымда, теге ҡатын: «Һинең мән беҙҙе күргәне бирҙе теге өйрәк сыҡмай. Нисә айҙар буйы буйҙаным, гел айҙың ун дүрте етһә, төндә күгәрсен төҫлө булып сығалар ҙа, супырҙашып, көлөшә-көлөшә, һыу инәләр. Ен ҡыҙҙары», — тип һөйҙәне. Борон да шулай тип һөйҙәй торғайнылар, — тигән, ти. Һәүбән:

— У ниндәй ҡатын икән? — тигәс, Тарауыл:

— «Мәсем хандың бала ҡараусыһы инем. Ҡыҙы ошо күлгә һыу инә килгәндә, мин күҙ-ҡолаҡ булырға эйәреп килгәйнем. Шу хандың ҡыҙы күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп булды. Шуға хан: «Ҡыҙымды тапмай, ҡайтма! Тапмаһаң, күл ситендә асҡа үл, бер ергә лә китмә, тип ҡалдырҙы. Шунан бирҙе асҡа ҡаңғырып йөрөйөм», — тип ҡанды күҙ йәше мән һөйҙәп, илап торғайны. Хәҙер уға күп йылдар булды инде, — тип барын да һөйҙәп биргән, ти.

Һәүбән Тарауыл ҡарттың һөйҙәгән һүҙҙәренең барын да эсенә алып ҡына торған да, унан айырылғас, айҙың ун дүртенсе көнөн көтөп йөрөгән, ти. Айҙың ун дүрте еткәс, күл ситенә барған, ти. Төн аяҙ, тымыҡ, һис шылт иткән нәмә юҡ. Бер аҙ һағалап ятһа, бына күлдең бер яҡ ситендәрәк супырҙап һыу ингән тауыш ҡолағына сағылған. Һәүбән ер ҡырҙап ҡына шыуышып барып ҡараһа, өйрәк түгел, алтын тәхет өҫтөндә алтын сәстәрен һалындырып, бер ҡыҙ сәс тарап ултыра, уның тирәһендә күк күгәрсендәр уйнап йөрөй, ти. Һәүбән яндап ҡына барған да, һиҙҙермәй генә [тегенең] сәсен урап тотҡан. [Сәсен тотҡан] ыңғайға ҡыҙ һиҫкәнеп киткән. Теге күгәрсендәр осоп киткәндәр. Һәүбән ҡыҙҙың сәсен ебәрмәгән, ти:

— Һылыу төҫөн алышҡан:
Өйрәк түгел, ҡыҙ икән, —

тигән, ти.

Нәркәс:

— Мине ҡайҙан тап иттең
Төн уртаһы сағында?
Нисә ҡараусым бар бит,
Ҡарап тора янымда!
Егет, ебәр сәсемде,
Бүлдермә һин эшемде!
Күгәрсендәр киттеләр,
Илгә хәбәр иттеләр,
Атам белһә бы эште,
Һис аямах башыңды!

Һәүбән:

— Һылыу, әйтсе атыңды,
Бер һөйләрмен дан итеп;
Йә бумаһа ҡайтайыҡ,
Бергә торайыҡ көн итеп!

Нәркәс:

— Егеткәйем, шауҙама,
Атым һорап зурҙама *,
Хатта мине күргәнде
Илгә ҡайтып һөйҙәмә!
Егет, һиңә тиң бумам,
Мине алырға уйҙама;
Нурҙан тыуған тоҡоммон, —
Ерҙә йөрөтөп хурҙама.
Ер улына тиң бумаҫ
Нурҙан тыуған ҡыҙ бала;
Һарайҙа үһкән ҡыҙҙар ҙа
Мөлхәтһенмәҫ * далала,
Егет, һүҙең оҙайтма,
Атам киһә, яу һалар;
Илең туҙандай ҡылар,
Тоҡомоңдо юҡ ҡылар?

Һәүбән:

— Һине эҙҙәп күп йөрөнөм,
Ай тыуғандарын көтөп;
Инде, һылыу, ебәрмәм,
Илаһаң да ут йотоп.
Егеттек тигән бер дәүер
Һис нәмәнән ҡурҡмаһ у,
Батыр егет йөрәге
Ҡоро ҡапаҡтан өрөкмәһ у.

Яу асһа ла атайың,
Тайшанмахтай уйым бар.
Яңғыҙлатмах үҙемде
Урал тигән илем бар, —

тигәс, Нәркәс бик оҙаҡ уйға ҡалған. «Атам данын әйткәс тә, ҡурҡмай торған бы ниндәй егет икән?» — тип уйҙаған, ти.

Нәркәс:

— Егет, батырмын, тиеп
Тау ярырҙай һөйҙәйһең;
Атам илен һаҡтаған
Дейеүҙәрҙе белмәйһең.
Егет, батырмын, тиһең,
Үҙем йылҡы әйҙәнем,
Йылҡы мән [мин] китәргә
Аҡбуҙ атты димдәнем.
Йылҡы сыҡҡан сырҡырап,
Һыйыр, һарыҡ мөңөрәп,
Бары бергә ҡушылып,
Хан малындай, ил ҡаптап;
Улар артса ажғырып,
Шүлгән күлен таштырып,
Аҡбуҙат ат сыҡҡан бит,
Ғәйрәт сәсеп, бахмалап.
Күлде ярып елкенгән,
Һине күрергә ынтылған;
Унын ғәйрәт еленән
Урал тауы һелкенгән.
Түҙә алмай, батыры
Ҡолап төшкәс һыртынан,
Аҡбуҙат та, ғәрҙәнеп,
Кире ҡайтҡан йортона.
Шулай толпар ат менгән,
Дейеү-бәрейҙе йыйған,
Һыу йәненең барыһын
Үҙ ҡулында туптаған
[Һәүбәнгә ҡарап]
Шүлгән күле батшаға [86]
Кем булаһың уҡталған?

Һәүбән:

Атаң Шүлгәндә хан буһа,
Дейеү-бәрейҙең барын
Тирәһенә туптаһа,
Аҡбуҙ толпарға менеп,

Ел-дауылын ҡуптарһа,
Уһаҡ япырағындай ҙа
Йөрәгем ҡурҡып һелкенмәһ!
Ун ике башты дейеүең
Илемә утын һалһа ла,
Уралымда дау асып,
Сергелектән ҡан ҡойоп,
Илемә яу һалһа ла,
Һис ҡурҡмамын атаңдан,
Йөрәгемә уҡ атһа ла!
Сура батырҙан ҡот йыйып,
Батыр тыуған затым бар;
Етем-еһер күҙ йәшен
Һыҡратмаҡҡа антым бар.
Һылыуҡайым, маһайма,
Шүлгән күле тәрән, тип,
Атам илдә ҙур батша,
Дейеүҙәрҙе йыйған, тип,
Уралда илаған етемдең
Күҙ йәше аҡһа, күл булыр.
Ҡәберен ағыҙып батырҙың
Юшҡын түкһә, сүл булыр.
Һыуҙа йөҙгән ҡыҙ бала
Ҡайҙа һыуҙау табыр * у?
Шүлгән һайыҡһа юшҡындан,
Ике башты дейеүҙәр
Ҡайҙа ялдым * табыр у?
Ил зарына моңайған
Иңләп ятҡан Уралым,
Йылғыр аҡҡан Иҙелем,
Тоноҡ аҡҡан Яйығым —
Нөгәр йыйып йәшәргә
Атаңа торлаҡ бирмәҫ у.

Тигән һүҙҙәрен ишеткәс, Нәркәс ҡурҡҡан, ти.

Н ә р к ә с:

— Егет, һүҙең һүҙ булһын,
Һиңә антым бирәйем,
Үҙенде алып илемә,
Атам торған еремә,
Ҡан-яу асмай арала,
Һоҡтанғаның бирәйем.
Алтын һарай эсендә
Мамыҡ түшәк йәйәйем,
Ни теләһәң алырға,
Һорағаның бирәйем.
Һарайымда ҡалырһың.

Беҙҙә толҡа тапмаһаң,
Илем аралап йөрөрһөң,
Бар һарайҙы күрәрһең,
Мине Нәркәс тип һөйһәң,
Мөлхәтһенмәй барына,
Шүлгән һарай иленә,
Нәркәстәй хур ҡыҙына,
Аҡбуҙ толпар менәрһең,
Ҡулға бәхетең туптап,
Уралыңа ҡайтырһың.

Һәүбән, Нәркәстең һүҙендә тороуына ышаныу өсөн, тағы бер тапҡыр ант иттергән дә, анан икәүләп һыу батшаһына китәргә буғандар. Нәркәс күҙ йоморға ҡушҡан. Һәүбән күҙен йомған. Күҙен асырға ҡушҡан. Һәүбән күҙен [асҡан. Күҙен] асһа — үҙен ҡыҙҙың алтын һарайында күргән, ти.

Һәүбән бер нисә көн ҡунаҡ буған. Һарай ҡыҙҙары йырҙап-йырҙап ҡунаҡ иткәндәр, тик Һәүбән бер ҙә күңел биреп ашамаған-эсмәгән, ти. Нәркәс Һәүбәндең бойоҡҡанын, толҡа тапмағанын һиҙгән дә атаһына барған, ти. Атаһына баштан-аяҡ үҙ хәлен һөйҙәргә керешкән, ти.

Нәркәс:
— Шүлгән тигән ҙур күлең
Һыуҙау * булды йәшемдән.
Уйнап-көлдөм эсендә,
Һис йәш түкмәй ҡайғымдан.
Ун һигеҙгә еткәнсе,
Күп һунарсы осраттым,
Күптәр тоҫҡап атһа ла,
Барынан да яҙлыҡтым.
Алтын өйрәк тун кейһәм,
Ер ыласыны һиҙмәне,
Кистең йылғыр еле лә
Сәсем һыйпап һөйөргә
Ҡара баштан ҡамыштан
Үтер юлын тапманы.
Ҡамыштағы ҡама ла
Һыу ингәнем һиҙмәне.
Аҙаҡ тапҡыр берһендә
Өйрәк булып атылдым,
Ай нурына мансылып,
Һыу ингәндә, тотолдом.
Ергә сыҡһам, үлә инем,
Һүҙем биреп ҡотолдом.
Атың әйтеп ант иттем
Арала яу асмаҡҡа,
Батыр һоҡланған заттан,
Атай, ҡырҡыулашмаҡҡа.

Бына, атай, у батыр
Һарайымда ҡунаҡта,
Антым шулай ҙур буғас,
Ҡунаҡ иттем аулаҡта.
Бына һүҙең әйт, атай,
Маң* [87] антҡа торорлоҡ,
Мәгәр батыр — алдыңда,
Ни теләһә егетем,
Бүлә[гең] бир малыңдан,
Булһын бүләк оҡшарлыҡ.
Инде малың ҡыҙғанһаң,
Үҙем барыр уйым бар.

Батша ҡыҙының бы һүҙен ишеткәс, бик аптырауға ҡалған, ти. Бы егеттән нисек тә ҡотолоуҙы уйҙап, ҡыҙына былай тигән, ти:

— Ҡыҙым, аҙаҡҡы һунарың
Хәйерле һунар бумаған,
Өйрәк тунға атыр ир
Маң илдә һис тыумаған.
Алтын ҡолан сәсеңде
Йылтыр күҙле * күрерҙәй,
Ҡыҙым, андай зур [88] дошман
Тыуғаны юҡ әсәнән.
Ҡыҙым, уға юл тапһаҡ,
Ботон ботса ботарлап,
Ҡыҙым, шунан ҡотолһаҡ,
Ҡабат Шүлгән буйында
Һине атар ир булмах,
Һине тотоп маҙалар
Тирә-яҡта йән булмах.

Нәркәс:

— Атаҡайым, у егет
Һүҙем тыңдап килде у,
Мине атҡан сағында
Өйрәк тиеп белде у.
Атаҡайым, тағы ла
Мине ҡосто ҡулына,
Уның ҡулы йылыһы
Эҙе [89] йөрөй тәнемдә.
Уның ҡаны ҡойолһа,
Маң тән[ем]дә ҡалыр у;
Уның йомшаҡ телдәре
Йөрәккә май булыр у.
Атай, уға ҡаныҡма —
Уның ҡанын ағыҙма,
Уның өсөн бар Урал
Эҙҙәр һинән ҡарымта.

Унын теләге ҙур түге:
Һинән тәхет һорамай,
Малын һорап тағы ла
Байҙығынды муйырмай *.
Атай, мине бала итһәң,
Егеттең ҡанын ағыҙма,
Бағауылһыҙ егеттең
Йәнен алып дан алма!
Егеткә бир Буҙатты,
Һынап ҡара ғәйрәтен.
Тотоп алалһа, егет
Уралда йәйһен ҡанатын.

Батша бы һүҙҙәрҙе ишеткәс, бик оҙаҡ уйлап торған, ти. Үҙенең вәзирҙәрен йыйған. Ун ике башты Ҡәһҡәһә тигән дейеүенә кәңәш иткән, ти. Ҡәһҡәһә батшаға:

— Буҙат бирһәң егеткә,
Көсөң китәр ҡулыңдан,
Буҙат китһә ҡулыңдан,
Айырылырһың юлыңдан.
Башы берәү аждаһаң
Уға күренер мунсаҡтай;
Ике башты аждаһаң
Уға күренер янсыҡтай;
Башы өсәү аждаһаң
Уға күренер турһыҡтай;
Илең тотҡан Ҡәһҡәһәң, —
Ул да ҡалыр бурһыҡтай.
Батшам, һиңә бер аҡыл:
Һарайың тулы ер ҡыҙы,
Һинең ҡыҙҙан да һылыу
Мәсем хандың бар ҡыҙы.
Уны күрһә, егетең
Аҡбуҙатын онотор,
Бер ауыҙһыҙ * алам, тип,
Егет шуға ынтылыр, —

[тигән, ти]. Батша Ҡәһҡәһәнең һүҙен оҡшатып, һәүбәнде Нәркәс менән бергә урҙап килтерелгән ҡыҙҙар һарайына ебәрмәк буған, ти. Батша Нәркәсте саҡыртып алып:

— Балам, күңелең хуш буһын,
Егеткә бирәм теләген,
Һинең ҡәҙерең тағы артһын,
Күреп сыҡһын байҙығым.
Һарайҙарыма апар,
Һарай ҡыҙҙарын күрһен,
Һис ҡыһымға ҡалмайса,
Ҡыҙҙар мән [ул] һөйҙәшһен, —

тигәс, Нәркәс Һәүбәнгә бөтә һарайҙы күрһәтеп йөрөтөп сыҡмаҡ буған, ти. Бик күп һарайҙарҙы үткәндәр, бик ҙур баҡса аша бер алтын һарайға барғандар, ти. Нәркәс:

— Был һарайҙа мин әйткән
Данлы толпар Буҙат бар;
Танау тартып ажғырыр,
Күҙенә текәп ҡарап тор;
Яҡын килеп ҫапсынһа,
Алдына барып баһып тор;
Тибәм тип, арт[ын] бирһә;
Яңбашынан һөйөп тор;
Ҡолаҡ шымайтып ынтылһа,
«Ер батыры — мин!» — тип көл.
Шунан килер янына,
Һыртынан һыйпап һөйәрһең;
Ялынан алып ике ҡыл,
Беләгенә бәйләрһең;
Ҡойроғонан ике ҡыл
Аяғыңа бәйләрһең, —

тигән дә, (Нәркәс) һарайҙы асып, Һәүбәнде Аҡбуҙат янына индергән, ти.

Һәүбәнде күргәс, Аҡбуҙат үрә һикереп, танау тартып ажғырып ебәргән, ти. Һәүбән унан ҡурҡмаған. Аҡбуҙаттың янып торған баҡыр күҙенә текәп ҡарағас, Аҡбуҙат башын сайҡап, ҡырғараҡ барып торған да алғы аяҡтары мән сапсына баштаған. Аҡбуҙаттың сапсынған аяҡ тауышына һаҡтап торған дейеүҙәр һарай түбәһенән килеп төшә баштағандар, ти. Ярҙамға дейеүҙәрҙең килгәнен күргәс, Аҡбуҙат бөтә асыуы мән Һәүбәндең алдына килеп, баштарын сайҡап, сапсырға ынтыла баштағас, Һәүбән һис тайшанмай ҡаршы барған, ти. Аҡбуҙ, Һәүбәнде былай ҙа ҡурҡыта алмағас, әйҙәнеп тибәргә ынтылған икән — Һәүбән янбашынан һөйгән, ти. Аҡбуҙат былай ҙа булдыра алмағас, ҡолаҡ шымайтып, Һәүбәндең өҫтөнә ырғымаҡ буған икән, Һәүбән, уға ҡарап, былай тигән, ти:

— Аһау тотоп өйрәткән
Урал батыры Һәүбән мин,
Батыр һөймәһ ат һуйып,
Итен ейгән батыр мин.
Һаҙаҡ теймәһ Нәркәсте
Атып алған Һәүбән мин.
Урал тигән илемде
Яуҙан һаҡтар батырмын.

[Һәүбән шулай] тигәс, Аҡбуҙат айбанған *, ти. Аҡбуҙаттың айбанғанын күргәс, дейеүҙәр ҙә берәм-берәм һарайҙан шыла баштағандар, ти. Аҡбуҙат та, яңғыҙ ҡалғас, Һәүбәндең батырлығын күр-

гәс, булдыра алмаған, Һәүбәнгә килеп башын эйгән, ти. Быны күргәс, Һәүбән Нәркәстең бар әйткәндәренә ышанған да Аҡбуҙаттың ял-ҡойроғонан ҡыл алған. Ҡылын алғас, Аҡбуҙат:

— Егет, ерҙең батыры
Һәүбән батыр һин буһаң,
Йомро тояҡ йылҡыла *
Ат толпары мин булам.
Ялым һиңә көс бирер,
Ҡылыс тотһаң ҡулыңда;
Ҡойроҡ ҡылым көйҙөрһәң,
Яныңа сабып килермен,
Ат булырмын яуыңда, —

тигән дә, үҙ батырындай күреп, Һәүбәндең алдында ҡолаҡтарын ҡайсылап, иркәләнеп торған, ти. Шунан аҙаҡ Һәүбән, Аҡбуҙатты һыртынан яратып, янынан сығып киткән, ти. Нәркәс Һәүбәндең сыҡҡанын ҡырҙараҡ көтөп торған, ти. Һәүбәндең иһән-һау сыҡҡанын күргәс, шатлығын белдереп, Нәркәс һүҙһеҙ генә йылмайып ҡуйған да ҡыҙҙар һарайына эйәртеп апарған, ти. Һарай ҡапҡаһы төбөнә еткәс, Нәркәс, Һәүбәнгә өйрәтеп, былай тигән, ти:

— Бы һарай тулы ҡыҙ булыр,
Һылыуҙары күп булыр,
Аралап, күҙ һалырһың —
Айҙан яҡты йөҙ булыр;
Ике бите уйылып
[Ҡара ҡашы ҡыйылып],
Оҙон керпеге аша
Ҡарап көлгән күҙ булыр;
Ҡарсығалай түш киргән,
Ауыҙын алаптай асмай,
Көмөштәй тешен йылтыратып,
Наҙлы көлгән ҡыҙ булыр.
Бал ҡортондай билде * үҙе,
Йөрәгеңә ятырҙай,
Айһылыу тигән ҡыҙ булыр.
Уралдан урлап алынған
Мәсем хандың ҡыҙы у.
Ҡыҙҙы һөйһәң, атамдан
Шуны һора, бирер у.
Уралға апкитәрһең,
Атаһына илтәрһең,
Ханға кейәү буларһың.
Егет, тағы онотма,
Бында тағы ҙур сер бар:
Бы һарайҙан сыҡҡас та,
Убыр ҡарсыҡ ҡаршылар,
Төрҙө һүҙ[ҙәр] мән арбар,
Һәрмәләнеп, юхалар.

Ҡулың бирмә тоторға,
Аяғың бирмә һөртөргә.
Барын эштәп бөткәс тә,
Ҡойроҡ ҡылын көйҙөрһәң,
Ел-дауылһыҙ янында
Аҡбуҙатты күрерһең.

[Ҡыҙҙың ошо] һүҙен ишеткәс, Һәүбән аптырағандай буған да, ти, бер аҙ таң ҡалып, Нәркәскә былай тигән, ти:

— Атаңа әйтмәҫ сереңде
Миңә әйттең, һылыуҡай,
Илгә сәсмәҫ сереңде
Миңә сәстең, һылыуҡай.
Бы сереңде әйтеүең
Дух күрепме, һылыуҡай?
Мине һынап, сын һөйөп,
Йәр күрепме[90], һылыуҡай?
Миңә әйтсе бер һүҙең,
Кер ҡалдырмай, һылыуҡай,
Һине һөйһәм ни була,
Күңелем яттан алдырмай!
Күктең айы һылыуҙа,
Ҡояш һөйгәс йөҙөнән,
Ҡояшты нур алғанға,
Гөл үптермәй үҙенән.
Айһылыуҙың йөҙө лә
Тыштан ғына көлһә лә у,
Күңеле нурҙы бумаһа,
Айҙай ғына булыр у, —

[Һәүбән шулай] тигәс, Нәркәс бик оҙаҡ уйҙап торған да былай тигән, ти:

— Егет, аҙаҡ серем шу:
Һиңә бумам, уны бел.
Ерҙә буған батырға
Атам бирмәһ, бәхил бул!
Егетем бар һөйөлгән,
Батыр булып танылған,
Сер тотоуҙа ир булып
Үҙ янымда һыналған.
Уны мәңге таштамам,
Уны ситкә бирмәмен:
Атын да һис әйтмәмен;
Йөрәгемдә яғылған. —

[Ҡыҙ шулай] тигәс, Һәүбән дә көсләшмәгән[91], ти. Нәркәс Һәүбәнде ҡыҙҙар һарайына индереп ебәргән, ти. Һәүбән һарайға

**ингәс тә, ҡыҙҙар араһында Айһылыу айырым күренгән. Айһылыу ҙа Һәүбәнгә таба килгән дә, былай тигән, ти:**

— Төһөң-башың, егеткәй,
Ер егетенә оҡшай.
Тылсымдарҙы уҙа алып,
Уралда уйнап-көлгән
Иркә ҡыҙҙарҙы таштап,
Һулыған йөҙлө ҡыҙ көҫәп *,
Ништәп килдең һин былай?
Әллә Шүлгән ҡоропмо,
Батшалары үлепме,
Күп илаған күҙ йәштән
Ерҙә дәрйә * булыпмы?
Балаға ла буй биргән
Йылҡы тотоп, ат менгән;
Ҡирәгә * бауын төн киҫеп,
Ҡыҙҙар урҙап йәр һөйгән;
Ауҡан * тындыҡ урманда
Шаңҡып йырын йырҙашып,
Илаған батыр булырмы?
Уралдың һылыу ҡыҙҙары
Һыу төбөндә һарайҙа
Ҡан илаһа быҒауҙа,
Шу быҒауҙы сисмәһә,
Уралға ул булырмы?
Иленә батыр булырмы?

[Шулай] тигән һүҙен ишеткәс, бар ҡыҙҙар ҙа, эһе күҙ йәштәрен түгеп, илашып, Һәүбәнде ҡосаҡтап алғандар, ти. Һәүбән дә быларҙы ҡыҙғанған, күҙ йәштәре сыҡһа ла, ҡыҙҙарға һиҙҙермәһкә тырышҡан, ти. Ҡыҙҙар мән һауҙашып, һарайҙан сығып киткән, ти.

Һәүбән сығыуға, бер ҡарсыҡ [анын] алдына килгән дә былай тигән, ти:

— Егет, егет икәнһең,
Шүлгән күлдә буғанһың,
Алтын өйрәк атҡанһың,
Ханһарайға кигәнһең,
Хандың һылыу ҡыҙына
Оҡшар егет буғанһың.
Хан ҡыҙы һөйә һине лә,
Егете барға тартына,
Һиңә хәйлә өйрәтәм,
Ҡулың бирсе ҡулыма, —
Бер типкәндә, ватырһың
Егетенең һарайын,
Ҡыҙын үҙең алырһың,
Бир аяғың үбәйем.

[Шулай] тип Һәүбәндең алдына килгәс, (Һәүбән) ҡарсыҡҡа ҡулын бирмәйсә, бик оҙаҡ уйға ҡалған, ти. Нәркәстең ҡарсыҡ тураһында һөйҙәгән һүҙе мән ҡарсыҡ һүҙенең ҡайһы раҫ икәненә ышана алмай, бик оҙаҡ уйҙа ҡалғанда, ҡабат Айһылыу янына инергә ҡарсыҡ турында һорарға уйҙап барған. Тик ҡапҡаны ҡабат асалмаған. Шулай ҙа Нәркәс һүҙен тотҡан: ҡарсыҡҡа ҡулын да, аяғын да бирмәй китә баштаған. Ҡарсыҡ[тың]:

«Егет, батыр икәнһең,
Үҙең серҙе икәнһең:
Ебәк мән уралған,
Алтын мән ҡоршалған,
Ынйы мән биҙәлгән,
Ел-ямғыр [ҙа] теймәгән,
Керпеге йәш күрмәгән,
Күңеле ғәм татымаған,
Сит намыҫын ер итеп,
Күҙ йәштәрен күл итеп,
Күңел асҡан хан ҡыҙын,
Һине Ерҙәй һанаған,
Үҙен Көнгә тиңдәгән
Ҡыҙға мине тиңдәйһең!
Маң алһыу йөҙҙәрем
Буштан ғына кипмәгән,
Маңдай күҙең [буһа ла,
Күңел күҙең юҡ икән.
Алтын ҡашыҡтан аш ейгән,
Мамыҡ түшәктә түш йәйгән,
Ҡыҙҙы миндәй күрәмһең?
Маң һүҙгә ышанмай
Бәхетең уртаҡ буләмһең?»

Тигән һүҙҙәрен ишеткән Һәүбән бик оҙаҡ уйҙап тора ла, ҡарсыҡҡа яҡын килеп, һораша баштай.

Һәүбән:

— Йөҙөң-башың, инәкәй,
Йонсоғандай күренә,
Күкрәгеңдән сыҡҡан һүҙ
Тонсоғандай күренә.
Бы илдә яңғыҙмын,
Серең һөйҙә, инәкәй.

Ҡарсыҡ:

— Ышанмах иргә сер һөйҙәү —
Башыма яҙыҡ булыр у;
Ҡурҡаҡ иргә һүҙ һөйҙәү —
Башыма ҡаҙыҡ булыр у.

Һарай сере — тәрән сер,
Бары шаһит булыр у.
Ҡулың тотһам, күкрәгем
Үҙе телһеҙ һөйҙәр у;
Аяғың тотһам, юлдарың
Үҙе асыҡ булыр у;
Телем асып һөйҙәһәм,
Телем батша киһәр шу, —

тигәс, Һәүбән бик тәрән уйға батып, ништәргә белмәй торғанда, Нәркәс кигәнен күргәс, ҡарсыҡ киткән, ти. [Нәркәс]:

— Әйҙә, егет, һуңдама,
Маң һүҙҙе таштама!
Атам көтә ҡунаҡҡа
Һарайында, шауҙама.
Атам урын биргәндә,
Уң яғынан алармың;
Атап һыуһын биргәндә,
Һулың мән алармың;
Атам ашын биргәндә,
Ике ҡулдап алармың;
Атам бысаҡ биргәндә,
Уңың мән алармың;
Атам ҡарап көлгәндә,
Уң күҙеңде ҡыҫармың;
Атам аяҡ һуҙғанда,
Ҡул ҡаушарып торармың;
Атам тороп киткәндә,
Ҡырын ятып ҡалармың;
Атам ҡылыс тотҡанда,
Теш һыҙыҡлап торармың;
Атам һуҙһа ҡулдарын,
Кире артҡа китәрһең;
Шунан һарай һелкенер,
Унан ҡурҡмай көләрһең.
Ошоноң барын эштәһән,
Айһылыу мән икеңде
Үҙ ереңдә күрәрһең, —

тигәс, Һәүбән ризалыҡ белдергән дә:

— Был сереңдең ҡатмарын
Һорап белеп буларммы?
Юҡһа һарай эсендә
Теҙелеп килгән йоламы? —

тигән. Һорауҙы ишеткәс, Нәркәстең төһтәре үҙгәреп, Һәүбәнгә бик

оҙаҡ тектәп ҡарап торған да ҡосаҡтап үпкән. Күҙҙәрен йәшләндергән Нәркәс:

— Ҡарсыҡ һиңә ни тине,
Мин дә шунан уҙалмам, —

тигән дә алға аттағандай буған, ти.

Һәүбәнде йоҡо баҫҡан. Битенә ҡояш төшкәнгә һиһкәнеп, күҙен асып ҡараһа, күҙ алдында Нәркәс тә, һарайҙар ҙа — бер [кем, бер ни] ҙә юҡ, ти. Бөтә күргәндәрен, әллә төш кенә булдымы тип уйҙап, күҙен ситкә йүгертһә, үҙенән алыҫ түгел, күл ситендә Аҡбуҙ ҡолаҡтарын ҡайсылап тора. Аның янында Айһылыу утырғанын күргән дә аптыраған, ти. «Нәркәс үпкәләгәндәй булды, атаһы янына ла барманым; бы ҡыҙ мән Аҡбуҙат ништәп бында сыҡҡан, ҡыл көйҙөрөп саҡырманым да», — тип аптырап торғанында, Аҡбуҙат [Һәүбән] янына барып, былай тигән, ти:

— Нәркәскә һорау бирмәһәң,
Шаһ һарайын асҡайның,
Үҙен тәхеттән төшөрөп,
Һыуға батша буғайның.
Нәркәс һылыу-матурҙың
Бергә туйын ҡылғайның.
Ҡарсыҡҡа ҡулың бирһәң,
Үҙ әсәңде тапҡайның;
Унан аяҡ үптерһәң,
Атаң ҡонон тапҡайның,
Айһылыу тигән матурҙан
Айырылып ҡалғайның, —

тигән. Һәүбән аптыраған, серҙе аңдамағас, сәбәбен һораған, ти. Аҡбуҙат:

— Мине менәр ир буһаң,
Ҡуйныңа ел тулмаһын,
Ҡайҙа барһаң, яңғыҙ бул,
Ауыҙың асыҡ бумаһын!
Бөгөн һөйгән йәреңдең
Күңеле бер тип уйҙама!
Күңеле китһә, ят булыр,
Тирә-яғың ут булыр.

Бы яуапты Айһылыу ишеткән дә бик күңелһеҙләнгән. Тик Һәүбәнгә лә, Аҡбуҙатҡа ла белдермәгән, ти. Һәүбән, Аҡбуҙ янына барып, теҙгендәрен рәтләп, атына менеп, Мәсем хандың һарайына киткәндәр, ти. Һарайға яҡындағас, Һәүбән атын туҡыратҡан да Айһылыуҙан:

— Бергә инәбеҙме, башҡа-башҡа инәбеҙме? — тип һораған, ти. Айһылыу:

— Егет, мин бик аҙаным,
Күҙем ышанмай күргәнгә;
Шулай ҡотолдом микән, тип,
Аҡылым етмәй уйҙарға;
Ни әйтергә белмәйем
Һинең әйткән һорауға;
Ҡарыш ситкә тайпылһам,
Тағы дошман алыр, тип,
Үҙ башымдан ҡурҡамын;
Һиңә бергә бар тиһәм,
Урлаусы һин икән тип
Бәлә яғыуҙан ҡурҡамын, —

тип әйткән, ти. Һәүбән быға ҡаршы:

— Маң башым һау булһа,
Ҡабат дошман алалмах,
Атаңа бергә барһаҡ та,
Беҙгә яла яғалмах.
Шулай ҙа һин яңғыҙың
Ҡайтып һөйҙә атаңа,
Атаң һүҙең тыңдаһын,
Асыҡ белһен дошманын.
Йөрәге етеп атаңдың,
Оран һалһын йортона:
Шүлгәнгә яуын асырға,
Унан ҡонон алырға.
Мин барырмын бер аҙаҡ,
[Атаң яйын белгәстән,
Батырҙарын йыйғастан]
Барымтаға[92] барырға, —

тигәс, Айһылыу атаһы Мәсем хандың һарайына яңғыҙы ҡайтмаҡ булған. Уны Һәүбән яман ҡаялар, урмандар, яман һыу-күлдәр аша оҙатҡан. Үҙе Аҡбуҙаты мән ҡалған, ти. Ҡасан осорашыу тураһында һөйҙәшкәс, Аҡбуҙат Һәүбәндең уйын белгән дә шунда уҡ ғәйеп буған. Һәүбән аптыраған, ҡыл көйҙөрөп саҡырырға уйҙап торғанда, Аҡбуҙат иһке кейемдәр апкигән, ти. Һәүбән бы кейемдәрҙе кейгән дә, Аҡбуҙатты оҙатып, үҙе Айһылыу артынан Мәсем хан йортона киткән, ти.

Һәүбән Мәсем хан торған йәйҙәүгә барып еткәндә, ҡымырхҡа төһлө ҡайнап, төрҙө ерҙә халыҡ эркелешеп, йыйылып һөйҙәшкән саҡтары буған, ти. Халыҡ янына барған, һауҙашҡан, үҙен бер юлаусы итеп күрһәткән, ти. Халыҡтың һүҙен тыңдап торған. Бөтә халыҡтың телендә хан ҡыҙының ҡайтыу хәбәре ҙур яңылыҡ буғанын белгән дә Һәүбән хан һарайы тирәһендәге халыҡ төркөмөнә таба аттаған. Шул саҡта урта йәштәрәк бер ҡатындың хан һарайынан сыҡҡанын күргәс, бөтә халыҡ унан ҡыҙҙың ҡай-

тыу хәбәрен һорашырға ынтылған, ти. Тик ҡатын бер һүҙ әйтмәй, ҡулын һелтәп:

— Ишетерһегеҙ әле, һөйҙәмәйем! — тип халыҡты йырып-йыртып, үҙ торҙағына ҡайтып киткән, ти. Һәүбән бы ҡатындың ҡайҙа барып инеүен күҙәтеп, уның артынан аттаған, ти. Ҡатындың йортона барған да, инәргә һораған, ти. Ҡатын Һәүбәндең кем икәнен яйҙап һораша башлағас, үҙенең алыхтан килгән бер юлаусы икәнен һөйҙәп, ҡунып китергә һораған, ти. Ҡатын: «Былай төбәп килгәс, ҡунырһың инде, сит кеше ҡайҙа бара белһен», — тигән, ти.

Һәүбән арҙы-бирҙе сисенеп бөтөүгә, ҡатындар, ҡыҙҙар, әбей-һәбей, ҡарт-ҡоролар ҙа, бы ҡатындың ҡайтҡанын күрә һалып, килеп ингәндәр, ти. Ҡатындар: «Айһылыуҙы күрҙеңме?» «Бик ябыҡҡанмы?» «Ҡайҙа булды икән, һораштыңмы?» тигән һораүҙарҙы бер-бер артты яуҙыра баштағандар.

Хужа ҡатын:

— Айһылыуҙы күреп, иһән-һауҙыҡ ҡына һораштым. Хәлен һораша алманым. Үҙе бик ябыҡ, ҡоро һөлдә генә ҡалған, — тип һүҙен бөткәс, ҡыҙҙар:

— Нигә хәлен һорашманың? Нисек буғанын белергә кәрәк ине! — тигәс, теге ҡатын:

— Һораша ғына баштағайным: «Еңгә, ҡуй әле. Ҡайтҡаныма үҙем дә ышана алмайым... Бер-ике көнһөҙ бер нәмә лә һөйҙәй алмайым!» — тигәс, көстәшмәнем. Тик хандың үҙенең ярандарына: «Аллаға шөкөр, биргән саҙаҡа, ҡылған ҡорбандар арҡаһында ғәйеп ирәндәр[93] ярҙамы мән балам ҡотолған. Шүлгән батшаһы урҙаған буған икән, — тип һөйҙәгәне ҡолаҡҡа салынып ҡалды, — тигән, ти. Бы ҡатындың һүҙен тыңдап, башын түбән баһып утырған бер ҡарт:

— Ярай, мин әле Сура батырҙың ярсығы ҡалып, атаһының ҡоно өсөн ҡарымтаға * алды микән, тип уйҙағайным. Былай ҡанһыҙ ҡотолоп ҡайтҡас, шөкөр итергә кәрәк. Юғиһә, Мәсем хан Сура батырҙың ете ятына * саҡты үтереп бөтөрөргә ант иткәйне бит, — тип һүҙ ҡыҫтырып ҡуйған, ти. Хужа ҡатын өҫтәп:

— Сура батырҙың тағы кемен эҙләй? Сура батырҙың урманда аҙыҡ эҙҙәп йөрөгән бисәһен дә ҡотҡармай Шүлгән күленә бауҙап һалған бит, уға тағы ни кәрәк?! — тип әйткән икән, шундағы бер ҡатын:

— Ҡуй инде, ханға осрағас, үҙенең Сура батыр бисәһе икәнен әйтмәһә, бер нәмә лә булмаҫ ине, — тип ҡуйған. Ҡарт:

— Һеҙ белмәйһегеҙ шу! Уны һыуға һалғанда, мин ситтән күреп торҙом бит. Мин нисек икәнен беләм инде, — тигәс, ҡатындар:

— Әллә, беҙ ишеткәнебеҙҙе һөйҙәйбеҙ, — тип һүҙҙе бөтөргәндәр, ти.

Бы һүҙҙәрҙе ишеткәс, Һәүбән атам мән әсәмде Мәсем хан үлтерҙе микән ни, тип уйҙаған, ти. Сура батыр тураһында һүҙ сыҡҡас, бары ла һүҙһеҙ утырғанын күргәс, Һәүбән:

— Олатай, бы тирәлә Сура батыр берәү инеме, икәү инеме? — тип һораған, ти. Ҡарт:

— Мырҙам, илдә дан тотҡан, ил намыҳын һаҡтаған Сура батыр берәү ине. Мин Урал япрағында ла [94], Урал армыттарында ла бүтән телгә алып һөйҙәрҙек Сура тигән бүтән кешене ишеткәнем юҡ. Һыуға һалған саҡта бахыр Сура батырҙың бисәһен: «Бәғерем — балам ҡалды! Шуның өсөн бауырым һыҙҙай: иремде үлтергәнегеҙҙе белдем, кешегә әйтмәçкә ант иттем, ауырып үлде, тип илгә оран һалдым, ҡыйын булһа ла, күндем дә торҙом инде, исмаһам, үҙемде үтермәгеҙ инде!» — тип ялбарғанын ишетеп торҙом. Юҡ, хан ҡуйманы, күлгә ырғытты. Хан ҡатындың һүҙенән балаһы барҙыр, тип эҙҙәргә уйҙағайны, уларҙың йәйҙәүе беҙҙең тирәнән күсеп китеүе арҡаһында, табалманы. Ҡалған балаһы улмы, ҡыҙмы — уныһын белмәнем, — тигәс, Һәүбән тағы аптыраған, ти. Һәүбән:

— Олатай, улай буһа, маң ишетеүгә ҡарағанда, Сура батыр икәү булырға кәрәк. Бер Сура батыр үлгәс, бисәһе, кәфен табалмағандан, батырҙың һыҙмаһын биреп кәфен алған өсөн, етеһен уҡытырға хәйерҙеге бумағас, илгә сығып киткән икән, шул китеүҙән киткән, ҡайтмаған, ғәйеп буған, тип һөйҙәйҙәр, — тигән, ти. Ҡарт:

— Мырҙам, бисәһе ғәйеп булыуы шулай, мин һөйҙәгәнсә. Сура батырҙың үлеме лә, мин һөйҙәгәнсә. Тик һыҙмаһын кәфенгә биргән икән тигән һүҙ буш. Ул һыҙма һатылмаған. Уны хан таптыртмаһын тип, шулай һөйҙәйҙәр. Уның кемдә икәнен бисәһе лә белә ине, — тигәс, Һәүбән:

— Үҙен үлтергәс, хан нисек һыҙмаһын алмаған икән? — тигән. Ҡарт:

— Алыр ине, у һыҙманы ҡайҙа ҡалдырғанын белмәне. У һыҙманың Урал батырҙан ҡалғанын хан белә ине, таба алманы ғына. Сура батыр һунарҙан йөрөп килгәс, бик арыған да, һыҙмаһын үҙе мән һәр саҡ һунарға йөрөй торған юлдашы Тарауыл ҡартҡа биреп, уны һунарға ебәргән. У йөрөп ҡайтҡансы, үҙе ял итергә буған. Шу көнө Мәсем хан мән Аҡбулат аҡһаҡал [95] да һунарға сыҡҡан буған икән. Тарауыл ҡарт китеп барғанында миңә осораны. Мин шунан Сураның хәлен беләйем тип, уға таба атта-һам, Мәсем хан мән Аҡбулат Сураны: «Хоҙай күктән көткәнде ерҙән бирҙе бит әле!» — тип шатланып, йоҡтап ятҡан ерендә үтереп торалар. Шунан һуң ништәргә: «Һыуға һалһаҡ, Сура батырҙың үлемен, терелеген халыҡ белмәһ, Сура батырға арҡаланып, һаман халыҡ беҙгә ҡаршы булыр. Туҡта, үлгәнен халыҡ белһен. бисәһен саҡырып алайыҡ та, халыҡҡа ауырып үлде тип хәбәр таратырға ант иттереп күмдерәйек», — тип һөйҙәштеләр. Мин дә быны күргәс, Тарауылды эҙҙәп киттем, тапманым, шунан ҡайтып киттем. Аҙаҡ бисәһенең килгәнен белдем. Бисәһе, бахыр, ништәһен, шулай эштәгән. Ай Сура батыр, Уралды бирмәйенсә, Аҡбулат аҡһаҡал мән, Мәсем хандар мән бик күп йылдар һуғышып килгән кеше ине. У бар саҡта, Урал буйындағы ир-ат һыуында балыҡтай йөҙә, урманда ҡош булып һайрай ине. Батыр әрәм бул-

ды шу» — тип һүҙен бөтөргән, ти. Һәүбән: «Күлдә осраған ҡарсыҡ, ысынлап та, әсәйем микән әллә?» — тип уйҙап ҡуйған, ти.

Һәүбән, ата-әсәһенең хәлен бы ауылда ишетеү мән генә түҡтамаған, тирә-яҡ ауылдарҙа йөрөгән. Атаһы мән әсәһенең хәлен һорашҡан, барыһы ла шу бер төрҙө һөйҙәгәндәр.

Һәүбән, тағы ауылдар араламаҡ буһа ла, Мәсем хандың ҙур туй яһарға оран таратҡанын ишеткәс, кире торған йәйҙәүгә әйҙәнеп ҡайтҡан, ти. Бында ҡайтһа, ни күҙе мән күрһен, арғымаҡ уйнатҡан, юрға юрғалатҡан, ҡушаҡта * йүгерек етәктәгән бай аҡһаҡалдар, уларҙың улдары, мырҙалар хан йәйҙәүе тирәһендә тулғандар, ти. Бай, тархандар ҙа [96], бүтән халыҡ та күп килгән, ти. Майҙандың икенсе яғында бер төрҙө ат-тунһыҙ батырҙар, ҡарт-ҡоролар, өсөнсө яҡта ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей, бала-саға йыйылған, ти. Майҙан уртаһында Мәсем хан бисәләре, өс кейәүе мән өс ҡыҙы тора, улар тирәһендә йыйылған аҡһаҡалдар, байҙар, майҙан башталыуҙы көтөп, хан тирәһендә урала. Батырҙар билбауҙарын ыҡсымлап тотоп, бер урында түҙмәй, ары-бирҙе йөрөйҙәр; йырсылар йырҙарға тамаҡтарын көйҙәп, сей йомортҡа эсә; ҡурайсылар ҡурайҙарына һыу бөркөп, ҡурай дымдай. Сабарҙар * майҙан тирәләп рәт һаҡтап урап йөрөгән саҡта, Һәүбән майҙан түңәрәгенә барып, бөтәһенә күҙ йөрөтөп сыҡҡан. Тик хан тирәһендә Айһылыуға оҡшаған ҡыҙ күҙенә салынмаған, ти. Арҙыбирҙе халыҡ йыйылып бөткәс, оҙаҡ та үтмәгән, күмәк һарай ҡыҙҙары мән бергә Айһылыу майҙанға килгән. Унның матур йөҙөн күргәс, бөтә йәш-елкенсәк тауыш-тынһыҙ уға таба күҙ тегеп ҡарап ҡалған. Мәсем хан, майҙан уртаһына сыҡҡан:

— Майҙан йыйҙым, ил дандап,
Ҙур ҡыуаныс буғанға:
Дейеү алған ҡыҙымды
Хоҙай азат ҡылғанға.
Ҡәҙер төнө [97] буғандай,
Күңелем тулды шаттыҡҡа;
Нәҙер әйттем [98] хоҙайға,
Ҡыҙым иһән ҡайтҡанға;
Ҡыҙымды бүләк итеп,
Тәхетемде һаҡтарҙай,
Шүлгәндән ҡон алырҙай,
Шул дейеүҙе үтереп,
Башын [маң] әпкилерҙәй
Батырға бирәм ҡыҙымды.

Хандың был һүҙен ишеткәс, батырҙарҙың береһе лә батырҙыҡ итә алмай, уйҙанып торғандар, ти. Шунан Аҡбулат аҡһаҡал Айһылыуға таба ҡарап һораған.

Аҡбулат:

— Айһылыуым, әйтсәле
Баштан үткән бар хәлең,

Ҡилгән батырҙар белһен
Ҡалай[99] буғанын эштең.

А й һ ы л ы у:

— Мин бы хандың кинйәһе,
Балаһының * иркәһе,
Уйнап-көлдөм (шу) дәрт мән
Ҡисен, таңын, иртәһен.
Бер көн сыҡтым яланға
Бүртә юрға уйнатып,
Һарайҙағы бар ҡыҙҙы
Үҙ артымдан эйәртеп.
Уйнап-көлөп туғайҙа,
Шүлгән күле буйында,
Сәскә шәлкемләгәндә,
Бер ни күрҙем янымда:
Айыу тиһәм — ҡырас йөн,
Бүре тиһәм — ирәбе *,
Һис тартынмай уҡталды,
Ҡымтып алды беләге.
Ҡурҡышымдан белмәнем
Ҡайҙа буғанлығымды;
Һушым киткән шундуҡ,
Үле буған бар тәнем.
Күпме һушһыҙ буғаным,
Уны төпсөп торманым,
Ҡыҙғанған тауыш сағылды
Һушһыҙ ятҡан сағымда.
Күҙем асып ҡараһам,
Ҡыҙҙар тора янымда,
Бары тора ҡурҡышып,
Мине күреп өркөшөп.
Йөҙҙәре еҙҙәй һарғайған,
Көләс йөҙҙәр юғалған;
Бары миндәй урҙанып,
Туған илдән айрылған;
Улар мән таныштым,
Ил-торлағын һораштым:
Күбе көстәнеп ирҙәрҙән
Күлгә таштанған хур итеп
Шунан килде бер ҡарсыҡ,
Бите-йөҙө йыйырсыҡ,
Барыбыҙ ҙа күмәкләп
Унының янына йыйылдыҡ.
Барыбыҙҙан тәү үҙе
Һорап белде илебеҙ,
Нәҫел-нәсептәрҙе беҙ
Һөйҙәп бирҙек барыбыҙ.

У ҡарсыҡ беҙгә былай тип
Үҙ хәлене һөйҙәне:
«Ирем — Уралда дан тотҡан
Батыр ине йәшенән,
Һеҙгә уның кемлеге
Билдәле булыр атынан
Уның үлемен әйтмәйем,
Хәтере ҡалыр берәүҙең [100].
Ханға мәңге юл сапмах *.
Сура — батыр ир ине,
Тохҡап атһа, яҙлыҡмах,
Мәргәнлектә бер ине.
Үлем йоҡоһо бахҡан [101] —
Яңғыҙ ятып йоҡтаған;
Ҡанына һыуһаған дошманы [102],
Ятҡан ерҙә тап итеп,
Йөрәгенә уҡ тыҡҡан.
Илгә оран һалмахҡа
Үҙемдән ант алдылар;
Бына хәҙер үҙемде
Шулар һыуға һалдылар —
Шунда уҡ йотто бер януар.
Һыу йотарға бирмәне.
Ауыҙы шундай ҙур тағы —
Һис бер теше теймәне.
Өңөнә килгәс, уҡшыны:
«Әйҙә тиҙерәк сыҡ! — тине, —
Һорар өсөн хәлемде. —
Яҡыныраҡ кил», — тине. —
Ирең атҡайны [мине],
Иһән-аман сағында,
Тирем алам тип һуйып,
Бысаҡ һурып алғайны.
Шунда мин телгә килеп,
Азат ит тип ялбарып [103],
Ҡан илағас, ҡыҙғанды:
«Йәштән ҡолда йәшәгән,
Ата-әсәһен таштаған,
Тел-йолаһын оноҡҡан
Меһкен икән һин», — тине.
Мин дә шу көндән баштап,
Шүлгәнгә батыр буһам да,
Ҡәһҡәһә атын алһам да,
Батша ҡушыуын тотһам да,
Уралға сығып йөрөһәм дә,
Кемде генә йотһам да, —
Зарҙы миңә аш бумах,
Йөрәгем астыҡ киһһә лә.
Килдең хәҙер бы илгә,

Ҡалырһың инде күп йылға».
Шүлгән күле шундай у:
Ҡанды йәштәр аҡҡастын,
Бер урынға бөркөлөп,
Бара торғас шулай итеп,
Күҙ йәшенән бар буған,
Тәхет тотҡан батшаһы
Әсәнән үк бей буған.
Бы һарайҙар һалынған
Тере һуйылған йөрәктән [104],
Һарай тирә баҡсаһы,
Биҙәп торған сәскәһе
Һуғарылған ҡан мән», —
Тип һөйҙәне беҙгә [әбей].
[Ҡарсыҡты] урлаған да,
Мине [урлап алған да]
Булып сыҡты шу берәү.
[Бына шуны] белгән һуң [105],
Аҙаҡ килде бер егет,
«Уралдан мин», — тине ул.
Ҡарап сыҡты һарайҙы,
Тап китерҙе мине у.
Күҙе йәшләнгәндәй булып,
Сығып китте һарайҙан.
Күп үтмәне, у киткәс,
Йоҡо бахты күҙемде.
Сырым итеп, уянһам,
Ҡырҙа тойҙом үҙемде.
Ырғып торҙом һиһкәнеп,
Ҡарап торҙом тирәмде.
Үҙ-үҙемә ышанмай,
Күҙем һирпеп ҡараһам —
Томанһырап, күгәреп,
Болоттарҙы ялмалап,
Урал тора алдымда.
Керпек үтә йылмайып,
Уһал күҙҙәй һөҙөлөп,
Ҡамыш үтә ҡараған
Шүлгән ята янымда.
Туғайҙағы үләндәр
Сәскәләргә биҙәлгән;
Ҡолағыма салынды
Ҡош урманда һайраған,
Йылғыр иһкән ел[дәре]
Сәстәремде елпетте;
Барын күргәс шаттанып,
Йөрәгемде елкетте.
Түҙә алманым тормайсы,
Аяғыма бахмайсы.

Ырғып торҙом урындан,
Күҙем төштө берәүгә,
Алых түгел үҙемдән
Утырған бер егеткә.
Йөрәктәрем жыу итте,
Ни әйтергә белмәнем,
Яҡын барҙым егеткә,
Егет көлөп йылмайҙы,
Миңә: «Өйгә ки», — тине.
Абайлабыраҡ баҡһам,
Һарайға кигән шу ине,
Яуға сапҡан батырҙай;
Алтын-көмөш эйәрҙе,
Болғар тартҡы, айыллы,
Туҡымдары энйеле,
Тибенгеһе сәмсәле *,
Болан тире таралғы *,
Өҙәңгеһе көмөштән,
Эйәр ҡашы алтындан,
Семәрҙәнгән аҡыҡтан;
Йылан ҡамсы ҡашында,
Ҡанъяғала * ҡуржыны *,
Ҡырпыуҙарҙы сәхтиән *,
Күмелдерек * түшендә,
Арт һанында — ҡойошҡан,
Ебәк сылбыр нуҡталы,
Ҡуш ауыҙҙыҡ йүгәнде,
(Теҙген ҡашҡа * шаҡарған)
Ҡырас ялды, төк сәсә *,
Суртан һыртты, тар бөйөр,
Ҡубаға һебә *, ҡуян бот,
Текә тояҡ, ас яңаҡ,
Ҡамыш ҡолаҡ, киң танау,
Ҡарсыға түш, баҡыр күҙ,
Әтәс муйын, ҡуш урай,
Сонҡа * эйәк, ҡымты ирен
Аҡбуҙ толпар янында.
Үҙе төһкә ат шулай,
Кәңәш биреп егеткә,
Тап әҙәмдәй һүҙ һөйҙәй.

Ана мине шу егет
Азат итте һарайҙан.
«Алам һине», — тимәне,
Намыхыма теймәне *,
Юлыма төшөрөп ебәрҙе,
Саҡырһам да һарайға,
Маң үҙем мән кимәне.

[Шулай] тип ҡыҙ бөтәһен һөйҙәп биргәс, бары ла аптыраған, «Хызыр бәйғәмбәрҙер [106] у. Юғиһә әҙәм балаһы быңдай эш ҡыла аламы?!» — тип шау киғәндәр. Мәсем:

— Бына, ҡыҙым, бер алма,
Батырҙарыңды һайҙа [107]:
Сорғот алмам алдына,
Күнгән батыр шартыма
Алмаң алыр ҡулыңдан,
Һинең күргән ҡарсыҡты
Апкилер шу Шүлгәндән, —

тигән дә, ти, ҡыҙының ҡулына алма биреп:

— Мә, ҡыҙым, Шүлгәндәге ҡарсыҡты апҡайтырға батырсылыҡ иткән батырға ошо алманы бир, — тип, майҙандағы батырҙар араһына ебәргән, ти. Айһылыу, батырҙар алдынан йөрөп уҙһала, бер батыр ҙа алманы алырға баҙнат итә алмаған, ти. Батырҙарҙың батырсылыҡ итә алмауын күргәс, Мәсем иртәгә саҡты батырҙарға уйҙарға ирек биргән, ти. Халыҡ таралғас, Һәүбән йәйәҙәүҙән ҡырғараҡ сыҡҡан да, ҡыл көйҙөрөп, Аҡбуҙатын саҡырған икән, Аҡбуҙат шунда уҡ, күҙ асып, күҙ йомғансы, килеп [тә] еткән, ти. Һәүбән Аҡбуҙатҡа күлдәге ҡарсыҡты иртәгә майҙанға алып килергә ҡушҡан. Аҡбуҙ:

— Шүлгәнгә яу асмайса, унан бер нәмә лә алып бумах, мин хәҙер у урынға ял итергә лә ҡайтмайым, тигәс [108], Һәүбән Аҡбуҙатты менеп, Шүлгән күлгә киткән, ти. Шүлгәнгә яҡындау мән, Аҡбуҙаттың тояҡ тауышын ишеткәс, күлдә гөж иткән тауыш ишетелгән, ти. Аҡбуҙат:

— Ана, хандың ҡыҙы һаҡсылары мән күл өһтөнә сыҡҡан икән, һинең килгәнде ишеткәс, ҡасты. Мин күлде ашанан-аша сабып сығырмын, һин алмас ҡылыс мән һелтәп, һыуҙы ярып уҙарһың. Беҙҙең үткән бер ерҙә күлде бүлгеләгән үткәүел барлыҡҡа килер. Батшаның күле ваҡланыр, шунан түҙмәй, батшаның ҡыҙы сығар. Унан нимә теләйһең, у бар теләгеңде бирер. Тик, ҡара, ныҡ утыр, — тигән, ти.

Һәүбән Аҡбуҙат әйткәнсә эштәгән. Күл ваҡтаныл бүленгәс, Нәркәс түҙмәгән, күлдән [килеп] сыҡҡан.

Нәркәс:

— Ай, егетем, ни теләп,
Бында яуға килдең һин?
Аҡбуҙатты аямай
Бүләк итеп бирҙем мин.
Ҡылысың мән тураҡтап,
Һалмалай иттең күлемде,
Утрау мән бүлгеләп,
Кәртәләнең юлымды;
Яңғыҙ ҡылдың атамды.
Күл һайығыр, ер бүлгәс,
Мин ништәрмен шу саҡта?

Ҡомоғор * күлдең төптәре,
Ылымыҡ баһыр у саҡта;
Үкән-төкән * күбәйер,
Әрмәнделәй булам бит
[Йә буламын гөбөрлө
Тун итеп ҡапырсаҡты] [109].
Егет, һора теләгең,
Харап итмә бы саҡты, —

Һәүбән:

— Күлең ташҡан йәш мән —
Ҡомаҡтырмай ҡуймамын,
Ерҙән сыҡҡан шишмәнән
Бүтән юлын ҡуймамын [110].
[Шүлгән күлен тоймаһын,
Уға ҡабат ҡоймаһын];
Гөбөрлөнән олпатты *
Атаңа һын бирмәмен;
Ҡәһҡәһә — ерҙең балаһы,
Уны унда ҡуймамын;
Үҙең — һыуҙың һылыуы,
Һине һыуҙан алмамын.
Атаңа ҡайтып әйт хәҙер:
Һыртына тажын йөкмәһен,
Таж биҙәген юғалтмай
Арҡаһына ҡаптаһын!
Ҡәһҡәһәгә әйт хәҙер:
Күлдә ятып ут йотоп,
Ҡанды күҙ йәше көтөп,
Күлдә йоҡо һимертеп,
Ҡыҙ-ҡырҡынды урҙашып,
Бөтә илде өркөтөп,
Даны мән ил ҡурҡытып,
Айбарҙанып * ятмаһын.
Эйәртеп сыҡһын дейеүҙең
Ерҙән ҡасҡан барыһын,
Ҡая таштан ҙур торлаҡ
Аҡбуҙатҡа ҡаҙыһын! [111]
Үҙе торған һаҙ, күлен
Ер ахтынан юлаһын *;
Эшен бөткәс, Ҡәһҡәһә —
Үҙе ҡоштай ҡанатты,
Сысҡан төһтө аяҡты,
Ҡояштан ҡурҡар йөрәкте
Кеше һөймәһ ҡош буһын [112].
Ҡан эсеүсе дейеүҙәр
Аяҡ-күҙһеҙ ҡалырҙар;
Ҡамыш булыр торҙағы,
Бармаҡ буйы ҙурҙығы,

Йыландай булып, йозгондо
Боргаланһып буйҙары.
Күлең ҡалыр тын булып,
Күбенә торҙаҡ булып;
Бары шунда көн итәр,
Үҙ-араһы йоп булып.
Һарайҙағы ҡыҙҙарың
Бары сыҡһын бушанып *.
Ҡайғы бахҡан үҙҙәрен,
Һайраһындар ҡош булып.
Йыйырсыҡ битте бер ҡарсыҡ —
У ла унда ҡалмаһын,
Аҙаҡ сикке һулышын
Үҙ илендә һулаһын! —

тигән. Шул һүҙҙәрҙе ишеткәс, Нәркәс атаһына ҡайтып киткән, ти. Һәүбән атынан төшөп, бер аҙ көткән икән, күҙ алдында теге ҡарсыҡты күргән. Ҡарсыҡтан һорашырға уйҙағас, Аҡбуҙат тыйған, ти. [Һәүбән] ҡарсыҡты, күҙ асып йомғансы, майҙан була торған ауылға апарып таштаған да Аҡбуҙатын ебәргән. Үҙе тағы ла көндәге тирмәгә барып ҡунған, ти.

Иртәгеһен иртә мән үк йәйҙәү халҡы торған. Ҡатын-ҡыҙ һыйыр һауып, һарыҡ-һыйыр көтөүен оҙатҡан. Ҡояш һөңгө буйы күтәрелгәс, йылҡы көтөүе ҡайтҡан. Ҡолон бәйҙәгәндәр. Бөтә халыҡ майҙанға йыйылған, ти.

Мәсем хан батырҙар алдында әлеге Шүлгәндәге ҡарсыҡты апҡайтыуҙы тағы ла шарт итеп ҡуйған. Батырҙар берсеһе лә һүҙ аса алмай торғанда, ҡарсыҡ үҙе сығып:

— Мине эҙҙәтеп, ханым, батырҙарҙы яфалама, мине алла ҡотҡарҙы, — тигән.

Бары ла аптырағандар. Ҡыҙға ҡарсыҡты күрһәткәндәр. Ҡыҙ шу ҡарсыҡ икәнен таныған. Хан шунда уҡ үҙенең кеше башын киһә торған заллатын * саҡырып алған да, халыҡҡа ишеттермәй генә, ҡарсыҡтың башын киҫәргә ҡушҡан, ти. Заллатар ҡарсыҡты һөйҙәтмәй, әпкитә баштағас, тирә-яҡтан килгән халыҡ, батырҙар ҡарсыҡтың хәлен һөйҙәтергә һорай баштағандар. Хан рөхсәт итмәй, [уны] ала баштағас, Һәүбән алама кейем мән генә заллаттар, хандар алдына барып бахҡан, ти.

Һ ә ү б ә н:
— Ай, оло хан, оло хан,
Һүҙ тыңдайыҡ ҡарсыҡтан,
Уны ҡотҡарған егетте
Мин әйтермен аҙаҡтан.

М ә с е м:

— Бөгөн төндә мин йыйҙым,
Илдең шәйех *, изгеһен;

Бер хоҙайҙан һораныҡ
У ҡарсыҡтың килеүен.
Шәйех, изге хаҡына
Ҡәбул иткән теләгем:
Хоҙа ҡушҡан Хызырға
Башҡарырға һорауым.
Маң һүҙем бер булыр,
Миңә ҡаршы кем килер?
Әммә шәйехтәр әйтте:
«Ҡарсыҡ туйҙа бумаһын,
Халыҡ алдында хоҙаның
Ярҙам серен әйтмәһен,
Уны өйгә алырҙар,
Унда ҡунаҡ итерҙәр,
Аҙыраҡ ҡунаҡ буғас та,
Шүлгәненә илтерҙәр.»

Ҡарсыҡ хан һүҙенә буйһоноп, заллаттар артынан эйәрә баштағас, Һәүбән ебәрмәй туҡыратҡан да, хандың алдына барған.

Һ ә ү б ә н:

— Уралда Сура тигән
Батыр булып дан алған
Бер кеше буған икән,
У аҡһаҡал, хандарға
Һис буйһонмаған икән.
Сура батыр бер мәлде,
Сыҡҡан икән һунарға,
Ҡайталмаған әйҙәнеп
Үҙ йортона ҡунарға:
Батыр йоҡтаған буған.
Шул сағында теге хан
Уны килеп үтергән.
Оҙаҡ үтмәй батырҙың
Бисәһе лә юғалған.
Унан ҡалған бер бала
Һәүбән тигән атты икән.
Ата-әсәнән йәш ҡалып,
Атаһы ярҙы буғанға,
Бер нәмәһе бумайса,
Етемдектә тилмереп,
Ҡыйынлыҡта үһкән, ти.
Илендә морон төртөрҙөк
Бер яҡыны бумаған,
Быҙау-маҙар ҡарап та,
Һис бирәүгә һыймаған.
Бер саҡ Һәүбән киткән, ти,
Күп ерҙәрҙе ҡыҙырғас,

Берәүгә тап буған, ти.
Бы ҡарт бынан һорашҡан,
Хәлен белеп ҡыҙғанған;
Һәүбәнгә у һыҙмаһын
Бер һүҙ әйтмәй, һорамай:
«Мә, улым», — тип, биргән, ти.
У ҡарт үҙе бай түгел,
Ырғыҙҙы * [113] байҙа мал көткән
Тарауыл тигән ҡарт икән.
Һәүбән һыҙма алғас та
Ҡерешкән, ти, һунарға;
Мәргәнлектә дан тотҡан,
Батырлығы тағы ла
Яйыҡ, Сура батырҙан [114],
Төкләç [115] мән Алмастан [116] —
Барынан шәп икән.
Урал еңмәһ Шүлгәнде
Бер уҡталып * ҡаҡшатҡан;
Шүлгәндең Аҡбуҙ толпарын,
Урҙап алған бар ҡыҙын
Берен ҡуймай * ҡотҡарған;
Ҡарсыҡты ҡотҡарыусы ла
Хызыр түгел, шу икән.
Бөгөн төндә яу аҫҡан
Шүлгән күле ханына,
Күлде ат күҙҙәй итеп,
Ваҡ-ваҡ итеп бүлгән, ти.
Шүлгәндән йыраҡ түгел,
Ҡая битен тиштереп,
Үҙ атына торорға
Дейеүҙән һарай һалдырған.
Батшаһын [иткән] ташбаҡа,
Дейеүҙәрен — ярғанат,
Ил талаусы бейҙәрен —
Барын һәләк ҡылған, ти.
Бөгөн тағы ат менеп,
Ата-әсәһен эҙәрҙәп *,
Атаһы ҡонон алырға,
Ҡарымтаға ҡан юлдап,
Үтереүсе бер ханға
Яу асырға бара, ти.

[Шулай тигән дә Һәүбән, халыҡҡа ҡарап, былай тип өһтәгән: «Үҙенең] һөйҙәүенсә, бы ҡарсыҡ шуның әсәһе буған. Әгәр барын шомданып, маң һүҙгә ышанмай, был ҡарсыҡтан һөйҙәтмәй, ауыҙ асып ҡалһағыҙ, ҡарсыҡ ҡабат күренмәһ».

Бар халыҡ аптырашҡан. Мәсем хан да, бы һүҙҙе ишеткәс, тирәһендәге бейҙәре мән һөйҙәшә баштаған. Шүлгән күле янындағы ҡаяны барып ҡарарға, бы егеттең һүҙенең рахтығын тикше-

реү өсөн, бер кеше ебәрергә буғас, бар кеше риза буған. Мәсем хан Һәүбәнде янына саҡырып алған да:

-- Әгәр һүҙең рах бумаһа, башың киһәрмен! — тигән. Һәүбән быға риза буған, ти.

Мәсем хандың кешеһе ат менгәнсе, Һәүбән ҡырғараҡ сыҡҡан да халыҡ араһынан ғәйеп буған: ҡыл көйҙөрөп, Аҡбуҙатын саҡырған — Аҡбуҙат күҙ асып күҙ йомғансы килеп еткән. Һәүбән Аҡбуҙаттан бөтә эштең эштәнгәнен һорашып белгән дә, яу [кейемен] кейеп, [яу] ҡоралдарын [аһып], Аҡбуҙатын менеп, майҙанға килгән. Һәүбәндең Аҡбуҙат мән яу кейемдәрен кейеп, [яу ҡоралдарын аһып] килеүенә, бөтә халыҡ:

— Бы кем?

— Ниндәй кеше? — тип аптыраған, ти. Айһылыу мән ҡарсыҡ, [ул] килеп етмәһ борон, үҙҙәрен ҡотҡарған егет [шул] икәнен Аҡбуҙ атынан танып, өҙәнгеләгә ике аяғын килеп ҡосаҡтап:

— Ошо егет ине! — тип илап ебәргәндәр, ти. Һәүбән, атынан төшөп, ҡарсыҡты ҡосаҡтап үпкән дә, ҡабат атына менеп, хандың алдына барған.

Һ ә ү б ә н:

— Һиңә төбәп, Мәсем хан,
Һорай торған һүҙем бар:
Сура тигән батырҙа
Юлдар ҡоноң бармы ни?
Ҡыҙың урҙарҙыҡ Шүлгәндең
Барымтаһы бармы ни?
Ошоға тейеш яуапты
Танмай һөйҙәп биргәстән,
Мин дә көһәр уйымдың
Барын һөйҙәп бирермен.

М ә с е м:

— Суранан ҡоном юлдарҙыҡ
Һис ҡарымтам юҡсы маң,
Малым талап алды тип,
Барымтам да юҡсы маң.
Шүлгәндең асыуы шу мигә:
Ыу һалғайным күленә,
Ҡамышына ут һалып,
Маҙа һалдым иленә.

Һ ә ү б ә н:

— Ата-әсәнән йәш ҡалып,
Бөтә күҙ йәште күреп,
Ерҙең аһҡы ҡатын да
Күреп сыҡҡан батыр мин.

Умарталар ватһа ла,
Йығып һыйыр һуйһа ла,
Ҡөтөү һарыҡ быуһа ла,
Ҡаҙ-өйрәкте ҡырһа ла, —
Алпандаған айыуҙы,
Йылғыр күҙҙе бүрене,
Сағыл буйҙап уйнаған
Өлпө ҡойроҡ төлкөнө,
Ил ҡороткан дошман тип,
Һаҙағым мин уларға
Ҡәһәрҙәнеп атманым;
Урал буйын буйҙаным,
Ил дошманын эҙҙәнем.
Ҡарымтаһыҙ ҡан ҡойған
Ил батырын үтереп,
Бисәләрен тол ҡылған,
Балаларын ҡыҙғанмай,
Үкһеҙ етем ҡалдырған;
Ҡәрһеҙ * ҡатын-ҡыҙҙарҙы,
Ҡул бәйҙәп, һыуға атҡан;
Илдең үҙе эсендә
Бергә йәшәп ҡан ҡойған,
Илдең намыһын тапап,
Нәһелен маҡтап бей буған,
Илдең малыны ейгән,
Илдең телене киһкән,
Ике тояҡты, йомро баш —
Тохҡап һаҙаҡ атырҙай,
Ҡан дошманым күрерҙәй,
Эҙҙәп тапҡан дошманым —
Алдымда торған Мәсем хан
Бына шуларҙың береһе,
Ҡарымтаһыҙ Сураның
Ҡанын ҡойған айыу шу!
Шүлгән[кұл]гә ыу һалып,
Яҡын-тирә малдарын
Ҡырып, малһыҙ ҡалдырған
Йылғыр күҙҙе бүре у!
Иҙел батыры Ҡыпсаҡты [117],
Ирәмәл батыры Ҡатайҙы [118],
Яйыҡ батыры Төкләһте,
Тора батыры Тамъянды [119],
Ялан батыры Ирәндекте [120],
Нөгөш батыры Юраматты [121],
Үҙән батыры Табынды [122]
Ҡымтып тотҡан дейеү у!
Аҡбуҙатҡа мендем мин,
Шу батырҙар ҡоно өсөн
Ҡарымтаға килдем мин;

Илдең ирен ҡол иткән,
Бисәләрен тол иткән
[Мәсем тигән яуыздан]
Шулар хаҡын юлдап мин,
Барымтаға килдем мин, —

тигән дә хандың башын сабып өҙгән. Унда ҡол буған бөтә халыҡты азат иткән, ти. Һәүбәндең батырҙығын күргәс, бөтә халыҡ килеп, аһ-зарын һөйҙәй баштаған.

Халыҡ:

— Ай, илдең арыҫланы,
Нисә йылдар ҡол иткән,
Үҙенә көстәп тилегән *
Яуыз хандың ҡулынан
Илде азат иттең бит!
Һиңә юлдаш булырҙыҡ,
Арҡадашҡа * торорҙоҡ
Ирҙәребеҙ бар ине —
Барын яуыз Мәсем хан
Илдән айырып, ситтәтеп,
Ҡатындарын тол итте.
Шуларҙы һин ҡайтарһаң,
Ҡан илаған етемдең
Атаһындай булырһың!

Һәүбән һорашҡан [да] у батырҙарҙы эҙҙәп ҡайтырға һүҙ биргән. Атһыҙ-тунһыҙ ҡалған халыҡҡа хандың малын өләшеп биргән. Үҙе теге батырҙарҙы эҙҙәп киткән, ти. Бара торғас, бер ҙур ҡошҡа осраған. Бы ҡоштоң янына барған. Ҡош осалмаған. [Һәүбән бының сәбәбен белешкән]. Ҡош телгә килеп, һөйҙәй баштаған, ти:

— Мин тау башында ултыра инем, Мәсем хандың аттары мине күреп өрктөләр. Шуға мине аттырып, ҡанатымды ҡырҡтырып, үҙемде ҡаянан таштаны. Күп саҡ ҡуҙғала ла, йөрөй ҙә алмай яттым. Атылған ерҙәрем арыуланһа ла, ҡанаттарым һаман осорға ярамай, ҡаңғырып ошонда ултырҙым. Балдарым * асҡа тилмереп яталарҙыр инде. Егет, миңә ярҙам ит, атыңдың ауыҙындағы күбеген һөрт, ҡанаттарым төҙәлер, — тигән [123]. Һәүбән төшөп, ауыҙҙыҡ сәйнәп күбеккән Аҡбуҙаттың ауыҙындағы күбектәрен ҡоштоң зәғифләнгән ҡанаттарына һөрткәс, ҡоштоң ике ҡанаты [ла] төҙәлгән, ти. Ҡош:

— Егет, бы ярҙамың өсөн ни бирәйем, нисек ярҙам итәйем? Мин ғүмер буйына Мәсем хан[дан], Шүлгән дейеүҙәренән яфа күреп, бала үрсетә алмай зарыҡҡан ҡош инем. Мин шундай ҡош: атһыҙға ат булам, юлдашһыҙға юлдаш булам, — тигәс, Һәүбән:

— Һин миңә ни ярҙам итә алаһың? — тип һораған. Ҡош:

— [Ниндәй ярҙам кәрәк, барыһын да булдыра алам]. Мин һиңә үҙем өсөн генә түгел, Мәсем һарайындағы тотҡон һандуғастарҙы, Шүлгән һарайындағы тотҡон ҡыҙҙарҙы азат итеп, Уралымдағы һайрар ҡоштарҙы арттырғаның өсөн дә һиңә ярҙам итергә бурыстымын, — тигән. Һәүбән:

— Һин уны ҡайҙан беләһең? — тип һораған. Ҡош:

— Шүлгәндәге һарай ҡыҙҙары маң балаларым ине. Шулар килеп һөйөнсө алдылар, — тигән, ти. Һәүбән:

— Һин — ҡош, ә улар ништәп кеше балаһы төһтө ҡыҙҙар? — тип һораған. Ҡош:

— Улар кеше шу. Мин дә кеше инем, ҡош булып ҡалдым, — тигәс, Һәүбән ҡоштан бөтә серҙе һораша баштаған, ти. Ҡош һүҙгә баштап былай тигән, ти [124]:

— Иң тәү бы тирәлә һыу батшаһы ғына буған. Урал батыр үҙенең Иҙел, Һаҡмар, Нөгөш, Яйыҡ тигән улдары мән килеп, һыу батшаһына яу асҡан. Улар кигәндә, бы тирә күп-күнгәк һыу буған. Улар яуҙа ат йөҙҙөрөп һуғышҡандар. Урал батыр[ҙың] ат йөҙҙөрөп кигән юлында тау барҙыҡҡа килгән.

Һыу[ы] тау буғас, һыу батшаһының иле икегә ярылған. Ҡайһы ерҙә (бер) дейеүҙе үтерһә, шунда сағыл барлыҡҡа килеп, һыуы кәмеп, һыу батшаһының ғәскәре бөтә барған. Дейеүҙәре күп үлгән һайын, ҡоро ер күбәйгән. Шунан аның торҙағы күләүек-күләүектәрҙә генә ҡалған. Көсө бөткәс, һыу батшаһы ошо Шүлгән күлгә килеп урындашҡан. Шүлгән күл ер ахтындағы һыуға тоташҡас, уны бөтөрә алмағандар. Батша шунда йәшәп ҡалған. (Хәҙер) Урал йөрөгән тау — Урал батырҙың улдары тәү баштап яуға кигән юл(ы) [ул]. Мин Урал батырҙың бисәһе инем. Атым — Һомай. Уландарым мән ирем яуға киткәндә, мин килендәрем мән үҙ илебеҙҙә ҡалғайныҡ. Уландарым ҡайтып, килендәрҙе әпкиттеләр. Мин аҙаҡ бармаҡ булып, ҡалдым. Балдарым кигәс, Шүлгән батшаһын аңдып, ошо тирәгә килеп урындашҡандар. Шүлгән батша һаман иремә ҡаршы дошмандығын таштамаған. Ирем балдарым мән кәңәш иткән. Ошо күлдең һыуын эсеп бөтәйек, күлен һайыҡтырайыҡ, Шүлгән батшаһы бер ҡайҙа ла бара алмах, тип һөйҙәшкәндәр. Тәүҙә атаһы эсә баштағас, Шүлгән батшаһы быны белеп ҡалған да, иремдең эсенә ғәскәрҙәрен индереп ебәргән. Улар уның эсенә инеп, йөрәген телеп, үтергәндәр. Ирем үлер сағында улдарына: «Шүлгән батша ғәскәре ҡалған урындан һыу эсмәгеҙ. Үҙегеҙгә һыу табағыҙ, — тигән. Улар ерҙе тишеп, йылға ағыҙғандар. Бына хәҙерге дүрт йылға — Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш — шуларҙың ағыҙған йылғалары. Һәүбән:

— Инәй [125], һин ништәп ҡош булып ҡалдың? — тип һорағас, Һомай:

— Беҙ алых юлдан кигәндә барыбыҙ ҙа ҡош булып осабыҙ. Килендәрем дә шулай. Ергә еткәс, ирҙәребеҙ үпһә, беҙ үҙ хәлдәребеҙгә ҡайтабыҙ, [киренән] ҡатын булабыҙ.

Мин килеп еткәнсе, ирем үлгәйне, шуға мин үҙ хәлемә ҡайта алманым [Килендәремде уландарыбыҙ үпте — улар тағы ҡатын хәленә инде]. Улар бала-сағалы булып ҡартайып үлделәр. Бына бы

һин менгән Аҡбуҙат ирем Урал батырҙың аты ине. Үҙе үлгәс тә, уны Шүлгән урҙағайны. Иҙелдең улдарынан береһе Аҡбуҙатты юлдап, Шүлгән батшаһына яуға китте. Шүлгән батшалығына барғас, батша ҡыҙына ғашиҡ буған. Батша, бы хәлде белеп ҡалып, Иҙелдең улынан үҙ һарайында вәзир булып ҡалырға [өгөттәгән]. Егет киләсәктә батша ҡыҙын алыу уйы мән, батша вәзире булып ҡалған. Тик аҙаҡ сиктә батша ҡыҙын бирмәгән. [Биреү түге] мысҡыл [итеп] уға Ҡәһҡәһә тип ат ҡуйған. Уға Урал батыр тоҡомон ҡоротоу эшен йөкмәткән. Шунан аҙаҡ Урал буйындағы бөтә данды ҡыҙҙарҙы, маң балаларымды урҙап торған Ҡәһҡәһә ни саҡты тырышһа ла, Урал батырҙың тоҡомон бөтөрә алмаған. [Унның] бүтән улдары тоҡомонан — ете батыр буған. Ҡәһҡәһә тоҡомонан Мәсем[126] ҡалған. Мәсем, ил талап, хан буған. Ете батыр Мәсемдең ил талап хандыҡ алыуына риза бумай, уға ҡаршы яу асҡан. Бер саҡ Мәсем хан ете батырҙы, килешәйек, тип үҙенә ҡунаҡҡа саҡырған. Бөтәһен дә иһертеп, ҡул-аяҡтарын бәйҙәп, диңгеҙ аръяғындағы батшаға һатҡан. Һин шуларҙы хәҙер алырға китеп бараһың икән. Баяғы килеп һөйөнсө алыусы ҡыҙҙарым әйтте. Мин унда һине атыңдан да тиҙ алып барырмын. Әгәр маң мән барһаң, уларҙы яуһыҙ урҙап ала алаһың. Тик шу: маң ҙур кәмселегем бар. Тамаҡтанып барырға үҙ итем етмәй, һинең дә, уларҙың да бот иттәрен дә ашарға кәрәк булыр. Бында ҡайтып еткәс, у яраларҙы атыңдың күбеге мән төҙәтергә тура килер. Үҙегеҙ һауыҡһағыҙ ҙа, батырлыҡтарығыҙ ҡалмаясаҡ. Инде атың мән барһаң, яу мән алаһың. Яу ҙур булыр. Бер дошманға өс гонахһыҙ кеше ҡырылыр. Шулай ҙа еңеү һаман да һинең яҡта булыр. Һин батырҙарыңды ҡотҡарып аласаҡһың. Һәүбән:

— Маң яуҙан аҙаҡ унда тағы ла дошмандар йәшенеп ҡалырмы?

Ҡош:

— Унда ҡалмаясаҡ, — тигән. Һәүбән:

— Бер дошманға өс кеше ҡырылһа ла, мин барайым. Дошман бөткәс, ҡалғандары рәхәт йәшәр. Инәй, бар, һин балдарың янына ҡайт. Ҡош булһағыҙ ҙа, һине лә, балдарыңды ла берәү ата алмаҫ, рәхәт йәшәрһегеҙ, — тип ҡошто ҡайтарып ебәргән.

Һәүбән Аҡбуҙатында диңгеҙ аръяғындағы батша иленә барып еткән. Бер ауылға туҡтаған. Бер өйгә инһә, бите-күҙҙәре, аяҡ-ҡулдары шешенгән әбей мән бабайҙы күргән. Һәүбән быларҙың хәлен һораша баштаған. Ҡарт:

— Беҙҙе хандар, бейҙәр ат урынына егеп ҡолдайҙар. Хеҙмәт хаҡы итеп шишмә һыуы мән тоҙ бирәләр ине, хәҙер беҙ ҡартайҙыҡ, эштәй алмайбыҙ. Шуға беҙ һыу ҙа, тоҙ ала алмайбыҙ, шуға ошо хәлгә ҡалдыҡ, — тигән.

Һәүбән бы һүҙҙе ишеткәс, батша һарайына тура ынтылған. Һаҡсылар мән һуғыш баштаған. Уларҙы ҡырып, һарайға яҡындашҡас, батша ҡасып, илдән ғәскәр йыйып һуғышып ҡараһа ла, булдыра алмаған. Батша ғәскәрҙәре Аҡбуҙаттың еленән йығылғандар. Һәүбән үҙе батшаны, бейҙәрҙе тотоп үтергән. Бөтә халыҡ,

Һәүбәндең батырлығын, Аҡбуҙаттың шундай дауыл ҡуптарыуын күреп, аптырауға ҡалған. Бары ла ҡоралдарын таштаған.

Һәүбән халыҡты йыйған. Шишмә һыуҙарын, тоҙҙо буш алырға ҡушҡан. Ҡолдарҙы азат иткән. Бөтә тирә-яҡтағы халыҡ бы хәбәрҙе ишеткәс, һыуға, тоҙға килеп ябырылған. Бөтә халыҡ килеп Һәүбәндең аяғына йығылған. Һәүбән барын да шаттандырып, ете батырын [127] апҡайтып киткән. Ҡайтҡас, бөтә Урал халҡын йыйған, туй яһаған, ил батырҙарын көрәштергән. Ете батыр туйҙағы бөтә батырҙарҙан алдын сыҡҡас, [Һәүбән] етеһен ете ырыуға баш иткән. Һомайғоштоң балдары буған аҡҡоштарҙы атмахҡа ҡушҡан [128]. Туйҙа Мәсемдең ҡыҙы Айһылыуға кейәү һайҙарға рөхсәт биргән. Айһылыу Ҡыпсаҡ батырҙы һайҙаған. [Һәүбән] үҙе Шүлгән күленә барған. Аҡбуҙатын ебәреп, Нәркәсте сығартҡан. Нәркәс һис ҡарыулашмай сыҡҡан, ти. Һәүбән:

— Етемлектә йөрөгәндә,
Һигә * тәүлә юлыҡтым,
Һинең дөрөҫ һүҙҙәреңсә,
Һинең бүләгең буған
Аҡбуҙ атыңды алып,
Илемде азат итеп,
Күп шаттыҡҡа юлыҡтым.
Хәҙер килдем мин һиңә
Һинең теләгең белергә,
Ысын күңелең асып,
Һөйҙәр һүҙең тыңдарға.

Нәркәс бер аҙ һүҙ әйтергә ҡыймай торғандан аҙаҡ, һүҙгә керешкән, ти.

Нәркәс:

— Мин ҡыҙ буһам да әсәнән
Ирҙәй батыр тыуҙым мин;
Урал буйы ерендә
Күп батырҙар күрҙем мин;
Һинең бабаң Яйыҡты
Көс һынауҙа еңдем мин;
Төҫөм йәштәй буһа ла,
Күп йыл ғөмөр иттем мин.
Батша ҡыҙы буғанға,
Ергә сығып бахмағас,
Унан ашап-еймәгәс,
Һис ғөмөрөм уҙманы,
Ҡарттыҡ мине еңмәне,
Йәш ҡыҙ булып һаҡтанып [129],
Һылыуҙығым бөтмәне.
Йөҙөм асһам, ҡояшың,
Оялып, болотҡа инәр;

Ҡемдәр көрәш теләһә,
Уға йөҙөмдө асһам,
Күҙе ҡамашыр нур мән,
Минән йығылып хур булар.
Һиңә йөрәк асманым,
Һине тәүлә күргәс тә,
Күңелемдән һөйҙөм мин,
Һигә әйтергә ҡыйманым,
Аҙаҡ сикте көттөм мин.
Әгәр мине тиң итһәң,
Үҙегә буй бирәйем *,
Уралында тиң ғөмөр
Һине мән һөрәйем, —

тигән дә, йөҙҙәрен асып, Һәүбәнгә ҡарап йылмайған. Йөҙөнөң һылыуҙығын күреп, Һәүбән аптырап киткән. Һәүбән алырға риза буғас, Нәркәс атаһының бөтә мал-тыуарына күлдән сығарға ҡушҡан. Шу саҡта күлдән ер ҡаптаған ҡола йылҡы сыҡҡан. [Һәүбән мән Нәркәс] бөтәһен дә ат-тунһыҙ халыҡҡа таратып биргән. Үҙҙәре (Нәркәс мән Һәүбән) Аҡбуҙатты алып Һәүбәндең ауылына ҡайтып киткәндәр, ти.



## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

Бынан бик күп йылдар элек Асылыкүл[130] менән Дим йылғаһы араһында ҡеүәте, байлығы менән даны алыҫ-алыҫҡа таралған Сәмәр[131] тигән хан йәшәгән, ти. Сәмәр хан һәр төрлө уйын-көлкөгә, һунарға сығып ҡош-ҡорт, кейек ауларға яратҡан. Уның ике ҡатыны булып, беренсеһенән алты ул тыуған. Ә икенсе, йәш ҡатынынан төҫкә-башҡа бик матур, нурлы йөҙлө бер ул тыуып, уға Заятүләк тип исем ҡушҡандар, ти. Заятүләк матур булыу менән бергә бала саҡтан уҡ батыр ҙа булған. Уйын уйнағанда ыҙғыш-фәлән сыҡһа, үҙ тиҫтерҙәрен ҡыйратып алып барыр ине, ти.

Балалар үҫеп, бер аҙ быуынға ултыра башлағандар, ти. Берҙән-бер көндө Сәмәр хан улдарын ун ике ҡанатлы аҡ тирмәһенә саҡыртып алған да:

— Балаларым, һеҙ бер аҙ быуынға ултырҙығыҙ. Инде уҡ атырға, һыбай сабышырға, ҡош сөйөп һунар итергә, һөнәрҙәрегеҙҙе күрһәтергә ваҡыт етте, — тигән. — Хәҙер үк йылҡы өйөрөнә сығып, ат һайлағыҙ. Йүгәндәрегеҙҙе шылтыратҡанда, ҡайһы ат боролоп ҡараһа, шуны алығыҙ. Ҡош-ҡортҡа, кейеккә сөйөү өсөн етегеҙгә берәр сапсан ҡош алығыҙ. Һунарҙа кемдең ҡошо нимә тибә, шуны миңә алып килерһегеҙ! — тигән, ти.

Сәмәр хандың ете улы, йылҡы өйөрөнә сығып, берәм-берәм йүгәндәрен шылтыратҡан. Оло ҡатынынан тыуған алты улға уйнаҡлап торған бик һәйбәт алты дүнән әйләнеп ҡараған, ти. Заятүләк йүгәнен шылтыратһа, уға баҡтаһын да ҡойоп бөтмәгән күк дүнән ҡараған, ти. Сөйөү өсөн ҡош һайлағанда, алты улдың ҡайһылары бөркөт, ҡайһылары ыласын, ҡарсыға алдылар, ти. Ә Заятүләккә көнсөл ағалары: «Һиңә ошо ла ярар!» — тип, аҡ ябалаҡ тотторҙолар, ти.

Сәмәр хандың ете улы, үҙҙәренә ҡараған ете атҡа менеп, сапсан ҡоштарын эйәр ҡаштарына, яурындарына ҡундырып, һунарға сығалар. Заятүләктең баҡта дүнәнгә атланыуы була, ул күк толпарға әйләнә. Был хәлде күреп, уның алты ағаһының көн-

сөлөктәрс килгән, ти. Аукан * туғайға еткәс, һунарсылар яҡындағы күл өҫтөнән ҡурҡышып туп-туп булып күтәрелгән торна, ҡыр ҡаҙы, өйрәктәрҙе күреп ҡалалар. Алты ул бер юлы бөркөт, ыласындарын сөйөп ебәрәләр. Тик береһенең дә сөйгән ҡошо торна, ҡаҙҙарҙы тибә алмай, түбәндә генә кәйелеп йөрөйҙәр ҙә, ҡайһы сысҡан, ҡайһы йомран тибеп, эйәләренең эйәр ҡашына килеп ҡуналар. Баҡтиһәң, уларҙың бөркөт, ыласын, ҡарсыға тип һайлап алған ҡоштары йә ябалаҡ, йә һар, йә көйгәнәк булған икән. Яңылышҡанлыҡтарын һиҙеп, алты туған бик ғәрләнгән, ти. Заятүләк ағалары аҡ ябалаҡ итеп биргән ҡошон сөйөп ебәрә. Уның ҡошо һауаға атылған уҡ кеүек менеп китә лә, ялағай шикелле уйнап, торналарҙы, ҡаҙҙарҙы, өйрәктәрҙе тибеп төшөрә башланы, ти. Шулай итеп:

Сәмәр хандың алты улы
Сысҡан, йомран алды, ти;
Заятүләк атлы улы
Ҡаңғылдатып ҡаҙ алды, ти,
Торҡолдатып торна алды, ти,
Быҡкылдатып һуна алды, ти.

Заятүләктең ябалаҡ тигән ҡошоноң шоңҡар булып сығыуына, уның бик күп ҡошто тибеп төшөрөүенә ағаларының бик ныҡ асыуы, көнсөллөгө килгән, ти. Заятүләк һунарҙан ҙур табыш менән ҡайта. Һунарҙан ҡайтҡан алты ул оялыштарынан ҡыҙарынабүртенә тотоп алып ҡайтҡан сысҡан, йомрандарын аталарының алдына һалдылар, ти. Сәмәр хан, был хәлде күреп, асыуынан ҡашын емерҙе, ти. Заятүләк торна, ҡаҙҙарын килтереп һалғас, уның йөҙө яҡтырып китте, ти. Ул шатлығынан Заятүләккә аҫыл таштар менән биҙәлгән ҡәмәр * бүләк итте, ти. Алты ул был хәлдән бик хурланды, ти.

Иртәгеһенә тағы ла ете ул һунарға сыға. Был юлы улар сапсан ҡоштарын кейек йәнлеккә сөймәк булалар. Йылға, күл буйҙарына барып һунар итә башлайҙар. Төлкө, бүре күреп, ете ул да ҡоштарын сөйәләр.

Сәмәр хандың алты улы
Алты сысҡан алды, ти;
Заятүләк атлы улы
Ауыҙы ҡанлы бүре алды, ти,
Алпан-толпан атлаған
Һоро айыу алды, ти,
Күл яғалап йөрөгән,
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡолағы миңле төлкө алды, ти.

Заятүләктең һунары уңышлы була, ә ағалары табышһыҙ ҡайта. Был юлы Сәмәр хан Заятүләккә килтергән йәнлектәре өсөн уғы менән ян бүләк итә. Алты ул хурға ҡала, Заятүләк дан ала.

Сәмәр хан, улдарын тағы ла бер тапҡыр һынамаҡ булып, ат сабыштырырға ебәрә. Заятүләктең ағалары йыйылышып: «Ат сабышҡанда беҙ, ялға туҡтаған булып, уның Күк толпарының табанына ҡаҙау ҡағырбыҙ. Аты аҡһап артҡа ҡалһа, хур булып, абруйы төшөр!» — тип кәңәш ҡоралар.

Икенсе көн Сәмәр хандың улдары бәйгегә сығалар. Ярты юлды үткәс, иң өлкәне энеләренә: «Әйҙәгеҙ, бер аҙ туҡтап ял итеп алайыҡ, шунан бәйгене дауам итербеҙ!» — ти. Барыһы ла, риза булып, аттарын бер яҡ ситкә ебәреп, ял итергә яталар.

Заятүләк серем итеп алғансы, ике өлкән ағаһы Күк толпарҙың табанына тимер ҡаҙаҡ ҡағып ҡуя. Бер аҙ ял алғандан һуң, туғандар тиҙ генә аттарына менәләр ҙә бәйгегә сабалар. Тик Заятүләк кенә, толпары аҡһап, тороп ҡала. Шул саҡ толпар телгә килеп егеткә: «Һин, өҙәңгегә нығыраҡ баҫып, бар көсөңә минең ике ҡабырғама ҡамсы менән ҡан сәсрәткәнсе уңлы-һуллы берәр тапҡыр һуҡ», — ти.

Заятүләктең уңлы-һуллы ҡабырғаға һуғыуы була, һуғылған ерҙән ҡан сәсрәп китә, шул әҙере аттың табанына ҡағылған тимер ҡаҙаҡтар шылтырап ҡойолоп төшәләр, Күк толпар, ҡанатын йәйеп, уҡ кеүек алға атыла. Байтаҡ алға китеп өлгөргән алты ағаһын әллә ни тиклем артҡа ҡалдырып, Заятүләк беренселекте ала.

Иң шәп аталған арғымаҡтар менән дә Заятүләктең ҡойто дүнәнен уҙа алмаған алты туған был юлы ла хур ҡалды, ти. Заятүләк, еңеүсе булып, батыр нарыҡланып ҡалды, ти. Уның көнсөл ағалары йыйылышып: «Заятүләктән нисек тә булһа ҡотолайыҡ. Ул үлмәй тороп, беҙгә дан да, тынyслыҡ та булмаҫ! Бөгөн төндә үлтерәйек!» — тип бер төптән һүҙ ҡуйышалар.

Әммә уларҙың яуыз уйҙары бойомға ашмай. Күк толпар телгә килеп Заятүләккә: «Ағайҙарың бөгөн төндә һине үлтерергә уйлайҙар. Эңер төшөү менән, мин тирмә артына килермен. Ике ҡабырғама ҡамсы менән берәр һуғып алырһың да күҙҙән юғалырбыҙ», — тип иҫкәртеп ҡуйҙы, ти. Эңер төшөп, күҙ бәйләнеп килгән ваҡытта алты туған Заятүләк йоҡларға ятҡан тирмәгә яҡынлашып килгән булалар. Заятүләк тиҙ генә Күк толпарға атлана ла йәйләүҙән юҡ була. Ҡыуып ҡараһалар ҙа, Күк толпарға етә алмай, тороп ҡалалар.

Заятүләк, елә торғас, Асылыкүл буйына килеп сығып, Ҡарағас тауына килеп туҡтай. Ул Аҡ шоңҡарын эйәр ҡашына ултыртып, Күк толпарын үлән ашарға ебәрә. Ә үҙе, ҡараңғы төн булыуға ҡарамаҫтан, ялтырап ятҡан күлдең матурлығына хайран ҡалып һоҡланып, оҙаҡ ҡына ҡарап тора. Бер ваҡыт ул, күл ситендә нур уйнағанын күреп, ғәжәпкә ҡала. Заятүләк һаҡ ҡына нур уйнаған ергә яҡынлаша. Ҡилһә, ни күҙе менән күрһен, күлдең ситендә генә яҫы таш өҫтөндә толомдарын тағатып, алтын тараҡ менән алтмыш ҡолас оҙонлоғо ҡара сәсен тарап, һыу ҡыҙы ултыра. Асылыкүл өҫтөндәге нур уйнауға ошо һылыу ҡыҙҙың һыу аҫтынан сығып биҙәнеп ултырыуы сәбәп булған икән.

Егет. ҡыҙҙың һылыулығына таң ҡалып, оҙаҡ ҡына иҫенә килә алмай ҡарап тора. Ул ҡыҙға әкренләп-әкренләп кенә яҡынлай ҙа уны аңғартмаҫтан ебәк кеүек йомшаҡ алтмыш ҡолас ҡара сәсенән тотоп ала. Һыу ҡыҙы нисек кенә ысҡынып китергә тырышһа ла, егет ебәрмәй. Шунан ҡыҙ, егет ҡулының ныҡлығын, унан ҡотола алмаҫын һиҙеп, ялбарырға тотона.

— Эй, ер улы, һин, зинһар, мине ебәрә күр! Мин — һыу ҡыҙы. Әгәр һыуҙан айырһаң, мине һәләк итерһең. Ул ваҡытта үҙең дә үлерһең! — ти.

Ни тиклем генә ялынмаһын, Заятүләк һыу ҡыҙын ебәрмәй. Егет ҡыҙға ғашиҡ була, уға былай ти:

— Йондоҙ юлап төн буйы
Ялһыҙ елдем, һылыу ҡыҙ;
Атың, илең белмәйем,
Әйтеп бирсе, һылыу ҡыҙ.
Икәү бергә булайыҡ,
Бергә тормош ҡорайыҡ?

Ҡ ы ҙ:

— Сибәр егет, шаулама,
Атым минең — Һыуһылыу,
Мине һорап даулама;
Егет, һиңә тиң булмам:
Нурҙан тыуған тоҡоммон,
Ерҙә йөрөтөп хурлама.
Ер улына тиң булмаҫ,
Нурҙан тыуған ҡыҙ бала.
Егет, һүҙең оҙайтма,
Ебәрә күр, ер улы,
Атам белһә, яу һалыр,
Башыңа ҡиәмәт һалыр, —

тип әйткән, ти.

Тик Заятүләк уны һис кенә лә ебәрмәгән, ти.

Шул ваҡыт Һыуһылыу:

— Заятүләк, йәш егет,
Йәшлегеңә бараһың,
Күлдең ҡыҙы һылыу тип,
Һыуҙа йәнһеҙ ҡалаһың.
Менеп йөрөгән толпарың, —
Унан да тороп ҡалырһың;
Аҡ шоңҡарың бер меҫкен, —
Унан да айырылып ҡалырһың.

Тип, тағы ла ҡурҡытып ҡараған, ти.

Заятүләк:

— Бер тигәндә — белә алған,
Муйыны һоноҡ һуна алған,
Муйыны оҙон торна алған.
Ҡош осҡоро — сүрәгәй. —
Ҡанат ҡаҡмай шуны алған,
Ҡолағы миңле төлкө алған,
Ауыҙы ҡанлы бүре алған
Аҡ шоңҡарҙан биҙәйем,
Һыу аҫтына төшәйем,
Һинең менән булайым!

Ел еткермәй елдергән,
Күрәкте алдан белдергән,
Сабышта ал бирмәгән
Күк толпарҙан биҙәйем,
Һыу төбөнә төшәйем,
Һинең менән булайым! —

ти. Ләкин Һыуһылыу риза булмай, нисек тә булһа, егеттән ҡотолоп китмәк була.

Һыуһылыу:

— Ай, Түләгем, Түләгем,
Бына һиңә бүләгем:
Алтын тараҡ, алтын сәсмәү, —
Уны ла һиңә бирәмен.
Һиңә булыр түгелмен,
Миңә булыр түгелһең,
Өмөт итмә, Түләгем,
Һыу төбөндә үлерһең.

Заятүләк бүләкте алыуҙан баш тарта. Ул Һыуһылыуға:

— Туғыҙ ай буйы күтәреп,
Ауырлыҡтан бөгөлгән,
Төн йоҡоһон өс бүлеп,
Күкрәк һөтөн имеҙгән
Әсәйемдән биҙәйем,
Һыуға төшөп үләйем,
Һинең менән булайым!
Айыры һаҡал үҫтергән
Атамдан да биҙәйем,
Һыу төбөнә төшәйем,
Һинең өсөн үләйем!

Шунан һуң ғына Һыуһылыу, йомшара төшөп:

— Егет, ауыҙыңды ҡымты, күҙеңде йом, минең толомома ныҡ тотон, күл төбөнә сумабыҙ! — ти. Шулай итеп улар икәүләп һыу төбөнә сумалар.

Заятүләк, Асылыкүл төбөнә төшөп, күҙен асып ебәрһә, икенсе бер сихри донъяны күрә. Иркен болонда иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡылар юшап йөрөй, сылтырап аҡҡан йылғаларында алтын балыҡтар уйнай, тәрән-тәрән күлдәрендә һәр төрлө өйрәк, аҡҡош, ҡыр ҡаҙҙары йөҙөп йөрөй, ти. Һыуһылыу Заятүләкте туғай уртаһында ултырған ап-аҡ кейеҙ тирмәгә алып инә лә:

— Егетем, теләгеңә ирештең: мин һинеке, һин минеке булдың! — ти.

— Тик был эшкә атайың риза булырмы икән? — тип һорай Заятүләк.

Шулай һөйләшеп торған ваҡытта, ишек алдына ҡара атҡа атланған, бар кейемен дә ҡаранан кейенгән, эйәр ҡашына ҡара ыласын ултыртып, Һыуһылыуҙың атаһы килеп туҡтай. Һыуһылыу Заятүләкте тиҙ генә йәшереп ҡуя. Атаһы тирмәгә килеп инә лә:

— Әҙәм еҫе килә, бында кем килде? — ти.

Һыуһылыу:

— Ер өҫтөнә сығып, әҙәм еҫе алып ҡайтаһың да минән кеше таптыраһың! — тип яуап ҡайтара.

Һыуһылыу Заятүләкте байтаҡ ҡына ваҡыт ата-әсәһенә күрһәтмәй йәшереп тота. Тик берҙән-бер көндө атаһы Һыуһылыу тирмәһендә Заятүләктең йәшенеп йәшәүен һиҙә, сер асыла. Һыуһылыу дөрөҫөн һөйләп бирергә мәжбүр була. Ул ер улын яратыуын, уның менән бергә йәшәргә теләүен йәшермәй. Быны ишетеп, Асылыкүл батшаһының асыуы ҡабара: күл болғана, ҡайнай, һыу ташып тирә-яҡты баҫа башлай [132].

Һыуһылыу Заятүләкте атаһына күрһәтә. Баһадир кәүҙәле, нурлы йөҙлө, сибәр егетте күреү менән Асылыҡүл батшаһының күңеле тыныслана, асыуы баҫыла.

— Ярар, ҡыҙым, һиңә ер улына кейәүгә сығырға яҙғандыр. Мин риза. Заятүләк эйҙә һинең менән бында рәхәтлектә йәшәһен. Ерҙе һағынып бойоғор булһағыҙ, бәлә килер. Һыу аҫты донъяһын ташлап ергә сыҡһағыҙ, икегеҙ ҙә һәләк булырһығыҙ, — ти.

Заятүләк, Асылыкүл төбөндә матурлыҡта тиңдәше булмаған һөйгән Һыуһылыуы менән бер мохтажһыҙ байманлыҡта йәшәүенә ҡарамаҫтан, тыуған илен, ер тормошон һағына башлай. Уның һағыныуы, моңайыуы йөҙөнә һары булып сыға.

— Заятүләк, һиңә ни булды, ниңә моңаяһың? — тип һорай Һыуһылыу.

— Тыуған илемде һағындым, шуға моңаямын, — ти Заятүләк.

Һыуһылыу әҙ генә булһа ла Заятүләктең хәлен еңеләйтергә, һағыныуын баҫырға уйлай. Уға бәләкәй генә көҙгө бирә, бик ныҡ һағынған хәлдә, ошо көҙгө аша тыуған ерҙәрен ҡарап, күңелен баҫырға ҡуша. Заятүләк көҙгөгә ҡараһа, ер өҫтөн, Асылыкүл буйының төшлөк яғындағы Ҡарағас тауы башында эйәһен һағынып көтөп торған Күк толпарҙы күрә. Уның эйәр ҡашында Аҡ шоңҡары моңайып ултыра. Күк толпар, Ҡарағас тауы түбәһенә

үҫкән үләнде ашап бөтөп, ерҙе ҡаҡҡа ҡалдырған, ти[133]. Күк толпар менән Аҡ шоңҡар Заятүләк күлгә сумған ергә ҡараған да һаман уның кире сығыуын көтәләр икән, ти. Быны күргән Заятүләктең күңеле тулып китә, күҙенән бөрсөк-бөрсөк йәштәр тәгәрәй. Уның һағышы тағы ла көсәйә төшә. Һыуһылыуҙың ата-әсәһе лә, кейәүҙәренең һарғайыуын күреп, уйға ҡалалар. Берҙән-бер көн һыу батшаһы Заятүләктән:

— Кейәү, һинең ерең-һыуың бармы? — тип һорай.

— Тыуған ерем — Балҡантау[134], эскән һыуым — Дим. Башҡа күп ер-һыу Дим менән Балҡанға буйһонған. Быңа шул ерҙәрҙе һағынам, — ти Заятүләк.

— Ярар, — ти һыу батшаһы. — Балҡантау иртән тороуыңа тирмәң алдында булыр!

Һыу батшаһы ендәргә бер төн эсендә Балҡантауҙы күсереп килтереп аҡ тирмә ҡаршыһына ултыртырға ҡуша. Ендәр, Балҡантауҙы эҙләп таба алмайынса, икенсе бер тауҙы тимер менән ҡоршап алып ҡайталар.

Заятүләк, иртәнсәк тирмәнән сығып ҡараһа, бер бейек тауҙы күрә. Һыу батшалығы ен-пәрейҙәре килтергән был тау ғына егеттең тыуған илен һағыныуын баҫа алмай. Абайлаңҡырап ҡараһа, Балҡантау урынына бөтөнләй икенсе тауҙы килтергәндәрен күрә.

Заятүләк, был тауҙың Балҡантау түгел икәнлеген аңғартып, былай ти:

— Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,
Алып килгән тауығыҙ, —
Балҡантауым был түгел.
Балҡантауҙың бейеге,
Бөйөрөндә уйнар кейеге;
Һыулап ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай
Һыуыры күп Балҡантау;
Айры ҡолаҡ, йылтан күҙ,
Бүреһе күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау;
Ҡырға ҡарап ҡыя юртҡан
Ҡарһағы күп Балҡантау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау;
Оя яһар, түл йәйер
Ҡоштары күп Балҡантау;
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау;
Йәйеп ҡуйған бәрхәттәй
Урманы күп Балҡантау.
Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,

Алып бында килһәләр ҙә,
Балҡантауым был түгел.

Заятүләктең шулай юҡһынып һағыныуын күреп һыу батшаһы:

— Заятүләк, һин ер улы, ерһеҙ йәшәй алмаҫһың. Һин — бөгөндән үк үҙ иркеңдә, бында көсләп тотмайым. Балҡантауыңа ҡайтып, донъя көтөгөҙ. Һыуһылыу һинең менән барыр: ир ҡатын артынан йөрөмәй, ҡатын ир артынан йөрөй. Өйөрөмдән Аҡбуҙ толпарҙы ал. Донъя ҡороп ебәреү өсөн мал бирәм. Күлдән сығып, Балҡантауға етмәй тороп, артыңа әйләнеп ҡарама! — ти.

Заятүләк Аҡбуҙ толпарға атланып, Һыуһылыуҙы алдына ултыртып, һыу батшаһы менән хушлашып, күлдән сығып китә. Ул туп-тура Балҡантауға табан юл тота, Заятүләк артта бер туҡтауһыҙ күлде ҡайнатып, эркелеп йылҡы сыҡҡан, ҡолондар сырҡыраған, аҫау айғырҙар кешнәгән, ер тетрәткән тояҡ тауыштарын ишетә. Ул, тауышҡа сыҙай алмай, артына боролоп ҡарай. Ҡараһа, Асылыкүлдән сыҫҡан һыртлы өйөр-өйөр йылҡы сығып килгәнен күрә [135]. Заятүләктең ҡарауы була, ярға сығып өлгөрмәгән йылҡылар күлгә кире сумалар, ергә аяҡ баҫып өлгөргәндәре Аҡбуҙ толпарға эйәрәләр. Заятүләк менән Һыуһылыу, хужаһын көтөп ябыҡҡан, һарғайып бөткән Күк толпар менән Аҡ шонҡарҙы ла алып, Балҡантауҙа донъя көтә башлайҙар. Заятүләк һунарға йөрөй, ҡурайҙа уйнай.

Уң яғымдан таяуға
Балҡантауым бар минең;
Һул яғымдан таяуға
Һыуһылыуым бар минең, —

тип йырлай Заятүләк. Әммә улар бергә-бергә күңелле тормошта оҙаҡ йәшәй алмайҙар. Берҙән-бер көндө һиҙгер Һыуһылыу Дим яғынан сабып килеүсе ат тояҡтары тауышын ишетә, үткер күҙҙәре күккә күтәрелгән саң томанын күрә. Ул Заятүләккә:

— Һинең ырыуҙаштарың саң-томан туҙҙырып бында табан сабып киләләр. Йөрәгемде хәүеф алды, тигеңгә килмәйҙәрҙер ахыры, — ти.

— Килһендәр әйҙә. Мин уларға тере көйө бирелмәм. Уларға ҡаршы яуға сығам! — тип, Заятүләк уҡ-һаҙаҡтарын әҙерләй башлай.

— Заятүләк, һин ырыуҙаштарыңдың ҡанын ҡойма. Бәлки, улар берәй мөһим хәбәр алып киләләрҙер, тәүҙә һүҙҙәрен тыңлап ҡара. Әгәр ҙә һине көслөк менән алып китһәләр, ҡырҡ көндән һуң ошо урынға килерһең, мин һине көтөрмөн. Асылыкүлһеҙ, һинһеҙ мин ҡырҡ көндән дә артыҡ йәшәй алмам. Хәҙергә мин, сапҡындарға күренмәҫ өсөн, йәшеренәм, — ти Һыуһылыу. Заятүләк уның кәңәшенә риза була.

Күп тә тормай, Сәмәр хандың атлы ғәскәре Балҡантауға килеп етә. Ғәскәр башы Заятүләккә килеп:

— Үткән төндә атайың Сәмәр хан вафат булды. Алты туға-

ның, хан тәхетенә талашып, бер-береһе менән һуғыша. Илдә тыныслыҡ юҡ. Халыҡ һинең хан булыуынды теләй, зинһар, ошо теләкте кире ҡаҡма. Беҙ һине алырға килдек, — ти.

Заятүләк: «Һыуһылыуҙы ҡырҡ көн тулғансы килеп алырмын әле», — тип уйлай ҙа, ғәскәрҙе эйәртеп, хан йәйләүенә юл тота. Уны ырыуҙаштары бик хөрмәтләп ҡаршылайҙар, хан тәхетенә ултырталар. Уның алты ағаһы берен-бере үлтереп бөтәләр.

Заятүләк илдә тыныслыҡ урынлаштыра, ырыуҙаштарының кәңәштәрен тыңлай, бейҙәрҙе, аҡһаҡалдарҙы йыйып һөйләшә, илселәрҙе ҡабул итә. Йәш ханды һайлау ҙур байрамға әйләнә. Әллә нисә көндәр буйы туй бара. Майҙанда батырҙар көрәше, уҡ атыу, ат саптырыу бәйгеләре ойошторола, сәсәндәр, йырсылар, ҡурайсылар ярышы уҙғарыла.

Заятүләк ил эштәренән арына алмай йөрөгән көндәрҙә Һыуһылыу, япа-яңғыҙ моңайып, һөйгәненең ҡайтыуын зарығып көтә. Асылыкүлдән дә, Заятүләктән дә башҡа айырым йәшәү ҡайғыһынан һарғая, шиңә башлай. Ул, Заятүләкте һағынып, былай тип йырлай:

Иртәнсәккәй тороп, бер ҡараһам,
Яңғыҙ сағыл күренә ҡош кеүек;
Түләк менән бергә булған көндәр
Йоҡоларҙа күргән төш кеүек.

Күк дүнән дә толпар, ай, уйнайҙыр,
Теҙгененән тартһаң, буйлайҙыр;
Күҙкәйҙәрем йоҡо алғанда ла,
Күңелдәрем һине уйлайҙыр.

Заятүләк, донъя мәшәҡәте менән йөрөй торғас, билдәләнгән ваҡыттың килеп еткәнен дә һиҙмәй ҡала. «Һыуһылыуҙы барып алып киләйем әле, яңғыҙлыҡтан зарыҡҡандыр инде!» — тип иҫәпләп ҡараһа, ҡырҡ көн үтеп, инде ҡырҡынсы төн үтеп барған була.

Заятүләк, иң шәп атҡа менеп, Балҡантауға ҡарап саба, нисек булһа ла өлгөрөп ҡалырға тырыша. Тик Заятүләк өлгөрә алмай. Ул Балҡанға килеп еткәндә, ҡырҡ беренсе көн башланған, уның һөйгән Һыуһылыуы үлгән була. Заятүләк был ҡайғыны күтәрә алмай. Ул Балҡантауҙың башына һөңгөһө менән ҡәбер ҡаҙый. Һыуһылыуҙы ҡәбергә һалғандан һуң, Заятүләк булат һөңгөһө менән үҙен-үҙе сәнсә лә, йәнһеҙ булып, һөйгәненең эргәһенә ауа.

Заятүләкте эҙләй сыҡҡан кешеләр хәтһеҙ көндән һуң ғына Һыуһылыу менән икәүһенең бер ҡәберҙә ятҡан мәйетен табалар. Улар Заятүләк менән Һыуһылыуҙы хөрмәтләп күмәләр, ҡәберҙәрен эре-эре таштар менән уратып өйөп ҡуялар.

Шунан бирле Түләк батыр менән Һыуһылыуҙы түбәһендә һаҡлаған Балҡантауы Дим буйы башҡорттарының изге урынына әйләнә [136].

## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

*(версия)*

Бынан күп замандар элек, ҡырғыҙ иләндә[137], Унсан уймат тигән йортта, Һарымырҡыс исемле бер хан бар ине.

Ҡул аҫтына ҡараған иле-халҡы күп, шөһрәте шәп, байлығы тамам ерендә булғандың өҫтөнә, төрлө көнкүрешкә, уйын-көлкөгә һәүәҫле ине. Был Мырҡыс хандың йәш ҡатынынан бер Заятүләк исемле ир балаһы донъяға килде.

Заятүләк, шул замандағы хан балалары ни эш менән мәшғүл булһа, нимә менән шөһрәт тапһа, ул да шулар кеүек тәрбиә алып, һәр эштә һәр кемдән өҫтөн булды. Йәғни ул замандың һөнәрҙәренән булған ат сабыштырыу, уҡ атыу, найҙалар (һөңгө) тотоу, көрәшеү кеүек нәмәләрҙең һәр береһендә Заятүләк беренсе булып һанала ине. Сикһеҙ ҙур һәм киң далаларҙа ҡош сөйөп, ҡош типтереү, был юлда оҫталыҡ менән данлы булыу ҙур һөнәрҙәрҙән һанала ине.

Заятүләк тә үҙенең ағайҙары, хан балалары менән күп ваҡытта ат сабыштырыу, уҡ атыу, ҡош сөйөштөрөү менән йөрөй торғайны. Үҙҙәренең шул һөнәрҙәрен бер-береһенән уҙҙырыу, арттырыу өсөн былар араһында көнләшеү, намыҫланыуҙар ҙа булып китә ине. Оло ҡатындарҙан тыуған балалар бер һүҙҙә булып, Заятүләкте ситләтеп ҡыҫалар, нисек булһа ла, берәй һылтау табып, уны күҙҙән төшөрөргә йөрөйҙәр ине. Сөнки Заятүләк теге һөнәрҙәрҙә уларҙан өҫтөн булыуы, өҫтәүенә, өләңгә (шиғыр), думбыраға оҫта, төҫкә-башҡа матур, көслөлөгө менән данлы; һәм шул сәбәптәр өсөн хан иле, үҙенең йорто, ағай-энеләре Заятүләкте, башҡаларға ҡарағанда, артыҡ ярата торғайнылар. Көндәрҙең береһендә хан үҙенең ун ике ҡанатлы тирмәһенә балаларын саҡыртты. Хан балалары һәр береһе бер төрлө кейемдә ине. Йәғни баштарына шул замандың хан балалары кейә торған матур йәйге эшләпәләр кейгәндәр, өҫтәренә ебәк сапандар кейеп, билдәрен быуғандар, көмөшлө хәнйәрҙәрен алтынланған ҡындарға һалып, билдәренә таҡҡандар.

Аталары янында данлы бейҙәре, аҡыл эйәләре ултыралар ине. Балалары, барып кергәс тә, сәләм бирҙеләр. Аталары аманлыҡ-һаулыҡтарын һорашты. Балаларын берәм-берәм күҙҙән үткәреп, ҡылған эштәрен һорашты. Хан, балаларының матурлыҡтарын күргәс, шатлығынан уларға сөйөр өсөн берәр ыласын ҡошо биреп, уның өҫтөнә һәр береһенә берәр ат бирмәксе булып, әйтте:

— Ҡараҡтарым *, һәр берегеҙ йылҡылар янына барып, йүгәндәрегеҙҙе шылтыратығыҙ. Шул шылтыратҡан ваҡытта ниндәй ат ҡараһа, шуны үҙегеҙгә алығыҙ. Насар ғына ат ҡараһа ла, был бик насар тип, алмай ҡалмағыҙ, — тине.

Балалары шатланып, ҡоштарын алып, аталарына ҡарап баштарын эйеп, сығып киттеләр.

Һәр береһе, алтынлы йүгәндәрен алып, йылҡылары янына барҙылар. Заятүләктән башҡалары, йүгәндәрен шылтыратып тормай, йылҡы араһынан иң яҡшыларын һайлап алалар. Әммә Заятүләк, атаһының һүҙен аяҡ аҫтына ҡалдырмаҫ өсөн, уның һүҙе буйынса, йүгәнде шылтырата, шунда уҡ насар ғына аҡбуҙ ат уға ҡарай. Заятүләк тә, миңә яҙғаны ошолар тип, аҡбуҙсаны тотоп алып, йүгән кейҙерткәс, буҙсаның төҫө-һыны (күҙәгә насар булһа ла) яҡшылығын, толпар булыуын белдерә ине.

Бер аҙ ваҡыттан һуң аталары быларға тағы берәр ҡош алырға ҡушты. Быларҙың бәғзеһе бөркөт, бәғзеһе шоңҡар, бәғзеләре ҡарсыға алдылар. Әммә Заятүләкте ситһендереп, уға ябалаҡ балаһы кеүек бер аҡҡош балаһы бирҙеләр.

Былар шул көн һәммәһе бергә ҡош сөйөргә сығып, ҡаҙ, өйрәк кеүек ҡоштарға үҙҙәренең ҡулдарындағы ҡоштарын ебәрҙеләр. Заятүләк ағаларының ҡоштары бәғзеһе торна, бәғзеһе ҡаҙ һәм бәғзеһе өйрәк алды. Әммә Заятүләктең ҡошо һигеҙ һуна тигән ҡошто ҡыуып тотоп һәм тырнағы араһына ҡыҫтырып, Заятүләк янына килтерҙе. Былар үҙҙәренең ҡоштарын аталары алдына алып барып бирҙеләр.

Хан һәр береһенә берәр алтын бирҙе. Заятүләк һигеҙ һунаны атаһы алдына ҡуйғас, атаһы, быны маҡтап, ун алтын бирҙе.

Ҡош ауларға сыҡҡан Заятүләк ағаларына ҡарағанда күберәк ҡош ала ине. Атаһы ла быны өсөн Заятүләккә алтынды күберәк бирә ине. Бер ваҡыт, ат сабыштырғанда, Заятүләктең буҙ тайы ел етмәҫ арғымаҡ булып, ағайҙарының аттарын уҙҙы. Был эштәрҙең һәр береһенә, айырыуса аталарының Заятүләкте артығыраҡ яратыуына, ағайҙарының эстәре боша башланы. Заятүләкте нисек тә берәй төрлө һәләк итмәксе булдылар. Үҙ-ара кәңәш итеп, Заятүләкте үлтереү маҡсаты менән, алтмыш кеше бергә ҡош сөйөргә ауға сыҡтылар.

Атлас кеүек йәм-йәшел сахраларҙы, көмөш тәңкә кеүек матур ялтырап ята торған күлдәрҙе үтә-үтә, хан ауылынан бик йыраҡҡа киттеләр. Бер күлдә ҡоштарҙы ебәргәс, башҡа ҡоштар берәр ҡош типкәндә, Заятүләктең ҡошо бер рәттән ете аҡҡошто ҡағып, тибеп төшөрҙө. Ҡайтайыҡ тигән булып, аттарын сабыштырҙылар. Заятүләктең менгән аты ел кеүек осоп китте. Ағайҙары саҡ-саҡ күреп ҡалдылар. Был сәфәрҙә маҡсаттарына етә алма-

ғанлыҡтары өсөн эстәренән яндылар. Заятүләк, алдан ҡайтып, атаһынан күп бүләктәр алды. Ағайҙары, быны күргәс, бигерәк ғәрләнделәр, нисек тә быны үлтереп, бынан ҡотолмай булмаҫ, тинеләр.

Үҙҙәренең ғәҙәттәре буйынса, бер ваҡыт йәнә ауға сыҡтылар. Бик йыраҡҡа, бер ҙур күл янына, барып ҡундылар. Төнөн, Заятүләк йоҡлағас, уны үлтерергә кәңәш итә башланылар. Бәғзеһе күлгә ташлайыҡ, бәғзеһе үлтерәйек тә ханға ат тибеп үлтерҙе тип әйтербеҙ, тинеләр.

Араларынан береһе:

— Юҡ, улай күҙ алдында үлтермәгеҙ. Атының дүрт аяғына ҡаҙау ҡағығыҙ, шунан һуң ул аты менән йөрөй алмаҫ, йығылып үлер, — тине.

Былар аттың дүрт аяғына ҡаҙауҙар ҡаҡтылар.

Ағайҙарының был эшенән Заятүләктең бер ҙә хәбәре юҡ ине. Төшөндә бер кеше: «Әй улым Заятүләк! Ғафил булып йоҡлайһың. Ағайҙарың һәм юлдаштарың яман уй уйлап, һине үлтермәксе булдылар. Атыңдың дүрт аяғына ҡаҙауҙар ҡаҡтылар. Бына мин һиңә бер доға өйрәтәм. Ҡасан да башыңа берәй мөшкөл эш төшһә, шуны уҡырһың», — тине.

Заятүләк, урынынан тороп, атын барып ҡараны. Ысынлап та, атын ҡаҙауланған насар бер хәлдә күрҙе.

Теге кеше өйрәткән доғаны уҡып, атының аяғын өшкөрҙө. Аты шунда уҡ төҙәлде. Иртән торғас, иптәштәре Заятүләкте һынамаҡсы булып:

— Бар, фәлән күлдә ҡоштар бармы икән, ҡарап кил, — тинеләр.

Заятүләк, урынынан тороп, атына меңде лә тегеләр әйткән күлгә ҡарап йүнәлде. Был алтмыш кеше, быны күреп, хайранға ҡалып:

— Бының аты нисек йөрөй ала? Бында ни хикмәт бар? Инде быға һөжүм ҡылып үлтермәй булмаҫ. Атайыбыҙ ханлыҡты Заятүләккә биреп ҡуйыр, — тинеләр. Араларынан береһе:

— Өс кеше барығыҙ ҙа, атының ауыҙлығын алып, өсөгөҙ өс яҡтан ҡамсылап ҡыуалағыҙ. Аты дыулап, Заятүләкте ағасҡа йәки ташҡа бәреп үлтерер. Бына шулай итеп Заятүләктән ҡотолорһоғоҙ, — тине.

Былар, был һүҙҙе аҡылға яраҡлы күреп, өс кеше ебәрҙеләр. Был өс кеше Заятүләк янына барып, атының йүгәнен алып, ҡамсылап ҡыуҙылар. Буҙса тай — Заятүләкте алып осто. Алты-ете көн бер ҙә туҡтамай китеп, һигеҙенсе көн, ҡояш сығыр ваҡытта, ҙур бер күлдең яғаһына барып туҡтаны. Бейек тауҙың башынан ҙур күл ашъяулыҡ кеүек тип-тигеҙ булып күренеп ята ине. Был оло күл был көндәге мәғлүм Асылыкүл булалыр.

Бейек тау тигәнебеҙ — күлдең төшлөк яғындағы Ҡарағас тигән ярҙың өҫтөндәге оло тауҙыр. Быны Ҡашҡатау тип әйтәләр. Ҡашҡа (йәғни үлән үҫмәгән) тауҙың өҫтө, Заятүләктең аты кимереп торғанға күрә, һаман үлән үҫмәйенсә, таҡыр, яланғас булып яталыр, тиҙәр.

Заятүләктең иптәштәре унда тороп ҡалған. Уның ҡайҙа киткәнен һис белмәгәндәр.

Бына шул Асылыкүлдә пәрейҙәрҙәнме йәки башҡа заттарҙанмы, — билдәһеҙ бер әҙәм ханлыҡ ҡыла ине. Бының исеме Сәсуар (сәсе бар) ине. Был Сәсуар хандың, сикһеҙ матур булғанлыҡтан, һәр кем күрһә, ғашиҡ булып, ғишҡынан хайран ҡалып, үҙ-үҙен белмәҫ була торған, бер ҡыҙы бар ине. Ҡыҙ, һәр көн иртә менән күлдең ситенә сығып, сәсен тарап, үреп китер ине.

Заятүләктең аты шул ҡыҙҙың сәс тарап ултыра торған ташы тураһында туҡтағайны. (Был таш был көндә лә барҙыр. Быны Түләк ташы тип әйтәләр. Өй ҙурлығында, дүрт мөйөшлө, өҫтәлгә оҡшашлы, бик тигеҙләп юнып яһалған шикелле булып тора. Был ташты әле лә башҡорттар Һыуһылыуҙың сәс тараған ташы тип тә әйтәләр.) Шул күл буйындағы һике кеүек таш өҫтөндә, ап-аҡ аяҡтарын көмөш кеүек саф һыуға һалындырып, күләгәһе һуҙылып күлгә төшкән көйөнсә, бер хан ҡыҙы, көндәге ғәҙәте буйынса, сәсен тарап, үҙен төрлө биҙәктәргә биҙәп ултыра ине.

Ҡыҙ, оҙон сәсен икегә айырып, асып ҡарайым тип торғанда ғына, Заятүләк ҡыҙға сәләм бирҙе.

Ҡыҙ, Түләктең тауышын ишетеп, һушһыҙ була яҙып, йөҙөн ҡулдары менән ҡаплап алды. Ғүмерендә ундай әҙәм тауышын ишеткәне булмағандан, ни ҡылаһын белмәй, аһ ҡылып:

— Әгәр мин һине күрә торған булһам, йөҙөмдө һиңә күрһәтмәгән булыр инем, — тине.

Заятүләк бер күреү менән ҡыҙға йәне-тәне менән ғашиҡ булып, һис һүҙ әйтер хәле ҡалманы.

Ҡыҙҙың күңелендә нисек булһа ла Түләкте алдап, бер яҡҡа ҡаратып, унан ҡасып һыуға сумыу ине. Түләк, ҡыҙға ғашиҡ булып, шул шиғырҙы әйтте:

— Инеп килдем атымдан,
Инде һинең рузыңа *,
Сәләм бирҙем мин һиңә,
Ай тик күрекле йөҙөңә;
Ғашиҡ булдым мин һинә,
Көндәй * күркәм йөҙөңә;
Хайран булып ҡалырмын,
Бал-шәкәрҙәй һүҙеңә;
Һүҙең әйтсе, Һыуһылыу,
Һүҙең әйтсе, Һыуһылыу!
Сәфәр ҡылдыҡ күп кеше,
Йүгәнһеҙ ҡыуҙы өс кеше;
Атым килә ярышып,
Ҡулым килә ҡарышып;
Атың, юлың белмәймен,
Ерең, һыуың белмәймен,
Атың әйтсе, эй һылыу,
Ерең әйтсе, Һыуһылыу!

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Атың үҙең беләһең,
Ерең, һыуың беләһең,
Һәрамзалыҡ ҡылаһың *,
Заятүләк атлы һин;
Атың килһә ярышып,
Ҡулың килһә ҡарышып,
Унсан ҡырғыҙ илендә,
Һарымырҡыс уғлы һин!
Заятүләк йәш уғлы,
Заятүләк йәш уғлы,
Атың менән сығып һин,
Ҡош сөйөргә килеп һин,
Үҙ илеңдән айырылып,
Беҙҙең илгә килеп һин,
Заятүләк — бай уғлы,
Заятүләк — хан уғлы.

Заятүләк ҡыҙға:

— Бер тигәндә, белә алған,
Муйыны һоноҡ һуна алған,
Муйыны оҙон торна алған,
Ҡош осҡоро — сүрәгәй,
Ҡанат ҡаҡмай, шуны алған,
Артыҡ ҡошто аҫырамаҫ
Аҡ ябалаҡ балаһы —
Шоңҡарымдан биҙәйем,
Һинең менән булайым,
Атың әйтсе, Һыуһылыу,
Һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу,
Һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу!
Бер тигәндә белә алған,
Ауыҙы ҡанлы бүре алған,
Аяғы һылтаҡ төлкө алған,
Ниндәй көслө булһа айыу,
Бер тибрәтмәй шуны алған
Аҡ шоңҡарҙан биҙәйем,
Атыңды әйтсе, Һыуһылыу,
Атыңды әйт, Һыуһылыу!

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Атым һорап ни тирһең,
Ерең һорап ни тирһең,
Беҙҙең ерҙәр ҡатылыр,
Түҙә алмаҫһың, Түләгем,
Беҙҙең ерҙәр ташлылыр,
Тора алмаҫһың, Түләгем!

Хәстә * булып ятырһың,
Ғосса * булып үлерһең,
Ҡайтып киткел, Түләгем!
Ҡайтып киткел, Түләгем!

Түләк ҡыҙға:

— Артыҡ ҡошто аҫырамаҫ
Аҡ шоңҡарҙан биҙәйем,
Айлыҡ юлға ҡараған,
Көнлөк юлға бер баҫҡан,
Дүрт аяғы майырылған
Арғымаҡтан биҙәйем,
Күккә табан осорған
Аҡбуҙсанан биҙәйем,
Һинең менән булайым,
Һыуға китеп үләйем!

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Әй Түләгем, Түләгем,
Юҡтыр һиңә бүләгем;
Ҡулымдағы көмөш йөҙөк
Бына һиңә бүләгем!
Ҡуш имсәкле көмөш йөҙөк
Бүләк булһын, бай улы,
Шуны ал да ҡулыңа
Ҡайтып киткел, бай улы!

Заятүләк ҡыҙға:

— Көмөш йөҙөк ҡуш имсәкле
Зифа буйың биҙәгел,
Ул бүләгең кәрәкмәй,
Зифа буйың — теләгем!
Һүҙем ҡабул күрмәһәң,
Һыуға төшөп үләйем,
Һыуға төшөп үләйем!

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Ҡуш имсәкле ҡуш йөҙөк
Алманың һин, Түләгем,
Бүләк бирҙем, алманың,
Ниҙер һинең теләгең?
Ҡөндәй үҙем төҙәнгән,
Айҙай йөҙөм биҙәнгән,
Алтын тараҡ, ай көҙгө —
Бына һиңә бүләгем,

Бына һинә бүләгем!
Айҙай йөҙөм биҙәнгән,
Бына һинә бүләгем,
Бына һинә бүләгем!
Һинә булыр түгелмен,
Миңә булыр түгелһең,
Өмөт итмә, Түләгем,
Ышанмағыл, Түләгем!

Заятүләк, ҡыҙға ҡарап:

— Туғыҙ-ун ай күтәргән,
Ауырлыҡтан бөгөлгән,
Айыры имсәктән һөт биргән
Әсәйемдән дә биҙәйем!
Төн йоҡоһоп өс булгән,
Төндә тороп имеҙгән,
Ауыҙҙан ҡаймаҡ сейҙергән
Әсәйемдән дә биҙәйем!
Һинең менән булайым,
Һыуға төшөп үләйем,
Атың әйтсе, Һыуһылыу,
Атың әйтсе, Һыуһылыу!

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Ҡуш имсәкле ҡуш йөҙөк
Алманың һин, Түләгем,
Ҡулымдағы көмөш йөҙөк
Алмаймыһың, Түләгем!
Бүләк биреп алманың,
Ниҙер һинең теләгең,
Ниҙер һинең теләгең?

Заятүләк ҡыҙға:

— Айры һаҡал үҫтергән
Атайҙан да биҙәйем,
Һарымырҡыс хан иле
Барынан да биҙәйем,
Һинең менән булайым,
Һыуға төшөп үләйем.

Ҡыҙ, Заятүләккә ҡарап:

— Айры һаҡал үҫтергән
Атайыңдан биҙмәгел,
Һарымырҡыс хан иле,
Барынан да биҙмәгел,

Һүҙең әйтсе, Түләгем,
Һүҙең әйтсе, Түләгем!
Ана арғы яғыңдан
Килә ятыр биш кеше,
Белмәйменһең, бай улы,
Күрмәйменһең, хан улы? —

тип, Заятүләкте алдап ситкә ҡаратты ла үҙе һыуға сумып китте. Егет әйләнеп ҡараһа, ҡыҙ һыуға сумған. Ҡыҙҙың сәсе алтмыш ҡарыш ине. Шул оҙон һуҙылған йылан кеүек ҡара сәсенең бары алты ҡарышы һыу өҫтөндә ҡалған ваҡытта, Заятүләк кире боролоп ҡарап: «Аһ, харап булдым, Һыуһылыу мине алдап ҡына ситкә ҡаратҡан икән. Бында яңғыҙ ҡалғансы, Һыуһылыу менән һыу аҫтында үлгәнем артыҡ», — тип әйтте лә Һыуһылыуҙың сәсенә барып йәбеште. Шул йәбешкән көйөнсә, икәүләп Асылыкүлдең аҫтына төшөп киттеләр.

Бер аҙҙан һуң икенсе бер яҡты донъяға барып сыҡтылар. Шул ерҙә, ендәр торған ҡалала, Һыуһылыуҙың аҡ быяланан һарайы бар ине. Шул һарайҙың алдына барып туҡтанылар. Заятүләк ҡыҙҙың сәсен ҡулына бик ныҡ итеп урағайны. Ҡыҙ:

— Ебәрһәнә! — тип ни саҡлы ялынһа ла, ҡулынан ысҡындырманы. Бынан һуң ҡыҙ шул шиғырҙы әйтте:

— Мин керәйем һарайға,
Урын, түшәк йәйәйем,
Һине сығып алайым,
Көтөп торғол, бай улы!
Сәскәйемде ысҡындыр,
Мин сығырмын — көтөп тор;
Итербеҙ бергә хозур,
Көтөп торғол, бай улы!

Бынан һуң Түләк ҡыҙҙың сәсен ысҡындырҙы. Ҡыҙ һарайға керҙе лә бикләнде. Түләк ишек төбөндә ҡалды. Ҡыҙҙан һис бер хәбәр юҡ ине. Һарайҙың диуары * быяланан, баштары йәүһәрҙән, иҙәндәре мәрмәр ташынан ине. Һарайҙың янында саф көмөш кеүек ялтырап ятҡан күлдәр өҫтөндә төрлө төҫтәге өйрәктәр, аҡҡоштар йөрөйҙәр. Һарайҙың икенсе яғында төрлө төҫтәге йылғалар, шишмәләр сылтырашып матур таштар араһынан ағып яталар; һыу эсендә һап-һары алтын, ап-аҡ көмөш кеүек матур балыҡтар уйнап йөрөйҙәр ине.

Ҡыҙ, Заятүләкте бында ҡалдырып, үҙ янына һарайға кертмәгәс, Заятүләк әлеге, төшөндәге, ҡарттан өйрәнгән доғаһын уҡыны. Шунда уҡ күлдәр ҡорой, шишмәләр кибә башланы. Ҡоштар, балыҡтар үлергә яҡынлаштылар.

Был эште күргәс тә, пәрейҙәр батшаға барып:

— Әй хөрмәтле шаһыбыҙ! Ҡыҙҙың һарай ишеге төбөндә бер әҙәми зат ултыра. Шул егеттең шомлоғонан булһа кәрәк, күлдәр, йылғалар ҡорой башланылар. Ул әҙәмдең ҡайҙан килгәне, нисек итеп бында килә алғаны билгеһеҙ, — тинеләр.

Батша шунда уҡ ҡыҙына:

— «Әй, ҡыҙым, ул егет, әлбиттә, һин күл өҫтөнә сығып, сәсең тарағанда күреп ҡалған да һинең артыңдан бында килгәндер. Ул һинең янына керһен, уның ни эше бар, һораш. Уның һиңә зарары теймәҫ. Шунан һуң, ҡайҙан килгән — шунда китер», — тип хат яҙып биреп ебәрҙе. Һыуһылыу, атаһының хатын алып уҡығас, һарайҙың ишеген асты. Шул сәғәттә Заятүләк һарайға инеп асыуынан Һыуһылыуҙың сәсенән тотто.

Һыуһылыу:

— Әй, егет, инде мин — һинең, һин — минең булдыҡ. Минең сәсемде ебәр, — тине.

Бынан һуң Һыуһылыу атаһына хәбәр ебәрҙе.

Атаһы, был хәбәрҙе ишеткәс:

— Был эш оҡшармы икән? Ул тупраҡтан яратылған, беҙ уттан яратылдыҡ. Ул ер өҫтөндә тора, беҙ — күл аҫтында, һыуҙа торабыҙ, — тине.

Вәзирҙәре:

— Эй падишаһ! Инде был ҡыҙҙың яҙмышы әҙәм балаһынандыр, — тигәс, батша ҡыҙын Заятүләккә бирмәксе булды.

Бөтә ҡала халҡы, ҙур туй яһап, Һыуһылыуҙы Заятүләккә бирҙеләр. Былар шулай торған ваҡытта, бер көн Һыуһылыу Заятүләккә:

— Минең сахраға сығып йөрөп ҡайтаһым килә, һеҙ бында торoғоҙ, мин тиҙ ҡайтырмын, — тип сығып китте.

Заятүләк яңғыҙ ҡалғас, һарайҙың бүлмәләрен ҡарай башланы. Йөрөй торғас, бер бүлмәлә булат көҙгө тапты. Көҙгөгә ҡарап, үҙенең һарғайғанын күргәс:

— Аһ! Ата-әсәйемдән, Төркөстан[139] иленән айырылып, бер ҡыҙға ғашиҡ булдым, бер ҡыҙ өсөн йөҙөмдө һары ҡылдым! — тине.

Уйнар өсөн бер думбыра яһаны. Ҡыҙ ҡайтҡас та, думбыраны күреп:

— Бик матур нәмә яһаған икәнһең, уйнап ҡараһана, — тине. Заятүләк думбыраһын алып, ошо өләңдәрҙе (йыр) әйтте:

Әй думбырам, думбырам,
Уйна, күңел асылһын,
Думбырам минең уйнайҙыр.
Ҡыл ҡумыҙым, һорнайҙыр *,
Тыңлай килгән әҙәмдәр
Үҙен-үҙе белмәйҙер!

Бәғзе ваҡыттарҙа Һыуһылыу Заятүләк янынан әллә ҡайҙа китеп, юғалып тора ине. Заятүләк был эшкә ғәжәпһенеп:

— Э, Һыуһылыу, ҡай саҡта һин әллә ҡайҙа китәһең, ҡайҙа барып йөрөйһөң? — тине.

Һыуһылыу:

— Мин әлеге, һин килеп ултырған ергә сығып, таш өҫтөнә

ултырып, сәсемде тараймын, төҙәнеп, биҙәнеп ҡайтамын, — тине.

Заятүләк:

— Минең атым менән сөйә торған ҡошом шундамы? — тине.

Һыуһылыу:

— Улар һаман шунда торалар. Һинең төшкән урыныңа ҡарағандар, күҙҙәрен шул урындан алмайҙар, ябығып бөткәндәр, — тине.

Заятүләк, көрһөнөп:

— Уларҙы бында алып килә алмаҫһыңмы? — тине.

Һыуһылыу:

— Мин булғас, улар ниңә кәрәк? Һин атымдан да биҙәйем, ҡошомдан да биҙәйем, тинең, — тип шул өләңдәрҙе әйтте:

— Атың тора әбегеп *,
Һинең өсөн ябығып;
Ул хеҙмәтте итергә
Хәлем килмәй, бай улы.
Атың һинең йылмая,
Уға килер юл ҡайҙа?
Ул хеҙмәтте итергә
Хәлем килмәй, бай уғлы.

Шунан һуң Заятүләк әлеге ҡарт өйрәткән доғаны уҡығайны, аты менән ҡошо һарай ишеге төбөнә килделәр. Түләк, аты менән ҡошон күргәс, ни эшләргә белмәне. Ҡошо талпынып, аты кешнәп тора. Атының ял, ҡойроғон һыпырып, аллаға шөкөр ҡылып, ҡайғыһыҙ ғүмер итә башланы.

Бер ваҡыт Сәсуар хан, Түләк менән ҡыҙы Һыуһылыуҙы үҙенең йортона саҡырып:

— Был йорт һәм илем ен йорто, ен иле. Һеҙ бында тора алмаҫһығыҙ, иҙе ер йөҙөнә сығығыҙ. Мин һеҙгә инсе * итеп күп мал бирермен, — тине. Һыуһылыу менән Түләкте быяла арба менән күтәртеп, Асылыкүл аҫтынан яр ситенә сығарып ташлатты.

Заятүләк күл ситендә ҡайғырып, ҡайҙа барырын белмәй торғанда, аҡ һаҡаллы ҡарт килеп:

— Эй, уғлым! Бер ҙә ҡайғырма! Балҡантауға бар! Хоҙай Балҡан тауын һинең өсөн яратҡан, — тине.

Һыуһылыу, Заятүләккә ҡарап:

— Эй, йәнем, тау башына менеп етмәй тороп, бер ҙә артыңа әйләнеп ҡарама! Әгәр ҙә әйләнеп ҡараһаң, беҙгә эйәреп килә торған мал-тыуарҙы һарап итерһең, — тине.

Түләк атына менеп, ҡошон ҡулына ҡундырып, Һыуһылыу әйткәнсә, артына әйләнеп ҡарамай, тауға ҡарай йүнәлде.

Хан Һыуһылыуға атһыҙ арбалар әҙерләп, аҫыл заттар тулған һандыҡтар тейәтеп, ҡол ҡыҙҙары менән бергә Түләктең артынан ебәрҙе. Һыуһылыуҙың артынан һыу йылҡыларын ҡыуҙырҙы. Ҡолкәнизәктәр * ҡысҡырышып, йылҡылар кешнәшеп, әллә ниндәй тауыштар сығаралар ине. Түләк, Асылыкүлдән Өйҙөрәк [139] башы

тигән ергә еткәнсе, артына әйләнеп ҡараманы. Балҡантауға етер саҡта, күңеленә ҡурҡыу төшөп, тауыш сыҡҡан яҡҡа әйләнеп ҡараһа, сысҡан һыртлы ҡола йылҡы менән Асылыкүл һәм Өйҙөрәк араһы тулған, Асылыкүлде һаман сығып бөтмәгәндәр. Берсһенең һыртына икенсеһе башын һалып һаман сығыуҙарын күрҙе. Заятүләк әйләнеп ҡарағас та, ҡурҡышып, Асылыкүлгә кире сумдылар. Ҡалғандары бик аҙ ҡалды. Әгәр ҙә Заятүләк артына әйләнеп ҡарамаһа, шул төҫтәге йылҡылар менән ер йөҙө тулыр ине.

Бына был ваҡытҡа саҡлы Сәрмәсән[140] һәм Дим буйы башҡорттары сәсән, үткер малдарҙы Һыуһылыуҙың артынан сыҡҡан һыу йылҡыһы, тиҙәр.

Ҡалған малдары менән Балҡантауға барып ғүмер итә башланылар. Ул ваҡыттарҙа Балҡан тауында төрлө януар, йәғни ҡыр кейектәре бар ине. Заятүләк уйынға оҫта булғанға күрә, төрлө көйҙәр йырлай, уйнай, бындағы януарҙарҙы күреп, ошо өләңдәрҙе әйтә ине:

Айры ҡойроҡ, йылтан күҙ
Ҡасҡары * күп Балҡантау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шәм ҡолаҡ
Ҡуяны күп Балҡантау;
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау;
Оя яһар ере күп,
Ҡоштары күп Балҡантау.

Бер аҙ ваҡыттар торғас, һыу ҡыҙы Һыуһылыу үҙенең ҡалаһын, ата-әсәһен һағына башлағас, Заятүләк уның күңелен табыр өсөн түбәндәге йырҙарҙы әйтә:

— Уң яғымдан терәргә
Балҡантауым бар минең;
Һул яғымдан терәргә
Һыуһылыуым бар минең;
Бары ла алла ҡөҙрәте,
Шөкөр кәрәк, Һыуһылыу,
Шөкөр кәрәк, Һыуһылыу!
Яйыҡ башы — Бөйөр тау,
Иҙел башы — Ирәмәлтау,
Унан бейек Балҡантау,
Шөкөр кәрәк, Һыуһылыу,
Шөкөр кәрәк, Һыуһылыу!
Тәхет, бәхет яратҡан
Балҡантауым бар минең,

Шөкөр кәрәк, һыуһылыу,
Шөкөр кәрәк, һыуһылыу!

Бынан һуң Заятүләк шул тирәгә мәшһүр булды. Ендәр барып батшаға:

— Был көндө кейәүең мәшһүр булған, Балҡантауында шаһлыҡ итә, — тинеләр.

Батша кейәүен ҡунаҡҡа саҡырҙы. Түләкте ендәр килеп алып ҡайттылар. Унда барғас, уға уйын уйнарға ҡуштылар.

Түләк, ен батшаһына ҡарап:

— Уң яғымдан терәргә
Балҡантауым юҡ минең;
Һул яғымдан терәргә
Һыуһылыуым юҡ минең, —

тине.

Батша ендәргә әмер ҡылып:

— Барығыҙ, һыуһылыу менән Балҡантауҙы бында алып килегеҙ! — тине. Ендәр барып Һыуһылыуҙы алып килделәр. Икенсе рәт барып, Балҡантауҙы таба алмағас, икенсе бер тауҙы Балҡантауға оҡшатып, батша һәм Түләк янына алып килделәр. Заятүләк был тауҙың Балҡантау түгел икәнен аңлатып, ошо һүҙҙәрҙе әйтте:

Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,
Алып килә ятырҙар,
Минең тауым был түгел.
Һыулап ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай,
Һыуҙа йөҙгән балыҡтай
Ҡейеге күп Балҡантау.
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Балҡан — тауҙың бейеге,
Башында уйнар кейеге,
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Ҡыҙ балалай һөйләшкән
Төлкөһө күп Балҡантау,
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Шеш аяҡлы, шеш мөгөҙлө
Боланы күп Балҡантау.
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау.

Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,
Алып бында килһәләр ҙә,
Балҡантауым был түгел! —

тип әйтте лә уйын уйнаманы.

Падишаһ, быны күргәс, Заятүләк менән Һыуһылыуҙы ер өҫтөнә сығартты. Улар кире шул Балҡантауы өҫтөнә барып, күп йылдар ғүмер иттеләр. Иң ахырында шул тауҙа вафат булдылар.

Заятүләк менән Һыуһылыуҙың ҡәберҙәре шунда. Заятүләк үҙ иле Төркөстандан киткәс, кире унда урап ҡайта алманы. Һыуһылыуға ғашиҡ булыу сәбәбенән, Асылы тирәһендә, Балҡантауында йөрөп ғүмерен үткәрҙе. Иң ахырында, Балҡантауы өҫтөндә вафат булып, шунда күмелде.





## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

*(версия)*

Борон Албырбай тигән берәүҙең булған бер улы, Алтынбайҙың булған алты улы, Етембайҙың — ете улы.

Алтынбайҙың алты улы
Алты ала атлы икән;
Етембайҙың ете улы
Ете көрән атлы икән, ти;
Албырбайҙың яңғыҙ улы
Албыр йолҡош атлы икән, ти.
Алтынбайҙың алты улы
Алты һунар ҡошло икән;
Етембайҙың ете улы
Ете һунар ҡошло икән;
Албырбайҙың бер улы
Һигеҙ һуна ҡошло икән, ти;
Алтынбайҙың алты улы
Алтыһы ла затлы икән;
Етембайҙың ете улы —
Етеһе лә етеүле;
Албырбайҙың яңғыҙ улы
Заятүләк атлы икән.

Илдәге атай-һатай[141] йыйылышып йәштәрҙе һунарға ебәргән. Былар ҡош атырға, кейек ауларға сабышып киткәндәр.

Алтынбайҙың алты улы
Алты сысҡан алды, ти;
Етембайҙың ете улы
Ете йомран алды, ти;
Албырбайҙың яңғыҙ улы,
Заятүләк атлы улы,
Алты өйрәк алды, ти,

Албыр бүре алды, ти,
Ялбыр юлбарыҫ алды, ти,
Олпат айыу алды, ти;
Ҡаңғылдатып ҡаҙ алды, ти,
Торҡолдатып торна алды, ти,
Сүрәгәй сумғыш һуна өйрәк —
Уны ла атып алды, ти.

Шулай итеп, Алтынбайҙың алты улы, Етембайҙың ете улы бер ниһеҙ ҡайтып инәләр. Ә Заятүләк ҙур табыш менән ҡайтҡан. Тегеләр быңа бик көнләшә.

Иртәгеһен былар тағы һунарға сығалар. Был көндә һунар тағы шулай уҡ була. Алтынбайҙың алты улы менән Етембайҙың ете улы бер нәмә лә ала алмай, Заятүләк тағы табышлы була. Әлегәсә:

Алтынбайҙың алты улы
Алты сысҡан алды, ти;
Етембайҙың ете улы
Ете йомран алды, ти;
Албырбайҙың яңғыҙ улы,
Заятүләк атлы улы,
Алты өйрәк алды, ти,
Албыр бүре алды, ти,
Ялбыр юлбарыҫ алды, ти,
Олпат айыу алды, ти;
Ҡаңғылдаҡ ҡаҙ алды, ти,
Торҡолдаҡ торна алды, ти,
Сүрәгәй сумғыш һуна өйрәк —
Уны ла атып алды, ти.

Шунан өсөнсө көн тағы һунарға сығалар. Тағы шулай, Алтынбайҙың алты улы менән Етембайҙың ете улы бер нәмә лә ала алмай, Албырбайҙың яңғыҙ улы Заятүләк йәнә ҙур табышлы була. Былар ҡайтырға сығалар. Ҡайтҡанда, Алтынбайҙың алты улы менән Етембайҙың ете улы Заятүләкте үлтермәк булалар, хәйлә ҡороп киләләр.

Алтынбайҙың алты улы,
Атлап килә башланы, ти,
Етембайҙың ете улы
Етеп килә башланы, ти.
Алтынбайҙың алты улы
Әйтеп килә башланы, ти,
Етембайҙың ете улы
Йырлап килә башланы, ти:
— Албырбайҙың йәш уғланын
Үлтереп һыуға һалайыҡ,
Заятүләк — йәш уғландың
Башын өҙә сабайыҡ.

Алты өйрәк табышын
Ҡулынан тартып алайыҡ.
Яурындағы уҡ-һаҙағын
Һындырып утҡа яғайыҡ.
Албыр бүреһен, ялбыр юлбарыҫын,
Олпат айыуын алайыҡ.
Ҡаңғылдаҡ ҡаҙын йолҡайыҡ,
Торҡолдаҡ торнаһын тартайыҡ,
Сүрәгәй сумғыш һуна өйрәк, —
Уны ла тартып алайыҡ.
Аҫтындағы аҡ толпар, —
Уны ла тартып алайыҡ,
Үҙен йығып талайыҡ,
Башын өҙә сабайыҡ,
Үлтереп һыуға һалайыҡ.

Шунан Албырбайҙың яңғыҙ улы Заятүләк быны һиҙеп ҡалды ла быларҙы ташлап әкрен генә китә башланы, ти.

Алтынбайҙың алты улы,
Атылып килә башланы, ти,
Етембайҙың ете улы
Елкенеп килә башланы, ти.
Алтынбайҙың алты улы
Уғын ала башланы, ти,
Етембайҙың ете улы
Йәйәһен тарта башланы, ти;
Заятүләк, йәш уғлан,
Быны һиҙә башланы, ти,
Аҫтындағы аҡ толпары,
Һиҙеп, елә башланы, ти.

Заятүләк аҡ толпарының биленә тибеп ебәргән икән, аҡ толпар елеп алып та киткән. Заятүләк бар табышын артынан ҡыуа килгән Алтынбайҙың алты улы менән Етембайҙың ете улына ташлап киткән.

— Албыр бүре тиреһен
Ала бирегеҙ, оңҡоттар,
Ялбыр юлбарыҫ тиреһен
Ябына бирегеҙ, йолҡоштар,
Олпат айыу тиреһен
Ауната бирегеҙ, мырҡыҫтар,
Ҡаңғылдаҡ ҡаҙҙы алығыҙ,
Торҡолдаҡ торнаны алығыҙ,
Сүрәгәй сумғыш һуна өйрәк —
Уны ла бүлһә алығыҙ,
Буш ҡаҙанға һалығыҙ,
Йот тамаҡҡа алығыҙ, —

Күргәнегеҙ шул булһын,
Тапҡанығыҙ шул булһын,
Йот тамаҡҡа ҡаты һөйәк
Арҡыры килеп ултырһын! —

ти ҙә йән-фарман саптырып китеп тә бара. Алтынбайҙың алты улы менән Етембайҙың ете улы аҡ толпарҙың ҡойроғон ғына күреп ҡалалар.

Заятүләк шул китеүҙән китә. Бара торғас, бер тауға барып сыға. Был тау — Балҡантау икән. Уның эргәһендәге күл — Асылыкүл була.

Заятүләк Балҡантауҙа ял итә, атын һуғарам тип, Асылыкүл буйына төшә. Төшһә, яр буйындағы таш өҫтөндә сәсен тарап бер ҡыҙ ултыра. Заятүләк быныӊ сәсенән тотоп ала. Ҡыҙ ҡурҡып китә, әйләнеп ҡарай. Ҡараһа, сибәр бер егет. Күҙен йома был. Егеткә әйтә:

— Сибәр егет, сибәр егет,
Тотма сәсем, ебәр, егет,
Сибәр егет, сибәр егет!..

Заятүләк ебәрмәй, оторо ныҡ тота. Шунан ҡыҙ, аптырағас:

— Күҙенде йом, — ти.

Был Асылыкүл батшаһының ҡыҙы Һыуһылыу икән. Заятүләкте ул атаһы йортона алып төшөп китә. Ҡайтып, атаһына әйтә. Атаһы уны егеткә бирергә риза була. Былар шулай ирле-ҡатынлы булып тора башлайҙар.

Заятүләк, һыу батшаһының һарайында кейәү булып ята торғас, бер заман һарғайып, ябығып киткән. Быны күреп, Һыуһылыу:

— Һиңә ни булды, ниңә һарғаяһың? — тип һораған.

Егет:

— Балҡантауымды һағындым, — тигән.

Һыуһылыу тиҙ генә үҙенең туғандарын саҡырта. Уларға шундай тау яһап бирергә ҡуша. Туғандары сығып китәләр ҙә, ҡом ташып бер тау өйөп, тармаҡ өҫөн тимер менән ҡоршатып, батша һарайы янына килтереп ҡуялар. Заятүләк был тауҙың әле бер яғына, әле икенсе яғына сығып, бер башына менеп, бер итәгенә ултырып ҡарай ҙа:

— Эй Балҡантау, Балҡантау,
Башыңда ла йөрөнөм,
Ҡашыңда ла йөрөнөм,
Аҡ толпарҙы ашатҡан,
Яңғыҙ башымды йоҡлатҡан,
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел, — ти.
Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,
Алып килгән булһағыҙ ҙа,

Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.
Ай-һай, меҫкен Балҡантау —
Бар тауҙарҙың бейеге,
Бөйөрөндә уйнар кейеге;
Бүлә-бүлә бейегән
Бүреһе күп Балҡантау;
Мырҫ-мырҫ атлап йөрөгән
Айыуы күп Балҡантау;
Өлкө төбөнән тороп ҡасҡан
Ҡуяны күп Балҡантау;
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау;
Ҡағып ҡуйған ҡаҙыҡтай
Һыуыры күп Балҡантау;
Мөгөҙҙәрен йылтыратҡан,
Тояҡтарын таҡылдатҡан
Боланы күп Балҡантау.
Йәйеп ҡуйған бәрхәттәй
Яланы күп Балҡантау;
Ҡарлуғас үтмәҫ ҡарағайлы
Урманы күп Балҡантау.
Эй Балҡантау, Балҡантау —
Бар тауҙарҙың бейеге,
Бөйөрөндә уйнар кейеге...
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел, — ти.

Заятүләк шулай, быға риза булмағас, быны Балҡантауға, яҡты донъяға сығарырға булалар. Шунан һыу батшаһы егетте саҡырып ала:

— Бына һиңә бер арғымаҡ, шуның ялына тотон,— ти.— Иллә мәгәр һыуҙан сыҡҡанда, артыңа әйләнеп ҡарама, — ти.

Заятүләк, арғымаҡты менеп, Һыуһылыуҙы алдына ултырта ла һыу төбөнән сығып китә. Унының артынан эйәреп, ер өҫтөнә сысҡан һыртлы йылҡы малы сыға. Ҡешнәшкән тауышҡа түҙә алмай, Заятүләк артына әйләнеп ҡарай. Ҡарауы була, йылҡы малының яртыһы кире боролоп һыуға инеп китә. Ярға сығып өлгөргәне генә Заятүләк малы булып тороп ҡала.

Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауға килеп торалар. Һыу төбөнән сыҡҡан малдары үрсеп, байығып китәләр. Көн килгәнгә һөт биреп, төн ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып оҙон, рәхәт ғүмер кисерәләр.

## ЗАЯТҮЛӘК

*(вариант)*

Борон заманда Алтынбай менән Етебай тигән бер туған ике ағай-эне булған. Алтынбайҙың алты улы, Етебайҙың ете улы булған. Был ике туғандың ағай-энеләренән Заятүләк исемле етем бер бала ҡалған. Алтынбайҙың алты улы, Етебайҙың ете улы урмандан барып ҡош алып килеп, һәр йылды ҡош сөйә торған булғандар; былар урмандан барып ҡош алып килеүгә әҙерләнеп йөрөгәндә, Заятүләк:

— Мин дә һеҙҙең менән урманға барып ҡош алып килеп, ҡош сөйәм, — тигән.

Алтынбай, Етебай балалары:

— Һин, һармаҡ, нисек беҙҙең менән барып ҡош сөйәһең, — тип кәмһеткәндәр, ти. Алтынбай менән Етебайҙың рәхиме килеп, Заятүләкте ҡыҙғанып:

— Был баланы алып барып, ҡош алып бирегеҙ! — тигәндәр. Шунан был туғандар, Заятүләкте алып, урманға ҡош алырға киткәндәр, ти.

Алтынбайҙың алты улы алты ыласын, Етебайҙың ете улы ете шоңҡар алған, ти. Заятүләк-яңғыҙ улға аҡ шоңҡар балаһы тип алдап, аҡ ябалаҡ балаһы биргәндәр, ти. Былар ҡоштарҙы өйгә алып ҡайтҡандар. Аҙыраҡ үҫтергәндәр ҙә ҡошҡа сөйә башлағандар, ти. Алтынбайҙың алты улы алған алты ыласын, алты көйгәнәк булып, сысҡан типкәндәр; Етебайҙың ете улы алған ете шоңҡар, ете ағылбай булып, турғай типкәндәр, ти. Заятүләк-яңғыҙ улға аҡ ябалаҡ балаһы тип алдап биргәндәре аҡ шоңҡарҙың үҙе булған, ти. Был шоңҡар, шул тиклем типкес булып, бөтә ҡаҙ, туғаҙаҡ, торна һәм бүтән төрлө йәнлекте ҡалдырмай тибә торған булған, ти. Алтынбай менән Етебайҙың балалары Заятүләктең ҡошон көнләп, үҙҙәренең ҡулдарына төшөрөп алырға хәйлә төҙөй башлағандар. Шунан былар:

— Беҙ туй яһайыҡ, ат саптырайыҡ, Заятүләкте лә саҡырайыҡ. Алда килгән атҡа бәйге бирәләйек. Заятүләктең бирер нәмәһе юҡ, ул намыҫлы егет. Ат бәйгеһенә ул ҡошон бирер, шулай

итеп, унын ҡошон беҙ алырбыҙ, — тип кәңәш төҙөгәндәр, ти. Беҙҙең аттарыбыҙ бик йүгерек, Заятүләк-янғыҙ улдың аты насар, беҙҙең аттар алда килеп, унын аҡ шонҡарын беҙ алырбыҙ, — тигәндәр, ти. Шунан һуң былар ат саптырыуға әҙерлек итә башлағандар. Заятүләк-яңғыҙ ул үҙенең яңғыҙ күк дүнәнен саптырыуға әҙерләй башлаған.

Майҙан асылғас, Заятүләк-яңғыҙ ул әйткән:

— Минең ат бәйгеһенә бирер нәмәм юҡ, кемдең аты уҙһа, шуға аҡ шонҡарымды бирәм, — тигән. Заятүләктең күк дүнәне, аҡ шонҡары, бер һәпәләк эте булған. Шунан бүтән бер нәмәһе лә булмаған, ти.

Аттарҙы саптырырға ебәргәндәр. Заятүләк-яңғыҙ ул, һәпәләк этен, аҡ шонҡарын майҙан урынына ҡалдырып, күк дүнәнде үҙе менеп сабырға булған, ти. Шундай шарт ҡуйғандар: ете көн алға табан сабалар ҙа, шул уҡ юлдан ете көндән дә һуңламай, кире әйләнеп майҙанға ҡайтырға тейештәр.

Аттарҙы оҙатып, майҙанда ҡалған халыҡ эсенән бер һынсы:

— Бына ҡарағыҙ, сабырға киткән аттар эсендә бер толпар бар, шул толпарҙың аяғының саңы күккә олғашты, — тигән, ти. Шул арала Заятүләк-яңғыҙ ул күк дүнәне менән, ете көн сапҡан юлды бер көндә үтеп, әйләнеп ҡайтып та етте, ти.

Шул сәғәттә Заятүләк-яңғыҙ ул, ҡалдырып киткән аҡ шонҡарын ҡулына тотоп, һәпәләк этен эйәртеп, далаға киткән дә барған. Бара торғас, урманлыҡ эсенә кереп, бер йылға ҡашына килгән. Бер Балҡан исемле тау булған. Тауҙың битендә бер ҡаратал булған. Ҡараталға толпар булған күк дүнәнен бәйләп, һәпәләк этен ат янында ҡалдырып, аҡ шонҡарҙы эйәр ҡашына ултыртып, үҙе ер-һыуҙың самаһын алырға йылға буйлап киткән. Йылға буйынан бара ятһа, һыуҙа тауис ҡойроғо рәүешендә бер ылымыҡ ағып ятҡанын күргән. Был ниндәй ылымыҡ тип, ҡулы менән тотоп тартып ҡараһа, ылымыҡтың йәнле нәмә һымаҡ тартылғанын һиҙгән. Заятүләк-яңғыҙ ул быны нығыраҡ тарта башлаған. Шул ваҡытта һыуҙың эсенән Һыуһылыу исемле һыу ҡыҙын тартып сығарған. Заятүләк-яңғыҙ ул, ҡыҙға ҡарап:

— Төшөп килдем атымдан,
Күреп йөҙгән сәсенде;
Тартып алдым сәсеңдән,
Мауыҡтым күреп йөҙөңдө.
Өнөм-төшөм белмәйем,
Күктән төшкән сулпанмы?
Ерен-һыуын әйт, һылыу,
Исемең-атың әйт, һылыу!

Ҡыҙ:

— Беҙҙең ерҙәр ер түгел,
Атам һеҙгә тиң түгел;

Һыуҙа уҫкән һылыумын,
Ер улына тиң түгел.

Егет, ебәр сәсемде,
Талыҡтырма көсөмдө!
Атам илгә яу һалыр,
Белеп ҡалһа эшеңде.

Егет:

— Толпар менгән Түләгең
Яу килеүҙән ҡурҡырмы?
Һыуҙан тапҡан һылыуын
Егет ташлап китерме?

Ҡара күҙең йылмайтып,
Ҡарап миңә көлһәңсе!
Төртәйтелгән түшеңде
Түшемә яҡын ҡушһаңсы...

Иленән аҙған Түләкте
Батырым тип һөйһәңсе!
Исемең, ереңде әйтеп,
Ҡунағым тип алһаңсы!

Ҡыҙ:

— Ерем һорап ниең бар,
Атым һорап ниең бар?
Күҙ асҡансы юҡ итер
Әҙәм етмәҫ көсөм бар.

Атам — дейеү батшаһы,
Бөтә ендең әшнәһе,
Бер өргәндә юҡ итер
Ереӊ, тауың барсаһын.

Егет, ебәр сәсемде,
Туҡыратма эшемде;
Атам беҙҙе юҡ итер,
Белеп ҡалһа эшемде.
Егет, һиңә аҙаҡ һүҙ,
Бүләк итәм бер йөҙөк,
Унда булыр һигеҙ күҙ:
Атың юҡта — ат булыр,
Юлың юҡта — юл булыр,
Айың юҡта — ай булыр,
Көнөң юҡта — көн булыр,
Һыуың юҡта — һыу булыр,

Яуға сыҡһаң, көс булыр,
Ҡыҙ теләһәң, ҡыҙ булыр,
Бик һағынһаң үҙемде,
Аҙағында мин булыр.

Заятүләк:

Туғыҙ айҙай күтәргән,
Имсәгенән һөт биргән,
Төн йоҡоһон өс бүлгән
Әсәмдән дә биҙәйем.

Ел еткермәҫ толпарым,
Ҡош уҙғармаҫ шоңҡарым,
Йән һаҡлаусы һәпәләк,
Уларҙан да биҙәйем.

Алпан-толпан айыулы,
Йылтын күҙле бүреле,
Бөтә йәнлек төйәге
Балҡантауҙан биҙәйем.

Һыуһылыуым, йөҙөгөң
Үҙеңә булһын күрегең;
Һыуҙың ҡыҙы, Һыуһылыу,
Һинең өсөн булайым.

Ҡулым бирәм, алмаһаң,
Үҙең минс һөймәһәң,
Һиңә инде аҙаҡ һүҙ,
Һыуға төшөп үләйем.

Шунда бер аҙ һөйләшкәндән һуң, ҡыҙ йәнә әйткән:

— Мин шундай ҡыҙмын: мине кем көрәшеп йыҡһа, мин шуға бисә булам, — тигән.

Заятүләк-яңғыҙ егет был ҡыҙ менән көрәшә башлаған. Көрәштә Заятүләк Һыуһылыуҙы бер нисә тапҡыр алып ташлап, йәнә күтәргән икән, ҡыҙ:

— Мин һинеке булдым инде, ташлама! — тигән. Былар икәүһе ирле-бисәле булырға һүҙ бирешкәс, Һыуһылыу:

— Күҙенде йом, мин һине үҙ илемә алып ҡайтам, — тигән. Заятүләк-яңғыҙ ул күҙен йомған. Күҙен йомғас, дейеүҙең ҡыҙы быны өйөнә алып ҡайтҡан. Өйөнә алып ҡайтып, үҙ һарайына индереп, шунда ғүмер итә башлағандар. Бының һуңында һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу, ҡорһаҡҡа ҡалып, бер ир бала донъяға килтергән, ти.

Шуға хәтле ҡыҙҙың атаһы — дейеү батшаһы — быларҙың ирле-бисәле булып ғүмер иткәндәрен һис тә белмәгән. Һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу Заятүләк-яңғыҙ улды, ире булһа ла, йәшереп тотҡан.

Бер көндө дейеү батшаһы килеп, ҡыҙҙың һарайына инһә, әҙәм еҫе сыҡҡанын һиҙгән.

— Бында әҙәм еҫе сыға, ниндәй әҙәм бар? — тип һораған.

Ҡыҙ:

— Ул әҙәм — минең ирем! Бынан элек үҙеңдең бер шартың бар ине: кем дә кем көрәшеп йыҡһа, ҡыҙымды шул кешегә бирәм тигәйнең. Был кеше мине көрәшеп йыҡты, шуға барҙым, — тигән.

Заятүләк-яңғыҙ ул толпары менән аҡ шоңҡарын, һәпәләк этен иҫенә төшөрөп, ҡайғыра башлаған. Бер ағастан томыра * яһап алып, томыра сиртеп, былай тип һамаҡлаған

— Балҡан, Балҡан, Балҡантау,
Балҡантауҙың өҫтөндә,
Ҡара талдың төбөндә,
Толпар атым бәйле ине,
Аҡ шоңҡары муйынында,
Һәпәләк эте янында.
Ерле ерен маҡтайҙыр,
Һыулы һыуын маҡтайҙыр,
Таулы тауын маҡтайҙыр, —
Минең тауым Балҡантау.
Алпан-толпан атлаған
Айыу һөйгән Балҡантау;
Һылыу ҡыҙҙай ирәйеп,
Төлкө һөйгән Балҡантау.

Һыуһылыу Заятүләктең ҡайғырғанын, көн һайын һарғайғанын күреп:

— Төн ятҡанда йоҡоң юҡ,
Көндөҙ һөйләр һүҙең юҡ,
Минән артыҡ ни кәрәк?
Моңаяһың, гел бойоҡ?

Сәсем урап тотҡанда,
Яңғыҙ әсәң ташланың;
Мине арбап үҙенә,
Яңғыҙ башым ҡушланың.

Берәү инем, ҡуш булдыҡ,
Икәү инек, өс булдыҡ.
Әҙәм һөймәҫ атамдан
Ризалыҡ алып хуш булдыҡ.

Әй батырым, батырым.
Әйтсе, күңелең табырмын;
Ике донъя йөҙөндә
Һинә дарыу табырмын

З а я т ү л ә к:

— Һөйөп һунар аулаған
Балҡантауым һағындым;
Талда бәйле ҡаҡланған
Күк толпарым һағындым.

Эйәр ҡашында талыҡҡан
Шоңҡар ҡошом һағындым;
Улар һаҡлап тилмергән
Һәпәләк этем һағындым.

Ай һылыуым, йән һылыу,
Өс янына дүрт булдың,
Йөрәгемде һарҡытып,
Дүрт янына биш булдың.

Башым ташҡа орһам да,
Һөйәге ҡалыр, йән булмаç;
Биште уртаҡ бүлһәм дә,
Күңелем толҡа табалмаç,
Өстө һағынып ҡайтһам да,
Улар үлһә, йәм булмаç.

Ҡыҙ Заятүләкте, бер ҙур бүлмәгә алып инеп, көҙгөнән ҡарата. Ҡараһа, үҙе бәйләп киткән урында толпарын, эйәр ҡашында шоңҡарын, улар янында һәпәләк этен күрә. Егеттең тағы ла ҡайғыһы арта.

— Атым бәйле, байғошом,
Буйы етмәй үләнгә;
Шоңҡар ҡошом талыҡҡан,
Осалмайса яланға.

Һунарлыҡта дан тотҡан
Балҡантауҙың буйында
Ышаныс һаҡсым — һәпәләк эт
Һис тә сыҡмай уйымда.

Ай һылыуым, Һыуһылыу,
Һыуҙан тапҡан бер һылыу,
Алып килсе шуларҙы,
Ҡуш булайыҡ бер юлы?

Һыуһылыу, Заятүләктең ҡайғырғанын күрә лә, атаһына кәңәш итә. Атаһы ҡыҙына Заятүләкте ҡабат ул бүлмәгә индермәçкә, уның күңелен йыуатыр өсөн, Балҡантауҙы күсереп килтергәнде күрһәтергә кәңәш бирә. Һыуһылыу Заятүләкте икенсе бүлмәгә индереп, бер көҙгөнән ҡарарға ҡуша. Шул саҡта Заятүләк бер тауҙың күсеп килгәнен күрә. Һыуһылыу Заятүләккә:

— Күҙең һалсы, Түләгем,
Хоҙай биргән йөрәгем;
Мин һораным атамдан,
Ана күсә теләгең.

Ай Түләгем, Түләгем,
Мөлхәтһенһен теләгең,
Ер күкрәген ҡуптарып,
Ҡилтерәмен теләгең.

Заятүләк:

Дауыл ҡуптарып, ел өрөп,
Тау ҡуптарған дейеүҙәр.
Тупаҡ ҡойроҡ, йылтын күҙ
Бүре төйәге Балҡантау;
Өлпә ҡойроҡ, саптар һырт
Төлкө уйнаған Балҡантау;
Шәм ҡолағын шымайтып,
Бөҫөп ятҡан ҡуянлы,
Таш тәгәрәтеп, балаһын
Ауға өйрәткән айыулы,
Тарбаҡ-тарбаҡ мөгөҙлө,
Ҡоба болан үреше —
Ҡыҙыл телен талдырып,
Һайрар ҡоштар маҡтаған,
Мине көтөп тилмергән,
Күк толпарым бәйләнгән
Балҡантауым был түгел,
Балҡантауым был түгел.

Шулай ти ҙә томыра сиртә икән. Шул ваҡытта дейеү батшаһы:

— Был кейәүҙең ни ҡайғыһы бар? Әгәр былай ҡайғырһа, һеҙгә үҙ быуынығыҙға етерлек малдар биреп, илегеҙгә ҡайтарайым, — тигән.

Ҡыҙ атаһынан бер бәләкәй йәшел һандыҡ һораған. Быларҙы атаһы оҙатҡан. Күлдән сыҡҡанда ҡыҙ Заятүләккә:

— Һин, Балҡантауға барып етмәй тороп, артыңа ҡарама! — тигән. Егет күлдең шаулауына аптырап ҡараһа, гел бер төҫлө сыҫҡан һыртлы ҡола мал ер йөҙөн ҡаплап күлдән сығып килгәнен күргән. Егет ҡараған ыңғайға, ҡайһылары күлгә кире төшөп киткән. Күберәге тороп ҡалған. Былар Балҡантауға барып еткәндә, күк толпар асығып, бәйле урынын ҡаҙып, ер ашап торған. Шул ергә әле булһа үлән үҫмәй икән.

Шунан былар Заятүләктең иленә ҡайталар. Барса халыҡ ҡаршы ала. Заятүләк Алтынбайҙың алты улына, Етебайҙың ете улына, күрешкәндә, түбәндәге һамаҡты әйтә:

Алтынбайҙың алты улы
Алты ыласын алды, ти;
Етебайҙың ете улы
Ете шоңҡар алды, ти;
Заятүләк-яңғыҙ улға
Аҡ ябалаҡ балаһын
Аҡ шоңҡар тип бирҙе, ти.

Шунан һуң һамаҡты кире әйтә:

Алтынбайҙың алты улы
Алты ыласын тип алғаны —
Алты көйгәнәк булды, ти;
Етебайҙың ете улы
Ете шоңҡар тип алғаны —
Ете ягылбай булды, ти.
Заятүләк-яңғыҙ улға
Аҡ ябалаҡ балаһы тип биргәне —
Аҡ шоңҡар булды, ти.
Ҡаҙ ҙа, туғаҙаҡ та алды, ти,
Данлы ҡошло булды, ти.
Аҡ ябалаҡ тигәнең —
Аҡ шоңҡар үҙе икән,
Заятүләк тигәнең —
Ҡирәмәттең үҙе икән.

Шунан һуң былар һыуһылыу менән йәшәйҙәр. Бөтә донъяға быларҙың ҡола малынан тоҡом тарала. Йәшел һандыҡ ғүмер буйына бөтмәй торған хазина булған, ти.





## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

*(версия)*

Әүәле бер ҡарттың Заятүләк исемле улы булған. Заятүләк төшөндә һыу аҫты батшаһы ҡыҙы Һыуһылыуҙы күрә. Ул ошо ҡыҙҙы табып алмаҡ була, атаһынан ат һорай. Атаһы уға:

— Йүгәненде шылтырат, ҡорогондо ҡылтырат. Ҡайһы ат әйләнеп ҡараһа, шуны тотоп менерһең, — ти.

Заятүләк йылҡы өйөрөнә барып, йүгәнен шылтырата, ҡороғон ҡылтырата. Уға бер баҡта ғына тай әйләнеп ҡарай. Заятүләктең тайға менеүе була — ул толпарға әйләнә. Егет шоңҡар ала. Шунан һуң Һыуһылыуҙы эҙләп Асылыкүл буйына килеп сыға. Ул һыуҙа йәшәүсе ең ҡыҙы Һыуһылыуға тап була. Һыуһылыу һыу ситендәге таш өҫтөндә оҙон сәсен тарап ултырған була. Егет йәшенеп килеп уны тотоп ала. Ул:

— Мин һине кәләш итеп алам! — ти.

— Һин — әҙәм затынан, мин — ен затынан. Өйләнешеп булмаҫ, — ти ҡыҙ.

Егет толпарын ташҡа бәйләп, шоңҡарын эйәр ҡашына ҡундырып, һаман ҡыҙ менән ныҡыша. Ҡыҙ егеткә алдап:

— Ана бер ҡарт килә! — тип ҡысҡыра.

Егет әйләнеп ҡараһа — берәү ҙә булмай. Ә шул арала ҡыҙ тиҙ генә һыуға сума. Заятүләк һыу өҫтөндә ҡыҙҙың ете аршынлы оҙон сәсенең елберләп барғанын күреп ҡала ла тиҙ генә генә сумып тотоп ала. Ул ҡыҙҙың сәсенә тотонған көйө һыу аҫты батшаһы һарайына килеп етә. Һарайға килеп инәләр. Егет сәсте һаман ебәрмәй әле. Ҡыҙ егетте мәрмәр таштан һалынған йортҡа алып инә, үҙе күрше йортҡа инә. Егет уны ебәрмәҫкә уйлай. Ҡыҙ егеткә:

— Урын йәйеп сығайым, — ти ҙә, өйгә инеп бикләнә.

Заятүләк, йортто астырыу өсөн, доға уҡый башлай. Һарайҙың ике яғында ике күл булған. Шуның береһендә алтын үрҙәктәр, көмөш аҡҡоштар йөҙөп йөрөгән. Икенсе күлендә алтын-көмөш балыҡтар уйнап йөрөгән. Егет доға ҡылғас, күл ҡорой, алтын үрҙәктәр, балыҡтар үлә башлаған. Ҡарауылсы вәзирҙәр

батшаға барып хәбәр итәләр. Батша ҡыҙына егетте кертергә ҡуша. Шулай итеп, Заятүләк менән һыуһылыу бергә донъя көтә башлайҙар.

Бер көн ҡыҙ күл ситенә сәс тарарға сыҡһа, шоңҡар менән толпар һаман да Заятүләкте көтөп тороуҙарын күрә. Улар ҡайғынан һарғайышып бөткән булалар. Ҡыҙ был турала егеткә әйтә. Егет доға уҡып ебәргәс тә, толпар менән шоңҡар һыу аҫтына килеп етәләр. Заятүләк шоңҡары менән толпары килһә лә, Балҡантауын, тыуған ерен һағына башлай. Һыуһылыу ни хәл итергә лә белмәй, аптырай. Ул атаһы ярҙамында Балҡантауға оҡшаған бер тауҙы Асылыкүл эргәһенә ендәрҙән килтертә. Тик егет бер ҙә генә хушһынмаған, ти. Ул һыу аҫты батшаһына былай тип әйткән, ти:

Алпан-толпан атлаған  
Айыуы күп Балҡантау,  
Ҡыҙ балалай биҙәнгән  
Төлкөһө күп Балҡантау.  
Тауға тауҙы оҡшатып,  
Тимер менән ҡоршатып,  
Алып килә ятырҙар —  
Балҡантауым был түгел,  
Балҡантауым был түгел.

Заятүләктең һыу аҫтында ҡалырға бер ҙә теләге булмағас, батша егеткә:

— Һин, әйҙә, илеңә ҡайт, тик, Балҡантауға етмәйенсә, артыңа әйләнеп ҡарама! — тигән.

Егет Һыуһылыуҙы, толпары менән шоңҡарын алып, күлдән сыға ла Балҡантауға таба юл тота. Уның күлдән сығып бер аҙ китеүе була — артынан шул ҡәҙәрле көслө тауыш, ел күтәрелә. Заятүләк Бәлә тауына еткәс тә түҙмәйенсә артына әйләнеп ҡарай. Ҡараһа, күлдән сыҡҡан һыртлы ҡола йылҡы өйөрө менән сығып килгәнен күрә. Сыҡҡан мал сығып ҡала, сыҡмағаны кире күлгә сума.

Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа донъя көтөп торалар. (шул тауҙа Түләк яҙған таштар бар ине. Тик уны урыҫтар нигеҙ ташы итеп алып китеп бөттөләр. — инф.)

Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа үлеп ҡала. Икеһененең дә ҡәбере шул тауҙа.





## ЗАЯТҮЛӘК

*(версия)*

Борон бер Миңнеғужа тигән ҡарт булған (миңе булған башында. — инф.). Уның Заятүләк тигән берҙән-бер улы булған. Заятүләк шул шикелдем * һунарсыл булған.

Күршеләрендә бер бай булған. Шул байҙың ете улы булған.

Миңнеғужа ҡарт Заятүләкте [үҙе] һунарға өйрәткән (Вәлиҙе Атай ҡайнаға өйрәткән шикелле. — инф.).

Заятүләктең аты булған, эте, ыласын-ҡошо булған. Ҡошо эйәрҙең ҡашағаһынан төшмәгән. Заятүләк көн һайын һунарға йөрөгән. Ул ҡош, ул йәнлек алған. Алтмышар ҡуян, иллешәр төлкө [алып] килер булған. Шуға күрә байҙың ете улы [уны] күрәлмай икән.

— Бәй-бәй, беҙгә бер ҙә эре йәнлек эләкмәй: ҡарға, һайысҡандан башҡа нәмә алып килеп булмай, был Заятүләкте бер нәмә итәйек!

— Был ни хикмәт? Беҙҙең дә этебеҙ, ҡошобоҙ бар. Беҙгә эләкмәй, быға эләгә. Быны башына етәйек беҙ!

Ете [ағай шулай] кәңәшләшмәксе булалар. Ә Заятүләк инде шул тиклем күп йәнлек ташый, күрше-күләнгә лә бирә. Йәнлекте тунап өлгөрмәйҙәр икән. Берәүһе:

— Ат саптырайыҡ тип, ат яратҡан * булайыҡ. Беҙҙең дә атыбыҙ бар. Уның да аты бар. Тик ул толпар бит, — тигән.

Ысынлап та, Заятүләктең аты толпар булған. Шул тиклем шәп булған ул: берәй нәмәгә диңгеҙ ҡултыҡһыҙ терәмәһәң, туҡтай алмаған. Теге байҙың ете улы Заятүләкте атырға итәләр инде.

Бай балалары Заятүләккә ат ярыштырырға саҡырһалар, Заятүләк:

— Ҡуйығыҙ, минең атым толпар, ул диңгеҙ ҡултыҡһыҙ туҡтамай. Ярһып китер ҙә барыр, — ти.

— Тимер арҡан, йәнә ҡыл арҡан, тағы йүкә арҡан һуҙайыҡ. Ат саптыра торған ергә ете ҡат арҡан һуҙайыҡ. Атың шунда килеп туҡтар.

— Үҙең ҡурҡһаң, малай мендерерһең. Атыңды малайҙан ҡыҙғанһаң, үҙең менерһең!

Шулай итеп сәмләндермәкселәр инде. Заятүләк кеше күнелле кеше булған. [Ағаларының күңелен уйлап:]

— Йә, улайһа, мин риза, — тип әйтеп һалған. Заятүләк риза булып ҡайтып китә. Ҡайтып инә лә атаһына:

— Атай, бай малайҙары ат саптырайыҡ, тиҙәр, — ти.

— Ҡуй, балам, һинең атың толпар ҙаһа, осоп китәр! Һинең башыңа етәрҙәр. Берәй хәйлә уйлағандарҙыр. Атыңды кешегә бирмә. Эйәрең ҡашында* ҡошоң булһын, сыйыры менән этеңде алып йөрө, — ти атаһы.

Ете ҡат арҡан тарталар. Сабыш башлана. Миңнеғужа ҡарттың улы Заятүләк сабып килә икән. Толпарын ете ҡат арҡан да тота алмай икән. Атының ҡойроғо ялман шикелле генә булып, үтеп китеп ултыра, ти.

— Уй, балабыҙ китте! Һәләк кенә булды! — тип тороп ҡалдылар, ти, ҡарттар.

Заятүләктең аты осоп сыҡҡан да киткән шул. Ҡарап, ҡул һелтәп кенә тороп ҡалдылар, ти. Юлда бер ер өй ҡырында үгеҙ тора икән. Заятүләк шунда:

Атым китте талығып,
Ҡошом китте асығып,
Үҙем киттем асығып.
Этем китте талығып,
Ҡылыс мөгөҙ ағай,
[Тороп ҡына баҫһана
Минең юлға] арҡыры,
Һуғылһана атыма!

Юлға арҡыры төшөп, үгеҙ һуғылһа ла, аты уға ла туҡтамай ары китте, ти. Заятүләктең теҙген тартыуын бар тип тә белмәй, китеп ултыра, ти.

Бер кеше йылҡы көтөп йөрөй, ти.

Атым китте ҡарышып,
Этем китте талығып.
Үҙем киттем асығып,

Ҡошом китте асығып.
Атың менән арҡыры,
Ағай, тороп һуғылһана,
Ағай, тороп һуғылһана,
Беҙҙе туҡырат! —

ти икән. Теге кеше яҙа-йоҙа ғына һуғылып ҡалды, ти — толпар туҡтаманы, үтеп китте, ти.

Толпар ат көн-төн китеп ултыра икән, китеп ултыра икән. Былар бик асыҡҡандар ҙа инде. Бара торғас, бер күл әргәһенә

еткәндәр. Шунда бер тирәк утыра, ти. Шул тиклем ҙур тирәк икән. Күлдә балыҡтар, ҡоштар тулып йөрөй икән. Заятүләк шул саҡ:

— Уй, толпар, мине тыуған илдән айырҙың, Әлшәй менән Һатайҙан * айырҙың бит! — тип атының танауҙарын һөртөп, арҡаһынан һыпырған, ти. Ҡошон төшөрөп, этен ысҡындырып, йыуындырған. Шунан бысағы менән ҡыуал йүнәтеп алып:

— Һеҙ тороп тороғоҙ, мин балыҡ ҡармаҡлап киләйем, — тип китеп барған. Һыу буйлап үрләтеп китеп утырһа, бер тирәк башында ҡыҙ күреп ҡалған. Ҡыҙҙың сәсе алтын да көмөш икән, тирәктең ботағы һайын тармаҡлап-тармаҡлап яҙып утыра, ти. Баяғы * Һыуһылыу икән. Шул тиклем матур, һылыу, ти. Заятүләк ипләп кенә барып сәсенән тотоп алды, ти.

— Заятүләк, уйыныңмы, ысыныңмы? Ебәр сәсемде!

— Уй, Һыуһылыу, ебәрмәйем!

— Улайһа, тирәк башынан төшәйем!

Һыуһылыу, сәстәрен дүрткә-бишкә айырып ҡына, тирәк башынан төшкән. Сәстәрен матур ғына итеп тарап алғас:

— Һин, Заятүләк, миңә иптәш булырһың, мин һине илемә алып ҡайтайым, — тигән.

— Ҡуй, тегендә тирәк төбөндә минең атым, этем, ҡошом ҡалды.

— Уларға бер нәрҫә лә булмаҫ, әйҙә мин дейү батша ҡыҙымын.

— Ҡалай итеп алып ҡайтаһың?

— Елкәмә йәбеш, күҙеңде йом, тик сәсемә теймә.

Сәсен айырып һалып, Заятүләкте елкәһенә йәбештереп, баяғы күлгә алып сығып китте, ти. Заятүләк сәсенә теймәй инде. Һыуһылыу:

— Минең атайым һыу батшаһы, әсәйем бар, әйҙә алып инәм.

Һыу аҫтына алып төшкән. Тимер менән ботлатҡан, көмөш менән көпләткән алтын өй, ти. Шунда алып ингән.

— Әсәй, мин Заятүләкте алып килдем.

— Ҡайҙан таптың?

— Һунарҙа йөрөй ине.

— Улай булғас, бик яҡшы булды.

Ул арала булмай дейү * батшаһы сығып иҫәпләште, ти.

— Ҡалай һәйбәт кеше был, ҡайҙан таптың?

— Тирәк башында сәсемде яҙып ултыра инем, үҙе килеп сыҡты бына. Йорттарҙы, илдәрҙе күрһәтәйем тип, алып килдем, Миңнеғужа ҡарттың яңғыҙ ғына улы. Аты диңгеҙ ҡултыҡһыҙ тормаған. Батша:

— Бик яҡшы, бик яҡшы, — тип ризалашҡан. Ә инде ағалары, еңгәләре:

— Фу, фу, әҙәм еҫе сыға! — тип ҡаршылай икән. Һыуһылыу:

— Улай итмәгеҙ инде, әҙәм көлкөһөнә ҡалдыраһығыҙ бит, — тип инәлә икән.

— Беҙ һинең эпкилгәнеңде белмәнек тә.

— Ул Миңнеғужа ҡарттың яңғыҙ ғына бер улы Заятүләк тоһә. Хатта, хатта кирамат * кеше.

Батша бар яҡындарын йыйған да:

— Бына беҙҙең һыуһылыу тормошҡа сыға, — тигән. Заятүләккә:

— Атың өсөн ҡайғырма, этең, ҡошоң өсөн ҡайғырма, ризыҡ ебәреп торорбоҙ, — тигән.

Заятүләкте ныҡ ҡарайҙар икән, йылҡылар һауып, ҡымыҙҙар яһатып. Көн дә байрам, көн дә туй тигәндәй, бик ныҡ тәрбиәләп, яҡшы ҡарайҙар, ти. Шулай булһа ла, Заятүләк бик ҡайғыра икән, ерен-һыуын, атын, этен, ҡошон бик һағына икән. Һыуһылыу:

— Атынды, этенде, ҡошоңдо уйлама, мин уларға һәр ваҡыт сәләмәтлек ебәреп торормон.

— Юҡ, түҙерлек түгел! Йөрәгем әрней, Һыуһылыу! Атам-әсәмде, илемде һағындым! — тигән Заятүләк.

— Улай булһа, мин һине өҫкә сығарып ташлармын, бына һиңә бер балдаҡ, мин кәрәк саҡта ауыҙыңа ҡабырһың. Һыуһылыу менән Заятүләк деү батшаһынан ризалыҡ алалар. Заятүләк Һыуһылыуҙың елкәһенә йәбешеп ала ла аты ҡалған тирәк төбөнә килә. Аты тирәк ботаҡтарын, ҡошо эйәр ҡашағаларын, эте тирәк төбөн кимереп бөткән, ти. Заятүләк барыһын да ашатып, алтын балдаҡты алып, хушлашып, айырылышып киткәндәр.

Заятүләк толпарын меңеп ҡайтып килә икән, бер көтөүсе йөрөй, ти.

— Әссәләмәғәләйкум!

— Вәғәләйкүмәссәләм! Һин ҡайһы йәйләүҙән? Миңнеғужа ҡартты беләһеңме?

— Беләм, яңғыҙ улы китеп юғалғас, Миңнеғужа ҡарт та, әбейе лә күҙҙән яҙҙылар. Икеһе лә мөйөштә утыра.

— Бай малайҙары нишләй?

— Улар шәп, Заятүләк киткәс иркенләп алдылар. Заятүләк ҡошто ҡуймай, һыуҙағы балыҡты ҡуймай, тип күрәлмай торғайнылар.

— Ярай улайһа, — тип Заятүләк артабан китте, ти.

Бара торғас үҙҙәренә ҡайтып керҙе, ти. Ҡарттар күрмәй бит инде. Шул ваҡыт толпар кешнәп ебәрҙе, ти. Үҙенең киткән ерен белә бит инде. Бабай:

— Заятүләк атының кешнәүе ләһә, әбей, — тип әйтеүе булған, Заятүләк тып итеп тирмәгә килеп тә ингән.

— Әссәләмәғәләйкүм! Олатай, өләсәй, нисек кенә йәшәп ятаһығыҙ?

— Бына улыбыҙ киткәс, илаша торғас, икебеҙ ҙә күҙҙән яҙҙыҡ, — тиҙәр икән, әле Заятүләктең тауышын да таный алмайҙар икән.

— Миңнеғужа олатай, һин тор ҙа, башымды һыйпап, мине сисендер, — ти икән Заятүләк. Миңнеғужа ҡарт килеп, башын һыйпаһа — Заятүләктең башындағы миңен тотоп алған.

— Заятүләк, һинме был?

— Эйе мин, киңәт йөрәгегеҙҙән тотар тип уйлап, шулай әкрен генә үҙемде белдерҙем, — ти икән Заятүләк. Бар күргәндәрен ата-

әсәһенә түкмәй-сәсмәй һөйләп биргән, үҙенең Һыуһылыуҙы яратыуын әйткән. Ата-әсәһе Һыуһылыуҙы килендәре итергә рөхсәт-ризалыҡ биргәндәр, Заятүләк бар йәйләүҙе йыйып, балдағын ауыҙына ҡапҡан икән — Һыуһылыу көймә-арбалар менән килеп тә төшкән. Шунда ҙур туй яһап, матур донъя көтөп яталар, ти.





## АҠҺАҠ ҠОЛА

Булған, ти, бер бейә. Бик затлы нәҫелдән булған, ти, ул. Шүлгәнкүлдән сыҡҡан йылҡы нәҫеленән. Был бейә, ҡолонлар ваҡыты етте иһә, юғала икән. Бер саҡ хужаһы мыны ҡарап тороп тотмаҡ булған. Артынан барһа — был бейә Шүлгәнкүл төбөнә төшөп киткән дә барған. Ул шулай һәр саҡ ҡолонлау өсөн аталары йортона ҡайта икән. Шунан хужа ҡарап тора быны. [Ҡарап] торһа — бер саҡ ни күҙе белән күрһен — бейә ҡолонон эйәртеп һыуҙан сығып килә, ти.

Сысҡан һыртлы ҡола бейә,
Шүлгән затлы ҡола бейә,
Йоморо тояҡ ҡола бейә,
Тырнаҡ ҡолаҡ ҡола бейә,
Шүлгәнкүлдән сығып килә,
Күл төбөнән сығып килә,
Сысҡан һыртлы ҡолон, бейә,
Шүлгән затлы ҡолон, бейә,
Йоморо тояҡ, тырнаҡ ҡолаҡ,
Матур һынлы ҡолон, бейә.

Хужаһы быларҙың ҡаршыһына килеп сығыуы була — бейә белән ҡолоно ҡурҡышып, икеһе ике яҡҡа ҡасалар. Сысҡан һыртлы ҡола бейә кире Шүлгәнкүлгә инеп юғала. Ҡолоно ла уның артынан төшәйем тиһә, ҡапыл боролғанда, ике аяғын имгәтеп ҡуя. Шунан быны килеп тоталар ҙа, алып ҡайтып, ябып ҡуялар.

Аҡһап ҡалды ул меҫкен,
Һыҡтап ҡалды ул меҫкен,
Баҙҙа ятты бер йөҙ көн
Аҡһаҡ ҡола бер меҫкен.

Аҡһаҡ ҡола үҫеп буйға етә. Быны өйөргә ебәрмәйҙәр, кеше

араһына ла индермәйҙәр. Йорттағы төрлө ауыр эштәр өсөн тоталар. Был хәлгә Аҡһаҡ ҡола бик зарлана:

Яҙ ҙа мине менәләр,
Ҡөҙ ҙә мине менәләр.
Аҡһаҡ ҡола — мин меҫкен.
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйҙәр,
Ҡабырғамды һанайҙар *.
Аҡһаҡ ҡола — мин меҫкен.
Яҙ ҙа билем бөгөлгән,
Ҡөҙ ҙә билем өҙөлгән.
Аҡһаҡ ҡола — мин меҫкен.
Ҡаҡ ҡаҙыҡтың ҡото юҡ,
Ҡабырғамдың ите юҡ,
Аҡһаҡ ҡола — мин меҫкен.

Шулай зарланып йөрөй-йөрөй ҙә был, бер саҡ, хужаның йортонда туй барғанда, өйөргә килеп, үҙ иптәштәрен эйәртеп, тау-таш араһына ҡасып китә лә бара.

Геүләп елдәр иҫкәндә,
Шаулап ямғыр яуғанда,
Килендәр һыуға барғанда,
Ҡәйнәләр фал һалғанда *,
Бейҙәр бәйге сапҡанда,
Егеттәр уҡ атҡанда,
Атып шоңҡар алғанда,
Түрәләр туй иткәндә,
Килендәр һыуға киткәндә,
Ҡыҙҙар нағыш сиккәндә,
Бикәләр биҙәнеп торғанда,
Бисәләр йыбанып йөргәндә,
Ҡөңдәр * ҡымыҙ бешкәндә,
Хандар ҡымыҙ эскәндә,
Геүләп туйҙар иткәндә,
Туғай тулы йылҡының
Айырылып киткән алтыһы,
Алтыһы түгел яртыһы, ти.

Өйөргә килеп, барлаһалар, ҡайһы атҡа ҡараһа, шуныһы юҡ, ти.

Алтмыш теүәл * бер китте, ти,
Етмеш теүәл бер китте.
Алтмыш теүәл араһында
Атлығып торған алты ат юҡ:
Айыл етмәҫ ала ат юҡ.
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ,
Һандуғас ботло ҡара ат юҡ,

Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ,
Күгәрсен түш күк ат юҡ,
Сыбай ҡашҡа саптар юҡ, ти.
Етмеш теүәл араһында
Елкенеп торған ете ат юҡ:
Ялбыр яллы ерән юҡ,
Бөйөрө ескә бүртә юҡ,
Йүгән һалмаҫ юрға юҡ,
Дүрт тояҡлы дүнән юҡ,
Тырнаҡ ҡолаҡ ҡонан юҡ,
Биле йыуан бейә юҡ,
Алтмыш бөтөн эсендә:
Билге һалған биш ат юҡ,
Етмеш бөтөн эсендә —
Инле * ҡолаҡ ун ат юҡ,
Ялы ергә һөйрәлгән,
Ике аяғы имгәнгән
Аҡһаҡ ҡола — бер меҫкен —
Ул да булһа өйҙә юҡ.

Хужаһы малдарҙың артынан төшә. Үҙе белән бер сапҡын эйәргә.

Ерәнсәй ерән менгән ул,
Елбәгәй елән кейгән ул,
Елә лә сабып килә ул,
Эҙләп бара йылҡыны,
Янында бар бер ҡоло,
Ҡара яға Ҡарағол.
Ҡара юрға менгән ул,
Ҡыптыр тунын кейгән ул.

Эй баралар былар, эй баралар, бара торғас, бер йортҡа тап булалар. Һыу һорамаҡ булып туҡтайҙар былар. Йорттан бер һылыу ҡыҙ килеп сыға ла әйтә:

— Әй, бай улы, бай улы, ти,
Төшөп киткел, бай улы!
Ниндәй, ниндәй ҡайғың бар,
Әйтеп киткел, бай улы!
Ниндәй, ниндәй малдар юҡ,
Әйтеп киткел, бай улы!

Егет төшмәй икеләнеп тора. Шунан был ҡыҙ уға тағы әйтә:

— Әй, бай улы, бай улы,
Төшөп киткел, бай улы!
Төшһәң, ҡымыҙ эсерһең,
Көңнәр һаумал * һөҙөрҙәр,

Көңнәр ҡымыҙ бешерҙәр,
Эсеп киткел, бай улы!
Төшөп киткел, бай улы!
Көңнәр тирмә ҡорорҙар,
Көңнәр урын йәйерҙәр,
Көңнәр түшәк түшәрҙәр,
Ҡуныл киткел, бай улы!
Аҡ тирмәнең эсендә,
Аҡ сымылдыҡ ҡорорҙар,
Аҡ сымылдыҡ эсендә,
Аҡ сабаҡтай уйнарбыҙ,
Ҡунып киткел, бай улы!

Егет мыңа ҡаршы былай тип яуап бирә:

— Көң әйткәнгә мин төшмәм,
Көң ҡойғанды мин эсмәм,
Көң ҡорғанға мин инмәм,
Көң йәйгәнгә мин ятмам.

Шунан ҡыҙ мыңа хәйерле юл теләп оҙатып ҡала. Юлын да өйрәтеп ебәрә.

— Тура китһәң — көнлөк юл,
Урай китһәң — айлыҡ юҡ.

Китә был егет, һаман китә. Шунан мының килеүе Аҡһаҡ ҡоланың төшөнә керә. Аҡһаҡ ҡола үҙенең төшөн ҡуҙаҡларына * һөйләй.

— Бөгәсә * мин төш күрҙем,
Ҡанъяғалай шеш күрҙем.
Шеш башында ут күрҙем,
Ул ни булыр, ҡуҙаҡлар?

Ҡуҙаҡлар мының төшөн аламаға юрап ҡуялар:

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡанъяғалай шеш күрһәң,
Шеш башында ут күрһәң,
Үҙ башыңа, ҡарт ҡуҙаҡ!
Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың,
Үҙ башыңа, ҡарт ҡуҙаҡ!

Ул арала булмай хужа белән иптәше былар янына килеп тә етәләр. Малдар аптырашып Аҡһаҡ ҡолаға киләләр:

— Ана килә бай улы,
Бына килә бай улы,

Янында бар бер ҡоло —
Ҡара яға Ҡарағол.
Инде ни хәл итәйек,
Ҡайһы яҡҡа китәйек?

Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың!
Аҡһаҡ ҡола — ҡарт ҡуҙаҡ,
Ҡайһы яҡҡа китәйек?

Шунан Аҡһаҡ ҡола тороп быларға әйтә:

— Ана килә бай улы,
Мына килә бай улы,
Елбәгәй елән кейгәне,
Ерәнсәй юрға менгәне,
Елә саба килгәне —
Ауыҙы-мороно сапсаҡтай *,
Менгән аты ҡылсыҡтай,
Ҡаты тартыр, ныҡ атыр,
Ҡуш ҡабырғаң үтә атыр,
Уға ҡарап уҙмағыҙ.
Ана килә бай булы,
Бына килә бай улы,
Янында бар бер ҡоло —
Ҡара Ҡарағол тигәне,
Ҡара юрға менгәне,
Ҡыптыр тунын кейгәне —
Ныҡ тартмаҫ та, ныҡ атмаҫ,
Ҡуш ҡабырғаң үтә атмаҫ,
Шуға ҡарай уҙығыҙ.

Былар шулай уҙып китергә булалар — өлгөрмәй ҡалалар: тегеләр килеп ҡыҫа башлай. Шунан тағы Аҡһаҡ ҡолаға килеп әйтәләр:

— Алдыбыҙҙан тау ҡыҫты,
Артыбыҙҙан яу ҡыҫты,
Бер яғыбыҙҙан һыу ҡыҫты,
Бер яғыбыҙҙан яр ҡыҫты,
Инде ни хәл итәйек,
Ҡайҙа уҙып китәйек?
Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың.
Ҡайһы яҡҡа үтәйек?

Аҡһаҡ ҡола тағы шулай әлеккесә, бай улына ҡарап уҙмаҫҡа, ҡара Ҡарағолға ҡарай уҙырға ҡуша. Аттар сырҡырашып сабышып уҙып китәләр. Бай улы Аҡһаҡ ҡоланың артынан төшә лә былай тип әйтә:

— Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың —
Аҙҙырғаның йыйнап ҡайт,
Туҙҙырғаның туплап ҡайт.

Аҡһаҡ ҡола мыңа ҡаршы килеп шуны әйтә:

— Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һанайһың.
Яҙ ҙа билем бөгөлгән,
Көҙ ҙә билем өҙөлгән,
Ҡаҡ ҡаҙыҡтың ҡото юҡ,
Ҡабырғамдың ите юҡ.

Бай улы ҡайтырға өндәй, был күнмәй. Шунан һуң Аҡһаҡ ҡола әйтә: «Беҙҙе йәберләмәҫ булһаң, ҡайтабыҙ» — ти. Бай улы риза була. Аҡһаҡ ҡола мыңа ышанмай: «Ер ашап ант ит», — ти. Хужаһы ер ашап ант итә.

Шунан былар бирелеп, ҡайтырға сығырға ғына торғанда, хужаһы антын боҙоп, Аҡһаҡ ҡоланың һыртына атып ебәрә. Уҡ тегенең ҡойроҡ төбөнән инеп, ҡолағынан сығып китә.

Шул саҡ Аҡһаҡ ҡола имгәнгән аяғы менән тегене тибеп осора. Хужаһы йығыла ла үлә: ни өсөн тиһәң, анты башына төшә була инде.

8 Заказ 423



# АҠҺАҠ ҠОЛА

*(вариант)*

Бер бай була. Уның һәр ваҡыт һунарға менеп йөрөгән ҡола аты була. Бының өҫтөнән эйәр, башынан йүгән төшмәй. Күп йөрөү арҡаһында ҡола аттың аяҡтары тубыр булып * бөтә.

Берҙән-бер көн йылҡы көтөүселәре айырым йөрөгән ҡыҫырыҡ өйөрҙәренең юғалып китеүен байға килеп хәбәр бирәләр. Бай йылҡыларына күҙ йөрөтөп сыға ла ниндәй малдарҙың юҡлығын һамаҡлап әйтә:

— Мундаһы бейек күк ат юҡ,
Алма сыбар дүнән * юҡ, ти.
Һәй...
Айыл етмәҫ ала ат юҡ, ти,
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ.
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ, ти.
Һандуғас ботло һоро ат юҡ.
Һәй...
Ялбыр яллы туры айғыр, ти,
Ул да булһа, бында юҡ.
Алты ҡолас ала бейәм, ти,
Саптар һәүерек * бүртә айғыр,
Һөйөп менгән мал ҡотом, ти,
Аҡһаҡ ҡолам киткән, — юҡ.
Һәй...
Өйән ҡойроҡ * кир бейәм, ти,
Тайҙар менән бергә юҡ, ти,
Аҡһаҡ ҡола бер меҫкен, ти,
Ул да булһа янда юҡ.

Бай көтөүселәрен күмәк кешеләр менән бергә йылҡыларын эҙләргә ебәрә. Былар бөтә тирә-яҡты ҡалдырмай эҙләп таба алмай ҡаңғырып йөрөгәндә, иге-сиге күренмәгән бер яланға барып сығалар. Ай эҙләйҙәр, йыл эҙләйҙәр, таба алмай ҡаңғырып ҡай-

талар. Йәнә эҙләп киткәс, диңгеҙ ситенә барып сығалар. Унда бер-ике өйөр күрәләр. Барһалар, һис нуҡта теймәгән, йөндәре, көҙгө ҡырауға аунап, ҡама һымаҡ ялтырап торған, әсе тире сығып борсолмаған, ылғы * йәш мал өйөрөн табалар. Өйөр ят булып күренә. Йылҡылар, кешеләрҙе күргәс, ырашҡыла танау тартҡан һымаҡ шырлашып, танауҙарын тартып, ҡойроҡтарын үрә сәнсеп, быларға ҡаршы шештәй булып ҡарап торҙолар ҙа ҡола яланға ҡарай олағып сығып киттеләр. Эҙләүселәр саңдарын ғына күреп ҡалалар. Бик оҙаҡ, тояҡ тауыштарының ҡолаҡҡа сағылыуы өҙөлгәнсе, тыңлап торҙолар ҙа, кәңәшеп, был берәй хандың өйөрөләр, тип ҡайтып киттеләр. Ә улар теге байҙың ҡасҡан йылҡыһынан түлләгән тай-тулаҡ, байтал, ҡонан, һәүerектәр булалар.

Байға ҡайтып һөйләгәс, бай шул йылҡы минекелер, һеҙ танымағанһығыҙҙыр тип, кешеләрен уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралландырып, эҙләй китә. Таң яҡтырып килгәндә, түшәлеп, юшап ятҡан йылҡыларҙың өҫтәренә барып сыға. Йылҡылар сырҡырашып, бер ергә тупланып килеп, быларға ажғырып ҡарап торалар. Араһынан тыу башы һымаҡ бер ҡола йылҡы айырылып, алғараҡ сығып, быларға ҡарап тора. Бай, Аҡһаҡ ҡоланы күргәс, асыуы ла килә, ҡыҙғанып күҙен дә йәшләндерә. Шунан, Аҡһаҡ ҡолаға үпкәләп:

— Аҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти,
Туҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти,
Һәй...
Башың бирмәҫ өсөн миңә, ти,
Аҙып киттең өйөр башлап,
Атым тулаҡ булды эҙләп, ти,
Көнөм тынысһыҙ булды юҡлап, ти.
Һәй...
Үҙең аҙҙырған өйөрҙө, ти,
Ҡарыуһыҙ ҡайт, үҙең башлап.

Аҡһаҡ ҡола байға яуап биреп:

— Йәшем биштә һөйөп мендең, ти,
Бағанаға ҡаҡлап ҡуйҙың, ти,
Һәй...
Аяҡтарым булды тубыр, ти,
Тағы ҡайтаммы шунда башлап? —
Эйәр төшмәй ғүмергә, ти,
Мундам шунан ырыҡ * булды, ти;
Һәй...
Буҙ таш һымаҡ түлдәремде, ти,
Ырыҡ итмәм үҙем башлап, ти.

Аҡһаҡ ҡоланан был һүҙҙәрҙе ишеткәс, асыуы ҡабарып, бай һаҙаҡ менән атып ебәрә. Шунда ла ҡыҙғанып, йөрәгенә тоҫҡап атмай, ҡойроҡ төбөнә ҡарап ата. Һаҙаҡ ҡойроҡ төбөнән алып

һыртын ярып, бер ҡолағының осон телеп барып сыға. Был хәлде күргәс, йылҡылар ҡурҡышып нишләргә белмәй, Аҡһаҡ ҡолаға ҡарап:

— Уңыбыҙҙан һыу ҡыҫты, ти,
Һулыбыҙҙан яр ҡыҫты, ти.
Һәй...
Һинең ҡаның ҡойолдо, ти,
Алдыбыҙҙы яу баҫты, ти.
Инде ҡайҙа барайыҡ? — ти,
Яуҙы нисек уҙайыҡ? — ти,
Һәй...
Һинһеҙ ҡайҙа барайыҡ, ти,
Нисек донъя көтәйек? —

тип зарланғас, Аҡһаҡ ҡола йылҡыларға былай тигән:

— Уң яғыбыҙҙан һыу ҡыҫһа, ти,
Һул яғыбыҙҙан яр ҡыҫһа, ти,
Һәй...
Алдығыҙҙы яу баҫһа, ти, —
Яуҙы ярып үтегеҙ, ти;
Бай һаҙаҡ тоҫҡаһа, ти, —
Эсен яра тибегеҙ, ти,
Һәй...
Ҡола ялан ташлағыҙ *, ти,
Урал баҫып китегеҙ, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, бөтә йылҡы байҙарҙы баҫып уҙған, ти. Бай атмаҫҡа ҡушҡан. Аҡһаҡ ҡолаға барып:

— Баламдай күргән ҡола атым, ти,
Ҡитһәң, ирек ҡылайым, ти,
Һәй...
Ҡайтһаң, һөйөп менәйем, ти,
Өйөргә баш ҡылайым, ти.

Аҡһаҡ ҡола, үпкәләп, байға былай тигән:

— Һыртым ярып, хур иттең, ти,
Ҡолағым ярып, ин иттең, ти,
Һәй...
Инле ҡолаҡ, ярыҡ һырт менән, ти,
Йөрөп булмаҫ — буй бирҙем, ти.

Шунан Аҡһаҡ ҡола, үҙе менән эйәртеп, йылҡыларын алып ҡайтып китә. Бөтә йәйләү сығып, Аҡһаҡ ҡоланы ҡаршы ала. Аҡһаҡ ҡола ҡайтҡас, көтөү йәмләнде, тип маҡтайҙар.

Аҡһаҡ ҡоланың һырты уңала, һырт буйына ҡара йөн үҫә. Ҡола йылҡының сыҫҡан һыртлы булыуы, йылҡыға иң һалыу шунан ҡалған, имеш, тип һөйләйҙәр.



## АҠҺАҠ ҠОЛА

(вариант)

Борон заманда бөрйән ырыуында үҙенең яҡшылығы, аҡыллы булыуы менән дан тотҡан, оҙонтороҡ, яҫы янбашлы, киң күкрәкле, таштан ҡаты йомсро тояҡлы, ҡара ҡола төҫлө өйөр айғыры булған, ти. Ҡуйы маңлай сәсе күҙҙәрен ҡаплап, ҡалын ҡара ялы һөйрәлеп, суғым ҡойроғо ергә тейеп торған, һырты буйынан-буйға ҡара һыҙатлы айғыр булған.

Оҙаҡ йылдар буйы өйөр айғыры булыуы арҡаһында уның тоҡомо ла күбәйеп, башҡа ырыуҙарға ла таралып киткән, ти. Шуға күрә лә башҡорт йылҡылары күбеһенсә сыҫҡан һыртлы ҡара-ҡола төҫкә әйләнеп бөткән, ти.

Илде дошман яуы баҫҡан саҡтарҙа, әлеге ҡола айғырҙы хужаһы эйәрләп менеп, уҡ-һаҙаҡтарын алып, биленә һөңгө тағып дошман яуына ҡаршы сыға, дошманды тар-мар итеп еңеп ҡайта торған булған. Ләкин дәһшәтле яуҙарҙың береһендә ҡола айғырҙың тубығына дошман уғы тейә, ул ҡаты яралана. Ул, ҡаты яралы булыуға ҡарамаҫтан, дошманды еңгәнгә тиклем яуҙа хужаһын өҫтә алып йөрөгән, ти.

Дошман яуын тар-мар итеп ҡайтҡас, яралы тубығы йүнәлһә лә, ул ғүмергә аҡһаҡ булып ҡала. Шуға күрә уны Аҡһаҡ ҡола тип йөрөткәндәр, ти. Күп йылдар үтсүгә Аҡһаҡ ҡола ҡартая. Ил өсөн хеҙмәте күп булды, үҙе үлгәнсе йөрөһөн әйҙә, тиҙәр ҙә ун-ун бишләгән баш бейә менән уны үҙ иркенә ҡырға тибенгә ебәрәләр, тик уларҙың һәр йыл һайын ҡайҙа йөрөгәнлектәрен белә-күрә йөрөгәндәр, ти. Улар, үҙ аллы бер нисә йыл йөрөгәндән һуң, күбәйеп киткәндәр, ти. Йәш айғырҙар үҫеп, ҡарт Аҡһаҡ ҡоланың үҙен ситләтә башлайҙар, тик Аҡһаҡ ҡола ҡайҙа барһа, бөтә йылҡылар ҙа уның артынан ҡалмаған.

Бер нисә йыл үткәндән һуң, Аҡһаҡ ҡола өйөрө менән бергә юҡ була ла ҡуя. Сабыулап йөрөп эҙләмәгән ер, һорашмаған кеше, йәүкәләмәгән * ауыл ҡалмаған, һис тә таба алмағандар.

Кеше йөрөмәç, кеше күрмәç ергә алып киткәндер инде Аҡһаҡ ҡола тип, уға асыу тотҡандар, ти, ауылда.

Атҡа ла менеп сабырға, ти,
Эҙләп тә йөрөп табырға, ти,
Аҡһаҡ та ҡолам янда юҡ.
Аҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти,
Туҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти, —

тип һамаҡлағандар, ти.

Икенсе йыл, йәйҙең матур көндәрендә, хужаның егет ҡорона тулған мөһабәт кәүҙәле улы, атына көмөш йүгән кейҙереп, көмөш күмелдерекле, көмөш ҡойошҡанлы эйәр менән атын эйәрләп, уҡ-һаҙаҡтарын алып, Аҡһаҡ ҡола өйөрөн эҙләргә тип, икенсе ырыуҙар яғына сығып киткән. Ул, күп ерҙәрҙе гиҙеп, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә йөрөп, йылҡыларының төçтәрен әйтеп һорашҡан, ләкин йылҡыларҙы белгән-күргән кеше булмаған.

Йөрөй торғас, был егет бер йылға буйында аҡ тирмәләр ҡороп, теҙелеп ултырған йәйләү янына барып сыға; селтәр-ҡашмау кейгән бер һылыу ҡыҙҙың сылтырап аҡҡан йылғанан һыу алып торғанын күреп ҡала ла уның янына барып туҡтай, иçәнләшә. Нәҙекәй билле, зифа буйлы һылыу ҡыҙ егеткә бер һирпелеп ҡарай. Ҡыҙҙың тулы йөҙөн күреп, уның һылыулығына таң ҡалып, һоҡланып ҡараған, ти, егет. Ошо саҡ ҡыҙға ҡарата егеттә мөхәббәт тойғолары уянған. Ҡыҙ ҙа, егеттең мөһабәт кәүҙәле, ғорур һынлы булыуын күреп, һоҡланған, уға бөтөп ғашиҡ булған. Ошо саҡ егет, һылыу ҡыҙға һүҙ башлап, үҙенең бөрйән ырыуынан булыуын, бында юғалған йылҡыларын эҙләп йөрөүен әйткән. Ҡыҙ егеткә һамаҡлап яуап ҡайтарған:

— Ай бай улы, бай улы,
Яҡаларың ҡайыулы,
Төшһәң, атың бәйләүле,
Эсһәң, ҡымыҙ бешеүле,
Ятһаң, түшәк йәйеүле, —
Аҡ сатырҙың эсендә
Аҡ сәпсектәй уйнарбыҙ.
Уйпат-уйпат ерҙәрҙә,
Тибен тибер ҡолонсаҡ,
Сәсмәүҙәрен сылтыратып
Бейә һауыр киленсәк, —

тип, үҙенең егет йортона килен булып төшөргә риза булыуын әйткән, ти.

Егет, ҡыҙҙың мөхәббәт һүҙҙәренә яуап итеп, ошоларҙы һамаҡлаған:

— Ай һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Атымдан мин төшөрмөн,
Һөҙһәң, ҡымыҙ эсермен;
Аҡ сатырҙың эсендә
Аҡ сәпсектәй уйнарбыҙ.

Уйпат-уйпат ерҙәрҙә
Тибен тибер ҡолонсаҡ,
Сәсмәүҙәрен сылтыратып,
Бейә һауыр киленсәк...
Юғалттым мин йылҡымды —
Билдәленән бишәү юҡ:
Тубығы тимгел туры юҡ,
Сыңғыҙ ерән бейә юҡ,
Сысҡан һыртлы ҡола юҡ,
Сыбар-ала тайы юҡ,
Ялы ергә һөйрәлгән
Аҡһаҡ ҡола айғыр юҡ.
Ары ла саптым, тапманым,
Бире лә саптым, тапманым;
Урал тауын гиҙәмен,
Тапмайынса ҡайтмамын.

Ошоноң һуңында ҡыҙ егеткә:

— Ай бай улы, бай улы,
Яҡаларың ҡайыулы,
Йылҡыңды мин күргәйнем,
Билдәленән бишәү бар:
Тубығы тимгел туры бар,
Сыңғыҙ * ерән бейә бар,
Сысҡан һыртлы ҡола бар,
Сыбар-ала тайы бар,
Ялы ергә һөйрәлгән
Аҡһаҡ ҡола айғыр бар, —

тип яуап биргән.

Ҡыҙ, йылҡыларҙың ҡайһы ерҙә һыуатлап * йөрөгәндәрен әйтә:

— Еләк йыйып йөрөгәнемдә
Йылҡыңды мин күргәйнем,
Урал тауы буйында,
Тәрән үҙән ҡуйынында,
Ошо йылға башында;
Аҡһаҡ ҡола ла шунда.

— Күңөгеңдән һыу эсерһәңсе, — тигән егет, һылыу ҡыҙға.

— Төш атыңдан, һыу бирәм, — тигән ҡыҙ егеткә.

Егет, атынан төшөп, ҡыҙҙың ҡулынан бер сүмес һыуҙы бөткәнсе эскән. Сүместе кире биреүе була, шул саҡ егет, зифа буйлы һылыу ҡыҙҙы ҡосағына алып, алһыу алма кеүек битенән һурып үпкән дә, һинс үҙемә кәләшлеккә алам, ҡайтҡас та яусы сбәрәм, тигән.

Улар шулай байтаҡ ҡына торғандан һуң, егете алмаҡ, ҡыҙы бармаҡ булып вәғәҙәләшкәндәр. Ошоноң һуңында егет, атына ме-

неп, йылҡыларын эҙләп киткән, ә ҡыҙ һәр көн түҙемһеҙлек менән яусы килеүен көткән, ти.

Егет, ҡыҙ өйрәткәнсә барып, йылҡыларын эҙләп таба. Улар күмәгәйгәндәр, кеше күрмәй кейекләнеп киткәндәр, ти. Егет, күпме генә маташһа ла, йылҡыларын әйҙәп алып ҡайта алмаған. Аҡһаҡ ҡола йылҡыларҙы әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа алып ҡасҡан. Егет Аҡһаҡ ҡолаға ныҡ асыуланған, яңынан күмәкләп килеп иң элек Аҡһаҡ ҡоланы, унан һуң буй бирмәгән башҡаларын да уҡтан атып йығырға тип, ҡәһәтләнеп, иленә кире ҡайтып киткән, ти.

Бер нисә көндән һуң күмәк егеттәр, уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланып, Аҡһаҡ ҡола өйөрөн әйҙәп алып ҡайтырға тип, тағы ла юлға сыҡҡандар, ти.

Күп тә үтмәй, уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған һыбайлы егеттәр тәрән үҙән башында себенләп торған йылҡыларҙы ҡамап алалар, ти. Асыуланған хужа егет Аҡһаҡ ҡолаға тоҫҡап, уҡтан атып ебәргән, уҡ Аҡһаҡ ҡоланың йоморо билен ярып үткән, ти. Ошо саҡ Аҡһаҡ ҡола үрәпһегән дә һөрән һалып кешнәп, йылҡыларға ғауға һалған, ә йылҡылар сыр-сыу килеп кешнәшкәндәр, ти. Аҡһаҡ ҡола телгә килеп:

Һыртымды ярып хур иттең,  
Ҡолағым ярып ин иттең,  
Инле лә ҡолаҡ, ярыҡ һырт, —  
Йөрөп тә булмаҫ, мин ҡайттым, —

тигән.

Егеттәр атҡан уҡтар Аҡһаҡ ҡоланың күкрәгенән үтеп сыҡҡан. Аҡһаҡ ҡола хәлдән тайып ергә ауған. Егеттәр Аҡһаҡ ҡоланың үңәсенә бысаҡ һалғандар, ут яҡҡандар, Аҡһаҡ ҡоланың итен шешкә теҙеп утта өтөп ашағандан һуң, ҡалған йылҡыларҙы ҡыуып алып ҡайтҡандар, ти.

Илгә ҡайтып килгәс тә егет ятаҡҡан һылыу ҡыҙына яусы ебәргән. Мәһәр өсөн бер өйөр ҡара-ҡола йылҡы биреп, ҡыҙҙы егеткә кәләш итеп әйттергәндәр. Шулай итеп, ике ырыу башҡорттары ҡоҙа булышҡандар, туй үткәргәндәр, туғанлашҡандар. Шул ваҡыттан бирле был ырыуҙа ла сыҫҡан һыртлы ҡара-ҡола йылҡылар тоҡомо үрсеп киткән, ти.

Егет менән ҡыҙҙың мөхәббәт тойғоһо менән әйтелгән һүҙҙәре, сығарған көйҙәре, шул ваҡыттан бирле йырсыларҙан йырсыларға, ҡурайсыларҙан ҡурайсыларға күсә килеп, «Аҡһаҡ ҡола» исемле көй булып киткән.



## БИШКОЛОН

(«Аҡһаҡ ҡола» версияһы)

Элек Урал буйында бик татыу ике ырыу йәшәгән. Һунарсылыҡ, мал аҫырау менән көн иткәндәр. Шулай ҙа, малдары күп, тормоштары мул булыуға ҡарамаҫтан, ырыу башлыҡтарының ҡайғылары бик ҙур булған: балалары йәше тулыр-тулмаҫ үлеп торған. Төрлө им-томдар ҙа файҙа бирмәгән.

Бер көн быларҙың йәйләүенә, дарыу үләндәре йыйып, китаптар уҡып, ҡобайырҙар әйтеп йөрөүсе юлаусы ҡарт килеп ҡунаҡ булған. Хужаларҙың зарын тыңлап, балаларҙы үлемдән алып ҡалыу сараларын өйрәткән, төрлө кәңәштәр биргән. Шифалы үләндәр киптереп, дарыу була торған тамырҙар ҡаҙып биргән. Шуларҙы балаларға ҡайнатып эсереү, ашына ыуып һибеү, ҡойонған һыуҙарына ҡушыу юлдарын өйрәткән. Китер алдынан: «Әгәр берегеҙҙең ҡатыны ир уғлан тапһа, уға Йәноҙаҡ тип исем ҡушығыҙ!» — тигән. Шунан һуң өйөрҙәге иң яҡшы нәҫел бейәләренән тыуған биш ҡолондо айырып алып, улы исеменә атарға, уларҙы теләктәш итеп бергә үҫтерергә ҡушҡан. «Әгәр икенсегеҙҙең ҡатыны донъяға ҡыҙ бала килтерһә, уға Үлмәҫбикә исеме ҡушығыҙ! Балаларҙан бер-береһенең ҡолағын тешләтеп, йәрәшеп, ҡоҙалашып ҡуйығыҙ!» — тигән.

Шунан юлаусы ҡарт йәйәүләп үҙ юлына китеп барған. Уға ат, тун бирһәләр ҙә, алмаған, әҙерәк юл аҙығы ғына алған, ти.

Көҙ, ҡыш көндәре үтеп, яҙ еткәс, ығы-зығы килеп, ыҙманан йәйләүгә күсәләр. Урал йәйләүенә күсеү ваҡытында ырыу башлыҡтарының ҡатындары береһе ир бала, икенсеһе ҡыҙ бала таба. Ҙур туй яһап, береһенә Йәноҙаҡ, икенсеһенә Үлмәҫбикә тип исем ҡушалар. Ҡарт ҡушҡанса тәрбиәләйҙәр. Өйөр йылҡы малы араһынан иң яҡшы бейәләрҙең биш ҡолонон Йәноҙаҡҡа атап ҡуялар. Ике ырыу араһына сик булып ятҡан, ҡарағайлы ҡая таштарҙы ярып аҡҡан исемһеҙ кескәй йылғаны Бишҡолон йылғаһы тип атайҙар.

Шулай итеп, йылдар үтә тора, балалар үҫәләр. Йәноҙаҡ өс йәшенән ат менә, биш йәшенән уҡ ата, мыҡты, батыр, мәргән

булып үҫә. Үлмәҫбикәнең һылыулығына, моңло тауыш менән йырлауына хайран ҡалмаған кеше булмай. Үлмәҫбикә, ҡул эштәренә оҫтарып, көйәнтә күтәрерлек булғас, бейә һауырға эшкингәс, Йәноҙаҡ бер яңғыҙы айыу, бүрегә, һеләүһенгә һунарға йөрөй башлағас, быларға айырылырға тура килә.

Йәноҙаҡтың атаһын ил сиген һаҡлау хеҙмәтенә саҡырып, ҡағыҙ килә. Ул шунда, Туҡ-Соран яҡтарына, сәфәр сығып китә. Барып урынлашҡас, ҡатын-балаһын алып, мал-тыуарын әйҙәп, ялан яҡҡа күсеп китә. Ҡоҙалары, ырыуҙаштары бик ҡайғырышып, оҙатып ҡала.

Туҡ менән Соран буйҙарында ла уларға дуҫ-иштәр, тиң-тоштар табыла. Яҡшы йәшәйҙәр. Йәноҙаҡ бәләкәйҙән бергә үҫкән ҡола айғырын бик ярата. Атаһына эйәреп, яу ҡайтарырға йөрөгәндә, ҡола айғырына атлана. Бергә яраланған саҡтары ла була, ләкин аты яраланһа ла, хужаһын һуғыш ҡырында ҡалдырмай, алып саба торған була. Йәноҙаҡтың батыр юлдашы Аҡһаҡ ҡола тирә-яҡта дан ала. Тик уның был ялан яғын ерһенмәй, өйөрөн эйәртеп, ҡасып киткән саҡтары ла була. Әммә уны һиҙеп ҡалып, кире ҡайыралар.

Шулай бер көндө, Аҡһаҡ ҡола өйөрө менән тағы юғала. Ямғырлы көн булғанға, күпме эҙләһәләр ҙә, эҙҙәрен дә тапмайҙар.

Ә Уралда, Бишҡолон йылғаһы яғында, тормош ғәҙәттәгесә, үҙ яйы менән аға бирә. Үлмәҫбикә тиңһеҙ һылыу ҡыҙ булып буйға етә, йырсы ла, бейеүсе лә булып таныла. Урман төпкөлөндә йәшәһә лә, даны тарала, уны һорап тирә-яҡтан яусылар килә. Атаһы: «Ҡыҙым йәрәшелгән. Ул — кеше килене, бирә алмайым», — тип, яусыларҙы кире ҡайтара тора.

Әммә ҡоҙаларынан да, Йәноҙаҡтан да һис бер хат-хәбәр булмай. Шуға эстәре бошоп йөрөгәндә, Бишҡолон йылғаһы буйында өйөр йылҡы көтөүе пәйҙа була. Ҡараһалар, Йәноҙаҡтың малдары булып сыға. Ошо көндәрҙә генә Үлмәҫбикәнең ата-әсәһе Бөрйәнгә туйға саҡырылған була. Китергә әҙерләнгәс, атаһы Үлмәҫбикәгә: «Был малдар Йәноҙаҡ кейәүҙең малдарына оҡшай. Быларҙы эҙләп кем булһа ла килергә тейеш. Әгәр ҡарт кеше килһә, ул һинең ҡайның булыр. Ҡарттар саҡырып, хөрмәт ит; әгәр йәш егет булһа, йәштәр саҡырып ҡунаҡ ит. Ул һинең кейәүең булыр. Малын эйәләренә кешеләр бирерһең, юл азығы әҙерләрһең», — ти.

Бер саҡ Үлмәҫбикә яр башында уҡ-йәйәле, бик батыр ҡиәфәтле һылыу һыбайлы күрә. Ҡыҙ уны таный. Шунан йыр менән былай ти:

— Әй, бей улы, бей улы,
Әй, бей улы, бей улы!
Төшсә, атың бәйләүле,
Эссе, ҡымыҙ һөҙеүле,
Ят, урының йәйеүле
Аҡ тирмәнең эсендә,
Трә-рә, трә-рә, трә-рә,
Трә-рә, трә-рә, трә-рә.

Иртән һыуға барғанымда,
Йылҡынды мин күргәйнем,
Йылҡынды мин күргәйнем.
Алтмыш ҡолас ала бар,
Сыбар-ара тайы бар;
Тубығы миңле туры бар,
Сыңғыҙ ерән * бейә бар,
Сыңғыҙ ерән тайы бар;
Ҡарлуғас ботло ҡара бар,
Ялы ергә һөйрәтелгән
Аҡһаҡ ҡола айғыр бар,
Трә-рә, трә-рә, трә-рә.

Йәноҙаҡ Үлмәҫбикәгә былай ти:

— Ҡәнде генә шул ине,
Ҡәнде генә шул ине.
Билдәленән бишәү юҡ:
Алтмыш ҡолас ала юҡ,
Сыңғыҙ ерән бейә юҡ,
Тубығы миңле туры юҡ,
Ҡарлуғас ботло ҡара юҡ,
Ялыерҙән һөйрәтелгән
Аҡһаҡ ҡола айғыр юҡ.
Трә-рә, трә-рә, трә-рә.

Егет атынан ырғып төшә. Күрешәләр. Бер-береһенең һылыулығына хайран ҡалып, һүҙ өндәшә алмай торалар. Ғашиҡ булалар. Иң тәүҙә Үлмәҫбикә уянып киткәндәй була.

Үлмәҫбикә Йәноҙаҡты аҡ тирмәгә алып инә. Дуҫ ҡыҙҙары, егеттәр йыйыла. Ҡаҙан тултырып ит бешереп, ҡымыҙ эсеп, ҡурай уйнашып, йырлап-бейеп ҡунаҡ итәләр. Йәштәр бергә уйнап үҫкән иптәштәре менән осрашып, шатланышалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Шулай көндәр үтә. Егетте юлға әҙерләү хәстәрен күрәләр.

Бер көн Аҡһаҡ ҡола бейәләргә:

— Бөгөн төндә төш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем;
Был ни булыр, бейәләр,
Бейәләр, бейәләр! — ти.

Бейәләр:

— Ҡара башыңа булһын, ҡарт убыр!

Аҡһаҡ ҡола:

— Ошо һүҙем буш булһа,
Күрмәгәнде күрәйем,

Бер атламай үләйем.
Мин булмаһам, бейәләр,
Ҡолондарың ҡорт ейер,
Күҙеңә һайыҫҡан оялар,
Мин булмаһам, бейәләр,
Бейәләр, бейәләр! —

ти.

Егет ҡунаҡ булып, юлға әҙерләнеп бөткәс, мал өйөрөн әйҙәп, ялан яҡҡа ҡайтып китмәк була. Малдарҙың Уралды ташлағылары килмәй. Йәноҙаҡ өйөр башы Аҡһаҡ ҡола менән һөйләшә; Аҡһаҡ ҡола хужаһын Уралда ҡалырға өндәй, әммә егет риза булмай. Аҡһаҡ ҡола әйтә: «Мин Бишҡолондоң бирге яғында торайым, һин арғы яғында ҡамсыңды шартлатып тор. Бейәләрҙең һинең яҡҡа сыҡҡаны яланға китер, минең яҡҡа сыҡҡаны Уралда ҡалыр», — ти.

Һыбай егет аръяҡ ярҙан: «Һайт, һайт! Ҡорайт-ҡорайт!» — тип ҡамсыһын һелтәй, әммә бер генә мал да уның яғына сыҡмай. Аҡһаҡ ҡола аяғы менән ерҙе сапсып, кешнәп ебәреүгә, бөтәһе өйөрө менән уның эргәһенә туплана.

Йәноҙаҡтың быға бик асыуы килеп, Аҡһаҡ ҡолаға уҡ атмаҡ була. Аҡһаҡ ҡола уға былай ти:

— Ошо һыуҙы эсеп үҫкән
Бишҡолондоң толпары мин;
Яраланғас, яуҙан һине
Алып осҡан шоңҡарың мин.
Нисә даръя кискәнмен,
Урман, һаҙын үткәнмен,
Күпме тауҙар ашҡанмын;
Айыу менән алышып,
Бүре менән сәйнәшеп,
Имен һаҡлап малыңды,
Төйәгемде тапҡанмын!
Төйәгемдең һағышы
Йөрәгемә уралған.
Мин китмәмен Уралдан,
Һин дә китмә Уралдан!
Урал — минең төйәгем,
Шунда ҡалһын һөйәгем!

Егет башын эйеп тыңлап тора.

Өҫкө ҡоларҙай ҡаяларға ерегеп үҫкән, болоттарға башы тейгән төҙ ҡарағайҙарға, Бишҡолондоң йырлап ағышына, тыуған төйәген һағынып, яфа сигеп ҡайтҡан, уны барыбер эҙләп тапҡан өйөр малына, аҡ тирмә ишеге төбөндә бойоғоп, моңайып торған Үлмәҫбикәгә ҡарай Йәноҙаҡ. Балалыҡ дуҫы — һылыу кәләше, яуҙаш дуҫы — Аҡһаҡ ҡолаһы — бөтәһе лә Уралда ҡаласаҡ бит. Быларҙы юғалтыу уға бик ауыр тойола. Егет уйланып ҡала. Ул

үҙе лә Бишҡолөн буйҙарын бик һағына торған булған, Туҡ-Соран буйындағы ҡола ялан ерҙәрҙе яратып етмәгән.

Аҡыҡ ҡашлы көмөш эйәренең башына таянып, уйға талған Йәноҙаҡ эргәһенә күҙәтеп торған дуҫтары, тиң-тоштары йыйыла. Илдең аҡыллы ҡарттары килеп тора. Йөҙ йәшәр олатаһы:

— Күрәһеңме, Йәноҙаҡ балам, дүрт аяҡлы хайуан да, ҡанатлы ҡоштар ҙа ихтыяры менән тыуған төйәген ташлап китергә риза түгел! Бала сағында, анау әсәһенә эйәргән ҡолонсаҡтар кеүек, ата-әсәңә эйәреп киткәйнең. Уралыңды ташлағайның. Хәҙер, ир етеп, аҡылға ултырғас, уйлап ҡара. Тыуған төйәген ташламаған өсөн Аҡһаҡ ҡолаңа уҡ тоҫҡаның. Ул ғәйеплеме? Улай алабарман-яндырай булма! Уҡты уны һунарҙа йәнлеккә, яуҙа дошманға аталар. Дуҫыңа, яуҙаш юлдашыңа уҡ атмайҙар, балам! — тип киҫәтеп ҡуйған, ти. Йәнә ул: — Бына һинең Тыуған илең — күк Уралың! Ана эскән һыуың — көмөштәй Бишҡолоноң! Тирә-йүнеңә күҙ һал: һине ғүмерле итергә сәбәпсе булған еләк-емешең, шифалы дауа үләндәрең. Бына инсеңә тейеп, һиңә теләктәш булып үҫкән өйөр йылҡы малың. Алыҫтан йонсоп килеп, Уралдың күк утына ҡалайыраҡ тейешкәндәр! Ана, туң ергә баҫып һаҡта торған яугир юлдашың — Аҡһаҡ ҡолаң. Борсолоп, ҡолаҡтарын ҡайсылап, был яҡҡа ҡарап-ҡарап ала, һине күҙәтә... Ана, елгә башын эйгән умырзаялай, бойоғоп торған, һинең менән ер сигенә китергә лә әҙер булған, Уралына арнап бихисап күп йырҙар сығарып, йырлап үҫкән тиңһеҙ һылыу Үлмәҫбикәң! Бына бергә уйнап, көрәшеп үҫкән, төҙ ҡарағайҙар менән ярышып буй еткергән дуҫтарың. Улар һинең менән утҡа-һыуға инергә лә әҙер торалар. Бында ҡалырға ниәтләһәң, атайың да кире ҡаҡмаҫ. Хеҙмәтен тултырғас, үҙе лә ҡайтып килер, бәлки. Теләһә, тороп ҡалыр яланында: тирен түгеп, ҡанын ҡойоп һаҡлаған ере лә кешегә яҡын тойола. Әммә тыуған төйәгең онотолмай! «Ир — тыуған илендә, эт — туйған ерендә». Йылдар имен кеүек күренһә лә, дуҫтарыбыҙ күп булһа ла, дошмандар ҙа юҡ түгел. Юлбаҫарҙар ҙа, илбаҫарҙар ҙа етерлек донъяла. Тыуған төйәк Уралды һаҡларға бәһлеүән ирҙәр, мәргән дә батыр егеттәр кәрәк буласаҡ, көслө, яугир аттар, осҡор толпарҙар кәрәк буласаҡ. Шуларҙы онотмаһаң ине, аҫыл егет, — ти.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң, Йәноҙаҡ атынан төштө, ти. Ул тыуған төйәгендә ҡалырға була. Үлмәҫбикә менән һөйләшеп, ата-әсәһен туйға саҡырып, Туҡ-Соран яҡтарына бер дуҫын сапҡын итеп ебәрә. Үлмәҫбикә лә Бөрйәнгә, ата-әсәһенең тиҙерәк ҡайтып етеүҙәрен үтенеп, ат саптыра.



## АҪҠАҠ * ҠОЛА

(версия)

Элек заманда хәҙерге Баймаҡ районы Күсей ауылында бер бай булған, йылҡылары күп булған. Йылҡылары араһында бер өйөрҙә ҡола айғыр була. Ул бер ваҡытта ла балаларын эт-ҡошҡа бирмәгән. Төнөн йылҡылар юшаған ваҡытта, ул айғыр юшамайынса ҡолондарҙы һаҡлап сыға торған булған. Әгәр ҙә ҡолондар юшамайынса ситтә йөрөһә, ҡола айғыр уларҙы эйәге менән төрткеләп, уртаға, бейәләр араһына, керетеп ебәрә торған булған. Шуға күрә лә бай ҡола айғырға ышанып йылҡы көтөүселәренә ул айғыр булған өйөрҙө көттөрмәгән. Ҡола айғырҙы, аҡыллы, ышаныслы һәм өлөшлө мал булғанға, ҡарт булһа ла, бай, һуйып ашарға ҡыҙғанып, бер өйөр ҡыһырыҡҡа * айғыр итеп ҡушып далаға сығарып ебәрә. Шулай итеп ҡола айғыр бер нисә йылдар ҡыһыраҡтарға баш булып йәшәй. Был айғырҙың балаларының балалары үҫеп етә һәм бик аҙып, ҡырағай булып китәләр. Бер ваҡыт ҡола айғыр байҙың иҫенә килеп төшә. Уның тураһында кешеләрҙән һорашып ҡараһа ла, бер кем дә белмәй һәм күрмәй ҙә. Бай улын саҡыртып, ҡола айғыр баш булған ҡыһыраҡтарҙы табырға ҡуша. Бай улы бер нисә көндәр эҙләй, таба алмай йөрөгәндә, һыу буйында уйнап йөрөгән ҡыҙҙарға осрай. Егет:

— Ҡола айғырҙы, бер өйөр ҡыһырыҡ күрмәнегеҙме? — тип ҡыҙҙарҙан һорай. Уларҙың араһынан бер ҡыҙ егеткә ҡарап:

— Беҙгә барып ҡунаҡ булып китһәң, әйтәмен, — тигән.

Егет сәсе үксәһенә етеп торған, тал кеүек, нескә билле һомғол буйлы һылыу ҡыҙҙы күргәс тә, уға күҙе төшөп, туҡтап китәргә мәжбүр булған. Шунда ҡыҙ һамаҡтап былай тигән:

— Һай, бай улы, бай улы,  
Һай, бай улы. бай улы!  
Төшһәң, атың бәйләрмен,  
Эсһәң, ҡымыҙ һөҙөүле.

Ятһаң, урын йәйеүле
Аҡ сатырҙар эсендә...

Һамаҡтан һуң егет аҡ сатырға кереп ултыра, ҡыҙ ҡымыҙ менән хөрмәт итә. Был арала егет ҡыҙ менән мауығып китеп, ҡола айғыр тураһында онота. Шулай ҙа, ни өсөн килеүе иҫенә төшөп, ҡыһырыҡ тураһында һәм уның айғырын тасуирлап һөйләп биргәс, ҡыҙ һамаҡлап былай, ти:

— Иртәнге һыуға барғанымда
Йылҡыңды мин күргәйнем;
Алтмыш ҡолас ала бар,
Сыбар ала тайы бар,
Сыңғыҙ ерән * бейә бар,
Сыңғыҙ ерән тайы бар,
Ялы ергә һөйрәтелгән
Аҫҡаҡ ҡола айғыр бар.

Егет ҡыҙға былай тигән:

— Ҡәнде генә шул ине,
Ҡәнде генә шул ине:
Билдәләнгән бишәү юҡ,
Алтмыш ҡолас ала юҡ,
Сыңғыҙ ерән бейә юҡ,
Тубығы миңле туры юҡ,
Һандуғас ботло һары юҡ,
Ялы ергә һөйрәтелгән
Аҫҡаҡ ҡола айғыр ҙа юҡ.

Ҡыҙ ысындан да ул малдар ошонда икәнен әйткәс, ат әйәрләтеп атланып, ул малдарҙы күргәҙеүгә алып китә. Ҡыһырыҡтарға барып етһәләр, бик күп булып үрсеп, күбәйеп киткәндәрен күрәләр. Ләкин йылҡылар быларҙы күреү менән өркөп ҡасып китәләр. Тик Аҫҡаҡ ҡола айғыр ғына ҡала. Ялдары ергә һөйрәтелгән башын әйеп, малдар артынан китмәй ҡалғанынан танығандар. Ҡыҙ менән егет уларҙы ҡыуалап алып ҡайтырға тырышһалар, бөтә малдар быларға ташланалар, тапталыуҙан саҡ ҡасып ҡотолалар.

Был хәлде бай улы атаһына ҡайтып һөйләгәс, бай:

— Мин ул малдарҙың мәнфәғәтен күрә алмам, эт-ҡош файҙаланһын, барыһын да ҡырып бөтөрөгөҙ. — тип әмер бирә. Бер нисә һыбай уҡ-һаҙаҡтар, суҡмарҙар алып китәләр.

Ошо ваҡытта төнөн малдар юшап ятҡанда, ҡола айғыр төш күреп, бөтә малдарға һөйләй:

— Бөгөн төндә төш күрҙем:
Ут ҡашында шеш күрҙем,

Шеш осонда ит күрҙем,
Был ни булыр, бейәләр?

Бейәләр, тыңлағандан һуң, Аҫҡаҡ ҡола айғырға былай тиҙәр:

— Ҡара башыңа булһын, ҡарт убыр!
Үҙ башыңа булһын, ҡарт убыр!

Аҫҡаҡ ҡола айғыр былай тип яуап биргән, ти:

— Әй бейәләр, бейәләр,
Ошо һүҙем буш булһа,
Башығыҙға һайыҫҡан оялар,
Башығыҙға һайыҫҡан оялар, —

тип әйткән ваҡытта ғына, һыбайлылар килеп баҫып, уларҙы атып үлтереп, киҫеп, тураҡлап бөтәләр. Үлем сәғәте килеп еткәс, Аҫҡаҡ ҡола айғыр телгә килеп:

— Бер баламды ла эт-ҡошҡа бирмәнем, йыл һайын малын үрсеттем. Ҡартайған көнөмдә балаларымды, мине ғазаплап үлтереүенә ризалығым юҡ байға тип әйтте, тип әйтегеҙ, — ти ҙә үлә.

Аҫҡаҡ ҡоланың был һүҙҙәрен байға ҡайтып һөйләгәс, уның өлөшлө мал булыуын иҫкә алып, улы уны эҙләгәндә, ҡыҙ әйткән һамаҡҡа «Аҫҡаҡ ҡола» тип исем бирҙергән.





# АҠҺАҠ ҠОЛА

(вариант)

Борон заман бер Йомабай исемле бабай йәшәгән, ти, йыраҡ бер илдә. Теге бабайҙың ел еткермәҫ шәп ете улы ла булған, ти. Уландары, күҙ ҡарашы ялмап алмаҫлыҡ киң далала бер килеп сабып йөрөгән йылҡы көтөүҙәренә күҙ-ҡолаҡ булып, көндәр насарланған саҡта ышыҡ урынға ҡыуып кертеп, көтөп йөрөгәндәр, ти. Һанап-һанап, һан етмәҫлек күп йылҡылар араһында бабайҙың иҫ киткес бер аҡыллы бейәһе булған, ти. Теге бейә йылдың йылында ҡасып китеп ҡолонлай икән, ти. Бабай йыл да оло улынан башлап кесеһенә тиклем сиратлап ҡарауылларға ҡушһа ла, тегеләрҙең алтыһы ла ҡола бейәне тота алмай ҡалалар, ти. Шунан бабай кесе улына:

— Ағаларыңдан, балам, уңманым: аш серетеп, ат тирләтеп, кейем туҙҙырыуҙан башҡаны белмәйҙәр. Шул ҡола бейәне ҡолонлатып, инде ҡарт көнөмдә шуның ҡолонон күреп үлһәм ине. Йәнең теләгән ҡыҙҙы алып биреп, үҙеңде күҙле-башлы ла итәр инем, — тине, ти.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бабайҙың кесе улы елене еткән бейәне көнө-төнө күҙ яҙмай ҡарай башланы, ти.

Көндәрҙән бер көн таң ҡабағы асылып, таң атып ебәрһә, теге ҡола бейә уҡтай атылып бер ҡойоға керҙе лә китте, ти. Егет инде артынан кереп тотоп алайым тиһә, ҡола бейә кире сығып, бер нәмә лә булмағандай урынына барып, ашап йөрөгән була, ти. Шунан егет ҡойоға төшөп ҡараһа, үрә ырғып торған бер шәп ҡолондо күрҙе, ти. Ипләп кенә йыйылып ҡараһалар, теге ҡолон кеше телен белгән кеүек һәр ваҡыт һөйләшкән кешегә табан башын бороп ҡарап тора, ти. Тик ҡолондоң әсәһе сығып киткән ваҡытта ҡойо ситенә бәрелеп аяғы зәғифләнеберәк ҡалған, ти.

Был ҡолон ни көн үҫәһен сәғәт үҫеп, ай үҫәһен көн үҫеп, ғәйрәтле айғыр булып та киткән, ти. Теге шул тиклем шыма юрта икән, хатта өҫтөндә килгән егет башындағы гәршүктәге* ҡымыҙ түгелмәй, ти. Бының шулай шыма юртҡанын белеп ҡалған

бөтә аға-энеләре: «миңә лә, миңә», — тип алмашлап, көнө-төнө менә башлағандар, ти. Шунан Аҡһаҡ ҡола бөтә йылҡыны, хатта бер өйөр бейәне (сыбар йылҡыны) артынан эйәртеп ҡасып сыҡҡан да киткән, ти. Был көндө төн яуымлы, дауыллы булған икән, хатта иң зирәк кесе егет тә эҙләй башлаған, ти, кәләше янынан ҡунаҡтан ҡайтып.

Аҡһаҡ ҡоланы тота алмай ҡайтҡас, бабайҙың кесе улы:

Еллеп ямғыр яуғанда,
Ҡараңғы төн булғанда,
Йылҡыларҙан, биш бүлектән,
Бүленеп киткән бер бүлек.
Бүленеп киткән бер бүлектә
Айыл етмәҫ ала ат юҡ,
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ,
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ.
Турғай ботло туры ат юҡ.
Бөйөрө сыбар тай ҙа юҡ,
Аҡһаҡ ҡола — бер меҫкен
Ул да булһа бергә юҡ, —

тигән, ти. Аталары быны ишеткәс, ҙур ҡайғыға төшөп:

— Уландарым, мин ҡарт көнөмдә, әжәл түшәгем яҡынлашҡан саҡта был бәләнән ҡайһығыҙ ҡотҡарыр икән? — тип һорағас, алты оло улы:

— Атай, беҙҙән булмай ҙа булмай, — тейештеләр, ти. Шул ваҡыт кесе егет:

— Улай булһа бармаһағыҙ, бармағыҙ! Асыуым артылып сыҡты, әгәр эҙләп тапһам, бөтәһен дә уҡ менән ҡыйратам, — тип йыйынып, үҙе ҡыҙыл сәкмән кейеп, атаһы биргән ҡара атҡа менеп, ҡаты тун кейгән юлдашын эйәртеп сығып та китте, ти. Былар бөтә донъяны бөтөрөп эҙләйҙәр икән. Егерме биш — утыҙ көн дә үткән, ти. Йөрөй торғас, үҙенең кәләше йәшәгән тирмәләр ҡырына барып сыҡҡан, ти.

— Беҙҙең кейәү ҙә баһа! Йомабайҙың етенсе улы икән дәһә! — тип ҡоҙалар уратып та алған, ти, тегене. Шунан кәләше, ҡаршы сығып:

— Эй, бай улы, бай улы,
Төшөп киткел бай улы,
Ниндәй, ниндәй малдар юҡ,
Әйтеп киткел, бай улы, —

тип әйтә икән (Кейәүенең ни эҙләп йөрөгәнен алдан белеп тора икән. — инф.). Кейәүенең икеләнгәнен күргәс, кәләше тағы ла:

— Эй, бай улы, бай улы,
Төшәп тә киткел, бай улы!
Көнлек ҡымыҙ һөҙөрбөҙ,
Эсеп тә киткел, бай улы.

Аҡ сымылдыҡ ҡорорбоҙ,
Аҡ сымылдыҡ эсендә
Аҡ сабаҡтай уйнарбыҙ, —

тигәнде ишетеп, егет төшә башлаған икән, ҡыҙ быны күреп ҡалып:

— Көндәр, атын бәйләгеҙ,
Көндәр, ҡымыҙ һөҙөгөҙ,
Көндәр, урын йәйегеҙ,
Көндәр, сымылдыҡ ҡороғоҙ, —

тигән. Егет:

— Көн бәйләгәнгә мин төшмәм,
Көн һөҙгәнде мин эсмәм,
Көн йәйгәнгә мин ятмам,
Көн ҡорғанға мин кермәм,
Үҙ эшемде эш итмәй,
Әйләнеп [мин] ҡайтмам[ын], — ти икән.

Шунан кәләшенең:

— Бүленеп киткән бүлегең бит
Ҡаялы тау артында,
Ҡуйы үләнгә күмелгән.
Һинең малың шунда бит, —

тигәнен ишеткәс, атынан һикереп төшөп, уны бәйләп ҡуйып, йыйылған ҡунаҡтар араһына сумған, ти. Көн буйы, төн буйы байрам итеп, кәйеф-сафа ҡылып, иртән торғас егет кәләшенә:

— Бөгәсәлә төш күрҙем,
Бер түңәрәк күл күрҙем,
Түңәрәк күлде ҡамаған
Алты убыр мин күрҙем.
Түңәрәк күл эсендә
Бер дүрткелсә таш күрҙем,
Дүрткелсә таш төбөндә
Бер ялғыҙ кәбән күрҙем. —

тиһә, кәләше былай тип юраған:

— Күргән төшөң раҫ булһа,
Түңәрәк күл күргәнең —
Ата-инәң дәүләтелер.
Алты убыр күргәнең —
Алты ағайың булыр.

Дурткелсә таш күргәнең —
Етенсеһе һин булыр.
Ялғыҙ кәбән күргәнең —
Ҡаршындағы, ҡаршындағы
Мин бәхетһеҙ ҡыҙ булыр, —

тип насар юрап ҡуйған, ти. (Был төшкә ҡарағанда, былар ҡауыша алмайҙар бит инде. — инф.). Шунан егет асыуланып, иптәшен эйәртеп, Аҡһаҡ ҡоланы эҙләргә сыҡты ла китте, ти. Ҡәләше:

— Туры барһаң, көнлөк юл,
Урай барһаң, айлыҡ юл, —

тип ҡалған, ти.

Аҡһаҡ ҡола ни ул оҙәм шикелле, кеше телен белгән өлөшлө хайуан булған, ти. Шул уҡ көндө ул да төш күреп, күңеле һәр ваҡыт тынысһыҙланып ҡына ятҡан, ти. Иртән торғас, бөйөрө сыбарларға, бөтә йылҡыларға:

— Ай, уҙаҡлар, уҙаҡлар,
Бөгәсә лә төш күрҙем:
Ҡапъяғала шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Был ни булыр, уҙаҡлар? —

тип әйткәс, бөтә хайуандар:

— Күргән төшөң раҫ булһа,
Ҡанъяғала шеш күргәнең,
Шеш башында ит күргәнең —
Үҙеңә булһын, ҡарт убыр, —

тип ҡойроҡтарын сәнсеп уйнаҡлап сыҡҡандар ҙа киткәндәр, ти. Шунан Аҡһаҡ ҡола үҙе егет ҡаршыһына барып баҫты, ти. Егет:

— Ниңә һин үҙең генә киткән етмәгән, бөтә малдарҙы эйәртеп алып киттең, — ти икән.

Аҡһаҡ ҡола:

— Яҙ ҙа мине менделәр,
Көҙ ҙә мине менделәр,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләнеләр,
Ҡабырғамды һайланылар *, —

тип яуап биргәс, егет:

— Әгәр тотторһаң, һине ғәфү итермен,— ти икән. Аҡһаҡ ҡола:

— Ер ашап, беҙгә атмаҫҡа ант ит, — тигәс, егет ер ашап ант иткән, ти. Шунан Аҡһаҡ ҡола иптәштәрен бер ҡыҫырыҡ ҡына ҡултыҡ һыулауға алып төшкән икән, егет менән юлдашы малдар өҫтөнә уҡ яуҙыра башлағандар, ти. Ҡасып китергә рәт юҡ бит инде, шул ваҡыт йылҡылар:

— Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың.
Аҡһаҡ ҡола атабыҙ,
Инде лә ҡайҙа ҡасабыҙ? —

тигәс, Аҡһаҡ ҡола өндәшмәйерәк тора, ти. Бөйөрө сыбар тайҙар, йәш ҡолондар тилмереп, бик йәл итеп:

— Артыбыҙҙан яу ҡыҫты бит,
Алдыбыҙҙан һыу ҡыҫты бит,
Эргәбеҙҙән яр ҡыҫты бит,
Аҡһаҡ ҡола атабыҙ,
Инде ҡайҙа ҡасабыҙ? —

тигән, Аҡһаҡ ҡоланың күңеле әрнеп китеп, тегеләрҙе йәлләп:

Уң яғына бармағыҙ,
Һул яғына ҡасығыҙ, —

тигәс, йәштәр:

— Донъяның аҫты өҫкә килгән ваҡытта беҙ уңды, һулды ҡайҙан айыра алайыҡ, тип тилмереп үтенәләр икән. Шунан Аҡһаҡ ҡола тағы ла:

— Ерән юрға менгәне,
Ҡыҙыл сәкмән кейгәне,
Ныҡ тартыр ҙа, ныҡ атыр,
Ҡабырғанан үтә атыр.
Аны ла баҫып уҙмағыҙ.
Ҡара юрға менгәне,
Ҡыптыр туны кейгәне
Ныҡ тартмаҫ та, ныҡ атмаҫ
Ҡабырғанан үтә атмаҫ,
Шуны ла баҫып уҙығыҙ. —

тигән икән, малдар «ҡара юрға менгән, ҡыптыр тун кейгән» егетте баҫып уҙа башлағандар, ти. Быны күреп ҡалған егет, сыҙап тормаҫтан, үҙенең антын онотоп китеп, Аҡһаҡ ҡолаға турылап бер уҡты ебәргән, ти. Теге уҡ Аҡһаҡ ҡоланың һыртын уйып, умырып алып китте, ти. Ҡола малдағы сыҡҡан һырт шул замандан ҡалған икән ул. Аҡһаҡ ҡола әрнеп:

— Их, егет, антың башыңа етте: алғы аяғымды тибермен — күтер булыр, арт аяғымды тибермен — саң-томан ҡубыр, күҙең күрмәҫ, башың эшләмәҫ, атҡан малдарыңды ҡырҡ көн буйына өтөп ашап ятырһың. Шунан ғына был тирәнән китә алырһың, — тигән, ти.

Егет, ысынлап та, ҡырҡ көн буйына бер ҡайҙа ла китә алмай, емтек ит өтөп ашап ятҡан, ти. Ҡырҡ беренсе көн тигәндә генә ҡуҙғалып китеп, ҡайтып барһалар, егеттең кәләше тағы ла ҡаршы сыҡҡан, ти.

— Һин бөтәһен дә алдан белә инең, минең ата-әсәм нисек ята икән? — тип һорауға, ҡыҙ:

— И, бай улы, бай улы,
Ҡайтып еткел, бай улы!
Антың еткән башыңа,
Ҡайтып еткел, бай улы!
Ҡырыҡ ялды * һуйғандар,
Ҡырҡың уҡытып яталар.
Ҡайтып еткел, бай улы, —

тигән. Егет, атынан төшөп тормай. Ҡабаланып юлдарын дауам иткәндәр, ти, ҡайтыр яҡҡа табан. Кәләше:

— Ҡырҡ ҡыҫыраҡ һуйҙылар,
Ҡырҡыңды уҡытып ҡуйҙылар, —

тип артынан һамаҡлап ҡалды, ти.

Егет саң-томан туҙҙырып, тыуған ерҙәрен, нәҫел-нәсәбен, ата-инәһен һағынып ҡайтып та етте, ти. Атынан һикереп төшөп, ата-инәһен ҡосоп күрешәйем генә тигәндә, ерән юрғаһы типкән дә үлтергән, ти, тегене. Шул ерҙә анты башына бөтөнләйгә төшкән, ти.

## АҠҺАҠ ҠОЛА

(вариант)

Булған, ти, борон заманда бер бай. Уның ялғыҙ ғына улы ла булған, ти. Улы ҙурайып, ир еткәс, атаһы уға кәләш әйттергән. Ҡәләш әйттереп ҡайтып, бер аҙ ваҡыт үткәс, бай бер төш күреп уянды ла улына былай тиеп әйтте, ти:

— Балам, — ти, — нигәлер бөгөн төшөм болаҙы. Малдарҙы барып теүәлләп ҡайт, — ти.

Егет барып малдарҙы теүәлләп ҡараһа, байҙың аҫыл-аҫыл малдары юҡ, ти. Аҡһаҡ ҡолаһы юҡ, ти. Ул атаһына ҡайтып:

— Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ, ти,  
Айыл етмәҫ ала ат юҡ, ти,  
Һандуғас ботло һары ат юҡ, ти,  
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ, ти,  
Аҫма сыбар тайҙар юҡ, ти,  
Бөйөрө сыбар тайҙар юҡ, ти,  
Аҡһаҡ ҡына бер меҫкен —  
Ул да булһа бергә юҡ, ти.

— Э-эй-й, балам, әйттем бит мин һиңә! — тип әйткән, ти, бай. — Яҡшы атыңа мен дә, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланып, юлдашҡа бер малай ал да малдарҙы эҙләп ҡайт, — тигән, ти.

— Аҡһаҡ ҡоланы тотоп алып ҡайтмаған мин булһам! Әгәр ҙә мәгәр алып ҡайта алмаһам — эсем ярылып үләйем! — тине, ти, улы.

Иртәгеһенә таң менән егет юлға сыҡты, ти, ә малдарҙың эҙе уны кәләш йорто янына алып китте, ти.

Ауылға барып етһәләр, кәләше кер сайҡап тора икән. Ҡейәүен күргәс, ул былай, ти:

— Әй, бай улы, бай улы,  
Төшөп киткел, бай улы!  
Ҡөңдәр, ҡымыҙ һөҙөгөҙ,

Көндәр, урын йәйегеҙ,
Аҡ сымылдыҡ эсендә
Уйнарбыҙ ҙа, көлөрбөҙ, — ти.

Егет:

— Әй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Көң һөҙгәнде мин эсмәм,
Көң йәйгәндә мин ятмам,
Уйнамам да мин көлмәм, — ти.

Ҡыҙ:

— Әй, бай улы, бай улы,
Һаба ҡымыҙҙар һөҙәйем,
Мамыҡ түшәктәр йәйәйем,
Төшөп китсе, бай улы, —

тип әйткән, ти. Бай улы тағы ла:

— Әй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Әй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Һаба ҡымыҙ һөҙһәң дә,
Мамыҡ түшәк йәйһәң дә,
Төшмәйем дә, һылыу ҡыҙ, —

тип үтеп китә башлағас, һылыу ҡыҙ:

— Әй, бай улы, бай улы,
Әй, бай улы, бай улы,
Тура ла барһаң — төшлөк юл,
Бороуҙан барһан — айлыҡ юл,
Әй, бай улы, бай улы,
Тура ла барһаң — төшлөк юл,
Борола барһаң — айлыҡ юл.
Арғы туғай буйында
Аҡһаҡ та ғына бер меҫкен
Алып ята йылҡынды, —

тип тороп ҡалған, ти.

Егет кәләшенең әйтеүе буйынса, турыға китте, ти. Бер 30 саҡрым, 40 саҡрым самаһы ер барғас, Аҡһаҡ ҡола үҙе егеткә ҡаршы килә икән (Борон бына шундай малдар булды бит ул, балам. — инф.).

Аҡһаҡ ҡола егет янына килә лә: «Их, егет, — ти. — Һин беҙҙе алып ҡайтырға киләһең, — ти, — беҙ хәҙер толпар инде, — ти, — беҙҙе алып ҡайта алмайһың», — ти.

Йылҡылар бер утрауҙа ғына йөрөйҙәр икән, уның бер яғы диңгеҙ, бер яғы яр, ти. Ул ярҙың ике яҡ башында ике генә һуҡмаҡ бар, ти.

— Мине атмаҫҡа ант ит, — ти Аҡһаҡ ҡола егеткә, — йылҡыларыңды алып ҡайтам, — ти.

Егет һуҡмаҡтың береһендә үҙе торҙо, ти, ә икенсеһендә ҡулында ҡамсыһы ғына булған малайҙы ҡуйҙы, ти.

Егет Аҡһаҡ ҡоланың аяғына йығылып атмаҫҡа ант итте, ти, ә Аҡһаҡ ҡола йылҡылары янына сабып китте, ти.

Көн дә кисләне, барыһы ла йоҡларға яттылар, ти.

Таң алдынан Аҡһаҡ ҡола төш күреп уянып китте, ти, бейәләренә ҡарап:

— Әй, бәгерҙәр, бәгерҙәр, — ти, —
Бөгәсә мин төш күрҙем, — ти. —
Ҡанъяғала * аш күрҙем, — ти, —
Шеш башында ит күрҙем, — ти, —
Был ни булалыр, бәгерҙәр, —

ти меҫкен. Бейәләр был төштө яманға юрайҙар:

— Ҡанъяғала аш күрһәң —
Атаң-инәң булыр ул,
Шеш башында ит күрһәң —
Үҙ башыңа, аҡһаҡ эт!

Яҡтырыу менән үк Аҡһаҡ ҡола, үҙенең төшөн яманға юраған бейәләрҙе өйөрөп алып, егет янына ебәрә башланы, ти. Ә тегеһе уларҙы бысаҡҡа өлгөртөп тик торҙо, ти (Янында кешеһе бар шул ул ҡәһәрҙең. — инф.).

Гел тай-тулаҡ, һәүерәктәр генә тороп ҡалды, ти. Улары аптырашып, кешнәшеп йөрөй башланылар, ти. Унан Аҡһаҡ ҡолаға килеп былай тиҙәр:

— Эй, Аҡһаҡ та атабыҙ,
Эй, Аҡһаҡ та атабыҙ,
Инде лә ҡайҙа барайыҡ,
Бер яғыбыҙҙан яр ҡыҫты,
Бер яғыбыҙҙан яу ҡыҫты.
Бер яғыбыҙҙан һыу ҡыҫты,
Инде лә ҡайҙа барайыҡ?

Аҡһаҡ:

— Бер яғыбыҙҙан яр ҡыҫһа,
Бер яғыбыҙҙан яу ҡыҫһа,
Бер яғыбыҙҙан һыу ҡыҫһа —
Елбәгәйле ҡара сәкмәнле *,
Ҡарлуғас ботло ҡара атлы *
Шуны ла баҫып үтегеҙ, —

ти. Шунан һуң Аҡһаҡ ҡола кешнәп ебәргәйне — ел-туҙан күкте

ҡапланы, ти, ә тайҙар елбәгәйле ҡара сәкмәнле, ҡарлуғас ботло ҡара атлыны баҫып үтә башланылар, ти. Шул саҡ егет:

— Эй, Аҡһаҡ, ҡайҙа бараһың? — тип уғын атып ебәргәйне — ул Аҡһаҡ ҡоланың маңлайын һыҙырып үтеп китте, ти (сыбай * ҡашҡа мал бына шунан тороп ҡалған инде ул, балам. — инф.). Аҡһаҡ:

— Антың етте башыңа, тиҙерәк ҡайт, бай улы, — тине лә сабып сығып китте, ти.

Ә теге егеттәр баҫып үткән аттарҙы уҡтан үткәреп, итен һатып, болланып, ҡатыны янына ҡайтырға булды, ти (анты башына етә ул, ҡайтыу менәнме ни ул. — инф.).

Егет ауылға барып еткәс, кәләше:

— Эй, бай улы, бай улы,
Төшөп киткел, бай улы,
Төшөп киткел, бай улы!
Ҡөңдәр, ҡымыҙ һөҙөгөҙ,
Ҡөңдәр, урын йәйегеҙ,
Аҡ сымылдыҡ эсендә
Аҡ сабаҡтай уйнарбыҙ, —

тип ҡаршы сыға (Э-эй-й, бисара ғына, аҙаҡҡы төн бит инде. — инф.).

Ашап-эсеп, аҡ сымылдыҡ эсендә уйнап-көлөп йоҡлап китәләр былар. Таң алдынан егет ҡыҙ ҡуйынында һаташып уяна ла:

— Эй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Бөгәсе мин төш күрҙем, ти,
Ике манат күл күрҙем, ти,
Ике аҡ ҡубыр күрҙем, ти,
Яңғыҙ ҡубыр бер күрҙем, ти,
Ул ни булыр, һылыу ҡыҙ, ти.

Ҡыҙ:

— Эй, бай улы, бай улы,
Ике манат күл күрһәң —
Атаң-әсәң дәүләте;
Ике аҡ ҡубыр күрһәң —
Атаң-әсәң булыр ул, — ти. —
Яңғыҙ ҡубыр бер күрһәң —
Мин мескендең башы ул, — ти. —
Антың еткән башыңа,
40 тыу бейә һуйғандар,
Ҡырҡың уҡытып яталар,
Тиҙерәк ҡайт, бай улы! —

ти илай-илай (И-и-и, бисара, еңелме ни уға! — инф.).

Егет ҡайтып китте, ти. Ҡайтып етеүгә 40 көн үтеп тә китте, ти. Ә ауылда уның ҡәбере ҡаҙыулы, ти.

Егет өйөнә ҡайтып та етә — йығылып та китә, үлеп тә китә. Шулай итеп, анты башына етә.

# ҠАРА ЮРҒА

Борон заманда Һаҡмар буйында Күсәрбай тигән һунарсы була. Бының берҙән-бер бейәһе була. Шул бейәнән тыуған ҡолондарҙан ат үҫтереп, һунарға йөрөй. Бының бейәһе һәр ваҡыт ҡасып ҡолонлау арҡаһында, ҡолоно бик һирәк тора: йә бүре ашай, йә бүтән бер уңайһыҙлыҡҡа осрап үлә. Бүтән кешеләрҙең бер бейәнән әллә нисә йылҡыһы булып, үрсеп киткәс, Күсәрбайҙың быға бик эсе боша. Етмәһә, уның Әбләй тигән берҙән-бер улы ла үҫеп етеп: «Ат булһа, бүтән малайҙар һымаҡ, һунарға йөрөр инем», — тип йәненә тейә.

Мал ҡараға баҫҡас *, бейәнең ҡолонлар ваҡыты еткәс, Күсәрбай улын саҡырып ала ла:

— Улым, бейәнең ҡолонлар сағы етә, ҡарауылла. Әгәр иркәк булһа, үҙеңә инсе итеп бирермен. Үҙең һунарға менеп йөрөрһөң, ти.

Әбләй, мәргән дә, батыр ҙа булғас, бынан ҡурҡмай, бейәне күҙәтә. Бейәнең өйөр ситләп йөрөгәнен күрә лә атаһына:

— Атай, бейәнең елененә һөт төшкән, бөгөндән ҡалмай ҡолонлар, атынды бир, ҡарауыллайым, — тигән.

Атаһы атын биргәс, Әбләй бейәне күҙәтә сыҡҡан. Бейә ситкә китеп бер тау битенә барып, сөм-ҡара ҡолон ҡолонлаған, ти. Ҡолон тыуғас та, бүтән ҡолондар төҫлө, аяғына баҫа алмай тормаған, әсәһенең ялап, киптереп бөтөүенә, уйнап, бер алдына, бер артына сығып, сабып йөрөй башлаған. Был бейәнең ҡолонлауын күҙәтеп, аңдып килеп ятҡан бер бүре, ҡолондоң бер артына, бер алдына сығып, уйнаған булған да уның арт ботонан һәрмәй һалып алған. Быны Әбләй ҙә, бейә лә күрмәй ҡалған. Ҡолондоң сыйылдағанын ишетеп, бейә сырҡырап ебәргән. Атҡан уҡ һымаҡ, Әбләй ҙә барып еткәс, бүре ҡолондо ташлап киткән. Ҡолондоң арт ботонан ус аяһындай итеп бүре өҙөп тә өлгөргән. Ҡолон был яранан үлмәй, йүнәлгән, үҫкән. Әбләйҙең атаәсәһе быны күреп ҡыуанһа, ҡолондоң йүгерек булмауын, уның

һунар өсөн дә, яу өсөн дә ракһыҙ ат булыуын белеп, Әбләй ҡуңелһеҙләнә. Атаһы:

— Улым, ҡайғырма, ете яуҙан ҡалған ирҙе ваба алмаç, бүренән ҡалған йылҡыны ел уҙалмаç, тигән. Үçһен, быны тигән юрға ат булыр, — тип йыуатҡан.

Бер нисә йылдар үтә. Әбләй матурлығы, мәргәнлеге, һүҙҙә сәсәнлеге менән ир булып танылһа, Ҡара юрға ла тирә-яғында иң яҡшы ат булып дан алған, ти.

Йәйҙең йәмле сағында Әбләй ил аралап, ер күреп, ир танып ҡайтыу уйын атаһына әйткән, ти:

— Һаҡмар ғына һыу түгел,
Буйы ғына ер түгел;
Сағылында уйнаған
Саптар төлкө, аҡ ҡуян,
Ҡолон алыр һәр бүре, —
Улар ғына йән түгел.
Илдең кендек билдәһе,
Яйыҡ, Иҙел үҙәге —
Урал тауы буйы бар.
Ыласын сөйгән ире бар,
Айыу тотҡан ире бар,
Таҡыя баш ҡурайҙа
Моңон сәскән ире бар.
Мин барайым шул илгә,
Күҙ һалайым шул ергә,
Ирмен тигән егеткә
Ирлекме ятыу бер ерҙә, —

тип һорағас, атаһы ҡаршы килмәгән. Әбләй, Ҡара юрғаһын менеп, юлға сыҡҡан. Күп һыуҙар кискән, күп йәйләүҙәрҙә ҡунған, күп урмандар, юлдар, тауҙар үткән, Иҙел башында байлығы менән дан тотҡан Мәсем бай [143] йәйләүенә барып еткән, ти. Мәсемдең ҡунаҡ тирмәһе алдындағы сағланып бөткән ат бағанаһына барып туҡтап, йола буйынса сәләм биреп тормай, тирмәнең төнлөк бауын ҡаҡҡан. Мәсем бай өйҙә булмай, ил аралап ҡунаҡҡа киткән сағы икән. Тирмәнән һис бер ир-ат сыҡмай, тик Мәсем байҙың ҡыҙы Маҡтымһылыуҙың, иптәш ҡыҙҙарын йыйып, аулаҡ өй ҡорорға ултырған сағы була. Әбләйҙең төнлөк бауы ҡаҡҡан тауышын ишетеп, Маҡтымһылыу иптәштәре менән тирмәнән сыға ла, бағана янында ҡолаҡ ҡайсылап, бер баçа торған урынға биш баçып торған Ҡара юрға өçтөндәге Әбләйҙе күреп, ҡыҙҙар аптырап ҡала. Бал ҡорто инәһе һымаҡ, ҡыҙҙар араһында айырылып торған йылғыр ҡара күҙле, оҙон сәсле, төçө-башы уйнап торған Маҡтымһылыуҙы күреп, Әбләй ҙә һүҙһеҙ ҡалған. Маҡтымһылыу ҡыйыу, һүҙгә сәсән булғас, оҙаҡ аптырап тормаған, былай тип һүҙ башлаған, ти:

— Атың ауыҙы күбеккән, —
Татыр ялар малға оҡшай,

Сабыуың ҡыйпып тегелгән, —
Ялан яғы иргә оҡшай.
Атама төбәп килһәң,
Сәләм бирер инең һин,
Йәйләүгә төбәп килһәң,
Оран һалыр инең һин [144].
Сит йәйләүҙең кейәүе
Ҡайтып килә, тир инем, —
Ҡискә һарҡҡас, кейәүҙәр
Ҡәләш ташлап ҡайтырмы?
Ҡанъяғаң да буш һымаҡ,
Ҡүстәнәсең юҡ һымаҡ,
Ҡыҙ ташлаған кейәүҙер,
Ҡайтып килә, тир инем, —
Бынауҙай ат менгән ир,
Һайламай ҡыҙ һөйөрмө?
Төнлөк бауы ҡағыуға
Ҡыҙ күҙләйҙер, тир инем, —
Күҙ бәйләнмәй, кис булмай,
Егет тағы йөрөрмө?
Юлаусыһың, тир инем,
Күп тирмәләрҙе ташлап,
Бағанаға килерме?

Ә б л ә й:

— Төçөң-башың, иплегең —
Ата балаһы күренә;
Тиреғеп килгән атыма
Күҙ һалыуың муйыра.
Атаңа төбәп килергә,
Ҡыҙына яусы түгелмен;
Илгә төбәп килергә,
Ҡан даулаусы түгелмен;
Үткенсе-маҙар булырға,
Илдән ҡасҡан түгелмен;
Төндә ҡыҙ күҙләргә,
Иргәйел ир түгелмен.

Ҡ ы ҙ ҙ а р:

— Эй, егетем, төç-башың
Сит илдеке күренә;
Оран биргән тауышың
Төбәгәндәй беленә.
Ат һорамаҡ — дан түгел
Тура килгән ҡунаҡтан,
Ҡемгә төбәп килдең һуң,
Ат тирләтеп йыраҡтан?

Әбләй:

— Урал буйын буйланым,
Күп йәйләүҙе ҡуйманым,
Унға-һулға ашанан
Иҙелен дә күп кистем,
Күбәләктәй уйнаған
Ҡыҙҙарының ҡулынан
Һыуһынын да күп эстем.
Һайрар ҡошто туҡратып,
Таң ҡалдырып тыңлатҡан,
Күк ҡояшы ҙурлаған,
Кисен айы бәпләгән,
Йәйге еләҫ таңында
Моңон сәсеп йырлаған
Бер һылыуҙы эҙләнем.

Маҡтымһылыу:

— Аҫау өйрәтеп, ат менгән,
Болан тотоп, ит ейгән
Атын әйтмәҫ ир булмаҫ, —
Исемен хур күрмәһә;
Атаһын әйтмәҫ, ир булмаҫ,
Ташландыҡ бала булмаһа.

Әбләй:

— Байлыҡ менән дан тотҡан
Әйтеп бирер атам юҡ;
Сәсәнлектә ил тотҡан
Һөт имеҙгән әсәм юҡ.
Таҡыя башлы ҡурайҙа
Моңон сәскән илендә,
Батыр булып майҙанда,
Данын сәскән илендә,
Һаҡмар һыуы буйында
Әбләй тигән егетмен.

Маҡтымһылыу:

— Эй, егетем, беләбеҙ,
Тыуған илең йыраҡта,
Батыр, ҡурайсы даның
Телгә алына был яҡта.
Әйҙә, егет, ҡунаҡ бул,
Әсәм-атам ҡунаҡта,
Улар ҡайтҡансы, бергә
Уйнап көләйек аулаҡта.

Ҡыҙҙар:

— Егет, егет, елгәнһең,
Ат тирләтеп килгәнһең,
Әйҙә төшөп ҡунаҡ бул,
Йыраҡ илдән килгәнһең, —

тип ҡыҙҙар өйөрөлөп йырлап торғас, Әбләй уларҙың һорауын ҡабул иткән, ти. Ҡунаҡ булған, ат өҫтөндә уйын күрһәткән, уйын-көлкө менән кистәр уҙғарған, Маҡтымһылыу менән яландарға сығып йөрөгән, ти. Маҡтымһылыу Әбләйҙе яратҡанын аңлатып ҡараһа ла, Әбләй һөйөүен Маҡтымһылыуға белдермәй, сер тотоп, хәҙер яусылай башлаһа, ҡалымға малы юҡлығын уйлап аптыраған, ти.

Бер нисә көн ҡунаҡ булғас, Әбләй ҡайтырға атын эйәрләй башлағас, Маҡтымһылыу, нисек тә Әбләйҙең үҙен яратҡанын белеү өсөн, уға бүләк бирергә булып, былай тип йырлаған, ти:

Маҡтымһылыу:

— Нағышлы билбау теккәнмен,
Быуайымсы биленә;
Аҫа балаҫ һуҡҡанмын,
Түшәйемсе юлыңа.

Ҡыҙҙар:

— Шаң-шаң ҡойоп балдарҙы,
Туйығыҙҙы көтәйек.
Ҡуй майына һыҙҙырып,
Йыуасалар бешерәйек.
Килсе, егет, биленде
Вәғәҙә өсөн быуайыҡ.

Әбләй:

— Һаҡмарҙы ташлап, Иҙел кисеп,
Ҡулығыҙҙан туҫтаҡ мин эстем.
Ҡурайымды уйнап, моңло йырлап,
Көндәремде һеҙҙә кис иттем.
Ҡулығыҙҙан алып эскән ҡымыҙ —
Йөрәгемдә дуҫлыҡ — һыуһын ул.
Атаһынан йәшереп, ҡыҙын һөймәм,
Бүләгегеҙ ҡалып торһон ул, —

тип йырлаһа ла, Маҡтымһылыуға күҙе төшкән. Шулай ҙа һаулашып киткәндә үҙенең һөйөүен белдермәй киткән, ти.

Әбләй ҡайтҡанда, һәр бер төшкән урында Маҡтымһылыуҙың һылыулығын, оҫта йырлауын, сәсәнлеген ишеткән. Уның өсөн

күп байҙар өйөр-өйөр мал биреп тә Мәсемдең һорағанын ҡаплай алманылар тигән һүҙҙәрҙе һөйләгән табындарға осраған, ти. Әбләйҙең ҡалым түләп алырға, Мәсемде мал менән ризаларға хәле етмәгәс, ни эшләргә белмәй, аптырап, юл буйына уйлай-уйлай, төрлө юлдар эҙләй-эҙләй йәйләүенә ҡайтып еткән, ти.

Әбләй киткәс, оҙаҡ та тормай, Мәсем ҡунаҡтан ҡайтып төшкән. Мәсем ҡайтып арлы-бирле итеүгә, Нөгөш бай, улына Маҡтымһылыуҙы һоратып, яусы ебәргән. Яусы, Мәсем һорағанса, йылҡының һәр төҫөнән берәр өйөр бирергә риза булған. Мәсем ҡыҙын Нөгөш байҙың улына бирмәксе булған. Маҡтымһылыу, был хәбәрҙе ишеткәс, нисек итеп булһа ла Әбләйҙе тағы бер тапҡыр күрергә теләп, юл эҙләй башлаған, ти. Иң яҡын еңгәһенә кәңәш иткән, икәүләп төрлө юлдар эҙләп ҡараһалар ҙа, һис бер юл таба алмай, аҙаҡ сиктә: «Әбләйҙең Ҡара юрғаһын урлатһаҡ, егет атын эҙләп килмәй ҡалмаҫ», — тип уйҙарын туплағандар, ти. Былар юрғаны урлатырға кешеләр эҙләй торғас, күп мал биреп, Моҡаш тигән кешене яллағандар, ти. Моҡаш, күп йәйләүҙәрҙе үтеп, күп һыуҙар кисеп, Әбләй тирмәһен барып тапҡан да тирмәнең билбауында бәйле торған юрғаны урлап алып киткән, ти. Быны һиҙеп, йәйләүҙәге эттәр абалап өргәнгә, Әбләй һиҫкәнеп уянып киткән, ти. Ырғып тороп, сығып ҡараһа — ат юҡ. Ары йүгергән, бире йүгергән, — һис бер ерҙә тын-тауыш юҡ. Аптырап, тынлап торғанда, бик алыҫта Ҡара юрғаның кешнәгән тауышы ҡолағына салынған, ти, Әбләй ике иптәшен барып уятҡан да, тауыш килгән яҡҡа ҡарай барырға, көтөүгә — атҡа йүгергәндәр, ти. Әбләйҙәр көтөүгә барып, ат-маҙар тотҡансы, таң атҡан; ат эйәрләп, арлы-бирле һораштырғансы, ҡояш һөңгө буйы күтәрелеп киткән, ти.

Үҙенең ике яҡын иптәшен алып, Әбләй Ҡара юрғаны эҙләргә киткән. Юлда осраған бер ерҙә һорашҡандар, Урал итәгендә урман эсләп барғанда, бер шылтырап ағып ятҡан шишмә буйына төшөп, ат ашатып, ял итеп китмәксе булғандар, ти. Шишмәнең эргәһендәрәк аҡланда үҫкән, япрағы йәйелеп, ботаҡтары тарҡалып торған бер имән ағасы янына барып, күләгәгә ат бәйләргә уйлаһалар, имән төбөндә улаҡланып бөткән бер соҡор күргәндәр. Быны күргәс, былар туҡтап та тормағандар, аттарына менеп киткәндәр. Өс юл сатлығы осрағас, туҡтап уйлашҡандар ҙа өсөһө өс юлдан китергә, аҙаҡ килеп шул шишмә янында осрашмаҡсы булғандар, ти. Әбләй урта юл менән киткән ти. Күп ерҙәр үтеп, күп һыуҙар кисеп, күп тауҙар ашып, бара торғас, бер ауылға барып сыҡҡан, ти. Был ауылда ҙур йыйын барлығын белгән дә халыҡ йыйылған урынға барған. Йыйында йөрөй торғас, Әбләйҙең ҡолағына Маҡтымһылыуҙың яңы алған юрғаһын маҡтап, ауыҙ һыуҙары ҡороп һөйләгән һүҙҙәр ишетелгән. Әбләй шунда уҡ Ҡара юрғаның Маҡтымһылыуҙа икәнен белгән дә, йыйынды ташлап, Мәсем йәйләүенә ҡарай сапҡан. Урман эсендәге юлдан китеп барғанда, быны аты, нимәлер һиҙеп, яңғыратып кешнәп ебәргән, ти. Быға ҡаршы ниндәйҙер ат кешнәп яуап биргәс, Әбләй, атын бороп, шул яҡҡа елә-сүкә барып сыҡһа, Ҡара юрға

өҫтөндә иптәш ҡыҙҙары менән йыйынға китеп барған Маҡтымһылыуҙы күрә. Ҡыҙ, Әбләйҙе күргәс, көләмһерәп, юрғаһын уйнатып, йырлай башлаған:

— Ай, егетем, вай, егет,
Ҡайҙан килдең һин, егет,
Ҡыҙ һорарға ғәрләнһә лә,
Нишләп килгән был егет!
Һайт, Ҡара юрға, вайт, Ҡара юрға,
Башын сайҡай малҡайы,
Егетендә бәҫле үҫкәс,
Май ташламай малҡайы;
Егетендә бәҫле үҫкәс,
Май ташламай малҡайы.

Әбләй,

Маҡтымһылыуға һәм иптәш ҡыҙҙарына ла иғтибар итмәгән булып, Ҡара юрғаһына ҡарай йырлай:

— Айт, Ҡара юрғам,
Вайт, Ҡара юрғам,
Ҡырас ҡара ялдарынды
Уҡалайым, юрғам.
Айт, Ҡара юрғам,
Вайт, Ҡара юрғам.
Ниндәй шомлоҡтар менән
Аҙып киттең, юрғам.

Маҡтымһылыу юрғаһы исеменән:

— Ай, егетем, вай, егетем,
Асыуланма һин, егет,
Һаҡмар һыуҙарын һыуһынмай,
Иҙел аштым мин, егет!

Ай, егетем, менмәнең;
Ҡыҙҙар уйын белмәнең;
Һунарҙарҙан туйманың,
Ҡыҙ матурын күрмәнең!

Алма сыбар ат булмаҫ,
Ир-егете таҡ булмаҫ;
Ҡыҙ һөймәгән егет артып,
Ҡара юрға тай булмаҫ!

Иҙел һыуы тәмле икән,
Ҡыҙҙары ла йәмле икән,
Өҫтөмдәге бикәсем дә
Үҙемә генә тиң икән...

Әблəй:

— Артыу-арҡа аштым мин,
Күп пыуҙарҙы кистем мин,
Ҡайтһаң, әйҙә, Ҡара юрғам, —
Үҙ илемә киттем мин.

Ат урлаған йәр булмаç,
Баш бирмəгəн — мал булмаç;
Сəлəм хатһыҙ ат урлатҡан
Ҡыҙың миңə тиң булмаç.

Иҙел һыуы тəмле икəн,
Урал буйы йəмле икəн,
Шулай булһа ла, ҡыҙҙары
Ат күрмəгəн бур икəн!

тигəн дə, Әблəй атын бороп, елеп киткəн. Бер һыуһын ер киткəс, артына әйлəнеп ҡараһа, ҡыҙҙарҙың баçымлатып килгəнен күрə лə йүгереген бөтə барышына ебəреп сапҡан, ти. Тағы ла бер аҙ барғас, әйлəнеп ҡараһа, тик Ҡара юрға менəн Маҡтымһылыуҙы ғына күргəн. Иптəш ҡыҙҙарының аттары арып туҡтап ҡалған булған. Әблəй тағы ла шəберəк киткəн. Ҡара юрға менəн Маҡтымһылыуҙың баçымлатып килгəнен күргəн дə, ике иптəше менəн осрашырға тейешле шишмə эргəһендə туҡтап, атынан төшкəн. Ул арала иптəштəренəн айырылған Маҡтымһылыу ҙа килеп еткəн дə, аттан да төшмəй, һүҙ ҙə әйтмəй тора икəн, Әблəй Ҡара юрғаны урандырылап йөрөп ҡараһа, уның ауыҙлығы ҡара ҡанға буялып, күҙҙəренə ҡан һауғанын күргəн. Егет, юрғаның ҡыҙға баш бирмəй, уны буйлап үҙе артынан алып килерен алдан белгəс, Маҡтымһылыуға һүҙ ҡушмай ғына, кеçəһенəн ҡулъяулығын алып, атының ауыҙлығындағы ҡандарын һөрткəн дə, муйынынан һөйөп, һамаҡлаған:

— Ыласын етмəç ат инен,
Кемдəн әйəр һалдырҙың?
Ниңə ситкə буй бирəп,
Даның илдə юйҙырҙың?

Толпарҙан тыуған ҡолон һин,
Һөйгəн атым минең һин,
Татлы йоҡомдо ҡалдырып,
Биҙəү киткəн* атым һин.

Ҡара юрғалай ат булмаç,
Кешенəн йүгəн һалдырмаç,
Теҙгенен ситтə алдырһа,
Ҡара юрға дан ютмаç.

Юрға менгән һылыу ҡыҙ,
Төш, битеңде йыуайым.
Илең алыҫламаҫ борон,
Һөйлә сереӊ, тыңлайым.

М а ҡ т ы м һ ы л ы у:

— Ҡара юрға, һин икән,
Әбләй батыр ир икән;
Ат башы менән уйнаған
Маҡтым — тиле мин икән.

Аттан төшкән мин булмам, —
Уралда уҡкән ҡыҙ булһам;
Асыҡ һүҙең, һин аңлат,
Мине һөйөр ир булһаң.

Ирлегеңә маһаймай,
Ҡара атыңа ҡер һалмай,
Атың тапҡан бикәсте
Һылыуым тип уйлаһаң.

Ә б л ә й:

— Ай, Ҡара юрғам,
Вай, Ҡара юрғам,
Өҫтөңдәге бикәсенде
Үптерһәңә, юрғам.

Ай, Ҡара юрғам,
Вай, Ҡара юрғам,
Өләшкә сыҡҡан көмөшөм,
Төшөр әле, юрғам!

М а ҡ т ы м һ ы л ы у:

— Ай, Ҡара юрғам,
Вай, Ҡара юрғам,
Баш бирмәйсә беләгемә,
Алып киттең, юрғам.

Ырай алдың ҡулымдан,
Көсөм алдың ҡулымдан,
Егетең күңелең һаҡлап,
Мине айырҙың юлымдан.

Өйҙән сыҡтыҡ юл менән
Уйнап-көлөр уй менән;
Ҡара юрға, һин — аҫау,
Килгәнһең уҫал уй менән.

Уралда үҫтем ҡыҙ булып,
Иркә булдым бер булып,
Инде ҡалдым хур булып.
Уралда үҫкән сәскәмен,
Ҡырау төшмәҫ гөләмә,
Ҡара юрға, һин һалдың
Ҡара томан күңелемә, —

тип, егеттән хурлыҡ менән алынғанға, уның көләс йөҙ менән ҡаршы алмауына ғәрләнеп, илай башлаған. Әбләй, быны ҡыҙғанып, бөтә серен әйткән, ти:

— Уралдың һин шоңҡары,
Керһеҙ үҫкән ҡыҙ инең;
Шул шоңҡарҙы аулаған
Әбләй батыр мин инем.

Ат тирләтеп мин килдем,
Илдән-илгә ишетеп;
Атаңа ҡалым бирәм тип,
Ни һораһа, килешеп.

Йөҙөң күрҙем, ҡыйманым,
Ни әйтергә белмәнем:
Яныңдағы ҡыҙҙарҙы
Серҙәшең тип белмәнем.

Атым тарттым һул яҡҡа,
Сы[illegible]йым тип аулаҡҡа;
Ял тапманым унда ла,
Ҡайтып киттем торлаҡҡа.

Һине һөймәҫ ир булмаҫ,
[illegible]ҡҡа илама, һылыу ҡыҙ;
[illegible]мһ[illegible] килгән килен, тип
[illegible] үсенән ҡурҡма, ҡыҙ.

[illegible]ра юр[illegible] тиң күрмәҫ,
[illegible]ә м[illegible] менмәһә;
[illegible]оп [illegible]үккә ырғытыр,
Егетенә тиң тип белмәһә.

Моңона мансып, Уралың
Буйың матур үҫтергән;
Тиң табылған егетен
Һаҡмар һиңә үҫтергән.

Ҡалын биреп ҡыҙ алыу
Ир-егеткә дан түгел;

Минең атам байлығы
Мәсем байға тиң түгел.
Тик ҡалынға малым юҡ,
Шуға күрә Ҡара юрғам
Алып килде бергә үк.

Һөйгән егет ҡул бирһә,
Ҡыҙы күҙ йәш түгерме?
Күнелдәр бергә ылыҡһа,
Атаң яуы бүлерме?

Аҙаҡ һүҙең әйтеп бир, —
Атаң ятып ҡалмаҫ ул;
Ырыу-ырыу йыйылып,
Барымтаһыҙ ҡалмаҫ ул.

Ҡара юрғам, теҙең сүк,
Бикәсең төшһөн, талыҡҡан;
Иркәләтеп бәпләйек,
Уралынан ялыҡҡан.

Ҡара юрға, дөйә сүккән һымаҡ, ергә сүккәс, Маҡтымһылыу аттан төшә лә, ҡулындағы ахаҡ йөҙөгөн Әбләйгә биреп:

— Бына, егет, был бүләк —
Күрешеүҙең билгеһе;
Ауға үҙенде саҡырҙым, —
Мин хоҙайҙың төлкөһө!

Минең атам дан тотҡан, —
Намыҫҡа ул түҙә алмаҫ;
Ырыу йыйып килһә лә,
Арабыҙҙы өҙә алмаҫ.
Сәсем биштән үрһәм дә,
Алмас ҡылыс ҡулымда;
Атам Уралын һалһа ла,
Кәртә булмаҫ юлыма, —

тип әйткән, ти. Әбләй, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған да, аттарын һыуытырға бәйләп, сирәмгә ял итергә ултырғандар. Әбләй, юлға бергә сыҡҡан ике иптәшен көтмәй, уларға үҙенең ҡайтып киткәнен белгертеп — ағасҡа Ҡара юрғаның тамғаһын һалып — ҡайтып киткәндәр.

Ҡайтып туй яһап, көн итә башлағандар, ти.

Берҙән-бер көн, ырыу батырҙарын йыйып, Мәсем килеп төшә, Күсәрбайҙың йәйләүен уратып ала, Маҡтымһылыуҙың килеүен һорай. Үҙе аттан төшмәй. Күсәрбай кеше ебәреп тә, үҙе барып саҡырып ҡараһа ла, йәйләүгә инмәй. Ҡара юрғаны — Маҡтымһылыу, буҙ толпарын Әбләй менеп, Мәсемгә ҡаршы баралар. Мәсем, ҡыҙын күргәс, ҡаты асыуланып былай тигән:

— Үҫеп буйға еткәстән,
Атанан баш тартҡан ҡыҙ,
Атаң намыҫын тапап,
Урал аша үҙ ҡаҡ ҡыҙ,
Уралда үҫеп, Иҙелгә ташлап,
Татыр көҫәп ҡасҡан ҡыҙ;
Кереһеҙ ятҡан тоҡомома
Тауҙай гәйеп таҡҡан ҡыҙ,
Урландыңмы, алдандыңмы?
Урландының, алып ҡайтам,
Алдандыныһәң, ҡаның хәләл, —
Ошо ерҙә атып китәм!

Мәсем, ҡыҙының алдына килеп, һаҙағын эҙерһәһенә ҡуйып, ҡыҙының яуабын көтә, Маҡтымһылыу, атаһының асыуланғанын күрһә лә, былай тип яуап бирҙе, ти:

Маҡтымһылыу:

— Алғыр булған һунарсы
Һаҙағын бушҡа тоҫҡамаҫ,
Зур һунарҙың юлыны
Сарға инеп, ташламаҫ.
Ирмен тигән ир кеше
Белмәй, дауҙы башламаҫ;
Барымтаға баҫымтаны
Төбөн белмәй дауламаҫ.
Эй атайым, Уралың,
Ир үҫтергән Уралың,
Ир-егеткә бирелмәҫтәй
Йылҡы үҫтермәй Уралың.
Һаҙағыңды алып тор,
Минең һүҙҙе тыңлап тор,
Бераүҙә лә ғәйеп юҡ,
Барын әйтәм, көтөп тор.

Ҡара юрға — дан алған ат,
Төлһарҙан тыуып ҡалған ат,
Мине урлаған Әбләй түгел,
Ҡулың барһа, бына шуны ат!

Атаһына Ҡара юрға алып ҡасып киткәнен баштан-аяҡ һөйләп бирһә лә, атаһы ышанмаған, Әбләйҙе Мәсемдең ышанмағанын белгәс, ура ҡарап:

— Ҡара юрғаға Маҡтымһылыуҙы мендереп алып кит. Һис бер кеше юрғаның башынан аймаһын. Юрға һаҡмарға тиклем

барыр, уның теге яғына бармаç, ҡыҙға баш бирмәй, уны кире алып ҡайтыр. Әгәр Һаҡмар еренән алып сығып китһәгеҙ, атым артынан бармайым, — тигән. Мәсем был шартҡа риза булған. Ҡыҙҙы атҡа мендереп алып киткән. Ҡөн һарҡыуға, саң уйнаған яҡҡа ҡараһалар, Һаҡмар яғынан Ҡара юрғаның, саң осортоп, Маҡтымһылыу менән килгәнен күрәләр. Маҡтым йәйләүгә килеп етеүгә, Мәсем дә үҙенең кешеләре менән килеп сыға. Әбләйҙәр ҡаршы алалар.

Мәсем, ҡыҙы янына барып:

— Ат башы менән уйнағансы,
Атаң башы менән уйнаһаңсы!
Үҙең йығылып илағансы,
Өйөмдә ятып үлһәңсе!
Ҡарыу һүҙем бөттө инде,
Тартһаң, туйың ҡорорбоҙ *,
Тартмаһаң инде, балаҡай,
Килгән юлдан ҡайтырбыҙ.
Үлһәң, хәбәр итерҙәр,
Ҡырҡың килеп уҡырбыҙ.

Маҡтымһылыу:

— Атам, үҙең данлы ир,
Ирҙе һайлай белмәнең;
Ҡыптыр тундың эсендә
Ир үçер тип белмәнең.

Аçау өйрәтеп, ат менмәç,
Майҙандарҙа дан алмаç,
Атанан ҡалып, мандымаç,
Төйәгең яуҙан һаҡламаç,
Үҙе кәләш күҙләмәç,
Бөгөн тыуғандай бер байғош
Миңә кейәү була алмаç!

Мәсем, ҡыҙының был һүҙен ишеткәс, бер һүҙ ҙә әйтмәгән, Әбләйгә ҡарап:

— Егет булып, ат аçырағанһың икән, даның күрҙек. Атың үлеп китһә, үҙең төтөн сығара алырлыҡмы һуң? Һөнәрең күрһәт, — ти.

Әбләй бөтә йыйылған халыҡ алдында һөнәрен күрһәтә башлаған: ат өçтөндә уйнап, көрәшеп, уҡ атып, йырлап, ҡурай тартып, барын да таң ҡалдырғас, Мәсем, риза булып, ҡунаҡ булырға тирмәгә ингән, ти.

Шул мәлдә һәр төрлөһөнән бер өйөр йылҡыны ҡалынға бирергә риза булған Нөгөш байҙың улы, Маҡтымһылыуҙы ҡыуып килеп еткән дә, ҡыҙҙы алырға дау сығара башлап, Мәсемгә ҡарап һамаҡлап әйткән:

— Йылҡы төҫө һанынса
Өйөр-өйөр йылҡым бар;
Туғай-туғай ҡаплаған
Көтөү-көтөү һыйыр бар.

Мәһәренән эш ҡалмаҫ:
Баймын тигән даным бар;
Туйға бейә тиһәгеҙ, —
Биш өйөр тыу бейәм бар.

Ҡалын алам, тиһәгеҙ,
Ете ырыу илем бар;
Маҡтымға тирмә, тиһәгеҙ,
Һигеҙ ап-аҡ тирмәм бар.

Был һүҙҙе ишеткәс, Мәсем, Нөгөш бай улына бер яуап та бирә алмай, Маҡтымһылыуға ҡарай:

— Әйт һүҙең, тартынма,
Уртаға һалып уйлайыҡ;
Ҡәңәшле йыйын тарҡалмаҫ,
Әселәшмәй уйлайыҡ.

Маҡтымһылыу:

— Һаҡмар буйы яланлыҡ,
Сауҡа үҫмәҫ, тимәгеҙ;
Ярлы егет Әб(е)ләй
Малды тапмаҫ, тимәгеҙ.

Нөгөш байҙың улынан
Ырыҫ китмәҫ, тимәгеҙ;
Нөгөш улын һөйөр тип,
Минән яуап көтмәгеҙ.

Ҡөсләп бирһәң Нөгөшкә,
Ҡарыулашмаҫ, тимәгеҙ,
Ҡара гүрҙең эсендә
Урын тапмаҫ, тимәгеҙ.

Ирмен тигән ир булмаҫ,
Ҡоро маһайып һимерһә;
Айырым ҡаҙан аҫалмаҫ,
Һөнәрһеҙ ятып тилмерһә.

Мин ҡалынға һатылмам,
Егете ир булмаһа,
Ҡуйынына һарылмам,
Һөйөүҙә йор булмаһа!

Мәсем ҡыҙын Әбләйгә бирергә риза булғас, Нөгөш байҙың улы, хурланып, батырҙары менән кире ҡайтып киткән, ти. Былар ҙур туй яһаған, Әбләй менән Маҡтымһылыу, үҙҙәрен ҡауыштырырға сәбәп булған Ҡара юрғаны яратып:

— Һайт, Ҡара юрға,
Вайт, Ҡара юрға,
Поморо матур тояғынды
Дағалайыҡ, юрға.
Ҡырас матур ялдарынды
Уҡалайыҡ, юрға! —

тип бөтә халыҡ араһында йырлайҙар, ти.

# ҠАРА ЮРҒА

(версия)

Элек Ҡушлаҡ исемле бер батыр булған. Бының әҙәм теле белә торған шоңҡары ла бар икән. Ана шул шоңҡары бик шәп булып сыҡҡан, ти, бының һунары ла гел уңышлы була, ти. Һунарға сыҡҡан һайын, был батыр ете өйрәк, ете торна, ете ҡаҙ, ете боландан да кәм алмай торған булған.

Бер саҡ Ҡушлаҡ батыр, һунарҙа йөрөй-йөрөй, байтаҡ ҡына ер урап сыға ла Шүлгәнкүл буйына килеп туҡтай. Ҡушлаҡ үҙенең шоңҡарын ағас ботағына ултыртып ҡуя ла: «Мин йоҡларға ятам, ундай-бындай хәл килеп сыҡһа, берәй ят йәнлек, ҡош-ҡорт күренһә, мине уятырһың», — ти.

Ҡушлаҡ батыр йоҡлай, шоңҡары һайрап, һыҙғырып ултыра:

— Ҡушлаҡ батыр, Ҡушлаҡ батыр
Йоҡлап ятыр, йоҡлап ятыр.

Шул саҡ бер юлаусы уҙаман үтеп бара. Тауышҡа был туҡтай. Килеп ҡарай. Ҡараһа, бер һунарсы йоҡлап ята. Уятырға ҡуша. Шоңҡар осоп төшә, Ҡушлаҡтың күкрәгенә килеп ҡуна. Ҡушлаҡ батыр уянып китә.

— Ҡушлаҡ батыр күҙен асыр,
Ҡушлаҡ батыр тороп баҫыр,
Ҡушлаҡ батыр сәләм бирер,
Ҡунағына урын бирер,
Алдына һый-хөрмәт ҡуйыр!
Табаҡ-табаҡ ҡурҙаҡ ҡуйыр,
Күнәк-күнәк айран бирер, —
Ҡунаҡ итер, хөрмәт итер,
Ҡунаҡтың йомошон көтөр...

Шунан ашап-эсеп туйғас, юлаусы йомошон әйтә:

— Шулай итеп шулай, — ти, — һин миңә үзеңдең шоңкарыңды бирерһеңме?
— Юк, — ти Кушлак, — былай да бынамы тағы бүркемде ал, әммә ләкин шоңкарымды бирмәйем, — ти.

Юлаусы әйтә:

— Бир! — ти.

— Юк, — ти, Кушлак әйтә, — өстөмдәге кейемемде ал, шоңкарымды бирмәйем.

Кунак тағы ялына. Кушлак һаман бирмәй.

— Юк, — ти, Кушлак әйтә, — йәйем менән угымды ал, ә шоңкарымды бирмәйем.

Шунан юлаусы быға әйтә:

— Мин һиңә бер өйөр йылкы бирәм, — ти.

Кушлак риза булмай. Шунан теге юлаусы шоңкарзы кулына алып ала. Була шоңкарзың кыскырып ебәреүе була:

— Кушлак батыр, Кушлак батыр,
Бирмә мине, Кушлак батыр!
Мине бирһәң, бәхетең тартыр,
Ырысың китер, румерең бөтөр,
Бирмә мине, Кушлак батыр,
Һатма мине, Кушлак батыр!

Нишләмәк кәрәк инде. Кушлак батыр, шоңкарзың был һүҙенә карамай, уны юлаусыға бирел ебәрә. Әйткән һүҙзән кайта алмай бит инде был. Шунан юлаусы быға әйтә:

— Бынауы юлдан кайта тор, — ти, — тик артыңа әйләнеп карама!

Үҙе шунда юк була.

Кушлак батыр теге әйткән юлдан китә. Был кузғалып киткәс тә, Шулгәнкул төбөнән сыркырашып йылкы малы сыға башлай. Сыккан бере бының артынан эйәрә. Әй сыға, ти, мал, эй сыға, ти.

Өйөр башы Кара юрға,
Шулгәнкулдан сығып килә,
Кара юрғаның артынан
Алтмыш теүәл өйөр килә;
Алтмыш теүәлдең эсендә
Алма сыуар дүнән * килә,
Айыл етмәҫ ала ат килә,
Койошкан етмәҫ конан * килә,
Алты колас ала бейә,
Ете колас ерән бейә,
Сыскан һыртлы кола бейә,
Ул да булһа сығып килә.
Карлуғас ботло кара ат килә,
Һандуғас ботло һары ат килә...
Ялбыр ялды кара юрға
Бөтәһенең дә алын килә,
Бөтәһенә дә йыйып килә.

Шунан йылҡы малы һаман сыға тора, һаман сыға тора. Ҡушлаҡ батыр, түҙә алмай, артына әйләнеп ҡарай. Шул ерҙә мал сығыуынан туҡтай, сыға башлағандың яртыһы кире һыуға төшөп китә. Ҡалғаны Ҡушлаҡҡа эйәреп ҡайта [145].

Бының берҙән-бер улы була. Алып ҡайта ла был малды, улына бирә.

— Мә, улым, ҡара малды, — ти. Үҙе шунда уҡ түшәккә башын терәй. Күп тә үтмәй үлеп тә китә был. Ни өсөн тиһәң, теге шоңҡары алдан әйтеп ҡуйғайны бит.

Малай атаһын ерләй ҙә, нишләргә белмәй, аптырап ҡала бит инде. Нишләмәк кәрәк? Ҡилә был атаһынан ҡалған өйөр янына. Өйөр башы Ҡара юрғаны менеп, бер донъя күреп, елеп килергә була был.

Сығып китә егет. Сығып китһә, бер йәйләүгә барып сыға. Был күрше ырыу йәйләүе икән. Унда бер ҡыҙ күреп ҡала. Ҡайта ла был Ҡара юрғаһына әйтә:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Ялбыр-ялбыр ялдарыңды
Уҡалармын, юрғам,
Тыбыр-тыбыр тояғыңды
Дағалармын, юрғам,
Ҡара ҡашлы шул һылыуҙы
Алып килсе, юрғам,
Алып килсе, юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

Ҡара юрға быға ҡаршы әйтә:

— Әй, бай улы, бай улы,
Малың һиңә асыулы:
Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һайлайһың —
Һин әйткәнде мин алмам,
Ҡыҙ янына мин бармам!

Егет һаман Ҡара юрғаны һөйөп, ялына:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Дуға кеүек муйыныңды
Иркәләрмен, юрғам,
Түшәк кеүек һыртыңды
Ҡырғыслармын, юрғам,
Күперен торған күкрәгеңде
Йыуғыслармын, юрғам,
Нескә билле шул һылыуҙы

Алып килсе, юрғам,
Алып килсе, юрғам!
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

Ҡара юрға быға ҡаршы тағы әйтә:

— Әй, бай улы, бай улы,
Ҡолағыңа ал был юлы:
Яҙ менергә дүнән бар,
Көҙ менергә ҡонан бар,
Ҡара юрға — ҡайыш һырт,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләмә,
Ҡабырғамды һайлама!
Әй, бай улы, бай улы,
Муйынсағым кейеүле,
Ҡыҙ янына мин бармам,
Һин әйткәнде мин алмам!

Егет уға һаман ялына:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Ашҡыныулы аяҡтарың
Алтынлармын, юрғам,
Ҡикел сәсә * маңлайыңды
Көмөшләрмен, юрғам,
Зифа буйлы шул һылыуҙы
Алып килсе, юрғам,
Алып килсе, юрғам!
Һай, Ҡара юрғам,
Күпереп торған күкрәгеңде
Йыуғыслармын, юрғам,
Нескә билле шул һылыуҙы
Алып килсе, юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

Ҡара юрға быға ҡаршы тағы әйтә:

— Әй, бай улы, бай улы,
Ҡолағыңа ал был юлы,
Яҙ менергә дүнән бар,
Көҙ менергә ҡонан бар,
Ҡара юрға — ҡайыш һырт,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләмә,
Ҡабырғамды һайлама,
— Әй, бай улы, бай улы,
Муйынсағым кейеүле,
Ҡыҙ янына мин бармам,
Һин әйткәнде мин алмам.

Егет уға һаман ялына:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Ашҡыныулы аяҡтарың
Алтынлармын, юрғам,
Ҡикел сәсә* маңлайыңды
Көмөшләрмен, юрғам,
Зифа буйлы шуд һылыуҙы,
Алып килсә, юрғам,
Алып килсә, юрғам!
Һай, Ҡара юрғам.

Шунан Ҡара юрға риза булып, йәйләүенә китә. Килеп етһә, шунда туғайҙа теге ҡыҙ уйнап йөрөй. Ҡара юрғаны күреп ҡала ла был: «Бер менеп, елеп килмәйем әле», — тип уйлай. Янына килеп, һөйөп кенә тотоп ала был, менеп туғайҙы бер әйләнәйем тиһә, Ҡара юрға икенсе яҡҡа ала ла китә. Ҡыҙ улай итеп ҡарай, былай итеп ҡарай, Ҡара юрғаның башын ҡайырып ҡарай, — көсө етмәй быныҡ. Әлегәсә көйләп тә әйтеп ҡарай был:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Ялбыр-йолбор ялдарыңды
Уҡалармын, юрғам*,
Тыбыр-тыбыр тояғыңды
Алтынлармын, юрғам,
Атайымдың йәйләүенә
Алып ҡайтсы, юрғам,
Ҡире ҡайтсы, юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам.

Ҡара юрға быға ҡаршы әйтә:

— Ялбыр-йолбор ялдарымды
Уҡалама, һылыу,
Тыбыр-тыбыр тояғымды
Дағалама, һылыу,
Атайыңдың йәйләүенә
Ҡире ҡайтмам, һылыу,
Байыулының йәйләүенә
Алып барам, һылыу.

Ҡыҙ һаман, тартыша-тартыша, ялына икән:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Баш бирмәйсә бәләгемә,
Алып киттең юлдан,
Алып киттең юлдан,

Көсөм алдың ҡулдан,
Һай, Ҡара юрғам,
Ҡире әйләнеп туғайыма
Ҡайтсы, Ҡара юрғам,
Ҡайтсы, Ҡара юрғам!
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

Ҡара юрға үҙенең яуабы[illegible]ан шул һүҙен ҡабатлай:

— Һай, сибәр һылыу *,
Һай, сибәр һылыу!
Ҡире әйләнеп туғайыңа
Ҡайтмам, сибәр һылыу,
Бай улының ҡаршыһына
Илтәм, сибәр һылыу,
Илтәм, сибәр һылыу.

Былар шулай тартҡылаша-тартҡылаша килеп етәләр Ҡара юрғаның хужаһы янына. Ҡара юрға тып итеп килеп баҫа. Тып итеп килеп баҫһа, бының һыртындағы көмөш ҡашлы эйәрҙә шундай һылыу ҡыҙ ултыра.

Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй балҡыған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡыған,
Әй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Әй, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ!

Шунан егет өйөр башы Ҡара юрға янына килә лә тегегә тағы әйтә:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Ялбыр-йолбор ялдарыңды
Көмөшләрмен, юрғам,
Тыбыр-тыбыр тояғыңды
Алтынлармын, юрғам,
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Үптерһәнә, юрғам,
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Төшөрһәнә, юрғам!
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

Ҡара юрға һылыу ҡыҙҙы төшөрөп, хужаһына тапшыра. Шунан

былар ирле-бисәле булып тора башлайҙар. Балалары ла, малдары ла бик күп була уларҙың. Шуға күрә уларҙан таралған халыҡты байыулылар тип йөрөткәндәр. Байыулы ырыуы ана шунан таралып киткән ул [146].

## ҠАРА ЮРҒА

(вариант)

Элекке заманда Шүлгән буйында бер бай улы булған. Мының малы күп, бөтөн нәмәһе етеш булған. Ҡәләше генә юҡ икән. Шунан был бер Маҡтымһылыу тигән ҡыҙға яусы ебәргән. Аталары бирмәгән. Был нисек тә уны алмаҡ булған. Өйөр башы Ҡара юрғаһын эйәрләгән дә, Маҡтымһылыу йәйләүенә ебәргән.

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Өйөр башы юрғам!
Ялбыр-йолбор ялынды
Алтынлармын, юрғам,
Тыбыр-тыбыр тояғынды
Көмөшләрмен, юрғам,
Зифа буйлы, ҡара ҡашлы
Маҡтымһылыу тигән ҡыҙҙы
Алып килсе, юрғам,
Алып килсе, юрғам, — ти.

Ҡара юрга китә. Маҡтымһылыуҙар йәйләүенә килә. Өс көн, өс төн йәшеренеп, Маҡтымһылыуҙы аңдып тора был. Өс көндән һуң, Маҡтымһылыу иптәштәре менән уйнарға сыҡҡас, бик яҡшы итеп юрғалап былар ҡаршыһына килеп сыға. Үҙе бер ни ҙә булмаған кеүек йөрөгән була, үҙе теғеләрҙе ҡыҙыҡтырып, бейеп тора инде быңа — атлан да кит! Ҡыҙҙар мыңа һоҡланып торалар. Шунан берәүһе әйтә:

— Әй, шул юрғаға менеп йөрөһәң ине! — ти. Тәүҙә бер ҡыҙ менә.

Ҡара юрға уны осондороп йөрөтөп килтереп ҡуя. Шунан тағы береһе менә. Уныһын да шулай итә. Инде килеп өсөнсөгә Маҡтымһылыу менә. Ҡара юрға уны ла елкендереп туғайҙы берике әйләнеп сыға. Әҙерәк уйнатып йөрөтә лә был, Маҡтымһылыуҙы алып китә лә бара. Маҡтымһылыу илай, ялына, Ҡара юрға быны төшөрмәй.

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Ялбыр-йолбор ялыңды
Уҡалармын, юрғам,
Тыбыр-тыбыр тояғыңды
Алтынлармын, юрғам!
Ҡайтсы, Ҡара юрғам,
Ҡайтсы, Ҡара юрғам, — ти.

Ҡара юрға быны тыңламай. Ҡыҙҙы хужаһына алып ҡайтып бирә лә ҡуя. Шунан хужаһы быға әйтә:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Үптерһәнә, юрғам!
Өҫтөңдәге бикәсеңде *
Төшөрһәнә, юрғам!
Маҡтымһылыу йәнемде
Килтерһәнә, юрғам!
Үҙемә булһын, юрғам,
Бисәм булһын, юрғам, — ти.

Шунан Маҡтымһылыу мының бисәһе булып китә. Былар никах уҡытып, бик татыу ғүмер итеп китәләр. Байлыҡтары мул була, балалары күп була. Уларҙан тыуған балаларҙың барыһын да бай улдары [147] тип йөрөткәндәр.



# КУНЫР БУҒА

Борон заманда Уралда мәргәнлеге менән дан тотҡан Янбай тигән һунарсы булған, ти. Берҙән-бер көн Янбай, Уралда үрсемәй, Уралда тулләмәй торған йәнлек эҙләп, илгә сыҡҡан. Юлда барғанда, төлкө осрай — сапмай, бүре осрай — ҡыумай, айыу осрай — атмай, һаман алға киткән. Аҙна киткән, ай киткән, бара торғас, бер яланға барып сыҡҡан. Күмәк һыбайҙың: «Һөл! Һөл! Һайт!..» — тип, бер йәнлек ҡыуып килгәнен күргән. Тирә-яғын, һыбайҙарҙың алдарын салып* ҡараһа, ҡойроғон күпертеп, бер уңға, бер һулға һелтәп, бурҙайҙарҙы шаяртып, ҡасып барған бер йәнлек күргән. Төлкө тиһәң, ҡараһыу, бүре тиһәң, тәлтәш, үҙе бик оскор, йүгерек, ти. Янбай: «Ни булһа, ул булыр. Ат мендем, баҙаным, ил ташланым, һунар тип», — һөйләнә лә атын бөтә баҙышына ебәреп китә. Бик күп һыбайҙарҙы үткән, йәнлек йырғандан-йыра*. Күҙҙән юғала бара.

Шул саҡта ҡола ат менгән бер егет Янбайҙы ҡушарлап килеп, ҡаҙ ясҡыған ыласын төслө, шыу итеп үтеп киткән, ти. Янбай, атын ҡамсылап, был һыбай артынан ҡалмасҡа уйлаһа ла, һыбай уны йырғандан-йыра, күҙҙән юғалғандан-юғала бара, ти. Оҙаҡ та үтмәй, был һыбай, тын менән тартып алған төслө, йәнлеккә етеп, урата, суҡмар менән һелтәй ҙә башлай. Шулай итеп һыбай, йәнлек менән айҡашып, тау артылып киткән. Янбайҙың аты ла татаурағац*, бара торғас, тауҙы ла елә-суке генә саҡ барып сыҡҡан. Тау башына менеп, күҙ йөрөтһә, тауҙың арғы яғында, сауҡаға яҡын бер түбәләстең итәгендә, теге ҡола ат менгән егеттең атынан төшөп тартҡы, айылынмы йүнәтеп маташҡаны Янбайҙың күҙенә сағылған. Янбай елә һалып егет янына барып етһә, егет йәнлекте үлтереп, ҡанъяғаһына асып тора, ти. Янбай:

— Һуҡҡан йәнлегенден йәненә етә алманым, йәплегендә тамғам юк. Быға са Уралда атымдан ҡотолған йән күргәнем юҡ ине. Әллә атым талыҡҡанмы, әллә йәнлек йүгерекме? — тип, һөйләнә. — Килбәте менән — төлкө, төҫенә ҡарағанда бүтән, был ниндәй

йәнлек? Әллә ҡара төлкө лә ҡара төлкө тигәндәре ошомо? — тип һораған. Егет:

— Уҙаман, ҡара төлкө тигәндәре ошо. Атың талыҡҡанмы, юҡмы, ошо көнгә саҡлы һунарға йөрөп, алған йәнлегемдең йәненә түгел, йәнлекте ҡанъяғаға бәйләүгә лә килеп етеүсене күргәнем юҡ ине, атың шәп икән? — тигән дә, Янбайҙы танымағанға, төҫ-башына ҡарап торған. — Уҙаман, ҡарап торам-торам да, атыңдың интамғаһына, үҙеңдең өҫ-башыңа ҡарағанда, беҙҙең ырыу кешеһе түгелһең булырға кәрәк, ҡайһы яҡ һин? — тип һораған.

Янбай хәлен һөйләп биргән. Егет:

— Улай булһа, әйҙә юлдаш бул! Йәнлек уртаҡ булыр. Миндә хоҙай ҡунағы булырһың, — тип Янбайҙы үҙ йәйләүенә алып киткән.

Янбай егеттә ҡунаҡ булған. Икәүләп ат һынау, үҙҙәренең һоллолоғон * сағыштырыу өсөн, бер нисә тапҡыр һунарға сығып йөрөгәндәр, йәнлек алғандар. Янбай егеттең ҡола атының шәплегенә бик һоҡланған. Бара-тора быларҙың серҙәре лә бик килешкәс, егет Янбайҙы ҡайтармай тағы бер нисә көнгә туҡратҡан, ти.

Берҙән-бер көн һунарҙан ҡайтып килгәндә, Янбай был егеттең ҡола аты тураһында һүҙ асып, уны үҙенә бүләк итеүен теләп, һуйҡайлатып * әйтеп ҡуйған. Егет Янбайҙың бөтә Уралда дан тотҡан ҡыҙы Ҡолансәсте ишетеп белгәнгә, Янбайҙы эҫе күреп, уға яҡынлау өсөн, нисек бүләк бирергә һүҙ аса алмай йөрөй икән. Атын әллә нисә өйөр йылҡынан артыҡ күрһә лә, Янбайҙың һүҙ асыуына ҡыуанған.

— Ярар, Янбай ағай. Тирле атымдың өҫтөнә күҙең төштө, бирәйем, һинән ҡыҙғанһам, барыбер мандымаҫ! Ил аяғынан, һыу башынан килгән ир икәнһең, теләгең булһын, — тип атынан төшкән дә, үҙ эйәрен һыпырып ташлай һалып, Янбайҙыҡы менән эйәрләп, уны атына мендергән, ти.

Янбай быға бик шатланған. Был егетте үҙенә ҡунаҡҡа алып ҡайтырға булған. Былар егеттә бер нисә көн тағы ла ҡунаҡ булғандар ҙа Янбайға ҡунаҡҡа киткәндәр, ти. Егет Ҡолансәс менән һунарға йөрөгән. Ҡолансәстең ҡул тамырын тартып ҡарағас *, ҡыҙ ризалығын белдергән, ти.

Егет Янбайға әйтә алмай йөрөһә лә, ҡайтыр көндө, хуш аяғы эскәндә:

— Янбай ағай, һин атымды һораның, мин кире ҡаҡманым, күҙ ҡарам төҫлө күргән ҡола атымды бирҙем. Һин дә миңә Ҡолансәс ҡыҙыңды биреп, үҙ бауырың яһаһаң, ни эшләр икән? — тип һүҙ башлаған. Янбай башын түбән эйеп бер аҙ уйлап ултырған да:

— Егетем, ат йылҡынан тыуа, егеттең үҙ күҙе генә була. Ҡыҙ ата-әсәнән тыуа, икеһенең уртаҡ бәғере була. Ул уйың булғас, бөгөнгә ҡун, кәңәш-төңәш итәйек, — тип егетте тағы бер кис ҡунырға туҡратҡан.

Янбай, бисәһе, яҡын ағай-энеләре менән кәңәш итеп, арала төрлөсә тарҡалыштар булғас, «баланың башын аҙҙыраһың. Урал-

да егет бөткәнме ни?» тигән һымаҡ һүҙҙәр күбәйгәс, ҡыҙы Ҡолансәсте саҡырып:

— Балам, оҫта һунарсылыҡ менән Янбай тип дан алһам да, ҡайҙа ғына бармайым, Ҡолансәс тигән даның менән ишек астым. Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ерҙә лә Ҡолансәс исемең егеттәр күңелендә йөрөй икән. Ат тирләтеп, һиңә күҙ төшөрөп килгән егеткә яуабыңды үҙең бир, — тигән. Ҡолансәс:

— Егет, ат биреп, Урал ҡыҙын Урал егеттәренең ауыҙынан һалдырып алдым, тип күперәймәһә *; көндәш көлө менән көнөмдө уртаҡлап, сәскәнән-сәскәгә осҡан иңкеш төҫлө, атын бәйләгән бер йәйләүҙә ҡыҙ күҙләмәҫ булһа, ил аяғынан төбәп килгән бер егет икән, һаһары ҡоромаһын *, — мин риза, — тип әйткән, ти.

Егет, Ҡолансәстең ата-әсәһе янында һүҙ биреп, ҡыҙ ҡулынан аяҡ эскән, ти. Дан сәсеп, туй яһап, ҡыҙ менән кейәүҙе ҡунаҡ итеп, ҡыҙҙы кейәү йортона оҙатырға булғандар. Янбай ҡыҙын оҙатҡанда:

— Балам, ризығың алыҫҡа сәселде. Айыры тояҡтан инсә биреү менән дә, барын етә алмаҫ. Тояҡтары күсеп, юлда ятып ҡалыр. Йылҡынан ғына бирәйем,— тип йылҡы инселәре генә билдәләгәс, әсәһе быға риза булмаған.

— Атаһы, ҡыҙ итеп үҫтерҙем, ҡалымһыҙ бирҙем, мәһәр килтертеп, әсә һөтө эсереп, оҙата алманым. Исмаһам, елен тултырып, яландан мөңрәп ҡайтҡанда, илен иҫенә төшөрөп, һәү-һәүләп ҡаршы алыр. Таң менән һауып, һәш-һәшләп, ҡыуыр. Гөбөрләтеп һауғанда, үҙ иленең һөт еҫтәрен еҫкәп ултырыр. Май тасҡығанда, һыйырының майы менән ҡолан сәсен ялтыратып тарар, ҡәйнә күҙенә тилмереп торғансы, һыйыры быҙаулағас, ыуыҙ ҡоймағы ҡойоп, килен-киртән йыйып, күңел асыр. Буйға ҡалып, әсеһерәп, аш көҫәгәндә ҡоротон ашар. Атаһы, айыры тояҡтан бер генә һыйыр булһа ла бирәйек! — тип әсәһе зарланған, ти. Был һүҙгә бары ла риза булышып, атаһы ла, егет тә, алыҫ булһа ла, бер генә һыйыр алмаҡ булғандар, ти. Атаһы һыйырҙары араһынан бер һыйыр һайлап биреп, малын ҡыуышып, ҡыҙ-кейәүе менән бергә егет йортона киткәндәр, ти.

Янбай ҡыҙын кейәү йортона илтеп, аҙна-ун көн ҡунаҡ булып ҡайтып киткән. Ҡыш үткән, тағы яҙ булған, яҙ үткән, тағы көҙ булған, тағы һунар булып *, ҡырпаҡ ҡар төшкәс, Янбай һунарҙа күп йөрөй алмаған, ҡапыл ауырып үлгән, ти.

Ҡолансәс кейәүе менән татыу ғына ҡышты уҙғарып, малдарын ҡараға сығарғандар *. Үләндең йәшел, майлы сағында Уралдан килгән малдар, ерһенмәй, көндән-көнябыға башлағандар. Был малдарға төрлөсә им-том яһап, ҡыу үлән ашатып ҡына ҡараһалар ҙа, бөтә килгән йылҡылары ерһенмәй үлеп бөткән, ти. Бик ябыҡһа ла, һыйыры үлмәй, игеҙ быҙаулап биргән. Быҙауҙарҙың береһе орғасы, береһе буға булып, икеһе лә ҡуңыр төҫлө булған, ти.

Халыҡ араһында: «Артынан килгән һыйыры игеҙ быҙауланы, ҡотло аяҡлы килен икән», — тигән маҡтауҙар таралһа ла, һы-

Йәйләүгә ҡайтҡас, иренә ҡарап:

— Сай аралап йөрөнөм,
Быҙауҙарым тапманым;
Үлгән тиһәм, тағы ла
Осҡан ҡоҙғон күрмәнем.
Һыйырым үлде, ерһенмәй,
Быҙауым китте, тиңһенмәй,
Инде ҡалған ҡыу башым
Нисек йәшәр, мал күрмәй! —

тип ире алдында үкһеп илағас, ире йыуатып:

— Өйөр, өйөр малдан дан
Атым бирҙем, серәшмәй,
Уралда үҫкән буйынды
Һөйҙөм, күреп һөйләшмәй.
Малың минә дан түгел,
Түле уның йән түгел,
Туҙған малға йәш түкмә,
Бер ни һинә йәл түгел.
Ил ҡаплаған күк йылҡым,
Ул да һинә бүләккә;
Айыры тояҡ малдарым
Һинә һыйға ҡунаҡҡа.
Тиң йәшәһәк, бына тыуыр
Беҙҙән илдең солтаны.
Һин — Уралдың шоңҡары,
Мин — яландың толпары.
Күҙенә ҡарап, әүелдәр,
Минә ҡарап, бәүелдәр,
Беләгендә сеңгелдәр,
Бөтә ҡайғың тарҡатып,
Сәсәк телдән таңҡылдар.
Мал ҡайғыһы ҙур түгел,
Башҡа бәлә килмәһен;
Ҡолансәс тигән даның бар,
Йөҙөнә һары типмәһен;
Мал күрмәгән икән тип,
Ил үҙеңдән көлмәһен! —

тип, Ҡолансәсте йыуатҡан. Ҡолансәсте күңел астырыу өсөн, ата-әсәләренә алып барырға уйлаһа ла, юлды белә алмай аптырағас, ахырҙа төрлө ер, төрлө йәйләүҙәргә ҡунаҡ булырға алып киткән, ти. Айҙар, көндәр уҙған, Ҡолансәс ике ҡуңыр быҙауҙы ла онотҡан, мал ҡайғыларын да таратҡан, ти.

Ике ҡуңыр быҙау, йәйләүҙәге төйәктәренән айырылғас та, Уралға ҡарай юл тотҡан, ти. Был ике быҙау, һис һыу-һүлгә әләкмәй, ҡош-ҡортҡа осрамай, яман-артаҡҡа * тотолмай, гел һырт ме-

нән, кеше аяғы баҫмаған юлһыҙ ерҙән үҙҙәре айырым юл һалып, айҙар барып, тояҡтары тубыр булып, арып-талып булһа ла, Уралға барып сыҡҡандар. Был ике быҙау, Янбайҙың ҡырҙа утлап, яланда ҡунып йөрөгән ҡыҫыраҡ * тана-торпо көтөүенә килеп ҡушылған. Ай йөрөгәндәр — күреүсе булмаған, йыл йөрөгәндәр — һанаусы булмаған. Үгеҙе буға булып, көтөү башы булған, орғасыһы тыуса һыйыр булып быҙаулаған, ти.

Берҙән-бер көн, был һыйыр быҙаулағас, быҙаулы һыйырҙар көтөүенә ҡушып, Янбай йәйләүенә алып ҡайтҡандар. Бүтән һыйырҙар төҫлө быҙауын да айырып ҡуйғандар. Һыйыр көтөүе һауымға ҡайтҡанда, Ҡолансәстең һылыуы был һыйырҙы һауырға ултырған, ти. Һыйырҙың имсәктәрен күнәк ситенә яҡҡан май менән майлап, эйҙергән ыңғайға, имсәк осонан күнәккә тамған һөт тамсылары: «Һау! һау!..» — тип тауыш биргәндәр, ти. Ҡыҙ аптырап китеп, күнәк эсенә ҡараған да, бер нәмә лә күрмәгәс, эйгән имсәктәрҙе гөрләтеп һауа башлаған, ти. Һөттәр:

— Тауҙан-тауға артылып,
Ҡасып ҡайтҡан тыусаң был,
Ҡуш мунсаҡтай теҙелеп,
Илен көҫәп ҡайтҡан был, —

тигәс, ҡыҙ аптырай ҡалған. Һөт тамсылары тағы ла өҫтәп: «Һау, һау, һау!» — тип, һауыуын һорағандар, ти. Ҡыҙ ҡурҡып урынынан торған да әсәһенә йүгергән. Әсәһе үҙе килеп һыйырҙы һауырға ултырған да:

— Ҡуңыр һыйыр, һәү, һәү,
Ҡуңыр һыйыр, һәү, һәү!.. —

тип һыйырҙы йыуатып, һауырға башлаған. Һөттәрҙең тамсылары тағы ла: «Һау, һау!..» тип һөйләй башлағандар, ти. Әсәһе һауа, ҡыҙы тыңлап ултыра, ти. Һауғанда, һөттәр күнәккә төшкәндә, түбәндәгесә һамаҡлайҙар, ти:

— Ҡуңыр һыйырың һау, һау,
Ҡуңыр һыйырың һау, һау!
Урал ашҡан ҡыҙығыҙ,
Беҙ киткәндә һау, һау!
Малы түлләһен тиешеп,
Әсәнән игеҙәк тыуҙыҡ беҙ,
Мәндый алмай малдары
Ерһенмәүен күрҙек беҙ.
Әсәбеҙ кибеп, ерһенмәй,
Үлеп ҡалды далала,
Ҡара ҡоҙғон күҙҙәрен
Суҡый ине саяла.
Йылҡылары ерһенмәй,
Күҙе-башы йәшәреп *,
Дүрт тағанда тора ине *;

Ҡолансәсең яңғыҙы
Беҙҙе йәндәй күрә ине.
Эйендемде * һау, һау,
Тоҙ ялатып һау, һау,
Һүҙем бөтмәй, һау, һау!..

Имсәктәрҙә һөт бөткәс, эйҙерергә быҙауын ҡушҡан, алдына яларға тоҙ ҡуйған да, Ҡолансәстең әсәһе, һыйырҙың арҡаһынан яратып:

— Ҡуңыр һыйыр, һәү, һәү,
Ҡуңыр һыйыр, һәү, һәү!
Тауҙан тауға артылып,
Урал тауын уратып,
Муйынсағың һөйрәтеп,
Нисек ҡайттың илемә?
Талпанланған айыуға,
Күҙе мәскәй бүрегә,
Айбалталы ҡасҡыға
Осрамайса юлында
Нисек ҡайттың елемә *?
Ҡаҙалып аҡҡан һыуҙарҙан,
Ҡара гүрҙәй шырҙарҙан
Айһыҙ ҡара төндәрҙә,
Маяҡһыҙ берләм юлдарҙа
Нисек ҡайттың аҙашмай
Ҡыҫыраҡ ятҡан тыуыма *, —

тип һорауҙарын бирә лә, быҙауҙы айырып бәйләп, тағы һауырға ултыра. Һөт:

— Эйендемде һау, һау,
Ҡалдырмайса быҙауға,
Ҡаймағымдан май таҫҡап,
Йыуасалар бешереп;
Эркетемдән ҡорот йәйеп,
Ылашында киптереп,
Ҡолансәскә юлсынан
Ебәртерһең танһыҡҡа.
Ҡәрешкә утлап Уралда,
Сәскә ялмап туғайҙа,
Туғыҙ айҙа бер быҙау
Түл ҡушырмын ҡуранда.
Уралым ташлап китмәмен,
Яланға кире ҡайтмамын,
Ялан һыуын йотмамын,
Ҡолансәс тилмерһә лә,
Ҡайтып сәләм әйтмәмен, —

тип, үҙенең Колансәс янынан ҡайтҡан мал түле икәнен белгерткәс, Колансәстең әсәһе, илгә хәбәр таратып, бөтә имсе-томсыларҙы йыйған, ти. Күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән ерҙән бөтә ил ағалары был һыйыр менән буғаны күрергә килгәндәр. Былар тураһында төрлө һүҙҙәр, төрлөсә аптырауҙар таралған. Колансәскә барырға, уға хәбәр итергә, ҡайһы яҡҡа ырай * барырға юл таба алмай аптырағандар, ти. Был буға менән һыйыр ҡасып, кире ҡайтһа, артынан күҙәтеп барырға булғандар. Ай көткәндәр, йыл көткәндәр, һыйырҙар ҙа кире ҡайтмаған. Колансәс тә ҡунаҡҡа килә алмаған, ти.

Берҙән-бер көн һыйыр һауып ултырғанда, Колансәстең һылыуы яңылыш һөттө сайпылтып түккәнен һыйыр күреп ҡалған. Һыйырҙы эйҙереп янынан һауырға ултырһа, һыйыр эймәгән, һөтөн быҙауына ҡалдырған, ти. Колансәстең һылыуы быны әсәһенә һөйләгәс, әсәһе аҡыл эйәләре менән аҡыллашып, һыйырҙы асыуландырһаҡ, кире Колансәс янына ҡайтып китмәҫме икән, тип уйлашҡандар, ти.

Һыйыр ҡайтҡан һайын һөтөн һауып, ергә түккәндәр, уның менән дә ҡасмағас, өҫтөнә ҡойғандар. Һыйыр асыуланғандан-асыуланған. Бара торғас, һис һөт бирмәй башлаған. Һөт бирмәгәс, һыйыр ҡасып китер, тип һаҡлағандар, һыйыр ҡасмаған. Булмаһа, үгеҙенә бер әмәл ҡороп ҡарарға кәрәк, икеһенең дә мажаһына тейһәк, бергәләп ҡасмаҫтармы икән, тип уйлағандар.

Берҙән-бер көн үгеҙен йығып бестерергә маташҡан булып ҡурҡытҡандар. Үгеҙ быны күргәс, байҙарҙың өйөн һөҙөп йығып тороп, ҡасҡан да шул көндө үк [illegible] ғәйеп булғандар. Колансәстең әсәһе, тиҙ генә сабарҙар * йыйып, ҡуңыр буға менән һыйырҙың юлын салып алып эҙләгәндә, бер тау битендәге ҡомлоҡта һыйыр тояғы юлына осрағандар. Абайлап ҡараһалар, ҡуйы урман араһынан һыҙылып киткән бер берләм юл осратҡандар. Юл өҫтөндәге үләндәр, ағастар, икеһенең күҙенән мөлдөрәп аҡҡан күҙ йәштәре менән ҡабат үҫмәҫлек булып ҡыуарғандар, ти. Шул юл буйлап Колансәстең әсәләре, ат сабышына сабып барып, буғаларҙың артынан еткәндәр ҙә, күҙәтеп, күҙҙән юғалтмай ғына барғандар, ти. Былар аҙна, ун көн, ай китеп, һис һыу-һулға осрамай, Колансәстәрҙең йәйләүенә барып сыҡҡандар, ти. Колансәстәр әсәләрен күктән төшкәндәй итеп ҡаршы алғандар. Ҡуңыр һыйыр менән буғаның бөтә хикмәтен һөйләп һуҙғандар, ҡунаҡҡа барырға юл таба алмай аптырап торғандарын һөйләгәндәр. Егет тә үҙенең Янбай оҙатыуы менән кире ҡайта алғанын белдергән, ти.

Колансәс шатлығынан буғаһы менән һыйырының ҡолағына көмөш һырға тағып ҙурлаған, ти. Әсәһе Колансәстәрҙә айлап ҡунаҡ булғас, ҡыҙы менән кейәүен үҙенә ҡунаҡҡа алып ҡайтып киткән. Ике йәйләүҙән тигеҙ тип бөтә Уралда ҡуңыр буғаның даны киткән. Бөтә ырыу бер-береһенә ҡатнашып йөрөргә буғаларҙың юлы оло юл булған, ти. Шунан һуң бөтә йәйләүҙә тыуған ҡуңыр һыйыр тоҡомон ырыуҙарҙың байлығы тип ҡәҙерләгәндәр. Ҡуңыр һыйырҙың һөтөн дауа итеп күргәндәр, ти.

Был юлға Ҡуңыр буға юлы тип исем ҡушҡандар, ти. Был

[illegible] халыҡҡа тоҙ бирмәгән саҡтарҙа, шул юл буйлап, һис бер нәмәгә эләкмәй, бер йәйләүҙән икенсе йәйләүгә йәшереп тоҙ ташығандар. шуға күрә ул юлды тәүҙә Ҡуңыр буға, һуңға табан ҡайһы ерҙәрҙә Күс юлы, Тоҙ юлы [149] тип тә йөрөтөр булғандар.

## ҠУҢЫР БУҒА

(версия)

Төшлөк яҡтағы * башҡорттарҙы дошман күп баҫа. Төн башҡорттарынан * ярҙамға ғәскәр башы булып Миңлей батыр бара. Миңлей батыр илде баҫып килгән дошмандар — һун төрөктәре менән алыуһыҙ һуғыша, үҙенең баһлеүәнлеге менән барса халыҡты таң ҡалдыра [150]. Миңлейҙең яу ҡайтарыу батырлығы өсөн, ошо яҡ — төшлөк яҡта берәгей булып һаналған Таңдыҡса исемле һылыу ҡыҙҙы бирәләр. Ата-әсәһе Таңдыҡсаны кейәү йортона бер ҡуңыр буға эйәртеп оҙата.

Миңлей менән Таңдыҡса, эйәртенешеп, ҡуңыр буғаны етәкләп, Уралдан һуҙылып үткән һырттар буйлап төн яғына, батыр йортона китәләр. Яратышып, тигеҙ донъя ҡороп ебәрәләр. Матур-матур теремек балалары була.

Ҡуңыр һыйыр йыл һайын төрлө-төрлө төҫтә быҙауҙар килтерер тора, һыйыр малына төҫ бирә. Ул шулай ете тапҡыр быҙаулай ҙа үлеп китә. Унан ҡалған етенсе тана ла етене быҙаулап үлә. Шул рәүешсә алтмыш өс йыл самаһы ғүмер үтә. Һыйырҙын эйәһе был быҙауҙарҙын һәр алтыһын халыҡтарға бирер, тоҡом тарата.

Һуңғы, етенсе быуындың етенсе быҙауы төҫө, холҡо, бар булмышы менән ни тәүге ҡуңыр һыйырға оҡшаш була. Уны Ҡуңыр буға тип йөрөтәләр. Был ҡуңыр буға, тыуғаса сыҡҡас, бығаса һыйыр малында күренмәгән, ғүмерҙә булмаған ике быҙау тыуҙыра. Береһе тарғыл орғасы, икенсеһе күк үгеҙ була. Ҡуңыр һыйыр бынан һуң бойоға, болоҡһой башлай, баҡыра, үкерә. Үрештән ҡайтмайынса, юҡ булып та йөрөгәләй.

Көндәрҙән берәүһендә Ҡуңыр буға быҙауҙары менән юҡ була. Таңдыҡса ылға, бәхетем юғалмағаймы тип ҡайғыра, борсола. Әйләнә-тирә урмандарҙы, тауҙарҙы ҡыҙырып сыға [151]. Дейеү инәһе, Бисура башлауҙарына барып әйләнә, әммә малдары табылмай. Һис бер ҡайҙа ла эҙе-юлдары булмағас: «Туҡта әле, был Ҡуңыр буға бик болоҡһоу ине, тиктәҫкә булмағандыр», — тип үҙе



## ҠУҢЫР БУҒА

(версия)

Төшлөк яҡтағы * башҡорттарҙы дошман яуы баҫа. Төн башҡорттарынан * ярҙамға ғәскәр башы булып Миңәй батыр бара. Миңәй батыр илде баҫып килгән дошмандар — һун төрөктәре менән аяуһыҙ һуғыша, үҙенең бәһлеүәнлеге менән барса халыҡты таң ҡалдыра [150]. Миңәйҙең яу ҡайтарыу батырлығы өсөн, ошо яҡ — төшлөк яҡта берәгәй булып һаналған Таңдыса исемле һылыу ҡыҙҙы бирәләр. Ата-әсәһе Таңдысаны кейәү йортона бер ҡуңыр буға эйәртеп оҙата.

Миңәй менән Таңдыса, эйәртенешеп, ҡуңыр буғаны етәкләп, Уралдан һуҙылып үткән һырттар буйлап төн яғына, батыр йортона китәләр. Яратышып, тигеҙ донъя ҡороп ебәрәләр. Матур-матур теремек балалары була.

Ҡуңыр һыйыр йыл һайын төрлө-төрлө төҫтә быҙауҙар килтереп тора, һыйыр малына төҫ бирә. Ул шулай ете тапҡыр быҙаулай ҙа үлеп китә. Унан ҡалған етенсе тана ла етене быҙаулап үлә. Шул рәүешсә алтмыш өс йыл самаһы ғүмер үтә. Һыйырҙың эйәһе был быҙауҙарҙың һәр алтыһын халыҡтарға биреп, тоҡом тарата.

Һуңғы, етенсе быуындың етенсе быҙауы төҫө, ҡылығы, бар булмышы менән иң тәүге ҡуңыр һыйырға оҡшаш була. Уны Ҡуңыр буға тип йөрөтәләр. Был ҡуңыр буға, тыусаға сыҡҡас, бығаса һыйыр малында күренмәгән, ғүмерҙә булмаған ике быҙау тыуҙыра. Береһе тарғыл орғасы, икенсеһе күк үгеҙ була. Ҡуңыр һыйыр бынан һуң бойоға, болоҡһой башлай, баҡыра, үкерә. Үрештән ҡайтмайынса, юҡ булып та йөрөгөләй.

Көндәрҙең береһендә Ҡуңыр буға быҙауҙары менән юҡ була. Таңдыса быға, бәхетем юғалмағайы тип ҡайғыра, борсола, әйләнә-тирә урмандарҙы, тауҙарҙы ҡыҙырып сыға [151]. Дейеү инәһе, Бисура башлауҙарына барып әйләнә, әммә малдары табылмай. Инде бер ҡайҙа ла эҙе-юлдары булмағас: «Туҡта әле, был Ҡуңыр буға бик болоҡһоу ине, тиктәҫкә булмағандыр», — тип үҙе

килеп булып килгән юлға ҡарай йүнәлә. Тояҡ эҙҙәрен, өйкөм-өйкөм тиҙәктәрҙе, суғырмаҡлы ҡайында өйкәнеүҙән әләгеп тороп ҡалған йөндәрҙе һуғылта. «Ә-ә-ә, минең малдарым тыуған иләмә ҡайтып киткән икән дә баһа, малдың малы ла үҙ тупрағын онотмай», — тип эҙҙәренә төшөп, ҡыуалатып китә. Шул кисерештәрен көйгә һалып һамаҡлай:

— Эҙләй-эҙләй талды аяҡтарым,
Тау-таш, үңер, һырттар артылып;
Күҙҙәремдә өҙмәй ҡараһам да,
Ҡайҙа китте былар алҡынып.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!..
Һуҡрандым урынһыҙға,
Йәш түктем юлығыҙға,
Һығынып-һыҡтап һораным,
Әллә ниҙәр юраным,
Айыу һуҡты, урланды,
Тип тә томал уйланым.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү,
Зәп-зәп-зәп-зәү,
Һәү-һәү-һәү,
Һәү-һәү-һәү!

Тандыса малдарының юлына төшөүенә шул тиклем ҡыуана. «Илай-һыҡтай һорағаным тәңрегә олғашып ҡабул булдымы икән», — тип уйлай.

— Эскенәмдә ятҡан уй-һағышым
Һеҙҙең юлға, эҙгә тоташты;
Әллә инде ысын һорағаным
Ерҙән алып күккә олғашты.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!
Йөрәккәйем һиҙенде,
Ҡайтырығыҙ беленде;
Әле бәхетем мул икән,
Тап юлығыҙ шул икән;
Тәңгәлдән тәңгәл икән,
Тыуған ил ҡарап киткән.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!..

Ата йортонан Минәй иленә килгән сағында ла, малын эҙләп йөрөгәндә лә Тандыса уралып-уралып ятҡан оло Уралға ҡарап хайран ҡала. Армыт-армыт Урал һырттарына, монар тартҡан алыҫ арҡаларға ҡарап, йыр һуҙа:

— Уралып та ятҡан Оло Уралдың
Һырт өҫтөнән ярып юл һалып,
Ҡуңыр буғам, һине ҡыуа барам,
Аяҡ-балтырҙарым бик талып.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.
Ҡайҙа китеп бараһың,
Түтәнән юл һалаһың;
Түтәнән юл һалаһың;
Малһыҙ нисек ҡалайым,
Юллап һеҙҙе табайым,
Аһа етәм, бына тип,
Еләә-атлай барайым.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!..

Ул саҡта Оло Уралтау кейек-ҡырағай йыртҡыстарға иҫәпһеҙ бай, яңғыҙ-ярпы йөрөүселәргә ҡурҡыныс була. Тандыса Уралдың, уның тирәһендәге тауҙарҙың ҡыйғаҡ үткер сыйыр ташлы урындарынан үтә, аяғын телдереп, ҡырҡтырып бөтә. Аяғының һыҙлауына түҙә алмай, һыпырып-һыпырып ыуалап ҡарай, малдарымдың да тояҡтары шулай туҙып, яраланып бөткәндер инде тип хафалана. Шунан һамаҡлай-йырлай юлын дауам итә:

— Урал ғына тауҙың арҡа юлы
Ҡыйғаҡ үткер саҡма таш ҡына,
Тыуған илдән төҫ тә тоҡом булған
Малды эйҙәп, йөрәк ашҡына.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Һәүкәшҡәйем, һәү-һәү-һәү!..
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләрмен,
Әрләрмен дә һыйлармын,
Һөтөң һауып, май яҙып,
Көнкүрмешем яйлармын.
Ҡәһәтләндем дә мин һиңә,
Рәнйенем дә мин һиңә.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!..

Тандысаның малдары төшөп алған йомро юлдан бер яҡҡа ла сителеп сыҡмайынса баралар: сыҡһаҡ, юлдан яҙлығырбыҙ, тип ҡурҡалар. Юл ситендәге ҡыйғаҡ үләндәрҙең башҡынаһын ҡыйпып өҙөп ашап баралар. Һыу эскәндә лә, йылға баштарынан, ҡойолоҡтарҙан ғына боролоп эсеп, һыуһындарын ҡандыралар. Аҙашмаҫҡа була, ашаныуҙар юлдың уң яғынан, ә эсенеүҙәр юлдың һул яғынан булдырыла, сөнки былар өлөшлө малдар була. Малдарҙың ошо рәүешсә барыуына Тандыса тағы ла гәжәпһенә:

— Кәрешкәләр кисеп, сәскә ҡыйпып,
Еләй-еҫкәй ерҙе ерһенеп,

Ысыҡ утын ялап һыуһыныңа,
Тыуған-үҫкән ерҙе илһенеп,
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һөү!..
Еләй-еҫкәй бараһың,
Сәскә-үлән ҡабаһың,
Төйәгеңде ҡалдырып,
Алыҫ юлдар алаһың,
Аҙымыңды арттырма,
Аяғыңды талдырма.
Ҡуңыр буғам, һөү-һәү-һәү!
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!

Таңдыса ҡыраз буйлап барғанда, тәү башлап һыуһар осрап, юлын ҡыйып үтә. Һыуһар, бара биргәс, бер ағастан икенсеһенә һикереп, ырғып уйнап китә. Һыуһарҙың юл ҡыйырын ул яҡшыға юрай. «Һыуһар булһам, мин дә, ағастан ағасҡа осоп, малдарымды ҡыуып етер инем», — тип уйлай Таңдыса.

— Ҡыш һыуыҡтан һаҡлаған
Һыуһар — ҡама туң икән,
Ерҙең үҙен ҡамаған
Урал тауы шул икән.
Эй Уралым, Уралым,
Тирәләп ҡарап торамын.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!..

Был яғына Таңдыса юлда осраған йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа, күҙенә күренгән бер нәмәгә йыр сығарып бара. Бара торғас, мысы көтөүен күреп ҡала. «Был януарҙар хәүефһеҙ урында йөрөй торғандыр» — ти, үҙе лә арығас, ошонда йоҡлап китмәксе була. Мышыларға яҡын уҡ барып йоҡлап, иртә таң алдынан торһа, улар мыш та мыш көйшәнеп яталар, ти.

— Боҫ-боҫрап китеп, мыш-мыш көйшәнеп,
Көтөү-көтөү йөрөй мышылы,
Сыҡҡанымдан алып айынтым * мин,
Урал да икән йәшәү ыңғыгы.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!

Аңҡайып, йән-яғына ҡарап ала. Бейек тауҙарҙа ап-аҡ ҡарҙар күренә. Алдында дөм ҡара урман. «Был урманда әллә ниҙәр барҙыр инде», тип шомлана. Миңәй батыр менән тәү башта ҡайтып килгәнендә Урал эсе уға шул тиклем тын, курҡыныс булып күренгәйне. Килә торғас, алдарынан бер мәл көмөштәй ҡара төлкө йүгереп үткәйне. Миңәй, мәргәнлеген күрһәтеп, ҡара төлкөнө шунда уҡ уғы менән атып йыға. Миңәй төлкөнөң тиреһен

һыпырып ҡына ала ла, ашанып-эсенергә туҡтаған ерҙә уны ағас ботағына элеп ҡуя. Төн ҡараңғылана. Минәй ҡара төлкө тиреһен алып һелкә, тиренән осҡондар сәсрәй. Минәй тирене Таңдысаның муйынына һала. Төн ҡараңғылығында уның бит-күҙҙәре яҡтырып китә.

Иртә менән тороп атлағанда Таңдыса хәҙер ҙә уткәнде иҫкә төшөрөп, ҡасандыр төшлөк башҡорттарына ташланған дошмандарҙы ҡыйратҡан Минәй хаҡында йырлай.

— Етмеш төрлө хәйлә белә икән
Һорғоло ҡарасай көмөш төлкөһө,
Батыр ирҙәр барҙа баҙнат итмәҫ
Хас дошмандың барыһы, көллөһө.
    Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
    Һәукәшкәйем, һәү-һәү-һәү...
Уралдың улдары күп,
Килгән яуға бирмәҫтәр,
Уралдың ҡамауы күп,
Ырғып аша инмәҫтәр;
Эй Уралым нығынһын,
Дошман аҫҡа йығылһын.
    Һәукәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
    Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү...

Сылтырап аҡҡан бер йылғаны сығып, ҡаршылағы тауҙың инкеүенән ҡыраз буйлап китә башлай. Аңғармаҫтан ғына алдынан илек күтәрелеп сабып күҙҙән юғала. Таңдыса бының һылыулығына, йылғырлығына аптырап ҡарап тора.

Бара торғас, Таңдысаның тоҡсайына тултырып алып сыҡҡан аҙығы бөтә. Асығып, берәй нәмә тура килһә, өҙөп-йолҡоп һоғонорҙай булып бара.

— Был аланлыҡ, типһән тултырып,
Япраҡ ябып үҫкән балтырған;
Аҙаштырмаҫ ерҙән аҙаштырҙы
Аҙаланған өс баш малғынам.
    Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
    Һәукәшкәйем, һәү-һәү-һәү!
Аҡрынлағыҙ, аҙмандар:
Арыттығыҙ һеҙ мине,
Йүгерә-атлай киләмен,
Аптыраттығыҙ һеҙ мине.
    Һәукәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
    Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!

Таңдыса балтырғандың япрағын, сығып ҡына килгән көпшәһен шыртылдата сәйнәп ашанып, тамаҡ ялғап ала.

Өйкөм-өйкөм үҫкән ҡайынлыҡтарҙы, һирәк-һаяҡ ҡарағаслыҡ, ваҡ бешәлектәрҙе үтеп, йыуан уҫаҡлыҡты, ҡарағай урманды әргәләп бара-бара, бер үҙәктең башына килеп сыға. Унда, боттарын



*Урал батыр буғаны*
*Мөгөҙөнән алған, ти.*
*Тырышҡан, ти, үгеҙ ҙә,*
*Тырмашҡан, ти, үгеҙ ҙә...*
*(«Урал батыр»)*

1/2 9 Заказ 423



*Урал юлға сыҡҡан, ти,*
*Йәншишмәгә барған, ти,*
*Һыуын һөҙөп алған, ти.*
*(«Урал батыр»)*



*Бына бер саҡ ел-дауыл ҡубып китмәһенме! Һәүбән алға аттай ҙа алмай башлаған. Егет түҙмәгән, артына әйҙәнеп... ҡараһа, ни күҙе мән күрһен, ер ҡаптаған мал сыҡҡан..., Аҡбуҙаттың күлдән саҡ (башы мән) муйыны ғына сығып килгән мәле икән.*



*Һәүбән ер ҡырҙап ҡына шыуышып барып ҡараһа, өйрәк түгел, ...алтын сәстәрен һалындырып, бер ҡыҙ (Нәркәс) сәс тарап ултыра, ...ти.*

*Заятүләк бер күреү менән ҡыҙға йәне-тәне менән ғашиҡ булып, ...шул шиғырҙы әйтте:*



*Ай тик күркле йөҙөңә,*
*Ғашиҡ булдым мин һиңә.*
*Көндәй күркәм йөҙөңә*
*Хайран булып ҡалырмын...*
*(«Заятүләк менән Һыуһылыу»)*



*Эй, бай улы, бай улы,*
*Төшөп киткел, бай улы!*
*Төшһәң, ҡымыҙ эсерһең.*
*Көңнәр һаумал һөҙөрҙәр,*
*Көңнәр ҡымыҙ бешерҙәр.*
*(«Аҡһаҡ ҡола»)*



*Ҡыҙ Ҡара юрғаны күреп ҡала ла: «Бер менеп, елеп киләйем әле»,— тип уйлай. Янына килеп, һөйөп кенә тотоп ала.*

*(«Ҡара юрға»)*



*Ҡуңыр буға Ирәндектән алып Көньяҡҡа табан Урал һыртынан юл ярып, бөтә малдарҙы кире алып ҡайтҡан, ти.*

*(«Ҡуңыр буға»)*

кирә баҫып, ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй рәхәтләнеп ҡолонсағын имеҙеп торған ҡоланды * күрә.

— Буйға буйсан, һылыулыҡҡа һылыу
Урал ғына тауҙың ҡоланы;
Атайсалдан килгән берсә малдың
Кире ҡайта торған йолаһы, —

тип үҙенең дә күңелен йыуата ла:

— Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү, —

тип сәңгел тауышы менән һауаны ярып һөрәнләп ебәрә.

Боҫтары күтәрелеп, тау һыртындағы ала-ҡола ҡар аҫтынан асылған ҡуңырланып ятҡан ерҙе йыуып, йылы ямғыр яуып үтә. Ер ҡабығы йыуылыу менән өр-яңы төҫ ала, битләүҙәрҙә йәмйәшел үлән. Әсәһенең: «Ләйсән ямғырына башыңды йыу, ауырымаҫһың», — тигән һүҙе иҫенә төшөп, арығанына, тәненең һыныҡҡанына ҡарамайынса, атлай бирә.

Таңдыса, тағы ла бик күп юл үтеп, тамам асыға башлай. Зыулашып осоп йөрөгән бал ҡорттарына осрай. Күтәрелеп ағасҡа ҡараһа, тумыртҡа тишегенән ҡорттар осоп сығып йөрөй. Ағасҡа үрелеп менә, бер ҡыуыраҡ ботаҡҡа тотонғанда, ботаҡ айырылып китә. Шул урындан юлаҡланып ергә бал ағып төшә. Солоҡтоң эсе тулы күптәнге аҙау бал булып сыға. Таңдыса туйғансы бал ашай.

Ҡая ташлы һырғый, эре ҡарағас урманын үтеп барғанда, Таңдыса өйрөлөп-өйрөлөп осоп йөрөгән бөркөттәрҙе күрә, уларҙың өҙөп-өҙөп, һауа ярып саңҡылдаған тауышын ишетә, шунан үҙенең дә күңеле ҡанатланып, йөрәгенә көс-ҡеүәт өҫтәлә.

Ата-әсәләрс Таңдысаға элекке замандарҙа Урал өсөн бик яман яуҙар булып үткәнен, баҫҡынсыларҙың ил эсенә үтеп инеп, халыҡты талап, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләп, мал-мөлкәтте тартып алып китеүҙәрен һөйләр булған. Ул, шуларҙы күңеленән үткәреп, урман араһында япмаланып, сатыр шикелле торған оло ҡарағайҙарға ҡарап, тәьҫирләнеп ултыра. Батырҙарҙың дошман менән ҡанға-ҡан килешеп, илеп-йортон һаҡлауын күҙ алдына килтерә. Йырлай, һамаҡлай:

— Йәйенке лә ботаҡ, һай, ҡарағай
Йәм бирәлер бейек тауҙарға;
Аямаған йәнен, биргән ҡанын,
Ҡаршы торған батыр яуҙарға.
　　Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
　　Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!
Батыр ҡылысын һаҡлаған
Ҡын һыйышы булалыр;

Ил намыҫын һаҡлаған
Ир-уҙаман булалыр;
Ирҙе яуға өндәгән
Илдә бер заң булалыр.
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү.

Әлһерәп, аяҡ-ҡулдары, бөтә ағзалары талыҡҡан булһа ла, Тандыса алға барыуында булды. Бер һөҙәк урҙе төшөү менән сылтырап ағып ятҡан һай ғына ташлы һыуҙы күрҙе. Таштан ташҡа һикергеләп, уны аша сыҡты. Бәләкәй генә урләскә менгәс, алдында әллә ҡайҙан күренеп күккә олғашып ятҡан күм-күк тауҙарҙы күрҙе. Күбә-күбә таштарҙың өҫтө-өҫтөнә ултыртылып бөткәненә ғәжәпләнеп барған көйөнсә, атаһының: «Урал батыр һәр илле, һәр йөҙ йылда таштарҙы өҫтө-өҫтөнә ултыртып бара», — тип һөйләгәне иҫенә төштө.

Артабан әштәле-әштәле * тауҙарҙы үтте, ҡашлаҡлы тауҙарға барып терәлеп, ҡаянан таштарҙың янмаланып-янмаланып торған урындарынан үтте. Был ерҙә Урал батырҙың яусылары ҡойма яуында ышыҡланған урындыр, олатайҙар шулай һөйләй торғайны, тип үҙ алдына һығымта яһаны Тандыса. Унан һуң бейек-бейек, урле-ҡырлы ятҡан тау ҡыһаландары буйлап йөрөй торғас, әллә ни хәтлем ерҙән тауҙар менән уратып алынған, ян-яғы ҡамаулы тигеҙ урынға барып сыҡты. «Яусыларҙың ял итеп ятыр ышығылыр» тигән фекергә килде. Имгәкләп күтәрелеп, тағы тауҙан төштө. Түшәм-түшәм таштарҙың текә ерҙә бер-береһенә һөйәлешеп ултырған аралыҡтарынан ҡыҫыла-ҡыҫыла барып, таҙа һыулы шишмәне үтеп, еләк-емеш юҡмы икән, тип түбәгә күтәрелде. Арғы яҡ ауын ҡыһында * тағы ла һерәйешеп ултырған оҙон-оҙон таштарға, әллә ҡайҙан күренеп ятҡан тум-тум урындарға, таш өйөмдәренә тап булды. «Олатай-өләсәйҙәремдең ҡәбереме икән был? Ап-аҡ ҡына аҡ ҡауландар — сәселеп үҫкән сәстәреме икән?» — тип уйланып барҙы. Ҡауланлыҡтар төбөндә сырылдашҡан буҙ турғайҙарға, ҡалҡып торған яҫы таштарға ҡарап, бара-бара, атаһынан отоп алған ҡобайырҙы әйтемләргә тотондо:

— Уралына артылып,
Теҙәкләнеп, тартылып,
Ергә терәп аяғын,
Тау-ҡаяға таянып;
Ужарланып дошманға,
Аҡбуҙында елдереп,
Сантарында сабышып,
Йән аямай алышып,
Яу ҡыуып, һөрән һалып,
Болот һымаҡ ҡуҙғалып,
Ҡулындағы ҡылысын
Ян-яғына һелтәнгән,
Дошманына уҡталған.

Тас айыуҙай алышып,
Ҡемуҙарҙан сабышып:
Ҡыу ҙа ҡыу тип ҡеүәтләп *,
Килгән яуҙы дөмбәҫләп,
Алҡымлашып, алышып,
Ҡарыуын һыпап ярышып,
Самытлапып көс алып,
Өҙә тотҡан билепән,
Ҡәрен алған ҡулынан;
Унарын унарлап әйләгән.
Йөҙәрен йөҙәрләп әйләгән.

Эй батыр ир, батыр ир,
Яу ҡайтарған батыр ир,
Һуғышҡанһың йәнтәстем.
Илгә сыҡҡан даныңды
Иҫемә алып, мин әйттем,
Мин әйттем, ау, мин әйттем.

Ҡан ҡойған ул, йән биргән,
Үңгәмләшеп, алышып,
Дошмандарын ҡамалап,
Ҡыҫырыҡлап ҡырған ул;
Ҡаялай күкрәк киреп,
Тауҙай ҡалҡып торған ул.

Хас дошманды баҫтырып,
Килгән юлын таптырып,
Илдән ҡыуып сығарған;
Ертыштан * да уҙғарған,
Уҙғарып, ау, уҙғарған.

Таңдыса, һирәк-һаяҡ ағаслы тигеҙлектән килә-килә, тау ҡуйынына инә. Тәпәш-тәпәш тауҙарҙы үтә биргәс, өҫкә күтәрелә, сусаҡ ташлыҡ араларына, ҡымыҙлыҡлы урындарға килеп сыға. Йәш сағында ул атҡа атланып, ҡыҙҙар менән ҡымыҙлыҡты бәйләм-бәйләм алып ҡайтыр ине. Аҫау бүртә юрғаһы бер көндө, баш бирмәй ярһып, тулап, Таңдысаны алып ҡасҡайны. Бүртә юрға, ер бауырлап осҡан ҡош шикелле, артында саң-томан уйнатып, ялпандарҙа, ингкеүҙәрҙә елдереп йөрөй-йөрөй торғас, тыны ҡурылып, бышлығын килеп туҡтай. Таңдысаның бәйләм-бәйләм ҡымыҙлыҡтары төшөп ҡалған була. Ҡымыҙлыҡһыҙ ҡайтһам, оят була тип, атын һағаҡ ботаҡҡа теҙгененән тартып бәйләй ҙә йүгереп йөрөп ҡымыҙлыҡ йыйып ала. Шунан бүртә юрғаға һикереп менеп, иптәш ҡыҙҙары артынан юрғалата.

Таңдысаның атаһы Өлкәр ҡарттың, уның ырыуҙаштарының йәйләү ерҙәрендә ҡыҙҙар уйнай торған бик бейек текә таш булыр ине. Әле барғанында Таңдысаға шуға оҡшаш бер ҡая күгәреп күренде. Иптәш ҡыҙҙары, еңгәләре менән уйнағандары, таш-

тың аҫтында күрәгә һыпырып, туҫтаҡ, алдыр сайҡап ҡымыҙ эсеп уйнап-көлөшкәндәре күҙ алдына килде.

Тандыса, арып, арманһыҙ булып талыҡты, аяҡтары һыҙлап, быуындары ҡаҡшаны. Ямғыр күҙе төшөп, бер аҙҙан һибәләргә тотондо. Алыҫтараҡ ҡап-ҡара болоттар өйөрөлөшә. Йәшен йәшнәп, ер һиңкетеп күк күкрәй. Таңдысаның ҡарағас урманына инеүе булды, шаулап ҡойма ямғыр яуып ебәрҙе. Ялағай ялт та йолт килеп, даҫыр-доҫор күк күкрәп, шуның ыңғайына йәшен уттары ишелеп, йомарланып, Таңдысаның аяҡ араларынан да, ҡултыҡ аҫтынан да үтеп сыға башланы. Ян-яҡҡа йүгерҙе, ут уны баҫтырҙы, ҡыуаланы. Йәшен уттарының уйнауы, күктең күкрәүе ҡотороп көсәйҙе. Ҡарағастарҙы сарпып, ярғыслап, өҙгөсләп, сатып-сатҡа айырып, арҡыс та торҡос йығып бөттө. Ҡурҡынған Таңдыса шунда бер ҡалпаҡ ташты күреп ҡалып, шуға барып һыйынып, күҙен сырт йомоуы булды, йәшнәү ҙә, күкрәү ҙә көсһөҙләнә төштө. Ямғыр туҡтаны, йәшнәү ҙә бөттө, урман эсе, тирә-яҡ тып-тыныс булып ҡалды. Таңдыса иркен һулап, күҙ алдары яҡтырып китте. Ниндәй генә ҡурҡыныслыҡтарға тарыһаң да, Урал ҡуйынында һыйыныр урын табаһың, тип һөйөнөп, ғорурланып, барған юлы менән атлауында булды.

Эңер төшөү менән, Таңдыса йоҡларға йәтеш урын ҡарай башланы. Бер яғы һөҙәк, ҡаршы яғы текә ҡаяға менеп, һикәлтә генә мүкле ташҡа йоҡларға ятты. Айыу-фәлән килһә, ҡасырға уңай урын да ҡараштырҙы. Ятҡан ерендә гене ҡая аҫтына янтайған бер ҡарағай күрҙе. Ысынлап та, Таңдысаны таң алдынан эҙләнеп йөрөгән айыу килеп баҫты. Тандыса баяғы ятыҡ ҡарағайға үрләп менә башланы. Айыу ҙа артынан үрмәләне. Ағас, ауырлыҡты күтәрә алмай, тороҡ ҡарағайға эләгә-эләгә, гөрһөлдәп барып төштө. Таңдыса, тороҡ ҡарағайҙың ботағына тотоноп, сатағына ултырып ҡотолоп ҡалды. Айыу, бахырың, ағас менән бергә ергә тәкмәсләне, ыңрана-ыңрана, артына әйләнеп ҡарай-ҡарай күҙҙән юғалды. Таңдыса тағы ла татлы йоҡоға талды. Тау ашаһынан ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояштың йылы нуры уның йөҙөн иркәләп уятты. Ҡояш сығыу менән юлсы үҙенең юлында булды. Буҙәнәләр ҡымйышҡан түбәлә ҡыҙарып бешкән еләк менән туйынып, тирсп алғанын да ҡаба-ҡаба килде. Ҡыҙҙар, егеттәр менән бергә «Буҙәнә» уйынын уйнап бейешкәндәре иҫенә төшөп:

— Ҡыйғырымды сөйҙөрмәм,
Буҙәнәләр типтермәм;
Алырмын да ҡасырмын,
Мине оҙаҡ көттөрһәң, —

тип уйында ҡыҙҙың егеткә йырлаған йырын ҡабатланы. Тау ҡыһаландарын, һыртлас үнерҙәрҙе аша төшөп атлай-атлай таҙа һалҡын һыулы йылғаларҙы үтте. Был йылғалар, оло һыуға ҡушылып, ҡайҙарға ғына аға икән, ошо һыуҙар һымаҡ аҡһам, мин дә илемә тиҙерәк барып етер инем, тип тәрән уйға төштө. Бар-

ған юлынан яҡын үк бөгөлөп-бөгөлөп аҡҡан ҙур ғына йылға күҙенә салынды.

— Анау ятҡан йылға — Йылайыр[152] ул,
Ҡайраҡ өсөн ташын алырмын;
Һау-сәләмәт етһәм үҙ иләмә,
Ғүмерлеккә шатлыҡ табырмын.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәү-һәү-һәү, зәп-зәү-зәү!

Таңдысаның атаһы Өлкәр ун ике йәштән алып утыҙ йәшкә хәтле гел ятлап һабаҡ алған, Таһранда[153] табиблыҡҡа* уҡып ҡайтҡан ғилемле кеше, Уралдағы төрлө үләндәрҙән дауа эшләп, малыҡты дауалап, ауырыуҙарынан йүнәлтер, һауыҡтырыр ине. Таһран шағирҙары менән ултырҙаш булып, шиғриәткә әүәҫ, сәсән дә ине. Таңдыса: «Барып етһәм, ярылған табанымды, һыҙырылған балтыр, йөҙлөктәремде атайым дарыулар, ярама яра япрағы һалып, йөнтәҫ япраҡтың[154] ҡыҙыл көрән һутын һығып алып дауалар әле», — тип уйлай. Был хаҡта ла ул йыр теҙә:

Ирәүән барҙа, ир үлмәҫ,
Андыҙ барҙа, ат үлмәҫ,
Һыҙланыуҙан бер дауа —
Ҡымырҫҡаның майы,
Сиренә күрә табылып тора
Бер әмәле, бер яйы.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!

Электән үк суйыр-саҡма үткер таштарға, селек, түбылғы ағастарына һыҙырылып-ҡырҡылып, ярылып-тумырылып килгән аяҡ яралары тынғы бирмәй һыҙлай. Һыҙланыуҙарын нисек баҫайым тип килгәндә, ҡаҙандай ҙа күбәләй ҡымырҫҡа иләүҙәренең береһенән ҡымырҫҡа майын тапты. Шуның менән аяғын ыуып, һеңдергәнсә майланы. Ауыртыныуҙары бөтөп, һыҙланыуҙары баҫылып, аяғы йүнәлгәндәй итте. Ял алғандай булды, сапсан баҫып атлап китте.

Шулай бара торғас, ул бер оҙон асыҡлыҡ осона килеп текәлде. Һул яғы тәрән үҙәк, уң яғы ҡырлас оҙон тау менән ҡамалғайны. Таңдыса, ошо асыҡлыҡ буйлап тәнәшәк кенә урләстәрҙең береһенә менеп, икенсеһенән, өсөнсөһөнән төшөп, ҡап уртаһына тигәндәй килеп етте. Ултырып ял алайыммы тип ҡаранып торғанда, яҡында тирмә кеүек түнәрәкләнеп торған берҙән-бер ҡайын күрҙе лә, шул ҡайын янына барҙы. Был тау түбәһендәге асыҡлыҡ уртаһында ялбырҙап үҫкән ҡарт ҡайын булып, төбөндә бер генә бөртөк гөлсәсәк үҫеп ултыра ине. Таңдыса, ҡайын төбөнә ултырып, сәскәнең һабағынан тотоп үҙенә борҙо. был сәскә лә минең кеүек аҙашып килеп сыҡтымы икән, тип ғәжәпһенде. Гөл сәскәһе, әлберҙәгенән асыла-асыла ҙурайып. кейеҙ ҡалпаҡтай булды, тажы

күҙҙе ҡамаштырып балҡып китте, нөҙек кенә бала тауышы менән сәскә телгә килде, ти:

— Юлың алыҫ, беләмен,
Талыҡҡанһың, күрәмен;
Бер аҙ туҡтап китһәңсе,
Әҙерәк ялдар итһәңсе,
Илдең батыр ҡыҙы һин,
Илдең матур ҡыҙы һин.

Йөрәк-бауырҙы өҙгөләрлек, тән тамырҙарын тетрәтерлек ҡурай тауышы ишетелде. Ул көйлө тауыш та, йыр ҙа, моң да ялбыр ҡайын сатаһынан сыға, ти. Шул моңға ҡушылып, ҡаршылағы арҡа яғынан ер һелкетеп баҫҡан тояҡ тауышы, Урал өҫтөндә алыҫ-алыҫтарға бығаса ишетелмәгән бер ауаз таралды, ти:

— Балҡып ҡына ятҡан был тауҙар,
Ҡалҡып ҡына ятҡан был тауҙар —
Ырыуымдың ул бит төйәге,
Ил-йортомдоң ул бит терәге.

Тауыш яңғырауына әйләнеп ҡараһа, ҡаршылағы арҡа өҫтөнән аҡбуҙатҡа атланған, ҡулына ҡылыс тотҡан, буй-һыны болоттан ашҡан батырҙың Урал тауға табан барыуын күрә. Урал батырҙың рухылыр был. Уның йәнс үлемһеҙ, ул хәҙер ҙә дошман Уралға аяҡ баҫмаһын, халҡымды таламаһын, тарҡатмаһын тип ҡурғап, һағауыллап йөрөй тиҙәр ине, раҫ икән, тип, ата-олаталарының һөйләүҙәрен хәтерләп, батыр һынын күҙҙән юғалғансы ҡарап, оҙатып ҡала.

Тағы ла күп кенә ер китеп, эре ҡайынлыҡ, һирәк-һаяҡ йыуан япалдаш ҡарағай-уҫаҡ ағастары аралаш үҫкән урманды аша үткәс, Таңдыса тау битләүендә һерәйешеп торған таштарҙы, ап-аҡ ҡаулан үләндәрҙе күреп, был урындың боронғо ҡәберлек икәнен аңланы. Зыяратта, ҡәберлек араһында йоҡлаһаң, бер ни ҙә булмай, тип ололарҙың һөйләгәнен хәтерләп алды. Шуға ла алдағы төндө ошонда йоҡлап үткәрмәксе булды.

Таңғы йоҡоһонда төшөндә ата-әсәһен күреп ҡыуанды, күңеле асылып, күтәрелеп китте. Урынынан тороп, һыныҡҡан тәндәрен бер аҙ хәрәкәткә килтереп алды ла алдындағы юлына күҙ һалды.

Минәй менән Таңдыса, Өлкәр ҡарт менән Таңдысаның әсәһе Өһәбикә әбей биргән быуаҙ тананы етәкләп, кейәү йортона ҡайтҡанда бер талай ер килгәс, был яҡтағы ҡомло асыҡ ялан ерҙең тәү тапҡыр әлгәнйәге менән ялманы күренгәйне. Таңдыса ул саҡта ҡараштары менән Минәйенә һыйынып, тыуған Уралы, уның батырҙары тураһында ошо тәүге йырын сығарғайны:

«Береһе үрҙә, береһе ерҙә уйнай,
Әлгәнйәге менән ялманы;
Үҙен түгел, күләткәһен күреп,
Дошман тигән берәү ҡалманы».

Алдында торған Ҡуңыр буғаһының янбашынан һөйә-һөйә:

— Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү, —

тип тәүге саҡырыу, иркәләү һүҙен әйткәйне. Ян-яғына ҡараш ташлап, ошолай һамаҡлағайны:

«Тыныс булыр тыуған йорт,
Батыр ирҙәр бар саҡта,
Дошман ҡабат яу һалмаç,
Айбарлы ирҙәр бар саҡта.
Эй Минәйем, батыр ир,
Илен ҡурғап ятыр ир, ау,
Йортон ҡурғап ятыр ир»...

Таңдыса текә ҡая таштарҙы, ҡыраҙдарҙы, үцер һырттарҙы, типһән аҡланлыҡтарҙы, кәбәндәй, яçмарҙай * ташлы урындарҙы, соҡор-саҡырлы, уйҡыл-уйҡыл асыҡтарҙы, төбәк-төпкөлдәрҙе үтте. Һинде Уралдың ташлы, ҡыралы ҡаялары бөтөп, һирәкләп көмәс-көмәс ослайышҡан тауҙар күренә башланы. Вағыраҡ уçаҡ, имән, йүкә, йыла, сағап ағаслы урмандар араһына килеп инде. «Урал тауҙың ҡап уртаһын үтеүемә күп булды шикелле, инде осона сыҡмайыммы икән?» тип уйланды.

Урман аша үтеп бара биргәс, Таңдыса эреле-ваҡлы күләүекле урынға килеп сыға, арыраҡ омболло-омболло * булып аҡҡан бер йылға күрә. Бында төрлө-төрлө ҡоштарҙың зыулашҡаны, ҡысҡы-рышҡаны, һайрашҡаны, сыр-сыу килгәне ишетелә. Сарлайын ҡош-тоң һарыҡ тәкәһендәй баҡырғаны ла, тәгәрлектең «тәгәрҙек, тә-гәрҙек» тип ҡыйҡылдағаны ла, ҡыҙғатауҙарҙың ҡысҡырыуы ла, көйөлдөләрҙең көй һыҙып көйөлдәп һыҙғырып ебәреүҙәре, тартай-ҙарҙың тартылдауы ла — барсаһы бергә ҡушылып, яңғырап тора.

Ҡилә-килә, кескәй генә йылғаны сыҡты. Тауҙың ташлы мо-ронон уранҡырап барып, текәһенән тырышып-тырмашып өçкә күтәрелеп тә етте, юл эсендә кукъял бүрәнең ауыҙын, һыртын кө-ҙәрәйтеп ултырыуына тап булды. Ҡапыл ҡурҡа төштө. Алдындағы суҡмарлы ҡарағас ботағын айырып алып, икенсе ҡулына шыма ғына ҡарағай ботағын тотоп, йыртҡысҡа ҡаршы атланы. Бүре-нең ыржайып ташланыуы булды, ботаҡтың шымаһын унын ауы-ҙына һондо. Ҡарағас ботағы менән томшоғона ҡундырҙы. Бүре тау егенә ҡасып юғалды.

Таңдыса, оҙон юлдарҙы үтеп, интегеп-ыҙаланып килә торғас, был яҡтағы тауҙарҙы, ер-һыуҙы ата йорто яғындағыға оҡшата бирҙе. Күңеле күтәрелеп, йырлай-йырлай бара торғас, уйламаç-тан малдарының юлын юғалтты. Ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла эҙлә-неп йөрөп ҡараны, таба алманы. Алда эгел-бөгөлләнеп аҡҡан бәләкәй ятыулы йылғаның яр аçтына төшөп, уның бөгөлөндә йоҡ-ламаҡ булды. Теге яҡта, тау-таш араһында йоҡлап килгән Таң-дыса йылға буйын уҙһенмәйерәк ҡарап торҙо. Ҡояш байыуға йыл-

ғаның ятыуҙарына барып, ҡымйышып йөрөгән бәрҙе, бағыр балыҡтарын ситтән генә һөҙөп алып, ут яғып өтөп ашаны.

Бар булған тауышы менән һөрәнләп, ике быҙауын эйәртеп ҡасҡан Ҡуңыр буғаһын өс көн буйы ыҙаланып эҙләп йөрөнө. Ҡистәрен гел ошо урынға килеп төнгө ялын алды. Өс көндән һуң, иртә менән торғанда, алдындағы ағасҡа бер ала ҡарға килеп ултырҙы ла ҡарҡылдай башланы. Һайыҫҡандар йыйылып шыҡырҙашты. Һайыҫҡандар килгәс, былар изге ҡош, арыу хәбәр алып килгәндәрҙер тип уйлап, күңелен тынысландырҙы.

Дүртенсе көндөң иртәһендә Таңдыса төшлөккә ҡарап самалап атларға булды. Ул арала бер күләүеккә осрап, шунан пырлашып һуна өйрәктәре осоп китте.

«Һунарсы ла егет атып ала
Күләүек тә күлдең һунаһын;
Бер күрҙеме кеше, күрә икән
Был донъяның ыҙа-нужаһын», —

тип тауышын алыҫ ебәреп йырланы. Алдағы кескенә йылғаның кисеүен сыҡҡанда, ҡарағас олононда өйкәнгән малдарының эләгеп ҡалған йөндәрен күреп ҡыуанды. Шул юл менән унға ҡайырылды.

«Аҡ сәскә лә менән, ай, миләүшә
Бер-береһе менән серләшә;
Үҙем әллә ҡайҙа йөрөһәм дә,
Күңелем һеҙҙең менән һөйләшә».

Йыр тауышы урман эсен яңғыратты, тау-таштарҙы шаңғыратты ла ҡаҡлығып үҙенә килде. Ошо тауышты һырт аша малдары ла ишетеп ҡалып, эйәһе яғына ҡарай әйләнеп саптылар. Ике быҙауын эйәртеп, Ҡуңыр буғаһы килеп етте, ти. Таңдыса уларҙы ҡосаҡлап һөйҙө, малдары йәнә алға ҡарай ҡыҙыу ғына атлап китте. Таңдыса арттарынан төшөп алды, ти.

Малдары, алдан уҡ барып, бер иҫке генә тирмә янында тора ине. Таңдыса шунда барҙы. Бик ҡартайған, ергә сүгеп бөткән бер әбей килеп сыҡты. Таңдыса, әбейҙең маңлай уртаһындағы миңен күреп, әсәһен таныр-танымаҫ аптырап ҡарап торҙо. Тирмәнән йөҙйәшәр ҡарт килеп сыҡты. Таңдыса атаһының да төҫөн сырамытты ла үҙен ата-әсәһенә танытты.

— Ысынмы был, бушмы?! — тип үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмайынса, ҡарт менән ҡарсыҡ ҡыҙҙарының ҡулдарынан тотоп, текләп-текләп ҡаранылар, ти.

Таңдыса, ата-әсәһен ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫып:

— Килсе, килсе, әсәйем,
Аптырама, атайым,
Күҙ туйғансы ҡарайым,
Бик һағындым, күрәйем,
Күҙ йәшемде түгәйем.

Күргем килеп һарғайҙым,
Илай-һыҡтай ҡартайҙым,
Эсәһе һыу, ашар-ашым
Ошо илемдә ҡалғандыр.
Күп булмабыҙ беҙ бында:
Унда ҡалды ун балам;
Уныһы ла матурҙар,
Атаһындай батырҙар, —

тип һамаҡланы, ти.

Таңдысаны шатланып ҡаршы алалар. Ата-әсәһе һый-хөрмәт күрһәтергә тырыша. Ашап-эсеп, бер аҙ тынысланып алғас, ҡыҙҙары:

— Тулы күңелем бушанды,
Малдарым да юшанды, —

ти.

Аҙналар буйы ҡайҙан-ҡайҙа оҙон, ауыр юл үткән ҡыҙҙарының арып-талып, ҡаҡ һөйәккә ҡалып йонсоғанын күреп, Өһәбикә ҡарсыҡ:

— Балам, арығанһың, ят тубығыма, — тип күпсек * һала. — Ят алдыма! — тип иҙем итә. Атаһы Өлкәр ҡарт ярылып-ҡырҡылып бөткән аяҡтарына һарыҡтың оса майын һөртөргә тотона. Таңдыса татлы йоҡоға тала. Әсәһенең бер генә бөртөк йылы йәше тама. Был йәш ата менән әсәнең тәүләп ҡауышҡандағы йәше була. Унан һуң ике күҙенән ике бөртөк эҫе йәше тама. Быныһы әсә менән ҡыҙҙың айырылышыу аралығындағы күҙ йәше була. Ул яндыра төшә, Таңдыса һиҫкәнеп уяна. Ата-әсәһен күреп, шат йылмая ла әсәһе алдына ҡабат ятып, ҡаты йоҡоға китә.

Ике көн, бер төн йоҡлағас, уяна. Уның хөрмәтенә һый-хөрмәт, уйын-көлкө ойошторола. Һеҙ ҙә ҡәҙерле ҡунаҡһығыҙ, тип малдарына тоҙ ялаталар.

Ырыу башлығы үҙе Таңдысаға алдыр тултырып ҡымыҙ һуҙа.

— Әсәң һөтө урынына эс, ҡыҙым, — ти. Таңдыса, алдырҙы ҡулына алып, сайҡап-сайҡап:

— Иртән иртүк тороп юлланырбыҙ,
Айыра баҫып тауҙың бейеген,
Ҡуңыр буға менән быҙауҙарға
Хәүеф һалмаҫ Урал кейеге, —

тип йырлап ебәрә. Халыҡ алдында тыуған илен, ата-әсәһен үлгәнсе онотмаҫҡа ант итә. Ашап-эсеп, күңел асып, һөйгән ҡыҙҙарының тыуған йортона ҡайтыуын байрам итәләр. Таңдыса иләҫләнеп ошо йырҙы йырлай:

— Ашағыҙ ҙа, дуҫтар, эсегеҙ,
Ашап-эсеү менән мал бөтмәй;

Тәҡдирҙәрең етеп, ризыҡ бөтһә,
Ҡауырһындан тамған һыу ҙа үтмәй.

Иртәгеһен халыҡ йыйылып оҙата сыға. Ырыу ололары аманат һүҙҙәрен, ата-әсәһе васыятын әйтә.

Ырыуҙың иң өлкән әбейе Тандысаның үҙенә, ата-әсәһенә ҡарап ошолай һамаҡлай:

— Тыуған илен онотмаған
Өлөшлө мал — ошо тана икән;
Йөрәгенде өҙгән, һары ултыртҡан —
Күкрәгеңә һыйған бала икән.
Туғыҙ айын үткәреп,
Тулғаҡ ауырын күтәреп,
Күкрәк һөтөн имеҙеп,
Күҙ ҡарам тип өҙөлөп,
Йәнен дә бүлеп биргән —
Әсә икәнен белегеҙ,
Белегеҙ, ау, белегеҙ.

Ә с ә һ е:

— Йөрәк итем, балам, күҙ нурым,
Күрә алмаһам ҡабат, хуш инде;
Онотолған ерҙән бер күрешеп,
Айырылышыу көнө ошо инде.

Ҡуңыр буғам өлөшлө,
Хәлде килен белеште.
Тандыса ҡыҙым, күҙ нурым,
Иркә үҫкән былбылым,
Һөйөндөрҙөң әсәңде,
Шатландырҙың атаңды;
Ҡуңыр буға, һәү-һәү-һәү!
Һәүкәшкәйҙәр, һәү-һәү-һәү!

А т а һ ы:

— Күп йортҡа төҫ, ҡот булған икән
Бүләк итеп биргән һыйырым;
Айырса ла тояҡ, шеш мөгөҙлө
Ыуаҡ малдар бирәм был юлы.
Ҡуңыр буғам, малдарым,
Унда кейәү, балдарым *,
Сапсан баҫып, ыңғайлап,
Тауҙан тура юл һайлап,
Теүәл ҡайтып етегеҙ,
Беҙҙән сәләм илтегеҙ!

Ырыу башлығы һамаҡлап ошоларҙы әйткән:

— Ырыуҙағы ололарҙан
Ҡейәүебеҙгә һауыт * бир;
Улдарыңдың үҙе-үҙенә
Беҙҙән орлоҡ, кәтмән бир;
Ҡыҙҙарыңдың һәр бегенә
Һарауыс менән йөҙөк бир!
Кеше түгел, малҡай ҙа,
Быҙауҙарын эйәртеп,
Ҡыл муйынсаҡ һөйрәтеп,
Тыуған ерем тип килгән, —
Белгәндәргә — белектер,
Белмәгәнгә — көҙөктөр.
Ҡуңыр буға, малдарым,
Килегеҙ, кил яныма;
Ырыҫ-байлыҡ бәйләйбеҙ *
Быҙауҡайҙың муйынына.
Ҡусҡар мөгөҙлө тәкәңә
Тул төйөмө эләбеҙ*;
Ҡуш мөгөҙлө һарығыңа
Бөтмәҫ тоҡом теләйбеҙ.
Ҡәзәң менән тәкәңдең
Йөнө, дебете күп булһын,
Үрсеп китеп, күбәйеп,
Тау-таш ҡуйыны тулһын.
Ҡабырғаһын тәкәңдең
Кертелдәк май ҡаплаһын,
Унда-һанда һуғылып,
Зыян булып ятмаһын;
Илең-көнөң туҡ булһын,
Малың ырыҫ, ҡот булһын.

Иң аҙаҡтан ҡыҙ сағындағы серҙәш еңгәһе, Таңдысаның ағаһы һун төрөктәренә ҡаршы һуғышта үлгәндән һуң тол ҡалып, донъя хәсрәттәрен күреп йәшәгән Гөлһылыу ҡарсыҡ, таяғына таянып, хушлашыу йырын йырлаған, ти:

— Тау яғалап ағып ята икән
Һаҡмар ҙа ғына тигән ағын һыу;
Бер иҫтәлек итеп мин йырлайым,
Был көйөмдө отоп алырһың.

Таңдыса яуап итеп:

— Мөһаҡ [155] ҡына һыуы тәрән түгел,
Тәрәнлеге минең билемдән;
Бизкелдәп тә осҡан бөҙгәләктәй,
Сығып ҡына киттем илемдән.

Ата йортона бүләк-ҡот булһын тип, Таңдыса Ҡуңыр буға менән килгән күк үгеҙ быҙауҙы ҡалдыра. Быҙауҙы мал күрке[156] өсөн суҡлап, Таңдысаға имен-аман юл теләп ҡалалар.

Юлға сығып дүрт-биш тау һыртын аша үткәс, үләнгә бай ергә туҡтап малын ашатып, йылғанан һыу эсереп, аҙ ғына ял алып, инде ҡуҙғалайым тип торһа, ун ике һыбай ҡыҙҙар менән егеттәр килеп етеп, уның алдына баҫалар:

— Таңдыса инәй, әсәйегеҙ үлеп ҡалды, ерләп китегеҙ. — тиҙәр.

Таңдыса, биргән бәхеттәре, ҡоттары ятып ҡалыр, күргән ҡайғыларым, ыҙаларым артымдан эйәрер тип, ата йортонан сыҡҡаны бирле артына әйләнеп ҡарамай ине[157]. Әле лә артына әйләнмәйенсә, алға ҡарап:

— Балаларым, тыңлап тороғоҙ, отоп алын, түкмәй-сәсмәй ҡайтып тапшырығыҙ, — ти. — Әсәйемде ошо юлдың ситенә килтереп ерләһендәр. Ғүмер-ғүмергә уҙған-барған кеше күреп иҫкә алыр.

Өһәбикә ҡарсыҡты юл ситенә килтереп күмәләр. Таңдыса, әсә тупрағы менән хушлашып, малдарын эйәртеп, ары китә. Халыҡ уны оҙатып бер аҙ килгәс тә, Таңдыса олата-бабаларының зыяратына борола. Килгән халыҡ таралышып ултыра. Таңдыса, борондан ҡалған йола буйынса, олатайҙар тупрағы менән хушлаша.

Таңдыса, килгән юлына төшөп, шул юл менән Урал өҫтөнән бик күп көндәр буйы барҙы ла барҙы. Аҙналар, айҙар үтте, ти. Бара торғас, алыҫта Иҙел башы Ирәмәл күгәреп күренә башлай.

— Беҙ ултырған ерҙән күренеп ятҡан
Иҙел башы — Ирәмәл тау икән;
Беҙ киткәндә бары ла теүәл ине,
Илгенәйем имен, һаумы икән?
Беҙ китеүгә күп кенә,
Йөрәккәйем елкенә,
Күкрәк-эсем тулҡынды,
Арып-өҙөлөп йолҡондом:
Ҡуңыр буға, быҙауым,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!
Эйәрегеҙ артымдан,
Инде китмәҫ йортомдан.

Урал өҫтөнән килә торғас, бейек-бейек, әллә ҡайҙан күренеп ятҡан һырттарҙы үттеләр. Иң бейегенең өҫтөнә күтәрелеп, бер аҙ ял итеп алғас, былай ти:

— Теҙмә тауҙар, билән, ҡыр, арҡалар —
Был Уралҡай тауҙың күрке икән:
Тарбаҡ-тарбаҡ үҫкән ағастары —
Ҡабарып та торған бүрке икән.
Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү!
Тарғыл танам, һәү-һәү-һәү!

Ҡуҙғалығыҙ, малдарым,
Тамағығыҙ ялғанды,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
Эйәрегеҙ, ҡалмағыҙ.
Ҡәзәкәйем, кәз-гәз-гәз!
Бәрәнкәйҙәр, бәр-бәр-бәр!
Үҙебеҙгә етәбеҙ,
Ҡыуаныстар күтәбеҙ.

Байтаҡ ҡына юл үттеләр. Оло Уралдың өҫтөнән көн тыуыһында, ҡояш байышында эре-эре тауҙар күренә.

Анау ятҡан Алатауҙы[158],
Күҙегеҙ етһә, ҡарап күрегеҙ,
Ана теге бейек — Ирәмәл ул,
Беҙ эргәләп үттек, белегеҙ.
Ҡуңыр буғам, малдарым,
Туйғанынса ҡарағыҙ,
Таныш-белеш алығыҙ,
Хәтерегеҙгә һалығыҙ:
Әле байтаҡ барырбыҙ.
Ҡурташ[159] ҡалды ундараҡ,
Рәз[160], Ҡағыташ[161] — ҡырҙараҡ,
Ҡырҡты, Ирәндек — көнләктә,
Сахра-сусаҡ — төнләктә.
Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Күп ҡыҫҡарттыҡ юлдарҙы.
Ҡуңыр буғам, һәүкәшкәйем,
Һәү-һәү-һәү!
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү!
Ҡәзәкәйҙәр, кәз-гәз-гәз!
Бәрәнкәйҙәр, бәр-бәр-бәр!

Таңдыса Тимерғаҙыҡ, Һарат[162], Буҙат[163], Етегән, Өлкәр, Арҡысаҡ-Торҡосаҡ йондоҙҙарына ҡарап, үҙенең ҡайһы яҡҡа барғанын, ҡайһы ташҡа еткәнен үлсәп белеп ҡайтты.

Минәй ҡарт менән бала-сағалары малдарын эйәртеп ҡайтып килгән Таңдысаны һағынып ҡаршы алалар. Таңдысаның иҫәпһау ҡайтыу хөрмәтенә оло туй ҡылалар.

Башҡорт иленең төньяғынан төшлөк яғына иисе мал ҡасып ҡайтҡан юл «Ҡуңыр буға» юлы аталып ҡала. Шул замандан бирле ҡуңыр мал изге мал булып, ҡуңыр төҫ изге төҫ һаналып ҡалған, ти.

## ҠУҢЫР БУҒА

*(вариант)*

Элекке заманда булған бер батыр. Уның исеме Ирәндек булған. Был Ирәндек һунарға йөрөп дан алған. Даны бөтә тирә-яҡҡа таралған.

Бер саҡ был Ирәндек үҙенә кәләш эҙләп сығып китә. Китә-китә был, Һаҡмар буйҙарына килеп сыға. Шунда бер йәйләүгә тап булып, Ҡолансәс тигән ҡыҙҙы алып ҡайта.

Былар бик яҡшы тора башлайҙар. Ирәндек һунарға йөрөй, Ҡолансәс һыйыр һауа, мал ҡарай.

Берҙән-бер көндө быларҙың малдары сығып китә. Ул мал Ҡолансәс артынан килгән инсе мал була. Иртән тороп ҡараһалар — мал юҡ. Юҡ та юҡ!

— Ете үгеҙ бер киткән,
Ҡәкере мөгөҙ бер киткән,
Һигеҙ һыйыр бер киткән,
Һимеҙ һыйыр бер киткән,
Туғыҙ тана бер киткән,
Яңғыҙ буға бер киткән,
Ун быҙауым бер киткән,
Ҡуй-һарығым бер киткән.
Ун бер һарыҡ бер киткән,
Тояғы ярыҡ бер киткән,
Ун ике тыуса бер киткән,
Һимеҙ оса бер киткән;
Аяғымды талдырып,
Төн йоҡомдо ҡалдырып,
Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Эҙләп киттем шуларҙы.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Һәү, һәү, һәү, һәү!

Ҡолансәс малдары артынан китә, Урал һыртына сыға. Сыҡһа, бында эҙҙәр күренә:

— Тауҙа ҡуян эҙе бар,
Тауҙа төлкө эҙе бар,
Тауҙа айыу эҙе бар,
Тауҙа бүре эҙе бар.
Ҡуңыр буғам, һин ҡайҙа?
Нишләп эҙең юҡ тауҙа?
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Һәү, һәү, һәү, һәү!

[Килә торғас, Ҡуңыр буғаның эҙенә төшә.]

— Ярпай ҡына тояҡлы,
Ҡарпыҡ ҡына ҡолаҡлы,
Маңлайында мөгөҙө,
Сығып киткән бер үҙе.
Һыйырҙарҙы ла эйәрткән,
Һарыҡты ла эйәрткән.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Һәү, һәү, һәү, һәү!

Ҡыҙ бахырың, илай-илай, малдарын ҡыуып китә. Ҡуңыр буғаның барып башынан һыйпап ҡайтырға бора башлай. Ҡуныр буға әйтә:

— Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һайлайһың,
Яҙ ашарға бирмәйһең,
Көҙ ашарға бирмәйһең [164],
Һыйырҙан һөт даулайһың,
Һарыҡтан ит даулайһың,
Әй, Ҡолансәс, Ҡолансәс,
Бер ҙә арттан ҡалмайһың!

Шулай итеп, былар атаһы йортона (төп йортҡа) тиклем ҡайталар. Ҡыҙ әйтә:

— Ҡайтайыҡ!

Ҡуныр буға әйтә:

— Юҡ!

Шунан Ҡолансәс малдарҙы атаһына ялуа итә *. Атаһы әйтә.

— Сабыр ит, — ти.

Кейәүсе до саҡырта был. Һимеҙ-һимеҙ һарыҡтарҙы һуйып, быларҙы ҡунаҡ итә. Мәжлес үткәрә, бәйге ойоштороп ебәрә. Көрәштә Ирәндек кейәү барыһын да еңеп сыға.

Шунан ҡунаҡтар табынға ултырышҡас, бер аҡһаҡал тороп әйтә:

— Ирәндек батыр, һин инде беҙҙең кейәү, көсөң дә бар, ғәйрәтең дә. Бөтәһен дә еңеп сыҡтың, — ти. — Һиңә бер-ике һорауым ғына бар ине, — ти.
— Рәхим ит! — ти Ирәндек.
— Ошо ҡаҙанда ит күпме, һөйәге күберәкме?
— Һурпаһы.
— Итте утын бешерәме, төтөнмө?
— Ҡөтөм (йәғни ҡунаҡтың көтөп ултырыуы. — инф.).
— Ит ҡапҡан — ни тапҡан? Һөйәк кимергән ни емергән?
— Ит ҡапҡан — тамаҡ туйҙырған, һөйәк тапҡан — аҡыл арттырған.
— Һай, афарин! Аҡылың да мул икән! — ти аҡһаҡал. Үҙе табындағы итте алып берәм-берәм һамаҡлап өлөшә башлай:

Баш һөйәге — башлауға *,
Туларһығы * — ташлауға,
Һум ите — ашауға,
Һөйәк алһаң — кимерергә,
Елек тапһаң — һурырға,
Ҡимерсәге — сәйнәргә.

Аҡһаҡал көйләй-көйләй һөйәк булә:

Быныһы була — муйыны,
Ете була быуыны,
Алты умыртҡа — өлөшлө,
Өлөшлө ҡул — килешле;
Ете киҫәк — ете быуын,
Ала белһәң — үҙеңә;
Артҡы (һырт) умыртҡа — ун ике;
Ала белһәң — һинеке.
Һүҙең башла олонан,
Кесенең тот ҡулынан;
Олоға юл бирерһең,
Кесегә ҡул бирерһең,
Башын алыр атайың,
Ботон алыр ағайың,
Ҡарындашың — аяғын,
Еңгәң алыр — тояғын.
Унан килә — һигеҙгүҙ,
Һигеҙгүҙгә — һигеҙ һүҙ:
Һүҙ айышы — ырыуҙа.
Ырыулы ил ҡороуҙа,
Ырыулы ил — уҙғаны,
Ырыуһыҙ ил — туҙғаны,
Һигеҙ ҡыпсаҡ, йыйылып,
Атайсалға килгәне,
Ҡаңныға юл биргәне... [166]

*Табында ултырыусылар:*

— Һай, афарин! — тип аҡһаҡалға рәхмәт әйтәләр. Уйнап-көлөшеп ҡунаҡ булалар.

Ирәндек менән Ҡолансәс ҡалған малдарҙы алып ҡайтып китәләр. Шунан теге мал үткән юлды Ҡуңыр буға юлы тип атағандар.

Ирәндек Аҡһаҡалдан өйрәнеп ҡайтҡан ғибрәтле һамаҡтарҙы һуңынан үҙе лә табын һайын һөйләп йөрөгән.

## ҠУҢЫР БУҒА

*(вариант)*

Ирəндек буйында, Урал артында йəшəгəн, ти, бер батыр. Шунан был батыр Урал һыртына менеп ҡараһа, көньяҡта бик бай бер йəйләү күренə икəн. Киткəн был шул яҡҡа таба, Урал һыртынан юл ярып. Əй бара, ти, был, əй бара, ти. Барып етте, ти, был йəйләүгə.

— Əссəләмəғəлəйкүм!

— Вəғəлəйкүмəссəлəм! Əйҙə, əйҙə! Түрҙəн уҙ, батыр! — тиҙəр быға.

Был шунда ҡунаҡ булып ята. Былар менəн һунарға йөрөй. Шунан бер саҡ хужаһының ҡыҙын күреп ҡала.

— Кем ҡыҙы ул? — тип һорай.

— Хужаның ҡыҙы, — тиҙəр мыңа.

— Исеме нисек?

— Ҡолансəс.

— Мин был ҡыҙҙы үҙемə кəлəшлеккə алам, — ти был батыр.

Əйткəн — бөткəн. Шунда уҡ был ҡыҙҙың атаһына бара ла ҡалымын əйтə. Шунда уҡ килешеп тə ҡуялар. Туй була Бəйге уткəрəлəр. Шунан ҡыҙҙы егет ҡулына тапшыралар.

Батыр Ҡолансəсте үҙ ягына алып китə.

Ҡыҙ артынан атаһы көтөү-көтөү мал биреп ебəрə. Көтөү эсенлə мал башы Ҡуныр буға ла була.

Былар шул уҡ тау һыртлап ҡайталар.

Бергə тора башлайҙар. Егет көн дə һунарға йөрөй, кəлəше мал ҡарай. Батыр күберəк ситтə йөрөй, Ҡолансəс йортта була.

Шулай тыныс ҡына йəшəп ятканда, бер саҡ быларҙың малдары юк була. Ҡыҙ аптырай. Унда йүгерə, бында йүгерə. Таба алмағас, эҙлəп сығып китə. Үҙе илай был, үҙе йырлай, ти:

— Көтөү, көтөү малдарым
Көттөрҙөлəр көн буйы;
Өйөр, өйөр малдарым
Өшөттөлəр төн буйы;

Аяҡтарым талдырып,
Төн йоҡомдо ҡалдырып,
Эҙләп киттем малдарым,
Юллап киттем малдарым.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Һәү, һәү, һәү, һәү!

Шулай һамаҡлай-һамаҡлай Урал һыртына сығып, һаман киткән дә киткән был. Үҙе бара, үҙе һамаҡлай:

— Ете үгеҙ бер киткән,
Кәкре мөгөҙ бер киткән,
Һигеҙ һыйыр бер киткән,
Һимеҙ һыйыр бер киткән,
Туғыҙ быҙау бер киткән,
Яңғыҙ буға бер киткән,
Көтөү һарыҡ бер киткән,
Ярыҡ тояҡ бер киткән,
Һимеҙ оса бер киткән...
Аяғымды талдырып,
Төн йоҡомдо ҡалдырып,
Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Эҙләп киттем шуларҙы.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Һәү, һәү, һәү, һәү!

Туҡтай был, әҙерәк хәл йыйып ала ла тағы китә.

— Баҫҡан ерем таш ҡына, — ти, —
Йөрәкәйем ашҡына,
Ҡасан ҡыуып етермен,
Ҡуйҙы һарыҡ итермен,
Һарыҡты юҡ итермен,
Һуйып ҡунаҡ итермен,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Һәү, һәү, һәү, һәү!

Китә был һаман китә, мал эҙе менән бара. Бара торғас, был ҡыҙ (Ҡолансәс) үҙенең тыуған иленә килеп сыға. Баҡһаң, ул малдар тыуған илдәренә кире ҡайтып киткәндәр икән.

Шунан ҡыҙ шатланып, малдарҙы һөйөп сыға ла, ата-инәһендә ҡунаҡ булып, тағы ҡайтып китә.

Бына шунан ҡалған инде ул «Ҡуңыр буға юлы» тигән юл. Ул ана шул Ирәндектән алып Урал һырты буйлап көньяҡҡа һуҙыла. Элек башҡорт ырыуҙары, шунда менеп, бергәләп яу ҡайтара торған булғандар.

## ҠУҢЫР БУҒА

*(вариант)*

Борон Ирәндек яғынан бер батыр килеп ошо яҡтың ҡыҙын алып киткән. Аталары ул ҡыҙ артынан бик күп мал биреп ебәргәндәр. Егет иленә ҡайтып тора башлаған, унда мал ҡайғыһы юҡ, ти: гел ахуға ла ахута. Килгән мал йонсоп, кире ҡайтып киткән, ти. Ҡыҙ шуны эҙләргә сыҡҡан Урал һыртына. Малды бер ҡуңыр буғаһы башлап апкиткән. Ул Ҡуңыр буға Ирәндектән алып көньяҡҡа табан Урал һыртынан юл ярып, бөтә малдарҙы кире ҡыҙҙың атаһына апҡайтҡан. Ҡыҙҙың исеме Ҡәнифә булған. Шуға күрә ул юлды ҡайһы берҙә Ҡәнифә юлы тип тә атайҙар.

Ҡәнифә, малын эҙләргә сыҡҡас, әйткән һамаҡтары:

— Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡайҙа бараһың, талау *,
Ҡайҙа бараһың, талау?!
Төн йоҡомдо ҡалдырып,
Аяғымды талдырып,
Эҙләп киттем артыңдан,
Ҡыуып еттем артыңдан.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡайҙа бараһың, талау?!
Сысҡан ерең туң итеп,
Һейгән ерең күл итеп,
Ҡайҙа бараһың, талау?!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Урал һыртын юл итеп,
Ризығыңды юҡ итеп,
Сысҡан ерең буҡ итеп,
Баҫҡан ерең шаҡ итеп,
Ятҡан ерең ҡаҡ итеп,
Ҡайҙа бараһың, талау?!
Ҡайҙа бараһың, талау?!

# ҺҮҘ АХЫРЫ

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ МИФОЛОГИК ЭПОСЫНА ХАС ҠАЙҺЫ БЕР ҮҘЕНСӘЛЕКТӘР

Шулай итеп, хөрмәтле уҡыусылар, халҡыбыҙ ижадының гәүһәрҙәрен туплаған был том менән дә танышып сыҡтығыҙ. Әгәр ҙә һеҙ «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының ун һигеҙ томлығын асып ебәргән эпостар йыйынтығының тәүге китабын ентекләп уҡып сыҡҡан булһағыҙ, быныһына ла шул баҫмалағылар тулыһынса кергәненә, шул уҡ ваҡытта байтаҡ ҡына айырмалар барлығына ла иғтибар иткәнһегеҙҙер. Ул айырмалар, «Мөхәррирләттән» тигән иҫкәрмәлә үк әйтелеүенсә, текстарҙы архивтағы нөсхәләре менән сағыштырыуҙан һәм яңы варианттар өҫтәүҙән килә. Ундай үҙгәрештәр индермәү мөмкин түгел ине. Сөнки фән бер урында тормай, бындай тупламаларға талаптар ҙа арта.

Һуңғы һүҙ урынына әҙерләгән мәҡәләбеҙҙә беҙ тәүге баҫма донъя күргәндән һуң башҡорт эпосын тикшереү өлкәһендәге яңылыҡтарға ҡағылыу менән бер рәттән, үлегә ғалимдарыбыҙҙың иғтибары етеңкерәмәгән мәсьәләләрҙең ҡайһы берҙәре хаҡында һүҙ алып бармаҡсыбыҙ.

### 1. БОРОНҒО ЭПОСТАРЫБЫҘҘЫҢ ӨЙРӘНЕЛЕШ ТАРИХЫНА ҒИЛӘҮӘ *

«Башҡорт халыҡ ижады»ның ун һигеҙ томлығын асып ебәргән эпостар йыйынтығының ҡул арты еңел булды: әле Өфөлә, әле Мәскәүҙә уларҙың өлгөләре донъя күрә торҙо [1].

[1] БХИ: Эпос. 2-се кит. / Төҙ., баш һүҙ яҙыусыһы һәм аңлатмалар бир. М. М. Сәғитов; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1973; БХИ: Эпос. 3-сө кит. / Төҙ., инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар бир. Н. Т. Зарипов: Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1982; Библиотека всемирной литературы: Героический эпос народов СССР. Т. 1 / Сост., вст. ст. и примеч. А. А. Петросян; Пер. И. Кычакова, А. Мирбадаловой, А. Хакимова. М.: Наука, 1975. С. 67—115; Эпос народов СССР: Башкирский народный эпос / Сост. А. С. Мирбадаловой, М. М. Сагитова, А. И. Харисова; Авт. исслед. А. С. Мирбадаловой; Авт. коммент. А. С. Мирбадаловой, М. М. Сагитова; Башк. тексты подгот. М. М. Сагитов, А. И. Харисов; Пер. Н. В. Кидайш-Покровского, А. С. Мирбадаловой и А. И. Хакимова; Отв. ред. Н. В. Кидайш-Покровский. М.: Наука, 1977; Башкирское народное творчество. Т. 1. Эпос / Сост. М. М. Сагитова; Коммент. Н. Т. Зарипова, М. М. Сагитова и А. М. Сулейманова; Предисл. Башкирское кн. изд-во, 1987 (Далее — БНТ); Әҙерләүсеһе Н. Т. Зарипов. Иҙеүкәй менән Мораҙым: Тарихи ҡобайыр / Өфө: Китап, 1994.

Эпик ҡомартҡыларыбыҙҙы ғилми тикшереү өлкәһендә лә кисемле генә эштәр күҙгә ташлана башланы. Шуларҙың иң эреләре М. М. Сәғитов менән С. Ә. Галиндың монографиялары булыр [2]. Тәүгеһендә нигеҙҙә ошо томға ингән эпостар хаҡында һүҙ бара. Тарихи сағыштырма, тарихи-типологик методтарға таянып, автор мифологик эпостарҙың асылына тәрәнерәк инергә тырыша. Икенсеһендә иһә башҡорт иртәктәре фольклорыбыҙға хас эпик поэзия системаһында тикшерелә. Автор эпик традицияларҙың күсәгилешлелеге тураһындағы Кирәй Мәргән яҡлаған концепцияға таянып эш итә. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» китабын да монографик хеҙмәттәр рәтендә ҡарарға булыр ине. Ни өсөн тигәндә Н. Т. Зарипов үҙенең инеш мәҡәләһендә һәм аңлатмаларында монографик тикшереүҙәргә генә хас ғилми күҙәтеүҙәр менән уртаҡлаша. ҡаҙаҡ, нуғай, татар һ. б. төрки телдәрендәге версиялар һәм варианттар араһында текстологик сағыштырыуҙар үткәреп, уларҙың милли үҙенсәлектәрен аса. Юғары уҡыу йорттары талиптарына, уҡыусыларга тәғәйен әсбаптарҙа ла эпос темаһы әлеккенән киңерәк яҡтыртыла башланы [3].

Башҡорт эпостары философтарҙың, тарихсыларҙың, археологтарҙың, этнографтарҙын, телселәрҙең, халыҡ педагогияһы өлкәһендә тикшеренеүселәрҙең дә, әҙиптәрҙең, публицистарҙың, хатта юристарҙың да иғтибарын йәлеп итә башланы. «Урал батыр» эпосының яҙылып алыныуына 85 йыл тулыу уңайы менән үткәрелгән (1995 йыл) ғилми конференция шуның бер күрһәткесе булды. Бөгөн дә эпостарыбыҙҙан эстетик кинәнес алыу бәхетенә ирешеүсебеҙ менән беҙ исемдәре лә һаҡланмаған, һаҡланһа, мәлендә баһаланмаған быуын-быуын сәсәндәребеҙгә бурыслы: уларҙы тыуҙырған да шулар, һаҡлағандар ҙа шулар [4]. Был хаҡта М. А. Бурангулов менән Кирәй Мәргәндән ҡала, эпос йыйынтыҡтарының тәүгеһенә яҙған мәҡәләһендә һәм монографияһында М. М. Сәғитов та әйтеп үткәйне. Сәсәнлек сәнғәте Ғ. Б. Хөсәйенов, Н. Т. Зарипов, С. Ә. Галин, Б. С. Байымовтарҙың хеҙмәттәрендә ҡайта-ҡайта яҡтыртылды.

Эпостарыбыҙҙы ғилми яҡтан баһалау тәңгәлендә байтаҡ эштәр башҡарылған. Әммә 70-се йылдарҙың баштарынаса, айырым сығыштарҙы һәм һүҙ эйәрә генә әйтелгән фекерҙәрҙе иҫәпкә алмағанда, башҡорт эпос ғилеме нигеҙҙә үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнаны. Бара-тора ғалимдарыбыҙ был сикләнгәнлектән ҡотолорға

---

[2] Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1987; Галин С. Ә. Тарих һәм халыҡ поэзияһы. Өфө: «Китап», 1995.

[3] Галин С. Ә. Башҡорт фольклоры: Юғары уҡыу йорттары студенттары, педучилищелар һәм урта мәктәптәр өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Яуаплы мөхәрр. Э. Ф. Ишбердин. Пермь, 1975; Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: Юғары уҡыу йорттарының филол. фак-ры өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Яуаплы мөхәрр. Ә. М. Сөләймәнов. Өфө: БДУ нәшр., 1981; Галин С. Ә. Тел асҡысы халыҡта. Өфө: «Китап», 1994.

[4] Сәсән аманаты / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә авт. Б. С. Байымов. Өфө: «Китап», 1994; Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1961.

тырыша башланы. Божра эпостарыбыҙҙың мифологик нигеҙҙәрен юллау тәңгәлендә өҙөлдө. Был йәһәттән тәүге һүҙҙе философ Д. Ж. Вәлиев әйтте. Үҙенең хеҙмәттәрендә ул ҡайта-ҡайта «Урал батыр» эпосының, бер яҡтан, фарсыларҙың зороастризмы менән, икенсе яҡтан, боронғо төрки мифологияһы менән тамырҙаш, өсөнсөнән, шумер-аккадтарҙың Гильгамешҡа бағышланған «Күпте күргән, күпте кисергән хаҡында» тигән ҡомартҡыһына оҡшаш булыуына иғтибар йүнәлтә (ике әҫәрҙең дә геройы мәңге ғүмер һөрөү тураһында хыяллана) [5]. Оҙаҡ та үтмәне, үҙәктә лә, Өфөлә лә ошо проблемаға ҡағылыусылар ишәйҙе. «Урал батыр» ҡобайырын төрлө осорҙа А. А. Петросян, М. М. Сәғитов, Р. Ф. Рәжәпов [6], С. А. Ғәләмовтар Гильгамеш хаҡындағы эпос менән сағыштырма планда тикшереп, уларҙың оҡшашлыҡтарына, уртаҡлыҡтарына һәм айырмаларына туҡталды. М. М. Сәғитов, Ғ. Б. Хөсәйенов, Н. А. Мәжитовтарса, «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ише мифологик эпостарыбыҙҙың тамырҙары, ысынлап та, шул арий мәҙәниәте ҡомартҡыларына ялғана [7], әммә уға тиклем улар төрки мәҙәниәте традицияларын йоғонтоһон кисереп өлгөрә [8].

Сағыштырыу даирәһен тағы ла киңәйтеүгә ынтылыштар ҙа булды. М. М. Сәғитов, мәҫәлән, Урал батырҙы грек мифтары геройҙары Прометей, Эпиметей, һинд эпосы «Махабхарата»лағы Гаруда менән йәнәш ҡуйып, улар араһындағы оҡшашлыҡҡа баҫым яһаны [9]. Яҙыусы Йыһат Солтанов иһә әле әйтелгән оҡшашлыҡтарҙан тыш, башҡорт мифологияһында Скандинавия халыҡтарының мифтары менән дә яҡынлыҡтары булыуын таба, йәш тарихсы В. Г. Котов эпостың фин-уғыр, Палеазиат халыҡтары мифтары менән уртаҡ һәм оҡшаш билдәләрен юллай [10]. Башҡа мил-

---

[5] Валеев Д. Ж. Связь мировоззрения древних башкир с домусульманскими верованиями: Тезисы. Чебоксары, 1973. С. 47—50; Шул уҡ авторҙыҡы. Моральная проблематика в эпосе «Урал батыр» // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1976. С. 3—8; Шул уҡ авторҙыҡы. История нравственного сознания башкирского народа. Уфа. 1984. С. 24—30.

[6] Петросян А. А. История народа и его эпос. М.: Наука, 1982. С. 33—35; Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1987. 39—90-сы б. Рәжәпов Р. Ф. Башҡорт эпосының генезисы мәсьәләһенә ҡарата // Туған тел һәм әҙәбиәт: Тезистар. Өфө: БДУ нәшр., 1994. 76—78-се б.

[7] Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары / Ғ. Б. Хөсәйенов мөхәррирлегендә, Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1987. 61-се б.; Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт-уғыҙ эпик традициялары һәм «Ҡорҡот ата» китабы // Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда. Өфө, 1990. 1-се том. 77-се б.; Мажитов Н. А. О ранних этапах этногенеза башкир // Востоковедение в Башкортостане: История, культура. Т. 2. Уфа, 1992. С. 51.

[8] Мажитов Н. А., Султанова А. Н. История Башкортостана с древнейших времен. Уфа: Китап, 1994.

[9] Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. 60, 74-се б.

[10] Солтанов Й. «Урал батыр» шәжәрәһе // Ағиҙел. 1982. № 9. 109—124-се б., № 10. 109—121-се б., 1984. № 2. 118—135-се б., № 3. 106—130-сы б.; Котов В. Г. Мифологическая стратиграфия эпоса «Урал батыр» // Тез. X Западно-Сибирского Арх.-этногр. совещания. Томск, 1995. С. 92—94; Шул уҡ авторҙыҡы. Два мира южноуральского эпоса // Россия и Восток. Челябинск, 1995. С. 28—29; Шул уҡ авторҙыҡы. «Урал батыр» эпосының мифологик стратиграфияһы // Шоңҡар. 1996. № 2. 137—140-сы б.

ләттәр тыуҙырған ҡомартҡылар менән оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтарҙы һәр кем үҙенсә нигеҙләргә тырышты. С. А. Ғәләмов, мәҫәлән, башҡорт менән шумер-аккад араһында этногенетик бәйләнеш бар, уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтар шунан килә, тип иҫәпләй. Ике халыҡтың эпосын сағыштырғанда, ул идея, сюжет мотивы, персонаждар (Шульга — Шүлгән, Зарикум — Зәрҡүм) урын исемдәре (Ур — Урал), лексик берәмектәр оҡшашлығы һәм яҙылыштағы тап килешен дәлил итеп килтерә [11].

Башҡорт эпостарындағы мифологик башланғыстарҙың фәлсәфәүи айышы ла тикшеренеүселәрҙең иғтибарын йәлеп итә килә. С. С. Парсамов «Урал батыр» эпосында мифологик сюжет һәм мотивтарҙың муллығын билдәләү менән бергә, унда төрлө идеологик доктриналарҙың динамикаһын, шул иҫәптән ислам йоғонтоһонон, архаик дәүер ҡуйған проблемаларҙың аҙаҡҡа табан әхләҡи яҡтан баһалана башлауын һәм төп геройҙың бар тереклектең йәшәүе хаҡына Йәншишмә һыуын үҙе эсеүҙән баш тартыуының әхләҡи әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә ала [12]. Д. Ж. Вәлиев әхләҡ проблемаһының был әҫәрҙә күп яҡлы асылыуына иғтибар итә. Кешеләштерелгән ҡош-ҡорт унынса — «әхләҡи мөнәсәбәттәр субъекты», сөнки әхләҡи сифаттарға эйә. Ғөмүмән, ул «Урал батыр»ҙа «изгелек» менән «яуызлыҡ» төшөнсәләренә айырым-асыҡ баҫым яһалыуына, сюжеттың, асылда, шул ике башланғыстың бәрелешеүенә иғтибар итә [13].

Архаик эпостарыбыҙҙы милли репертуар юҫығында ғына ҡарағанда ла, донъя мифологияһы кимәленән байҡағанда ла, тикшеренеүселәребеҙ, ғәҙәттә, бермә-бер уларҙың йәшен билдәләүҙе кәрәк табыр булды. Башҡорт эпосының мифологик нигеҙҙәре, фәлсәфәүи айышы, әхләҡи проблемаларға иғтибар итеүе тураһындағы хеҙмәттәрҙәге һымаҡ үк, был йәһәттән дә «Урал батыр» иғтибар үҙәгендә ҡала килде. Уға мең, ике мең, дүрт мең, дүрт меңдән дә ашыуыраҡ йәш биреүселәр ҙә булды [14]. Бындай эштең дә әһәмиәте юҡ түгел, бар, әлбиттә. Әммә авторҙарҙың башлыса тема, идея, айырым мотивтарҙың уртаҡ йә оҡшаш булыуынан сығып, бер милли мөхиттә һаҡланған күренештә ер аяғы, ер башындағылар менән «тап килештәр» табырға теләүҙәре, ошо маҡсатта тәүгеһен һуңғыһы хаҡындағы тикшеренеүҙәр, концепциялар ҡалыбына һалырға тырышыуҙары ғына күңелде ҡыра. Бындай үкенес белдереүебеҙ — башҡорттоң архаик эпосы башҡа этник мөхиттә тыуғандары менән бер ниндәй мөнәсәбәттә булмаған,

---

[11] Ғәләмов С. А. Кунгур (Сумер—Шумер) // Шоңҡар. 1995. № 6. 11—39-сы б.; Инакомыслящий историк Салават Галлямов. / Интервью И. Сабитова // Вечерняя Уфа. 1996. 2 февр.

[12] Парсамов С. С. К вопросу об отражении мифологических воззрений в башкирском народном эпосе «Урал батыр» // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1982. С. 25—33.

[13] Валеев Д. Ж. Моральная проблематика в эпосе «Урал батыр» // Фольклор народов РСФСР. Уфа, 1976. С. 3—8.

[14] Галлямов С. А. Эпос / Шоңҡар. 1995. № 2. 32—33-сө б.; Петросян А. А. История народа и ее эпос. С. 34; Котов В. Г. «Урал батыр» эпосының мифологик стратиграфияһы. 137—140-сы б.

булыуы мөмкин дә түгел тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Быны дәлилләү өсөн, йәнә лә беҙгә килеп еткән иң ҡарт эпик ҡомартҡыларыбыҙға, шул уҡ «Урал батыр»ға әйләнеп ҡайтыу ҙа етә. Сөнки эпостарыбыҙҙың ни тиклем архаик, тимәк, мифологик тамырҙары ни хәтлем тәрәнгә китеүен билдәләгәндә, уны уратып үтеү мөмкин түгел.

## 2. БАШҠОРТ ЭПОСЫ ҺӘМ БОРОНҒО ФАРСЫ МИФОЛОГИЯҺЫ

Иң әүәл эпоста йәшәйештең иң мөһим проблемаһы — йәшәү һәм үлем проблемаһының ҡуйылышы һәм художестволы хәл ителеше мәсьәләһенә туҡталайыҡ. Был проблема шумер ҡомартҡыһы менән «Урал батыр»ҙа ғына түгел, Ҡорҡот ата, Искәндәр (Зөлҡәрнәй) һ. б. хаҡындағы ҡомартҡыларҙа ла үҙәктә тора. Ул һинд-иран «Авеста»һын да уратып үтмәгән: унда ҙур ышаныс менән «киләсәктә кеше үлемһеҙлеккә өлгәшәсәк» тигән идея үткәрелә. Ә «Урал батыр»ҙа был проблема у т к ә н з а м а н д а һәм, әйтергә кәрәк, ике планда хәл ителә. Тәүгеһе Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең әҙәм түгел, әжәл тапмаҫ «дүрт яғын диңгеҙ уратҡан утрауға» ҡасыуында «ғәмәлләшә». Икенсеһе — Урал батырҙың мәңгелек йәшәү — һинең, минең, уның үлем белмәүендә түгел, ә, быуын-быуын ялғаныш, нәҫелеңдең, кешелектең яңыра барыуында, шул мәңге дауам итһен өсөн шарттар булыуында икәненә төшөнөүендә һәм ошо процессты башлап ебәреүендә. Урал образы аша эпос кеше өсөн иң мөһиме — әхләҡи зиннәт (сафлыҡ, тоғролоҡ, дөрөҫ ғәмәл ҡылып йәшәү) тигән идея үткәрә. Дуалистик миф геройы традицияһына тоғро ҡалып, Урал батыр — ошо идеяның ыңғай хәл ителешен, ә Шүлгән шуның киреһен кәүҙәләндерә. Бындай «тоғролоҡ» ҡайҙан килә тигәндә, уның үҙ нигеҙе бар. Мәғлүм булыуынса, мифтар кешелек йәмғиәтенең таңында барлыҡҡа килә. Кешелек йәмғиәтенең үҫеш юлы иһә универсаль: Ер йөҙөндәге барлыҡ халыҡтар ҙа, ғәмәлдә, бер төрлө үк үҫеш баҫҡыстарын үткән. Көтөү-көтөү булып йәшәү дәүерен үткәндән һуң кешелек дуаль йәмғиәт дәүерен кисергән. Ул йәмғиәттәге һәр ырыу үҙ яғын физик яҡтан да, рухи яҡтан да өҫтөн итеп баһаларға, ҡаршы яҡты кәмһетергә тырышҡан. Бара-бара шул һыҙаттар ырыуҙың башбабаһына тағылып булған. Шул нигеҙҙә үҙ-ара көсөтләшеүсе заттар итеп күрһәтелеүсән ике ағай (йәки игеҙәктәр) хаҡында (фән телендә әйтһәк, «игеҙәктәр мифы», «дуалистик») мифтар тыуған [15]. Фарсының Ормазд менән Аһриман атлы игеҙәктәр алышы, һинд-ирандың «Авеста» эҫәрендәге Ахура-Мазда менән Анһра-Маныо араһында барған мәңгелек алыш ха-

---

[15] З о л о т а р е в А. М. Родовой строй и первобытная мифология. М.: Наука, 1964. С. 247; Т о л с т о в С. П. Древний Хорезм. М., 1948. С. 288—297; М е л е т и н с к и й Е. М. Происхождение героического эпоса: Ранние формы и архаические памятники. М.: Изд-во Восточн. литер., 1963. С. 25—31.

ҡындағы мифтар ана шундайҙар рәтенә инә[16]. Уралдың яуыз көстәр менән көрәше лә, ғәмәлдә, «Авеста»лағы һымаҡ уҡ, үҙ ағаһы менән көрәшенә әүерелеп китә.

Зороастризм буйынса, иң яуыз кеше — алдаҡсы, һүҙендә, вәғәҙәһендә тормаусы, килешеү боҙоусы кеше. «Авеста»ла бөтә ҡара көстәр, дошмандар «алдаҡсы», «ялғансы», һ. б. шуның кеүегерәк эпитеттар менән нарыҡлана.

«Урал батыр»ҙа Йәншишмәне табыр өсөн изге сәфәргә сыҡҡан (ә дуалистик мифтарҙа культур герой һәр саҡ сәйәхәт итеүсән) Урал менән Шүлгән шыбаға тотоп, юл бүлешә. Ә шыбаға тотоу — йола хөкөмөнөң бер формаһы. Шыбаға буйынса уңға китергә тейеш Шүлгәндең һулға китеүе — күрәләтә Урал менән килешеүҙе боҙоуы ғына түгел, йола ҡанунын да һанламауы ул. Уның бындай юлға төшөү ихтималы, дөйөм эпик традицияға ярашлы рәүештә, көнәлек иҫкәртелә (прогнозлана). Ул баштан уҡ һүҙгә тоғро булмаған зат итеп күрһәтелә. Тәүҙә ата һүҙен тотмай, ҡабырсаҡтағы ҡанды эсһә лә, «бәрәү ҙә эсмәне» тип ялғанлай. Икенсе юлайы Урал хәл иткес ҡарарға килгәс — Үлемдең үҙен үлтерергә ниәтләнгәс, йыртҡыстар менән бер ҡатарҙан уға ҡаршы сыға, улар позицияһына күсә, тимәк, йыртҡыслыҡты ғына түгел, Үлемдең үҙен дә яҡлай булып сыға. Уралдың изге ниәте һәм ағаһының ошо киреләге әҫәрҙең сюжетына этәргес бирә, уның үҫеш тилберлеген, йүнәлешен билдәләй ҙә инде.

Шүлгәндең үҙ энеһе ынтылыштарына ҡаршы позиция алыуы, һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә лә асыла: аҡҡош ҡиәфәтендәге Һомайҙы Урал ҡотҡарыу яғын ҡайғырта, Шүлгән «ашау яғында» була; ҡустыһына Әзрәҡәнән күскән серле таяҡ ярҙамында бар донъяны һыуға батыра; яуызлыҡтарынан ваз кисергә ант итһә лә, бар «Дейеү ғына тынды йыйнаған... Уралға баш эймәҫкә, Кешегә һыу бирмәҫкә» ҡушҡан.

Шүлгәндең ни тиклем намыҫлы кешегә ят икәне Зәрҡум һәм Әзрәҡә менән яҡынлашыуы аша ла асыла. Ә уларҙың йәшәү принцибы — алдау һәм ялғанлау.

«Авеста»лағы кеүек, «Урал батыр»ҙа ла алдашыу менән ялғанлыҡ — бер үк сифат — яуызлыҡ сифаты тип баһалана. Ғөмүмән, башҡорт эпосының бар пафосы, төп идеяһы — алдашыуҙы, яуызлыҡты инҡар итеү. Был башланғыс Урал батырҙың:

— Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ;
Ямаңға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ! —

тигән васыятында айырата аныҡ әйтелә. Ошо уҡ фекер «Авеста»ла туранан-тура яҙыҡлыҡҡа төбәлгән һүҙҙәр аша еткерелә:

---

[16] Авеста / Пер. и коммент. И. М. Стеблин-Каменского. Душанбе, 1990; Бойс Мэри. Зороастрийцы: Верования и обычаи. 2-ое изд., испр. / Отв. ред. Э. А. Грантовский. М.: Наука, 1988.

Илде боҙған шул булыр:
Һүҙен тотмаç, намыçһыҙ,
Йөҙ дошмандан ямандыр —
Гонаһһыҙ йәндәр ҡыйыр [17].

Тимәк, «Авеста» ла, «Урал батыр» ҙа бер үк әхләҡи идеалдарҙы алға һөргән.

Башҡорт эпосында «Авеста» менән идея тәңгәлендәге ауаздашлыҡтан тыш, айырым мотивтар, образдар кимәлендәге оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар ҙа табырға була. Ҡатил батша илендә Урал батыр бығаса үҙе ишетмәгән, күрмәгән йола барын — ҡыҙҙарҙы күлгә һалыу, ир-егеттәрҙе утта яндырыу йолаһы барын белә. Шуны күҙ уңында тотоп, А. С. Мирбадалова бында боронғо йола — ата-бабалар рухына, ут һәм һыу эйәләренә ҡорбан килтереү йолаһы сағылған булыуы ихтимал тигән фаразға килә [18]. Беҙҙең фекеребеҙсә, ғалимә күҙ уңында тотҡан күренештең тәүгеһендә зороастризм диненә хас мәйет ҡуйыу йолаһы менән бер уртаҡлыҡ бар. Ул йола буйынса, мәйетте, донъя ағасы тураһындағы инаныуҡа таянып, өçкә, донъя вәкиле иçәпләнгән ҡоштарға, тапшырғандар: улар ашаһа, үлгән кешенең йәне яҡшылыҡ-изгелек батшалығы — Ахур-Мазда биләмәһенә юлыға, йәнәһе. Ә утҡа һәм һыуға ҡорбан килтереү, зороастризм буйынса, шул стихиялар рухына рәхмәт белдереүҙе аңлатыуы ихтимал. Сөнки зороастризм тәғлимәтен үҙ итеүселәр ут һәм һыу культына инанған. «Урал батыр» эпосындағы:

— Утҡа ҡаршы ут булыр,
Һыуға ҡаршы һыу булыр, —

тигән юлдарҙа ла ут һәм һыу культына инаныуҙы сырамытырға була.

«Авеста»ла инә һөтө менән ирҙәр ҡотон илаһилаштырыуға мөһим урын бирелгән. Унда әйтелеүенсә, Ардви-Сура илаһы

«Ҡурсалай ирҙәр ҡотон,
Ҡатындарҙың түллеген,
Мул ҡыла йәнә һөтөн» [19].

Заманында инә һөтө менән ата ҡото башҡорт мифологияһында ла фетиш кимәлендә баһаланған булыуы ихтимал. Һәр хәлдә, X быуатта Әхмәт ибн-Фаҙлан күргәндә, башҡорттар ата ҡотон-фаллосты изгеләштереүҙән әле арынмаған була. «Урал батыр»-ҙағы:

— Атаң минә ҡот биргән,
Әсәң миңә һөт биргән.

[17] Авеста. С. 54.
[18] Башкирский народный эпос. С. 14.
[19] Авеста. С. 24.

. . . . . . . . .

Һин — атаңдан ҡот йыйған,
Һин — әсәңдән һөт имгән, —

тигән юлдар иһә — заманында ата ҡото ғына түгел, инә һөтө лә башҡортта йәшәүҙең тәүсәбәбе тип изгеләштерелеүенә ишара яһағандай. Әгәр шулай икән, «Авеста» менән «Урал батыр» был тәңгәлдә лә ҡасандыр бер үк сығанаҡҡа таяныуы ихтимал. Ҡомартҡыларҙың икеһендә лә мотивтар оҡшашлығына башҡа миҫалдар ҙа бар.

Образдар кимәлендәге яҡынлыҡ мәсьәләһенә килгәндә, иң әүәл мифик үгеҙ образына туҡталыу зарур. Сөнки эпостарҙа был образға мөһим урын бирелеүсән. Шундай «вәкәләтлегенә» ҡарамаҫтан, уны кеше («Күпте күргән, күпте кисергән хаҡында»ғы эпоста Гильгамеш, Иран мифологияһында Ахриман, грек мифында Тесей, Ирландияның «Ҡуальнгтан үгеҙ урлау» тигән эпик әҫәрендә Донн Куальнге) [20] еңә. «Урал батыр» эпосында Ҡатил батшаның «ерҙе тырнап, үкереп, шылағайын ағыҙып» килеүсе тауҙай үгеҙе башҡа халыҡтарҙың мифтарына хас күк (гәләм) үгеҙен хәтерләтә. Ул да кеше затынан, йәғни Урал батырҙан, еңелә, әммә башҡа этник мөхиткә хас мифологик сюжеттарҙан айырмалы рәүештә, тере ҡалдырыла.

Уның ҡарауы, статусы үҙгәрә: яуыз заттан үҙенән һуң кешегә хеҙмәт итер һыйыр малын үрсетер затҡа әүерелә. Бындай вазифа атҡарған мифтарҙа үгеҙгә тәүүгеҙ «титулы» бирелеүсән. «Авеста»ла үгеҙ, мәҫәлән, бер үк ваҡытта күк үгеҙен, тимәк, илаһи затты ла, Ер өҫтөндәге һыйыр малының нәҫеле үрсеүгә сәбәпсе Тәүүгеҙҙе лә кәүҙәләндерә. Шулай булғас, «Урал батыр»ҙа Ҡатил батша үгеҙе тип күрһәтелгән зат та ҡасандыр шундай уҡ статусҡа эйә булып, заманалар үтә килә уға ер үгеҙе төҫө бирелһә ни ғәжәп.

Башҡорт эпосында ҡоҙғон (уға ҡорбан килтерәләр) менән «Авеста»лағы варган [21], «Аҡбуҙат» эпосында йыш телгә алынған ғүҙәллек яҡсыһы Сура батыр менән Иран мифындағы һыу һәм уның илаһы Ардви-Сура (VII, 57), «Урал батыр»ҙағы Самрау батша менән Иран мифологияһындағы Симург (ә ул «Авеста»лағы бөркөткә тартым Саэна образына оҡшаша) араһында ла оҡшашлыҡ һәм йәнәшлектәрҙе билдәләргә була.

Шундай бер фекер бар: «Авеста» фарсы телләләр менән скифтарҙың тура тип йөрөтөлгән этник төркөмө араһындағы көрәш һөҙөмтәһендә тыуған икән [22]. Шуға күрә унда скиф йоғонтоһо булыуы ихтимал. Билдәле тюрколог С. Е. Маловтың фекеренсә, Көнсығыш Европаның көньяғындағы скифтар араһында төрки

---

[20] Мифы народов мира / Под. ред. С. А. Токарева. М., 1991. Т. 1. С. 203, 635.

[21] Авеста. С. 98.

[22] Абаев В. И. Избранные труды: Религия, фольклор, литература. Владикавказ, 1990. С. 26.

телле ҡәбиләләр ҙә булған[23]. Ә ул ҡәбиләләрҙән аҙаҡ башҡорт этносын хасил итеүҙә ҡатнашыусылар булыуы бик ихтимал. Быныһы бер булһа, икенсе яҡтан, башҡорт этносының формалашыуында фарсы телдәреләрҙең өлөшө ҙур булған[24]. Ошонан сығып, иран һәм башҡорттоң мәҙәни мираҫындағы, шул иҫәптән «Урал батыр» менән «Авеста»лағы, уртаҡлыҡ билдәле дәрәжәлә этногенетик бәйләнеш һөҙөмтәһе тип билдәләп булалыр.

### 3. БАШҠОРТ ҺӘМ АЛТАЙ ЭПОСЫНЫҢ ТАМЫРҘАШЛЫҒЫ

Башҡорт эпосы менән ҡәрҙәшебеҙ алтайҙарҙың эпик ҡомартҡылары араһында ла яҡынлыҡтар күҙәтергә була. Төркиҙәр араһынан уларҙың ғына ошо мираҫында боронғолоҡ нык һаҡланған тигән фекер бар. Шуға күрә лә артыҡ сәселеп китмәҫтән, шул мираҫ менән үҙебеҙҙең эпостар араһындағы оҡшашлыҡты йәнә иң архаик ҡобайырыбыҙ «Урал батыр» менән ҡыҫҡаса сағыштырыу миҫалында ғына күрһәтмәксебеҙ.

Мифтарҙағы ҡаһарман-алыптар йәйәү йөрөй, агас, тимер йәки башҡа төрлө таяҡ менән ҡоралләна. Алтайҙың «Аҡ ҡаан» («Аҡ хан») тигән әҫәрендә Тенек-Беке батыр күктән төшә лә, Делбиген тигән мифик затты ете ҡоласлыҡ тимер таяғы менән үлтерә. «Оленгира»һында иһә Алтын ҡаҙыҡ (беҙҙеңсә Тимер ҡаҙыҡ) батыр, теләһә, уға ултырып оса[25].

«Батыр хикмәтле таяҡ менән эш итә» мотивы «Урал батыр» әҫәрендә лә бар: Зәрҡумдың атаһы Әзрәҡәнең ыйыы башлы таяғы һыуҙан да, уттан да һаҡлай, дошманыңа күренмәҫлек итә ала.

Урал батырҙың Айҙан, Ҡояштан тыуған ҡыҙҙар менән никахҡа инеүе Тенек-Бекенең Ай менән Ҡояш артынан килеп сығыуын хәтерләтә.

Эпос ҡаһарманының архаик тибы — йәйәүле һунарсы. Икенсе төрлө әйткәндә, һунарсы геройҙың тап йәйәү йөрөүе — эпостың боронғолоғоноң мөһим бер билдәһе ул. Алтай һәм башҡорт эпостарының да боронғолоғон шул юл менән дә билдәләп була. Йәйәүле һунарсы ике халыҡтың эпик мираҫында ла тәүҙә — булан («Урал батыр», «Әйнә менән Гәйнә»), торараҡ ҡына ат менә.

Алтай эпосында батырға тәғәйен атты Тау әйәһе йә һыу әйәһе, йә иһә Күк (тәңре) үҙе ебәрә[26]. «Урал батыр»ҙағы Аҡбуҙат та, Һарат та — Күктән ебәрелмеш мал: береһе — Ҡояш ҡыҙыныҡы, икенсеһе — Ай ҡыҙыныҡы. «Оленгира» эпосындағы Алтын ҡаҙыҡ, алтын таяғына ултырып осоп китеп, күктә Алтын

---

[23] Малов С. Е. Древние и новые тюркские языки // Известия АН СССР Отд. литер. и языка. Т. XI. Вып. 2. М., 1952. С. 135—143.

[24] Р. Г. Кузеев әйтеүенсә, мәҫәлән, бөрйәндәр ана шундайҙар иҫәбенә инә / Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М.: Наука, 1974. С. 143/. Ә «Урал батыр» эпосын Мөхәммәтша Буранголовҡа яҙҙырыусы Ғәбидулла сәсән Арғынбаев менән Хәмит сәсән Әлмөхәмәтов — бөрйән ырыуы вәкилдәре.

[25] Суразаков С. С. Алтайский героический эпос. М.: Наука, 1988. С. 36.

[26] Шунда уҡ. 96-сы б.

ҡаҙыҡ йондоҙ булып — тороп ҡалһа, Башҡорт мифындағы Аҡбуҙат (Буҙат) менән Һарат та күккә аша, үҙҙәре лә, улар бәйләнгән тимер ҡаҙыҡ та йондоҙға әүерелә. Эпостың атты космогоник зат тип таныуы, уны изге йән эйәһе тигән инаныуҙан килә.

«Урал батыр» әҫәрендә лә, «Авеста»ла ла, алтай эпосында ла, Гильгамеш хаҡындағы поэмала ла, хатта ҡырғыҙҙың тарихи эпосы «Манас»та ла үгеҙ әҫәр ҡаһарманының дошманына хеҙмәт итеүсе рәүешендә күрһәтелә (о был мотивтың иншмә башын Иран-Туран мөнәсәбәттәрендә эҙләү дөрөҫ булыр). Алтай эпосында Делбеген, Эрлик кеүек изге мифик заттар үгеҙ менеп йөрөй. Саха, бүрәт, тыуа (тува), хаҡас һәм шор халыҡтары эпосында ла бар бындай миҫалдар[27]. Күрәһең, бара-тора, герой ни менһә лә, һыбайлы булыу, ғөмүмән, изгеләр өлөшө тип баһалана башлаған. Шуға ла Урал батырҙы юҡҡа ғына берсә боланға, берсә арыҫланға атландырмаған халыҡ хыялы.

Күп кенә Алтай эпостарына Кер-Дьутпа (Көрән Йотоусы) йәки Кер-Балыҡ (Көрән Балыҡ) тигән мифик персонаж хас. Береһе — дәү йылан, икенсеһе — балыҡ ҡиәфәтендә сығыш яһаһалар ҙа, С. С. Суразаков фекеренсә, улар, асылда, бер үк персонаж. Уның үҙ ҡорбандарын йотоуы ҡараңғылыҡ донъяһын юғалтыуҙы кәүҙәләндерә[28]. Уға «Урал батыр» эпосындағы бөтә йыландар ҙа, айырыуса Зәрҡум яҡын. Ул да әле йылан булып болан йота, ҡорбанын әле балыҡ ҡиәфәтенә инеп һоғонорға тырыша. Алтайҙың «Маадай-ҡара» әҫәрендәге ут бөркөүсе алты башлы йылан «Урал батыр»ҙағы ут бөркөүсе Әзрәҡәне хәтерләтә. Йәнә, «Кёгюдей-Кёкшенс һәм Боодай-Коо» әҫәрендә, Делбеген шатланған саҡта, бер башынын — ҡысҡырып көлөүе, икенсеһенең — йырлауы, өсөнсөһөнөң — ҡамлауы ла «Урал батыр» әҫәрендәге Ҡәһҡәһәне хәтерләргә мәжбүр итә (фарсынан үҙебеҙгә күсергәндә ул «ҡысҡырып көлөүсе» тигәнде аңлата булыр).

Башҡорт һәм алтай эпостарын (хатта шул уҡ «Урал батыр»ҙы ла) тағы ла төпкәрәк китеп сағыштырған суррәттә, йәнә әллә күпме оҡшашлыҡ, уртаҡ һәм һүҙмә һүҙ тап килештәрҙе билдәләргә булыр ине. Уларҙың береһенең дә осраҡлы булыуы мөмкин түгел. Улар беҙгә алтай эпосы ла, башҡорттоҡо ла тамырҙары менән бик боронғо замандарҙы сағылдырған уртаҡ мифологик мотивтар һәм образдар менән тоташҡан тигән фекергә килергә ерлек бирә. Был фекерҙе алтай һәм башҡорт ырыуҙарынан күптәрҙең этник сығышы бер тамырҙан булыуы ла ҡеүәтләй.

---

[27] Шунда уҡ. 40-сы б.

[28] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. С. 137, 170, 171, 350—353.

## 4. «ГЕРОЙ ҒӘҘӘТИ БУЛМАҒАН ҠЫҘ МЕНӘН НИКАХЛАША» МОТИВЫ

Ырыу ҡоролошона, әйтәйек дуалистик йәмғиәткә, хас экзогамия ҡанундары, ирле-ҡатынлы булып йәшәргә теләүселәрҙең икеһенең ике ҡандан, ике нәҫелдән (ике фратриянан, ике ҡәбиләырыуҙан) булыуы мотлаҡ, тип белгән. «Үҙендеке — үҙәктә» тигән кеүек, һәр кем үҙ ырыуын тик ыңғай яҡтан ғына, ә ҡаршы яҡты гел кире сифаттар кәүҙәләнеше рәүешендә генә баһалаған. Шул сәбәптән матриархат йоғонтоһон кисергән әкиәттәрҙә кейәү булаһы кеше көндөҙ йә хайуан, йә ағас (түңгәк, түмәр) ҡиәфәтенә инә алыусы зат рәүешендә кәүҙәләнеш алған («Ҡылмашәкәр»). Патриархат дәүеренә ишаралағандарында иһә, киреһенсә, кәләш зооморф зат итеп һүрәтләнә (йә ул аҡҡош, йә кәкүк; йә инә бүре, йә нисек). Мифологик эпос геройының кәләште икенсе йыныстан, зооморф заттан, ҡоштар нәҫеленән (Урал батырҙың — Һомай ҡошто, Һәүбән менән Заятүләктең — һыу һылыуын) алыуы шуның менән аңлатыла. Мифтарҙа «никах—ҡапма-ҡаршы донъяларҙың космос кимәлендә берегеүе[29]» тип аңлатыла. Ер кешеләре булған Һәүбән менән Заятүләктең һыу аҫты батшаһы ҡыҙын кәләш итеп алыуы ана шундай мәғәнәгә эйә.

Донъя мифологияһында геройға, ниндәйҙер бурысты үтәү өсөн (мәҫәлән, тылсымлы әкиәт геройына йәрәшәһе ҡыҙын эҙләгәндә), ғәҙәттә, һыу аша сығырға кәрәк була. Һыу ындай осраҡтарҙа мифологияла киң билдәле «Донъя йылғаһы» образына олғаша. Ул йылға ғәҙәти һыу ғына түгел, ә ике донъяны, ҡараңғылыҡ менән яҡтылыҡты (ҡара көстәр менән изге көстәрҙе, үлем менән тереклекте) айырып тороусы космик йылға. Икенсе төрлө әйткәндә, кешелеккә ят донъя менән кешелеккә хасын тоташтырыусы сик тә. Геройҙың шул сикте аша сығыуы талап ителә. «Урал батыр» эпосының геройы Һомайҙы алыуға өлгәшеү өсөн даръялар кисмәй. Уның байына, шул маҡсатын бойомға ашырыу ниәтенән, уға башҡа ҡаршылыҡтарҙы күп кисерергә тура килә. Ағаһы Шүлгән, шыбағала үҙенә сыҡҡан юлдан китәһе урынға, йола боҙоп, уның өлөшөнә төшкән юлды тартып ала. Артабан Урал батшаның үгеҙе, батырҙары менән көс һынаша, аҫҡы донъяны кәүҙәләндереүсе Ҡәһҡәһә иленә юлыға, Һомайға уның һеңлеһе Айһылыуҙы табып алып килә, Аҡбуҙатты яулау бәйгеһендә көс һынаша һ. б. Күрәһең, донъя йылғаһы мифтарға ике донъяны айырып һәм тоташтырып ятыусы сикте генә аңлатмаған. Ул шулай уҡ, ғөмүмән, «герой алдындағы ҡаршылыҡ» тигән мәғәнәгә лә эйә булғандыр. Һәр хәлдә, «Урал батыр» эпосында был мотив «ҡаршылыҡ» төшөнсәһендә генә һаҡланған, ә уның кәүҙәләнеше икенсе форма алған. Иң мөһиме, кәләштең икенсе йыныстан булырға тейешлеге тәүтормош ҡоролошона хас ырыу экзогамияһы ҡанунына, шул ҡанунды мифологик образлаштырыу принцибына ярашлы булыуы эҙмә-эҙлекле күҙәтелгән: Һомай—Күк батшаһы Самрау менән Ҡояш ҡыҙы, йәғни тоҡомо кешегә ят заттан. Әйт-

[29] Евсюков В. В. Мифы о Вселенной. С. 55.

кәндәй, «Күк» һүҙе был осраҡта «икһеҙ-сикһеҙ» тигән төшөнсәне кәүҙәләндерә. Ә был төшөнсә «икһеҙ-сикһеҙ» даръя, диңгеҙ төшөнсәһен алыштырған булыуы ла ихтимал. Ни өсөн тигәндә, ошоға ишара яһаусы мифтар бар. Боронғо мысыр, Месопотамия мифы буйынса, күк — икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ тип танылған. Мысыр мифы буйынса, Ҡояштың бабаһы, йәғни уларҙың иң бөйөк илаһы — Ра, үҙенең алтын ҡайығында, көндөҙ — ана шул диңгеҙ буйлап, төнөн ер аҫтындағы Нилда йөҙә. Көн менән төндөң сиратланышын мысырҙар бына шулай аңлаған[30]. Ошоноң ише мифтарҙы иҫәпкә алһаҡ, «Урал батыр» эпосында донъя мифологияһынан мәғлүм «никах — ҡапма-ҡаршы донъяларҙың космос кимәлендә берегеүе» мотивы һүҙмә-һүҙ бойомға ашырыуын төшөнөүе ауыр түгел.

Шуныһы ла иғтибарҙы тарта. Әле һүҙ барған мифологик эпостарҙың геройы «икеләтә ят», хатта «өсләтә ят» затты кәләш итә. Әйткәнебеҙсә, Һомай — ҡош ҡиәфәтендәге ҡыҙ ғына түгел, күк ҡыҙы ла; Нәркәс менән Һыуһылыу иһә — алтын өйрәк рәүешенә кергән һылыу ҡыҙҙар, улай ғына ла түгел — һыу аҫты батшаһының ҡыҙҙары. Быңдай алым, бер яҡтан, был образдарҙың бик тә архаик сығышынан килә; икенсенән, уларҙан тыуасаҡ, уларҙан ҡаласаҡ нәҫелдең тотемистик сығышлы, йәғни ғәҙәттән тыш затлы икәненә, баҫым яһау сараһын үтәүе лә ихтимал.

«Герой үҙенә иште ҡош ҡиәфәтленән һайлай» мотивына икенсе яҡтан килергә лә була. Боронғо мифологик ҡараштар буйынса, ҡош-ҡорт — әҙәм балаһының донъяға яралыуына тәүсәбәп тип иҫәпләнгән. Шуға ла Һомайҙы ла, ҡош ҡиәфәтен алыуға һәләтле Нәркәс менән Һыуһылыуҙы ла кеше затының (ырыуҙың) әсәһе (инәһе) итеп танытырға теләүгә төшөнөүе ҡыйын түгел.

«Ҡош-ҡорт — әҙәм балаһының ата-инәһе» тигән мифологик мотивҡа нигеҙләнгән сюжеттар, ғәҙәттә, үлгәндән һуң «кеше яңынан үҙ асылына ҡайта», йәғни «киренән ҡош-ҡортҡа әүерелә»[31] менән ослана. Был мотив иһә беҙҙең эпостарыбыҙҙа осрамай.

## 5. МИФОЛОГИК ЭПОСТАРҘА «АТТЫ ҠУЛҒА ЭЙӘЛӘШТЕРЕҮ» МОТИВЫНЫҢ ИДЕЯ-ХУДОЖЕСТВОЛЫ АСЫЛЫ

Йылҡы культына инаныу һәм уның фольклорҙа сағылышы хаҡында Р. Г. Кузеев, Ҡирәй Мәргән, М. М. Сәғитов, М. Х. Минһажетдинов, Ф. А. Нәҙершина, Ә. М. Сөләймәнов һ. б. хеҙмәттәрендә әйтелгәне бар. Шунлыҡтан бында, һүҙҙе оҙон-оҙаҡҡа һуҙып тормаҫтан, бары шуға ғына иғтибар иттерге килә. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарында йылҡы малының илаһи зат итеп күрһәтелеүенә һәр саҡ баҫым яһалыр булды. Быңдай саҡта тәүге әҫәрҙә Аҡбуҙат күктән төшкән,

[30] Евсюков В. В. Мифы о вселенной. С. 29—30.
[31] Мелетинский Е. М. Происхождение героического эпоса. С. 26—27.

ҡалған икәүһендә затлы йылҡы малы күлдән сыҡҡан мал тип аңлатылыуына таяндылар. Был фекер менән тулыһынса килешкән сүрәттә лә, уға бер асыҡлыҡ индермәй булмай. Әйтелгәненсә, архаик мифтарҙа күк йөҙө менән Донъя диңгеҙе төшөнсәләре араһында боронғолар айырма күрмәгән. Шунан сығып фекер йөрөткәндә, «Урал батыр» эпосында Аҡбуҙаттың күктән төшөүе, асылда, уның да һыуҙан сығыуын аңлата булыр. Икенсе төрлө әйткәндә, «затлы йылҡы күктән төшкән» мотивы ҡасандыр «затлы йылҡы күлдән (диңгеҙҙән) сыҡҡан» мотивының инварианты булған, хәҙер иһә тәүгеһе, тел аҫтына тел йәшереп (ситләтеп), икенсеһен күҙ уңында тотоуға тиң.

«Затлы йылҡы күлдән сыҡҡан» мотивы «Ҡара юрға» ҡобайырында ла (һәр хәлдә, Усман сәсән Сәйетовтан 1960 йылда Ҡ. Мәргән яҙып алған версияһында ла) бар. Н. В. Салтыков яҙып алған версияла Ҡара юрғаның, эйәһенә ҡайтмай, диңгеҙ тарта китеүе лә башҡа түгелдер. «Аҡһаҡ ҡола» эпосының да (Ғабдулла сәсән Агишевтан Ҡ. Мәргән яҙып алған версияһында) ул туранан-тура ҡабатланмай, әммә күҙ уңында тотола. Аҡһаҡ ҡоланың Шүлгән күленән сыҡҡан йылҡы затынан икәненә башта уҡ иғтибар иттерелә: «Булған, ти, бик затлы тоҡомдан бер бейә. Ул Шүлгән күленән сыҡҡан йылҡы нәҫеленән булған, ти». Аҡһаҡ ҡола шул бейәнән тыуа. Шуныһы ҡыҙыҡ. Ул да ер өҫтө донъяһына Шүлгән төбөнән сыға. Сөнки әсәһе «ҡолонлау өсөн һәр саҡ үҙенең төп төбәгенә ҡайта икән», йәғни «Шүлгән күле төбөнә төшөп» ҡолонлай икән. Шуның арҡаһында Аҡһаҡ ҡола икеләтә һыу аты (сығышы менән Шүлгән төбөнә бәйле ат) булып сыға. Затлы йылҡының һыу аҫтынан сығыуына ышанған сүрәттә лә, «Аҡһаҡ ҡола» эпосында был мотивты шулай бер ни тиклем «реаль ерлеккә» күсереп интерпритацияларға тырышҡандар. «Ҡара юрға» эпосының Хәсән Буранғоловтан Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған версияһы буйынса, әсәһе Ҡара юрғаны, ситкә ҡасып китеп, тау битендә тыуҙыра. «Бейә тау битенә ҡасып ҡолонлай» мотивы эпостарға ла, легенда, әкиәттәргә лә хас түгел. Ул — Ҡара юрғаның тыумышын мөғжизәлектән «әрсеп», кеше ышанмалы (реалистик) итеп аңлатыр өсөн, «затлы йылҡы малы һыу аҫтынан сыҡҡан» мотивын яһалма алыштырыу һөҙөмтәһе генә булһа кәрәк.

Донъя мифологияһында, атап әйткәндә, һинд-европа (боронғо һиндтарҙың Ашвиндар, гректарҙың Диоскуралар тураһындағы һәм балтия) мифтарының[32] игеҙәктәр циклына ҡарағандарында ике ат илаһи игеҙәктәрҙе кәүҙәләндергән. Уларҙың да байтағы күк йөҙө, күк илаһтары менән бәйле. «Урал батыр» эпосына ингән Аҡбуҙат (Буҙат) менән Һарат тураһындағы миф та уларҙың йыраҡ «кәрҙәше» булыуы ихтимал.

Йылҡы малына инаныслы мөнәсәбәт Аҡбуҙатты ла, Заятүләктең Аҡбуҙсаһын (толпарын) да, Аҡһаҡ ҡоланы ла, Ҡара юрғаны ла мал ҡото тип таныуҙа, кешесә һөйләшеүсе (антропоморф

---

[32] Мифы народов мира. Т. 1. С. 114—145, 153—158, 383—384.

үҙенсәлекле) зат тип белеүҙә сағыла. Мал ҡото булған ат үҙ эйәһен ырыу ҡото итеүҙә лә, йәғни уға иш табышып биреүҙә лә хәл иткес роль атҡарыусы зат тип раҫлана эпостарҙа. «Урал батыр»ҙа, мәҫәлән, Аҡбуҙатҡа оҡшаған батыр ғына Һомайға тиң була ала тигән раҫлау бар. Ғаиләә ҡороуға беренсе булып ҡыҙҙың ынтылыш яһауында, матриархат йолаһы сағылыуы (Қ. Мәргәнсә) мәсьәләһенә туҡталып тормаҫтан, шуны ғына әйтеп үтер кәрәк булыр. Аҡбуҙат: «Матур миңә дан булмаҫ», — тип ҡырт киҫә. Башҡа бәһлеүәндәр, шул иҫәптән Шүлгән ағаһы, ҡуҙғата ла алмаған етмеш батман ауырлығы ташты Урал батыр урынынан ҡумшытып ҡына ҡалмай, йоҙроғо менән тәгәрәтә һуғып, иртәнән ҡара кискәсә күктә юғалып тормалы итеп сөйөп ебәреп, төшөп килгәнендә, һыңар ҡулы менән генә эләктереп, Әзрәҡә иленә бырағтырыуы була — Аҡбуҙат уға килеп:

— Мин һинеке, батыр! — тип
Уға буйын биргән, ти.

Аҡыл эйәләренә генә хас зиһенгә эйә булған аттың матурлыҡтан батырлыҡты өҫтөн ҡуйыуы — Һомайҙың да зауыгы шулай икәнен аңғарта.

«Ҡара юрға» эпосында иһә егеттең буй-һыны, көс ғәйрәте ғәмәлдә һынландырылмай. Әммә ул үҙ бәҫен белгән кеше итеп күрһәтелә. Быға беҙ Ҡара юрға алдына һылыуҙарҙың һылыуын килтереү бурысын ҡуйыуынан төшөнәбеҙ.

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа һәм «Аҡһаҡ ҡола» эпосында «ат үҙ эйәһенә иш табып бирә» мотивы туранан-тура сағылмай. Ҡыҙ янына барыу Заятүләктең башына ла инмәй. Уның өсөн яуыз ағаларынан ҡасыу мөһим. Кәләше булаһы Һыуһылыу янына толпары алып килә. Тимәк, икенсе төрлө әйткәндә, егеттең кәләш табыуына аҫтындағы аты сәбәпсе була. Уратып-уратып уйлағанда, ошо уҡ һығымта «Аҡһаҡ ҡола» эпосына ла ҡулай. Дөрөҫ, һылыу ҡыҙға юлығыуы өсөн бай улы аҫтындағы атҡа түгел, ҡасҡанына бурыслы. Булһа ни, уның ҡарауы «ҡыҙ менән осраша» мотивының асылы бер: уға ат сәбәпсе.

Матурлыҡ һәм батырлыҡ проблемаһына килгәндә инде, уныһы «Аҡһаҡ ҡола»ла «Урал батыр»ҙағыса хәл ителә. Иң әүәл тышҡы матурлыҡҡа иғтибар йүнәлтелә: ҡыҙҙың һомғоллоғына, йөҙөнөң камиллығына, егеттең бәһлеүәнлегенә, ғорур һынына һәҡланыу белдерелә. Ике персонаждың бер күреүҙә үк бер-береһен күңелгә ятышлы тип табыуында, халыҡтың батырҙан — батыр, матурҙан—матур тыуа, тигән инанысы һәм матурлыҡ идеалы аныҡ бирелгән. Ә был — «Урал батыр»ҙа ил ҡартының:

— Ил батыры — батырҙан,
Батыр ирҙән тыуыр ул, —

тип әйткәнен тағы бер ҡеүәтләү тигән һүҙ.

Бына шундай талаптарға яуап бирерҙәй ишкә юлыҡтырыусы

аттың камиллығы иһә берсә уның һәләтен хәбәр итеү, берсә тышкы булмышын тасуирлау аша асыла. «Ҡара юрға» һәм «Аҡһаҡ ҡола» эпосында алтмыш өйөргә баш булыуын әйтеү — Ҡара юрға менән Аҡһаҡ ҡоланың йылҡы ното икәненә, йәғни уларҙың айғырлыҡ һәләтенә баҫым яһау ул. Тимәк, улар тиңдәшһеҙ ат. Дөрөҫ, тәбиғи төҫ килбәте, эйәһе өҫтәгән матурлығы — өҫтөндәге эйәр-өпсөнө хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Ҡара юрғаның ғына киләсәктә ундай матурлыҡҡа эйә булыры — ялдарының уҡаланыры, тояҡтарының — көмөшләнере әйтелә.

Аҡбуҙат иһә үҙе менән йылҡы малы матурлығының ике төрөн дә кәүҙәләндерә: ул ифрат һәләтле лә, күрер күҙгә лә күрмәлекле. Тик шуныһы, уның күрер күҙгә күрмәлеге хаҡында һүҙ барғанда, «Урал батыр»ҙа уға кеше ҡулы өҫтәгән матурлыҡ биш кенә юлда әйтелеп, бары эйәренә, йүгәненә, эйәр ҡашындағы алмас ҡылысына һәм ауыҙлығына ғына иғтибар ителһә, «Аҡбуҙат»-та матурлығының кеше ҡулы тарафынан тыуҙырылғанына өҫтөнлөк бирелгән. Бының сәбәбе шуның менән аңлатыла: «Урал батыр»ҙа герой, уның менән осрашҡанғаса, менге малы итеп бала сағында болан, егет ҡорона тулып, ҡәҙимге культур геройҙарға хас эштәр атҡара-атҡара сәйәхәт иткәндә, елле арыҫлан менеп йөрөй. Ә Аҡбуҙат, Урал батыр уны тәү күргәндә, әле ҡулға эйәләштерелмәгән, меңгегә өйрәтелмәгән ат була. Ошо фекергә эпостың И. Рәхмәтуллиндан яҙып алынған версияһында Аҡбуҙаттың кеше ҡулы менән биҙәлеше хаҡында бөтөнләй әйтелмәйенсә, «башы йүгән күрмәгән, һыртына эйәр теймәгән»легенә баҫым яһалыуын, артабан уның тәбиғи матурлығы хаҡында ғына һүҙ алып барылыуын шуның менән генә аңлатып була торғандыр.

Һорау тыуырға мөмкин. Улайһа «Урал батыр» эпосының төп нөсхәһендә Аҡбуҙаттың эйәрле, йүгәнле, ауыҙлыҡлы булыуы, эйәренең ҡашына ҡылыс тағылыуы ниҙе аңлата? Күрәһең, күктән төшөп, «Һомай һылыу алдына, килеп башын эйгән» мәлендә генә

Һыртына эйәр һалынған...,
Эйәренең ҡашына
Алмас ҡылыс тағылған.

Бик күп батырҙарҙы, шул иҫәптән Шүлгәнде лә, һынап, Урал батыр көсөн татығас:

Буҙат килеп шунан һуң
Уралға баш эйгән, ти:

«Аҡбуҙат» эпосында иһә буҙ толпар күптән ҡулға эйәләштерелгән, әммә эйәһен юғалтҡан ат тип танытыла.

Шуныһы мөһим: «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпостарында ҡош ҡиәфәтен алыуға һәләтле ҡыҙҙы (Һомайҙы, Нәркәсте) кәләш иткәс кенә, батыр егет Аҡбуҙатҡа менергә хоҡуҡ ала. Быны мифологик мотивтарға ғына ҡоролған сюжеттың героик эпос йырҙаһына төшөп үҫешә башлауының сиге тип баһаларға мөмкин. Аҡ-

буҙаттың эйәр-өпсөнөнөң тасуирланышының тулылыҡ кимәле иһә — ҡайһы эпоста мифологик, ҡайһыһында донъяуи (реалистик) башланғыс өҫтөнлөк алыуын таныулы итә. Тимәк, ошо йәһәттән ҡарағанда ла, Аҡбуҙаттың эйәр-өпсөнөн яугир хәжәте кимәленән бөтә тулылығында тасуирлаған «Аҡбуҙат» менән сағыштырғанда, йүгән, ауыҙлыҡ, эйәр һәм алмас ҡылысты ғына телгә алған «Урал батыр» эпосының боронғораҡ икәненә төшөнөп булыр.

Тарихи яҡтан иһә, мәсьәләгә шундай асыҡлыҡ индерергә лә мөмкин. Б. э. т. XVIII быуатта йәшәгән Шумер батшалығы Хаммурапинан ҡалған закондар йыйынтығындағы 282 пункттың береһендә лә ат телгә алынмай әле. Сама менән 2000 йыл әүәл яҙылған Шумер мәҫәлдәрендә генә уның хаҡында һүҙ сыға бирел ҡала. Шумерҙа ура династияһынан сыҡҡан Шулга атлы батшаның ҡаһарманлыҡтарын данлаған гимнда «ҡойроғон ялбыратып сабыусы етеҙ ат» образы бирелгән. Фәндә иһә кешеләр б. э. т. III—II мең йыллыҡтар араһында атты тик менеп йөрөргә генә өйрәнгән тигән фекер нығынған. Тимәк, Аҡбуҙат образы ла, Ҡара юрға менән Аҡһаҡ ҡола образы ла шунан «ҡарт» булыуы мөмкин түгел. Әгәр инде йүгән бынан биш мең йыл борон файҙалана башланһа ла, тибенге (шпор) ике мең йыллап, өҙәңге иһә мең ярым йыл әүәл генә, эйәр һәм уның кәрәк ярағының тағы ла аҙағыраҡ уйлап табылыуын[33] иҫәпкә алһаҡ, уларҙың образы тағы ла күпкә йәшерәк икәненә төшөнөрбөҙ. Хәйер, ат өҫтөндәге ҡулайламалар тасуирламаһы һуңғыраҡ дәүерҙәр өҫтәмәһе булыуы ла ихтимал. Быныһын да оноторға ярамай. Бәс, шулай булғас, «Урал батыр» эпосының Исмәғил Рәхмәтуллин версияһында Аҡбуҙаттың һүрәтләнеше күпкә архаик булып килеп сыға түгелме? Ни өсөн тигәндә, ул, әйткәнебеҙсә, әле йүгәндең ни икәнен дә белмәгән ат тип таныштырыла.

Быныһы бер. Икенсенән, Урал батырға Аҡбуҙат, теге версиянан айырмалы рәүештә, үҙе килеп буй бирен тормай. Дөрөҫ, уны ятһынмай, тик кенә тора. Әммә етеҙлек менән һыртына һикереүе була — асыуынан уны бик юғары сөйөп ебәрә.

Шуныһы иғтибарҙы тарта, йүгәндең ни икәнен Аҡбуҙ ғына түгел, Урал да белмәгән. Иғтибар итегеҙ: «Ул тағы тырышып-тырышып тора һалды ла, йәнә Аҡбуҙға атланып, уға талпан һымаҡ йәбешеп алды, ти. Аҡбуҙ, күпме тырышмаһын, был юлы өҫтөндәге Уралды осорта алманы, ти. Шунан баш тартҡан яҡҡа ҡарап елдереп алып китте, ти». Һуңғы һөйләм — аттың йүгәнһеҙ булыуына айырым асыҡ баҫым яһау ул. Әммә шуныһы мөһим: эпостың был версияһында кеше өсөн атты ҡулға эйәләштереүе еңелдән булмауы, тәүге осорҙа аттың, кеше ихтыярын тыңлауға ҡарағанда, уға үҙ ихтыярын тағыуы үҙенсәлекле итеп художестволы сағылыш тапҡан. Шулай үҙ ихтыярына кешене буйһондороуы ла уның изгеләштерелеүенә бер сәбәп булыуы ихтимал.

Ретроспектив юҫыҡта ҡарағанда, әле әйтелгәндәр һәм «Урал

[33] Ковалевская В. Б. Конь и всадник. С. 11, 35, 64—91.

батыр» эпосында Уралдың тәүҙә арыҫланды менеп йөрөүен иҫәпкә алыу шундай һығымтаға килергә ерлек бирә. Беренсенән, «Урал батыр» эпосының М. Буранғолов яҙып алған версияһы ике сәсән тарафынан башҡарылыуы һөҙөмтәһендәлерме, нисектер, тарихи яҡтан ике дәүерҙе сағылдыра. Һомайҙың батырҙан 70 батманлыҡ ташты күтәрткән дәүеренә тиклемге өлөшө шул ваҡиғанан һуңғыһынан байтаҡҡа архаигыраҡ. Сөнки ул осорҙа батыр аттың ни икәнен дә белмәй. Тәүҙә болан, аҙаҡ иң көслө януарҙы, арыҫланды менеп йөрөүе, шунан ғына Аҡбуҙатҡа ултырыуы — әйткәнебеҙсә, архаик мифҡа ғына хас билдәләр. Тимәк, был версия буйынса, Урал образы баһадир ат образынан меңәр йылдарҙы эсенә алырҙай йәшкә ҡартыраҡ.

## 6. «АҠҺАҠ ҠОЛА» ЭПОСЫ ХАҠЫНДА

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, М. Сәғитов үҙенең инеш мәҡәләһендә мал-тыуар хаҡындағы башҡорт эпостарының сюжеттары бик йыйнаҡ булыуын билдәләй. Әммә йыйнаҡлыҡ — «ябай» тигәнде аңлатмай әле. «Аҡһаҡ ҡола» эпосын ғына алайыҡ. Ҡарамаҡҡа, сюжеты бер һыҙатлы, һәм уның фабулаһы шуға ғына ҡайтып ҡала кеүек: хужаһының йәйен-ҡышын алһыҙ-ялһыҙ иләүенә үс итеп, Аҡһаҡ ҡола өйөрҙәрен эйәртеп, ҡасып китә; тәбиғи, хужа эҙләү һала. Бер версия буйынса, финалда бай улы үлә. Икенсеһендә Аҡһаҡ ҡола үлтерелә. Эпостың беҙгә мәғлүм варианттарының күпселеге тәүге версияға ҡарай. Шуларҙы бер-береһе менән сағыштыра башлаһаң, сюжет механизмының ҡатмарлы ғына булыуына төшөнәһең. Уның үҫешен йылҡы ҡото Аҡһаҡ ҡола менән хужа (бай улы) араһындағы конфликт ҡына билдәләмәй. Был тәңгәлдә бүтән факторҙар ҙа мөһим роль уйнай. Конфликт өҫтөнә конфликт өҫтәлә. Өйөр айғыры Аҡһаҡ ҡола хужанан тыш, тәүҙә үҙенә теләктәш булған өйөрҙәре менән дә сәкәләшә. Бейәләр уны, «аҙҙырыусы», «туҙҙырыусы» тип баһалай башлай. Аҡһаҡ ҡола төшөндә шеш башында ут (ит) күреүен әйткәс:

— Аҙҙырған да — һин булдың,
Туҙҙырған да — һин булдың —
Үҙ башыңа, ҡарт ҡуҙаҡ! —

тип, уны ҡарғағандай итәләр. Тимәк, уға буй биреүҙән баш тартып, уны һанламай башлайҙар. Аҡһаҡ ҡоланы һанламай башлауҙары шунда ла күренә. Улар уны «ҡарт убыр» тип тә нарыҡлайҙар. Хатта «Ҡара башыңа булһын, ҡарт убыр!» — тип ҡарғыш әйтәләр («Бишҡолон» версияһы).

Конфликт Аҡһаҡ ҡоланың, йәш йылҡыларҙы һаҡлап алып ҡалып, ҡарттарын бай улына ҡырырға мөмкинлек биреүе менән хәл ителә. Өйөр айғырының был ҡыланышына тәрән аллегорик мәғәнә һалынған.

Финалда бай улының фәжиғәгә юлығыуының сәбәбе — һүҙ ма-

ғияһына инаныу, мифологик фекерләү менән нигеҙләнә. Һүҙ магияһы тигәндә, ниндәйҙер им-том, теләк (алғыш, ҡарғыш) түгел, ант итеү күҙ уңында тотола. Халыҡта «юҡҡа-барға ант итмә, юҡҡа-барға ант итһәң, ҡаза килер, ҡаза килмәһә, яза килер» тип киҫәтеү бар. «Аҡһаҡ ҡола» эпосы ла ошо киҫәтеүҙе ҡабатлай һымаҡ.

Әйтелгәндең хаҡлығын «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Таһир менән Зөһрә» ише эпостар ҙа ҡеүәтләй. Нәҙерен үтәмәүе арҡаһында ҡыҙҙың атаһы бәхетһеҙлеккә тарый: ҡыҙынан яҙа.

Башҡа эпик әҫәрҙәрҙәге һымаҡ, «Аҡһаҡ ҡола»ның геройы ла бер, мәгәр берәгәй ант итә! Әҫәр өсөн тап бына ошонооһо (берәүлеге, берәгәйлеге) — мөһим дә. Ә уның ҡасан, ни сәбәп арҡаһында әйтелеүенең әһәмиәте юҡ. Һәр хәлдә, эпоста ант килтереү моменты төрлө вариантта сюжет нигеҙендәге ваҡиғаның төрлө урынына тап килтерелә. Һөҙөмтә бер үк. 11-се вариантта егет ҡасҡан аттарҙы тоторға итә: «Әгәр Аҡһаҡ ҡоланы тотоп алып ҡайта алмаһам, эсем ярылһын!» — тип ебәрә. Аттарҙы алып ҡайта алмай — эсе ярылып һәләк була.

10-сы вариант буйынса, Аҡһаҡ ҡоланың: «Әгәр мине атмаҫҡа ант итеп, ер ашаһаң, мин һиңә малдарҙы килтерәм», — тип әйтеүенә, ер ашап тороп ант итә. Әммә шул антын боҙа — язаһын да ала. Эпостың 11-се вариантында «ант итеү — антҡа хыянат» мотивы «тыйыу-тыйыуһыҙланыу» мотивы менән көсәйтелә. Операның увертюраһында уҡ финалға ишара яһаусы ауаздар сыңлап-сыңлап киткән кеүек, сюжеттың төйөнләнеү моментында уҡ уның сиселешен аңғарта торған алымдар ҙа «Аҡһаҡ ҡола»ла бик тәбиғи ҡулланылған. Йылҡыларын ҡыуа сыҡҡан бай улы йола хоҡуғының, халыҡ этикаһының йәнә бер ҡануны менән иҫәпләшмәй. Юлда осраған ҡыҙҙың (кәләшенең йә ҡалынлыҡ ҡыҙының) ҡунаҡ булырға саҡырыуын ҡабул итмәй: йәнәһе, көңдәр (ҡол, хеҙмәтселәр) ҡорған тирмәгә инеүҙе, улар яраштырған ризыҡты ауыҙ итеүҙе, улар йәйгән түшәккә ятыуҙы үҙе өсөн түбәнселек тип белә. Ә халыҡта «боҫло ашты бора баҫма» тигән мәҡәл бар. «Өс ауыҙ һүҙ» тигән новеллистик әкиәттең (АТ 910 В) геройы, мәҫәлән, бары ошо һүҙҙе тотҡаны өсөн генә хаҡһыҙ рәүештә үлтерелеүҙән ҡотолоп ҡала [34]. Ҡунаҡсыллыҡты ҡабул итмәү, ризыҡты һанламау — оло яҙыҡлыҡ, ти халыҡ. Халыҡ инаныуы менән халыҡ этикаһы ла шуны ҡеүәтләй. Йәш ҡыҙҙың (кәләшенең) бай улына:

— Төшөп китһәң — көнлөк юл,
Төшмәй китһәң — айлыҡ юл, —

тип иҫкәртеүендә лә тәрән мәғәнә бар. Был һүҙҙәр — геройҙы: «Ашыҡҡан — ашҡа бешкән!» — тип иҫкәртеүгә бәрәбәр.

Унан килеп, Аҡһаҡ ҡоланың төшөндә шеш башында ит күреүе лә финалды иҫкәртеү вазифаһын үтәй.

[34] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. № 38.

Бәғзе варианттарҙа (мәҫәлән, 10-сыла) төш мотивы ике урында ҡулланыла: Аҡһаҡ ҡоланың төшөнән тыш, егеттең төшө хаҡында ла һүҙ бара. Аттарын эҙләргә сыҡҡан егет кәләшенә төшөн һөйләй. Йәш кәләшенең үҙенең яңғыҙ ҡалырын, йәғни бай улының үлерен юрай.

Бәғзе варианттарҙа егеттең төш күреүе хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Әммә кәләше уны ҡайтырға ашыҡтыра (7-се, 10-сы, 11-се вар). Ошо ҡыланышы уны әүлиә затлы кеше, һынсы кимәленә күтәрә. Хәйер, был хаҡта, туранан-тура әйтелгән варианттар ҙа мәғлүм. Абдразаҡов Миңлебулаттан Нигмәт Шонҡаров яҙып алған вариантта, ҡайтышлай кәләшенә һуғылғанында, егет унан: «Һин бөтәһен дә алдан беләһең. Минең ата-әсәм нисек ята икән?» — тип һорай.

Бай улын ашыҡтырыуының сәбәбен йәш ҡатындың (йә ҡыҙҙың):

> «Антың етте башыңа!
> Ҡырҡыңа ялды * һуйғандар,
> Ҡырҡың уҡытып яталар» (10-сы вар.);

«Ҡырҡ мулланы йыйҙылар, ҡырҡ баҫма еп бүлгәндәр, ҡырҡ ҡыҫырыҡ һуйҙылар, ҡырҡың уҡып торалар» (11-се вар.), — тип аңлатыуы «улдары тере. Әле, исмаһам, яңылыш булһа ла, егеттең үле хәбәре лә килмәгән. Ниңә шулай ашыға ата-әсә?» тигәнерәк һорау тыуҙыра. Күрәһең, эпоста күрәҙәлек итеүсе киләсәктәген бойомға ашҡан хәл итеп «күрә» (күҙ алдына баҫтыра). Шул арҡала киләсәк заман формаһы үткән заман формаһы менән алмаштырылған. Шуны иҫәпкә алһаҡ, әлеге һорауға урын ҡалмай. Уның байына «ниңә финалда бай улы мотлаҡ үлә?!» һорауы тыумай ҡалмай. Быға уйламай-нитмәй, дыуамалланып ҡәһәтләнеүе (ант итеүе) сәбәпсеме әллә? Бәлки ант мотлаҡ ҡырҡ көндә үтәлергә тейеш тигән йола ла булғандыр? Әйткәндәй, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының томға ингән тәүге вариантында ошоға бәйлерәк бер деталь бар. Күл төбөнән малланып, болланып, ҡоро ергә сыҡҡан Заятүләкте Һыуһылыу шулай иҫкәртә: «Әгәр ҙә һине (ҡәрҙәштәрең) көслөк менән алып китһәләр, ҡ ы р ҡ көндән һуң ошо урынға килерһең. Мин һине көтөрмөн. Асылыкүлһеҙ, һинһеҙ мин ҡырҡ көндән дә артыҡ йәшәй алмам!» Эпос буйынса, Заятүләк: «Һыуһылыуҙы ҡырҡ көн тулғансы килеп алырмын әле», — тип уйлай ғына. Әгәр ҙә, «Аҡһаҡ ҡола» эпосы, ысынлап та, анттың үтәлеү ваҡыты — ҡырҡ көн тигән инаныуға нигеҙләнә тигән фаразыбыҙ раҫ булһа, Заятүләк тә, инаныс логикаһы буйынса, эстән уйлау менән сикләнеп тормай, ант килтергән булырға тейеш. Ҡыҫҡаһы, бында этнографтар менән бергәләп уйланырға урын бар.

Бай улының ҡырҡын үткәреү йолаһының эпоста сағылған өлөшөндә бергәләп асыҡлай торған тағы бер мотив бар. Ул да булһа — «ҡырҡ» һанының тотороҡло ҡабатланышы: егеттең ҡырҡына ҡырҡ баҫма еп бүленә, ҡырҡ ҡыҫырыҡ (10, 11-се вар.)

ҡырҡ ҡуй, ҡырҡ тыу бейә, ҡырҡ үркәсле дөйә һуйыла (7-се вар.), ҡырҡ мулла саҡырыла (11-се вар.). Был миҫалдар ҡасандыр кешенең ҡырҡына ҡатнашы булған бөтә нәмә лә, хатта йоланы атҡарыусылар ҙа ҡырҡ булырға тейеш тип иҫәпләнгән булыуы ихтимал тигән фаразға урын ҡалдыра.

Шулай итеп, «Аҡһаҡ ҡола» эпосының сюжеты, ҡарамаҡҡа ябай булһа ла, бер-береһен көсәйтеүсе бер нисә мотивтың тығыҙ ойошоуынан хасил булған һәм шуныһы менән үҙенсәлекле лә. Мәғәнәүи яҡтан иһә ул тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле. Үҙендә халыҡ педагогикаһы, халыҡ этикаһы, концепцияларын да, халыҡтың экологик ҡараштарын да дөйөмләштерә. Кешесә фекер йөрөтөүе, һөйләшә алыусы зат итеп күрһәтелеүе менән Аҡһаҡ ҡола бер ни тиклем грек мифы персонаждары булған ярым кеше, ярым ат рәүешендә күҙалланыусы кентаврҙарҙы хәтерләтеүе менән дә әһәмиәтле.

## 7. «ҠАРА ЮРҒА» ЭПОСЫНЫҢ ӨС ВЕРСИЯҺЫ

«Ҡара юрға» эпосы ла мал-тыуар йәки экологик эпостар рәтенә ҡарай. «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға»лағы кеүек үк, унда ла әҙәм балаһы был ерҙә, Урал батыр әйтмешләй, баймаn табып йәшәр өсөн тәбиғәт менән «бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән» булырға тейеш тигән идея үткәрелә. Ә тәбиғәт ул әҫәрҙә мал-тыуар образында һынландырыла. Шундай уртаҡлығы булһа ла, әлеге идеяның художестволы асылышы һәр әҫәрҙә үҙенсә. «Аҡбуҙат»та кешенең мал менән ыңғай мөнәсәбәте бирелә. Һәүбән мифик толпарҙы буйһондороп, үҙенең хеҙмәтсеһе итеп кәмһетмәй, ә уның менән кәңәш-тойош итеп, килешеп эш итә. Шуның һөҙөмтәһендә генә бәхетһеҙҙәрҙе бәхетле итә: ирекһеҙгә ирек, малһыҙға мал бирә. Үҙен дә үлөшһөҙ ҡалдырмай: йән һөйгәне менән ҡауышыуына өлгәшә. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында иһә ул идея бай улының, үҙ йылҡылары менән мөнәсәбәтен яйға һала алмауы арҡаһында, фәжиғәгә дусар булыуын ентекләп һүрәтләү аша асыла. Ә бына «Ҡуңыр буға»ла (мәҫәлән, Х. Буранғолов һәм М. Мирхәйҙәров версиялары буйынса) мал-тыуар йөҙөндә образлаштырылған тәбиғәт менән кеше араһындағы мөнәсәбәт ике яҡлы, берсә «Аҡһаҡ ҡола»лағыса, берсә «Аҡбуҙат»тағыса ҡарала. Хатта кире йә ыңғай мөнәсәбәт кемдән сыҡһа, шуларына тиклем «ике яҡлы»: мал хужаларының береһе, йәғни ир кеше, һунар ҙа һунар тип үлеп бара; икенсеһе, уның ҡатыны артынан ата-әсәһе эйәртеп ебәргән (йәки шуның нәҫеле) өсөн өҙөлөп тора. Тәүгеһенең мөнәсәбәте мал-тыуарҙың йорт ташлауына килтерһә, икенсеһе конфликтты ыңғай хәл итеүгә ирештерә (бында тыуған тупраҡ тартыу мәсьәләһенә ҡағылмай торабыҙ). Тәбиғәт менән «бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән», «һин дә мин» йәшәү идеяһын, «Ҡуңыр буға»ның мал хаҡында хәстәрлек күреү кәрәк тигән юҫыҡта асыуын «Ҡара юрға» эпосы әләктереп алған кеүек. Күҙе төшкән ҡыҙҙы Ҡара юрғаһы ярҙамында алыуға өлгәшкәнсе, егет үҙен ҳәстәрлекле,

мал йәнле хужа тип таныта: ул тыуғас та, бүре тамаҡлауҙан һаҡлап алып ҡала; уны тәрбиәләп үҫтерә, яратып менә, әммә фарсит итмәй (бында «Аҡһаҡ ҡола» менән контаминациялашҡан йә уның йоғонтоһон кисергән варианттар иҫәпкә алынмай). Һәр вариант һайын бер ни тиклем төрләнә-төрләнә ҡабатланған:

Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Өйөр башы юрғам,
Ялбыр-йолбор ялыңды
Алтынлармын, юрғам,
Табыр-табыр тояғыңды
Көмөшләрмен, юрғам!

тигән теҙем дә эйәһенең Ҡара юрға өсөн өҙөлөп тороуы тураһында һөйләй.

Егеттең күҙе төшкән ҡыҙҙың Ҡара юрғаны менергә ҡыҙығыуы ла, шул арҡала хатта уны урлатыуы ла — һәйбәт тәрбиә күргәнгә, аттың һоҡланғыс булыуын ситләтеп әйтеү ул.

Дөйөм алғанда, һүҙ барған эпостың беҙгә мәғлүм бөтә тексталарында ла бына шулай мөһим уртаҡлыҡ күҙәтелә. Эйе, дөйөм алғанда ғына. Ә яҡынданыраҡ ҡарағанда, улар, асылда, өс версия хасил итә. Б е р  в е р с и я сюжеттың үтә ыҡсымлатылыуы, шуға күрә уртаҡ идеяны тура һуҡтырыңҡырап раҫлауы менән айырыла. Буйҙаҡ бай (бай улы) күҙе төшкән ҡыҙҙы, һоратып-һоратып та, ала алмағас, хәйләгә барып, Ҡара юрғаһынан урлата (Шакир Буранғолов, Рәхилә Түләкәевалар версияһы).

И к е н с е  в е р с и я тәүгеһенән Ҡара юрғаның «биография»һы тулыраҡ бирелеүе менән айырыла. Дөрөҫ, тәүгеһендәге һымаҡ уҡ, бында ла Ҡара юрға, эйәһенең күҙе төшкән ҡыҙҙы уның үтенесе буйынса, тәүҙә үҙенә ҡыҙыҡтыра, янына ылыҡтыра, һыртына ултырырға ирек ҡуя ла кире боролоп саба. Әммә был версияның варианттарында ваҡиға шыма ғына үҫмәй: егет еңел генә кәләшле булмай. Тәүҙә Ҡара юрға менән мөнәсәбәтте асыҡларға тура килә. Эйәһенең үтенесен үтәгәнсе, Ҡара юрға уның менән саүҙалашып ала. Йәнәһе лә:

— Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең.
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һанайһың.
Шуға ла: — Һин әйткәнде мин алмам,
Ҡыҙ янына мин бармам, —

тип ҡарыулаша. Йәғни «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға» эпостарынан таныш теҙем менән контаминациялаша, эпостың был версияһы йәнә шуның менән үҙенсәлекле: ул, әле әйтелгән контаминациянан тыш, «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәктәрендә микросюжет рәүешендә файҙаланылған. «Йылҡысыҡҡан

ҡүл» легендаһының сюжетын хасил итеүсе «Һыу аҫтынан йылҡы сыға» мотивы һәм тәүге версияның сюжеты менән дә шундай уҡ бәйләнешкә инә. Шул өс тематик мотив менән контаминацияға инеүе арҡаһында Ҡара юрғаның «биографияһы» тулыраҡ асылғандай тойола. Әммә был «тулылыҡ» шартлы ғына, сөнки ул «ҡоршалған» аморф «биография» ғына.

Өсөнсө версияла иһә эш башҡасараҡ тора. Хәсән Буранғоловтан яҙып алынған тексты өсөнсө версияның бер варианты тип иҫәпләргә була. Сөнки, беренсенән, бында Ҡара юрғаның «биографияһы» баштан аяҡ бер тоташтан «тәбиғи булмышында» бирелә: ҡайһы бер әкиәттәребеҙҙәгесә (мәҫәлән: «Алтынғойроҡ, көмөш ял» әкиәтендәгесә) бында ла киләсәктә затлы йылҡы малы булыр ҡолондо тыумышында уҡ хәүеф-хәтәр һағалай: әсәһе ҡасып ҡолонлауы һөҙөмтәһендә («Аҡһаҡ ҡола»лағы бейәнән айырмалы рәүештә, ул күлгә ҡасмай, тауға китә), Ҡара юрға тигән шөһрәтле юрға булыр ҡолондо бүре тамаҡлар саҡта, Әбләй йәненә инә.

Тылсымлы ат хаҡындағы әкиәттәргә һәм «Аҡһаҡ ҡола» эпосына тәүге эпизодты сағылдырған тематик мотивы менән оҡшаш булһа ла, бүтән версияларға ҡараған варианттарҙан айырмалы рәүештә, бынында Ҡара юрға реалистик планда һүрәтләнә. Әгәр тегеләрендә ат әҙәмсә һөйләшһә, хәйләкәрлек менән ҡыҙҙы алып ҡасһа, өсөнсө версияла, егет менән аңлашыу ниәтенән, ҡараҡ яллап, Ҡара юрғаны ҡыҙ үҙе алдырта. Өҫтөндәге ҡыҙ ауыҙлыҡ менән ауыҙын ҡаната бысып бөтөүенә ҡарамаҫтан, аҡыллы юрға үҙ хужаһы янына саба. Ошо урында был версия башҡалары менән йәнә тап килә. Әммә артабан хәлдең ҡатмарлашыуы һәм сюжеттың өр-яңы көсөргәнешле төҫ алып ялғанып китеүе өсөнсө версияны йәнә тегеләренән айыра. Ярлы егет булыуы өҫтөнә ата ризалығынан тыш, йола боҙоп, әйттереүһеҙ-ниһеҙ ҡыҙын алғанға, Мәсем байҙың егеттән үс алыуы ихтималы тыуа. Ҡыҙға ла хәүеф тыуа.

Керһеҙ ятҡан тоҡомома
Тауҙай ғәйеп таҡҡан ҡыҙ! —

тип, бай уны атып китеү менән янай.

Хандың хәлен аңлау ҡыйын түгел. Ҡыҙының урланыуы — бер хәл, намыҫы урланһа — күтәргеһеҙ мәсхәрә! Шуға күрә уның һүҙе — үҙен урланыуға ирек биреүе менән ырыуын хурлыҡҡа ҡалдырғаны өсөн яныу ғына түгел, үҙ халҡының әхләҡ ҡағиҙәһе боҙолмауын ҡайғыртыуы ла. Ана шул әхләҡ проблемаһы сюжетты көсөргәнешле итә лә. Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигән кеүек, Нөгөш байҙың улы килеп ҡыҫылыуы ла хәлде ҡатмарлаштырып ебәрә. Әммә Әбләйҙең егетлеге, атының Маҡтымһылыуы менән уның ҡайтыу яғына бара биреп, Һаҡмарҙан кире боролоуы ханды был ҡатмарлы ситуациянан ҡотолдора.

Әбләй менән Маҡтымһылыу — иш янына ҡуш. Маҡтымһылыу тәүге осрашыуҙа уҡ үҙенең аҡыл эйәһе, хатта халыҡ һынамы-

шын яҡшы белгән һынсыл ҡыҙ икәнен күрһәтеп өлгөрә. Аттың ауыҙының күбегенә ҡарап, уның ҡайһы яҡ малы икәнен дә; егеттең кейеменә ҡарап, уның ҡайҙан килеүен дә; сәләм, оран бирмәүенән кемгә төбәп килеүен дә; килгән мәленә ҡарап, кәләшле түгеллеген дә әйтеп бирә. Тимәк, бер аты ғына булған Әбләйҙе тиңһенерә, һәр йылҡы төҫө һайын бер өйөрҙө мәһәрлеккә бирергә әҙер торған Нөгөш бай улынан өҫтөн ҡуйыры бына шулай алдан уҡ иҫкәртелә эпоста.

Финалда атаһына үпкәләп:

— Атам, үҙең — данлы ир,
Ирҙе һайлай белмәнең;
Ҡыптыр тундың эсендә
Ир үҫер тип белмәнең, —

тип ҡыҙ үҙенең ғәйрәтле атаһын ниәтенән сигендерерлек дәлил таба. Шулай итеп, Әбләй менән Маҡтымһылыу кеүек үк интеллектуаль яҡтан бер-береһенә тап килгәндәр генә тиң була ала тип раҫлай эпос.

### 8. «ҠУҢЫР БУҒА» ЭПОСЫНЫҢ ҠАЙҺЫ БЕР ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Донъя мифологияһында үгеҙ образына мөһим урын бирелгән. Индустарҙа каста (йә ырыу) башлығы, Мысырҙа Осирис илаһының йәне, гректа Зевс һәм уның улы Таврос, скандинавтарҙа Тор илаһы үгеҙ ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерелгән. Мысырҙа Аҡ Нил кешеләренең үгеҙ ите ашамауы, Рамсес II тигән фараондың «хакимдар араһында» «ул үгеҙ» тип йөрөтөлөүе, удмурттарҙың ут илаһына үгеҙ ҡорбан итеүе, ҡытайҙарҙа Иң Оло теләккә сыҡҡанда үгеҙҙе генә ҡорбанға килтереүе кеүек миҫалдар борон күп халыҡтарҙа уның изге зат итеп иҫәпләнеүе хаҡында фекер йөрөтөргә форсат бирә.

Башҡорттар ҙа бындай изгеләштереүҙән ситтә ҡалмаған. Мәҫәлән, Салауат районы Малаяҙ ағындағы бер йылғаның[35], Әбйәлил төбәгендәге Яҡтыкүлдең (йәки Мауыҙҙы күленең) эйәһе үгеҙ ҡиәфәтендә күҙаллана, Бөрйәндәге Байназар ауылы эргәһендәге бер шишмәне үгеҙ һөҙөп сығарыуын, башҡорт булып ойошаһы ырыуҙар сүлдә аҙашҡанда, уларға бер бүгәй һыу табып биреүе хаҡында легендалар бар[36]. Әйткәндәй, ошо уҡ сюжеттың ҡаҙаҡтарҙа ла таралыуы мәғлүм[37]. Алтын яҡылығы эйәһен дә үгеҙ ҡиәфәтендә күҙаллай башҡорттар[38].

Таш быуат дәүерендә йәшәгән аусы-рәссамдар ҡая-таштарға,

[35] Ахметшин Б. Г. Несказочная проза горнозаводского Башкортостана и Южного Урала: Монография. Уфа, 1987. С. 29—30.

[36] Ә. М. Сөләймәновтың шәхси фондынан.

[37] Казахский фольклор в собрании Г. Н. Потанина. Алма-Ата: Наука, 1972. С. 52, 297.

[38] Ахметшин Б. Г. Несказочная проза... С. 29—30.

мәмерйә стеналарына үгеҙ һүрәтен төшөрһәләр, уларҙы һыйырҙан айырыусы төп билдәһен, ғүмер биреү билдәһен, мотлаҡ һүрәтләр булғандар. Был бер ҙә осраҡлы күренеш түгел. Боронғо һүрәттең шул билдәне түллек сығанағы тип изгеләштереү ғәләмәтен сағылдырыуына төшөнөүе ҡыйын түгел.

Донъя мифологияһында, шул иҫәптән башҡорт менән ҡаҙаҡ мифтарында, үгеҙҙең изгеләштерелеүенең әрсәһе шуның менән аңлатылыуы ихтимал. Шул «ихтимал»дың раҫҡа сығыуына ла миҫалдар бар. Шуның береһе «Ҡуңыр буға» эпосы. Ундағы ҡуңыр буға образы үҙендә үгеҙҙе изгеләштереү — уны түллек сығанағы тип таныуҙа икәненә «төртөп үк» күрһәткән урындар бар. Һүҙ ошо юҫыҡҡа күскәнсе, кескенә этнографик белешмә бирәйек.

Башҡортта әлегәсә түл төйөмө (төйөнө) тигән төшөнсә һаҡланып ҡалған. Айғырҙың, айғыр тәкәнең, бестерелмәгән үгеҙҙең енеҫ ағзаһын алып, шуны киптереп, төйөп (түл өйөмө тигәнебеҙ шул үҙе була ла инде), аҡ сепрәккә төрөп, малдың мөгөҙө төбөнә бәйләһәң, йә кәртә-ҡура егенә ҡыҫтырып ҡуйһаң, мал түлле була тип белгәндәр. «Ҡуңыр буға» эпосының Мөғәлләм Мирхәйҙәров вариантында Таңдысаның ире йортонан ата йортона ҡыл муйынсағын һөйрәтеп ҡасып килгән һыйыр малдарына ырыу башлығының:

— Ҡуңыр буға, малдарым,
Ҡилегеҙ, кил яныма,
Ырыҫ-байлыҡ бәйләйбеҙ
Быҙауҙарың муйынына, —

тигәнендә, тап шул түл төйөмө күҙ уңында тотолған булырға тейеш. Хәйер, артабан был хаҡта аныҡыраҡ та әйтелә:

Ҡусҡар мөгөҙлө тәкәгә
Түл төйөмө әләбеҙ —
Ҡуш мөгөҙлө һарығыңа
Бөтмәҫ тоҡом теләйбеҙ.

Томда тәүҙә бирелгән текста Ҡуңыр буғаның:

— Туғыҙ айҙа бер быҙау
Түл ҡушырмын ҡуранда, —

тип ышаныслы әйтеүе лә түл төйөмөн — ырыҫ төйөмө тип таныуға нигеҙләнә. Тимәк, эпос туранан-тура әйтмәһә лә, шундай төйөмгә уның эйә булыуына, мал ҡото тип изгеләштерелеүенә тап ошо урында «төртөп үк» күрһәтә лә инде. (Дөрөҫ, ҡайһы бер варианттарҙа (иғтибарһыҙлыҡ арҡаһындамы, нисек) Ҡуңыр буға һыйыр тип аталған. Әммә «һыйырлыҡ» атаманан ары китмәй. Һәр хәлдә, уның быҙау имеҙеүе йә уны һауып эсеү тураһында ләм-мим.)

«Ҡуңыр буға» эпосының күпселек варианттарында үгеҙҙең мал ҡото тип изгеләштерелеүе икенсе яҡтан да асыла: ул һыйыр-

ҙарҙы ғына түгел, башҡа үгеҙҙәрҙе лә, быҙауҙарҙы ла эйҙәй, уларына ваҡ малдар ҙа эйәрә. Хатта йылҡы малын да эйҙәй Ҡуңыр буға. Юҡһа:

— Өйөр-өйөр малдарым
Өшөттөләр төн буйы, —

тип әйттермәҫ ине эпос малын юллап барған Ҡолансәстән.

Тәүҙә бирелгән вариантта, Ҡолансәстең малын ире йортона кире ҡайтарыу өсөн, һөтөн түгәләр, өҫтөнә ҡоялар: йәнәһе, асыуланһа, һыйыр Ҡолонсәстең ата йортонан биҙәсәк. Маҡсатҡа ирешә алмайҙар. Йығып һалып, бесергә итеүҙе бер имитациялау етә — үгеҙ һикереп тора ла ҡаса. Ҡалған мал уның артынан китә. Эпоста үгеҙ бестерелеүҙән ҡаса, йәғни түллегән һаҡлап ҡалырға тырыша, шуға ирешә һәм, шул сифаты булғанға ғына, башҡалар уға эйәрә тип раҫлау — уның, тик уның ғына мал ҡото тип изгеләштерелеүенә йәнә бер өҫтәлмә ишара ул.

Малдарҙың исеме, билдәһе менән барлаған ҡатындың, шул исемдәрҙең барыһын да әйтеп тормай, бары Ҡуңыр буғаны ғына саҡырыуы, йәғни башҡа малдарын уның йөҙөндә генә дөйөмләштереүе лә әле генә әйткәндәребеҙгә — иш янына ҡуш.

Ошо яҡтан ҡарағанда, Таңдысаның (Ҡолансәстең), бер нәмәгә ҡарамай, хатта хәүеф-хәтәрҙәргә тарығанда ла, кире боролмай, ер аяғы ер башынан йәүкәләп, юғалған малын эҙләргә сығыуында ла хикмәт бар. Әлбиттә юғалған малын һәр кем йәүкәләй. Әлбиттә уны кем дә юғалтҡыһы килмәй. Сөнки ул — малсы башҡорт өсөн төп йәшәү сығанағы. Әммә бай урынға төшкән бай ҡыҙы шулай үлемесле булғансы малын эҙләгәнсе, ҡул һелтәһә лә була бит әле. Хикмәт тә ана шунда шул. Ул мал ҡәҙимге мал түгел, түллек өсөн бирелгән мал. Ул юғалһа, ҡот юғаласаҡ. Тимәк, был йәһәттән дә Ҡуңыр буғаның изгеләштерелеүе раҫлана. Шулай итеп, «Ҡуңыр буға» эпосы, асылда, «Урал батыр», «Авеста» ише әҫәрҙә кәүҙәләндерелгән илаһи Тәүүгеҙ образына һалынған төшөнсәне реалистик ерлеккә күсереүсе әҫәр булараҡ та әһәмиәтле.

Ни өсөн мал ҡото, түллек ҡото — Ҡуңыр буға хужа йортон ташлап киткәндә үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә? Сәбәбе ниҙә? Ҡайһы бер варианттар был мәсьәләне бөтөнләй уратып үтә (2-се вар.). Сәйфулла Хәсәнов вариантында (4-се) малдарҙың китеү сәбәбе аныҡ уҡ, әммә бик ябай аңлатыла: төп кәсебе һунар булған, Ирәндек батыры малға илтифат бирмәй, Ғибадулла Агишев, Ғибадулла Ҡасҡынов вариантында ла егеттең белгәне — «ахута ла ахута».

Тәүҙә бирелгән текста (Ғибадулла Агишев вар.) малдарҙың йорт ташлап китеүенең сәбәбе «Аҡһаҡ ҡола» эпосындағыса аңлатыла: малға иғтибар юҡ, шул уҡ ваҡытта уны теләгәнсә файҙаланалар.

Малдарҙың йорт ташлап китеүен икенсе төрлө аңлатҡан варианттар ҙа бар. Хәсән Буранғолов, М. Мирхәйҙәров, М. Буран-

ғолов варианттарында малдарҙың йорт ҡалдырыуына Уралды һағыныуҙары сәбәпсе булғаны аңлашыла.

Һуңғы вариантта һыйырҙың ҡайтыуы ғәжәпләндермәй. Сөнки үҙе килгән юлды кире ҡыуырға ғына кәрәк уға. Ә тәүге икеһендә унын балалары, хатта туғыҙынсы быуыны инә иленә китә. Тимәк, дөйөм алғанда, әле һүҙ барған варианттар тыуған төбәкте, тыуған илде һағыныуҙан да көслө тойғо юҡ, шул тойғо мәлһеҙ ҡартайтырға ла, үлтерергә лә, йәшәртергә лә, йәшәтергә лә мөмкин, тимәксе. Үлем — яңы ерҙе ерһенмәй, тыуған илде һағыныу менән сикләнеп, унда ынтылмағандар, аҙым яһарға баҙнат итмәгәндәр өлөшө. Көслөләр, рухлылар өлөшө — йәшәү. Уилферд Бион, Дональд Уинникотт, Марион Милнер, Франсуза Дольто ише психоаналитиктар әсә ҡарынында саҡта уҡ баланың күңеленә фекер, аҡыл һеңә тигән һығымтаға килгәндәр. Карл Густав Юнг шуны «архетип» тип атаған [39]. Эпоста ҡыҙ артынан килгән һыйыр үҙе түгел, ә унын балаларының, хатта ете ятының бүләләренең баш йортҡа ҡайтыуы — тыуған ил тойғоһоноң гендар аша бирелеүсе, барынан да көслө «архетип» булыуының художестволы раҫланышы ул.

Ошо идеяны мал яҙмышы ярҙамында образлаштырып, эпосты ижад итеүселәр: «Малдың малы шулай булғас, әҙәм балаһына ни һан?!» — тип әйткәндер кеүек.

Аҡһаҡ ҡола грек мифологияһына хас ярым кеше, ярым ат ҡиәфәтле затты — кентаврҙы хәтерләтә бирһә, Ҡуңыр буға бер ни тиклем ярым кеше, ярым үгеҙ рәүешендәге минотаврға оҡшай биреп ҡуя. Әммә, әгәр миф геройы яуыз зат итеп күрһәтелһә, Ҡуңыр буға изге зат. Унын ҡарауы, һәләте менән минотаврға тартым Ҡуңыр буға кентаврҙы хәтерләтеүсе Аҡһаҡ ҡолаға яҡынырак. Ҡайһы бер версиялар буйынса Аҡһаҡ ҡола кеүек үк, ул да хужаһы менән конфликтҡа инә. Һәр хәлдә, йорт ташлап китеүенең сәбәбен Аҡһаҡ ҡоласа аңлата.

Ҡаҡ ҡаҙаҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һайлайһың,
Яҙ ашарға бирмәйһең,
Көҙ ашарға бирмәйһең...

Шуныһы мөһим, Ҡуңыр буға үҙ исеменән генә зарланмай. Башҡа малдар исеменән дә шелтәләй хужабикәһен:

Һыйырҙан һөт даулайһың,
Һарыҡтан ит даулайһың!

Тимәк, Ҡуңыр буға бында, Аҡһаҡ ҡола кеүек, үҙен генә ҡайғыртыусы түгел, башҡаларҙы яҡлаусы ролен дә атҡара.

Ҡуңыр буғаны Аҡһаҡ ҡоласараҡ итеүгә, әлбиттә, төп геройы һуңғыһы булған эпостан үтескә алынып, клише (уртаҡ урын)

---

[39] Марк В. Ребенок святой // Курьер ЮНЕСКО. 1993. ноябрь. С. 8—9.

вазифаһын атҡарған һамаҡ сәбәпсе булған. Әммә уның «Ҡуңыр буға»ға тағылыуы бер ҙә осраҡлы түгел. Хикмәт был эпостың да композицияһының, «Аҡһаҡ ҡола»ныҡы кеүек үк, сәйәхәт алымына ҡоролоуында. Тимәк, композицион алымға ҡарата Ҡуңыр буға образын Аҡһаҡ ҡола образына яҡынайтырға мәжбүр иткән клише — икенсел. Шуға ла ул бөтә версия, варианттарҙа тотороҡло һаҡланмай. Ул бары ят ерҙе ерһенмәү, тыуған тупраҡ тартыу темаһы икенсе планғараҡ күсерелеп, кеше менән мал мөнәсәбәте төп проблема итеп күтәрелгән версияларға хас.

Әммә шуныһы ла бар. «Аҡһаҡ ҡола»ға хас шиғри юлдар күскәнме, юҡмы, сәйәхәт алымы «Ҡуңыр буға» эпосының сюжетының, йырҙанан тайпылмай, бер йүнәлештә үҫеүенә, ләкин, йәнә «Аҡһаҡ ҡола»лағыса, уртмалы булыуына сәбәп иткән: герой илдән сығып китә, урап йөрөп, киткән еренә кире ҡайта. Әммә «илдән китеү — кире ҡайтыу» мотивы төрлөсә вариантлаша: Ҡолансәс (Таңдыса) Уралдан китә, йәнә Уралға ҡайта һәм кире иленән китә, йәғни ире иленә ҡайта. Ҡуңыр буға үҙе тыуған (хужабикәһе килен булып төшкән) ерҙән Уралға китә, унан кире ҡайта. Әлбиттә, «буға» һүҙе «үгеҙ» тигәнде аңлатыуына ҡарамаҫтан, Ҡуңыр буға — ҡыҙ артынан килгән һыйыр тип раҫлаусы версияла мәсьәлә ҡатмарлаша төшә: тыуған иленән һыйыр сит ергә китә, унан йәнә Уралға ҡайта, артабан тағы хужабикәһе килен булып төшкән яҡҡа юллана. Әммә ҡайтыу менән урап ҡайтыу — бер түгел: әкиәт геройы, мотлаҡ moраҙына еткәс кенә (кәләш ала, мал таба һ. б.) әйләнеп ҡайта, йыш ҡына «солтан булып» (батша, хан сифатында) ситтә ҡала, ата-әсәһен үҙенә алдыра. Композицияһы классик әкиәттәрҙең тәүгеләренекенә генә оҡшаш булһа ла, эпос сюжеты өсөн бәхетле сиселеш мотлаҡ түгел. «Аҡһаҡ ҡола»ның геройы, белеүебеҙсә, мораҙына ирешә алмай. Етмәһә, ҡайтып инеү менән, йән дә бирә. Ә уның антиподы булған, художестволы вазифаһы йәһәтенән сюжет йөгөн төпкә егелеп тартҡан Аҡһаҡ ҡола, яраланһа яралана, мәгәр баш бирмәҫ, баш эймәҫ юғары рухлылыҡты кәүҙәләндереп, тере ҡала.

«Ҡуңыр буға» иртәге лә — ҡуш геройлы. Унда ла хужабикәһе менән сағыштырғанда, малдың «художестволы дәрәжәһе» юғарыраҡ: йәш ҡатынды сәйәхәт итергә ул мәжбүр итә. Дөрөҫ, «Аҡһаҡ ҡола»нан айырмалы рәүештә, бында мал үҙ эйәһе менән килешә, һәр хәлдә уның эйҙәүенә буй биреп, «төшкән еренә» кире китә. Бөтәһе лә ал да гөл кеүек тә ул, әммә һорау тыуа: конфликт тулыһынса хәл ителде булдымы? Мал менән хужаһы мөнәсәбәтен үҙәккә ҡуйған версиялар был һорауға: «Эйе», — тип яуап биргәндәй була. Ә малдың ят ерҙе ерһенмәүе тураһындағылары, баш сайҡап: «Ай-һай»! — тип һағайырға мәжбүр итә.

Сюжет структураһы, дөйөм алғанда, схематик рәүештә ябай ғына күҙалланһа ла, «Ҡуңыр буға» эпосының бәғзе варианттары төрлө ярҙамсы мотивтар (микросюжеттар) иҫәбенә бер ни тиклем ҡатмарлаштырыла. Был үҙенсәлек айырыуса танылған сәсәндәрҙең ҡаурый ҡәләме ҡағылған варианттарҙа күҙәтелә. Мөхәмәтша сәсән Буранғолов Хәсән сәсән Буранғоловтан яҙып алған версия-

ла тәүҙә Янбай атлы һунарсының ҡара төлкө һуғып алған етеҙ егет менән танышып, унан албирмәҫ дөлдөлөн бүләккә алыуы бәрәбәренә уға ҡыҙын бирергә мәжбүр булыуы тәфсирләп хикәйәләнә. Әҫәрҙең ошо өлөшө, асылда үҙ аллы сюжет хасил итә. Әммә эпос контексында уға микросюжет ролен генә атҡарыу менән хушһынырға тура килә. Композицияһы сәйәхәт алымына ҡоролғанына төп сюжет составында был микросюжетҡа экспозиция хеҙмәтен үтәү бурысы йөкмәтелә. Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәров варианты иһә, әҙәби әҫәргә эйәреп, деталләп һүрәтләүҙәргә, психологизациялауға бай. Бына бер миҫал: «Әлһерәп, аяҡ ҡулдары, бөтә ағзалары талыҡҡан булһа ла, Таңдыса алға барыуында булды. Бер һөҙәк үрҙе төшөү менән, сылтырап ағып ятҡан һай ғына ташлы һыуҙы күрҙе. Таштан һикергеләп, уны аша сыҡты. Бәләкәй генә үрләскә менгәс, алдында әллә ҡайҙан күренеп, күккә олғашып ятҡан күм-күк тауҙарҙы күрҙе... Артабан әштәле-әштәле тауҙарҙы үтте, ҡашлаҡлы тауҙарға барып терәлеп, ҡаянан таштарҙың япмаланып-япмаланып торған урындарын үтте...»

Бындай тасуирламаны бары яҙма текстҡа ғына теркәргә мөмкин. Телдән һөйләгәндә, һәр хәлдә, шул үк сәсәндән ишеткән сүрәттә лә, башҡа информаторҙар уны ҡабатлай алыуы шикле. Ғөмүмән, Мөғәлләм сәсән йыш ҡына сама тойғоһон онотоп ебәрә. Уның әйтеүенсә, Ҡуңыр буға Таңдысаға эйәртеп ебәрелгән ҡуңыр һыйырҙан тыуған етенсе быҙауҙың етенсеһенән, йәғни һәр ете йыл һайын тыуған затынан тыуған. Икенсе төрлө әйткәндә, «алтмыш өс йыл самаһы ғүмер» үткәс донъяға килгән туғыҙынсы быуын мал имеш. Шулай булғас, Ҡуңыр буға ғәйеп булғанда Таңдыса күптән олo йәштәге әбей булып өлгөрөргә тейеш (Таңдысаның килен булып төшкәндәге йәше 16 (йә 18) + 63 йыл). Әммә ул айыуҙан һаҡланыр өсөн, ағасҡа менеп йоҡларлыҡ, бал артынан солоҡҡа үрмәләрлек, таштан-ташҡа һикереп, йылға аша сығарлыҡ, бүре менән алышырлыҡ, тау-таш араһынан оҙон-оҙон юл үтерлек хәлдә.

Башҡа варианттарҙа теҙмә юлдар, нигеҙҙә, юғалған малдарға мөнәсәбәтте, уларҙың түллеген хәстәрләүҙә, иҫәп-хисабын, ҡылыҡһырланышын биреүгә хеҙмәт итһә, Мөғәлләм сәсән уны Таңдысаның күңел ҡатламдарын асыуға, образын психологизациялауға файҙалана (дөрөҫөрәге, ошо маҡсаттарға ярашлы шиғри һүҙҙәр теҙә). Малын эҙләп китеп барышлай, Таңдыса шулай тип тә йырлап ебәрә:

Эскәйемдә ятҡан уй-һағышым
Һеҙҙең юлға, эҙгә тоташты;
Әллә инде ысын һораганым,
Ерҙән алып күккә олғашты.

Шулай ҙа был версияла йырҙың икенсе функцияһы өҫтөнлөк ала. Таңдыса үҙе сығарған йырҙың тәүге ике юллығында үҙе күргән күркәм күренеште ҡылыҡһырлап, йә уның әһәмиәтен билдә-

ләп йырлай ҙа, өсөнсө, дүртенсе юлдарында тыуған ерен — Уралды данлай. Һыуһарҙы күргәс:

— Ҡыш һыуыҡтан һаҡлаған
Һыуһар — ҡама тун икән,
Ерҙең үҙен ҡамаған —
Урал тауы шул икән, —

тип йырлаһа, мышылар менән осрашҡас:

Боç-боçрап китеп, мыш-мыш көйшәнеп,
Көтөү-көтөү йөрөй мышыһы,
Сыҡҡандан да алып айыштым мин,
Урал да икән — йәшәү урыны, — ти.

Ошондайыраҡ йырҙарын йырлай ҙа эҙләп барған, әлегә табылмаған малдарына мәрәжәғәт рәүешендәге һамағын һамаҡлай башлай:

Ҡуңыр буғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү!

Тандысаның һәр күргән күрмәлеккә йыр сығарыуы ирекһеҙҙән Р. Г. Игнатьевтың «Башҡорт үҙенең йырҙарын, мотивтарын импровизациялай. Айырыуса яңғыҙ сағында, юл йөрөгәндә, урман ҡырлаһа — урман хаҡында, тау янынан үтһә — тау тураһында, йылға буйлаһа — йылғаны йырлай»[40] тигән һүҙҙәрен хәтергә төшөрөргә һәм, ғөмүмән әлеге тикшеренеүселәр урацҡырап үткән, туҡтала ҡалһалар, ябайлаштырып аңлатҡан, ғәмәлдә махсус өйрәнеүҙе талап иткән проблема — йыр һәм тәбиғәт проблемаһы хаҡында уйланыуға мәжбүр итә.

Ҡуләм йәһәтенән йыйнаҡ ҡына булыуына ҡарамаçтан, «Ҡуңыр буға» эпосы этнографик мәғлүмәттәргә бик бай.

Әçәрҙә (айырыуса уның һуңғы варианттарында) инаныстар, им-том, халыҡ медицинаһы, этнографик үҙенсәлектәр хаҡында ла ҡиммәтле белешмәләр алырға мөмкин. Улары үҙе бер махсус тикшеренеү темаһы булыуға лайыҡ. Әле иһә бары шуны әйтеү менән генә сикләнәбеҙ. Эпостың нәфислек туҡымаһында улар бары файҙалы белешмә йә фон хеҙмәтен генә үтәп ҡалмай, билдәле күләмдә образлылыҡ сараһы булып та килә, әçәрҙең поэтикаһын байытып, эстетик вазифа ла атҡара.

### 8. ЭПОС ҺӘМ ЙОЛА

Башҡорт эпостарының барыһы ла тарихи-көнкүреш күренештәренә, этнографик билдәләргә бай. Был йәһәттән халҡыбыҙҙың иң боронғо эпик ҡомартҡылары бигерәк тә нык айырылып тора.

---

[40] Игнатьев Р. Г. Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор // БРЛ / Сост., авт., биог. спр., коммент. и библиограф. М. Г. Рахимкулов. Уфа, 1964. Т. 2. С. 82, 199.

Боронғо эпостарыбыҙҙың барыһында ла тиерлек иң тәүге кәсепкә — йыйыу кәсебенә алмашҡа килгән һунарсылыҡ сағылмай ҡалмай. «Урал батыр»ҙа Йәнбирҙе ҡарт ҡына түгел, уның йәмәғәте Йәнбикә лә, уҡ-һаҙаҡ аҫып, ҡыр йәнлектәренә ауға сыға. Һунар — улар өсөн төп кәсеп, көн итеү сығанағы. «Аҡбуҙат»та — Һәүбән, «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа Заятүләк тә һунар кәсебе менән көн итеүсе итеп күрһәтелә. Тимәк, был әҫәрҙәрҙең барыһында ла герой өсөн һунар — беренсел. Художестволыҡ күҙлегенән ҡарағанда ла шулай. Ул йән аҫырау, көн итеү сараһы булараҡ ҡына түгел, сюжет хасил булыуҙа ла, үҫтерелешендә лә хәл иткес роль атҡара. Иң әүәл телгә алынған әҫәрҙәрҙең өсөһөндә лә уртаҡ бер мотив барын билдәләйек: уларҙа геройҙың киләсәктә хәләле булаһы ҡыҙ менән осрашыуына һунар сәбәпсе була. Һунарсы ғаиләһенең ҡорбаны булыр ерҙән Һомайғошто Урал ҡотҡара. Артабан Уралдың һунар кәсебе менән шөғөлләнеүе һүрәтләнмәһә лә, үҙенә ҡаршы сыҡҡан ҡара көстәр менән алышҡанында, ул беләк көсөнә генә таянып ҡалмай, уларҙы һунарсы таһыллығы менән дә еңә.

«Урал батыр» эпосында К. Мәргән, М. Сәғитов, С. Галиндар ҙа иғтибар иткән бер ритуал, бик боронғо һунарсы бабаларыбыҙ атҡарыр ритуал, сағылыш табыуын да оноторға ярамай. Бында беҙ ауға сығыр алдынан Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең ҡабырсаҡта (моғайын, был урында гөбөрләнөң йә боронғо туфан тураһындағы төшөнсә менән бәйле диңгеҙ ҡусҡары ҡабырсағы күҙ уңында тотолғандыр) һаҡланған ҡанды, йыртҡыс ҡанын, ауыҙ итеүҙәрен күҙ уңында тотабыҙ. Шул ритуалды атҡарһаң, ҡан эйәһе булған йыртҡыстың көсө һиңә күсә була, йәнәһе.

Ошо ритуалды бәлиғ булмаған, йәғни әле инициация һынауын үтмәгән үҫмерҙәргә атҡарыу тыйылыуы ла иғтибарҙы тарта: тыйыуға ҡолаҡ һалмауы, тимәк, үҙен ата-әсә һүҙен һанламаусы итеп кенә түгел, йола (ә ул закон дәрәжәһенә эйә) менән иҫәпләшмәүсе рәүешендә лә күрһәтә Шүлгән үҙен. Бына шул тәүгә асылған кирелеге уның киләсәктә Урал батыр атҡарған изге эштәрҙең киреһен эшләйәсәген аңғартыусы увертюра әһәмиәтенә эйә. Бынан иһә ата-әсәһе тыйыуына ҡолаҡ һалыуы, икенсе төрлө әйткәндә, йоланы боҙмауы менән Урал батыр киләсәктә үҙенең изге юлдан китәсәген үҙе көнәлгәре билдәләгәндәй була. Шулай итеп йыртҡыс ҡанын эсеү-эсмәүгә бәйле йоланы (ритуалды) боҙоу-боҙмау, асылында, Шүлгән менән Уралдың ҡапма-ҡаршы холоҡ-фиғыл (характер) эйәһе булып үҫерендә, шуға бәйле рәүештә икеһенең ике төрлө мажараға юлығырын да, тимәк, шуның менән әҫәрҙә ике сюжет һыҙығы яралырын да, уларҙың артабан бер-береһенә оҡшамаған ике йүнәлештә үҫәсәген дә билдәләй.

«Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа «Урал батыр» эпосындағы кеүек һунар алды ритуалын атҡарыу сағылыш тапмаған. Уның ҡарауы, «Урал батыр» эпосынан айырмалы рәүештә, һунар итеү процесының үҙен тасуирлауға мөһим художестволы вазифа йөкмәтелгән. Үҙегеҙ хисап итегеҙ. Һунарға сыҡмаһа, Һәүбән — Нәркәскә, Заятүләк Һыуһылыуға юлыға алыр инеме? Юҡ,

әлбиттә. Тимәк, ваҡиға уларҙың ҡауышыуы йүнәлешендә үҫешмәҫ ине. Бынан иһә әле һүҙ барған ике эпик ҡомартҡы өсөн «Һунарға сығыу» мотивының үҙе сюжет хасил итеүсе әһәмиәтенә эйә икәнлеге яҡшы аңлашыла.

Ә хәҙер киләйек «Ҡуңыр буға», «Аҡһаҡ ҡола» һәм «Ҡара юрға» эпостары тарафтарына. Өсөһөндә лә һунарсылыҡ кәсебенә, тарихи яҡтан ҡарағанда, алмашҡа килгән, дөрөҫөрәге, унан айырылып сыҡҡан малсылыҡ кәсебен сағылдырыу үҙәккә күсерелгән. Тәүгеһенең томға ингән беренсе версияһында ла, Мөғәлләм сәсән версияһында ла һунарсылыҡ мотивы әҙме-күпме туранан-тура сағылыш таба. Икенсеһендә — ситләтеп кенә, өсөнсөһөндә ул бөтөнләй юҡ.

«Ҡуңыр буға»ның китапта бирелгән тәүге версияһында, «Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙағы һымаҡ уҡ, һунар — егеттең үҙенә кәләш буласаҡ ҡыҙҙы осратыуына төп сәбәпсе. Тимәк, художестволы вазифаһы күҙлегенән ҡараһаҡ, эпостың был версияһында ул сюжеттың экспоцизия өлөшөн дә, төйөнләнешен дә билдәләй. Әммә уның сәнғәти вазифаһы бының менән генә сикләнмәй. Һунар — төп конфликтты билдәләү сараһы ла, ваҡиғаның кинәт көтөлмәгән йүнәлештә үҫеүенә лә сәбәпсе. Хикмәт, әйткәнебеҙсә, шунда, һунар артынан күп йөрөп, хужа ошо кәсебен алға ҡуйыуы арҡаһында, Ҡуңыр буға башҡа малдарҙы ла эйәртеп, Уралына кире ҡайтып китә, шуның менән эпос ике кәсептең ҡапма-ҡаршылығын да тарихи яҡтан аныҡ сағылдырыуға өлгәшә: тарих күҙлегенән ҡарағанда, малсылыҡ һунарсылыҡ кәсебенән айырылып сыҡһа ла, билдәле бер дәүергәсә боронғо кәсеп үҙ урынын бирә һалып бармаған. Шул тарихи-көнкүреш картинаһындағы ҡаршылыҡ әҫәрҙә сюжет ойоштороу ҡеүәһенә эйә булған да инде.

Малсылыҡ төп кәсепкә әүерелгәс тә, мәғлүм булыуынса, һунарсылыҡты ташламаған башҡорт. Был хәҡиҡәт тә раҫланышын таба «Ҡуңыр буға»ла. Хикмәт Хәсән Буранғолов версияһында суҡмар менән төлкө аулау ысулының һүрәтләнешендә генә түгел. «Урал батыр» эпосындағы кеүек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа аусыллығын һаҡлап ҡалғанлығына миҫал бар был эпоста. М. Мирхәйҙәров версияһында Таңдысаның хәтирәләренән дә һунар тураһында мәғлүмәттәр табабыҙ. Улай ғына ла түгел, үҙенең ҡыр йәнлектәренең холоҡ-ҡылыҡтарын яҡшы белеүе (ҡарағай ботағына менеп, айыуҙан һаҡлана, балыҡ тота, мышыларға һыйына, ҡолондарға һоҡлана, бүре менән алыша) Таңдысаның да һунар тәңгәлендә, ишетмеш кенә түгел, ғәмәлдә лә хәбәрдар булыуына дәлил ул.

Әгәр фекерләүҙе ошо йүнәлештә дауам итһәк, сюжеты һунар кәсебе менән малсылыҡ кәсебе конфликтына ҡоролған һәм ҡыҙ артынан мал биреп оҙатыу йолаһын сағылдырған «Ҡуңыр буға» эпосы (һәр хәлдә, уның тәүге версияһы) «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙан һуңыраҡ; геройы һунарсылыҡты онотмаһа ла, күптән йәйен-ҡышын ат егеүсе булған «Аҡһаҡ ҡола» йәнә аҙағыраҡ; ә

геройының кәсебе аныҡ күрһәтелмәгән «Ҡара юрға» эпосы тағы ла һуңыраҡ ижад ителеүенә төшөнөрбөҙ.

Шулай итеп, «һунарсылыҡ кәсебе» мотивының сағылыу, сағылмауы һәм, сағылһа, ҡайһы яҡтан, ни кимәлдә сағылыуы эпостарыбыҙҙың боронғолоҡ кимәленә үлсәү сараһы булараҡ та әһәмиәтле. Инде хәҙер һунарсылыҡҡа алмашҡа килгән кәсептең боронғо эпоста сағылышына иғтибарҙы йүнәлтәйек. «Аҡһаҡ ҡола» эпосының ҡайһы бер версияһы, варианты менән эш итһәк тә, иң әүәл шул күҙгә ташлана: унда замана кешеһе өсөн бик мөһим бер этнографик мәғлүмәткә баҫым яһала — бер өйөрҙәге йылҡы һаны күпме, шул йыш ҡабатлана.

Саф этно-лексикология күҙлегенән дә «Аҡһаҡ ҡола» эпосы — бик үҙенсәлекле әҫәр. Унда йылҡы малының төҫөнә, йәшенә бәйле рәүештә тәғәйенләшенә, кәүҙәһенең күләменә ҡағылышлы лексика бай ғына.

«Ҡуңыр буға» эпосы ла, «Аҡһаҡ ҡола»лағы һымағыраҡ юғалған малдарҙың һәр ҡайһыһына хас билдәләр хаҡында мәғлүмәт бирә. Бынан тыш уларҙың инәүҙәренә лә иғтибар иттерелә. «Ете үгеҙ бер киткән», — тип башлап, кәкре мөгөҙөн дә, һимеҙен дә, һыйырын да, танаһын да; тояғы ярыҡ, һимеҙ оса ҡуй-һарығын да ҡалдырмай барлап сыға Ҡолансәс. Шуның менән «Аҡһаҡ ҡола» эпосындағы бай (бай улы) шикелле уның да малдарын яҡшы белеүенә ишара яһала. Саф этнографик күҙлектән ҡарағанда, йылҡы малын ғына түгел, башҡа малдарҙы ла тәбиғи билдәләре буйынса башҡорттоң айырыу һәләте хаҡында мәғлүмәт бирә эпос.

Шулай итеп, мал-тыуарҙың иҫәбе, төҫө, ҡылығы буйынса уның айырымлыҡ билдәләре бары этнографик эффект өсөн генә индерелмәгән эпостарға. Улар тәғәйен генә художестволы бурыс та үтәй, айырым әйкәндә мал хужаһының «иҫәпһеҙҙең малы теүәл» тигән принципһыҙ принцип менән йәшәүселәрҙән түгел икәненә ишара яһап, уның образын тулыландыра. Тимәк, улар идея-йөкмәтке йәһәтенән дә әһәмиәтле.

«Ҡуңыр буға» эпосының томға ингән өсөнсө вариантында башҡаларында осрамаған ике йола сағылыш тапҡан. Матриархат заманында ир-ат ҡатыны булаһы ҡыҙ тарафынан һайлап алынып, уның ырыуына күсеп, «йорт кейәүе»нә әүерелгән. Әммә һайланған саҡта уның физик һәм интеллектуаль йәһәттән имтихан тотоуы фарыз иҫәпләнгән. Әле әйткән ике йоланың береһе шул заман традицияһын һаҡлай. Ҡасып ҡайтҡан малдары артынан ҡатыны менән бергә килгән Ирәндек батыр бәйгелә, бил һынашта ал бирмәй. Тимәк, физик яҡтан «имтихан»ды «афарин» баһаһына тапшырып, ғаиләһен, ырыуын яҡларлыҡ ир икәнен иҫбатлай. Әммә донъя көтөү өсөн ҡара көстән тыш аҡыл көсө лә талап ителә. Эпос был йәһәттән атҡарылыр йоланы ла «хәтеренән сығармаған».

Йомаҡ сисеү оҫталығын күрһәтеп, Ирәндек зиһен йәһетенән дә үҙенең батыр тигән исемен аҡлай. Тимәк, ғаилә башлығы булып,

үҙ ғаиләһен генә түгел, ырыуын ҡурсалар ир икәнен дә йәнә бер тапҡыр раҫлай.

Табындағы һәр кемдең ғаиләлә йә йәмғиәттә тотҡан урынына ҡарап, һөйәкле өлөш тотторыусы аҡһаҡалдың берсә ҡобайырҙы, берсә нәсихәтте (йәки нәсихәти ҡобайырҙы) хәтерләтеүсе һамағы иһә олоно хөрмәт итергә, кесегә ярҙам итергә, аҙған-туҙған ырыуҙарҙы ылыҡтырып, берләшергә саҡырыу ораны вазифаһын үтәй.

Шуныһы әһәмиәтле, көнкүреш, интерьер ғына түгел, ир-егеткә үткәрелгән зирәклек, бил һынау имтиханы ла малсылыҡ кәсебе менән бәйле. Ошо кәсептең башҡорт өсөн төп шөғөл булыуы «Ҡуңыр буға» эпосында һүрәтләнгән ҡыҙ оҙатыу йолаһында ла сағылыш тапҡан.

Башҡорттоң йолаһындағы сарсаған, ярғыланған ергә һыу ҡойоу һәм һабан һалышыу — семантик яҡтан да, тәғәйенләнеше йәһәтенән дә бер үк нәмә: улар — тәңренән ямғыр теләү билдәһе (символы). Был йоланың төбөндә һыуға, тимәк, һыу тәңреһенә (эйәһенә) ҡорбан килтереү йолаһы шәйләнә. Ни өсөн тигәндә, һабан һыуы һибешкәндә әле лә һыуға бырғатыш бар. Ғәҙәттә, һыуға ҡыҙҙарҙы, кәләш, еңгәләрҙе, ҡоҙасаларҙы һелтәйҙәр. Әйткәндәй, ошо уҡ заттар, айырыуса һуңғылыры менән, һыу һибешеү башҡортта әле лә күҙәтелә. Һыу һибеш, һыуға бырғатыш хәҙер мәрәкә өсөн генә атҡарылған кеүек. Әммә был йоланың атҡарылышында һыуға ҡорбан килтерергә ярайһы асыҡ ишаралауҙарға ла миҫал табырға була. Бына бер миҫал. Заманында һыйышып та, ҡыйышып та башҡорт менән бер төбәктә йәшәп, 1552 йылда яуыз Иван Ҡазан ханлығын ҡыйратҡас, боронғо ата-бабаларыбыҙ иленә, Тын (Дон) һәм Кубань йылғалары буйына күсенеп киткән нуғайҙар ҙа һабан һыуы һалыша икән. Шул йоланы атҡарғанда, улар ағас көрәктең башы һабына төптән тоташҡан еренә арҡыры таяҡ бәйләп, шул әүернәгә оҡшаш нәмәгә ҡатын-ҡыҙ күлдәге кейҙереп, уны йылғаға һелтәйҙәр икән[41]. Был йолала иһә Тереһыуға, дөрөҫөрәге, һыу тәңреһенә (эйәһенә) ҡорбанға ҡатын-ҡыҙ затын биреү имитациялана икәненә төшөнөү ҡыйын түгел. Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ? Сөнки һыу бар тәбиғәткә йәшәүгә, үрсеүгә һут бирә, ә был зат — әҙәм затының үрсеменең сығанағы.

Әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, һыу һибешеү (үҙ-арамы, ергәме, был урында уныһы принципиаль әһәмиәткә эйә түгел) — һыу тәңреһенә ҡорбан биреү йолаһына алмашҡа килгән йола. Шулай булғас, был архаик йоланы Урал батыр байтаҡ трансформациялар кисергәс кенә атҡара. (Был йоланы атҡарыу тора-бара ерҙе һыйлауҙы аңлатыуы ла ихтимал. Уныһы үҙе айырым өйрәнеүҙе талап итә). Архаик йола шул тиклем ныҡ үҙгәреш кисергән, хатта Урал батырҙа ул хаҡта, исмаһам, саҡ ҡына ла төшөнсә юҡ. Юҡһа, икенсе илгә килеп сыҡҡас, шул ил батшаһы Ҡатилдың ата-әсә рухына, үҙе исеменән ҡоҙғондарға кешене ҡорбан итеүе, ҡыҙы һайлағандан ҡалған ирҙәрҙе утҡа һелтәттереүе

[41] Керейтов Р. Х. Народный календарь и календарная обрядность народов Карачаево-Черкессии. Черкесск, 1989. С. 123.

менән бер рәттән, донъяға килгәс, үҙен йыуындырған һыуға (ҡойоға) ҡыҙҙар ташлауҙы ла күҙ уңында тотоп: «Ҡеше һуйыр йоланы (кешене ҡорбан итеү йолаһын. — авт.) һис бер ерҙә күрмәнем, барлығын да белмәнем», — тимәҫ ине лә, уны «ят йола» тип атамаҫ ине.

Урал батыр үҙе ғәҙәттән тыш баһадир булғас (уға 70 батман ауырлығы ташты иртәнән ҡара кискәсә ергә төшөрмәҫлек итеп күккә сөйөп ебәреү ҙә, төшөп килгәнендә, һыңар ҡул менән генә эләктереп алыу ҙа, дейеү, аждаһаларҙы ҡырып, уларҙан тау өйөү ҙә, Ҡәһҡәһенең серле ынйылы таяғы ярҙамында Шүлгән ер өҫтөнә ҡара һыу ҡалҡытҡас, шул һыуҙы йотоу ҙа бер ни түгел), ул Ергә һирпкән һыу ҙа, беренсенән, сарсауҙы ҡандырыусы ҡәҙимге һыу түгел, мәңгелек ғүмергә һут биреүсе; икенсенән, ул ҡәҙимге кешенең бер уртламы, йә усына һыймалы түгел, ә мул һыу. Тәбиғәт шиңерлек ҡоролоҡ булғанда әле лә теләккә сығалар. Доғалар уҡыйҙар, ямғыр теләү теләктәрен һамаҡлайҙар. Йәншишмә һыуын тирә-яҡҡа һирпкәндә (быға тиклем баҫылған текстарҙағыса, бөрккәндә түгел), Урал батыр әйткән һүҙҙәр шул теләк, шул доға вазифаһын атҡара:

«Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ил һөйәргә ил булып,
Ер һөйәргә бағ (баҡса. — авт.) булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Балҡып торған ер булһын!» —

тигән һүҙен әйткән, ти».

Урал батыр — ғәҙәттән тыш баһадир ғына түгел, Ер тормошон, космосты үҙләштереүсе, кеше йәшәү өсөн уңайлы шарттар, сараларҙы бар итеүсе лә. Шуға ла халыҡ уны демиург тип кенә түгел, илаһи ҡөҙрәткә эйә булған тәңре затлы ир тип таныған.

Урал батырҙың Йәншишмәне үҙе эсеүҙән баш тартыуы — эгоистик теләктән баш тартыу ғына түгел, ул — әгәр шулай әйтергә яраһа, илаһи граждандарлыҡ ҡаһарманлығы ла. Ә уның һөҙөмтәһе үҙенсәлекле сылбырлы реакция (йәки реакция сылбыры) хасил итә. Йәншишмә һыуынан тәбиғәттең терелеп, «мәңге йәшел ҡалыуы» кешеләрҙең түлләнеүенә, үрсеүенә («Кешеләр... ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, йәше-ҡарты йоплашып»), яуҙар тыныуына, «байман табып, тын алып» (иркенләп) йәшәй башлауына сәбәпсе була.

Милли йолаларыбыҙҙың, башҡа этнографик күренештәрҙең эпоста сағылыш табыуына һәм үҙенсәлекле интерпритация алыуына бүтән миҫалдар ҙа килтерергә булыр ине. Әммә ҡаралған тиклеме лә уларҙы иҫәпкә алмай тороп, эпостың телен сисеү еңел




түгел икәнен ярайһы уҡ асыҡ дәлилләй, буғай. Ҡарамаҡҡа бигәк кенә кеүек тойолһа ла, этнографик күренештәр, деталдәр, йола, инаныстар эпостың художестволы туҡымаһынан айырылғыһыҙ тәбиғи компонент булып килә.

## 9. МИФОЛОГИҠ ЭПОСТАРҘА ГЕОГРАФИҠ УРЫН, ИЛ ТӨШӨНСӘҺЕ

Мифологияға хас космик концепция буйынса, микрокосма менән макрокосма араһында тәңгәл тап килеш күҙәтелә (кешегә хас билдәләр — ғәләмгә, ғәләмгә хас үҙенсәлектәр — кешегә күсерелә): әҙәми күҙҙәр — ҡояш, сәстәр — үсемлек, әҙәм һөйәге — таш, кендеге — Ер кендеге һ. б.[42] Урал тауы «Урал батыр» эпосында төп геройҙың кәүҙәһе тип аңлатыла. Урал тауындағы аҫыл таштар, алтын, көмөш, Шафиҡ Тамъяниса дөйөмләштергәндә «мәғҙән ояһы» — уның аҫыл һөйәге. Был осраҡта ла «Урал батыр» эпосының донъя космогонияһы контексына ярашлы икәне ап-асыҡ күренә. Әллә ҡайҙағы ер аяғы — ер башындағы урынды түгел, тыуған ер тип аталырға лайыҡ урынды поэтиклаштырыуға тоғро ҡалыуына ла шаһит булабыҙ.

«Ҡуңыр буға» эпосының Мөғәлләм сәсән версияһы буйынса, Урал батыр (дөрөҫөрәге, уның рухы) бөгөн булһын башҡорт өсөн ата йорто, Атайсал, тыуған ил, Ватан төшөнсәле булған Урал тип аталған ерҙе камиллаштырыуын, үҙ өҫтөнә алған демиург, илаһи культур герой вазифаһын атҡарыуын дауам итә. Һәр илле, йөҙ йыл һайын таштарҙы өҫтө-өҫтөнә ултырта. Ул ултыртҡан күбә-күбә таштар вариҫтарына маяҡ хеҙмәтен дә үтәй: «Урал батыр

[42] Мифы народов мира. Т. 2. С. 350.

ихтыяры менән Урал тауы тағы ла бейегәйә бара», — тип раҫлауға ла булыша.

Мифологик эпостарҙың ҡалғандарына мөрәжәғәт итһәк, уларында ла ваҡиғалар билдәһеҙ абстракт урында бармай. Киреһенсә, был йәһәттән аныҡлыҡ, конкретлыҡ күсәйтелә генә.

Шуның менән бергә эпостарыбыҙҙың бәғзеләрендә ил, тыуған ер төшөнсәһе, әле әйтелгәндәргә ҡарағанда киңерәк арауыҡты иңләгәндәре лә бар. «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» (Т. Беляев нөсхәһе), «Бала бәшнәк», «Һуңғы һартай» кеүек ҡомартҡыларыбыҙ тап шундайҙарҙан.

Мифологик эпостарыбыҙҙан «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың күп вариант һәм версияларында ваҡиғалар, нигеҙҙә, Балҡантау башында Асылыкүл яғалап йә уның төбөндә бара. Татарстандағы Оло Кариленең Хәсәне ҡалдырған күсерек һәм М. Ғафури ташҡа баҫтырған версия иһә арауыҡ төшөнсәһен Балҡантау башына баҫып ҡына иңләрлектән әллә ҡайҙағы ер аяғы — ер башына тиклем киңәйтә. Быға беҙ эпостың был нөсхәләре менән таныша башлағас уҡ төшөнәбеҙ. Тәүгеһе: «Бачман хан берләп Чачдар хан дигән ханлар бар ирмеш. Әүәл замандар Жайыҡ сулаган икән», — тип, икенсеһе «Бынан күп замандар элек Ҡырғыҙ илендә Унсап уймат тигән йортта Һарымырҡыс исемле бер хан бар ине», — тип башлана.

К. Мәргән: «Ҡырғыҙ иле тигәндә, Ағиҙелдең түбәнге өлөшөн биләүсе берәй ҡырғыҙ ырыуы хаҡында һүҙ барыуы ихтимал», — ти [43]. Беҙ икенсерәк фекерҙә. Шуға иғтибар итегеҙ. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының 1812 йылда Ҡазанда Тимофей Беляев тарафынан урыҫ телендә баҫтырылған нөсхәһендә әйтелеүенсә, башҡорт батыры Ҡарабай Иртыш үрендә һунар итә, шундағы ҡырғыҙ батыры Һарыбай менән дуҫлаша, хатта балалары тыумаҫ элек үк ҡоҙалашып ҡуя. Чоҡан Вәлиханов ҡалдырған мәғлүмәт буйынса, Иртыш үрендә ҡасандыр үҙҙәрен әле лә ҡырғыҙ тип йөрөткән халыҡтың Манас тигән ҡалаһы булған [44]. 1994 йылда Новосибирск археологтары шул тирәлә соҡсоноп, ысынлап та, ҡырғыҙҙың боронғо төйәген асҡандар. Балыҡсы ырыуына инеүсе башҡорттар әлегәсә үҙҙәренең бабалары Алтай яғынан, Томск тирәһендәге Ҡәнғән тигән ерҙән килеүен, дөрөҫөрәге күсеп йөрөр биләмәләренең шул яҡҡа ла һуҙылыуын, хәтерләй. Дыуан, Уран, Тиләү ырыуҙарының сығышы ла Алтай яҡтарына бәйле [45]. Башҡорт эсенә ингән ырыу, ҡәбиләләр ошо этностың өлөшө тип танылған дәүерҙә лә Иртыш, Алтай менән бәйләнеше өҙөлмәгән. Шуға ла: «Беҙҙең боронғо илебеҙ Алтай тауҙарынан» [46], — тип һөйләп булғандар ҙа инде.

Академик Ғайса Хөсәйеновтан яҙып алынған хәтирәлә әйте-

---

[43] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961. 104-се б.

[44] Валиханов Ч. Г. Очерк Джунгарии / Манас — героический эпос киргизского народа. Фрунзе, 1968. С. 40.

[45] Шунда уҡ. 170, 350—353-сө б.

[46] Шунда уҡ. 137-се б.

леүенсә, әле ошо быуаттың 30-сы йылдарында ла уның тыуған ауылы Үтәгән (Ҡырмыҫҡалы районы) ҡарттары тарих төбөнә төшөп киткәндә: «Олатайҙар Иртыш буйындағы Бишҡайында (Биштирәктә) йәйләп ятҡанда», — тип ысҡындырғылар булғандар. Бында һүҙ табын ырыуының бабалары хаҡында бара. Ә уларҙың иң өлкәне, Сыңғыҙ хан менән яндаш йөрөгәне, Майҡы бей, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев теркәп ҡалдырған мәғлүмәт буйынса, Ҡара диңгеҙ яғынан сығып, Ҡубань, Волга, Яйыҡ кисеп, Тубыл менән Иртыш йылғалары буйын биләгән. Майҡы бейҙең вариҫтарынан бер бейҙең исем-шәрифәттәре Байтирәк[47] булған. Үтәгән ҡарттары Бишҡайын йә Биштирәк тигәндә, ихтимал, шул төйәк иткән урынды күҙ уңында тотҡандарҙыр.

Ят бауырҙары илгә баҫымлатмау, уларҙан илде арындырыу тигән төшөнсә хаҡында һүҙ барғанда ла, фольклорыбыҙ «Иртыш башҡорт өсөн тыуған илдең бер өлөшө иҫәпләнгән» тигән идеяны алға һөрә. Томға ингән «Ҡуңыр буға» эпосынан бер миҫал.

Ҡан ҡойған ул (башҡорт халҡы. — Ә. С.), йән биргән,
Үңгәмләшеп, алышып,
Дошмандарын ҡамалап,
Ҡыҫырыҡлап ҡырған ул:
Ҡаялай күкрәк кереп,
Тауҙай ҡалҡып торған ул;
Хас дошманды баҫтырып,
Килгән юлын таптырып,
Илдән ҡыуып сығарғын —
Ертыштан * да уҙғарған,
Уҙғарып, ау, уҙғарған.

«Уҙғарып, ау, уҙғарған» — ябай поэтик рефрен ғына түгел. Ул — бабаларыбыҙҙың ят бауырҙарҙы Иртыштан ары байтаҡ ара «оҙатып» барыуына, башҡорт еренең иркенлегенә баҫым яһау ҙа.

Иртыштың башҡорт өсөн үҙ булыуын хатта им-том фольклоры ла хәтерләй. Татран ҡыуғанда, имсе һамаҡлап уҡый торған ҡара догаларҙың береһендә, бына былай тиелә:

Тат, татран, татран,
Татран тигән һин булһаң,
Иҙел кискән — мин булам!
Тат, татран, татран,
Татран тигән — һин булһаң,
Яйыҡ кискән — мин булам!
Тат, татран, татран,

---

[47] Өмөтбаев М. Йәдкәр / Текстологик эштәрҙе атҡарыусы, төҙ. баш һүҙ яҙ., аңлатмалар биреүсе Ғ. С. Ҡунафин; Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов; Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1984, 219—220-се, 216-сы б.; Башкирские шежере / Сост., пер. текстов, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. Уфа: Башкнигоиздат, 1960. С. 155.

Татран тигән — һин булһаң,
Иртыш кискән — мин булам [48].

Был ҡара доғаның һуңғы юлына айырыуса иғтибар иттерге килә. Аңлашылыуынса, Иртыш кисеүе менән ҡолаҡ имсеһе маҡтана. Маҡтанырлығы бар. Сөнки Иртыш — Иҙел, Яйыҡ ише генә түгел, оло йылға. Ағын һыу шүрәленән, осоҡтан һаҡланыу сараһы, улар юлында кәртә иҫәпләнгән. Шуның кеүек, татран рухының юлын быуыр һыу ул Иртыш.

«Иртыш кискән — мин булам». Был һүҙҙәр «Ҡуңыр буға» эпосынан әле генә килтерелгән өҙөктөң һуңғы юлдарына ауаздаш булыуы менән дә әһәмиәтле. Тегеһе бабаларыбыҙҙың ят бауырҙарҙы Иртыштан ары байтаҡ «оҙатып» барыуына баҫым яһаһа, былыһы: «Башҡорт Иртыш буйында ғына йәшәп ҡалмаған, уның аръяғына сығып йөрөү ҙә уға бер ни тормаған», — тип әйткәндәй була. Һәр хәлдә бабаларыбыҙҙың ере Иртыш аръяғында ла етәһе булғанлығына ишара яһала. Шулай булғас, татран ҡыуыусы имсе һүҙендә башҡорттоң Ер-һыу иркенлеге менән ғорурланыуы ла әйтелеүенә инанырға нигеҙ бар. Был фекерҙе шул да ҡеүәтләй. «Тазкиратен ал-ахуан ва ал-ахбаб» («Зат-зорият, туған-тумасалар тарихы хаҡында хикәйә») буйынса Сыңғыҙ хандың замандашы булған Майҡы бейҙән тыуған Ҡара табын бей, Иртыштан ары ла башҡорттар булыуына ишара итеп: «Беҙҙән ары көнсығышта ирәкте халҡы йәшәй. Ҡинйә улым Әхмәт шәйех шуларға тартҡан», — тиер булған. Шул балаһын:

Минең улым — ирәкте,
Минең улым — ирәкте,
Минең улым — Иртышлы,
Минең улым — ир кеше, —

тип иркәләр булған [49]. Иртыштың ике ҡушылдығы Оло башҡорт, Ҡесе башҡорт тип аталыуы ла, Мәхмүт Ҡашғариҙың картаһында Иртыш, Ишим йылғалары башындараҡ (көнбайышҡа табанырaҡ) «Башҡорт далалары» йәки «Башҡорт ерҙәре» тигән урын күрһәтелеүе лә [50] — иш янына ҡуш. Ошондай мәғлүмәттәр менән танышҡас та, башҡорт өсөн милли гимн хисабында йөрөгән «Урал» йырындағы шундай юлдар хәтергә килә:

Арал диңгеҙенән Алтайғаса
Йәйелеп ята башҡорттоң далаһы.
Йырҙарың күп һинең, мондарың күп,
Әйҙә, йырла, башҡорт балаһы!

(Был йырҙың тәүге юлдарында «Арал диңгеҙенән» урынына

---

[48] БХИ: Т. 1. Йола фольклоры. № 30 Д.

[49] Был мәғлүмәттәр филология фәндәре кандидаты Миңлеғәле Нәзерғоловтың «Историко-функциональные жанры башкирской литературы» тигән монографияның ҡулъяҙмаһынан алынды (1997).

[50] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. С. 137.

«Урал тауҙарынан», «Алтай» урынына «Иртыш» тип тә ебәргеләйҙәр). Йырҙағы «Башҡорт далаһы» һүҙмә-һүҙ М. Ҡашғари картаһында ҡабатланыуы ла — был атаманың уйҙырма түгеллегенә, ысынлап та башҡорт өсөн Иртыш һәм Алтай — изге ер иҫәпләнеүенә шик ҡалдырмаҫлыҡ дәлил ул. Шуға ла «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың Т. Беляев нөсхәһендә һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының М. Ғафуриға юлыҡҡан версияһында башҡорт ырыуҙарының аңа шул Иртыш үрендә ҡырғыҙға ҡатнашып йәшәгән мәле теркәлеүенә лә икеләнергә урын юҡ. Ошо фекер файҙаһына йәнә дәлилдәр бар. «Зат-зоярат... тарихы»нда әйтелеүенсә, Ҡара табын үлгәс, уның вариҫтары көнбайышҡа — Миәс, Бөрө яҡтарына күсә. М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр»е табындарҙың ил яңыртыуы хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәр бирә. Майҡы бейҙең ейәндәре «Әсәди (Эсди) бей менән Шәкәрле бей Себер йортонда Ибаҡ, Шибаҡ тигән Сыңғыҙ нәҫеленән (булған) ике ханға табиғ булып торғандары заманында, был хандар барса бейҙәрҙе үлтермәгә ҡасд * ҡылғандар. Быны ханға ариб * бер кемһәнә был ике бейгә агяһландырып * «Башығыҙҙы алып ҡасығыҙ, юҡһа һәләк булырһығыҙ», — ти, имеш, бәғдә * Әсәди (Эсди) бей менән Шәкәрле бей аттарына менеп, ҡасҡандар. Хан кешеләре ҡыуып, тота алмағандар», «ун бер ырыулы», «мең йәнле» мең ҡәбиләһенә килеп һырынып, уларҙан мал алып, ҡыҙҙарына никахланғандар [51]. Әсәди менән Шәкәрленең илдән китеүҙәренең сәбәбе лә, һыбай ҡасыуҙары ла, үткән юлдары ла, эҙәрләүселәргә тоттормауҙары ла, мең еренә килеп сығыуҙары ла, шунда маллы, кәләшле булыуға өлгәшеүҙәре лә Заятүләкте хәтерләргә мәжбүр итә: уны ла үлтерергә йыйыналар, ул да һыбай ҡасып, мең ырыуы еренә (Балҡантауға, Асылыкүлгә) юлыға. М. Ғафури теркәгән версия буйынса, ағалары эҙәрлекләй башлағас, үҙенең толпарында «бер ҙә туҡтамай китеп, һигеҙенсе көн ҡояш сығыр ваҡытта (Татар ғалимы М. Ғ. Усманов тапҡан версия буйынса, Түләктең аты «айлыҡ ергә бер баҫҡан» — авт.) ҙур күлдең яғаһына барып» туҡтай. «Был оло күл был көндәге мәғлүм Асылыкүл булалыр». Кирәй Мәргән әйткән хаҡ булһа, «айлыҡ ергә бер баҫҡан» толпар һигеҙенсе көн тигәндә, Ағиҙел тамағы менән Асылыкүл араһын әллә нисә тапҡыр урап сыҡҡан булыр ине. Ә Заятүләккә ары сабып, бире сабып, фарсит итергә форсат юҡ. Унда баш ҡайғыһы була. Тимәк, Заятүләк тә алыҫыраҡ ятҡан, ихтимал Әсәди бей менән Шәкәрле бей кеүек үк, башҡорт менән ҡырғыҙҙың боронғо төйәге булған Иртыш яғынан килгәндер.

Оло Ҡариле версияһы буйынса ла, Түләк Асылыкүлгә бик йыраҡтан килә. Эҙәрләүселәрҙән уны ел еткермәҫ Аҡбуҙсәһе алып ҡаса. Быны ул хаҡта ни тиелә: «Аҡбуҙсә (Түләкте) йола(п) * алып ҡасты. Алты көн туҡтаманы, етенсе көн иртә көн сығарҙа бер олуғ даръяһының янына килде. Туҡтаны» [52]. Дөрөҫ, был вер-

---

[51] Өмөтбаев М. Йәдкәр. 220—221-се б.
[52] Усманов М. Ғ. Ҡаурый ҡәләм эҙенән. Казан, 1985, 239-сы б.

сияның башында уҡ быҒаса әйткәнебеҙсә, Түләктең атаһы Басман хандың Яйыҡты һыулауы хаҡында иҫкәртелә. Географик, административ бүленеш хаҡындағы бөгөнгө мәғлүмәтебеҙ шул тиклем «марш-бросокты» Түләк хәҙерге Ҡаҙағстан менән тарихи башҡорт илен айырып ятҡан йылға буйынан яһаған, тип фаразларға ерлек бирә. Ләкин икенсе төрлө уйларға ла нигеҙ бар. Яйыҡ — Алтай халыҡтарында тәңре исеме. Алтайҙа (йәғни Алтынтауҙа) ул һыу исеме булыуы ла ихтимал. Төп төйәктән (атайсалдан) ят ергә күсенгәндә, халыҡ донъя күрәгеп генә түгел, йыр-моңон, ер-һыу атамаларын да үҙе менән «алып китеп», шуларҙы яңы урынға яраҡлаштырыр булған. Күрәһең, шул атамаларҙы ҡабатлап, боронғо атайсал тураһындағы хәтерҙе яңыртҡандарҙыр ҙа һағыныу тойғоһон баҫыр булғандарҙыр. Шунан сығып, «Яйыҡ» атамаһы Алтайҙан күсенеп, башҡорт этносына ҡушылған ырыуҙарға эйәреп килеүе, шулай булғас, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының М. Ғ. Усманов тапҡан версияһында ла тәүҙә Алтай яғы күҙ уңында тотолоуы ихтимал тип уйларға була. Был әйтелгәндәр ҙә Ҡ. Мәргәндең фаразын инҡар итә.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙы «тәржемә иткәндә» Т. Беляев һәр этнографик, тарихи, географик төшөнсәләргә аңлатма бирә барған. (Был уның китап, нәшриәт культураһы өлкәһендә мәғлүмәтле кеше булыуы тураһында һөйләй.) Әммә «ҡырғыҙ» һүҙенә оронмаған. Эпостың ошо нөсхәһен башҡортсаға кире ауҙарыу эшен атҡарған күренекле шағирҙар Баязит Бикбай менән Нәжип Иҙелбай ҙа, уны күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһына әҙерләүсе М. Сәғитов та «ҡырғыҙ» һүҙе «ҡаҙаҡ» мәғәнәһендә ҡулланыла[53] тип аңлата. Дөрөҫ, «Башҡорт повесы»нда «ҡырғыҙ» һүҙе менән бер рәттән, уның синонимы рәүешендә, «ҡыр ҡаҙаҡ» та ҡулланыла. Әммә быға тиклем әйтелгән күҙәтеүҙәр «ҡырғыҙ» һүҙен Т. Беляев «ҡаҙаҡ» мәғәнәһендә түгел, бөгөн аңлашылған мәғәнәһендә ҡулланыуы ихтимал тип фаразларға нигеҙ биргәндәй.

Ахырҙа шуныһын да иҫкәртеү урынлы булыр. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында дөйөм төрки берлеге — йә Һун дәүләте, йә Төрки ҡағанлығы хаҡындағы хәтер сатҡылары ла сағыла биреп ҡуя. Һәр хәлдә, Заятүләк үҙенең тыуған илен — Төркәстан иле тип белә. Һыуһылыуға эйәреп, һыу аҫты батшалығына килгәс, тыуған илен һағына. «Күҙгөгә ҡарап, үҙенең (шул һағыныуҙан, һағышҡа бирелеп. — авт.) һарғайғанын күргәс: «Аһ! Атаәсәмдән, Т ө р к ө с т а н иленән айырылып, бер ҡыҙға ғашиҡ булдым. Бер ҡыҙ өсөн һары ҡалдым», — ти. Шуға күрә лә эпоста телгә алынған «Ҡырғыҙ иле» лә, «Унсан уймат йорто ла» (Ә 23-сө тип билдәләнгән версияла был төшөнсәләр дөйөмләштерелеп «Ун һан ҡырғыҙ иле» тип бирелгән) — Заятүләктең элекке «адресын» «конкретлаштырыу» сараһы ул. Икенсе яҡтан (һәм иң мөһиме), улар шул оло илдең, ғөмүми төшөнсәле Төркөстандың, төп герой

[53] БХИ: Эпос. 1-се кит. 307-се б.

өлөшөнә төшкән регионын аныҡлау сараһы кеүек кенә лә аңлашылыр.

Сюжет, айырым мотивтар, образдар мифологик башланғыстар, тема, идея килеп сығыш йәһәтенән һинд-иран, төрки-монгол, уғыр, фин донъяһы ҡомартҡылары менән ҡайһы бер ауаздашлыҡтары, оҡшашлыҡтары, хатта уртаҡлыҡтары булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт эпостары, шул иҫәптән мифологик эпостарыбыҙ ҙа, «ырыуһыҙ Иван» затынан түгел. Улар билдәле урынға ереккән. Уның тыуған иле, Ватаны бар. Эпостарыбыҙҙың бәғзеләрендә географик урын, ил төшөнсәһе бабаларыбыҙҙың тарихи хәтерен аныҡ уҡ сағылдырып, был төшөнсәне ярайһы киң арауыҡтар иңләрлек кимәлгә еткереп ташлаһа ла, төп йорт, төп ил тигәндә, башҡорт илаһи титан — Урал батыр бар иткән Урал илен күҙ уңында тота. Урал иһә башҡорт өсөн — изге ер, ғәзиздәрҙән-ғәзиз ер. Сөнки ул Ватан төшөнсәһенә эйә. Тимәк, ошо ергә ереккән эпостар — милли ерлекле феномен.

Халыҡ ижадында «ил» һүҙе «халыҡ» төшөнсәһенә лә эйә. Илаһи зат Урал батыр, әйткәнебеҙсә — үҙе бар иткән илде төйәкләүсе әҙәм заты урсеүенең дә тәү сәбәпсеһе. Уның өсөн ике мәғәнәле «ил» һүҙе айырылмаҫ бер төшөнсәгә эйә. Яҡты донъяла үҙенә тәғәйен изге эштәрен теүәлләп, баҡый донъяға күсер алдынан Урал батырҙың: «Тыңла, илем!» — тип өндәшеүе ана шулай аңлашыла ла.

Тыңла, илем, һиңә әйтәм:
. . . . . . . . . .
Яуызға юлдаш бумағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ,
Уландарым, һеҙгә әйтәм,
Мин әрсегән ерҙәрҙә
Ҡешегә байман табығыҙ;
Яуҙа буһа, баш булып,
Ҡешегә ил ҡороғоҙ,
Данлы батыр булығыҙ!
Олоно оло итегеҙ —
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Ҡесене кесе итегеҙ.
Кәңәш биреп йөрөгөҙ!
. . . . . . . . . .
Яҡшылыҡ буһын атығыҙ,
Ҡеше буһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ! —

тип васыят әйтә Урал батыр.

Үҙҙәренең тәңре затлы ҡанбабаһының васыятына тоғро ҡалып,

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,

Аямаған йәнен, түккән ҡанын —
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Был куплет мәшһүр «Урал» йырынан алынды. Илаһи затлы ҡанбабабыҙ Урал батыр васыятына тоғролоҡто раҫлаусы йырҙың исеме үк мәшһүр эпостыҡы менән тап килә. Быныһы иһә — шул тоғролоҡто өҫтәлмә раҫлау ул.

* * *

Башҡорт эпостарының мифология менән һуғарылған архаик төркөмө бына шулай күп яҡлы феноменаль күренеш. Бында беҙ уларҙың үҙенсәлектәренең бары бер аҙына ғына туҡталдыҡ. Башҡорт эпосы далаһының күп тарафтары әлегәсә сиҙәм ерҙе, сиҙәм булмаһа, ҡалдау ерҙе хәтерләтә. Эпос ғилемендәге донъя әһәмиәтендәге «технологик» ҡаҙаныштарҙы өйрәнеп, тикшеренеү «төрәнен» тәрәнгәрәк батырып, шул сиҙәмде, шул ҡалдауҙы арҡылы-буйлы һөрәһе лә һөрәһе әле.

*Әхмәт Сөләймәнов, Рөстәм Рәжәпов*



## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

**БНЭ** — *Башкирский народный эпос / Сост. А. С. Мирбадаловой, М. М. Сагитова*, А. И. Харисова. Пер. Н. В. Кидайш-Покровского, А. С. Мирбадаловой, А. И. Харисова. М.: Наука, 1977.

**БРЛ. Т. 1.** — Башкирия в русской литературе. Т. 1. / Сост., предисл., коммент. и библиогр. спр. М. Г. Рахимкулова. Уфа: 1961, 1989.

**БХИ. 1-се том.** — Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том / Төҙ., мөхәрр., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсе Ә. И. Харисов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1954.

**БХИ. 2-се том.** — Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том / Төҙ., мөхәрр., баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр авт. Ә. И. Харисов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1959.

**БХИ: 1-се том.** — Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. Йола фольклоры / Матер. һайлаусылар, төҙ., аңл. биреүселәр, инеш мәҡ. авт. Ә. М. Сөләймәнов, Р. Ә. Солтангәрәева; Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. Өфө: Китап, 1975.

**БХИ: Йырҙар. 1-се кит.** — Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. 1-се кит. / Текстарҙы һайлап алыусыһы, төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе С. Ә. Галин; Яуаплы мөхәрр. Ҡ. Ә. Әхмәтйәнов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1974.

**БХИ: Эпос. 1-се кит.** — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. 1-се китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңл. биреүсе М. М. Сәғитов; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1972.

**БХЙ** — Башҡорт халыҡ йырҙары / Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңл. биреүсе Х. Ф. Әхмәтов, Л. Н. Лебединский һәм Ә. И. Харисовтарҙыҡы. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1954.

**БӘФҠ ФФ** — Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы янындағы фольклор фонды.

**Вар.** — вариант.

**ҒА.** — Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге янындағы ғилми архив.

**ғәр.** — ғәрәп һүҙе.

**инф.** — информатор.

**ҡаҙ.** — ҡаҙаҡ һүҙе.

**ҡ. б.** — ТТЭИ-ның ҡулъяҙмалар бүлеге.
**мон.** — монгол һүҙе.
**оп.** — опись.
**т. б.** — тәүге баҫмала («Ағиҙел» ж-лы. 1968. — № 8; БХИ: Эпос. 1-се кит.)
**т. н.** — Ғилми архивта һаҡланған төп нөсхәлә.
**төр.** — төркисә.
**фар.** — фарсыса.
**һаҡл. б.** — һаҡланыу берәмеге.
**һөйл.** — һөйләш йә диалект һүҙе.



# АҢЛАТМАЛАР

Аңлатмаларҙа шундай мәғлүмоттәр бирелә:

1) Әҫәр ҡасан, кем тарафынан, ҡайҙа (сит өлкәнән булһа, өлкәһе, р-ны, ауылы), нисә йәшлек (йә йәйә эсендә тыуған йылы бирелә), кемдән (фамилияһы, исеме, атаһының исеме) яҙып алынғаны, ҡайҙа һаҡланыуы, бығаса сыҡҡан баҫмалары, тамға ҡайһы сығанаҡтан алыныуы;

2) Күренекле башҡарыусылар хаҡында белешмәләр;

3) Варианттары хаҡында;

4) Иҫкәрмәләр, лексик, стилистик, тарихи һәм этнографик белешмәләр (улары БХИ: Эпос. 1-се китаптағыса).

## УРАЛ БАТЫР

1910 йылда Ырымбур губернаһы Этҡол волосы (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) Иҙрис ауылында Ғәбит сәсән Арғынбаев (1856—1921) менән Бәләкәй Этҡол ауылында Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтан (1861—1923) Мөхәммәтша Буранголов (1888—1966) яҙып алған. Ҡулъяҙмаһының төп нөсхәһе хаҡында мәғлүмәт юҡ // ҒА-та текстың бары латин графикаһындағы машинкала баҫтырылғанының 3-сө нөсхәһе генә һаҡлана. // ҒА, ф. 3, оп. 12/233. 1—144-се б.

Текста Көнсығыш диалектына ҡараған һөйләшенең хәҙерге Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы райондары ерендә йәшәгән башҡорттарының теленә хас фонетик һәм лексик үҙенсәлектәр сағыла: «у» («ул»), «мэн» («менән»); «аңа» («уға»), «кигән» («килгән»), «мына» («бына»), «берҙә-бер көн» («берҙән-бер көн»), «балға» («сүкеш»). Ихтимал, Тамъян-Ҡатай кантоны Күбәләк-тиләү волосына ҡараған Яңы Балапан ауылында йәшәгән Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев менән ете йыл буйы ай һайын тиерлек осрашып, «уның менән күп тапҡырҙар юлдаш булып, бик күп көйҙәр һәм ҡобайырҙар» (бәлки, шул ҡобайырҙарҙың береһе «Урал батыр» булғандыр. — Ә. С.) өйрәнеүе Ғәбит сәсән өсөн тел йәһәтенән дә бушҡа үтмәгән. Ул үҙенең остазының тел үҙенсәлектәрен дә үҙләштермәй ҡалмаған, әлбиттә. Үҙ сиратында күбәләк башҡорто булған Ишмөхәмәт сәсән дә йәш сағында күп йөрөгән, күп аралашҡан. Шуға күрә лә «Урал батыр» эпосында хәҙерге Баймаҡ ерендә йәшәүсе бөрйән ырыуы башҡорттарының ғына

түгел (ә эпосты яҙҙырыусы Ғәбит сәсән менән Хәмит сәсән — бөрйәндәр), Әбйәлил, Учалы төбәгендә йәшәүсе күбәләк, тиләү ырыуҙарының һөйләш үҙенсәлектәре лә сағылыш тапҡандар.

Баҫмалары // Ағиҙел. 1968. № 8; әҙерләүселәре Ә. И. Харисов менән шағир Баязит Бикбай мөхәррирлегендә; БХИ. Эпос. 1-се том. 33—134-се б.; Библиотека всемирной литературы: Героический эпос народов СССР. Т. 1 / Сост., вступ. ст. и примеч. А. А. Петросян. — М.: Наука, 1975. С. 67—115; БНЭ. С. 265—372; Урал батыр / Предисл. М. М. Сагитова; Худ. пер. Г. Г. Шафикова. — Уфа: Башкнигоиздат, 1976, 1981, 1981; БНТ. Т. 1. Эпос. С. 35—134. Бынан тыш VIII (аҙаҡ IX) класс өсөн туған тел хрестоматияларында күп тапҡыр донъя күрҙе.

Был баҫманы әҙерләгәндә «Урал батыр»ҙың БХИ. Эпос. 1-се китапта баҫтырылған тексы ҒА-ғы нөсхәһе менән ентекләп сағыштырылды. Бығаса төшөрөп ҡалдырылған, йә урынһыҙға төҙәтелгән урындар элекке хәленә кире ҡайтарылды. Архивтағы нөсхәгә хас фонетик үҙенсәлектәре менән айырылып торған һүҙҙәр әҙәби тел ҡанундары талап иткәнсә үҙгәртелде.

Томға «Урал батыр» ҒА-ғы нөсхәһе буйынса индерелде. Оригиналдың үҙендә булмаһа ла, уҡыуҙы еңеләйтеү маҡсатында, әҫәрҙең йөкмәткеһенән сығып, «Ағиҙел»дәгесә бүлектәргә бүленеп бирелде.

М. Буранғолов эпосты яҙҙырған ике сәсәндең дә данлыҡлы ҡурайсы һәм йырсы булыуын әйтә. ҒА-та «Башҡорт халыҡ поэзияһы» исемле хеҙмәтендә (ҒА, оп. 12/445. 261—264-се б.; Буранғолов М. Сәсән аманаты / Төҙ., баш һүҙ авт., яуаплы мөхәрр. Б. С. Байымов. Өфө: Китап, 1995. 66, 98—102-се б.) М. Буранғолов Ғәбит сәсән хаҡында ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр ҙә биргән. Ул сама менән 1856 йылда тыуған, 1921 йылда үлгән, халыҡ ижадының бик күп әҫәрҙәрен, бигерәк тә эпик поэмаларҙы яттан белгән һәм уларҙы айырыуса оҫталыҡ менән башҡарған. 1910—1920 йылдарҙа М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән «Урал батыр», «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат», «Күҫәк бей», «Тамъян», «Батырша», «Ҡараһаҡал», «Салауат», «Һары мулла» тигән ҙур-ҙур эпик әҫәрҙәр яҙып алғанлығын әйтә, был сәсәндең меңәр юллы поэмаларҙы яттан туҡтауһыҙ һөйләй алғанлығын хәбәр итә. Ғәбит сәсән Ырымбурҙа, шулай уҡ шул губерналағы Яҡуп ауылында, 1912 йылда үткәрелгән ҡурайсылар, йырсылар ярышында беренселекте алған. Өсөнсө тапҡыр ул 1920 йылда Башҡортостандың элекке баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта үткәрелгән ярышта беренсе урынға сыға һәм хөкүмәт наградаһы менән бүләкләнә. Ғәбит сәсән оҫталыҡҡа бигерәк тә ҡурайсы Ишмөхәммәт сәсән Мырҙаҡаевтан (1781—1878) өйрәнгән була.

Һуңғы осорҙа халыҡ араһында әлегәсә ҡурайсы Ғәбит сәсәндеке тип йөрөтөлгән бер нисә шиғыры табылды. Уларҙы 1993 йылда Әбйәлил районы Ҡусҡар ауылы уҡытыусыһы Гөлнур сәсән Мәмлиева Башҡортостан телевидениеһының «Хазина» ижад берекмәһенең етәксеһе, танылған ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдиновҡа, «Сәсән» программаһына (алып барыусыһы Әхмәт Сөләймәнов) ебәргән. Шиғырҙар төрлө темаға яҙылған. Был хаҡта исемдәре үк әйтеп тора: «Ҡурай», «Һалдат», «Һаҡалым», «Һимеҙ ҡуян» (шиғри көлдөрөк). Береһе «Урам араһында йөрөп...» тип башлана. Шуларға тышҡы күҙәтеү яһау ҙа сәсәндең берҙән фольклор һәм әҙәби ижад традицияһын яҡшы үҙләштергән, халыҡсан юмор тойғоһо үҫешкән ижадсы булыуы хаҡында фекер уята. Әҫәрҙәренең йәнә бер мөһим билдәһе шул: улар бик тә тормошсан. «Ҡурай» тигән шиғырын уҡығас, мәҫәлән, быны бары ҡурайсы-шағир, ҡурайсы-сәсән генә сығарыуы ихтимал, тигән уйға киләһең.

Сөнки унда хәҙер инде онотола төшкән ҡурай әҙерләү технологияһы ла, ҡурайҙы зауыҡ өсөн генә түгел, ә дуҫ, кисерештәш тип иҫәпләүсе, уның кейөн таба белгән халыҡ музыкантының нескә күҙәтеүҙәре лә сағыла:

Ҡурайымдың эстәренә ҡомдо
Иртә йәйҙән килеп тултырҙым.
Өлгөргәстен уны ҡырҡып алып,
Ләззәтләнеп уйнап ултырҙым *.
Ҡурай шундай ҡорал бит ул, дуҫтар:
Халҡың моңон ихлас уйнайһың,
Шатлыҡтарың булһа, эстән көләң,
Ҡайғың булһа, һыҡрап илайһың.

Хәмит ҡурайсы хаҡында мәғлүмәттәрҙән:

«Хәмит Әлмөхәмәтов... үҙ заманында данлыҡлы сәсәндәрҙең береһе була. Башҡорт халҡы ижад иткән бик күп эпостарҙы, ҡобайыр, йырҙарҙы яттан башҡарып, халыҡҡа еткергән. Үҙе лә йырҙар ижад иткән, ҡурайға оҫта булған.

Хәмит Әлмөхәмәтов шулай уҡ уҡымышлы, ғәҙел кеше булған. Шуның өсөн уны мировой судья итеп ике мәртәбә һайлап ҡуялар.

Хәмит Әлмөхәмәтов 1861 йылда II Этҡолда тыуа. Урындағы мәҙрәсәлә белем ала. Үҙ алдына урыҫ телен өйрәнә. Ике телдә лә яҡшы уҡый һәм яҙа белә. Ул төрлө эштәрҙә эшләй. Халыҡ менән нык аралаша. Үҙ аттары менән «ям ҡыуған» (почта йөрөткән). Сауҙа эшен дә алып бара. Башҡортостанда ғына (йөрөп ҡалмай), ҡаҙаҡ далаларына ла барып сыға. Белорет, Верхнеуральск яҡтарында ла йыш була. Сәсәндәр бәйгеһендә ҡатнашып һәр саҡ алдынғы урындарҙы яулап ала». Исемдәре онотолған шәхестәр // «Ирәндек» агитка бите / Мөхәрририәт: И. Хөсәйенов, Л. Дәүләтшина, Т. Ушанов. — Баймаҡ ҡалаһы мәҙәни-мәғрифәт ойошмаһы органы, 1993 йылдың июлендәге сығарылышы.

Ошо уҡ сығарылышта 1917 йылда Хәмит сәсәндән Мөхәммәтша сәсән Буранғолов яҙып алған яҙмаларҙан ике өлгө, «Урал» йыры һәм «Ҡарас менән Ҡараһаҡал» эпосының берәр варианты бирелгән.

## УРАЛ

Уралҡайым буйы моңға тулған,
Ҡошҡайҙары һайрай һәр саҡта.

---

* Йәш ҡурай сөрөшмәһен, формаһын боҙмай ғына кипһен өсөн, уны киҫеп алғас, эсенә ҡом йә көл тултырып, көн төшмәҫ ышыҡта киптерәләр. Ялан ҡатай башҡорттары, мәҫәлән, Курган өлкәһе Әлмән районы ҡурайсылары ҡурайҙы Өскүл тигән ерҙән барып алалар икән. Был яҡта ҡурай буйға ҡыҫҡа, үҙе йоҡа була, тиҙәр. Шуға күрә уны үткер бәке менән төптән генә киҫеп алып, йәш булһа, эсенә ҡом йә көл тултырып, тышына һарыҡтың бешәләнгән (таҙартылып, ҡайнар һыуға тығып алынған) ас эсәген кейҙереп, юғарыла әйткәнсә, киптерәләр. Бындай ҡурайҙы сөлҡурай тип йөрөтәләр. Ғәбит сәсәндең шиғырында ҡурай әҙерләүҙең тағы бер технологик алымы хаҡында һүҙ бара буғай. Шиғырҙан аңлашылыуынса, иртә йәйҙә үк үҫеп ултырған ҡурайҙың эсенә ҡом тултыра булалар («Ҡурайымдың эстәренә ҡомдо Иртә йәйҙән килеп тултырҙым»). Ҡурай бешеп еткәс (үлән, иген бешкән кеүек үк) кенә, уны киҫеп алыр булғандар, күрәһең («Өлгөргәстен уны ҡырҡып алып, Ләззәтләнеп уйнап ултырҙым»).

Урмандары упын, ай, сәскәле,
Йәннәттәрең торһон бер яҡта.
Урал буйҡайҙары, ай, урманлыҡ,
Ҡошҡайҙары һайрай башында.
Ялан еркәйенең, ай, ҡоштары
Ҡаңғыралар ҡомһоу ташында.
Урал буйҡайҙары шаулы булһа,
Ялан еркәйҙәре ҡом-буран.
Урал малҡайҙары сәскә утлай,
Ялан малҡайҙары — ҡыу үлән

2. 1984 йылда Ейәнсура р-ны Ғәббәс ауылы Сәфәрғәлина Шәмсиә Сәфәрғәле ҡыҙынан (1929 йылғы) БДУ талибәһе Г. Сәфәрғәлина яҙып алған // БӘФК ФФ. 1984 йылғы материалдар. Ҡыҫҡаса йөкмәткеһе беренсе тапҡыр урыҫ телендә донъя күрҙе (Ҡар.: БНТ. Т. 1. Эпос. С. 500). Башҡорт телендә ошо серияның 2-се томына индерелде (Ҡар.: БХИ. Т. 2. Риүәйәттәр. Легендалар // Текстарҙы һайлаусыһы, төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар яҙыусыһы Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. Ҡирәй Мәргән һәм Ә. М. Сөләймәнов. Өфө: Китап, 1997. 37-се б.).

3. 1956 йылда Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тороусы (1944 йылға тиклем Башҡортостандың Учалы районы Имәнгол ауылында йәшәгән) Исмәғил Рәхмәтуллиндан Ә. И. Харисов тарафынан яҙып алынған һәм, шул яҡтарҙа башҡа кешеләрҙән ишеткән мифологик мотивтар, эпизодтар һәм деталдәр менән бер аҙ тулыландырылып, беренсе тапҡыр 1956 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналының 5-се һанында «Урал батыр» исеме менән баҫылған. Артабан «БХИ»-на (2-се том, 1959: 1-се кит., 1972) индерелгән.

## АҠБУҘАТ

1917 йылда Күмертау районы Бабалар ауылы Ғәтиәтулла сәсән Бикҡужиндан Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 12/297. 1—67-се б. Текст латин графикаһында машинкала баҫылған. Тексты ҡулдан яҙылғаны ла, машинканан үткәрелгәненең беренсе данаһы ла бер ни тиклем көньяҡ диалектының Эйек-Һаҡмар һәм көнсығыш диалектына ҡараған һөйләштәрҙең хәҙерге Бөрйән, Мәләүез, Күгәрсен, Көйөргәҙе тирәһендә йәшәгән башҡорттарға хас үҙенсәлектәрен берләштерә. «Аҡбуҙат» беренсе тапҡыр 1943 йылда М. Буранғолов тарафынан төҙөлгән «Батырҙар тураһында эпос» йыйынтығында һәм (БХИ. 1-се том. 75—82-се б.; БХИ: Эпос. 1-се кит. 33—134-се б.) шулай уҡ башҡорт әҙәбиәте хрестоматияларында, төрлө йыйынтыҡтарҙа баҫылған. Яңы баҫмаһы әҙерләгәндә, эпостың тәүге йыйынтыҡта сыҡҡан тексы ҒА-тағы нөсхә менән сағыштырылды. Төшөп ҡалған юлдар беренсе тапҡыр кире ҡайтарылды, айырым лексик үҙенсәлектәрҙе лә һаҡларға тырышылды. Ундай осраҡтарҙа һәр һүҙгә аңлатма бирелде. Урындағы һөйләшкә генә хас фонетик үҙенсәлектәргә эйә булған һүҙҙәр «һаҙҙыҡ», «буйҙап», «һөйҙән», «уйҙап», «таштап», «аттап», «баштап», «димдән», «бы», «мигә», «маң», «һигә», «буған», «бумаған», «кигән», «кимәгән» иҫеләр: («һаҙлыҡ», «буйлап», «һөйләп», «уйлап», «ташлап», «атлап»,

«башлап», «димләп», «был», «миңә», «минең», «һиңә», «булған», «булмаған», «килгән», «килмәгән») һаҡланылды.

## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

«Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәренең был сағыштырмаса тулыраҡ тексын 1964 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Мәкәш ауылында 74 йәшлек Бикҡимер Вәлиуллиндан Мөхтәр Сәғитов яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 63/6. 18—30 сы б.; БХИ: Эпос. 1-се кит. 187—196-сы б.

## I. ТОМҒА ИНГӘН ВАРИАНТТАРЫ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

1. 1909 йылда Мәжит Ғафури халыҡ араһында йөрөгән ҡульяҙма китаптан күсереп алған һәм 1910 йылда Өфөлә «Заятүләк берлә Сусылу» тигән исем аҫтында татар телендә айырым китап итеп баҫтырған. Томға 1954 йылда М. Ғафури әҫәрҙәренең 2-се томында һәм БХИ: Эпос. 1-се китапта (197—209-сы б.) баҫылған текст алынды.

Үҙенең баҫмаһына яҙған инеш һүҙендә М. Ғафури 1909 йылда Асылыкүл буйы башҡорттарынан «Заятүләк» көйөн ишетеүе, был эпик әҫәрҙең ҡульяҙма китап рәүешендә таралыуы хаҡында мәғлүмәттәр бирә. Әҫәр уҡымышлы кешеләр ҡулы аша үтеү сәбәпләлер, лексикаһында ғәрәп, фарсы һүҙҙәре бер аҙ урын алған. Үкенескә ҡаршы, Ғафури был әҫәрҙе ниндәй ҡульяҙманан күсереп алыуы тураһында бер ни ҙә әйтмәй. Уның версияһында әйтелгән Уисан уймат иле 28-се вариантта ла телгә алына.

Күренекле татар ғалимы М. Ғ. Усманов үҙенең «Ҡаурый каләм эзенән» тигән китабында (Ҡазан, 1983. 275-се б.) М. Ғафуриҙың, «үҙ осорондағы этнографик белем дәрәжәһенән сығып хөкөм» йөрөтөп, «һәр бер архаизмды бары ҡаҙаҡ теле күҙлегенән генә аңлатырға» тырышыуын шелтәләй. Мәҫәлән, думбыра менән тирмәне ҡаҙаҡтарға хас нәмәләр тип кенә таный. Ғалимдың фекере менән килешмәй булмай.

Түбәндә «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының 1910 йылғы баҫмаһына Мәжит Ғафури тарафынан яҙылған инеш һүҙҙең тулы тексы бирелә.

«Бынан бер йыл элек мәшһүр бер кешенең ғаиләләре менән Бәләбәй өйәҙендәге башҡорттар араһына, Асылыкүл буйына, барғайным. Унда барыуым маҡсаты, бер йәһәттән, күңел асыу һәм ял итеү, матур күл буйын күреү, икенсе яҡтан, Асылыкүл тирәһендәге күптән бирле үҙҙәренең башҡортлоҡтарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап килгән башҡорттарҙы күреү, иҫке, моңло, дәртле милли көйҙәрен ишетеү ине. Ысынлап та, улар был көнгә саҡлы иҫке ғөрөф-ғәҙәттәрен, йыр-көйҙәрен ысын көйөнсә һаҡлап килә алғандар. Хатта тирмә менән күсмә хәлендә йөрөүҙәрен дә 10—15 йыл элек кенә ташлағандар.

Беҙ, Асылыкүл буйына килеп төшкәс тә, тәңкә кеүек күл буйына, йәмйәшел үлән өҫтөнә сатырҙарҙы ҡорҙоҡ. Күлдән йыраҡ түгел, Ҡанлы, Сапай тигән ауылдарҙан ҡурайсы һәм йырсылар килтерттек.

Мин, сысҡан көтөп ултырған бесәй кеүек, ҡурай уйнаған һәм йырлаған башҡорттарҙың ауыҙҙарына ҡарап, башҡа нәмәләрҙе тамам онотоп, ҡурайға ҡушылған моңло тауышты ысын күңелем менән тыңлай инем. Башҡорттарым

«Ҡара юрға», «Өйҙөрәк», «Таштуғай», «Ашҡаҙар», «Тәфтиләү», «Һаҡмар», «Ҡөрән юрға», «Ҡантондар» тигән көйҙәрҙе берәм-берәм һыҙҙыралар ине.

Ҡул буйлап яңғырап киткән тауыштары мине рухани ләззәт менән ләззәтләндерә, фәҡәт был матур көйҙәрҙең башҡорттар араһында тиҙҙән юғалып, улар урынына татар таҡмаҡтары урынлашыуы хәтеремә килеп, мине бер аҙ хәсрәтләндерә ине.

Улар хәл йыйған ваҡытта көйҙәрҙең исемдәрен, ни сәбәпле сығарылғанлыҡтарын һөйләтә инем.

Бер ваҡыт «Заятүләк» көйөн уйнап, йырлай башланылар. Быны уйнап бөткәнсе саҡ сыҙап торҙом. Бөткәс тә:

— Заятүләк кем һуң ул? — тинем.

Янымa ултырған башҡорт ағай, тынын йыйып, ауыҙын иплэп, һөйләй башланы. Ул быны һөйләгән ваҡытта, ихласлыҡ менән ҡулын һелтәп, һөйләгән һүҙҙең дөрөҫлөгөнә тамам ышанғанын хәрәкәттәре менән белдерә ине.

Ҡулы менән күлдең теге яғына ымлап:

— Ана, унда Заятүләк ташы бар, һәм бынан 15 саҡрым ерҙә, ана, күгәреп күренгән Балҡан тауында, уның ҡәбере бар. Был күлдең уртаһы бик тәрән... — тип бөтөргәс, — «Заятүләк» тигән китап та бар, — тине.

Мин элек был китаптың Өфөлә мәшһүр бер кеше тарафынан руссаға тәржемә ителеп, үҙе вафат булыуы сәбәпле, баҫтырылмай ҡалғанын ишеткәйнем. Бында ла бының барлығын ишеткәс, уны шунда уҡ эҙләп таптым. Ҡулыма төшкән бер нисә даналарын бергә килтереп ҡарағанда, китаптың әһәмиәте мин уйлағанса булмаһа ла, түбәндәге сәбәптәр өсөн яҙып алып, тура килһә, баҫтырырмын тип уйланым.

Сәбәптәр: «Заятүләк» көйөнөң матур, моңло, бик иҫке булыуы бының, ваҡиғаһы хыяли булһа ла, башҡорттарҙың күңеленә ысын төҫлө булып урынлашыуы, бында яҙылған Заятүләктең шул — мин янында ултырған Асылыкүл янында йөрөгәнлеге, күлдең күҙ алдымда ялтырап ятыуы һәм башҡалар.

Мин бында уҙғарған өс-дүрт көн ғүмеремдә гел башҡорттарҙың иҫке тормоштарын һөйләтеү, ҡурай уйнатып, моңло көйҙәрен көйләтеү менән уҙғарҙым. Улар, иҫке тормоштарын, кантондар заманын һөйләп, шуға бәйләнешле йырҙарын йырлап, көйләп ебәрһәләр, уларҙың иҫке тормоштары күҙ алдыма килгән төҫлө булып, ысындан күңелде нескәртә ине. Яңы тормошҡа өйрәнмәгән, эште ҡайһы еренән башлап алып китергә белмәгән кешенең үткән ғүмерҙе һағынып һөйләүе ысынлап та ҡыҙғандыралыр.

Башҡорттарҙың бөгөнгө хәленә ҡараған ваҡытта, уларҙың көйҙәрен, йырҙарын һәм башҡа әҫәрҙәрен юғалтмай алып ҡалырға тырышыу кәрәк ине. Ләкин уларҙың, тоҙ кеүек, иреп бөтөүенә беҙгә күҙ һалырға бөгөнгө тәрбиәбеҙ, егетлек һәм ғәйрәтебеҙ етмәй шул» (Ғафури М. Әҫәрҙәр. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1953. 2-се т. 162—164-се б.).

2. Заятүләк менән Һыуһылыу исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында 62 йәшлек Рәхилә сәсән Теләкәеванан күренекле фольклорсы, яҙыусы Әхнәф Нурмөхәммәт улы Ҡирәев (Ҡирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3, 96—104-се б.; БХИ: Эпос. 1-се кит. 210—214-се б.

3. Заятүләк. 1921 йылда Йылайыр кантоны Ғәбдерәш ауылында 57 йәшлек Ғәли ҡурайсы Мәһәдиевтан яҙып алынған. Яҙып алыусыһы билдәһеҙ. Ҡулдан яҙылған нөсхәһе һаҡланмаған. Латин хәрефле машинкала баҫылған бер нисә

күсермәһе генә бар // ҒА, ф. 3, оп. 12/294. 22—28-се, 31—36-сы, 37—43-сө б.; шунда уҡ, оп. 12/295. 64—74-се б.

4. «Заятүләк менән Һыуһылыу» исеме менән 1964 йылда Әлшәй районы Мәкәш ауылында 62 йәшлек Сабирә Вәлиуллинанан күренекле фольклорсы Мөхтәр Моффазал улы Сәғитов яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 47/1. 6—8-се б.; БХИ: Эпос. 1-се кит. 215—222-се б.

Сабирә Вәлиуллина «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙы атаһы Сөләймәндән отоп алған. Уның атаһы эпик әҫәрҙәрҙе, ғөмүмән, башҡорт халыҡ ижадын яҡшы белгән.

5. «Заятүләк» исеме менән 1967 йылда Башҡортостандың Йылайыр районы Мәҡсүт ауылында Сәлиха Бикбулатованан (1904 йылда тыуған) күренекле фольклор йыйыусы Ниғмәт Динмөхәмәт улы Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 65/2. 30—35-се б.

## II. БАШҠА ВАРИАНТ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

6. XIX быуаттағы күренекле рус ғалимы В. И. Даль тарафынан яҙып алынған һәм «Башкирская русалка» исеме менән рус телендә баҫылған. («Москвитянин» журналы, 1843, № 1, 97—119-сы биттәр.) Текст шиғыр менән аралаш прозанан тора. В. И. Даль әҫәрҙәрҙе ҡайҙа, ҡасан һәм кемдән яҙып алыуы хаҡында мәғлүмәттәр бирмәй. Ҡар.: БРЛ. Т. 1. С. 247—313.

Әҫәр Ә. И. Харисов тәржемәһендә беренсе тапҡыр 1959 йылда башҡортса донъя күрә: БХИ. 1-се том. 28—33-сө б.

Ваҡиғалар Дим буйы, Асылыкүл, Ҡандракүл тирәләрендә бара. Заятүләк Сәмәр хандың улы итеп һүрәтләнә. Сәмәр хан үҙе Сыңғыҙ хан улы итеп бирелә. Синфи, феодаль мөнәсәбәттәр шаҡтай асыҡ төҫмөрләнә. Сәмәр хан бик ҙур биләмәгә хакимлыҡ итә. Уның ҙур ғәскәре, вәзирҙәре, ҡошсолары, хеҙмәтселәре бар. Хандың әйткән һүҙе башҡалар өсөн закон булып тора. Ул сит халыҡтарға походтар ойоштора, әсирҙәр алып ҡайта. Заятүләк Сәмәр хандың әсир итеп алып ҡайтҡан рус ҡатынынан тыуа. Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, Заятүләкте һуҡырайтыу эпизоды тасуир ителгән. Сәмәр хан, Заятүләкте бик яратҡан булһа ла, үҙенә тоғро булыуына шикләнә һәм уның ике күҙен соҡоп алырға, ә үҙен Ҡарағас тауына илтеп ташларға әмер бирә. Хан әмерен үтәүсе Заятүләккә яҡынлай. Шул ваҡыт ғәжәп бер хәл була: Заятүләк ике күҙен йомоп, битен ҡаплауы менән уға Һыуһылыу шәүләләнеп ҡала һәм ике күҙенең дә алмалары усына тәгәрәп төшә. Быны күреп: «Минең өсөн хоҙай үҙе язаланы!» — ти Сәмәр хан.

Һуҡырайған Заятүләкте Ҡарағас тауына илтеп ташлайҙар. Һыуһылыу Заятүләктең күҙҙәрен һауыҡтыра. Әҫәрҙең тамамланышы төп варианттағыса.

7. XIX быуат урталарында П. Суходольский тарафынан яҙып алынған: «Легенда о Туляке // Вестник Русского географического общества. 1858. разд. 24. № 12. С. 65—70; Оренбургские губернские ведомости. — Уфа, 1958. № 46. С. 123—126. Әҫәрҙең кемдән, ҡасан һәм ҡайҙа яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәттәр бирелмәй, ҡульяҙманың һаҡланыуы билдәле түгел. Рус ғалимы Г. Н. Потанин үҙенең ғилми хеҙмәтендә «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың П. Суходольский яҙып алған вариантын файҙалана, уны башҡа халыҡтарҙың эпик әҫәрҙәре менән сағыштырып өйрәнә (Потанин Г. И. Дочь моря в степном эпосе // Этнографическое обозрение. 1892. № 1—4. С. 38—69).

8. «Абдрахман улы Һары Сәхип тураһында әкиәт» тигән баш аҫтында 1875 йылда күренекле тарихсы һәм музыка белгесе Руф Игнатьев тарафынан ташҡа баҫтырылған. (Записки Оренбургского отдела Императорского русского географического общества. Оренбург, 1875. Вып. 3. С. 207—211). Текст теүәл түгел. Р. Г. Игнатьев уны туранан-тура тәржемә итеп тормаған, бары эпостың бер версияһының фабулаһын һөйләп сығыу менән генә сикләнгән. Был хаҡта иҫкәрмәһе лә бар: «Беҙ (быны) Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙендә бер типтәрҙән ишеттек. Был әкиәттең күп өлөшөн ул йырлап ишеттерҙе. Әҙ генә үҙгәрештәр менән ошондай уҡ әкиәт Өфө башҡорттарында ла йәшәй. Тик унда герой Һары Мәркәс улы Түләк тип исемләнә» (211-се б.). Күрәһең, Игнатьевҡа торараҡ М. Ғафури файҙаланған ҡульяҙма китап йә баҫма мәғлүм булған.

Игнатьев һөйләп сыҡҡан версияның ҡайһы бер үҙенсәлектәре шуға ҡайтып ҡала. Әле әйтелгәндәрҙән аңлашыуынса, герой Һары Сәхип (Һары Сағип) тип исемләнә. Уның атаһы Абдрахмандың кемлеге хаҡында мәғлүмәт юҡ. Баштан уҡ геройҙың төҫкә-башҡа матур, игелекле һәм бик диндар булыуы иҫкәртелә. Һары Сәхиптең атанан яңғыҙ бала икәне лә әйтелә. Бер нисек тә нигеҙләп тормаҫтан, иптәштәренең уны яңғыҙлауы, рәнйетеүе хаҡында һөйләүҙән башлана төп сюжет. Әле һунар итә башлағандар — улар уны мыҫҡылларға тотона: йәнәһе, ул булдыҡһыҙ. Әммә егет, шоңҡар, бөркөт сөйөп ҡош аулаған иптәштәренә ҡарағанда, уҡ менән генә лә күберәк ҡош атып ала. Тегеләр, табыш уртаҡ булырға тейеш тип, уныҡын да үҙҙәренекенә ҡушып, өлөшөн сығалар. Әммә Һары Сәхипкә әҙерәк өлөш бүләләр, етмәһә, туҡмап китәләр үҙен. Илап ятһа, хызыр пәйғәмбәр илсеһе килеп, уны йыуата: уға бер доға өйрәтә. Уны уҡыған кешене ҡорал да, ут-һыу ҙа, ҡош-ҡорт та ала алмай, әҙәм балаһы ла енә алмай. Әммә уны сер итеп тоторға кәрәк, юҡһа, кем белеп ҡала, уның ҡөҙрәте шуға күсә була. Егет һүҙ бирә.

Иртәгәһенә иптәштәре йәнә килә: килешергә теләйҙәр, йәнәһе, һунарға саҡыралар: шоңҡар, яҡшы ат бирмәкселәр, йәнәһе. Әммә барһа, ат урынына ҡолоп, шоңҡар урынына шапай-ҡарға бирәләр. Ул көндө лә Һары Сәхип ҡош һунарында уңыш ҡаҙана, сөнки егет Хызыр илсеһе өйрәткән доға уҡыуы була — ҡолоно юрғаға, ҡарғаһы шоңҡарға әйләнә. Шуға тегеләре уны күрәҙә (сихырсы) тип атай. Шул төндө улар Һары Сәхиптең юрғаһының табандарына ҡаҙаҡ ҡағалар ҙа иртәгеһенә ат бәйгеһенә саҡыралар. Атының ниндәй хәлгә төшөрөлөүен күреп алғас та, Һары Сәхип әлеге доғаны уҡыуы була — ҡаҙаҡтар ҡойола ла ҡуя. Һөҙөмтәлә ул бөтә бәйгеселәрҙе лә уҙып, беренселеккә сыға. Тегеләре, йәндәре көйөүҙән, быны шул ерҙә үк үлтерергә уҡталып-уҡталып ҡуялар, яуап биреүҙән шөрләп, ҡапыла тыйылып ҡалалар. Бер уңайы сыҡҡанда, тотоп алып быны, атының һыртына һалып сырмайҙар ҙа, сыбыртҡы менән яра тартып, атты ҡыуып бәрәләр. Өс көн, өс төн бик күп тауҙар, үҙәндәр, һыуҙар үтеп, дүртенсе көндө аты бер диңгеҙ янына килеп туҡтай. Арҡандар өҙөлөп, Һары Сәхип доға ярҙамы менән, бер ниндәй яфа күрмәйенсә, атынан төшә.

Был диңгеҙҙә һыу кешеләре (суллы) йәшәгән икән. Һыуҙан Һыуһылыу сыға. Уның сәсе ап-аҡ булып, бер нисә сажинға һуҙылып, һыу өҫтөндә күпсеп ята ине, ти. Һыуһылыу күктән ыңтылып ҡына йондоҙҙар алып, шуларҙы сәстәренә ҡаҙай. Исем-аты менән өндәшеп, егеткә был тирәнән тиҙерәк ниҙлыу кәрәген аңлата: юҡһа, башына бәлә килеүе ихтимал, йәнәһе. «Мин хаҡ мосолманмын. Доғам бар. Шуға күрә бер ниндәй шайтандан да шыртламаймын»,—

ти Һары Сәхип. Ул шуныһына таң ҡала: ҡыҙ уның алдында ышыҡланмай-ҡапланмай, шәрә көйө тора.

Һыуһылыу диңгеҙ төбөнә төшөргә йыйыныуы була — Һары Сәхип уның толомдарына сат йәбешеп, уларҙы урап тота ла артынан эйәрә. Аҫҡа барып төшһә, ни күрә: ҡырҡлап тимер тирмә ултыра, аралағы ни ҙурында ҡыҙҙың атаһы, һыу аҫты батшалығының атаманы (тексҭа шулай бирелгән) Тимурзаман йәшәй ине, ти. Һыу кешеләре Һары Сәхипте күреп хайран ҡала. Тимурзаман уны саҡыртып ала. Егеттән башынан үткәндәрен һөйләтеп, хаҡ мосолман икәнен аңлағас, ҡыҙын бирергә теләге барын әйтә. «Тегендә мин фәҡир инем. Бер үс тоҙ ҙа һуған, йәнә уҡтан башҡа нәмәм бар ине? Атлы, шоңҡарлы була яҙҙым — уларынан да яҙҙым: атым туғайҙа, шоңҡарым урмандалыр инде хәҙер. Бында миңә бәхет төтөй: матур кәләшем буласаҡ. Етмәһә, уның өсөн ҡалым түләп тораһы ла түгел», — тип уйлай ҙә диңгеҙ төбөндә ҡалырға була.

Был версияла ла егеттең тыуған яғын һағыныуы хаҡында әйтелә әйтелеүсе. Әммә шайтандар, бәрейҙәр ярҙамында ул яратҡан тауҙы һыу аҫтына күсереү мотивы юҡ. Һары Сәхип дүрт йыл Һыуһылыу менән һин дә мин йәшәй. Бишенсе йыл тигәндә, илен һағынып, эсе бошa башлай. Бисәһенән быны йәшермәй. Тик ҡайныһына ғына әйтергә ҡыймай. Ә уныһы кейәүенең хәлен үҙе һиҙенә лә ҡайтырға тәҡдим итә. Хыҙыр илесе өйрәткән доға ярҙамында егет Һыуһылыу менән ярға килеп сыҡһа, аты урынында тора, шоңҡары ботаҡта ултыра. Һары Сәхип менән Һыуһылыуҙың артынан һыу айғыры, һыу үгеҙҙәре, һыу һыйырҙары, һыу кәзәләре, һыу һарыҡтары сыға. Егет кәләше, балалары (?), малдары менән иленә ҡайта. Ҡартайғансы йәшәй. Малдары һанһыҙ була. Уландары бәһлеүән булып үҫә. Үлер алдынан ғына Хыҙыр доғаһын Һары Сәхип уландарына өйрәтә. Тәүҙә бисәһе, шунан үҙе үлә. Икеһен дә йылға ярының башына ерләйҙәр.

Игнатьевтың тексы «Велик Аллах и велик пророк его!» («Лә илаһа Иллаллаһ Мөхәммәдур Рәсүлалла!») тигән һүҙҙәр менән тамамлана.

9. XIX быуат ахырында Г. И. Потанин үҙенең «Дала эпосында диңгеҙ ҡыҙы» тигән мәҡәләһендә «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың бер версияһын бүрәт, ҡаҙаҡ, төмән татарҙары һ. б. халыҡтарҙың эпостары менән сағыштыра (Потанин Г. Н. Дочь моря в степном эпосе // Этнографическое обозрение. 1892. № 1—4. С. 38—6). Фольклор ғилемендәге компаративсылар мәктәбе вәкиле булған был ғалимды башҡорт эпосы сағыштырыу предметы булараҡ ҡына ҡыҙыҡһындырған: унда көнбайыш эпосына (мәҫәлән, Аполлоний хаҡындағы), монголдың — «Гэсэр»ына, бүрәттең «Ер түгеп», төмән татарҙарының — «Жир төшлөк» (әйткәндәй, һуңғыһы башҡорттарға ла мәғлүм) исемле эпос һәм әкиәттәренә хас уртаҡ билдәләр таба. Уның «Садко» тигән урыҫ былинаһы менән яҡынлығына ла ишара яһай. Үҙе үҙ иткән компаративсыларҙың «Күсеп йөрөүсе сюжеттар тураһындағы» концепцияһына ярашлы рәүештә, Г. И. Потанин «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың милли ерлеген шик аҫтына алған.

10. XX быуат башында Солтангәрәй Солтанов тарафынан яҙып алынған, әҙәби яҡтан бер ни ҡәҙәр эшкәртелгән. Султанов С. Башкирское предание «Зоя-Тюляк и Сусулу» // Самарская газета. 1902. № 83. С. 3—4.

Текст прозанан тора. Ҡемдән, ҡасан, ҡайҙа яҙып алынғаны бирелмәгән. Төп нөсхәнең дә, тәржемәнең дә ҡульяҙмаһы һаҡланмаған.

Был вариантта Заятүләк байлығы менән дан тотҡан Һарымырҙыс улы итеп һүрәтләнә. Һарымырҙыстың ике ҡатыны булып, өлкәне Баныуҙан өс улы, йәше — Гөлзөһрәнән яңғыҙ ул Заятүләк донъяға килә. Ул әсәһенән бик

йәшләй етем ҡала. Атаһының өлкән ҡатынынан тыуған өс ул көслө һәм уңған Заятүләктән көнләшәләр, уға һәр төрлө яуызлыҡ эшләйҙәр. Шул сәбәпле Заятүләк йорттан китергә мәжбүр була. Изгелекле Хызыр өйрәткән тылсымлы доға ярҙамында Заятүләк ағалары тарафынан аҡ толпарының тояғына ҡағылған ҡаҙауҙарҙы алып ташлай; һыу аҫты илен тотоусы Жаждар ханға, ҡул-йылғаларын ҡоротоп, ҡурҡыу һала, ҡыҙы Һыуһылыуҙы кәләшлеккә ала. Заятүләктең мөхәббәт хаҡына йорт-еренән, атаһынан баш тартыуы һәм Һыуһылыу менән һыу аҫты батшалығына төшөргә теләүен һүрәтләгән эпизод М. Ғафури баҫтырған вариантҡа яҡын тора. Заятүләктең атаһы Һарымырҡыс тип аталыуы ла Ғафури вариантындағыса. Финал, башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, ошолай хәл ителә. Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа бик оҙаҡ йәшәгәндән һуң ҡартайып үләләр. Уларҙы тау түбәһенә мендереп ерләйҙәр.

11. М. Ғ. Усмановтың мәғлүмәттәре буйынса, уның һуңғы өлөшө юғалған. Яҡташыбыҙ, мәшһүр татар әҙәбиәтсеһе Нәҡи Иҫәнбәттең шәхси архивында һаҡлана.

Мәғлүм буйынса Н. Иҫәнбәт 30-сы йылдарғаса Башҡортостанда йәшәй. Башҡорт халыҡ ижады менән ихлас ҡыҙыҡһына. Күрәһең, М. Ғ. Усманов телгә алған версия ана шул дәүерҙә Башҡортостанда яҙып алынған.

Заманында Н. Иҫәнбәт «Түләк» тигән опера либереттоһы ла ижад иткән (Усманов М. Ғ. Ҡаурый каләм эзенән.— Ҡазан, 1983. 233-сө б.).

12. «Заятүләк» исеме менән 1938 йылда баҫылған // «Октябрь» ж-лы. № 6. 38—41-се б. Ҡемдең кемдән, ҡасан һәм ҡайҙа яҙып алыуы әйтелмәгән.

Вариантта ваҡиғалар Малҡантау (йәғни Балҡантау) һәм исемһеҙ бер йылға тирәһендә бара. Башта Заятүләктең етем бала булыуы һәм уның ағалы-энеле Алтынбай менән Етембайға алыҫ туған икәнлеге әйтелә. Алтынбайҙың алты улы, Етембайҙың ете улы һүрәтләнә. Уландар йыш ҡына һунарға сығып ҡош сөйәләр. Заятүләктең ағалары биргән аҡ ябалағы аҡ шоңҡар булып сығыуы, һунарҙа уңышы, ат бәйгеһендә еңеүсе булыуы, уның ата йортон ташлап ҡасыуы, һыу ҡыҙы менән икәүләп һыу аҫты донъяһына төшөү һәм һунынан тыуған иленә кире ҡайтыу күренештәре нигеҙҙә 2-се версиялағыса.

Был текста Заятүләк менән Һыуһылыуҙың осрашыуы үҙенсәлекле тасуир ителгән. Заятүләк бер йылға эргәһенә килә һәм һәм һыуҙа ылымыҡҡа оҡшаш уралып-уралып ятҡан сәсте күреп ҡала, шуны тотоп тарта башлай. Тарта торғас, һыу өҫтөнә дейеүҙәр батшаһы ҡыҙы Көнһылыу (башҡа варианттарҙа — Һыуһылыу) килеп сыға. Заятүләк уға ғашиҡ була. Көнһылыуға өйләнеү ҙә икенсе төрлө хәл ителгән. Көнһылыу Заятүләккә: «Кем дә кем мине көрәшеп еңә, шуға кейәүгә сығам!» — тип шарт ҡуя. Заятүләк Көнһылыуҙы көрәшеп еңә һәм уны кәләш итеп ала. Уларҙың улдары тыуа (исеме әйтелмәгән). Заятүләк менән Көнһылыу, һыу аҫты донъяһын ташлап, ергә сыҡҡанда, дейеүҙәр батшаһы бер ваҡытта ла ҡиммәтле әйберҙәре бөтмәҫ тылсымлы һандыҡ һәм түлле алтмыш ҡолас ала бейә биреп ебәрә.

Вариантта синфи айырымлыҡтар бик томанлы ғына төҫмөрләнә. Социаль тигеҙһеҙлек Заятүләктең етем бала сағын һүрәтләгәндә генә бер аҙ күренә. Геройҙар малсылыҡ, һунарсылыҡ менән көн итәләр. Батырҙың ярҙамсылары толпар, ыласын, эт. Хызыр образы бирелмәгән.

Алтынбай менән Етембайҙың улдары бай, хәлле итеп һүрәтләнелгән. Уларҙың бына тигән йүгерек аттары, яҡшы ыласындары, ҡарсығалары бар. Ә Заятүләктең насар ғына аты менән ябалағы була. Заятүләктең бала сағын, һунарға сығыуы, көнсөл ағаларының уға хаслыҡ ҡылыуҙарын хикәйә итеүҙә,

Асылыкүл төбөнә төшөүҙе тасуирлауҙа башҡа варианттарҙан артыҡ айырма юҡ. Вариант Заятүләк менән Һыуһылыуҙың күп мал эйәртеп, күл төбөнән сығыуы һәм Балҡантауҙа бәхетле, оҙон ғүмер итеүҙәрен хикәйәләү менән тамамлана.

13. 1960 йылда 60 йәшлек Әлфиә ҡарсыҡтан Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында күренекле фольклорсы Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина яҙып алған (информаторҙың фамилияһы күрһәтелмәгән) // FA: ф. 3, оп. 21/3. 104—107-се б. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән. Вариант һөйләүсенең тел үҙенсәлектәрен һаҡлап яҙып алынған. Йөкмәткеһе, сюжеты менән Р. Теләкәева вариантына яҡын тора.

Һунарсы егеттәрҙең аталарының исемдәре лә 2-се версиялағыса.

Һыу аҫты донъяһы — ен донъяһы батшалығы — дейеү бәрейе батшалығы тип нарыҡлана. Заятүләкте алып ҡайтҡанда, аталары ҡунаҡта булыуҙан файҙаланып, ҡыҙ уны һандыҡҡа йәшерә. Ҡайтып килеп, тегеләр экиәттәрҙәгесә: «Әҙәм еҫе килә», — тип таптыра башлағас, ҡыҙ: «Һеҙ үҙегеҙ ашап ҡайтҡанһығыҙ ҙа минән күрәһегеҙ», — ти. Аҙаҡ серҙе сисә. Теймәҫкә ант иткәстәре генә, егетте күрһәтә.

Заятүләктең Балҡантауҙы маҡтап әйткән ҡобайырында үҙенсәлекле юлдар бар:

Булә-булә йөрөгән
Бүреһе лә бар анын.
Бөркөтөнән тороп ҡасҡан
Ҡуяны ла бар анын...
Көлә-көлә йөрөгән (дә)
Төлкөһө лә бар анын...
Өлкө төбөнән тороп ҡасҡан
Төлкөһө лә бар анын...

Һыу аҫтынан сыҡҡансы, Заятүләктең аты ҡайынды кимереп йыҡҡан, ҡарсығаһы суҡып, атының арҡаһын тишеп бөткән була.

Информатор Заятүләк ҡасып килгән тауҙы Балҡантау тиһә лә, күлде Шүлгән тип атай: «Шүлгән күленән бик күп мал сыҡҡан» (107-се б.; 15-се вариантта ла шулай). Шуның артынса яҙып алыусы бындай иҫкәрмә биргән: Әбей экиәтте (?) ошонда тамамлай ҙа Заятүләктең йырын аҙаҡ иҫенә төшөрөп ҡуя. Бына ул:

Ебәкәй ҙә яулыҡ — күк ҡарсығам
Оса-ҡалҡа китте ҡаяға.
Илай ҙа ғына йырлай күп теләнем —
Теләккәйем китте заяға. (107-се б.)

14. 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылында 84 йәшлек Ғибадулла Ағишевтан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // FA: ф. 3, оп. 21/3. 108—111-се б. Текста шиғыр проза менән аралашып килгән.

Әҫәрҙә хикәйә ителгән ваҡиғалар тәүҙә «алыҫ бер илдә», шунан Асылыкүл, Балҡан тауында бара. Персонаждар — Алтынбай, Моңлобай, Етембай һәм уларҙың улдары, шулай уҡ мифик образдар: Һыуһылыу, дейеүҙәр, һыу аҫты донъяһының ханы һ. б. Заятүләк — Моңлобайҙың яңғыҙ улы. Геройҙың ярҙам-

сыһы итеп толпар менән ыласын һүрәтләнгән. Был вариант та Заятүләктең Һыуһылыу менән осрашыуы һәм уның менән һыу аҫты донъяһына төшөүен, егеттең уға өйләнеүен, шулай уҡ һыу аҫты ханының бик күп малын эйәртеп, ер өҫтөнә сығыуын, Һыуһылыу менән Балҡан тауында ғүмер итеүен һүрәтләүҙән тора.

Ҡош бүлешеү тураһында ҡобайыр былай ти:

Моңнобай ҡарттың бер улы
Заятүләк — йәш уғлан,
Етембайҙың ете улы,
Алтынбайҙың алты улы,
Алтыһы ла килде, ти,
Аҡ ябалаҡ балаһын
Аҡ шонҡар тип алдылар,
Аҡ шонҡар тип алдылар...
Моңлобай ҡарттың бер улына,
Заятүләк — йәш уғланға,
Аҡ шонҡарҙың балаһын
Аҡ ябалаҡ балаһы, тип
Уга ла уны бирҙеләр. (108-се б.)

Бында ябалаҡ шонҡарҙан бәҫлерәк ҡош итеп күрһәтелә. Киреһенсә булырға тейеш. Информатор буталған булһа кәрәк. Хәйер, бындай «буталыштар» башҡа варианттарҙа ла осраштырғылай. Бәлки, ябалаҡ изге ҡош иҫәпләнгәндер.

Һатыулашҡанда, ҡыҙ был вариант буйынса, егеткә бүләк тәҡдим итеп, шулай ти:

Ай, Түләгем, Түләгем!
Бына һиңә бүләгем:
Алтын тараҡ, алтын сәсмәү,
Уны ла һиңә бирәмен.

Һыуһылыу Ер донъяһынан ҡайтып, иренә шулай ти:

Аҡ шонҡарың асыҡҡан,
Атың ялын ашаған. (111-се б.)

15. «Түләк» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылында 73 йәшлек Орҡиә Ильясованан Н. Д. Шонҡаров яҙып алған // FA, ф. 3, оп. 21/3. 112-се б. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән.

О. Ильясова варианты ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына айырым өҙөктәрҙән тора, сюжет бөтөнлөгө юҡ. Ваҡиға бер исемһеҙ күл һәм Балҡан тауында бара. Персонаждар һаны ла бик ныҡ ҡыҫҡартылған. Заятүләктең ағалары менән асыуланышыуы, уның һыу аҫты ханлығына ҡунаҡҡа барыуы, Һыуһылыуҙы алып, өйөр-өйөр йылҡыларҙы эйәртеп, күл төбөнән тыуған иленә ҡайтыуы кеүек эпизодтар һүрәтләнгән.

Һыуһылыу — дейеү ҡыҙы тип таныштырыла. Башын тарарға ултырғанында,

бер егет «кейеҙ алып» (?) күҙәтә башлай ҙа сәсенән эләктерә. Ҡыҙ, бүләк бирен, ҡотолмаҡ була:

И Түләгем, Түләгем,
Мына һиңә бүләгем:
Алтын йөҙөк, гәүһәр ҡаш —
Мына һиңә бүләгем.

Һыу аҫтына төшкәс, атаһынан уны ашамаҫҡа һүҙен алғас ҡына, уға Түләкте күрһәтә. Һыу аҫтынан сыҡҡан мал хаҡында: «Шүлгән малы мына шунан сыҡҡан», — тиелә. (12-се вариантта ла шулай). Иң ахырҙа информатор: «Быларҙың бөтәһен дә мин бәләкәй саҡта ишеттем, оло ағайым ҡулында күтәрен йөрөткәндә һөйләй торғайны», — тип иҫкәртеп ҡуя (112-се б.).

16. «Заятүләк менән Һыуһылыу» исеме менән 1960 йылдар башында Ейәнсура районы Үргә Муйнаҡ ауылында 80 йәшлек Мөслимә Ваһаповананан аспирант Әнис Зәйнуллин яҙып алған // БӘФҠ ФФ. һаҡл. б. 77. С. 10-сы б.

Текст шиғыр аралаш килгән прозанан тора. Сюжеты күпселек варианттарҙағыса.

Һыуһылыуҙы осратҡас, Заятүләк уға:

Атыңды ла белмәйем,
Үҙеңде лә белмәйем,
Һыуҙың ҡыҙы Һыуһылыу,
Һинең менән булайым, — ти.

Финалда егет һыу аҫтынан сығып, кәләше менән ата-әсәһе янына ҡайта.

17. Балҡантау тигән баш аҫтында Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Байғужа ауылында 1960 йылда 70 йәшлек Кучаев Ғатаулла Муллайән улынан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, д. 3, оп. 21/3. 113—114-се б.

Был вариантта Балҡантау хаҡында Заятүләк әйткән ҡобайыр ғына теркәлгән:

И Балҡантау, Балҡантау,
Балҡантауым был түгел.
Майлап ҡуйған ҡамыштай,
Йыланы күп Балҡантау.
Ҡағып ҡуйған ҡаҙыҡтай,
Һыуыры * күп Балҡантау.
Мөгөҙләре йылтылдашып,
Тояҡтары ҡалҡылдашып,
И Балҡантау, Балҡантау,
Йәйеп ҡуйған бәрхәттәй,
Урманы күп Балҡантау... (113-сө б.)

18. «Заятүләк менән Һыуһылыу» исеме аҫтында 1964 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Сурай ауылында 82 йәшлек Ғәйнулла Вәлиуллиндан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // РА: ф. 3, оп. 47/1. 2—9-сы б. Текст шиғыр менән аралаш прозанан тора.

Был варианттың сюжеты тәүге текстыҡына яҡын. Айырма шунда ғына:

әҫәрҙең финалы Заятүләк менән Һыуһылыуҙың Балҡантауҙа бәхетле тормош көтөүҙәре менән тамамлана. Ҡуләм йәһәтенән үтә ҡыҫҡа. Заятүләктең социаль сығышы, башҡа һунарсылар (ағалары) менән конфликты юҡ. Ҡул буйына һунарҙа саҡта килеп юлыға. Ҡыҙ унның ҡулынан алдау юлы менән ысҡынмаҡ була: «Ана кеше килә!» — ти ҙә һыуға сума. Унның сәсенә тотонған егет тә бергә төшөп китә.

19. «Заятүләк менән Һыуһылыу» исеме менән 1964 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Мәкәш ауылында 82 йәшлек Сафа Ғилмановтан Н. Д. Шонҡаров яҙып алған // ҒА: ф. 3, оп. 17/1, 10—11-се б. Текста проза менән шиғри юлдар аралашып килгән.

Сюжет төп варианттыҡына тура килә. Айырма түбәндәге үҙенсәлектәргә ҡайтып ҡала: Ҡөньяҡ Башҡортостанды биләгән Сыңғыҙ хандың (?) ике ҡатыны булып, олоһонан ике ул, йәшенән Заятүләк исемле ул тыуа. Өс ул йыш ҡына һунарға сыға. Заятүләк ағаларынан үҙенең мәргәнлеге, оҫта һунарсы булыуы менән айырыла. Заятүләк һунарҙа йөрөгән саҡта бер төлкө осрата һәм уны ҡыуа башлай. Эҙенән килә торғас, ул Стәрле, Сәрмәсән йылғаларын, Арҡылыболаҡты, урмандарҙы үтеп, аҙашып Балҡантауға килеп сыға. Заятүләк Асылыкүл янында Һыуһылыуҙы күрә һәм уға ғашиҡ була.

Әҫәрҙең аҙағында Сафа Ғилманов Заятүләк менән Һыуһылыуҙың ҡартайып барып үлеүен хәбәр итә. Шулай уҡ ул йәш саҡта әле Балҡан тауында Заятүләк менән Һыуһылыу ҡәбере билдәле булғанлығын һәм уны үҙе күргәнлеген әйтә.

Информатор үҙе һөйләгән материалдың асылына кире мөнәсәбәт белдерә. Ошо мөнәсәбәт варианттың стиленә үҙгәлек бирә. Сафа ҡарт һүҙен шулай башлаған: «Хан» тигән һүҙ — элгәреге «батша» тигән һүҙ бит инде. Эйе бит! Батша кеүек булып, тирә-яҡты биләп торған әҙәм булған бит инде ул Сыңғыҙ хан. Атаҡлы кеше булғас, будто, гел ҡош ите генә ашап торған». «Заятүләк ҫыуға төшкән ҫыу ҡыҙы артынан», — тиләр. Алар барҫы ҙа — бүстәк. Ҫыу төбөнә лә төшмәгән, түлкә күргән ул Ҫыусылыуны» (10-сы б.).

Һыу батшаһы: «Әҙәмне тотҡанҫың икән, әҙәм белән кит!» — тип, Заятүләкне лә, ҡыҙын да ҡыуалап сығарып ебәрә. Шунан инде тегенең артынан ат сыға була... Бүстәк алар бары ҙа — экиәтләр алар... Асылы буйына аҙашып килеп сығып ҡына үлгән Заятүләк». (11-се б.).

Үҙе һөйләгәнгә үҙе ышанмауын белдерһә лә, Сафа ҡарт, башҡа информаторҙарҙан айырмалы рәүештә, Заятүләктең Асылыкүлгә килеү «маршрутын» конкретлаштырып күҙ алдына баҫтыра: «Атының аяғына ҡаҙаҡ ҡаҡҡандар (көнсөллөк белән инде!). Шунан ағаларынан тороп ҡалған. Әкрен генә ҡайтып килгәндә, төлкө осорай. Теге төлкөнө ҡыуып ала ла китә. Төлкө гел кәрәкмәгән яҡҡа ҡаса инде. Бер көнмө, ике көнмө йөрөй торғас, Аксен — Бәләбәй — Ҡотоҙонан килеп сығып, Сәрмәсән башына килә. Шунан Арҡылыболаҡҡа ҡарап торғас, мының күҙенә Балҡантау төшә. Данлыҡлы Балҡантау — бейек, бөтөн тирә-яҡта бер тау. Асылы(күл) буйына килеп төшөп йөрөй, балыҡ ашай» (10-сы б.).

Ҡилтерелгән өҙөк шуныһы менән дә иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, бынығында Заятүләк атының табанына ағалары ҡаҡҡан ҡаҙаҡтарҙы һурып тормай. Башҡа варианттарҙа яуыз ағалары (юлдаштары) эҙәрләүенән тылсым ярҙамға килә: шуның менән атын ҡаҙаҡтарҙан арындыра, Зәйнуллина Мәликә вариантында (20-се) аты телгә килеп (тылсым!): «Һин хәҙер сөйҙө һурып ал, айылды тек», — ти (25-се б.). Томға тәҡдим ителгән төп нөсхәлә лә аты аҡыл бирә: «Һин өҙәңгегә нығыраҡ баҫ, бар кө-

сөнә минең ике ҡабырғама ҡамсы менән ҡан сәсрәткәнсе уңлы-һуллы һуҡ!» — ти. Заятүләк шулай итә — «ҡаҙаҡтар шылтырап ҡойолоп төшәләр» (26-сы б.). «Татар халыҡ ижаты: Дастаннар»ға ингән вариантта, Хызыр ғалиәссәләм өйрәткәнсә, Түләк батыр «Исме ағзам» доғаһын уҡыуы була (тылсым!) — «ат аяҡларындан кадаклар төшде, аяклары уңалды, саг булды» (124-се б.).

Геройҙың ата йортонан алып (уның ҡайһы йүнәлештә барыуы төҫмөрләнһә лә, урыны билдәһеҙ ҡала) Асылыкүлгә тиклем үткән юлын конкретлаштырыу, тылсым көсө менән атының табанындағы сөйөн һурмағанға, яй ғына йөрөүе (ә былар информаторҙың фантастикаға, тылсымға скептиктарса ҡарауынан килә) әҫәрҙең реалистик башланғысын көсәйтә.

20. «Заятүләк» исеме менән 1965 йылда Башҡортостандың Стәрлебаш районы Түбәнге Шәкәр ауылында Әскәбъямал Дәүләтбаеванан (йәше күрһәтелмәгән) БДУ талибәһе Нажиә Нафиҡова яҙып алған // БӘФҠ ФФ, һаҡл. иб. 95. 56—60 б.

Текст шиғыр аралаш прозанан тора.

21. «Заятүләк менән һыуһылыу» тигән баш аҫтында 1967 йылда Н. Д. Шоңҡаров Дәүләкән районы Яңы Тормош ҡасабаһында 67 йәшлек Солтан Ҡасимовтан яҙып алған. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана. Яҙмала һөйләш үҙенсәлеге һаҡланған. Шиғыр менән аралаш прозанан тора.

Заятүләк — Төркөстан ханының (исеме әйтелмәгән) йәш ҡатынынан тыуған ул. Хандың 12 улы була. Ваҡиға Балҡан тауы Асылыкүл тирәһендә һәм Төркөстан илендә бара. Һыу аҫты донъяһын һүрәтләү — М. Ғафури версияһындағыса. Бында ла Заятүләк Хызыр пәйғәмбәр өйрәткән доғаны уҡып, ауырлыҡтарҙы еңеп сыға. Ул оҫта думбырасы, зирәк егет итеп һүрәтләнә. Үҙенең төйәге Балҡантауҙы һағынып, былай тип йырлай:

Думбырам минең уйнайҙыр,
Ҡыл ҡубыҙым сыңлайҙыр;
Тыңларға килгән ен-бәрейҙәр
Үҙен-үҙе белмәйҙер.

Әҫәрҙең аҙағында С. Ҡасимов Асылыкүл тирәләп ултырған Буранғол, Сапай, Ҡыҙрас ауылдарының ҡаратабын ырыуына ҡарағанлығы һәм уларҙың элекке Верхнеуральск өйәҙе Абзан ауылынан (хәҙерге Силәбе өлкәһе) күсеп килгәнлеге хаҡында мәғлүмәт биргән.

22. «Түләк-Сусылу дастаны» тигән баш аҫтына 1969 йылда Татарстандың Ҡама Тамағы районы Оло Ҡариле ауылында Мәғфирә Хәсәновала һаҡланған ҡулъяҙманан күренекле археограф проф. Мирҡасим Усманов күсереп алып, иҫкәрмәләр биреп, үҙенең транскрипцияһында «Ҡаурый каләм эзенән» исемле китабының (Ҡазан, 1983. 237—244-се б.) «Түләк батыр, аның олы мөхәббәте» тигән IV бүлегендә (225—300-се б.) баҫылған. «Татар халыҡ ижаты: Дастаннар» томына индерелгән (Төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм иҫкәрмәләр яҙыусы Ф. В. Әхмәтова; ғилми мөхәрр. М. Ғ. Усманов. Ҡазан: Татарстан кит. нәшр., 1984. 123—135-се б.). Башҡорт эпосының татар фольклоры йыйынтығына индерелеүен уны күсеректән күсереүсе Мирҡасим Усманов та, томды төҙөүсе Флора Әхмәтова ла ни ғилми йәһәттән, ни формаль яҡтан нигеҙләп тормаған. Дөрөҫ, М. Ғ. Усманов Түләк менән Һыуһылыу хаҡындағы дастандың «тарихи мәғлүм сәбәптәр (?) арҡаһында башҡорттарҙа киңерәк таралыуы»н, «репертуарҙа әүҙе-

мерәк йәшәүеән таный (231-се б.). Шуның менән бергә бары ике күсе-рек (икенсеһе — 28-се вар.) һәм Р. Г. Игнатьевтың эпостың «Һары Мәр-кәс улы Түләк» тураһындағы версияның Орск типтәрҙәре араһында йыр формаһында йәшәүе хаҡында әйткәненә таяныл, «Түләк исемле батыр менән батыр Һыуһылыу тигән сибәр ҡыҙ араһындағы мөнәсәбәттәргә ҡоролған эпос-тың заманында татарҙар араһында ла киң таралған, йыш башҡарылған булыуы бәхәсһеҙ» тигән һығымтаға килгән (235-се б.). Быны ерлегең, ғалим «татарҙар менән башҡорттар, боронго замандарҙан уҡ аралашып, һаман йәнәшә» йәшәүҙә күрә. Хаҡ һүҙҙәр. Әммә М. Ғ. Усманов та, Ф. В. Әхмәтова ла һүҙ барған әҫәрҙең татар халҡының йәнле репертуарында йәшәү, йәшәмәүе хаҡында бер мәғлүмәт әйтмәй.

М. Ғ. Усманов ҡулына юлыҡҡан ҡульяҙма — ҡуйын дәфтәре дәүмәлендәге генә булып, 31 һәм сирек ҡағыҙ битенән генә тора икән. Уның башы ла, ахыры ла, аралағы бик күп биттәре лә юғалған булған. Ғалимдың иҫкәртеүенсә, был ҡульяҙма — Оло Кариле ауылының Хәсән атлы бер татар шәкерте атҡарған күсерекгән ғибәрәт имеш. М. Ғ. Усманов уны «Түләк белән Сусылу» тигән лиро-эпик дастандың ғәйәт боронғо тексы тип таный.

Түбәндә эпостың М. Ғ. Усмановтың китабынан күсермәһе тулы килеш бирелә. Һәр биттең аҫҡы өлөшөндә бирелгән иҫкәрмәләр ҙә оригиналдағыса һаҡланды.

Иҫкәрмә: 1. Башҡорттоң йәнле телендә әле лә ҡулланылған, шуға күрә лә аңлатма талап итмәй торған һүҙҙәр ҡалын хәрефтәр менән бирелде. 2. Та-тарса бирелгән башҡорт һүҙҙәренең аңлатмалары асыҡлау талап иткән сурәт-тә, улары йәйдоҙсоҡтар менән билдәләнде һәм «Һүҙлек»тә яңынан аңлатылды.

## ТҮЛӘК — СУСЫЛУ ДАСТАНЫ

### Хикайәт

Бачман хан берлән Чачдар хан дигән ханлар бар ирмеш. Әүүәл заманлар Җайык сулаган[1] икән.

Бачман хан дигән бер хан угылы ирде; халкы, нигъмәте, по-лы[2] күп, йорты киң иде. Алтмыш йегет хезмәтче-нүкәре[3] бар иде — һәрберсен балатик[4] бизәп йөретер иде. Алтмыш беренчесе Миркасык би угылы Түләк атлыг[5] иде. Түләкне хан үз катына[6] алды. Түләк бер йалгыз угыл иде.

Бачман хан даимән кош чөйәр иде[7]. Һәр кайу йегетләрнен үз-үзенә кошлары бар иде. Түләкнең кошы Ак Йапалак иде (15б).

[1] **Җайык-суламак** — Җаек суы буенда тору. Суламак кебек үк «Жирләмәк»нең дә элек, хәзергечә «күмү» төшенчәсеннән тыш, бер «җирдә яшәү» ди-гән мәгънәсе булган (хәзер казакъ телендә очрый).

[2] **Пол** — акча.

[3] Нүкәр — хан-солтан, феодаль бәкләр янындагы яран, хезмәтче (дружин-ник).

[4] Балатик — баладай, бала шикелле.

[5] **Атлыг** — атлы, исемле.

[6] **Катына** — янына.

[7] **Кош чөймәк** — кош белән киек аулау.

[Йегетләр] кош атмакдин [8] хәйран һәмкяр [9] ирделәр. Ул йегетләр, кошлары һәрни алса, Бачман ханга килтерерләр ирделәр.

Көнләрдә бер көн * Бачман хан ауга чыкды. Һәрни кош очса, качса, Түләкнең Йапалагы алды. Ул йулда ханның [башка йегетләре һич ни] алмас [ирде]. Түләк алды — ханга бирде. Алтмыш йегет Түләкне гөстах күреп [10], пычакка эләккүтик [11] булдылар.

Һәрдаим Түләк Хакъ коллыгындан хали булмас иде [12], күңеле пакь иде.

Түләкнең менгән атын акбуз[чә] Йилйитмәз [13] дирләр иде. Ул кич, хас кылып [14], алтмыш йегет Түләк атының дүрт айакының йөрәк итенә үткен тимер кадак сукдылар, йөрергә дәрманы булмасын дип. Түләк бу эшне һәргиз [15] белмәде, үзе ойкыда [16] (16а) иде. Төш эчендә Хызыр галәйһиссәлам кәлде, Түләккә Исме әгъзам [17] догасын үгрәтде [18]: «Әй, угылым, алтмыш йегет сәңа дошманлык [кылы]п, атың тойакына үткен тимер кадак сукдылар. Ошбу Исме әгъзам догасын укып дәм бирәр исәң [19], кадаклары төшеп, атың айаклары саг булгай», — тиде. Йәнә: «Әй, угылым Түләк, һәркачан сәңа мөшкел эш төшсә [бу доганы] укыгыл!» — тиде.

[Түләк] иртә уйганды, Исме әгъзам догасын укып, дәм бирде исә, ат айакларындан кадаклар төшде, айаклары уңалды [20], саг булды. Һичкем ирсәгә боларны әйтмәде.

Иртә булды, атландылар. Түләк бер күлгә карарга кәтде. Алтмыш (16б) йегет таң калып: «Түләкне үлтермәзсәк, безгә нә булмагай?!» — диделәр. Анда әйтделәр: «Безләр өч йегет баралым, икемез акбузчәнең җөгәнеп алып, беремез акбузчәне камчылалым [21]. Ул сәгать акбузчә Йилйитмәз алып очкай, агачка йә ташка сугып үлтергәй — аның хурлыгындин котылгаймыз!» — тиделәр.

Өч йегет хас килеп, икесе [атның], җөгәнен суйып [22], берсе камчылады. Акбузчә йола алып качты. Алты көн туктамады, йитенче көн иртә көн чыкарда бер олуг дәрйаның йанына кәлде,

---

[8] **Кош атмак** — кош чөйү, киек өстенә кош очыру.

[9] Кулъязмада «һәмлок» кебегрәк бозылып язылган, мәгънәгә туры килми; һәмкяр — хәзерге фарсы телендә: хезмәттәш, бергә эшләүче; әмма иске телдә: көндәш, конкурент (М. А. Гафаров, Персидско-русский словарь. Т. II).

[10] **Гөстах күрү** — әрсез, әдәпсез дип уйлау; бу очракта — көнләшү.

[11] **Пычакка эләккүтик** — (көнчелектән) чәнчелеп үләрдәй.

[12] Җөмләнең мәгънәсе: һәрвакыт Түләк аллага коллык итүдән бушамас иде.

[13] **Йилйитмәз** — Җилҗитмәс (атның исеме); акбузчә — аксыл бүз (ат төсе).

[14] **Хас кылмак** — туры китерү; бу очракта дөресе: кас (касд) кылу — дошманлык итү.

[15] **Һәргиз** — һәр вакыт.

[16] **Ойкы** — йокы; нугайча — уйкы.

[17] **Исме әгъзам** — олуг исем; Алланың исемнәрен санаудан гыйбарәт булган дога (галәттә, алланың мең дә бер исеме бар дип исәпләнә).

[18] **Үгрәтмәк** — өйрәтү.

[19] **Дәм бирер исәң** — өшкергән чакта өф иттереп, тын белән өрү (дәм — сулыш).

[20] **Уналмак** — төзәлү, савыгу; Кылыч ярасы уңалыр, тел ярасы уңалмас.

[21] Баралым, камчылалым кебек форма Мөхәммәдъярда актив кулланыла.

[22] **Суймак** — салдыру, чишендерү.

туктады. Түләк һич кайа кәтмешен[23] белмәде; [анын] кандә[24] кәткәнен [йәнә] һич кеше белмәде (17а).

Ул сәгать Түләк аты туктаган йирдә бер кыз күрде: гайәт сахибе җәмалдыр[25], кем күрсә гыйшкындин җан бирердәй булыр иде. Ул су пәрисе Чачдар хан дигән падишаһның кызы иде. Түләк аты туктаган йиргә кәлеп, һәр иртә сачын тарар иде. Ул кыз сачын тарап ултырган[26] вакыт Түләк атындин инде[27], кызның йанына кәлде. Кыз тоймады. Сачының озынлыкы алтмыш карыш бар иде; сачын ике йаңакына салып, тарап ултырыр вакыты [иде]. Түләк килеп, кызга сәлам бирде. Кыз, сачын йөзендин китәреп, әйләнеп карады, Түләкне күрде, аһ кылып әйде[28]: «Әгәр аркан ултырган вакытым булмаса (17б), йөземне качан сәңа күргүзгәй идем!» — тиде. Түләкнең йөзенә карады: гайәт зифа йегет торыр. Түләккә кыз андагъ гашыйк булды, һич сүз әйтер хале һәм ул йирдән китәр дәрманы булмады. Күңелендин әйтде: «Бу йегетне бер заман алдаламасам[29], шайәт кешегә катылып киткәймән»[30] — тиде. Кызның ул сәгать барча тәне калтырады, торырга һич дәрманы калмады.

Түләк кызга кушаг[31] әйтде:

Инеп килдем атымдан
Имде күрәсең үзеңә,
Сәлам бирдем бән сәңа,
Айтик күрекле йөзеңә.
Гашыйк булдым бән сәңа —
Нәзек зифа буйыңа,
Сүзең әйтче, Сусылу!

Кыз йәнә[32] Түләккә әйтде:

Мән усалының үзенә[33] (18а)
Гашыйк булма, бай угълы;
Алтын сыргам бирәйен —
Бүләк булсын, бай угълы.
Безнең йирләр каты йир,
Түзалмассың, бай угълы;
Хәстә булып үләрсең,
Кайтып киткел, бай угълы!

---

[23] Сүз буталчыграк язылган, «кәлмешен» булуы ихтималга якын.
[24] **Кандә*** — кая.
[25] Сәхибе җәмал — матур чырай иясе, ягъни гүзәл кеше.
[26] **Ултырмак** — утыру.
[27] Иңмәк — төшү (мәсәлән, куктән иңү).
[28] Әймәк — әйтү, әйде — әйтде.
[29] Кулъязмада: алдалармасам.
[30] **Катылып китмәк** — кушылып, ияреп киту.
[31] Кушаг* — җыр, такмак.
[32] Бу «йәнә» кызның моннан элек тә егеткә берәр сүз әйтүенә ишарә ясый кебек.
[33] Кыз үзенең пәри затыннан булуына ишарә ясый кебек, усал — начар; Бу сүзне башкача укып булмый.

Андан Түләк кызга әйтде:

Сәфәр кылдык йөз кеше,
Җөгән суйды өч кеше.
Атым кәлде йарышып.
Кулың кәлде карышып;
Атың-йулың[34] белмәймән, —
Атың әйтче, Сусылу!

Андан кыз әйтде:

Атың килер йарышып,
Кулың килер карышып,
Атың-йулың белмәсәң,
Атың әйтеп бирәйем,
Атың үзең беләсән,
Әрәмзәлек кыласән:[35]
Сары Миркас угълы сән —
Түләк атлы йегет сән!
Атың-йулың белмәйче
Кайда азып йөрерсән,
Зифа Түләк, йәш угыл?!

Андан соң (18б) Түләк әйтде:

Бер дигәндә бил алган,
Билән сайын сан алган[36],
Канат какмай каз алган,
Агызы канлы бүре алган,
Айагы силбәк[37] төлке алган
Муйны озын торна алган,
Кош очырмай кош алган
Ак шоңкарымдин бизәйен[38],
Суның кызы, Сусылу,
Сәнең берлә булайын,
Атың әйтче, Сусылу!

Андан кыз әйтде:

Атым сорап нидәрсән?
Куш хәмаил, куш йөзек[39]—

---

[34] **Аты-йулы** — исеме һәм нәсел-нәсәбе.

[35] Әрәмзәлек кылу — харәмзәлек кылу, алдашу.

[36] **Бил, билән** — калкулык яки кечерәк тау; «Сан» — дәрәҗә һәм күп; сән алу — дәрәҗә алу яки күп алу. Дастандагы ике юлның мәгънәсе: бер дигәндә тау өстенә (очып) җиткән, (һәр) тау саен күп (киек) алган.

[37] Силбәк (сәлбәк) — селкенеп тора торган, ягъни җитез, хәрәкәтчән (Себердәге төрки шивәләрдә «салбак» шул ук мәгънәдә).

[33] **Шоңкарымдин бизәйен** — шоңкарымнан ваз кичим. Шоңкар — карчыга һәм лачынның югары күтәрелеп, бик тиз оча торган иң затлы төре.

[39] Юл буталып язылган; «хәмаил» урынына, бер нокта артык куелудан мәгънәсез «җәмаил» килеп чыккан. Хәмаил — хәситә.

Мона сәңа бүләгем!
Безнең йирләр катыдыр,
Торалмассың, Түләгем,
Хәстә булып үләрсең!
Мән дә сәнлек түгелмән
Кайтып киткел, Түләгем!

Андан Түләк әйтде:

Артык кошны ашырмас[40]
Шоңкарымдин бизәйен;
Айлык йирне бер баскан,
Йыллык йулны бер баскан,
Койрыгы-йалы таралган (19а),
Түрт айагын бер алган[41]
Аргамакымдан бизәйен!
Суның кызы, Сусылу,
Сәнең [берлә] булайын.

Андан кыз әйтде:

Акча йөзем күрсәткән,
Ару сачым тараткан,
Толымы буйым сылаткан[42],
Алтын тарак, ал көзге[43] —
Мона сәңа бүләгем!
Шуны ал да йулың ал,
Кайтып киткел, Түләгем;
Мән дә сәнлек түгелмән,
Ошанмагыл[44], Түләгем!

Андан Түләк әйтде:

Үн ай төгәл күтәргән,
Үнгурткадин[45] бөгелгән,
Хәлал кулы талчыккан,
Тун тезегә[46] ултырткан,

---

[40] Кулъязмада: ашырмай. Бу хата: «син» һәм «яй» хәрефләре буталудан туган; «ашырмай» җөмлә мәгънәсенә туры килми.
[41] Мәгънәсе: дүрт аягын бер юлы җирдән алган, ягъни очкан.
[42] Кулъязмада ялгыш: «хилаткан». Беренче хәрефкә нокталар куелмаган, шуңа күрә «чылаткан» дип аңларга да мөмкин. Ләкин мин беренче хәрефне каты «са» (сад) дип укыйм.
[43] «Ал» эпитетының мәгънәсе төгәл аңлашылмый («ай» дип төзәтергә нигез юк, чөнки бу сүз өч-дүрт мәртәбә шулай ачык рәвешле л белән язылган). «Ал йөзек» гыйбарәсе дәм очрый, шуңа күрә, аны «алтын» эпитетының кыскартылган поэтик варианты дип аңларга туры килә.
[44] Ошанмак — ышанмак, ышану.
[45] Уңгуртка — умыртка.
[46] Кулъязмада — төзелгән.

Төн йокысын өч булгән,
Төнләр торып имезгән,
Айакдин[47] каймак йидергән,
Айры имчәкдән сөт биргән
Анамдин һәм бизәйем!
Алтын тезегә[48] ултырган,
Айры сакал үстергән
Атамдин һәм бизәйем!
Суның кызы, Сусылу,
Сәнең берлән булайым,
Атың әйтче, Сусылу!

Андан кыз әйтде:

Күш хәмаил, күш йөзек
Алмадың сән, Түләгем,
Алтын сыргам, ал йөзек (19б) —
Йәнә бирдем — бүләгем.
Бүләк биреп алмайсән,
Нидер сәнең теләгең,
Сүзең әйтче, Түләгем?

Андан Түләк әйтде:

Хуш хәмаил, хуш йөзек —
Зифа йөзең[49] бизәгел!
Алтын тарак, ал көзгене
Мән нитәйен[50] [Сусылу?]
Йөзек-бүләк кирәкмәс, —
Зифа буйың теләгем!
Сүзем шулдыр, Сусылу!

Андан кыз әйтде:

Аптырапсың[51] бай угълы,
Типтерәпсең, бай угълы,
Әнә аргы йагыңа
Килә торыр биш кеше, —
Күрмәймусән, бай угълы?! —

тип, Түләкне каратып үзе суга чумды. Алтмыш карыш сачының алты карышы суга кермәгән иде — Түләк кызның сачындан беләгенә урап алды; [шулай] барып, кыз судан чыкканчы, беләгендин[52] [йибәрмәде] (20а).

[47] **Айак** — савыт.
[48] Тезегә — тезенә; бу сүзнең «тәхеткә» булуы да ихтимал.
[49] Кулъязмада шулай, «буйың» булуы ихтимал.
[50] **Мән нитәйен*** — мин нишләтим.
[51] Кулъязмада ялгыш: аптырапсыман.
[52] Кулъязмада «белгәйәндин» дип ялгыш язылган.

Бер заман көн, ай күренмәс йиргә чыкды. Бер булат сарай торыр. Алды-йанындин бердәй [дәрйалар] акып барыр: [йанында] балдин, йәнә алдында[53] сөт дәрйасы акып барыр. Түләк күрде. Кызның сачын йибәрмәс булды. Анда Түләккә кыз әйтде: «Имде сән бәңа[сәң], бән сәңамән[54], сачымны йибәргел, мән сарайга инәйен, түшәк салайын, андан соң сәне чыкып алайын». Анда Түләк кызга әйтде:

Алты көн дә йите төн
Атым алып килепдер;
Алдамачы, Сусылу,
Ай йөзеңдин бер үпмәй,
Һич йибәрмәм, Сусылу!

Андан кыз әйтде:

Алты көн дә йите көн
Атың алып килепдер;
Ашыкмачы, бай угълы (20б);
Урын-түшәк салайын,
Тарыкмачы, бай угълы,
Җөмлә буйым сәнеңдер,
Сабыр итче, бай угълы! —

тип кыз әйткәч, Түләк кызның сачындин йибәрде.

Кыз сарайга менде[55], ишекенә керүе [илә] сарайның ишекен беркетде[56]. Ул сәгать булат сарайның бийеклеке һавага чыкды. Кыз һәргиз[57] чыкмады. Өч көн-төн Түләк анда калды; һич дәрманы булмады. Дүртенче көн иртә намазын кылгандин соң ике рәкәгъәт намаз[58] кылды, Исме әгъзам догасын укыды, дәм килтерде, башын сәҗдәгә куйды, анда әйтде: «Илаһи, бу кызны, кауме-халкы, малы-тәуарыны[59] — [барчасыны] көн эсселеке берлә дәрмансыз кылгайсән!» — [тип] әйтде.

Ул сәгать догасы мөстәҗаб булып[60], өч көн-төн һава эсселеке кайнар булды, ул сарайның йанындин (21а) аккан бал дәрйасы, сөт дәрйасы, дүрт тарафыдан аккан су дәрйасы тәмам корыды-

---

[53] Кулъязмада: алдындин.

[54] Сүзләр беркадәре бозылып язылган, мәгънәсе: инде син — минеке, мин синекемен.

[55] **Менмәк** — менү, биредә: керү (җирдән югары күтәрелеп өйгә керү; элек «инде» булуы ихтимал).

[56] Беркетмәк — бикләү.

[57] Һәргиз — монда: һаман.

[58] Рәкәгъәт — намаз укуның композицион өлеше: үрә торган килеш догалар укый башлаудан алып, рөкугъ итү, ягъни иелеп, тезләнеп тору һәм, сәҗдә кылып, яңадан аягүрә басканга кадәр. Берәр зур теләк әйтергә җыенган чакта көн дә үтәлүе фарыз булган бишвакыт намазның берсеннән соң өстәмә рәвештә икс рәкәгать намаз укыганнар.

[59] **Мал-тәуар** — мал-туар.

[60] Мөстәҗаб булмак — кабул булу (алла тарафыннан).

лар, һичбер эчем су калмады, тәкатьсез булдылар — барчасы йанып үлгүтик[61] булдылар.

Ул кызның сарайы тигрәсендә ултурган кырык ивле[62] хезмәтче-нүкәре бар иде, барчасы зифа йөзлек пәриләр иде; барчасы [йо]йолыша[63] кыз сарайына килделәр, чарлашдылар[64]. Кыз һәргиз ишекен, тәрәзәсен ачмады һәм аваз бирмәде. Бу халайыклар анда Түләкне күрделәр, гайәт сахибе җәмал йегет торыр. Вә: «Кыз бу йегетдин качып бикләнмеш, бу эш бу йегетдин торыр! — тиделәр. — Имде нә кылмак кирәк, тиз иттифак кылып, йойыла[65] килең, бу кызның атасы Чачдар ханга (21б) барып әйтмәк кәрәк!»

Андин Чачдар ханга барып әйтделәр. Чачдар хан падишаһ катыг ачу [берлә] берәгүне[66] йибәрде, әйтде: «Нә өчен андаг кылып халкын[67] һәлак кыла торыр? Әүүәлендә ул йегетне үзе кабул кылмаса ирде, адәмнең бу йиргә килергә нә хале бар? — тиде. — Үзе алып килеп торыр, имде нә өчен халкыны һәлак кыла торыр? Әлбәт[68], ул адәмнең догасы мөстәҗаб охшайдыр. Барып кызыма әйтеңез: сарайның ишек-тәрәзәсен ачсын, ул йегетне үз катыйга[69] алсын, гозерләр теләсен[70], дога үтенсен!» — тип, бер кемсәне иза[71] йибәрде.

Ул кем ирсә атасының сүзен әйткәч, кыз сарайның ишекен, тәрәзәсен ачды. Ул заман кызның (22а) тәнегә көн төшде[72], күкрәгендин кереп, аркасындин чыкды — кыз йанып үлгүтик булды. Булат сарай ут кебек булды. Шул заман Түләк сарайга керде, кызны күрде, сачындин урап алды, булат сарайның ишекенә сукды — кызның гакылы кәтде. Бер замандин соң кыз исен җыйды, күзен ачып карады, Түләкне күрде, әйтде: «Әй, йегет, мән сәне сәүмәзлекемдин мондаг эш кылган дәгелмән. Мән йир асты падишаһының кызымән. Ошбу эшем атамга фаш булсын дип, мондаг эш кылганмән», — дип йегетнең күңелен бу сүз илә алды. Йәнә әйде: «Әй, йегет, мончага тигрү[73] эшемез хәтәр ирде, имде Хакъ тәгаләгә шөкер, эшемез куни[74] булды! — тип, гаҗәп мөхәббәт илә Түләкнең муйныга (22б) кыз кулын салды. — Атамдин дәстүр[75] булды, хәбәр кәлде: сәне җәфетлеккә алмага!» — тиде.

Түләк кызның бу сүзен ишетеп, кызның гыйшкына йәш җа-

---

[61] Үлгүтик — үләрдәй.
[62] Ив — өй.
[63] Йойолыша (йыйылыша) — җыелыша, җыелышып, җыйнаулашып; сүзнең истәлектәге әйтелеше нугай телендәге формага якын: йыйылу.
[64] **Чарлашмак** — шаулашу, кычкырышу (ризасызлык белән).
[65] Катыйла-йойыла — кушылып, җыелып.
[66] Берәгү — берәү.
[67] Кулъязмада ялгыш: халкын.
[68] Әлбәт — әлбәттә.
[69] Үз катыйга — үз янына (№ 6 искәрмәне карагыз).
[70] Гозер теләү — үтенеч әйтү; биредә ялварып гафу теләү.
[71] Измак — юнәлтү, иза йибәрде — юнәлтеп җибәрде.
[72] **Көн төшмәк** — кояш яктысы төшү.
[73] **Мончага тигрү** — моңа тикле, моңа чаклы.
[74] Куни — дөрес, яхшы; изге.
[75] Дәстүр — рөхсәт, күрсәтмә.

нын[76] корбан кылур тик андаг бөйек мәхәббәт илә кыз муйныга кул салды, мәгәр[77] дигәйсән: күктән ай-көн инеп бер-беригә кушылган тип! Андаг мәхәббәтләре йакын булды, алладин гайре кемсәнә белмәс.

Андин кыз Түләккә әйтде: «Имде минем гайебемне кичергел!»[78] — тип гозерләр теләде. Әйде: «Әй, йегет, ошбу эсселекдән халемез мөшкел булды, имде Хакъ тәгаләдин үтүнеп, сез дога кылсаңыз, амин дисәк, Хакъ тәгалә шайәт гафу кылып, бу михнәтле китәргәй! — тип, кыз Түләкнең айагына төшде, үтенде (23а). Түләк анда кызга әйтде: «Әй, җаным мәхәббәте, бер сәгать сән сабыр кылып ултыргыл, мән хәлвәт йиргә[79] барып, Хакъ тәгаләдин хаҗәт теләйеп[80], сән һәм теләкдә булгайсән», — тиде.

Сарайдан чыкып, бер хәлвәт йиргә барды, тәйәммем кәлды[81], ике рәкәгъәт хаҗәт намазы кылды, Исме әгъзам догасына мәхкәм килтердс[82], башыны сәҗдәгә куйды, әйде: «Илаһи, барча мөшкел эшем сәңа асан[83] торыр, — тип, Хакъ тәгаләгә мөнаҗәт кылып әйде. — Бу кауемдин, [рәхмәт] кылып, көн эсселекене китәреп, сихәт бирмәк сәңа асан торыр!» — тип йалбарды исә, шул ук заман куңгыр салкын[84] йил исеп, бал дәрйасы, сөт дәрйасы, су дәрйалары ака башлады. Тәмам халкы иссез булып (23б), өч көндез-кичә йокладылар. Өч көндән соң тордылар, мал-тәуарларын карадылар: өч өлеше һәлак булган көн эсселекендин.

Андин соң Түләк берлә [кызның] көндин-көн мәхәббәтләре артыграк булды. Кыз Түләккә әйтде: «Әй, йегет, сән миңа дәстүр бирсәң[85], һәр иртә чыкып, сачым тарап[86], йөзем бизәп килер идем», — тиде. Түләк кызга дәстүр бирде. Һәр иртә хәлвәт чыкып, сачын тарап, йөзен бизәп килер иде. Бер көн Түләк кызга әйтде: «Нә йиргә чыкып сачың тарарсән?» — тиде. Кыз Түләккә әйтде: «Нә йирдә сән сачымдин тотдың, шул йирдә тарармән», — тиде. Анда Түләк әйтде: «Әй җан мәхәббәте, андаг (24а) ирсә, бәнем атым берлә кошымны күрмәзмүсән?» Кыз Түләккә әйтде: «Миңа гашыйк булмадын[мы], әйтмәдең[ме] — атымдин һәм кошымдин бизәйсн димәдеңме?!» Анда Түләк кызга: «Ул көп аның кебек иде, бу көн йәнә үзгә булды, күрсәң булса, айгыл!»[87] — тиде.

Кыз Түләккә әйтде:

> Атың аты йилмайа,
> Аңа китәр йул кайа?

---

[76] Вариант: башын-жанын.

[77] Мәгәр — бу очракта: ихтимал (кара: М. А. Гафаров. Күрсәтелгән сүзлек).

[78] Кулъязмада буталган: кичрунрга...

[79] **Хәлвәд йир** — аулак җир.

[80] **Хаҗәт теләмәк** — ихтыяҗны теләү.

[81] Тәйәммем — су юк җирдә тузан ярдәмендә «тәһарәт алу», ягъни «пакьләнү».

[82] Мәхкәм килтермәк — нык ышану; мәхкәм (мөхкәм) — нык, таза.

[83] Асан — асат, ансат, җиңел.

[84] Куңгыр салкын — ягымлы салкын.

[85] Дәстүр бирү — рөхсәт бирү.

[86] Кулъязмада ялгыш: таран.

[87] Айгыл — әйт.

Атың торыр йабыгып,
Қошың торыр бойыгып,
Үзең салып киткән [88] соң
Тәкый нәгә сорарсән?

Анда Түләк кызга әйтде:

Атым торыр ул йанда [89]
Бәнем өчен зарыгып,
Айлык йиргә бер баскан,
Дүрт айагы талыгып,
Йыллык йирне караган,
Ике * күзе калыгып;
Атым алып [90] килмәгә
Дәрман әйтче, Сусылу,
Халең йитсә [91], атымны
Алып киләче, Сусылу!

Андан Түләккә кыз әйтде [92]:

Атың кошың бу йиргә
Кәлеп йитмәс, бай угълы,
Бу хезмәтне итмәгә
Халем йитмәс, бай угълы.
Теләче Хакъдин [теләгең] (24б).
Ашыкмачы, бай угълы,
Ул теләкне Хакъ бирер,
Кайгырмачы, бай угълы! —

тип, кыз әйтде. Түләк торды, йәсигъ намазын [93] кылды, мәхкәм [94] килтерде, башын сәждәгә куйды, әйде: «Илаһи, барча агырлар сәңа асан торыр: атымны, кошымны ошбу йиргә килтәрсәң, кодрәтең бар! Мән бичарәнең хален кем белгәй, — тиде. — Рахманым сәндин йардәм!» [95] — тип, ул кичә кыз берлә йатдылар. Иртән таң намазы булды ирде. Намазга тордыгы вакытда Йилйитмәз кешнәп ирде, кошы шоңылдап [96] аваз кылды. Ул сәгать Түләк сарайның тәрәзәсендин карады: акбүзчә кәлеп торыр, алтын ийәре өстендә, Йабалак ийәр кашында [97] күренде. Ул (25а) сәгать Хакъ

[88] Салмак — ташлау.
[89] **Йан** — тараф, як (ул ян, бу ян — ул як, бу як).
[90] Кулъязмада ялгыш: калып.
[91] Кулъязмада: килеп.
[92] Кулъязмада: Андан Түләк кызга әйтде.
[93] Йәсигъ намазы — ясту намазы.
[94] Кулъязмада: мөһим (№ 82 искәрмәгә кара).
[95] Кулъязмада бозылган: сән йин... йа р...б...; Рахман — рәхимле (алланың эпитеты).
[96] **Шоңылдамак** (шонкылдамак) — чыңгылдау.
[97] **Ийәр кашы** — ияр башы, ияр очы.

тәгаләгә шөкерләр кылып, башын сәждәгә куйып әйде: «Бу мөлкәт, бу гыйнайәт[98] сәндин торыр!»

Атының кашына[99] барды. Аты, кошы Түләкне күрделәр ирсә, аты селкенде, кошы кагынды — борынгы тик булдылар. Ул сәгать Хакъ тәгалә ул булат сарайның кашына ут-үлән[100] йаратты — [ат] һәркичә тан[га] тик йийәр[101] иде.

Йәнә Түләк кыз мәхәббәте берлә хәстә булды, сап-сарыг булды — йөзенә чыкды. Үзе белмәз иде. Кыз иртә сачын тарап бизәнмәгә чыкса, ал көзгесен түшәк өстенә куйып чыкар иде, бу йегет үзен үзе күрсен, нитәк[102] булмыш — белсен дип. Кыз сачын (25б) тарамага чыкып китде. Анда Түләк кызның ал көзгесен түшәк өстендә күреп ачып карады, үзенең йөзен күрде: сап-сарыг булмыш, [нуры] койылмыш, гайәт усал[103] булмыш. «Аһ, дәрига[104], хәстә булды, үлем халегә килепмән!» — тиде.

Торды, бер Гөлестан[105] дигән уйын йасады, бер думбыра, йәнә кыл кубызы[106], йәнә үртәгә[107] йасады. Ул үртәкәнең мөйезен[108] алтындин, айакларын көмешдин, ике күзен данәдин[109] төзеде. Ул үртәкәне бу җиһан бизәге берлән бизәде.

Торып тәһарәт төзеде[110], ике рәкәгъәт хаҗәт намазын укыды. Исме әгъзам догасын укып, мәхкәм килтерде, башын сәждәгә куйды: «Илаһи, хаҗәтемне сән рәва кылгыл[111], ошбу төн маңа уйын сәнгатене (26а) сона биргел![112] Йәнә ошбу үртәкәгә җан биргел! Әй, бер ходая, ошбу йиргә сәнең хөкемең берлә грифтар булдым[113], шайәт ки, уйын кылсам, күңелем мәлүл булмагай», — тип, Хакъ тәгаләгә йалварды. Шул сәгать хаҗәтен кабул кылды. [йегеткә] уйын сәнгатене биреп, үртәкәгә җан бирде. Хакъ тәгаләгә шөкер кылып, уйын уйнарга кул биреп, Гөлестанын, думбырасын,

---

98 Гыйнайәт — ярдәм, булышлык.

99 Кашы — яны (ияр кашы түгел!).

100 Ут-үлән, чирәм (№ 131 искәрмәгә кара).

101 Йимәк — ашау, йийәр — ашар.

102 Нитәк — ничек.

103 Усал — бу очракта: көчсез, хәлсез, зәгыйфь.

104 Дәригъ — үкенеч, аяныч; дәрига — ни аяныч! (пошыну ымлыгы).

105 Бер Гөлестан — формаль палеографик күзлектән караганда, «йир Гөлестан» яки «йыр Гөлестан» дип укырга да мөмкин: «р» хәрефе алдында «б» йайга охшаган. Ләкин, алга таба текстан күренгәнчә, «гөлестан» махсус бер уен коралына бирелгән поэтик исем, һәм бу җөмләдә дә ул тиндәш кисәк.

106 Кыл кубыз — кыллы кубыз; скрипка кебек смычок белән ышкып уйный торган кыллы инструмент.

107 Үртәкә — үр һәм тәкә сүзләреннән. Әгәр «үр» сүзе «тау» мәгънәсендә кулланылган булса, тау тәкәсе дип аңларга мөмкин.

108 Мөйез — мөгез.

109 Данә — энҗе.

110 Таһәрәт төзмәк — тәһарәт төзәтү ягъни яңарту.

111 Рәва кылмак — бу очракта: яраклы, кабул ителерлек дип тану.

112 Сона бирмәк — бу очракта индереп (күктән төшереп, бүләк итеп) бирү.

113 Грифтар булмак — дучар булу.

кыл кубызын, кондакыны [114] бер кылып өчесен бергә уйнар ирде. Үрәкәсенә бойырды, [бийемәгә] [115] әйде.

Барча [пәри] халкы җыйылды, сарай эченә сыймаз булдылар. Һәр кем [116] кичә-көндез Түләк катындан китмәс булдылар. Сарайның эчендә торыр йир булмады, тышкары (26б) чыгып, мәҗлес кырда булды [117]. Түләкнең уйыныга гашыйк булып, ашамакдин, эчмәкдин бизделәр. Иртә торсалар, кичә булганын белмәс кеби булдылар. Түләкнең уйыныга гашыйк булды һавадагы кошлар, йапандагы кийекләр — барчасы җыелып, кичә-көндез китмәз булдылар. Боланлар, коланлар, куп нәүгъ хайванлар, хәшарәтләр — барчасы Түләкнең уйыныга гашикъ булып, йимәк-эчмәкдин калдылар [118].

Көнләрдә бер көн Түләк күңелендин зарилык кылды: «Әй, кәриме рәхим [119], монча пәриләр, кошлар, кийекләр, хәйван-хәшарәтләр берлән шад булып тора торсам йил кузса [120], аның тузаны басып, сурәтем азып [121], җенләр, пәриләр сурәтенә әүерелер ирмешмен!» — тип зар-зар йыглады.

Ул кичә кыз катына йатды, тәкый кызга әйде: «Аһ дәрига! Сәнең (27а) зифа сурәтеңә алданып, адәмләрдин айырылып нәсәбсез булдым, үләр булдым. Атам-анам кайда? Ыругым бәнем — адәм!» — тиде. Кыз әйде: «Әй, йегет, гакылың китдеме? Бу гыйнайәт [122], бу дәүләт нәдин торыр, белмәймусән? Бу дәүләтне тигергән падишаһлар падишаһы тәңре тәгаләне онытдыңмы? — тиде. — Айырылганларны кушмак аңа асан торыр».

Бу сүз берлә йегетнең күңелен ауытды [123]. Йатдылар. Иртә намазга тордылар ирсә, күрделәр: алтын тәхет сарайның алдында корылмыш, сәкез кырыны, дүрт тарафыны тимер берлә коршаган [бер таг] тәхетдин йукары калкып сайә [124] кылып торыр. Ул тагны алтын берлә коршаган, башыны ак мәрвәр [125] берлә йапкан (27б). Түрт йаны агач үскән һәм чыбыклык урман булган. Барча боланлар, коланлар, айулар, төлкеләр, кош-кортлар, бүреләр анда урнашмышлар. Бу эшләрне күреп, кыз берлә Түләк Хакъ тәгаләгә

---

[114] Кондак — асылда: мылтык түтәсе; бу очракта сүз, ихтимал, өч коралның да төпләрен бер итеп, ягъни бер җиргә куеп уйнау хакында барадыр. Алга таба күренгәнчә, Түләк өч коралда да берьюлы уйный.

[115] Истәлектә «магә-мәгә» фигыль формасының активлыгына (бизәнмәгә, таранмага, бармага һ. б.) таянып өстибез.

[116] «Һәр кеше» дип түгел, бәлки «һәр ки» мәгънәсендә булырга охшый.

[117] Кулъязмада: булдылар.

[118] Җөмлә Мөхәммәтгәрәй күчермәсеннән.

[119] Кәриме рәхим — олуг рәхим (иясе).

[120] Өч сүзнең укылышы шөбһәле (йил кузу — җил кубу).

[121] Сурәт азу — кыяфәт бозылу, начар якка үзгәрү.

[122] Гыйнайәт — кайгыртучанлык, ярдәм; бу очракта: яхшы тормыш.

[123] Ауытмак — йуату.

[124] Сайә — күләгә, ышык.

[125] Мәрвар (мәрварид) — энҗе.

шөкерләр кылып, Түләк килеп, ул тәхет үзә[126] менеп ултырды. Уйынларыны кулына алып, бизнәп-сарнап[127] уйнай башлады:

Гөлестаным көйләсен,
Думбырам бәнем сөйләсен,
Кыл кубызым сарнасын,
Үртәкә хуш уйнасын,
Күрмәгә килгән халайык
Үзен үзе белмәсен!
Уйнау биргел, үртәкәм,
Бийи биргел, үртәкәм!
Алтын тәхет урнаткан,
Көмешдин айак йараткан,
Тәхет-бәхет түрәткән[128]
Хакъ тәгалә кодрәте, —
Шөкер кирәк, Сусылу!

Андин (28а) жыйылган халайыклар әйделәр: «Бу кем тауы[129] торыр? Бу ни тау торыр?» — диделәр. Түләк әйде:

Бәнем тауым Балкантау,
Башы һауага чыкган тау! —
Тимер берлә тайаган[130],
Алтын берлә коршаган,
Ак мәрмәрдән йапкан тау, —

тип кубсаган ауазын ишетеп, кийек кош, жылан-хәшарәтләр йыйылып килеп, башларын түбән салып тыңлар ирделәр. Түләк анларны күреп дыбсап әйтде[131]:

Утлар уты май татыр[132], —
Болан сәүгән Балкан тау;
Эчәр суы бал татыр, —
Колан сәүгән Балкан тау!
Йатыр йире йакма алтын[133]
Йылан сәүгән Балкан тау,
Кырлары күп, йире киң —
Төлке сәүгән Балкан тау;

---

[126] Тәхет үзә — тәхеткә, тәхет өстенә.

[127] Бизнәп-сарнап — төрләндереп, сарын белән (сарын — жыр юлларын тулгау, ягъни бер-бер артлы тезеп, күтәренке тавыш белән һәм кызу темп белән әйтү).

[128] Түрәйтмәк — ярату, барлыкка китерү. Икенче күчермәдә: төзәткән.

[129] Кулъязмада: табы (бер генә очрак).

[130] Тайаган — терәп куйган.

[131] Дыбсап әйтмәк — гадәттә: әкрен тавыш белән әйтү; бу очракта: тавышланып әйтү.

[132] Юлның мәгънәсе: утлый (ашый) торган уты (үләне)ннән май тәме килер (май ике мәртәбә язылган).

[133] Йакма — ?

Йийәр йимеше төгәнмәс [134], —
Айу сәүгән Балкан тау!
Кайалары кайырчак * [135] —
Карсак сәүгән Балкан тау;
Күл-кыйусы [136] камышлык, —
Кабан сәүгән Балкан тау! (28б)
Йире салкын, йимеше күп —
Кошлар сәүгән Балкан тау!
Су-дәрйасы суалмас [137] —
Суыр [138] сәүгән Балкан тау;
Башымызның өстендә
Сайә булган [139] Балкан тау! —

тип әйтеп уйнар ирде.

Ул хәбәрләр, ул эшләр кыз атасы Чачдар ханга ишетелде. Чачдар хан падишаһ кызындин йыраклыкы йиде көн-төнлек йулда иде. Түләкне һәм уйынларыны күрмәгә андаг гашыйк булды: йимәкдин, эчмәкдин бизде [140] — дийүләрене, пәриләрене алмага йибәрде. Түләкне пәриләр алып [141] китәр булдылар. Кыз Түләккә айды: «Әй, йегет (29а), ошбу үртәкәнне алып бармагыл, ошбу газиз сүрәтне Хакъ тәгалә җанлыг [142] кылып, сәңа бирен торыр, нәгяһ [143] атам алып калмасын. Мондаг нәрсә падишаһга тансык торыр, ул йиргә [144] бер үртәкә сурәтен алып баргыл», — тиде. Түләк аның сүзен хуш күрде, үртәкә сурәтене йасады, ул җанлыг үртәкәсен кыз йанына куйып китде.

Чачдар хан падишаһга йакын йитә [Түләк] дыбсап [145] уйнай башлады. [Хан] Түләк уйнаган авазын ишетен гашыйк булды. Шәһәр халкы барчасы каршы чыкдылар. Чачдар хан үзе уйынга гашыйк булып, сабыр итә алмады: бер таз колы бар иде, аны (29б) үз урнына тәхеткә утлыртып, үзе каршы килеп тыңлар иде. Кыз атасының сыйфатын тәгайен Түләккә әйткән иде, Түләк анда, Чачдар ханны таныл, уйнай башлады:

Гөлестаным көйләйдер,
Думбырам бәнем сөйләйдер [146],

---

[134] **Йийәр йимеше төгәнмәс** — ашар җимеше бетмәс (№ 101 искәрмәгә кара).
[135] **Кайалар** — кыялар; кыйырчак — вак таш.
[136] **Күл-кыйу** — күл-кое.
[137] **Суалмак** — кибү, кору, бету (сыеклыкка карата).
[138] **Суыр** — сөркә; байбак (җәнлек).
[139] **Сайә булмак** — күләгә, ышык була.
[140] Кулъязмада: бизделәр.
[141] Кулъязмада: алуг.
[142] Кулъязмада ялгыш: халлыг (тексттагы шушы абзацның ахырына карагыз).
[143] **Нәгяһ** — көтмәгәндә, кинәт.
[144] Кулъязмада ялгыш: уйигә.
[145] **Дыбсап** — тавышлап.
[146] Икенче нөсхәдә: сарнайдыр.

Кыл кубызым сайрайдыр,
Уртәкә хуш уйнайдыр!
Тәхетендә ултырып,
Тәхетдин төшеп килгәйдер [148];
Ишекдәге таз чура [148]
Тәхетдә ултырып тыңлайдыр!

Андин соң Чачдар хан әйде: «Валлаһ, бу Түләк бер дәррәк [149] кеше булмага кәрәк, мәне мондаг белде!» — тиде, тәхетенә кайтып ултырды. Түләк килеп йитде падишаһ сарайына. Кырык көнтөн йимәк-эчмәкдин тәмамы [150] берлә калдылар.

Андин (30а) соң Түләк кызны, Балкан тауны, урынын, йирене гайәт сагынды. Чачдар ханга күпсап [151] әйде:

Балкан тауым монда йук,
Ак кийекем монда йук,
Ултырып уйын уйнарга
Алтын тәхетем монда йук!
Җөмлә буйы җофарлы [152]
Зифа йарым монда йук, —

тип, Түләк Балкан тауны әйтде ирсә, Чачдар хан падишаһ дийүләргә, пәриләргә бойорды: «Барынлар, Түләкнең тауыны килтеренләр!» — тиде.

Дийүләр, пәриләр бардылар. Хакъ тәгалә Балкан тауны аңларга күргәзмәйен, йир (берлә) бәрабәр кылды. Дийүләр, пәриләр ул пулат сарай катында андаг тау тапмадылар. [Хакъ тәгалә] ул сарай йанындагы тауларны йир берлә бәрабәр кылды. Олуг тауларның (36б) [берсен] бер пәри өстенә куйдылар, тимер берлә коршатдылар, күтәреп килтерделәр. Анда Түләк, пәриләрнең алып килгәнен күреп, дыбсап әйде:

Бәнем тауым ул түгел,
Алтын тәхетем ул түгел!
Тауны тауга охшатып,
Тимер белән коршатып,
Алып килә торырлар! —

тип, Түләк әйде исә анда Чачдар хан дыбсап әйде:

Тауны тауга охшатып,
Тимер берлә коршатып,

[147] Икенче нөсхәдә: тыңлайдыр.
[148] Чура — хезмәткәр (вассал).
[149] Дәррәк (дөресе: дәррак ь) — сизгер, аңлы, күрәзә.
[150] Кулъязмада традицион (тәммәт тәмам» дигән гыйбарәнең фигыль өлеш ялгыз (тәммат) бирелгән.
[151] Күпсамак — жырлау; күпсап әйтү — җыр белән әйтү.
[152] Кулъязмада: булум чфары.

Торыр монда Туләгәм,
Балкан тауга охшатып.

Чачдар ханга каршы Түләк әйде:

Бары, бары бийек тау,
Барындин бийек Балкан тау;
Сублап [153] каккан казыкдай
Суыры [154] күп Балкан тау;
Майлап (31а) [155] салган кайышдай
Йыланы күп Балкан тау;
Айыры тойак, шеш мөйез [156]
Боланы күп Балкан тау;
Алпан-талпан йөрегән
Айуы күп Балкан тау;
Йилкә йоны санчелгән,
Башы түбән ийелгән,
Кабаны күп Балкан тау
Кыз угъландай сөзелгән [157],
Төлкесе күп Балкан тау;
Күп йәшәгән кари тик [158]
Карсагы күп Балкан тау;
У йан — бу йан [159] йыры хуш
Кошлары күп Балкан тау;
Йомры тойак кыл койрык
Коланы күп Балкан тау, —
Дәстүр [160] бирсә Чачдар хан
Күргем микән [161] Балкан, тау! —

тип, Түләк әйде ирсә, Чачдар хан падишаһ әйде:

Китәм дигән Түләкне
Ничәгә тикле тотармын?! —

тиде. Пәриләргә әмер кылды: «Барыңыз...» (31б) [162].

. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

---

[153] **Сублап** — сулап; кулъязмадагы язылыш бик борынгы архаик үзәнчәлек булырга да мөмкин.
[154] № 138 искәрмәгә кара. Образ исә җәнлекнең өн янында хәрәкәтсез озак үрә торуына ишарә итә.
[155] «Сайла» дигән артык иҗекләр бар.
[156] **Мөйез** — мөгез (кара: № 108 искәрмә).
[157] Сөзелгән — «сызылып тора торган», ягъни нәфис хәрәкәтле.
[158] Кари тик — карт (кеше) шикелле.
[159] **Уйан — бу йан** — ул як, бу як.
[160] Дәстүр — рөхсәт.
[161] Күргем микән — күрерменме икән.
[162] Кулъязманың бөтен битләре шушында бетә. 32-нче кәгазьнең түбән яктан якынча яртысы гына сакланган. Андагы фрагментлар юлга-юл күчерелде (юл тәртибен җәяләр эчендәге рим цифрлары күрсәтә); шигъри өлешләрдә, строфа төзелеше сакланды.

. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

(I) ... үз туган йире...
(II) ... газиз торыр. Атасы йор[тын]
(III [Сагын]маган ирне ир тип әйтеп булыр —
(IV) [мы тип], дәстүр бирде. Йәнә анда әйде: «Йортыңыз,
(V) [малы]ңызны, сарайыңызны, ҡалкыңызны
(VI) [имд]е нәтәк кылырсыз?» Анда Түләк әйде: «Падишаһ»
(VII) [Әгъза]м барчамызның теләген биргүче торыр», —
(VIII) — тиде Чачдар хан падишаһ: «Аллаһе тәгаләгә
(IX) тапшырдым», — тип, пәриләр берлә йибәрде (32а)...

. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .

(I) ... думбырасын...
(II) ... сарнап, үртәкәсен уйынла[рын уйнай]
(III) башла[д]ы ирсә, кузгалып кәтдекенд[ә]...
(IV) үртәкәсе бийегәндә әйтер иде:

Әй үртәкә[м], (V) [үртәкә]м,
Мөйезләрең хуш тәкәм,
Буйы[н].. (VI) ...ш тәкәм,
Уйна, күңелең ачылсын,
Тәкый... (VII) сачылсын!
Уйнай биргел, үртәкә[м],
Бийи биргел, [үр] (VIII) тәкәм, —

тип, төрле уйынлар кылып, халайыкның [күң] —

(IX) лен ачып, вә йәнә кийек-кошларның күң (IX) лен ачып, шад[д] ил [163] [кылды] (32б)...

23. «Алтынбай менән Көмөшбай» исеме аҫтында 1971 йылда Бөрйән районы Ағиҙел ҡасабаһында Зәйнуллина Мәликә Билал ҡыҙынан (1910 йылда тыуған) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 65/7. 25—28-се б.

*Бында герой Көмөшбай улы тип кенә исемләнә. Вариант шулай башлана:* «Борон-борон заманда ике бай йәшәгәндәр, ти. Берсеһе алты уллы Алтынбай, икенсеһе бер уллы Көмөшбай. Алар бөтөнөһө лә охотник булған». Алтынбайҙың улдары бер ни ҙә ала алмай, Көмөшбайҙыҡы голпары, аҡ шоңҡары ярҙамында уңышлы һунар итә. Алты егет яңғыҙаҡты эсерен үлтермәк була. Тегеһе һиҙеп ҡалып, «үнәсенә бер нейәҫтә тағып ала» ла, эскән булып, балды шунда ҡойоп ултыра. Аты айылы ҡырҡылыуын табанына сөй ҡатыуҙарын әйтеп, тегеләрҙең айылдарын ҡырҡырға кәңәш итә.

Егет ҡасып Алҡантауға килеп, шунда һунар итә.

Ҡыҙҙы осратыуы ҡәҙимге реаль тормоштағыса һүрәтләнә. Һыу сигендә күреп ҡалғас, «тауҙан ырғый, теге ҡыҙҙың алдына ҡолай-ҡолай барып төшә.

— Эй егет, нигә һин минә бәйләнәһең? Мин бит һеҙҙең ҡыҙығыҙ түгел, — ти ҡыҙ.

— Может булыр, — ти теге.

— Мин бит — һыу ҡыҙы.

[163] Шад дил — шат күңел.

— Булһын, мин дә һыу егете.
Был кыҙ былай ти:

Һыуҙың кыҙы һылыу тип,
Һыуға китеп үлмә һин.
Алтын тарак, ай көҙгө —
Мына һиңә бүләгем.

Егет:

Һыуҙың кыҙы һылыу тип,
Һыуға китеп үләрем.
Алтын тарак, ай көҙгө —
Кәрәкмәй ҙә бүләгең» (25—26-сы б.)

Шулай ҙа бүләкте ала.

Өс көндән килергә вәғәҙә иткән һыу кыҙы һүҙендә тормағас, дүрт көн көтә лә егет: «Һыуҙары туктаһын, кош-корттары телдән калһын!» — тип доға кыла.

Атаһы (һыу батшаһы) һыу короуы кыҙының Ер егете менән танышыуы аркаһында икәнде белгәс, уны үҙе килеп алып китә.

Алкантауын һағынғас, батша ете һалдатын, улдарын бирә. Егет тауын эҙләй, тапмай.

Алкан тауым был түгел,
Алкан — тауҙың бейеге,
Йүгереп йөрөй кейеге,
Йүгереп йөрөй кейеге.
Минең атым — ак толпар,
Кошом минең — ак шоңкар,
Минең тауым был түгел,
Минең тауым был түгел... (27-се б.)

Кайныһынан 22 һалдат алып, яңынан тауын эҙләргә китә. Шул һалдаттарҙан алтауһы ғына кала. Таба тауын, «Бик матур тау инде! Осо болотка етеп тора. Барып етһә, атының колаккынаһы күренеп тора. Ерҙе каҙып төшөп киткән. Шонкары кәбән дәүмәлдәге итеп кош өйөп куйған» (28-се б.). Шунда барып еткәнсе кайнағаһы менән кайынеңгәһе, йәнә кәләше генә кала.

24. «Балкантау» тигән баш аҫтында Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Байғужа *ауылында* 1960 йылда 70 йәшлек Кучаев Ғатаулла Муллайән улынан Ниғмәт Шоңкаров яҙып алған. ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 113—114-се б.

Был вариантта Балкантау хакында Заятүләк ауыҙынан әйттерелгән кобайыр ғына теркәлгән.

И Балкантау, Балкантау,
Балкантауым был түгел.
Майлап куйған камыштай
Йыланы күп Балкантау.

Ҡағып ҡуйған ҡаҙыҡтай
Һыуыры * күп Балҡантау.
Мөгөҙләре йылтылдашып,
Тояҡлары ҡалҡылдашып,
И Балҡантау, Балҡантау,
Пәйеп ҡуйған бәрхәттәй
Урманы күп Балҡантау... (113-сө б.)

25. Заятүләк менән Һыуһылыу. 1971 йылда Хәйбулла районы Бүребай ҡасабаһында Туғыҙбаева Бәҙеғолдан (1880) яҙып алынған. — ТТӘИ, фольклор һәм сәнғәт бүлеге фонды // Төрлө йылдар. 1—6-сы б.

Был версия буйынса Заятүләк Моңлобайҙың яңғыҙ улы, уны Алтынбайҙың алты улы, Етенбайҙың ете улы ҡуралмай. Сөнки шоңҡар сөйгәндә улар уңмай, ә Заятүләк уңа:

— Алтынбайҙың алты улы
Шоңҡарҙарын сөйҙө, ти, —
Ерҙән сысҡан типте, ти;
Етенбайҙың ете улы
Шоңҡарҙарын сөйҙө, ти —
Ерҙән сысҡан типте, ти;
Моңлобайҙың яңғыҙ улы Заятүләк
Ул да ҡошон сөйҙө, ти —
Ҡанат ҡаҡмай, ҡаҙ алды, ти,
Ауыҙы ҡомай * бүре алды, ти;
Ҡыя-ҡуя йүгергән
Ҡуянды ла алды, ти;
Ҡөлә-көлә йүгергән
Ҡөҙәнде лә алды, ти;
Ҡара-ҡарай йүгергән,
Ҡарһаҡты ла алды, ти;
Төмәй-төмәй йүгергән
Төлкөнө лә алды, ти.
Инде алмаған ни ҡалды?
Ҡош йөрәге — сүрәгәй
Өйрәкте лә алды, ти.

Атаһының ҡара толпарын менгән Заятүләк күл ситендәге түңәрәк таш өҫтөндә сәс тарап ултырған Һыуһылыуға юлығып, ҡауышырға һүҙ ҡуйышып, уның менән һыу аҫты батшаһы Әптерхандың биләмәһенә төшә. Тыйылһа ла, таҡта (?) башына бағып, бағана сәйнәп торған толпарын күреп, ҡайтҡыһы килә. Бының сәбәбен вәзир Таҡсурат батшаға аңлата. Мал әйәртеп, Заятүләк менән Һыуһылыу ер өҫтөнә сыға. Һыуһылыу һыу аҫты батшалығын һағынып, һағышлана башлағас, ен-бәрейҙәр ул батшалыҡты ер өҫтөнә сығара.

Эпос ошо урында этиологик мотив менән һуғарыла. «Ер егете менән һыу ҡыҙы ҡушылғас, донъя йөҙө бөтөнләй икенсегә әйләнгән. Ерҙәге ағастар тағы ла йәшәреп, матурланып киткән. Яңы кешеләр, яңы быуын барлыҡҡа килгән. Шул көндән башлап халыҡтың иң төп килеп сығыуын, тарихын аңлатыу шуға ҡайтып ҡала: «...Инәбеҙ — һыу, атабыҙ — һауа» (?). Йә информатор,

йә яҙып алыусы буталған, буғай. Сюжеттан аңлашылыуынса, «атабыҙ — Ер, инәбеҙ — һыу, кешелек Ер-һыу балаһы» булырға тейеш.

26. «Балҡантау» тигән баш аҫтында 1972 йылда Өфө ҡалаһы Цюрупа урамындағы 82-се йорттоң 12-се фатирында йәшәүсе Гөлсирә Айбулатованан М. Хөббөтдинова яҙып алған. // БӘФҠ ФФ, һаҡл. б. 29. 1—7-се б.

Был текст, асылда, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының үҙенсәлекле бер версияһынан гибрәт. Балҡантауҙа буй үҫтергән Зөлайханың һөйгән егетен үлтереп китәләр. Ҡыҙҙы бай улы урлай. Ҡыҙ Балҡантауын һағына. Уға кейектәр килтерәләр, тау яһап бирәләр. Ҡыҙ барыһын да хушһынмай: «Балҡантауым был түгел!» — тип ҡобайыр әйтә. Аҙаҡ һыуға батып һәләк була.

27. «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән исем ҡуйып, 1980 йылда Дәүләкән районы Төйләп (Уртатау) ауылы Усман улы Әхиәр Усмановтан (1897) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. ТТӘИ ҠБ. Хөсәйенов Ғ. Б. Археография һәм фольклор. Өфө, 1982. 9—12-се б.

Бер батыр өс улына йылҡы өйөрөнә барып, ат һайларға, йүгән шылтыратҡанда ҡайһыныһы ҡарай, шуны алырға ҡуша. Өлкәндәренә «ер тырнап, яныл торған айғырҙар», кесеһенә, Заятүләккә, алама ат ҡарай, әммә менеүе була — толпарға әүерелә.

Һуңарға ҡош сөйәләр. Ағалары йыш ҡына буш ҡул менән ҡайта. Заятүләк гел уңа. Теғеләр көнләшә.

Заятүләк һунарлап, күлгә килеп сығып, һыу ҡыҙын күреп, уның толомонан тотоп, һыу аҫты батшалығына юлыға. Уға:

Атың-инең белмәйем,
Ерең-һыуың белмәйем,
Атың әйтсе, әй, һылыу,
Һыуың әйтсе, әй, һылыу! —

тип өндәшә. Танышалар.

Заятүләк илен һағына. Уның «Һағыш-ҡайғыһынан балыҡтар сыҙамай үлә башлай». Ә аты, ҡошо күл янында тилмерә, ябығыша.

Һыуһылыу Заятүләккә:

Атың үҙең беләһең,
Ерең-һыуың беләһең.
Унһан ҡырғыҙ иленән
Бында килеп төштөң һин.
Атың тора тилмереп,
Ҡошоң тора елпенеп, —

ти. Заятүләк думбраһын сиртмәй: йәнәһе лә, арҡа терәр тауы юҡ. Ен-бәрейҙәр тимер менән ҡоршап «бер тау килтереп ҡуялар».

Егет ауылына ҡайтырға теләй, әммә буш ҡул менән түгел, Һыуһылыу менән. Уның «ҡайғыһының ҡыҙыуынан балыҡтар, һыу батшалығындағы йәнлектәр үлеп бөтөп» барғанлыҡтан, ҡыҙҙы бирмәк булалар. Батша иҫкәртһә лә, күлдән сыҡҡанында Заятүләк артҡа ҡарай: сыҡҡан һыртлы ҡола йылҡы малының сығып өлгөргәне ерҙә ҡала, өлгөрмәгәне кире сума. Информатор ошо айҡанлы былай тип иҫкәрмә яһай: «Заятүләк бабаһының һүҙен тыңлап, әйләнеп ҡарамаһа, кешеләрҙә байлыҡ, аттар тағы ла күберәк булаһы икән!» Һыу-

һылыу менән Заятүләк тигеҙ ғүмер итеп, үлгәс, уларҙы Уртатауҙан ары Балҡантау башына ерләйҙәр.

Был версияла М. Ғафури баҫмаһындағы (ҡар. 1-се версия) «Уң сан уймат тигән йорт» менән «Ҡырғыҙ иле» тигән төшөнсәләрҙең берләштерелеп, «Унһан ҡырғыҙ иле» тип телгә алыныуы ла иғтибарға лайыҡ.

28. «Түләк китабы»ның ахыры: «Мөхәмәтгәрәй күчермәсе» тигән баш аҫтында М. Усманов үҙенең «Ҡаурый каләм эзенән» китабына (Ҡазан, 1983) индергән. Эпостың «башы-ахыры юғалған уртаса ҙурлыҡтағы (мәктәп дәфтәре форматындағы)» 162 ҡағыҙ битенән торған был яҙма вариантын 1985 йылда Ҡазанда археограф Марсель Әхмәтов тапҡан. М. Ғ. Усманов «сыбар эстәлекле» был китапты 1877—1880 йылдарҙа Минзәлә яғынан Теләнсетамаҡ ауылында Ғәбделйәббәр хәҙрәт мәҙрәсәһе шәкерте Шакирйән улы Мөхәммәтгәрәй төҙөгән булған. Һәр хәлдә, китапта яҙманы әҙерләүсенең ҡулы менән яҙылған бына былдай иҫкәрмә бар икән: «Ошбуны яҙучы Кузый авылының Мәхәмәдгәрәй ибне мелла Шакирҗан углы. Февральнең 4-че көнендә 1877-нче елды тәммәт тәмәм шодәст» (234-се б.).

Оло Ҡариле Хәсәне төҙөгән вариант (19) менән Мөхәмәтгәрәй шәкерт варианты, төшөп ҡалған өлөштәрен иҫәпкә алмағанда, һүҙмә-һүҙ тура килә тиерлек. Шуға күрә, М. Усмановтың әйтеүенсә, бер-береһен тулыландыра, «дөрөҫөрәге Оло Ҡариле күсерегендә етеп бөтмәгән өлөш — эҫәрҙең ахыры» Мөхәмәтгәрәй вариантында теүәлерәк һаҡланған (235-се б.).

Томды төҙөүсе тарафынан 22-се вариантҡа бирелгән иҫкәрмә был вариантҡа ла ҡағыла.

## «ТҮЛӘК ҠИТАБЫ»НЫҢ АХЫРЫ

### (Мөхәммәдгәрәй күчермәсе)

...Анда Чачдархан падишаһ әйде: «Ҡитәрмен тигәнне нәчәгә тикле тотармын»,— тиде. Пәриләргә әмер кылды: «Барыңыз, Түләкне сарайына илтеп килеңез». [Түләк]: «Ҡабул кылса, атамыз йортына барсак булгайму?» — диде. Анда (976) Чачдархан падишаһ әйде: «Ир — туган йи[р]ендә, эт туйган йирендә газиз торыр. Атасы йортын сагын[ма]ган ирне ирме дип булыр?» — дейү дәстүр[1] бирде. Йәнә әйде: «Йортыңызны, сарайыңызны, халкыңызны, малыңызны нәтәк[2] кылырсыз?» — тиде. Анда Түләк әйде: «Әй, падишаһ, барча галәмнең теләген биргүче тәңре тәгалә торыр», — тиде. Анда Чачдар хан падишаһ әйде: «Сезне Аллаһы тәгаләгә тапшырдым», — тип йибәрде. Пәриләр [Түләкне] кызга тапшырып кайтдылар.

Чачдар хан падишаһның шәһәре диңгез арасында (астында? — М. Г.) иде. Түләк кәлде, кыз берлә күрешде, хәләхваль сорашдылар. Аты, кошы йамансулап йабыгыпдыр. Үртәкәсене күрде — йабыгыпдыр, күз йәшләре, борын сулары агып торыр. Шул за-

[1] Дәстүр — рөхсәт.
[2] Нәтәк — ничек.

ман Түләк Гөлестанын көйләп, думбырасыны уйнай, кыл кубызын сарнап, үртәкәсен алдыга[3] алып уйнай башлады. Үртәкәсе төзәлеп күрекләнде, куанды. Түләк анда, үртәкәсе бийегәндә, әйтер иде:

Әй үртәкәм, үртәкәм,
Мөйезләрең куш тәкәм,
Буынларың буш тәкәм;
Күзең йәше агыпдыр, ...
Гарибсебсән[4], үртәкәм,
Йәтимсебсән[5], үртәкәм.
Уйна, күңелең ачылсын,
Тугъ-тузаның сачылсын
Уйнай биргел, үртәкәм! —

тип, күп төрлек уйынлар кылып, халайыкның күңелләрен ачып һәм кийек-кошларның күңел[ләр]е ачылды, шад булдылар.

Бу кичә Түләк йәсигъ намазы кылгандин соң ике рәкәгъәт хаҗәт намазы кылды, Исме әгъзам догасыны укып мөһим кәлтерде. Башын сәҗдәгә куйып әйде: «Илаһи, барча хаҗәт[ем]не рәва кылдың[6]. Имде бер теләгемне рәва кылсаң. Ошбу сарай, тәхетембәхетемне сән Рахманым төзеп бирдең, сән Җәббарга[7] шөкер. Имде ошбу тәхет-бәхет, халык, милкемез вә йәнә ошбу Балкан тауны, киек-кошы берлә, урманы-утауы[8] берлә, вә йәнә ошбу бал-сөт, су дәрйалары берлә адәм шәһәренә урнатсаң, кодрәтең бар торыр. Мондаг кылмак сәңа асан торыр, әй Җәббарым!» — тип күзендин йәшен (98а) сачты. Хакъ тәгаләгә йалбарып күп мөнаҗәт кылды.

Ул кичә йатды, иртә таң намазы кылдылар. Анда кыз карады, пулат сарай тәрәзәсендән көн[9] төшде. Андан борын сарай эченә көн төшә тор[ган]дәгел иде. Тышкары чыкды, тиз карап күрде: бер олугъ шәһәр йәнәшәсендә халкы, милке, тәхете-бәхете, Балкан тауы, урманы, киек-кошы, пулат сарайы, бал дәрйасы, сөт дәрйасы, су дәрйасы — барчасы бөйлә килеп, бер олугъ шәһәр йанында урнамыш. Кыз кайтып сарайга керде, Түләккә әйде: «Әй, йегет, сән белермүсән бу ни йиргә кәлдекең?» — тиде. Анда Түләк әйде: «Әй, җаным мәхәббәте, мәнем йирим-йортым ошбу шәһәр торыр. Атам йортына кәлдек!» — тиде. Андан кыз торды, урынларын төзеде, күшәргәсен корды, утырды. Һич нәрсә сүз әйтмәде.

Ул вакытда ул шәһәрнең падишаһы үлгән ирде. Ул [көн]дин борынгысы көн ул шәһәрнең олугълары йыйылып иттифак кыл-

---

[3] Алдыга — алдына.
[4] Гарибсебсән — гарибсенгәнсең (гариблек хәленә төшкәнсең).
[5] Йәтимсебсән — йәтимсерәгәнсең.
[6] Рәва кылу — кабул итү.
[7] Рахман — рәхим иясе; Җәббар — җәбер (көч, кодрәт, җәза) алланың исемнәре).
[8] Утау — бу урында болын (маллар утлап йөри торган җир).
[9] Көн — кояш.

ган[10] иделәр, таңдагы көн бу шәһәргә төш вакытына тигрү[11] һәр кем килсә, [аны] падишаһлыкка күтәргәймез тип. Олугъ-кечек, алтмыш йәшдин алты йәшкә тигрү, бер киңәштә булып, кем килсә дә, падишаһлыкка күтәргәймез тип көтеп торыр иделәр. Ул кичә йатып, иртә тордылар ирсә, күрделәр: ул шәһәргә йәнәшә бер олугъ тагъ урнамыш. Ул тагъ[ны] тимер ыстанлары берлә йукары калку [йиргә] урнатмыш. Ул тагъның астында бер алтын тәхет урнамыш. Ул тәхетнең айаклары көмешдин, башы гәүһәрдин, ул тагъны алтын берлә коршаган, тагъның[12] башыны ак мәрмәрдән йапкан. Ул тагъның каршысында бер пулат сарайның алдындин бардыр: бер дәрйасы балдин агып барыр, ул сарайның артындин сөтдин бер дәрйа агып барыр; түрт тарафындин судин түрт дәрйа агып барыр[13]. Йөз аргамак ул тагъның төбендә утлай йөрер. Бер ак шоңкар кошы — меңтүлек (?) кош тагъның тигрәсендә очып (98б) шанкылдай йөрер.

Барча олугъ-кечек күрделәр, таң-гаҗәебә калдылар. Бу мондагъ пулат сарай[ны] җиһанда һич кем[нең] күрмеше йукдыр тиделәр. «Мәгәр безләргә бу пулат сарайның ийәсен Хакъ тәгалә падишаһлык[ка] йибәрде бугай тип, гайәт сәүенештеләр. Андин олугъ вәзирләр вә әкябирлар[14] тордылар, ул пулат сарайга бардылар. Ул сарайның ишегендә саклап торган берничә йегетләрне күрделәр — мисле ай берлән көн булгай. Боларның күрекләрен күрделәр ирсә, гакыллары китте, заил[15] булды[лар]. Бер замандин соң гакылларын йыйып алдылар, анда ул сакчы йегетләргә әйделәр: «Бу сарай кемнең торыр вә йәнә бу халык, милек кемнең торыр? — тиделәр. — Вә йәнә бу тауның атыны [ни] тип әйтерләр?» — тип сордылар ирсә, анда ул сарай ишегендә саклап торган йегетләр әйделәр: «Бу сарай Чачдар хан падишаһның к[ийә]ве берлә кызының сарайы торыр. Вә йәнә бу тәхет-бәхет, халык, милек аларның торыр. Вә йәнә бу тауны Балкан тау дип әйтерләр», — [тиделәр] ирсә, иҗазәт[16] теләп, эчкәре сарайга иңделәр.

Ул халайык эчендә Түләкнең атасы Миркас[17] би һәм бергә вар ирде. Түләк берлә һәм катындагы кешеләр берлә күрешә башладылар. Анда күрешә кәлеп, Түләк атасына йитде, кочаклашып күр[еш]деләр, Түләкнең барча буыннары калтырап, төсе үзгәрде. Гяһ кызарды, гяһ уңарды[18]. Анда кыз Түләкдин хөфйәтән[19] сорды: «Ул кеше берлә күрешмәкдә буыннары[н] ни өчен калтырап, төсең үз[гә] булды», — тиде. Анда Түләк кызга әйде: «Әй, җан мәхәббәте, шул кеше мәнем атам торыр, аның берлә

---

[10] Йыйылып иттифак кылу — җыелып берләшү.
[11] Тигрү — кадәрс (тикле).
[12] Кулъязмада: тугъның.
[13] Моннан соң «бер ак» сүзе артык (ашыгычрак) язылган.
[14] Әкябирләр — бөекләр (аксакаллар мәгънәсендә).
[15] Сүз шартлы рәвештә укыла, аңлашылмый.
[16] Иҗазәт — рөхсәт.
[17] Исем «с» хәрефенә артык нокта куелып, Мирказь рәвешендәрәк язылган.
[18] Гяһ кызарды, гяһ уңарды — бер кызарды, бер агарды.
[19] Хөфйәтән — яшерен рәвештә.

сөеп күрешмәкдән буынларымның хәле кәтде. Шуның өчен калтырадым», — тиде. Кыз белде — кайын (99а) атасы торыр.

Андин олугъ биләрнең вә тәкый олугъ вәзирләрнең, олугъ экябирларның хатынларыга хәбәр кылдылар: ошбу падишаһның кызына күрешүгә килсеннәр дип. Барча олугъларның хатынлар[ы] килде[ләр]. Түләк берлә һәм кызы берлә күрешделәр.

Ул би хатынлары эчендә Түләкнең анасы һәм бар ирде. Анасының ике имчәгенә сөт тулып кәлде. Түләк инәсе берлә күрешмәкдә инәсенең ике имчәгендин сөт атылып чыкды, Түләкнең йөзенә сачылды һәм агызына[20] керде, Түләк йотды, бал һәм шикәрдин татлыг ирде[21]. Түләкнең сөт ләззәтендән, мәҗлес хушлыкыдан гакылы китеп, йыгълай язды. Инәсе, сөте сачылганга ойалып, тугъры карай алмады, шайәд угылы иркәнен андагук[22] белгәй ирде. Күңелендә әйтер ирде: «Аһ дәрига, мәнем бу ике имчәгемә сөт тулды, булган балага иммәгә, йаки[23] йөклеме булдым икән», — тип йәшерен йыгълар ирде.

Кыз йәнә Түләкдин хөфйәтән сорды: «Ул сөте йөзеңә сачылган нә хатын ирде?» — тиде. Анда Түләк кызга әйде: «Әй, җаным юлдашы, шул кари[24] хатын мәнем инәм торыр». Кыз белде — кайын анасы торыр. Кыз торды, сандык ачды, ике тун[25] алды, алтын-көмөш, гәүһәр-җәүһәр берлә мөрәссәгъ[26] кылы[н]мыш. Түләккә бирде: «Берсен атаңа, берәүсен анаңа йап», — тиде. Түләк бер тунны атасына, бер тунны анасына йапды.

Халайык анда таңга калдылар. Әмма Түләкнең ата-анасы аслан белмәйләр, гайреләре һәмишә белмәйләрмеш. Йегет илән кыз үзләре генә беләләрмеш. Соңра ул шәһәр халкы, йәгъни экябирлар әйделәр: «Әй, солтан угылы, безләрнең ханымыз[27] үлде торыр. Төнәген барчамыз йыйылып иттифак кылдык. Ханымыз (99б) дин угыл-кыз калмады, ханлыкга ултыртмага. Барчамыз әйдек: таңдагы көн төш вакытына тигрү һәкем килсә, ханлыкга күтәргәймез тидек. Имде сезне безгә тәңре тәгалә кәлтерде торыр. Безне сәңа тәнре тәгалә бойырды, бирде торыр. Кил, имде сәне тәхеткә күтәрәле», — тиделәр. Анда Түләк әйде: «Сез кабул кылыр булсаңыз, мән риза», — тиде.

Шул заман барча халайык бер [б]улып, Түләкне ханлыкка күтәрделәр.

Өч йыл хан булып утырмады, — андаг гаделхаһ[28] кылды — барча вәйран йортлар төзәлде. Мәгәр куйлар бүреләр бергә йөр-

---

[20] Сүз «агазына» рәвешендә язылган.

[21] Бу эпизод Түләкнең «яңадан тууына» (ягъни «теге дөнъядан кайтуына») ишарә булса кирәк, чөнки бала туар алдыннан яки ул туган чакта ана күкрәге сөт белән тула.

[22] Андагук — анда ук, шул җирдә үк.

[23] Ике сүз хаталы язылган: имәгәк яр...

[24] Кари — карт.

[25] Тун — гомумән кием, монда: җилән.

[26] Мөрәссәгъ — зиннәтләнү, бизәлү.

[27] Бу сүздән элек артык «үлеп» язылган (яки башка бер-ике сүз төшкән булуы ихтимал).

[28] Гаделхаһ — гаделлек теләү.

гүтик булды — монынҗтик гаделлек бәрәкәтендә. Һәм шул вакытгача Түләкне[ң] кем ирдекен һичбәр кеше белмәз иде. Әмма һәрдаим Түләкнең инәсе * әйтер ирде: «Ошбу хан безнең гаиб булган [92] угылымызга охшар» — тип әйтер ирде. Анда Миркас би әйтер ирде: «Әй, хатын, гаиб булган угылымызга мондагъ ханлык кайда булыр?» [30] — тип әйтер ирде.

Түләк җомга көн Балкан тауга чыкып, алтын тәхеткә ултырып, барча халайыкны җыйып, йимәк-эчмәк [31] биреп, Гөлеста[нын] көйләп, дум[б]расын уйнап, кыл кубызын сарнап, үртәкәсе биеп, аның гыйшкындан корбан кылгутик булып торыр ирделәр.

Бер көн Балкан тауга чыкып, йийеп-эчеп, уйын-тамашалар берлә ултырыр ирделәр. Олугъ биләр, вәзирләр иттифак кылып, сордылар: «Әй, шаһи җиһан, сән безләргә хан булдың. Без сәңа халык илә көтү булдык. Өч йыл булды сорарга [батырлык] кылмадык. Имде безләр сорармыз: кемнең нәселесән? Үзең кемнең угылысән? Атыңыз ни торыр?» — тип сордылар. Анда Түләк әйде: «Мән сезнең үз нәселеңездин, мән вә йәнә үз угылыңызмән», — тиде.

Анлар әйделәр: (100а): «Безнең барча угылымыз үз катымызда торыр. Мәгәр күп йыллар булды бер угылымыз гаиб булып торыр. Сәнең атың кемдер?» — тип сордылар. Анда Түләк әйде: «Мәнем атым Түләк торыр. Атам аты Миркас би торыр», — [тип әйтер] [32] иде ирсә, барча халайык кочаклашып күрештеләр, хәл-әхваль сораштылар.

Түләкнең атасы берлә анасы Аллаһы тәгаләгә шөкерләр кылып, [барчага] хәбәр кылып, фәкыйрьләргә күп маллар өләштерде. Алар анда Түләкдин сордылар, ни хәл берлә гаиб булып киткәнен.

Йәнә [Түләк] бу алтмыш йегет атының йөгәнен суйып [33] йибәргәнен, йите кичә-көндез аты алып киткәнен, атының айакына тимер кадак сукканын — барча[сын] әйде ирсә, барча вәзирләр әйделәр: «Бу алтмыш кеше әүүәл сәңа көнләшер дошман булып һәм андаг эш кылдылар. Имде бу көн сән [исән] икәнен белделәр, андин йаманрак дошман булыр», — тиделәр. Анларга Түләк әйде: «Анларны ни кылмак кирәк?» — тиде.

Барча огутълар әйделәр: «Анларны апал итеп измәк кәрәк», — тиделәр. Андин соң анларны өй-илләре берлә апал итеп, ул йыйылган [34] халайыклар берлә иттифак әйләп изә башладылар. Әүүәл ун өйлесен, ил чите тип, азага [35] әйделәр [36]; икенче ун [өйле-

---

[29] **Гаиб булу** — юк булу, югалу.

[30] Йолдызчыктан алып шунда кадәр текст кызыл кара белән язылган.

[31] Йимәк-эчмәк — ашау-эчү.

[32] Кульязмада монда «сордылар» дип ялгыш язылган — мәгънәгә туры килми.

[33] Кульязмада ялгыш: «кую».

[34] Йыйылган — җыелган.

[35] Бу сүзне «Азау» (Азов) дип аңларга да, «атау» рәвешендә кабул итәргә дә мөмкин.

[36] Бу һәм моннан соңгы «әйделәр»не куу, сөрү мәгънәсендәге «әйдәделәр» дип аңларга да мөмкин.

сен], урыс йорты тип — эчтуккә (?), өченче ун [өйлесен], чит халык тип, чиркәскә әйделәр; түртенче унын, кыр халкы тип — кыргызга, бишенче унын, башка йорт тип — Бохарга, алтынчы унын, каныш (?) йорты тип, кайага әйдә[р] ирделәр.

Андин соң Түләк ул дәүләт эчендә ултырып (100б), утыз алты йыл ханлык сөрде. Андин соң ханише[37] Сусылу дөнйадин үтде. Икенче йыл Түләк үзе дөнйадин үтде. Түләк дөнйадин үткәндин соң Түләкнең угылыны ханлыкга күтәрделәр. Ике йыл хан булып торды. Андин соң ул Түләкнең угылы Габдулла дөнйадин үтде. Түләкнең угылы дөнйадин үткәндин соң Балкан тау, алтын тәхет, пулат сарай, бал дәрйасы, сөт дәрйасы, дүрт тарафдин акган су дәрйасы, бергә килгән халкы, милке — барчасы бер кичәдә гаиб булып, юк булды. Һәм адәм кайда киткәнен белмәделәр...»

## АҠҺАҠ ҠОЛА

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылында 84 йәшлек Ғибадулла сәсән Ағишевтан Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) яҙып алған. Ҡулъяҙмала сәсәндең уҡымышлы булыуы, күп кенә фольклор әҫәрҙәрен белеүе хаҡында әйтелә. (Унан «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға» әҫәрҙәренең дә варианттары яҙып алынған). ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 58—65-се б. Башлап 1972 йылда баҫылған. БХИ: Эпос. 1-се кит. 223—228-се б.

### I. ТОМҒА ИНГӘН ВАРИАНТТАРЫ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

1. «Аҡһаҡ ҡола» экиәте» тигән исем менән 1907 йылда элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы Үрге Ильяс ауылында Хәсән Буранғоловтан Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған. // ҒА, ф. 3, оп. 12/218. 133—136-сы б., ф. 3, оп. 12/219. 111—115-се б. Беренсе тапҡыр БХИ: Эпос, 1-се китапта баҫылған. 229—232-се б.

2. «Аҡһаҡ ҡола» тигән исем менән 1970 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 28 ғинуар һанында баҫылған. Әҫәрҙе баҫтырыусыһы — ҡурайсы һәм уҡытыусы Кәрим Дияров уны 1928—1929 йылдарҙа Баймаҡ р-ны Басай ауылы йырсыһы Фәруҡ Басаевтан, шулай уҡ Туҡтағол ауылы Ильяс Мәғәфуровтан отоп алыуы тураһында әйтә. // БХИ: Эпос. 233—237-се б.

3. «Бишҡолон» исеме менән 1971 йылда Мөхтәр Сәғитов уҡытыусы-пенсионер Зәйнәп Зөбәйерованан (1905 йылда тыуған) яҙып алған. З. Зөбәйерова оҙаҡ йылдар буйына Башҡортостандың Баймаҡ районында уҡытыусы булып эшләгән. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана // БХИ: Эпос. 1-се кит. 238—243-сө б.

Әҫәр үҙенең сюжеты, образдар бирелеше буйынса башҡа варианттарҙан ныҡ ҡына айырыла. Унда ваҡиғалар хәҙерге Баймаҡ районындағы Бишҡолон йылғаһы буйында, бөрйән ырыуы ерҙәрендә һәм хәҙерге Ырымбур өлкәһе Туҡ һәм Соран буйында бара. Әҫәр көйө менән бергә яҙылып алынған.

---

[37] Ханиш — ханның ише, ягъни ханбикә.

4. «Аҫҡаҡ ҡола» исеме менән 30-сы йылдарҙа Башҡортостандың Баймаҡ районы Басай ауылы ҡурайсыһы Кәрим Дияровтан йырсы һәм ҡурайсы Ғата Сөләймәнов яҙып алған // ҒА, ф. 3, һаҡл. б. 12/241. 58—64-се б.

Был вариант, асылда — үҙ аллы версия. Ҡыҙ — осраҡлы осраған ҡыҙ, бай улының кәләше түгел. Ул кейекләшкән йылҡыларҙы күрһәтә. Аҡһаҡ ҡоланың ни тиклем ҡырағайлапыуы шунан күренә. Уның өйөрө бай улы менән ҡыҙға ташлана. Улар саҡ-саҡ тапалып үлмәй.

Йылҡы малы менән хужа араһындағы конфликт ҡатмарлашыуға өйөрҙөң ошо холҡо сәбәпсе итеп күрһәтелә. Бай бында үс алыусы рәүешендә баһалана: үҙенә булмағас, әйҙә, эт-ҡош кинәнһен тип, ҡырағайлашҡан өйөрҙө ҡырҙыра. Аҡһаҡ ҡола ла һәләк була. Үлер алдынан телгә килеп, байға күндергән «сәләме» иғтибарға лайыҡ: байҙың малын үрсетеп-үрсетеп тә, ошондай көнгә төшөрөүсе өсөн ризалығы юҡ икәнен әйтә. Ә был иһә малдан фатиха урынына ҡарғыш алыу, уның рәнйеүе байға йә бай улына төшәсәгенә ишаралау ул. Тимәк, Аҡһаҡ ҡоланың үлеме сюжеттың сиселеше түгел әле. Ул бары байға (йә улына) төшәсәк ҡарғышты иҫкәртеүсе генә. Бай йә бай улы һәләкәткә дусар буласағы — сюжеттың композицияһынан тышта ҡалған сиселеше ул.

5. «Аҡһаҡ ҡола» 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡаипҡол ауылында 68 йәшлек Миңлебулат Әбдрәзәҡовтан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 72—80-се б.

4. «Аҡһаҡ ҡола» 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Переволоцк районы Ғәбдрафиҡ ауылы Нәзифә Байтимерованан күренекле фольклорсы Салауат Әхмәдулла улы Галин яҙып алған. Тома һуҡыр был информаторға ул саҡта 60 йәш булған // ҒА, д. 3, оп. 21/3. 86—91-се б.

## II. БАШҠА ВАРИАНТТАР ҺӘМ ВЕРСИЯЛАР

7. 1943 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районы Темәс ауылы Бикбирҙинанан Ғата Сөләймәнов «Аҡһаҡ ҡола»ның халыҡ араһында элек-электән үҙенә махсус көйлө йыр булып таралған өлөшөн яҙып алған. Йырҙың тарихы рәүешендә «Аҡһаҡ ҡола»ның ҡыҫҡаса риүәйәте бирелгән // ҒА, ф. 3, оп. 12/269. 266—267-се б.

Бикбирҙинанан яҙып алынган йыр-риүәйәт «Аҡһаҡ ҡола» исеме менән «Башҡорт халыҡ ижады» китабының 1-се томында баҫылған (Өфө, 1954. 192—193-сө б.). Шулай уҡ «Башҡорт халыҡ йырҙары» китабына индерелгән. (Төҙөүселәре, кереш мәҡәлә һәм аңлатма биреүселәре: Х. Ф. Әхмәтов, Л. Н. Лебединский, Ә. И. Харисов. Өфө, 1954).

8. «Аҡһаҡ ҡола» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында 63 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан Ә. Н. Ҡирәев (Ҡирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 54—58-се б.

Был яҙмала, төп варианттан айырмалы рәүештә, ҡасҡан өйөрҙө ҡыуа сыҡҡан егеттең төшөн юлда осраған һылыу ҡыҙ насарға юрай. Аҡһаҡ ҡола менән өйөрҙө ҡыуып етеп, уларҙы ҡырғандан һуң, ҡайтышлай егет һөйгән ҡыҙы янына туҡтай; шунда ул ата-әсәһенең, уны үлгән тип уйлап, кеше йыйып, ясин уҡытырға йыйыныуҙарын ишетә.

Әҫәрҙең финалы икенсе төрлө: бай улы Аҡһаҡ ҡоланы ҡабат ҡыйырһытмаҫҡа ант итә. Ләкин, антын боҙоп, Аҡһаҡ ҡолаға уҡ менән ата. Анты башына етә: мөнгән аты һөрөнөп китә лә, егет эйәренән ҡолап төшә. Шул саҡ

ғазраил килеп: «Мин — һинең антың!» — тип уны быуып үлтерә. Был вариант бер аҙ әҙәби яҡтан эшкәртелгәнгә оҡшай.

9. 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Переволоцкий районы Ҡотломбәт ауылы 67 йәшлек Нәзифә Әбүбәкированан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 71-се б.

10. «Аҡһаҡ ҡола» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Күрпәс ауылы Солтанморат Сәйетовтан (йәше күрһәтелмәгән) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 80—85-се б. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән.

Әҫәр төп вариантҡа бик яҡын. Үҙенсәлектәр ҡайһы бер эпизодтарҙа ғына. Мәҫәлән, Аҡһаҡ ҡола төш күрә, йылҡылар уның төшөн яманға юрайҙар. Аҡһаҡ ҡола, эҙәрләп килеүсе Ҡарағол менән бай улының алдына барып: «Мине үлтермәҫкә ант итһәң, йылҡы өйөрөн бында килтерәм!» — ти. Бай улы ант итә. Аҡһаҡ ҡола йылҡыларҙы уҡ-һаҙаҡ тотоп һағалап ултырған бай улы менән Ҡарағол янына ҡыуа. Бик күп йылҡы уҡтан һәләк була. Аҡһаҡ ҡола иҫән ҡалған йылҡыға Ҡарағолдо тапап үтергә ҡуша. Бай улы был хәйләне белеп ҡала. Аҡһаҡ ҡоланы үлемесле яралай. Шул сәбәпле ул үҙе лә һәләк була: менеп йөрөгән аты тибеп үлтерә.

11. «Аҡһаҡ ҡола» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында 75 йәшлек Шәрәфи Юлыевтан С. Ә. Галин яҙып алған. // ҒА: ф. 3, оп. 21/3. 92—95-се б. Текст шиғри юлдар менән аралаш прозанан тора.

Был вариантта йылҡы өйөрөнөң эйәһе — хан. Уның 130 баш йылҡыһын эйәртеп, Аҡһаҡ ҡола ҡасып китә. Юғалған өйөрҙө эҙләп алып ҡайтырға ант итеп, хандың яңғыҙ улы сыға. Әммә ул буш ҡул менән ҡайта. Атаһына биргән антын үтәй алмау сәбәпле, хан улы өйгә ҡайтып инеү менән үлә.

12. «Аҡһаҡ ҡола» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылы Бибикамал Мерәсованан (йәше күрһәтелмәгән) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА: ф. 3, оп. 21/3. 95-се б.

Шиғыр менән проза аралашып килгән был вариантта ни бары ике генә эпизод — өйөр айғыры Аҡһаҡ ҡоланың йылҡыларҙы эйәртеп ҡасыуы һәм ҡасҡан йылҡыларҙы эҙләп сыҡҡан егеттең юлда әйттергән кәләше менән осрашыуы тасуир ителә.

13. 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Байғужа ауылында 85 йәшлек Сабит Кусаевтан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА: ф. 3, оп. 21/3. 85-се б. Текст шиғыр менән проза юлдарынан тора. Бында ла Аҡһаҡ ҡола тай-тулаҡты эйәртеп ҡасып китә. Эйәһе бик күп йылдар эҙләгәндән һуң йылҡы өйөрөн табып ала. Аҡһаҡ ҡола элекке үпкәһен әйтеп (тынғы бирмәй эшләтеүҙәрҙән зарланып), ҡасып китмәк була, ләкин эйәһе уны уҡ менән атып өлгөрә. Йылҡы өйөрөн ҡырыу был вариантта юҡ. Шулай уҡ Аҡһаҡ ҡоланың эйәһе үлеүе лә күрһәтелмәй.

14. 1960 йылда «Аҡһаҡ ҡола» һамаҡтары» тигән баш аҫтында 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Кәнсер ауылында 20 йәшлек Миңнулла Яҡшығоловтан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // ҒА: ф. 3, 23/7. 18-се б.

Текст Аҡһаҡ ҡоланың өйөр-өйөр йылҡыны алып китеү мәлен һәм ниндәй малдар китеүен аңлатҡан һамаҡтар контаминацияһының бер ҡыҫҡа вариантынан ғибәрәт.

Еллəп ямғыр яуғанда,
Төн ҡараңғы булғанда,
Бүлек, бүлек йылҡынан
Бүленеп киткəн бер бүлек.
Билдəленəн бишəү юҡ,
Һандуғас етмəҫ һары ат юҡ,
Ҡарлуғас етмəҫ ҡара ат юҡ,
Атайымдың яуға менер —
Биш ҡоласы, ул да юҡ.
Аҡһаҡ ҡола, бер меҫкен,
Ул да булһа, ул да юҡ.

15. 1960 йылда Ырымбур өлкəһе Переволоцк районы Ҡотломбəт ауылы 67 йəшлек Нəзифə Фəтҡулла ҡыҙы Əбүбəкированан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // FA: ф. 3, оп. 21/3. 71-се б.

Был вариант бик ҡыҫҡа. Əммə унда иғтибарға лайыҡ билдəлəр бар. Атын эҙлəүсе кейəүенə йəш ҡатын урынды үҙе əҙерлəмəксе була. Аҡһаҡ ҡола — тəңре ҡоло тип аталған. Тексты тулы килеш бирəбеҙ:

«Ҡасандыр бер заман Аҡһаҡ ҡола тай-тулаҡты эйəртеп яланға сығып юғалған, ти. Шунан тегене хужа егет эҙлəргə сығып киткəн, ти. Егет шул тиклем тырышып эҙлəгəн, ти, хатта юлда осраған ҡатынының:

Эй бай улы, бай улы,
Аҡ урындыҡ йəйəйем.
Аҡ урындыҡ йəйəйем,
Аҡ сымылдыҡ ҡорайым,
Аҡ сымылдыҡ ҡорайым,
Аҡ сымылдыҡ эсендə
Аҡ сабаҡтай уйнарбыҙ —

тип əйткəнен дə тыңламай, артабан китте, ти. Бик оҙаҡ замандар эҙлəй торғас, егет Аҡһаҡ ҡоланы табып, тотоп алғас, Аҡһаҡ ҡола:

— Аҡһаҡ ҡола бар ине,
Бер тəңренең ҡоло ине.
Яҙ ҙа еккəн, көҙ ҙə еккəн,
Яҙ ҙа еккəн, көҙ ҙə еккəн, —

тигəн дə, егетте тибеп осороп, үлтереп, сапҡан да киткəн, ти, ҡайҙа китергə телəй, шул яҡҡа. (Был, улым, булған эш ул)».

16. 1960 йылда Ырымбур өлкəһе Александров районы Аҡтин ауылында 54 йəшлек Фəйзулла Сəфəрғəли улы Агишевтан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған. FA: ф. 3, оп. 21/5. 2—3-сө б.

Был ҡыҫҡа вариантта төш күреү мотивы бик актив. Ат эҙлəгəн егет юлда осраясаҡ ҡыҙҙы, ҡыҙ егетте төшөндə күрə. Ҡайтышлай һуғылғанында, егет йəнə төш күрə. Егеттең үлерен ата-эсəһе төштəрендə күреп, үҙе ҡайтыуға, ҡарттарҙы йыйып, иҫкə алып (йəғни, башҡа варианттарҙан аңлашылыуынса, ҡырҡын үткəреп) яталар. Егет атаһының тубығына ятып йəн бирə. Сəбəбе — антын боҙоуы, йəғни Аҡһаҡ ҡоланың: «Мине атмаҫ булһаң, нисек тотоп бөтө-

рөү хәйләһен әйтәм», — тип мөрәжәғәт итеүенә егет ант иткән булырға тейеш. Юкһа Акһак кола артабан: «Һин уларҙы ярға кыҫырыклап атып бөтөр. Тере көйгә алып кайтып еткерә алмаҫһың», — тимәҫ ине. Егет юлдашы менән йылкыны ата башлай. Иң аҙак «Акһак кола»ға атып ебәргән. Уғы койрок төбөнән кереп, ике колак араһынан үтеп сығып киткән. Егеттең кайтышлай күргән төшөн теге кыҙ уның үлеменә юраған була.

17. «Акһак кола» исеме менән 1963 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Котос ауылында 66 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан БДУ талибәһе М. Йәнбухтина яҙып алған // БӘФК ФФ, 1963 йылғы экспедиция материалдары (79—81-се б.). Текст проза аралашып килгән шиғырҙан тора. Шул ук Р. Теләкәеванан Кирәй Мәргән яҙып алған 6-сы вариантка бик якын. Айырма әҫәрҙең финалында ғына: антын боҙған йәш хужаны йылкылар типкеләп үлтерәләр.

18. «Акһак кола» исеме менән 1965 йылда Баймак калаһында Котлогилде Илсебаевтан (1899 йылғы) БДУ талибы Биктимер Шәрипов яҙып алған // БӘФК ФФ, 1965 йылғы материаладар. Күләме — 3 бит. Текста проза менән шиғыр аралашып килгән. Башка варианттарҙан айырмалы рәүештә, йылкы өйөрөн эҙләп китергә йыйынған улына бай ризалык бирмәй. Әммә егет атаһының һүҙен тыңламай, сығып китә. Хужаһынан касып киткән Акһак коланың төш күреү һәм уны юрау эпизоды үҙенсәлекле. Акһак кола бейәләр алдына килеп, былай ти:

— Үткән төндә төш күрҙем:
Таш эсендә ут күрҙем,
Ут эсендә шеш күрҙем,
Шеш осонда ит күрҙем.

Бер бейә Акһак колаға төшөн юрап, яуап бирә:

— Таш эсендә ут күреп,
Ут эсендә шеш күреп, —
Кара башыңа булһын, Карт убыр!
Күҙеңә һайыҫкан оялар...

Был юрау Акһак колаға окшамай. Ул йылкыларҙы кайырып алып кайта алмаған хужаға үткәүелдә аңдып ятырға һәм төш юраған бейәне атырға куша. Үҙе йылкыларҙы үткәүелгә табан кыуа башлай. Ләкин егет бейәгә атам тип, яңылыш коланы атып үлтерә. Егет тә кайғыһынан шунда ятып үлә.

## КАРА ЮРҒА

1907 йылда Һамар губернаһы Быҙаулык өйәҙе Йомран-Табын волосы Үрге Ильяс ауылында Хәсән Бурангoловтан Мөхәммәтша Бурангoлов яҙып алған. Әҫәр 1939—1940 йылдарҙа М. Бурангoлов төҙөгән, ләкин баҫылып сыкмай калған «Боронғо башкорт йырҙары һәм кобайырҙары» йыйынтығына индерел-

гән. Был йыйынтыҡтың сигнал данаһы һаҡлана // ҒА, 8 СФ. Б. 29. БХИ: Эпос. 1-се кит. 244—258-се б.

## I. ТОМҒА ИНГӘН ВАРИАНТ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

1. 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡапҡол ауылында 62 йәшлек Усман сәсән Сәйетовтан Ә. Н. Ҡирәйев (Ҡирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 115—123-сө б.; БХИ: Эпос, 1-се кит. 259—264-се б. Стиле архивта һаҡланған текстағыса бирелде.

2. «Ҡара юрға» исеме аҫтында 63 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан Ә. Н. Ҡирәев (Ҡирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 123—124-се б.

## II. БАШҠА ВАРИАНТ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

3. «Ҡара юрға» исеме менән 1864 йылда С. Г. Рыбаков тарафынан Күсей ауылынан (хәҙерге Башҡортостандың Баймаҡ районы) атаҡлы Биргәле сәсәндән яҙып алынған һәм уның 1897 йылда Санкт-Петербургта сыҡҡан «Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта» тигән китабында (138-се б.) ҡыҫҡа ғына легенда рәүешендә бирелгән. Музыка белгесе буларак С. Г. Рыбаковтың бөтәһенән дә элек «Ҡара юрға»ның көйө ҡыҙыҡһындырған һәм ул шуға күберәк иғтибар биргән.

Әҫәрҙең төп сюжет һыҙығы — Ҡара юрғаның эйәһенә кәләш алып ҡайтыуы — был вариантта тулыһынса һаҡланған. Әммә беренсе вариантта һүрәтләнгән Ҡушлаҡ батырҙың һунарға сығыуы, ҡошон йылҡы өйөрөнә алмашыуы, Ҡушлаҡтың үлеме кеүек эпизодтар бында бөтөнләй юҡ. Шулай уҡ Ҡара юрғаның, пасар ҡарағаны өсөн, эйәһенә үпкәләүе лә сағылмаған. Төп варианттан айырмалы рәүештә, һөйгән егетемә мине алып ҡас тип, ҡыҙ Ҡара юрғаға үҙе ярҙамлаша.

4. «Ҡара юрға» исеме менән шағир Зыя Өммәтиҙең 1909 йылда Өфөлә сыҡҡан «Башҡорт, типтәрләрнең жыр, бәетләре» китабына индерелгән. Ҡасан, ҡайҙа, кемдән яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәттәр бирелмәгән. Тексттың йөкмәткеһе 2-се версияныҡына бик яҡын.

5. «Ҡара юрға» исеме менән 1928 йылда музыка белгесе И. В. Салтыков тарафынан яҙып алынған (яҙҙырыусының исеме, ҡайҙа йәшәгәнлеге күрһәтелмәгән) һәм, руссаға әйләндерелеп, «Башҡорт йырҙары тарихы һәм уларға анализ» («История и анализ башкирских песен») ҡульяҙма хеҙмәтенә индерелгән // ҒА, ф. 3, оп. 61/25. 33—34-се б.; Салтыков И. В. Башкирские народные песни // Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Уфа: Изд-во БГУ, 1974. Вып. 1. С. 267—268.

## КАРА-ЮРГА

У одного баева сына был конь, который обладал человеческой речью. Однажды владелец послал его, сказав: «Иди, привези мне девушку-красавицу». Конь полетел и вскоре привез хозяину красавицу. Баев сын обратился к нему с такой речью:

Гай, Қара-юрга, гай, Қара-юрга,
Отдай мою суженую, Қара-юрга,
Отпусти, пусть слезет с тебя моя милая, юргам,
Снаружи уши посеребрю, юргам,
Копыта спереди озолочу, юргам,
Гай, Қара-юрга, гай, Қара-юрга.
Отдай мне красавицу, Қара-юрга,
Пусть слезет с тебя моя суженая, юргам,
Развевающиеся гривы шелком окутаю, юргам,
На хвост приделаю украшения, юргам,
Гай, Қара-юрга, гай, Қара-юрга,
Отдай мне мою суженую, Қара-юрга.

Қара-юрга отвечает:

Гай, гай, джигит, гай, джигит,
Не спущу с себя твою суженую, джигит.
Весною и осенью ты меня седлаешь,
Қ твердому столбу привязываешь, джигит,
Ребра мои считаешь, джигит,
Гай, гай, джигит, гай, джигит.
Не спущу я с себя твою суженую, джигит.
Уйду в свои долы, наберусь я резвости,
Когда я в твоих руках, печалюсь и горюю.
Гай, гай, джигит, гай, джигит.
Не отдам тебе красавицу, джигит,
Не спущу я с себя твою суженую, джигит.

Джигит говорит:

Буду поить кобыльим молоком, юргам,
Ребра твои покроются жиром, юргам,
Гай, Қара-юрга, гай, Қара-юрга.
Отдай мою суженую, Қара-юрга.
Пусть слезет с тебя моя милая, юргам.
С весны будешь на воле, юргам,
Лишь осенью оседлаю тебя, юргам,
Для лизанья дам тебе соль, юргам,
Для жеванья дам тебе сена, юргам.
Гай, Қара-юрга, гай, Қара-юрга,
Отдай мою красавицу, юргам,
Пусть слезет с тебя моя суженая, юргам.

Қара-юрга отвечает:

Қобылье молоко для жеребят, джигит,
Не желаю быть в твоих руках, джигит,
На, прими свою веревку (петлю), джигит,
Моя пыль тебе в глаза джигит,
Еще прыжок — и я на острове, джигит.

Прыгнул один раз, очутился на горе Ирандык. Второй пры-

жок — перелетел через ледяное море и очутился на острове. Там Кара-юрга и невеста провели свой век. Так говорит народная песня и сказание.

6. «Ҡара юрға» тигән исеме менән Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең «Хәтирәләр» тигән хеҙмәтендә телгә ала (Өфө: Китап, 1996. 41-се б.). Автор биргән ҡыҫҡа ғына мәғлүмәттәрҙән аңлашылыуынса, уға был әҫәрҙең йыр рәүешендә лә, «нуғайҙарҙың тәьҫир»ен кисергән ҡобайыр рәүешендә лә башҡарыла торған һәм бер ни тиклем Рәхилә Теләкәеванан (2-се) Ҡирәй Мәргән яҙып алған версияны хәтерләткән варианты мәғлүм булғанға оҡшай. Ихтимал, ул И. В. Салтыков теркәгән вариантҡа яҡын булғандыр. Сөнки Вәлиди Туған әйткәндәрҙән Ҡара юрға менән уның эйәһе араһында мөнәсәбәт ҡырҡыулашҡаны аңлашыла. Һәр хәлдә, Ҡара юрға:

— Үптермәм дә бей ҡыҙын,
Ҡостормам да бей ҡыҙын, —

тип үҙенең хужаһына һыртындағы ҡыҙҙы бирмәҫкә ҡырталаша.

7. «Ҡара юрға» исеме менән 1943 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районы Темәс ауылында Бикбирҙиндан ҡурайсы һәм йырсы Ғата Сөләймәнов тарафынан яҙып алынған (информаторҙың исеме, йәше күрһәтелмәгән) // БХИ. Өфө, 1954. 1-се том. 194-се б.

«Ҡара юрға»ның шиғри өлөшө үҙенә айырым көйлө боронғо халыҡ йыры булып йөрөй. Шуға күрә ул «Башҡорт халыҡ ижады»ның 1-се томында йырҙар бүлегендә бирелгән, легендаһы ла килтерелгән. Шулай уҡ «Ҡара юрға», йыр булараҡ, 1954 йылда баҫылған «Башҡорт халыҡ йырҙары» йыйынтығына ла ингән. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән.

Әҫәрҙә ваҡиға Шүлгән күле тирәһендә бара. Төп персонаждары: өйөр башы Ҡара юрға, Маҡтымһылыу, бай егет.

Бында ыласынды йылҡы өйөрөнә алмашыу күренеше юҡ. Ҡара юрға (Ҡалған яғы С. Рыбаков версияһын (2-се) хәтерләтә) ҡыҙ йәйләүенә барып, өс көн буйы урманда көтөп ята ла эхирәттәре менән Маҡтымһылыу күренгәс тә, уйнаҡларға, үрәпсергә тотона, шунан ҡыҙҙарҙы алмашлап мендереп алып йөрөй. Нәүбәт еткәс, Маҡтымһылыу менеүе була — уны алып ҡаса ла эйәһенә алып ҡайта. Был вариантта бер аҙ ислам дине йоғонтоһо һиҙелеп ҡала: бай Маҡтымһылыуға шәриғәт йолалары буйынса өйләнә. Байҙың Маҡтымһылыуҙан уландары күп булыуы әйтелә. Уландары барыһы ла бай йәшәй. Уларҙан таралған ырыуҙы «байыулылар» тип йөрөтөр булғандар.

8. «Ҡара юрға» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Үрге Ильяс ауылында 81 йәшлек Шакир Буранғоловтан Ә. Н. Ҡирәев (Ҡирәй Мәргән) яҙып алған // FA, ф. 3, оп. 21/3. 125—126-сы б. Текст шиғыр менән проза аралашыуынан тора. 7-се вариантҡа бик яҡын.

Эйәһе — бай улы. Ҡара юрға — өйөр айғыры. Бай улы үҙенең күҙе төшкән Маҡтымһылыуҙы алып килергә ҡуша:

— «Ялбыр-йолбор ялдарыңды
Уҡалармын, юрғам!
Тыбыр-тыбыр тояғыңды
Дағалармын, юрғам!

Мактымһылыу тигән ҡыҙҙы
Алып килсе, юрғам!» — ти.

«Ҡара юрға» китә, йәйләүгә килеп етә. Йәйләүгә килеп етһә, Мактымһылыу болонға уйнарға сыҡҡан була. Ҡара юрғаны күреп ҡала ла был:

— Туҡтале, бер менеп әйләнәйем, — тип менеп йөрөй башлай. Ҡара юрға ла, ҡыҙҙың уйын белгән кеүек, тегене бер аҙ уйнатып йөрөтә. Шунан һуң ҡапыл башын бора ла үҙҙәренсә яғына саба башлай. Мактымһылыу эште һиҙеп ала, Ҡара юрғаның башын тарта — көсө етмәй мының. Шунан ул Ҡара юрғаға былай ти:

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Һөйөп мендем, юрғам,
Ҡыҙығып мендем, юрғам!
Юрғалатып йәйләүемдән
Алып киттең, юрғам!
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Баш бирмәйсә беләгемә,
Көсөм алдың ҡулдан,
Алып киттең юлдан.
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Кире әйләнеп йәйләүемә
Ҡайт(сы), Ҡара юрғам!

Мактымһылыу күпме инәлеп һораһа ла, Ҡара юрға быны ҡайтармай, төшөрмәй-нитмәй, хужаһына алып ҡайтып бирә. Мактымһылыуҙы бай улы 2-се варианттағы һымаҡ «бикәс» (һүҙлекте ҡарағыҙ) тип атай («Өҫтөңдәге бикәсеңде / Төшөр, Ҡара юрғам!») Бай улы менән Мактымһылыу ҡауыша. Уларҙың пәҫеле байыулылар тип йөрөтөлә.

9. 1965 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районында Мәғәүиз Вахитовтан (1905 йылда тыуған) БДУ талибы Биктимер Шәрипов яҙып алған // БӘФҠ ФФ, 1965 йылғы яҙмалар. Текст прозанан ғына тора. Үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, Ҡара юрғаның өс йылға бер ҡолонлар ҡара бейәнән тыуыуы һәм уның ал бирмәҫ яҡшы атҡа әйләнеүе ентекле хикәйәләнә. Ҡара юрғаның хужаһына кәләшлеккә ҡыҙ урлап алып ҡайтыу эпизоды икенсе төрләрәк. Ҡара юрғаны ҡаҙаҡтар урлап алып киткән була, туй ваҡытында ҡаҙаҡ ҡыҙы Ҡара юрғаға менеп, йола буйынса, сабып сығып китә. Уның артынан ҡыуа төшәләр. Шул ваҡыт ҡара бейәгә атланған егет Ҡара юрға артынан төшә һәм уны ҡыҙы менән бергә ҡайырып алып ҡайта. Ҡаҙаҡтар егет менән ҡыҙ артынан етә алмайҙар.

10. «Ҡара юрға» исеме менән 1966 йылда Башҡортостандың Ейәнсура районы Абзан ауылында Зәйнәғетдин Асылбаевтан (1893 йылда тыуған) БДУ талибы Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов яҙып алған // БӘФҠ ФФ, 1966 йылғы экспедиция материалдары. Текст прозанан ғына тора. С. Г. Рыбаков яҙмаһына бик яҡын.

11. «Ҡара юрға» тигән баш аҫтында 1977 йылда Баймаҡ районы Нигмәт

ауылында ҡурайсы, йырсы, бейеүсе һәм импровизатор Кәрим Дияровтан Рәйсә Ҡашапова яҙып алған. ТТӘИ фольклор фонды.

Төп сюжет һыҙаты тәүге варианттарҙан әллә ни айырылмай.

## ҠУҢЫР БУҒА

1907 йылда Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы Үрге Ильяс ауылында Хәсән Буранғоловтан Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 12/219. 116—129-сы б.; БХИ: Эпос. 1-се кит. 265—273-сө б.

Әҫәр башҡа варианттарҙан сюжет бөтөнлөгө, күләмлерәк булыуы, сағыштырмаса поэтик камиллығы менән айырылып тора. Ҡобайырҙың тексы 1940 йылда М. Буранғолов төҙөгән, тик баҫылмай ҡалған «Башҡорт йырҙары һәм ҡобайырҙары» йыйынтығына индерелгән. Йыйынтыҡтың сигнал данаһы Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге китапханаһында һаҡлана // 8 СФ Б 29.

## I. ТОМҒА ИНГӘН

## ВАРИАНТ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

1. 1969 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районы Асҡар ауылы Мөғәлләм Мирхәйҙәровтан (1900 йылда тыуған) журналист Рәшит Шәкүров яҙып алған. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклор фондында һаҡлана // БХИ: Эпос. 1-се кит. 274—292-се б.

2. «Ҡуңыр буға» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылында 84 йәшлек Ғибадулла Ағишевтан Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 127—131-се б. БХИ: Эпос. 1-се кит. 293—296-сы б.

3. «Ҡуңыр буға» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Түбәнге Ильяс ауылы Ғибдулла Ҡасҡыновтан (йәше күрһәтелмәгән) Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/3. 132—134-се б.

4. «Ҡуңыр буға» исеме менән 1961 йылда Ырымбур өлкәһе Медногорск районы Ырысбай ауылы 73 йәшлек Сәйфулла Хәсәновтан Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 21/6. 49—50-се б. Текст шиғыр менән прозанан тора.

## II. БАШҠА ВАРИАНТ ҺӘМ ВЕРСИЯЛАРЫ

5. «Ҡуңыр буға»ның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе беренсе тапҡыр Р. Г. Игнатьев «Канур буга» исеме менән «Оренбургские ведомости»ның 1865 йылғы һанында баҫтырған.

Эпостың фабулаһын реферaтив һөйләп сығыуҙан ғибәрәт.

6. «Ҡуңыр буға» исеме менән Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған. Ҡулъяҙманың паспорты тулы түгел (кемдән, ҡайҙа, ҡасан яҙып алыныуы ла билдәһеҙ). 1938 йылда архивҡа ҡабул итеп алыныуы ғына мәғлүм // ҒА, ф. 3, оп. 12/294. 13—14-се б. Текст прозанан тора.

Вариантта башҡорттарҙың бик күп быуаттар элек бөтә Уралда һәм Обь-йылғаһы бассейнында йәшәгәнлектәре хаҡында мәғлүмәттәр бирелә. Урал ар-мыттарындағы башҡорттар Ҡаспий диңгеҙе буйы халыҡтары менән дуҫ йә-шәйҙәр. Бер башҡорт Ҡаспий буйындағы берәүгә ҡыҙын бирә. Ҡыҙҙы быуаҙ тана бирел оҙаталар. Ҡейәү йортона барғас, тана ҡуңыр быҙау килтерә. Уға Ҡуңыр буға тип исем ҡушалар. Тыуған ерҙәрен һағынған һыйыр, Ҡуңыр бу-ғаны эйәртеп, ҡасып китә. Ҡыҙ ҙа, ҡасҡан малдарын эҙләп, атаһы йортона ҡайта ла малдарын кейәү йортона кире ҡыуып алып китә. Шунан тыуған йәй-ләүен, Уралын һағынып, ҡасып ҡайтҡан Ҡуңыр буға хаҡында йыр сығарған, ти.

7. FA, ф. 3, оп. 12/294. 15—17-се б. Текст шиғыр менән проза ҡушылышы-нан тора. Ҡемдән, ҡайҙа, ҡасан яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәттәр бирел-мәгән, 1938 йылда архивҡа алынғанлығы ғына билдәле. Йөкмәткеһе менән 3-сө вариантҡа яҡын.

8. «Ҡуңыр буға» исеме менән Шаһишәриф Ҡасимовтан Сәғит Мирасов яҙып алған. Ҡайҙа, ҡасан яҙып алыныуы, яҙҙырыусының йәше хаҡында мәғлүмәттәр юҡ. 1938 йылда архивҡа алыныуы ғына мәғлүм // FA, ф. 3, оп. 12/294. Текст шиғыр менән прозанан тора. Йөкмәткеһе, эпизодтары йәһәтенән Хәсән Бу-ранғолов версияһының бер вариантынан ғибәрәт.

9. «Ҡуңыр буға»ның үҙенә махсус көйлө халыҡ йыры булып йөрөгәә тексы 1938 йылда Башҡортостандың Белорет районы Исмаҡай ауылы Ноғомаҡ Тайбановтан яҙып алынған (яҙҙырыусы һәм яҙып алыусыһы хаҡында мәғлү-мәттәр юҡ) 1954 йылда нәшер ителгән «Башҡорт халыҡ ижады»ның 1-се тә-мына индерелгән, аҙаҡта, йырҙың легендаһы рәүешендә, «Ҡуңыр буға»ның ҡыҫ-ҡаса йөкмәткеһе бирелгән. Ошо уҡ текст «Башҡорт халыҡ йырҙары» йыйын-тығында ла баҫылған (Өфө, 1954).

10. «Ҡуңыр буға» исеме менән 1962 йылда Әбйәлил районы Асҡар ауылы Мөғәлләм Мирхәйҙәров (1900 йылда тыуған) тарафынан тапшырылған. FA: ф. 3, оп. 26/2. 1—303-сө б. Текста шиғыр проза менән аралашып килгән. Образ-дарының бирелеше, сюжет ҡоролошо яғынан 1-се версияһына яҡын тора. Әммә был яҙманың ҙур ғына кәмселектәре бар. Унда ваҡиғаларҙың эҙмә-эҙлелеге һаҡланмай, эҫәргә бәйләнеше булмаған боронғо тарих, этнографик күренештәр, хатта айырым һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыуҙар менән мауығып китеүҙәр урын алған.





## ИҪКӘРМӘЛӘР

[1] Боронғо дәүерҙе сағылдырған был әҫәрҙәге ҡарт менән ҡарсыҡтың Йәнбирҙе һәм Йәнбикә тигән исемдәр менән аталыуында уларҙың ырыуҙы башлап ебәреүселәр икәненә ишара яһала.

[2] Боронғо кешеләр үлемде (әжәлде) йән алыусы күҙгә күренмәҫ бер яуыз зат тип уйлағандар.

[3] Боронғо йола буйынса йәнлекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә ҡанды һыуһын итергә, йәнлектең баш-йөрәген ашарға яраған, ә бала-саға өсөн был ҡәтғи тыйылған булған.

[4] **Ҡабырсаҡҡа (т. н. — ҡапырсаҡҡа)** — ҡабырсаҡтан (ихтимал гөбөргәйел көбөнән) яһалған һауытҡа. Бында ҡан йә боронғолар бүтән эсемлек һаҡлай торған һауыт күҙ уңында тотола.

[5] Т. б.: «Башына етеп буламы?»

[6] Т. б.: «...Уйлаған да шуларҙы саҡырған, ти. Урал йыйылған йәнлеккә, ҡош-ҡортҡа ҡарап, былай тигән, ти».

[7] Т. н.: «Тыу булып».

[8] Т. б.: көйгәндәр; кимәйсе — т. б.-ла «килмәйенсә»; әйтмәйсе — т. б.-ла «әйтмәйенсә».

[9] Башҡорт мифологияһында Ай менән Ҡояш ҡатын йәки ир-егет образында һүрәтләнә. Мәҫәлән, һыуға барған үкһеҙ етем ҡыҙҙы йәлләп, үҙенә тартып алған Ай егет образында бирелә. (БХИ: Риүәйәттәр, легендалар № 7). «Урал батыр» поэмаһында иһә Ай менән Ҡояш ҡош батшаһы Самрауҙың ҡатындары рәүешендә һүрәтләнә.

[10] **Һомай** — Урал-Алтай, Урта Азия, Яҡын Көнсығыш халыҡтары фольклорында киң таралған мифик ҡош образы. Уны «бәхет ҡошо» тип тә йөрөтәләр. Боронғо ырымдар буйынса, Һомай ҡоштоң күктән ут булып осоп үткәнен күргән кеше бәхетле була тип иҫәпләгән.

[11] **Ап-аҡ һаҡаллы ҡарт** — фольклорҙа йыш осрай торған изгелекле ҡарт. Боронғораҡ дәүергә ҡараған ҡомартҡыларҙа Ҡорҡут (төркмән, әзербайжан фольклорында), Төкләҫ (ҡаҙаҡ, башҡорт, ҡарағалпаҡ фольклорында) яңғыҙ юлаусыны һәр төрлө хәүефтән ҡурсыусы изге ҡарт итеп һүрәтләнә. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең бер төрөндә ошо ҡарт функцияһын ислам динендә киң таралған әүлиә һәм Хызыр Ильяс образдары үтәй башлай.

[12] Донъяла бөтә йән эйәләренең татыулығы — бик борондан килгән хыял. Бөтә тереклек гармонияһы мотивы донъя халыҡтары фольклорында киң урын алған. Ул хатта ислам дине легендаларына ла үтеп ингән. «Урал батыр» — бөтә йән эйәһе татыулығы идеяһын эҙмә-эҙлекле һөрөүсе әҫәр.

[13] Уңға китһәң, юл буйы —
Илау-һыҡтау төн буйы.

Ҡарт оҙон юл буйына төнөн илау-һыҡтау ишетелерен иҫкәртә. Т. б.-ла «уңға китһәң, төн буйы — илау-һыҡтау йыл буйы».

[14] **Аҡһаҡал** — был әҫәрҙә «батша яраны», Аҡһөйәк («вельможа») мәғәнәһендә ҡулланылған Т. б.: «яран» тип үҙгәртелгән.

[15] **Һырт ҡаплаған сәстәрен** — сәсте ҡаплай торған берәй этнографик нәмә күҙ уңында тотола буғай (т. б.: «шырт ҡаплаған». 1. Ҡыҙға ҡарата улай тимәйҙәр; 2. Сәсте шырт ҡапламай).

[16] Төп нөсхәлә, ни өсөндөр, «алла» тип алынған. Осорона ҡарата йә «илаһ» йә «тәңре» кәрәк. (Элекке баҫмаларҙағыса «тәңре» тип ҡалдырылды).

[17] **Ҡара ҡоҙғон ҡошо бар.** (Т. н.-лә «Ҡара ҡуҙған»). Борон башҡорт ырыуҙарының һәр берсһенең үҙ билдәһе — ораны, ағасы, ҡошо булған. Ҡара ҡоҙғондоң да тотем ҡош булып йөрөгән булыуы бик ихтимал. Был йәһәттән 1959 йылда Курган өлкәһендә йәшәгән ялан-ҡатай башҡорттары араһында СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үткәргән фольклор экспедицияһы бик ҡыҙыҡлы материал алып ҡайтты. Фольклорсы К. Мәргән (Ә. Н. Кирәевтың) мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ҡатай ҡәбиләһенең бер ырыуы «ҡоҙғон ҡатай» тип аталған (Башҡорт халыҡ ижады материалдарын йыйнау буйынса ҡулланма / Төҙ. Ә. Н. Кирәев. Өфө, 1967. 6-сы б.). Ҡобайырҙа тотем һаналған ҡош (ҡоҙғон) хөрмәтенә байрам үткәреү, ҡорбан килтереү һүрәтләнә.

[18] **Алма биреп йәки алма сөйөп йәр һайлау** — Көнсығыш халыҡтары фольклорында киң таралған күренеш. Боронғо грек эпосы «Илиада»ла Паристың Афродитаға алма биреүе, шул арҡала аллалар араһында ыҙғыш сығыуы хикәйә ителә. Алма биреп йәр һайлау һәм үҙенең шартын үтәү эпизоды «Аҡбуҙат» эпосында һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә осрай.

[19] Ят. — т. н.-лә «һис».

[20] Әжәлде — т. б.-ла «Үлем». Ғөмүмән, т. н-лә был синонимдар алмаш-тилмәш ҡулланылған.

[21] Т. б.-ла: Ирмен тигән ир-батыр
Шып-шым ҡарап торормо?

[22] Т. б.-ла: «тигән». Стилистик яҡтан «ошо» уңышлыраҡ, сөнки тура телмәр алдынан «әйткән, ти» тигән ремарка бар.

[23] Т. б.: Батша быны ишеткәс,
Ҡыҙарынған, бүртенгән,
Ҡысҡырынған, екергән.

[24] Т. б.: «Ҡаты фарман биргән, ти».

[25] Т. б.: был һөйләм төшөп ҡалған.

[26] Т. б.: «Ышанһа ла мөгөҙгә».

[27] Өҫкө тешең үҫмәйенсә — йыртҡыс януарға хас тешең үҙгәреп, ҡайтанан үҫмәйенсә, йәғни ҡурҡыныңһыҙ йорт хайуанына әйләнгән хәлендә ҡалып...

[28] Үҫмәйсә — т. б.: айҡанма.

[29] Һуңғы өс юл. — т. б.-ла юҡ.

30 **Ал(ы)п (төр.)** — батыр. «Алп» һүҙе — эпос батырҙарҙың көрәш алдынан бер-береһенә әйтә торған һүҙе.

31 Т. б.: «Бында тороп ҡал, егет!»

32 Т. н.: «Төшкәндә».

33 **Ҡәһҡәһә (ғәр.)** — шарҡылдап көлөүсе. Ҡәһҡәһә «Аҡбуҙат» әҫәрендә лә бар. Унда ул, үҙ халҡына хыянат итеп, һыу аҫты батшаһы Шүлгән яғына күскән ер улы образында бирелгән.

34 **Зәрҡум** — был исем ғәрәпсә «зәрҡ» тигән һүҙҙән яһалған булһа кәрәк. Зәрҡ — хәйлә, ике йөҙлөлөк. Зәрҡум (ағыулы ағас; үлтергес эсемлек) һүҙен үҙгәртеп ҡулланыуҙан булырға мөмкин. Исемдәрҙең икеһе лә эпостағы Зәрҡум образының характерына бик йәтеш килеп тора.

35 Т. б.: «Ғәйепһеҙ болан ишене».

36 **Самрау** — ҡош батшаһы, Сәмрегош. Башҡорт фольклорында ғына түгел, башҡа төрки халыҡтар ижадында ла йыш осрай торған изгелекле мифик ҡош образы.

37 Боронғо башҡорт мифологияһында йөҙ йәшкә еткән йылан — аждаһа, мең йәшкә еткәне юха була тип ҡаралған. Юхаға әйләнгән йылан һылыу ҡыҙ образына ла, егет ҡиәфәтенә лә керә алыр булған, имеш. Йөҙ йәше тулып, аждаһаға әйләнгән йыланды ҡайсаҡ аҡ болот килеп, күлдән күтәреп алып, мифик Ҡафтау аръяғына илтеп ташлай икән, ти. (ҡар.: БХИ. 1 т. Йола фольклоры. 50—51-се б.).

38 **Ынйы башлы таяҡ** — тәхеттә ултырыусы хандың йәки батшаның хакимлыҡ билгеһе булған символик таяҡ.

39 **Тик** — Һиндостан, Ява утрауының дымлы, һаҙмат урындарында үҫә торған, аҡ сәскә атыусы ағас. Тик ағасының диаметры 1,5 метрға, ә оҙонлоғо 300 метрға тиклем етә. Ул ныҡ, ҡаты булғанлыҡтан, карантар төҙөү, мебелдәр яһауҙа киң ҡулланыла. «Урал батыр» поэмаһында томбойоҡ сәскәһен тик ағасы сәскәһе менән сағыштырыу боронғо көнсығыш әҙәбиәте йәки башҡорттарҙың Һиндостан менән ниндәйҙер бәйләнеше аша нигән деталь булырға тейеш.

40 Т. б.: «аулап ҡарайым».

41 Т. н.: «Юлда осорап».

42 **Әзрәҡә (ғәр.)** — тура мәғәнәһе: «күгәреү», «зәңгәрләнеү». Бында — кире мифик зат.

43 «Шах» һүҙе — т. н.: «батша» һүҙенең синонимы рәүешендә ҡулланылған.

44 Т. б.: «ҡул ҡаушырып тормайыҡ».

45 **Аҡбуҙ** — мифик толпар. «Аҡбуҙат» эпосында ул айырыуса әүҙем персонаж булып һүрәтләнә.

46 Башҡорттарҙың боронғо космогоник ҡарашын сағылдырған легендаларҙа һәм башҡа эпик әҫәрҙәрҙә Етегән йондоҙ — Аҡбуҙатты урларға барып та, тота алмаған һәм, кире ҡайтырға ҡурҡып, күктә тороп ҡалған ете дейеү тип аңлатыла. Мифтарҙа Етегән йондоҙ Һарат менән Буҙатты (Аҡбуҙатты) ҡыуып йөрөүсе алты бүре рәүешендә һүрәтләнә. Етенсеһе шул аттар бәйләнгән тимер ҡаҙыҡ, ти.

47 Т. н.: «булған».

48 Т. б.: «баш».

49 **Алап һалып** — ҡотҡо (оран) һалып, ҡотортоп.

50 **Ҡот тау** — мифик тау (йыйын ҡороу, кәңәш-төйөш итеү, ғибәҙәт ҡылыу урыны).

[51] **Кэйтәндәр менән биҙәлгән (Этн.)** — сәсте уҡалап, биҙәү йәки ҡатынҡыҙ кейә уҡалы торған баш кейеме.

[52] Т. н.: «Аҡбуҙат» эпосы менән уртағыраҡ был тасуирлама т. н.-лә юҡ.

[53] **Ҡаф тауы** — мифик тау (бер үк Ҡавказ түгел, ә Куфи — Ҡаф — Ираҡтағы тау).

[54] **Батман** — 1. Йүкә ағас олононы соҡоп яһалған цилиндрик һауыт, тәпәндән ҡалҡыуыраҡ була. 2. Боронғо ауырлыҡ үлсәм берәмеге.

[55] Туфан ҡалҡыш, донъяны һыу баҫыу легендаһы халыҡтар ижадында киң таралған. Дини риүәйәттәрҙә лә Нух (Ной) пәйғәмбәр, һәр төр йән эйәһенән бәрәр пар алып, кәмәгә ултыра һәм уларҙы ҡотҡарып ҡала.

[56] **Ямантау** — Көньяҡ Уралдағы (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында) тау. Бейеклеге 1638 метр.

[57] Т. н.: «аллалай».

[58] **Эркеттең** — эркелдерҙең, тупланың.

[59] **Оңҡар-шоңҡар** иттерҙең — соҡор-саҡырга әйләндерҙең мәғәнәһендә.

[60] Т. б.: Һомай тоҡомо (текста аҡҡош Һомайҙың ғына түгел, Уралдың да тоҡомо булыуына ишара ителә).

[61] Т. н.: «Тип үгеҙ ҙә әйткән, ти» (шул көйө ҡалдырһаң, бер тура телмәргә икс ремарка тура килә).

[62] Элек йыл иҫәбен ун икс йәнлек (сысҡан, сусҡа, эт, тауыҡ, маймыл, ҡуй, йылҡы, йылан, ылыу, ҡуян, барс, һыйыр) исеменән торған календарь буйынса алып барғандар. Шул ун ике йыллыҡ бер цикл — мөсәл тип йөрөтөлгән (Ҡар.: БХИ: 1 т. Йола фольклоры. 17—18-се б.)

[63] Т. н.: «тигән һүҙен».

[64] **Ирәмәл** — Көньяҡ Уралдағы (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә) 1584 метр бейеклегендәге тау.

[65] **Ҡырҡты** — Көньяҡ Уралдағы (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә) 1114 метр бейеклегендәге тау.

[66] **Иҙел (төр.)** — йылға. Бында һүҙ Ағиҙел тураһында бара.

[67] Әҫәргә һуңғыраҡ дәүерҙә тыуған башҡорт халыҡ йыры «Йәмле Ағиҙел буйҙары» килеп ингән.

[68] **Яйыҡ** (Урал йылғаһы. Яйыҡ 1775 йылда Екатерина II батша указы менән Урал исеменә үҙгәртелгән), **Нөгөш, Һаҡмар, Иҙел** (Ағиҙел) йылғаларының исеме шулай аңлатыла. 1956 йылда Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тороусы 1944 йылға тиклем Башҡортостандың Учалы районы Имәнгол ауылында йәшәгән) Исмәғил Рәхмәтуллиндан Ә. И. Харисов тарафынан яҙып алынған һәм шул яҡтарҙа башҡа кешеләрҙән ишеткән мифологик мотивтар, эпизодтар һәм деталдәр менән бер аҙ тулыландырылып, беренсе тапҡыр 1956 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналының 5-се һанында «Урал батыр» исеме менән баҫылған. Артабан «БХИ» йыйынтығына индерелгән (2-се том. Өфө, 1959. 13—19-сы б.). (Эпос. 1-се китап. Өфө, 1972. 135—144-се б.).

[69] **Янғантау** — Башҡортостандың Салауат районындағы тау исеме. Хәҙер Янғантауҙа ер аҫтынан сыҡҡан шифалы эҫе быу менән ауырыуҙарҙы дауалау санаторийы эшләй.

[70] Бында һүҙ Ағиҙел ҡойған Ҡама йылғаһы хаҡында бара.

[71] **Ер майы** — нефть.

[72] Башҡортостандың хәҙерге Бөрйән районында Ырғыҙлы йылғаһы һәм Ырғыҙлы ауылы бар. Легендаларға, риүәйәттәргә ҡарағанда, шул ерҙә борон Мәсем ханға буйһонған Ырғыҙ исемле бейҙең йәйләүе булған, ти.

[73] Бөрйән районында Иҫке һәм Яңы Тарыуал (яңыса: Иҫке һәм Яңы Усман) ауылдары бар. Риүәйәттәрҙә, Иҫке Тарыуалға борон Ырғыҙ бейҙең күршеһе Тарыуал (эпоста Тарауыл) ҡарт нигеҙ һалған, тиелә.

[74] **Һыҙма** — 1. Боронғо һунар уҡтарының бер төрө; 2. Саҡмалы мылтыҡ.

[75] Ҡеше үлгәндән һуң өсөн (өсөнсө көнөн), етеһен, ҡырҡын үткәреү йолаһы башҡорттарға ислам дине аша кергән. Дини хөрәфәттәргә ҡарағанда, үлгән кешенең рухы өсөнсө, етенсе, ҡырҡынсы көндәрҙә «теге» донъянан килеп китергә тейеш. Үлгән кешенең рухын бәхилләштереү өсөн, уның яҡындары аят уҡытып, ҡунаҡ һыйлап, хәйер өләшергә тейеш.

[76] Т. н.: «Йәмелдәй (?). Бында «БХИ: Эпос». 1-се китаптағыса бирелде.

[77] **Аҡ батша** — «изгелекле батша» мәғәнәһендә.

[78] Боронғо башҡорттар, күп кенә башҡа төрки халыҡтар (ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ һ. б.) кеүек, мал-тыуарҙың именлеген, үрсемен үҙендә тотҡан ҡотло мал булыуына ышанған. Ҡотло малды ҡулдан ысҡындырыу — мал бәкетенән яҙыу менән бер һаналған.

[79] **Күгәрсен тун** — башҡорт фольклорында киң таралған зәңгәр күк төҫөндәге тылсымлы тун.

[80] Бөрйән районының Шүлгән ауылы эргәһендә Йылҡысыҡҡан тигән бер бәләкәй күл бар. Легендаларҙа ошо күлдән сыҡҡан һыртлы ҡола (йәки ала) йылҡы малы — тарпандар сыҡҡан тиелә. «Аҡбуҙат» поэмаһындағы ваҡиға ошо күлгә бәйләнгән.

[81] **Урал тауы сыҡмаған** — халыҡ тау ҙа, таш та тыуа (сыға), үҫә тип белгән.

[82] Бөрйән районында мәмерйәһенән һырттағы Йылҡысыҡҡан күлен Шүлгән күле тип тә йөрөтәләр. Был күл хаҡында бик күп легенда таралған. Ул «Урал батыр» эпосында ла һүрәтләнә. Легендаларҙа ошо күлдә һыу аҫты батшаһы Шүлгән йәшәй тиелә.

[83] «Урал батыр» поэмаһында, Урал батыр үлгәндән һуң, Аҡбуҙат күккә күтәрелә һәм яҡты йондоҙға әйләнә.

[84] **Шыбаға сығарып биргән** — «һайлап тормай, йәрәбәләп, өлөш сығарып биргән» мәғәнәһендә.

[85] **Һарайҙа үҫкән ҡыҙҙар ҙа** — күгәрсен сүрәтенә инеүсе һарай ҡыҙҙары, Нәркәсте оҙатып йөрөүселәр.

[86] **Шүлгән күле батшаға** — Шүлгән күленең батшаһына.

[87] Т. н.: маң.

[88] **Зур (фар.) дошман** — ғәйрәтле дошман тип, күл батшаһы Һәүбәндең Урал батыр затынан булыуын таныуын аңғарта.

[89] Т. б.: «Әле».

[90] Т. б.: «Яратып, үҙ күрепме».

[91] Т. б.: «ҡыҫташмаған».

[92] **Барымта** — мал-монаят талап алыу маҡсатында баҫҡынсылыҡ итеү.

[93] **Ғәйеп ирәндәр (дини)** — күҙгә күренмәҫ ирҙәр, кешеләрҙе ҡурсалап, һәр төрлө бәләнән һаҡлап йөрөүсе изге йәндәр (Хызыр Ильяс һ. б.).

[94] **Урал япрағы** — Уралдың армыттарынан (үҙәк һыртынан) ситтә ятҡан тармаҡтары мәғәнәһендә.

[95] Бөрйән районында Аҡбулат исемле ауыл бар. Легендаларға ҡарағанда, ошо ауыл ерендә борон Аҡбулат бей йәйләүе булған.

[96] **Тархан (мон.)** — ырыуҙаштары араһында социаль һәм иҡтисади өҫтөнлөк менән файҙаланған, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған кеше. Тарханлыҡ грамота-

ларын Башҡортостанда беренсе башлап татар-монгол хандары тараҡкан. Башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, тарханлыҡ грамотаһы батшаға яҡшы хеҙмәт күрһәткән башҡорт феодалдарына ла бирелер булған.

[97] **Ҡәҙер төнө (дини)** — «күк ҡабағы асылған төн». Дини мифология буйынса, йылына бер тапҡыр ғына була торған ошо төндә теләк теләп ҡалған кеше теләгенә ирешер, имеш, ти. (Ҡар.: БХИ. 1 т. Йола фольклоры. 126—127-се б.).

[98] **Нәҙер әйтеү (дини)** — көтөлгән эш уңышлы барып сыҡһа, фәләнсә изгелек эшләр инем (мәсәлән, берәйһенә күп кенә хәйер бирер инем) тип аллаға һүҙ бирен ҡуйыу.

[99] Т. н.: «Ҡайһылай»; т. б.: «Нисек».

[100] **Берәүҙең** — бында Мәсем хандың ҡыҙы Айһылыу күҙ уңында тотола.

[101] **Үлем йоҡоһо баҫҡан** — үлем (әжәл) кешене йоҡларға мәжбүр итә тигән ышаныу бар.

[102] **Сура батырҙың «ҡанына һыуһаған дошманы»** — Мәсем хан (Тараyыл ҡарттың Һәүбәнгә һөйләгән хикәйәтен хәтергә төшөрөгөҙ).

[103] Т. н.: «һөйҙәнеп».

[104] Т. н.: «йөрәктән».

[105] Т. н.: Урҙаусының берәүһене (?)
Мине урҙаған да шу берәү
Булып сыҡты белгән һуң.
Т. б.: Урлаусының тап үҙе
Мине урлаған шул берәү
Булып сыҡты, белгән һуң;

[106] **Хызыр бәйғәмбәр** — ислам диненә тиклем илаһтар хисабында изгеләштерелгән зат. Ҡөнсығыш халыҡтарында, шул иҫәптән төркиҙәрҙә, ул уңыш илаһы. Шуға ла фольклорҙа, инаныс-инанмыштарҙа Хызыр (йәки Хызыр Ильяс) йәшел сапанлы, йәшел таяҡлы (үсемлек төҫө), аҡ сәлләле, аҡ һаҡаллы (аҡыллылыҡ, изгелек төҫө) ҡарт итеп кәүҙәләндерелә. Хызыр Ильяс сәфәр сығыусыларға, аҙашҡандарға, тоҡкондарға ярҙам итә, ти. Башҡортта ошондай алғыш (йыры) бар.

Сит илдәргә сығып йөрөгәнеңдә,
Хызыр Ильяс булһын юлдашың,
Хызыр Ильяс булһа, һай, юлдашың,
Мең дошманға тороp бер башың.

[107] Был хаҡта 18-се аңлатмала әйтелде.

[108] Был өҫтәмә т. б. буйынса бирелә.

[109] Т. н.: «Тән үҫтереп ҡапырсаҡтан».
Т. б.: «Тән йәйер ҡабырсаҡ та».

[110] Ерҙән сыҡҡан шишмәнән Бүтән юлын ҡуймамын — «Бүтәнсә Шүлгән күленән бер шишмәгә ағып төшөргә лә юл ҡуймаясаҡмын» мәғәнәһендә.

[111] Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй (Шүлгән) ауылы эргәһендә һуңғы йылдарҙа исеме бөтә донъяға танылған мәмерйә бар. Легендалар буйынса, ул Урал батырҙың Аҡбуҙат тигән толпарына һыу батшаһы төҙөткән торлаҡ булған. 1991 йылда Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡытыусыһы Вәлиева Асиянан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған легенда буйынса, әлегәсә Шүлгәнташта әлдән-әле Аҡбуҙат рухы (өрәге) күренә, ти.

[112] Бында һүҙ ярғанат тураһында бара. Легендаларҙа ярғанаттар — иленә хыянат иткән ер улынан таралған йән эйәләре, тип аңлатыла.

[113] **Ырғыҙлы** — Бөрйән районы ерендә Ырғыҙлы тигән йылға, ауыл бар.

[114] **Яйыҡ** — бында Урал батырҙың улы. Сура батыр Урал батырҙың ейәне. «Сура батыр» исемендә йөрөгән ҡобайыр ҙа бар.

[115] **Төкләç** — ырыуҙарҙы ҡурғаусы изге ҡарт образы. Ул төрки халыҡтар фольклорында киң таралған. «Аҡбуҙат» эпосында ул Яйыҡ батыры итеп һүрәтләнә.

[116] Алмас батыр хаҡында тарихи һәм фольклор материалдары әлегә билдәле түгел.

[117] Һүҙ ҡыпсаҡ ҡәбиләһе башлығы легендар Ҡыпсаҡ тураһында бара. Фольклорҙа ырыу, ҡәбилә этнонимын берәй батыр исеменә бәйләү йәки батыр исеме менән ырыуҙы йәки ҡәбиләне атап йөрөтөү — ғәҙәттәге күренеш. Бында Ҡыпсаҡ Иҙел батыры тип әйтелә. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе — иң эре башҡорт ҡәбиләләренең береһе. Был ҡәбилә башҡорттары башлыса Башҡортостандың көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә йәшәйҙәр. Элек ҡыпсаҡтарҙы Европа халыҡтары ҡомандар тип, ә урыҫтар половецтар тип атап йөрөткәндәр. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ҡыпсаҡтар X—XI быуаттарҙа Яйыҡ менән Волга йылғалары араһындағы ҙур территорияла йәшәгәндәр, XI быуатта улар Ҡыпсаҡ (Дәште Ҡыпсаҡ) дәүләтен төҙөйҙәр. XIII быуат башында татар-монгол баҫҡынсылары был дәүләтте емерә. Ҡыйратылған ҡыпсаҡ ырыуҙары төрки халыҡтар (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, татар һ. б.) составына инеп йотолалар (Ҡар.: 166-сы иҫк.).

[118] **Ҡатай** — борондо башҡорт ҡәбиләһе исеме менән аталған батыр, ҡәбилә башлығы. Бында ҡатай ҡәбиләһенең Ирәмәл тауы тирәһендә йәшәгәнлеге аңлашыла. Хәҙерге көндә ҡатайҙар Башҡортостандың Белорет районында (Инйәр ҡатай, йәки Оло ҡатай), Балаҡатай районында (Бала ҡатай) һәм Ҡурған өлкәһендә (Ялан ҡатай) йәшәйҙәр. Боронғо эпостың ишара итеүенә ҡарағанда, ҡатайҙарҙың элек Ирәмәл тирәһендә лә йәшәгәнлектәре күренә.

[119] **Тамъян** — боронғо башҡорт ҡәбиләһе исеме менән аталған батыр, ырыу башлығы. Бына шул образда ул «Ҡусәк бей» поэмаһында ла һүрәтләнә, ә «Аҡбуҙат»та Тамъян Тора (архивтағы нөсхәлә — «Тара») башлығы тип әйтелә. Бында һүҙ Башҡортостандың хәҙерге Ҡөйөргәҙе, Мәләүез райондарындағы Тор йылғаһы буйындағы тамъян башҡорттары хаҡында бара булһа кәрәк. Тамъяндарҙың күпселеге Башҡортостандың Әбйәлил, Белорет райондарында йәшәй.

[120] **Ирәндек** — Көньяҡ Уралдағы (Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндәге) тау. Бейеклеге 987 метр. Ирәндек батырҙың ҡайһы ырыуҙан икәнлеге хаҡында фольклор материалдары мәғлүмәт бирмәй.

[121] **Юрматы** — боронғо башҡорт ҡәбиләһе исеме менән аталған батыр, ырыу башлығы. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, беҙҙең эраның VIII быуаттарында юрматыларҙың бер өлөшө мадъяр ҡәбиләләре менән бергә көнбайыш Европаға (Паннонияға) күсеп киткән һәм венгр халҡының ойошоуында билдәле роль уйнаған. Юрматыларҙың күпселек өлөшө Башҡортостандың Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш, Федоровка, Ишембай райондарында йәшәй.

[122] **Табын** — боронғо башҡорт ҡәбиләһе исеме менән аталған батыр, ҡәбилә башлығы. Табындарҙың ҙур өлөшө Башҡортостандың Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Ауырғазы, Учалы райондарында, шулай уҡ Һамар өлкәһендәге Ҡәрәлек, Ырғыҙ йылғалары буйында, Һарытау өлкәһендәге Ҡәмәлек йылғаһы тирәһендә һәм

Ырымбур өлкәһендә йәшәйҙәр. Был осраҡта һүҙ Өршәккә ҡойоусы Үҙән йылғаһы буйында йәшәгән табындар хаҡында бара булһа кәрәк.

[123] Борон халыҡ медицинаһында яраға ат күбеге һөртөү ҡулланылған. Инаныстар буйынса, ат ен-шайтанды күрә. Уның тиренән яуыз рухтар, шул иҫәптән сир-зәхмәт рухтары шөрләй; ат күбеге күҙ тейеүҙән, ен һуғыуҙан һаҡлаған. Ат тире йәки күбеге менән һуғарылған сыбыртҡы менән һуҡһаң, йылан шунда уҡ үлә тигәндәр.

[124] Яралы Һомай ҡоштоң һөйләгәндәре асылда «Урал батыр» поэмаһының һуңғы эпизодтарының һәм беҙгә килеп етмәгән өлөшөнөң йөкмәткеһен ҡыҫҡаса ҡабатлауҙан тора.

[125] Т. н.: «әсәй»: т. б.: «өләсәй».

[126] «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосының байтаҡ варианттарында Мәсем ун ике башҡорт ырыуын берләштергән ынғай хан итеп һүрәтләнә. Бында иһә, ғөмүмән, хандар һәм уларҙың ҡуштандары (ә улар аҡһаҡалдар тип аталған) антипатия менән телгә алына.

[127] **Ете батыр** — башҡорт фольклорында киң таралған ете ырыу башлыҡтары образы.

[128] Аҡҡошҡа һунар итеү элек-электән тыйылған. Боронго башҡорттарҙың ҡарашы буйынса, аҡҡош — изге ҡош.

[129] Т. н.: «Йәш ҡыҙҙығым һаҡтанып».

[130] **Асылыкүл** — Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндәге күл. Майҙаны — 18 кв. км.

[131] Эпостың 1843 йылда В. И. Даль тарафынан баҫылған вариантында ла Заятүләктең атаһы Сәмәр хан тип аталған. Хәҙергә билдәле булған башҡа варианттарҙа был исем осрамай.

[132] Асылыкүл хаҡында таралған легендаларҙа һыуҙың нык тулҡынланыуы, ташыуы күл эйәһенең нимәгә булһа ла асыуланыуынан килә тип аңлатыла.

[133] Легендаларға ҡарағанда, Заятүләк аты таҡырлап бөткән ергә ҡабат үлән үҫмәҫ булған. Шуға күрә был урынға Ҡашҡатау тигән исем бирелгән, тиҙәр.

[134] **Балҡантау** — Асылыкүлдән 20—30 саҡрымдар алыҫлыҡтағы тау (Дәүләкән районында). Балҡан исемендәге тау Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районында ла бар.

[135] Күлдән мал сығыу күренеше халыҡ эпосының башҡа әҫәрҙәрендә лә (мәҫәлән, «Аҡбуҙат»та, «Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһында) бар.

[136] Асылыкүл һәм Дим буйы башҡорттарының легендалары, Балҡантау башында Заятүләк ҡәбере, ысынлап та, бар, тип раҫлай.

[137] **Ҡырғыҙ иле** — Мөхтәр Сәғитов быны: «Элек, Октябрь революцияһына тиклем, ҡаҙаҡтарҙы ҡырғыҙ, ҡыр ҡаҙаҡ тип атап йөрөткәндәр. Был осраҡта ла ҡырғыҙ ҡаҙаҡ мәғәнәһендә ҡулланылған булһа кәрәк», — тип аңлатҡан (БХИ: Эпос, 1-се кит. 307-се б.). Кирәй Мәргән бында Ағиҙелдең түбәнге өлөшөн биләүсе берәй ҡырғыҙ ырыуы хаҡында һүҙ барыуы ихтимал тип иҫәпләй (К. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961. 104-се б.). Беҙҙең ҡарашыбыҙса, бында ысынында бөгөн үҙҙәрен «ҡырғыҙ» этнонимы менән йөрөтөүселәр күҙ уңында тотолған. Фольклор, этнография һәм тарихи материалдар араһында ошо фекерҙе ҡеүәтләрлек мәғлүмәттәр байтаҡ. Был хаҡта иннеш мәҡәләнең һуңғы бүлексәһендә әйтелде.

[138] **Төркөстан** — төрки халыҡтар йәшәгән территория, ил. Был осраҡта Урта Азия.

[139] **Өйҙөрәк** — Асылыкүлдән йыраҡ булмаған йылға.

[140] **Сәрмәсән** — Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.

[141] **Илдәге атай-һатай** — илдәге ир еткән егеттәрҙең аталары. Атайҙарҙы шулай «дөйөмләштереү» (асылда, түбәнһетеп, кәмһетеп әйтеү), ихтимал, матриархат шауҡымылыр. Сөнки ул дәүерҙә атай ғаиләлә даими булмаған. «Ҡырҡ атаның балаһы» төшөнсәһе лә шул дәүерҙән ҡалғанға оҡшай.

[142] Башҡорттарҙың ҡәбилә-ырыу тарихын өйрәнеүсе ғалимдар (мәҫәлән, ҡарағыҙ: Р. Г. Кузеев. Очерки исторической этнографии башкир. Уфа, 1957. С. 50) бөрйән ҡәбиләһе составында байыулы ырыуы башҡорттары булғанлығын күрһәтәләр. Байыулы исеме «Аҡһаҡ ҡола» әҫәренә образ булараҡ килеп ингән. Ул «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың М. Ғафури версияһында ла, «Ҡара юрға»ла ла бар.

[143] «Аҡбуҙат» менән «Күсәк бей» әҫәрендә Мәсем исеме хан тип бирелгән.

[144] Борон башҡорт ырыуҙарының һәр берећенең айырым ағасы, ҡошо, ораны, тамғаһы булған. Мәҫәлән, Асылыкүл тирәһендәге ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттарының ҡошо — ҡарағош, ағасы — ҡарағас, ораны — Салауат, тамғаһы — тәҙрә булған. Ҡаңны ырыуының ағасы — ерек, ҡошо — торна, ораны Тәңре булған. Бына ошондай билдәләре буйынса бер ырыуҙы икенсеһенән айырып йөрөткәндәр (ҒА, ф. 3, оп. 47/1. 66-сы б.; БХИ. 1 т. Йола фольклоры. 275—276-сы б.; Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М.: Наука, 1974. С. 75; Кирәй Мәргән. Тымыҡ күл буйында. Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1974. 256—260-сы б.).

[145] Шүлгән күленән, ғөмүмән һыу төбөнән, мал сығыу мотивы башҡорт фольклорында киң таралған. Был күренеш «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарында айырыуса ентекле тасуир ителә.

[146] 142-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[147] 142-се аңлатманы ҡарағыҙ.

[148] Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә тау һыртлап үткән Ҡуңыр буға юлы тип аталған юл бар. Һаҡмар йылғаһын уң яҡлап, төньяҡтан көньяҡҡа табан үтә. Ул боронғо башҡорттарҙың яу юлы булған тиҙәр.

[149] «Батша түрәләре халыҡҡа тоҙ бирмәгән саҡтарҙа, шул юл буйлап, һис бер нәмәгә эләкмәй, бер йәйләүҙән икенсе йәйләүгә тоҙ ташығандар» тигән юлдар боронғо эпик әҫәргә һуңғыраҡ осорҙарҙа килеп ингән деталдәр булырға тейеш.

[150] Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, элек һундар (хунну) хәҙерге Монголия менән көньяҡ Байкал алды территорияһында үҙ эсендә егерменән артыҡ эре ҡәбиләне берләштергән көсмә халыҡ булған. Һундар беҙҙең эраға тиклемге 3—2-се быуаттарҙа йәшәгән. Ҡәбиләләр башында һайланмыш оло етәксе торған, һундар үҙҙәренә күрше халыҡтар менән йыш ҡына һуғыш алып барғандар. Беҙҙең эраның 1-се быуатында һундар көнбайышҡа табан күсенә башлайҙар. Үҙҙәре менән башҡа халыҡтарҙы ла эйәртеп алып китәләр. Башҡорт эпосына һундар «һун төрөктәре» исеме менән килеп кергән. «Ҡуңыр буға» — боронғо башҡорт ҡәбиләләренең баҫҡынсы һундарға ҡаршы көрәшен сағылдыра биреп ҡуйған берҙән-бер эпос.

[151] Боронғо башҡорттар көтөүгә, йортҡа бәхет-үрсем килтереүсе ҡотло мал булыуына ышанғандар. Ундай малды өлөшлө, йәки ҡотло мал тип йөрөткәндәр. Өлөшлө малдың юғалыуы йәки ҡазаға эләгеүе — ҙур бәхетһеҙлек һаналған. Был осраҡта Ҡуңыр буғаның өлөшлө мал булғанлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

[152] **Йылайыр** — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы йылға, Һаҡмарға ҡоя.

[153] **Таһран (Тегеран)** — хәҙерге Ирандың баш ҡалаһы.

[154] **Йөнтәҫ япраҡтың** — составында йод булған япраҡтың.

[155] **Моһаҡ** — Башҡортостандың хәҙерге Әбйәлил районындағы бер йылға.

[156] **Мал күрке өсөн суҡлау** — мал ҡото итеп инселәү.

[157] Боронғо йола буйынса ситтән мал йә башҡа әйбер алып ҡайтҡанда, уның ҡото, бәхете тороп ҡалмаһын өсөн, ҡайтып еткәнсе артыңа әйләнеп ҡарарға ярамаған. Ошо йола «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға» әҫәрҙәрендә лә сағылған. Унда батырҙар, билдәле бер ергә етмәй тороп, күлдән сығып килеүсе мал тауышына әйләнеп ҡарамаҫҡа тейеш булалар.

[158] **Алатау** — көньяҡ Башҡортостандағы тау.

[159] **Ҡурташ** — Башҡортостандың Белорет районындағы тау.

[160] **Рәз** — Башҡортостандың Белорет районындағы тау.

[161] **Ҡағыташ** — Башҡортостандың Белорет районындағы тау.

[162] **Һарат** — йондоҙ исеме. «Урал батыр» эпосында Һарат күк батшаһы Самрауҙың ҡыҙы Айһылыу менеп йөрөй торған ат.

[163] **Буҙат** — йондоҙ исеме. «Урал батыр»ҙа һүрәтләнгән Аҡбуҙ толпар, Урал батыр үлгәндән һуң, күккә күтәрелә һәм яҡты йондоҙға әүерелә.

[164] Был юлдар «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» әҫәрҙәрендә лә бар.

[165] **Аҡһаҡал** — «Ырыуҙың абруйлы кешеһе» мәғәнәһендә.

[166] «Һигеҙ ҡыпсаҡ йыйылып, Атайсалға килгәне, Ҡаңныға юл биргәне» — бында ҡыпсаҡ менән ҡаңныларҙың ырыу-ара ниндәйҙер килешеүгә өлгәшеүе иҫтә тотола булһа кәрәк (Ҡар.: 117-се иҫк.).




## ҺҮҘЛЕК

*Агяһландырып* — белдереп.

*Аҙаныу* — аптырашта ҡалыу.

*Айбанған* — һиҫкәнгән (бында икеләнгән мәғәнәһендәрәк).

*Айбар* — ташып торған ғәйрәт (дарман).

*Айбарланыу* — ғәйрәтләнеү.

*Ай-вайына ҡалдырмай* — (йыланға) ҡаршы тора алмай.

*Айлыҡ юл* — юлдың оҙонлоғон ваҡыт оҙонлоғо менән билдәләгән замандарҙа ҡулланылған үлсәм. Бындай үлсәмде ҡулланғанда, йәйәүленең йә аттың уртаса тиҙлеген иҫәпкә алғандар.

*Айыра күргән* — айырым-асыҡ күргән.

*Айырмайсы (һөйл.)* — айырмайса.

*Айырһыҙ* — ҡыйынлыҡһыҙ.

*Айышытым* — айышына төшөндөм, аңланым, төшөндөм.

*Алап* — ризыҡ һаҡлай торған ҡабыҡ (ҡайыры юнылған ҡалын йүкәнән яһалған) һауыт.

*Алар (һөйл.)* — улар.

*Алдарын салып* — алдарына төшөп.

*Алтмыш теүәл* — «60 баш йылҡы малын берләштергән өйөр» мәғәнәһендә.

*Аңа (һөйл.)* — уға.

*Апкиткән (һөйл.)* — алып киткән.

*Апташлау (һөйл.)* — алып ташлау.

*Арҡадаш (төр.)* — таяныс, терәк, дуҫ, хеҙмәттәш.

*Арлы-бирле йөрөйҙәр* — тегеләй ҙә былай ҙа (үтеп-һүтеп) йөрөйҙәр.

*Арлы-бирле халыҡ йыйылып бөткәс* — 1. ваҡ (ҡара) халыҡ йыйылып бөткәс; 2. халыҡтың бер аҙы йыйылыуға.

*Арыҫ та* — арыҫлан да («матай ҙа» тигән кеүек).

*Асмарланың* — дусар иттең мәғәнәһендә.

*Аҫҡаҡ (һөйл.)* — аҡһаҡ.

*Ат яратыу (йәки ат таныу)* — бәйге өсөн ат һайлап, шуны билдәле режимда тәрбиәләү (ҡар.: БХИ. 1-се том. Йола фольклоры. 233—239-сы б.).

*Ауҡан* — «кеше аяғы баҫмаған, аулаҡ» мәғәнәһендә; иркен, киң.

*Ауыҙы ҡомай* — ҡомһоҙ.

*Ауылдар араламаҡ буһа ла* — ауылдар гиҙергә (ауылдан ауылға йөрөргә) уйлаһа ла.
*Ауын ҡыһында (һөйл.)* — ауыш ҡыҫыҡ ерҙә.
*Аһырайым* — һаҡлайым.
*Аяҡтаныҙыҡ ер* — һыуҙа үҙе буйларлыҡ ер.
*Баҕ* — баҡса.
*Бағауыл* — ҡарауыл, ҡарауылсы, күҙәтсе, һаҡсы.
*Байҙығыңды муйырмай* — байлыҡтан өлөш дәғүә итмәй, дауламай.
*Байманда* — иркенлектә, муллыҡта, байлыҡта.
*Балаһының* — «балалары араһынан (араһында») мәғәнәһендә.
*Бар нигә* — бар (бөтә) нәмәгә лә (нимәгә тейһә лә).
*Балға (Урал арты Учалы, Әбйәлил тирәһе һөйл.)* — сүкеш.
*Балдар (һөйл.)* — балалар.
*Баллар (һөйл.)* — балалар.
*Бары* — «һәр төрлө», «барлыҡ», «бөтәһе» мәғәнәһендә.
*Барымта* — сит ырыу йәки халыҡ малын ҡыуып китеү, матди баҫҡынсылыҡ.
*Баһымта* — барымта өсөн үс алыу (М. Буранғолов аңлатмаһы).
*Башлауға* — һыйҙы башлап ебәреүсегә, иң хөрмәтле кешегә мәғәнәһендә.
*Башкүнәк* — йылҡы башы тиреһенән яһалған һауыт, күнәк.
*Баяғы* — әлеге, теге, ни.
*Беҙҙең сәләм* — беҙҙең сәләмде.
*Беҙҙәй, тағы менергә* — беҙҙең кеүек менге (менеп йөрөр өсөн) йәнлеккә иҡтыяжы
*Беҙ уйлаған йән түгел* — «беҙ уйлаған йән генә түгел» мәғәнәһендә.
*Беҙәнәк (беҙгәләк)* — энәгараҡ (һыйыр сәнскәге).
*Белмәйсә (һөйл.)* — белмәйсе.
*Бер аҙаҡ* — бер аҙҙан.
*Бер ауыҙһыҙ* — бер һүҙһеҙ.
*Береһен ҡуймай* — береһен дә ҡалдырмай.
*Берҙә бер көн* — берҙән бер көн.
*Береһен тыңларһың* — бында «береһен тоторһоң» мәғәнәһендә.
*Берһе* — береһе.
*Бер төрлө* — «үҙенә бер башҡа» мәғәнәһендә.
*Бер уҡталып* — бер ынтылғанда.
*Бер уңалған ағастай (т. б.: «Бире уңалған ағастай»)* — «Яраһы уңалған ағас кеүек ажыр-божор» мәғәнәһендә.
*Биҙәү киткән* — биҙеп киткән.
*Бикәс* — ҡайынһеңле. Әммә эпостың Р. Teләкәева вариантында был һүҙ «бикә» («аттың хужабикәһе») тигәнде иркәләтеп әйтеүҙе аңлата.
*Билде (һөйл.)* — билле.
*Болғар күн* — ҡыҙыл күн.
*Болланыу* — «байып» мәғәнәһендә.
*Ботлатҡан* — «нығытылған» (бында тимер менән сатрашлап нығытыу йә көплөү) күҙ уңында тотола, ахыры.
*Бөгәсә* — бөгөн, бөгөн төндә.
*Буға* — үгеҙ.
*Буған (һөйл.)* — булған.
*Буҙатты* — Аҡбуҙатты.
*Буй бирәйем* — һинеке булайым.

*Буй бирҙем* — юл ҡуйҙым.

*Буйҙап, уйҙап, һыуҙап, туйҙап һ. б. (һөйл. формалары)* — буйлап, уйлап, һыулап, туйлап һ. б.

*Буй ҡуйҙым* — үҙ иркенә ҡуйҙым.

*Булатыны* — булат ҡылысын.

*Бумаһ, йөрөмәһ (ише һүҙҙәренең һуңғы өнө һөйләштә [x] менән [h] араһындағы өн кеүек әйтелә)* — булмаç, йөрөмәç.

*Бураланған* — асыуланған, туҙынған.

*Бушаныл* — ирек алып.

*Буçтырып* — буçлыҡтырып, илатып.

*Бысағыны* — т. б.: «бабай бысаҡ».

*Бы (һөйл.)* — был.

*Бысаҡты (бысаҡ) һалыу* — бысаҡлау, бысаҡтан үткәреү, һуйып ашау.

*Бәғдә* — һуңынан.

*Бәçле ҡунаҡ* — абруйлы, күренекле ҡунаҡ.

*Гөбөрлөнән олпатлы* — «гөбөргәйелдән дә олпат» мәғәнәһендә.

*Гәршүктәге (рус)* — көршәктәге.

*Ғиләүә (ғәр.)* — ҡушымта, өçтәлмә.

*Ғосса (ғәр.)* — ҡайғы, һағыш.

*Ғөмөр (һөйл.)* — ғүмер.

*Дана* — «иш» мәғәнәһендә.

*Дан бумаç* — тиң бумаç (бармаç, кәрәкмәç).

*Дейеүҙәрҙе һаҡлаған* — дейеүҙәрҙе аңдыған (күҙәтеп торған).

*Деү (һөйл.) батшаһы* — дейеү батшаһы (был вариантта һыу аçты батшалығы хакимы)

*Диуар (фар.)* — стена.

*Донъялай ғүмер* — оҙон (мәңгелек) ғүмер.

*Донъялағы йөрәгем* — йөрәгемдәй (иң ҡәҙерле) күргәнем, (бында һөйгән егет күҙ уңында тотола).

*Донъялағы ҡырыç та* — донъяның иң-иң боҙоғо ла.

*Дүнән* — өстән дүрт йәшкә тиклемге ат (айғыр малы).

*Дүрт тағанда тора ине* — тояҡтарын терен — терәп, саҡ (саҡ үлмәй, ауырып) тора ине.

*Ейеү* — ашау.

*Елбәгәйле ҡара сәкмәне* — бер ҡыуғынсының билдәһе.

*Елемә* — ҡолон, быҙау бәйләй торған урыныма.

*Емшәп* — ашап.

*Ер ҡояшы* — теге (һыу аçтындағы) донъяның үҙ ҡояшы булыуы күҙ уңында тотолған.

*Ертыштан* — Иртыш йылғаһынан.

*Ер уттары* — мал уртлар үçемлек.

*Еçерҙе* — етемде (сағ.: етем-еçер); әсирҙе, тотҡондо.

*Ете ят* — элек ете быуынға тиклемге туғандарҙы ғына туғанға һанағандар. Етенсе быуын — ете ят. Ете быуындан үткәне, ғөмүмән, туғанға һаналмаған, ят булған.

*Заллат (һөйл.)* — йәлләт, язалаусы.

*Зурҙама (фар.)* — көсләшмә.

*Зурланы* — ирекһеҙләне, көсләне.

*Ил* — «тыуған ил», «тыуған халыҡ» мәғәнәһен дә үҙ эсенә ала.

*Инле* — инселе, инсе һалынған.
*Инсе* — бераүгә атап бирелгән йәки атап һуйылған мал.
*Иркәк йәнлек* — ата йәнлек.
*Ирәбе* — кәүҙәле, теремек кеше («йәтеш», «иркә» мәғәнәһендә лә йөрөй).
*Иҫән-яран (т. н.)* — иҫән-аман. (т. н.).
*Итеп, итәрмен* — илтеп, илтермен.
*Иҡке-боһҡо (һөйләштә тәүге һүҙҙең икенсе өнө [х] менән [һ] араһындағы өнгә тап килә, икенсе һүҙҙәге өсөнсө өн [х] менән алмаштырылырға ла мөмкин)* — иҫке-боҫҡо.
*Йола (п)* — аралап, ҡотҡарып, йолоп.
*Йондоҙ юлап* — йондоҙға ҡарап юл тотоп.
*Йопланып, түлен йәйерлек* — ишләнеп, (парлашып) үрсерлек.
*Йөгөртөп (һөйл.)* — йүгереп.
*Йөрөҙөм* — йөрөнөм.
*Йүнәтләп* — йүнле итеп, яҡшылап иркенләп, йәтешләп.
*Йылҡыла* — йылҡылар араһында.
*Йылтыр күҙҙе (метонимия)* — «үткер» күҙле.
*Йыргандан йыра* — йырағайғандан йырағая, алыҫайғандан алыҫая.
*Йәйек* — ҡарағайҙың йәйенке ҡуйы ботағы.
*Йәндән артыҡ аҫырайым* — ҡәҙерләп һаҡлайым.
*Йән түгел* — йәнлектәр генә түгел.
*Йәүкәләү* — һорашыу, белешеү.
*Кандә* — кәнде (моғайын).
*Кеше яһап ебәргән* — 1. Кешене (сын яһау итеп) йомошҡа әҙерләп ебәргән. 2. Йыландарҙың башын киҫкән һайын, ул ашаған кеше яңынан терелгән. Шул күҙ уңында тотолоуы ла ихтимал.
*Кеше юяр* — кешене юҡ итер.
*Кикел сәсе* — аттың маңлайына төшөп торған өлтөк сәсе.
*Кипләнгән* — кипсәлгән, эләккән.
*Кирамат (кирәмәт, ғәрәмәт — ғәр.)* — аптырарлыҡ ғәжәп кеше (нәмә) мөғжизә.
*Кирәгә* — тирмәнең бер нисә ҡанатын (бер-береһенә сатарлашып) беркетелгән өлөштәрен тоташтырып бәйләүҙән хасил булған түңәрәк (цилиндр рәүешендәге) стенаһы.
*Көндәй* — ҡояштай.
*Көн кискә һарышҡас (һөйл.)* — көн кискә һарҡҡас (кис етеп килгәндә).
*Көң (төр.)* — ҡол ҡыҙ, хеҙмәтсе ҡатын.
*Көҫәп* — теләп.
*Күбен (һөйл.)* — күбеһен.
*Күҙе-башы йәшәреп* — күҙе-башы йәшәнеп.
*Күл ҡыйу (текста күл ҡыйусы)* — күл ҡайыуы (күл ҡайыуы — ҡамыштыр).
*Күмелдерек* — һәнәк тамға рәүешендәге ат түшлеге (эйәр артҡа шылмаһын өсөн, ике осо уға беркетелә, аҫҡы яңғыҙ осонаң тоҡаны аттың ҡулдары араһынан алғы айылға кейҙерелә).
*Күрмәхһең, тимәхһең (һөйләштә өсөнсө тартынҡы [х] менән [һ] араһындағы өнгә тура килә* — күрмәҫһең, тимәҫһең.
*«Күҙҙе (күҙле)»* — «күпте күреүсән» мәғәнәһендә.
*Кәр ҡылмау* — зыян итә алмау.
*Кәрһеҙ* — хәлһеҙ.
*Ҡабырғамды һайланылар* — ҡыйнанылар.

*Ҡабырғамды һанайҙар* — ҡыйнайҙар (т. н.: «һыйлайҙар»).
*Ҡайғынан ҡалғаның* — ҡайғынан ҡаҡшаған.
*Ҡайҙа һыулау табыр ул* — теләгән ерендә (ҡайҙа ла) һыу табыр.
*Ҡайныһы (һөйл.)* — ҡайһыныһы.
*Ҡалғып торған кешене* — хәлһеҙләнгән, йонсоған (йонсоп йоҡомһорап ултырыуыны).
*Ҡалта (һөйл.)* — кесә.
*Ҡалын* — һөйләшелгән ҡыҙ (невеста).
*Ҡанъяға* — эйәр табансаһының артҡы осона, эйбер бәйләү өсөн, ике яҡлап тағылған икешәр осло нәҙек ҡайыштар.
*Ҡапаҡтан* — ҡапаҡлауҙан, ҡурҡытырға маташыуҙан.
*Ҡапырсаҡ (һөйл.)* — ҡабырсаҡ.
*Ҡарағa баҫҡас* — ҡара (яңы асылған) ергә, ҡара ергә баҫҡас, яҙ булғас.
*Ҡарағa сығарғандар* — яҙ булып ҡар ирей башлағас, малды ҡар асылған ергә ашарға ҡыуғандар (М. Буранголов аңлатмаһы).
*Ҡараҡтарым (ҡаҙ.)* — күҙ нурҙарым.
*Ҡарлуғас ботло, ҡара атлы* — ҡыуғынсының билдәләре.
*Ҡариб* — яҡын.
*Ҡарымта* — ырыу ҡоролош дәүеренән хас — ҡанға-ҡан килеү (ҡан ҡойғандан ҡанлы үс алыу).
*Ҡарыу ҡылмаған* — ҡаршылыҡ ҡылмаған, зыянһыҙ.
*Ҡасд* — теләк, ниәт, маҡсат.
*Ҡасҡар (төр.)* — бүре.
*Ҡата араңа* — тояғың айырсаһына (араһына).
*Ҡатил (ғәр.)* — кеше үлтереүсе, язалаусы.
*Ҡашҡа (төр.)* — батыр.
*Ҡойошҡан* — эйәр алға шыумаһын өсөн, ҡойороҡ төбөнән аша алынған (булмышы — ҡойошҡан тамға рәүешле).
*Ҡола ялан ташлағыҙ* — далаға тартылығыҙ.
*Ҡолан* — ишәк ҡойроҡло, йылҡыға оҡшаш ҡырағай йәнлек. Урта һәм Үҙәк Азия далаларында йәшәй. Элек ҡолан Көньяҡ Европа далаларында ла булған, шулай уҡ Көньяҡ Урал далаларында ла йәшәгән.
*Ҡолдайҙар* — ҡол урынына тоталар.
*Ҡол-кәнизәктәр (фар.)* — гаремдағы ҡол ҡатындар.
*Ҡомарлы эш* — теләгән эш, күңел тартҡан эш.
*Ҡомарын асҡан* — теләген ҡандырған.
*Ҡомоғор* — болгансыҡланып, ҡом баҫыр.
*Ҡонан* — икенән өс йәшкә тиклемге айғыр малы.
*Ҡорсайып* — яурындарын ҡыҫып, бөксәйеп, ғәжәпһенеп.
*Ҡоһоро* — ҡоно (мәҫәлән, үсенең яман әҙемтәһе).
*Ҡош тыуы* — ҡош тубы (көтөүе).
*Ҡош әйткәнсә эшләгән* — ҡоштоң шартын үтәп, күҙен йомоп торған.
*Ҡубыр* — туҫтаҡ.
*Ҡубаға һебә* — йылҡының бөйөрөнән дуғалана биреп тоташҡан ҡыҫҡа ҡабырғаһы.
*Ҡуҙаҡтарына* — яуҙаштарына, ярандарына. Бында «юлдаштарына» мәғәнәһендә.
*Ҡуҙы* — ҡуй бәрәсе.
*Ҡуға* — күл ситенә үҫкән күрән, ҡамышлыҡ.
*Ҡулҡы* — бәләкәй ҡыуаҡлыҡ (ҡул).

*Ҡул тамырын тартып ҡарау* — «ҡылын» тартып ҡарау.
*Ҡумы* — эйәр ҡапталына аҫтына ҡуша тегелгән күн тышлы кейеҙ.
*Ҡурҙаҡ* — ҡурылған ит.
*Ҡуржын* — артмаҡ (сумка).
*Ҡушаға (әйтте)* — ҡушылып (әйтте), йөпләне.
*Ҡуш аҙауҙы* — аҙау теше икәү (ҡуш).
*Ҡушаҡта йүгерек етәкләп* — менгән (еккән) атына ҡушлап йүгерек етәкләгән.
*Ҡыраз буйлап* — ҡыраҙ буйлап (тау һыртлап).
*Ҡыуҙай* — ҡыу иткәндәй.
*Ҡыҫырыҡ* — йәш бейә малы (т. н.: ҡыһырыҡ).
*«Ҡыу ҙа ҡыу!» — тип ҡеүәтләп* — «ҡыуҡыулашып».
*Ҡыҫырыҡ* — ҡыҫыр, ҡасмаған, тыу.
*Ҡыу баш ҡалдым* — һемәйеп тороп ҡалдым, ҡоро башым ҡалды.
*Ҡәмәр* — ҡаптырмаһы аҫыл таштар менән биҙәлеп, алтын-көмөш менән семәрләнгән билбау.
*Ҡәһәтләндем (ғәр.)* — бурыс ҡуйҙым, «ант (ғәһед) иттем» мәғәнәһендә.
*Майҙан* — бында: «йыйын» мәғәнәһендә (артабан ҡар.: «майҙан башланыуҙы көтөп...»).
*Маң* — минең.
*Мат ҡыуып* — «ҡыҫҡа тотоп, өтөп алып барыу» мәғәнәһендә.
*Матур миңә дан булмай* — матур миңә оҡшамаҫ, тиң булмаҫ.
*Мегерәп (һөйл.)* — «мыҡырҙашып» мәғәнәһендә.
*Менәргә (һөйл.)* — менергә.
*Монат (һөйл.)* — «урында, башҡа» мәғәнәһендә.
*Мөлхәтһенмәү, мөрхәтһенмәү (ғәр.)* — хушһынмау, ҡәнәғәт булмау.
*Муйырмай* — тартып алмай.
*Мына (һөйл.)* — бына.
*Мында (һөйл.)* — бында.
*Мыр* — үҫемлек ҡорто.
*Мырҙам (һөйл.)* — ҡустым, энем.
*Мән (һөйл.)* — менән.
*Мән (бән) нитәйем* — мин ни итәйем.
*Нам-нәшән юҡ (фар.)* — эҙе лә, еҫе-еле лә юҡ.
*Намыхыма теймәне* — миңә ҡағылманы (ҡыҙ көйө ҡалдырҙы).
*Наһр (гәр.) ҡоромаһын* — күңеле ҡайтмаһын, төшмәһен мәғәнәһендә. (Наһр — ғәрәп телендә йылға тигәнде аңлата).
*Нөгәр (мон.: нәүкәр, нукер)* — һуғышсы, хәрби хеҙмәткәр, бағауыл йәшерен төркөм (шайка).
*Нәркәс (фар.)* — аҫыл гөл исеме; һыуһылыу, рустарҙа — русалка.
*Олпатлы* — «олпатыраҡ» мәғәнәһендә.
*Омболло-омболло* — тәрән, сөмбәй ятыуы.
*Өйөрҙәп* — өйөр-өйөр булып.
*Өйән ҡойроҡ* — ҡуйы, ялбыр ҡойроҡ.
*Өскөтөп (һөйл.)* — һеслэтеп.
*Өсмә яһап төшөргән* — «өстән үреп төшөргән» мәғәнәһендәлер.
*Руз (фар.)* — көн, көндөҙ.
*Рәт һаҡлау* — тәртип күҙәтеү.
*Сабар* — хәбәр йөрөтөүсе сапҡынсы.
*Сағыҙ* — сағыҡыҙ.

*Сапсыҡ* — күпәктең бер төрө.
*Сергеләп* — ат бауыры аҫтына етмәле итеп.
*Сөйәргә (һөйл.)* — сөйөп (юғарыға һелтәп) ебәрергә.
*Суҡмар йөкмәмәй* — «суҡмар алып (йөкләп) йөрөмәй» мәғәнәһендә.
*Суңҡа (йәки соңҡа)* — баштың муйынға тоташҡан өлөшө (бында «осло» мәғәнәһендә).
*Сыбай ҡашҡа* — буй ҡашҡа (шуға күрә «Сыбай ҡашҡа» йырын «Һыбай ҡашҡа» тип йырлау дөрөҫ түгел).
*Сығып киткән дә* — сыға һалып киткән.
*Сыңғыҙ ерән* — сағыу ерән (буғай).
*Сәмәртеп (һөйл.)* — шәмәртеп.
*Сәскә шәлкемләү* — *гөлләмә* (букет) йыйыу.
*Сәсә* — аттың бәкәлендәге өлтөк йөн.
*Сәхтиән* — йоҡа һары күн (кәзә йәки һарыҡ тиреһенән).
*Табиблыҡҡа* — врачлыҡҡа.
*Таҡ, таға (арх.)* — тәхет.
*Талай* — байтаҡ.
*Талау* — *мал* ауырыуы — түләмә. Бында был һүҙ әр һүҙе мәғәнәһендә килә.
*Тап булһа* — тап килһә (раҫ булһа).
*Таралғы* — күн тышлы үндек суҡтарын тоташтырыусы нәҙек ҡайыштар.
*Тартһаң, туйың ҡорорбоҙ* — үҙендеке һанаһаң, туйынды ҡорорбоҙ.
*Тарлашмаҡ* — таралыштылар (текста хәрефтәр теүәл түгел).
*Татарғап* — ҡатып-кибеп, үтә ҡартайып.
*Татаураңғас* — йонсоп, ҡуҙғала алмаҫ хәлгә килеү.
*Теҙгенен ҡашҡа шаҡарған* — теҙгенен янлап бәйләп ҡуйған.
*Тел өҫтөнә тел ҡуймай* — сер йәшермәй.
*Теләгем булманы* — теләгем ғәмәлгә ашманы.
*Темеҫкенгән* — аҙып йөрөгән (М. Буранғолов аңлатмаһы).
*Тешәр саҡ* — балаларҙың теше алмашынған (яңы теш сыҡҡан) ваҡыты.
*Тибенгеһе сәсмәле (сәмсәле тибенге)* — семәрле шпор.
*Тигән былар уйҙарын* — быларҙың уйын әйтеп биргән.
*Тигәнебеҙ* — «теләгәнебеҙ» мәғәнәһендә.
*Тилегән* — тилеткән, баш әйҙергән, күндергән.
*Томыра (һөйл.)* — думбыра.
*Төк сәсә* — маңлай сәсе өлтөгө).
*Төн башҡорттарынан* — көньяҡ башҡорттарынан.
*Төрлө ағас әйәһе* — төрлө-төрлө ағастар.
*Төһ-баш (һөйләштә өсөнсө өн [х] менән [һ] араһында әйтелә)* — төҫ-баш.
*Төшлөк яҡтағы* — көньяҡтағы.
*Тубарлата башланым* — күп йөрөтә башланым (?).
*Тубарылмаҫ* — үтмәҫләнмәҫ.
*Тубыр булып* — күп йөрөү араһында ашалып.
*Туҙғын (һөйл.)* — туҙан (т. б.).
*Туларһығы* — малдың сәнсек һөйәге.
*Тура барһаң, төшлөк юл, (Бороуҙан барһаң — айлыҡ юл (стилистик формала)* — тура барһаң — көнлөк юл (Ураүҙан (урап) барһаң — айлыҡ юл) тәүге текста бирелешен ҡарағыҙ. б.).
*Туры (һөйл.)* — тура.
*Тутырған (һөйл.)* — тултырған.

*Түкәлмәҫ (төкәнмәҫ)* — осона сыҡҡыһыҙ.

*Тул төйөмө элеү* — тәкәнең аталыҡ ағзаһын киптереп төйөп, аҡ сепрәккә төрөп һаҡлау, малға тағыу — түллек теләү ырымы иҫәпләнгән.

*Тыйғанлны (арх.)* — тыйғаныл.

*Тынсыһа (т. б.: тонсоһа)* — тынып ҡалһа (тынысланһа).

*Тыуғаның* — туғаныныҡ.

*Тыуыма* — көтөүемә мәғәнәһендә.

*Тыу булып* — туп-туп булып тупланып.

*Тәңре* — т. н.: «хоҙай».

*У (һөйл.)* — ул.

*Ужарып* — ажарланып.

*Уның яуы ҡулында* — яугир (халҡы) уның ҡулы аҫтында.

*Уңдан һулға ир* — утын-һыуын эскән, һыналған ир.

*Уралға килеп* — Урал тауына килеп.

*Уҫал менән аҡ ҡыҙҙан* — йәғни Шүлгән менән Айһылыуҙан.

*Утырған (һөйл.)* —ултырған.

*Уҙ бауырың* — ҡәрҙәшең (бында Айһылыу күҙ уңында тотола).

*Үкән-төкән* — әкәм-төкәм (юҡ-бар).

*Үрҙәк (һөйл.)* — өйрәк.

*Үртәкә (һөйл.)* — «Посредник». Текста үргә (түргә) ҡуйыла торған тәкә һыны нишанаһы) күҙ уңында тотола. Үртәкә тотемизм менән бәйле. Ҡырғыҙ, ҡаҙаҡта әле лә тирмә ишеге башына ҡыр кәзәһе мөгөҙө ҡуйыла.

*Үҫмәйсе (һөйл.)* — үҫмәйенсә.

*Уттар* — үлән ашар.

*Фал һалғанда* — ноҡот бүлгәндә, бәхет күрәҙәлек иткәндә, яҡшыға юрағанда.

*Фаруан (ғәр.)* — рәхәттә, муллыҡта.

*Хас ҡылмаҡ* — хаслыҡ итеп.

*Хәстә (ғәр.)* — ауырыу, сир.

*Һарымһаҡтай аҙаулы* — аҙау теше һарымһаҡ кеүек.

*Һаумал* — яңы һауған бейә һөтө.

*Һауыт* — һуғыш кейеме (көп, көпө).

*Һигеҙ күҙҙән* — арт һан (таз) һөйәгенән.

*Һигә* — һиңә.

*Һиңә бәхет теләйем* — «Гүр бәхете теләйем» мәғәнәһендә (гүр бәхете — гүрҙең нурлы булғаны) (иғт. ит.: «Урал батыр үлгән һуң... Гүре балҡып торған, ти»).

*Һорнай* — мөгөҙ борго.

*Һоҡланған зат* — аҫыл әйбер мәғәнәһендә.

*Һөйгән дана* — яратҡан берҙән-бере.

*Һоллологон* — таһыллылығын.

*Һуйҡайлатып* — ҡыялатып, ситтән уратып.

*Һоһа теш* — теше һоҫа кеүек.

*Һулың мән алырһың* — һул ҡул менән алырһың.

*Һынсы* — һынап белеүсе, зирәк, утә һиҙгер. Элек хандар, бейҙәр үҙҙәренә кәңәшсе итеп һынсылар тотор булғандар. Һынсылар вазифаһына шулай уҡ яҡшы мал һайлау, ырымдарға, тәбиғәт күренештәренә ҡарап, күрәҙәлек итеү ҙә кергән.

*Һыптырыу* — шиптырыу, ҡыйнау.

*Һырҙай ҡанға туҙыу* — ныҡ ҡанау.

*Һыуатлап* — һыу эсеп.

*Һыулау* — бында «Һыу инер (эсерергә) урын» мәғәнәһендә.

*Һыуһын яһаған* — һыуһын ҡандырыр өсөн эсемлек яһаған.

*Һыуыр* — *тейен* затынан, әммә өндө ерҙән өңә, ҡышын йоҡлай.

*Һәрамзалыҡ (харамзалыҡ) ҡылаһың* — дөрөҫөн әйтмәйһең, ялғанлайһың.

*Һәр кемгә әйтешеп* — бер-береһенә әйтешеп.

*Һәр ҡайһыһы йәйрәп, йопланып түлен йәйерлек* — һәр ҡайһыһы иркенләп иш-ләнешеп, үрсерлек.

*Һәүерек* — өйөр тоторлоҡ булып өлгөрмәгән йәш айғыр.

*Ырғыҙлы* — Бөрйән районында шул исемдә ауыл, йылға бар.

*Ылғы* — гөл.

*Ырыҡ (һөйл.)* — ыйыҡ.

*Ырай* — төбәп, табан.

*Ыҡтымат* — ыҡсым.

*Ыу* — ағыу.

*Шарттан* — шарт буйынса.

*Шатлы азат иттергән* — «тотҡондан ҡотҡарып, ҡыуандырған» мәғәнәһендә.

*Шикеллем (һөйл.)* — тиклем.

*Шу (һөйл.)* — шул.

*Шәйех* — дини башлыҡ, етәксе (был да — боронғо мәжүсилек төшөнсәләре ис-ламдыҡы менән алмаштырылыуға миҫал).

*Ырашҡыла тун тимәй* — «ырашҡы яуғанда (ни яҙ, ни ҡыш түгел мәлдә, йон-соу саҡта) тун һорамай, «тунға мохтажлығы юҡ» мәғәнәһендә.

*Ырыҫ-байлыҡ бәйләү* — ҡар.: «Түл төйөмө элеү».

*Ышыҡланып* — ышыҡлап (ышыҡ яһап).

*Әбегеп* — зарығып мәғәнәһендә.

*Әлшәй менән Һатай* — Әлшәй (Раевка) менән Сәтәй — Бөрйән ауылдары.

*Әпкиткән* — алып киткән.

*Әштәлә-әштәлә* — кәштәлә-кәштәлә, бүлкәтле.

*Әтәлге* — инә шонҡар.

*Әҙәрҙәп* — бында: «Эҙләп», «йәүкәләп» мәғәнәһендә.

*Әйенде* — бер тапҡыр һауғас, быҙауҙы ҡушып, һыйырҙы ҡабат әйҙереп һауған һөт; елеп төбөндә ҡалған ҡуйы һөт.

*Әйәр ҡашағаһы (һөйл.)* — әйәр ҡашы.

*Әнйе (һөйл.)* — ынйы.

*Әс тартыу* — икеләнеү, шөбһәләнеү.

*Юлаһын* — юл һалһын.

*Юл салыу* — юл ҡыйыу (юлына арҡыры төшөү).

*Юл сапмаҫ* — юл бирмәҫ мәғәнәһендә.

*Юлын-билен (бил, биләп — ҡалҡыулыҡ)* — Урал батыр Аҡбуҙатта үткән эҙҙән ҡалҡып сыҡҡан тау һырты күҙ уңында тотола (ҡар.: «Урал юлы — бейек тау...»).

*Яй эҙләү* — уңай мәл (урын) эҙләү.

*Яй ҡуйҙым* — ялыңа ҡуйҙым.

*Ялды һуйғандар* — ат һуйғандар.

*Ялды (сағыштыр: ҡаҙы ял)* — «атты», «йылҡы малын» тигән мәғәнәһендә.

*Ялдым* — һыуҙың иң тәрән ятыуы, сөмбәй урын.

*Ялуа итә* — ошаҡлай.

*Ям* — соҡор. Әммә бында «зиндан» мәғәнәһендә.

# ҠУШЫМТА

## ҠОБАЙЫР КӨЙҘӘРЕНӘН ӨЛГӨЛӘР

### ЗАЯТҮЛӘК




«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың көйөн 1945 йылда композитор Х. Ф. Әхмәтов Башҡортостандың Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында ҡурайсы Алтынса Үтәғоловтан (1881 йылда тыуған) яҙып алған һәм нотаға һалған. Нотаһы беренсе тапҡыр 1954 йылда «Башҡорт халыҡ йырҙары» китабында баҫылған (төҙөүселәре, мөхәррирҙәре, кереш мәҡәлә һәм аңлатмаларҙың авторҙары: Х. Ф. Әхмәтов, Л. Н. Лебединский, Ә. И. Харисов); БХИ: Эпос. 1-се кит. 323-сө б.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» көйөн тәү башлап 1894 йылда С. Г. Рыбаков яҙып алған һәм нотаһын «Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта» исемле китабына индергән (СПб, 1897, 143-сө бит, № 123).

## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ

Уртаса тиҙлектә




Балҡан тауым был түгел (дә),
Ай-һай, меңкен Балҡан тау;
Тауы тауға оҡшаған (да),
Тимер менән ҡоршаған (да), —
Минең тауым был түгел.
Бүлә-бүлә йөрөгән (дә)
Бүреһе лә бар уның;
Өлкәм төбөнән тороп ҡасҡан
Ҡуяны ла бар уның.
Майлап һалған ҡайыштай (ҙа)
Йыланы ла бар уның,
Ай-һай, меңкен Балҡан тау.




Мырҫ-мырҫ атлап йөрөгән (дә)
Айыуы ла бар уның (да);
Ҡапҡан төбөнән тороп ҡасҡан
Төлкөһө лә бар уның,
Ай-һай, меҫкен Балҡан тау (ҙа), —
Минең тауым был түгел.

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың көйөн һәм һүҙҙәрен 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында 63 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан Н. Д. Шоңҡаров магнитофонға яҙып алған. Рәсәй ФА Өфө Ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана (инф. № 1/1). Композитор К. Й. Рәхимов тарафынан нотаға күсерелгән // ҒА: ф. 3, оп. 23/6. 3—4-се б. БХИ: Эпос. 1-се кит. 326-сы б.

Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,

Алып килгән тауығыҙ —
Балҡан тауым был түгел.
Бүлә-бүлә йөрөгән
Бүреһе күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау.
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау.
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау...
Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып
Алып бында килһәләр ҙә —
Балҡантауым был түгел.

Көйө менән был ҡобайыр өҙөгөн 1989 йылда Дәүләкән районы Ҡырҙас ауылында Ғәйшә Әбделмәнованан Фәнүзә Нәҙершина магнитофон таҫмаһына яҙып алған. Көйҙө нотаға Илдар Ханнанов һалған. Беренсе тапҡыр «Башҡортостан» гәзитендә (1991 йыл, 25 апрель) баҫтырылды.

### ЗАЯТҮЛӘК ҺАМАҒЫ



## АҠҺАҠ ҠОЛА




Ҡарлуғас ботло ҡар(а) ат юҡ, ти,
Ҡарлуғас ботло ҡар(а) ат юҡ, ти;
Һандуғас ботло һар(ы) ат юҡ, ти,
Һандуғас ботло һар(ы) ат юҡ, ...эй...

Аҡһаҡ ҡола, һай, бер меҫкен, ти,
Аҡһаҡ ҡола, һай, бер меҫкен, ти;
Ул да булһа, һай, янда юҡ, ти,
Ул да булһа, һай, янда юҡ!

«Аҡһаҡ ҡола» көйөн һәм һүҙҙәрен 1938 йылда Л. Н. Лебединский Өфөлә журналист һәм йырсы Мәжит Бураңғоловтан (1904—

1943) яҙып алған // Башкирские народные песни и наигрыши. Второе исправленное и дополнительное издание. М., 1965. С. 173, № 38; БХИ: Эпос. 1-се кит. 327-се б.

## АҠҺАҠ ҠОЛА




Иртән дә тороп ҡараһам, ти,
Аралап йөрөп байҡаһам, ти,
Мундаһы бейек күк ат юҡ, ти,
Алма ла сыбар дүнән юҡ, ти,
Ҡарлуғас бот ҡара ат юҡ, ти,
Балауыҙ төҫлө һары ат юҡ.

Атҡа ла менеп сабырға, ти,
Эҙләп тә йөрөп табырға, ти,
Һолло ла атам, мал ҡотом, ти,
Аҡһаҡ та ҡолам янда юҡ.

Аҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти,
Туҙҙырған да һин, Аҡһаҡ, ти.
Аҡһаҡ та ҡоланы тапҡан һуң,
Асыуҙан уҡты тартҡан һуң,

Һыртынан башаҡ үткән һуң,
Аттың хәле бөткән һуң,
Аҡһаҡ та ҡола тигән, ти,
Былай ҙа тиеп әйткән, ти:

«Һыртымды ярып хур иттең,
Ҡолағым ярып ин иттең,
Инле лә ҡолаҡ, ярыҡ һырт,
Йөрөп тә булмаҫ, мин ҡайттым.»

«Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырының көйөн һәм һүҙҙәрен композитор Х. Ф. Әхмәтов яҙып алған һәм нотаға һалған. Беренсе башлап 1954 йылда «Башҡорт халыҡ йырҙары» китабында баҫылған. БХИ: Эпос. 1-се кит. 328-се б.

Бынан башҡа Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының фольклор кабинеты фондында (йыйынтыҡ 13, яҙма № 105/) «Аҡһаҡ ҡола» көйөнөң композитор З. Ғ. Исмәғилев яҙып алған варианты һаҡлана.

## АҠҺАҠ ҠОЛА






Аҡһаҡ ҡола бер меҫкен (дә),
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйҙәр (ҙә),
Ҡабырғамды һанайҙар (ҙа).
Яҙ ҙа мине менәләр (ҙә),
Көҙ ҙә мине менәләр (ҙә);
Йәй менергә дүнән бар (ҙа),
Көҙ менергә ҡонан бар.
Аҡһаҡ ҡола бер меҫкен (дә),
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйҙәр (ҙә),
Ҡабырғамды һанайҙар, ти.




Айыл етмәҫ ала(а)т юҡ (та),
Ҡарлуғас ботло тура (а)т юҡ (та),
Ҡолас етмәҫ ҡола (а)т юҡ.
Аҡһаҡ ҡола — бер меҫкен (дә),
Ул да булһа бында юҡ.

Эй бай улы, бай улы, (ла),
Төшөп киткел, бай улы (ла),
Төшөп киткел, бай улы, ти.
Төшөп китһәң, көнлөк юл (да),
Төшмәй китһәң, айлыҡ юл.
Эй бай улы, бай улы (ла),
Төшөп киткел, бай улы (ла).

Көндәр ҡымыҙ һөҙөрҙәр (ҙә),
Аҡ сымылдыҡ ҡорорҙар (ҙа),
Аҡ сымылдыҡ эсендә (лә)
Аҡ сабаҡтай уйнарбыҙ, ти.

«Аҡһаҡ ҡола»ның был вариантын 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында 63 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан Н. Д. Шоңҡаров магнитофонға яҙып алған. Яҙма Рәсәй ФА Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана (инв. 2/1). Көйө композитор Ҡ. Й. Рәхимов тарафынан нотаға күсерелгән // БХИ: Эпос. 1-се кит. 332-се б.

## КАРА ЮРГА

Меж гранитными скалами
И клокочет, и шумит
Море бурными волнами;
Дева морю говорит:
«Море, море, где ж заветный
Друг мой сердца, ты скажи?»
Море плещет безответно
И синеется вдали!
Небосклон оделся тучей,
Ветер воет и свистит,
И вздымает прах летучий,
Дева ветру говорит:
«Ветер, ветер, прямо к югу
Ты от севера подуй
И доставь с любовью к другу
Мой последний поцелуй!»
Распустя по ветру крылья,
Ворон за море летит,
Море стонет от усилья,
Дева ворону кричит:
«Ворон, ворон! Друг печальный,
Отлетая в дальний путь,
Ты отдать поклон прощальный
Другу сердца не забудь!»
Что же ворон? Ворон крикнул,
Полетел искать могил,
Меж скалами ветер свистнул
И протяжно вдруг завыл.
Зашумело, заплескало
Море вдруг перед грозой.
Вьется с вихрем покрывало,
Дева борется с волной.


Ашыкмай
Меж гра- нит- ны - ми ска - ла - ми
Не - бо- склон о - дел - ся ту - чей;
и кло - ко- чет и шу - мит,
ве - тер во - ет и сви - стит.
cresc.
мо - ре бур - ны - ми вол - на - ми.
И взды - ма - ет прах ле - ту - чий;
fp
fp




«Ҡара юрға» ҡобайырының көйө беренсе тапҡыр 1833—1835 йылдарҙа атаҡлы рус композиторы А. А. Алябьев (1787—1851) тарафынан Ырымбур губернаһы башҡорттарынан яҙып алынған. Нота Ленинградтағы Кино, театр һәм музыка институтының ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана: ф. 3, оп. 2. ед. хр. 17. Көй үҙ һүҙҙәре менән түгел, ә рус телендәге бер шиғыр өҙөгө менән бирелгән // БХИ: Эпос. 1-се кит. 335-се б.

## ҠАРА ЮРҒА




«Ҡара юрға»ның был көйө 1894 йылда С. Г. Рыбаков тарафынан Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Кананикольск заводында (Башҡортостандың хәҙерге Йылайыр районы) ҡурайсы И. Лоҡмановтан яҙып алынған. Нотаһы 1897 йылда С. Г. Рыбаковтың «Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта» китабында (143-сө бит, № 111) баҫылған // БХИ: Эпос. 1-се кит. 336-сы б.

С. Г. Рыбаков шул уҡ Орск өйәҙе Күсей ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) Бирғәле исемле ҡурайсынан да «Ҡара юрға» көйөнөң бер вариатын яҙып алған һәм ҡыҫҡаса йөкмәткеһе менән бергә үрҙә әйтелгән китабына индергән (143-сө бит, № 110).

## ҠАРА ЮРҒА




«Ҡара юрға» көйөнөң был вариантын 1939 йылда Л. Н. Лебединский Башҡортостандың Матрай (хәҙерге Йылайыр) районында ҡурайсы Дилмөхәмәтовтан (1902 йылда тыуған) яҙып алған һәм «Башкирские народные песни и наигрыши» китабында баҫтырған (2-се баҫма. 193-сө б. № 67) // БХИ: Эпос. 1-се кит. 338-се б.

Бынан тыш Л. Н. Лебединский 1939 йылда «Ҡара юрға»ның ҡурайҙа башҡарылған тағы ла бер вариантын яҙып алған һәм үрҙә әйтелгән китабына индергән (192-се б.).

# ҠАРА ЮРҒА




Ай-һай...

Йомро матур тояғыңды
Дағаларбыҙ, юрғам,
Ҡырас матур ялдарыңды
Уҡаларбыҙ, юрғам.
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Төшөр инде, юрғам.
Һайт, Ҡара юрғам,
Тайт, Ҡара юрғам! Һай!

Ай-һай...

Башыңдағы йүгәнеңде
Көмөшләрбеҙ, юрғам.
Ҡара-ҡырпыу үңлегеңде
Нағышларбыҙ, юрғам,
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Төшөрсәле, юрғам,
Һайт, Ҡара юрғам,
Тайт, Ҡара юрғам! Һай!

«Ҡара юрға» композитор Х. Ф. Әхмәтов тарафынан Баймаҡ районы ҡурайсыларынан яҙып алынған һәм нотаға күсерелгән. Тексы беренсе тапҡыр 1954 йылда «Башҡорт халыҡ йырҙары» йыйынтығында баҫылған // БХИ: Эпос. 1-се кит. 338—339-сы б.

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының фольклор кабинеты фондында «Аҡһаҡ ҡола» көйөнөң бер нисә яҙмаһы һаҡлана; ҡулъяҙма йыйынтыҡтар №№ 1, 13, 28, 45, 71/26—27.

## ҠУҢЫР БУҒА






Һай, Урал арҡаһынан һыҙылып үткән
Нәҙек, таҡыр, һыуһыҙ юл буйлап,
Быҙау менән һыйыр ҡайтып киткән,
Тормағандар улар күп уйлап.
Аяғымды талдырып,
Төн йоҡомдо ҡалдырып,
Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Эҙләп киттем шуларҙы.
Һай, Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү, һәү, һәү!

Урал арҡаһынан уя баҫып,
Еlә-саба киткән малдарым;
Улар һалған эҙҙән ҡыя баҫып,
Барам ҡыҙырып Урал тауҙарын.
Баҫҡан юлым таш ҡына,
Йөрәккәйем ашҡына,
Ҡасан ҡыуып етермен,
Талды аяҡ иттәрем.
Һай, ҡуңыр буға, һәү...
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү, һәү, һәү!
Ҡуңыр буға, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү, һәү, һәү!

Көйө һәм һүҙҙәре композитор Х. Ф. Әхмәтов тарафынан яҙып алынған. Яҙма Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының фольклор кабинеты фондында һаҡлана: № 13 йыйынтыҡ. Көйҙөң нотаһы һәм һүҙҙәре 1954 йылда «Башҡорт халыҡ йырҙары» китабында баҫылған (98—99-сы б.) // БХИ: Эпос. 1-се кит. 339—341-се б.

«Ҡуңыр буға» көйөнөң композитор С. Ғәбәши яҙып алған бер варианты 1935 йылда сыҡҡан «Башҡорт халыҡ йырҙары» йыйынтығына индерелгән. Көйҙөң шулай уҡ Л. Н. Лебединский тарафынан 1939 йылда Башҡортостандың Абзан (хәҙерге Ейәнсура) һәм Бөрйән райондарында фонографҡа яҙып алынған варианты һаҡлана ҒА: экспедиция № 4, 1-се яҙма.



## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Мөхәрририәттән . . . . . . 5
Башҡорт халыҡ эпосы (*М. М. Сәғитов*) . . . . . . . 6
Урал батыр . . . . . . . . 27
Урал батыр (*Версия*) . . . . 127
Аҡбуҙат . . . . . . . . . . 137
Заятүләк менән Һыуһылыу . . 178
Заятүләк менән Һыуһылыу (*Версия*) . . . . . . . . 187
Заятүләк менән Һыуһылыу (*Версия*) . . . . . . . . 200
Заятүләк (*Вариант*) . . . . . 205
Заятүләк менән Һыуһылыу (*Версия*) . . . . . . . . 213
Заятүләк (*Версия*) . . . . . 215
Аҡһаҡ ҡола . . . . . . . . 220
Аҡһаҡ ҡола (*Вариант*) . . . 226
Аҡһаҡ ҡола (*Вариант*) . . . 229
Бишҡолон (*«Аҡһаҡ ҡола» версияһы*) . . . . . . . . . 233
Аҫҡаҡ ҡола (*Версия*) . . . . 238
Аҡһаҡ ҡола (*Вариант*) . . . 241
Аҡһаҡ ҡола (*Вариант*) . . . 247
Ҡара юрға . . . . . . . . . 251
Ҡара юрға (*Вариант*) . . . . 266
Ҡара юрға (*Вариант*) . . . . 273
Ҡуңыр буға . . . . . . . . . 275
Ҡуңыр буға (*Версия*) . . . . 284
Ҡуңыр буға (*Вариант*) . . . 302
Ҡуңыр буға (*Вариант*) . . . 306
Ҡуңыр буға (*Вариант*) . . . 308
Башҡорт халҡының мифологик эпосына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәр (*Ә. М. Сөләйманов, Р. Ф. Рәжәпов*) . . . . . . 309
Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . 351
Аңлатмалар . . . . . . . 353
Иҫкәрмәләр . . . . . . . 404
Һүҙлек . . . . . . . . . 414
Ҡушымта: Ҡобайыр көйҙәренән өлгөләр . . . . . . . . 423
Йөкмәткеһе . . . . . . . . . 440
Һығымта . . . . . . . . . 441
Резюме . . . . . . . . . . 442
Summary . . . . . . . . . 443
Sonug . . . . . . . . . . 445

## ҺЫҒЫМТА

Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары араһында айырым урын алып торған мифологик эпостарҙа боронғо бабаларыбыҙҙың ил ҡороу өсөн ынтылыштары, тәбиғәт менән мөнәсәбәтте юлға һалып, уға һыйынып, уның менән һин дә мин килешеп йәшәргә теләүҙәре, һуңғыһын тәүгеһе өсөн төп шарт итеп иҫәпләүҙәре сағылыш алған. Шуға ла эпостарыбыҙҙың был өлөшө, бабаларыбыҙ шул изге эште әҙәм балаһы йәшәрлек итеп донъяны үҙгәртеп ҡороуҙан башлаған, тип раҫлай. Был йәһәттән «Урал батыр» эпосы айырыуса әһәмиәтле. Уның төп геройы Урал батыр ҡоро ер менән һыу нисбәтен көйләй, ғәләмде үҙләштерә (Күк тәңреһе дәрәжәһендәге Самрау менән ҡан ҡәрҙәшлеккә инә: уның ҡыҙы Һомай менән никахлаша; Йондоҙ булып balҡыған Аҡбуҙатты үҙенә булышсы итә). Шунан һуң ғына «мәңге йәшәү», «үлемһеҙлек» проблемаһын хәл итә. Ер һыуға сарсағас, мәңгелек йәшәү форсаты бирер йәншишмәне һирпеп, донъяны терелтә.

Китапҡа ингән башҡа эпостарҙың геройҙары Урал батырҙың вариҫтары кеүек ҡабул ителә. Улар, Урал батыр тыуҙырған шарттарҙы файҙаланып, Ер өҫтөндә, кешелек алдында тыуған башҡа проблемаларҙы хәл итергә ынтылыусылар рәүешендә кәүҙәләнделәр. Әгәр Урал батыр тәбиғәт менән мөнәсәбәтте донъя яҙмышы кимәлендә хәл итергә тырышһа, үҙенә күрә феноменаль күренеш «мал-тыуар эпосы» (йәки «экологик эпостар») циклын хасил итеүсе «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» эпостарының геройҙары мал-тыуар менән мөнәсәбәтте юлға һалырға тырыша. Шуның менән был әҫәрҙәр Урал батырҙың тәңреләргә тиң культур геройҙарға хас эшмәкәрлегенең төп идеяһын көнкүреш планында хәл итеүгә ынтыла. Улар йәшәйештең төп шарты — кеше менән мал-тыуар мөнәсәбәтен яйға һалыу тимәксе. «Аҡбуҙат» иһә ерҙә ижтимағи ғәҙеллек урынлаштырыу проблемаһын ҡуйып, шул шартҡа мөһим өҫтәмә индерә. Томға ингән эпостарҙа был һәм бүтән донъяуи мәсьәләләр барыһы ла бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштары — мәжүсилек күҙлегенән ҡарала. Шуға күрә лә улар үҙенә күрә башҡорт халҡының мифологик энциклопедияһын хасил итә.

## РЕЗЮМЕ

Мифологический эпос башкирского народа представляет собой уникальное и самобытное явление. В нем отражено представление наших предков о строении и обустройстве мира, где человек мог бы жить, не ощущая дискомфорта. Установление гармоничных отношений с природой и сосуществование с ней рассматривались в мифологическом эпосе как главное условие решения этой проблемы. В этом плане особый приоритет принадлежит эпосу «Урал батыр». Его главный герой упорядочивает соотношение между Ер (Земля) и Һыу (Вода), осваивает космос, вступая в брачные отношения с Хумай, дочерью царя, сан которого приравнивается к сану высшего небесного божества — Күк-Тэнгри (Тэнгри неба) и Солнца, приручает тулпара — мифического крылатого небесного коня — Акбузата. Разрешив эти проблемы, Урал батыр совершает свой главный божественный и гражданский подвиг, отказавшись от предоставленной возможности приобретения вечной жизни; окропив землю живой водой, он вдыхает жизнь всей живой и неживой природе и, таким образом, в глубоко философском плане решает проблему вечной жизни.

Герои других эпических произведений, вошедших в настоящую книгу, являют собой как бы логическое продолжение дел, начатых мифическим богатырем Уралом. Они представляются как верные преемники Урал батыра, использующие условия, им созданные, но сталкивающиеся с иными жизненными проблемами.

Если Урал батыр занимается налаживанием отношений между человеком и природой в глобальном космическом плане, герои таких эпических произведений, как «Акхак кула», «Кара юрга», «Куныр буга», представляющие собой своеобразный цикл «экологического эпоса», стараются решить эту задачу в сугубо бытовом плане. Это прослеживается в аспекте установления нормальных взаимоотношений человека с прирученными им животными, что является главным условием существования первого. Эпос «Акбузат», тесно перекликающийся с «Урал батыр»ом, как бы привносит дополнительный оттенок в данную идею, поднимая проблему социальной справедливости на земле. Все это рассматривается в произведениях, вошедших в настоящий том, сквозь призму мифологических воззрений. Поэтому можно было бы назвать этот том «мифологической энциклопедией башкирского народа».

## Summary

The Bashgort epic poems or sagas occupy a special place in Bashgort people's spiritual heritage. Reflected in them is our ancestors' striving to set up their own homeland. The mythological epic poems also reflect their desire to live in good harmony with Nature. That is why that part of our epic poems testify to the fact that our forefathers had started that holy affair by transforming the world to make it fit for man's living. Of special import here is the **Ural Batyr** saga. Its main character Ural batyr sets the balance between the Earth and the Water and conquers the Universe. He develops a blood relationship with Samrau who is on a par with heavenly deities: he strikes marriage with her daughter Khomaj and makes a former shining star Aqbuthat his aide. After settling the balance between the Earth and the Water he also favourably solves the problem of immortality. When the Earth was craving for Water, he made the world resurrect by scooping water from the Spring of Immortality.

The heroes of the other sagas included in the present volume are perceived as Ural Batyr's heirs. They are embodied as ones striving to settle other problems posed before the world's humanity, profiting by the conditions brought to life by Ural Batyr. When Ural Batyr attempts to square relations with Nature on the level of the world's destiny, the heroes of such epic poems as **The Black Ambler, The Brown Ox** that make up the Animal poems, set, strive to settle relations with the cattle. By doing so, those works of the folklore seek to bring out the main idea of Ural Batyr's deeds which equal the Gods, and are proper to cultural heroes. That is done in the everyday life framework. They imply to say that squaring the Man-Domestic animals relation is the chief prerequisite in one's living. The **Aqbuthat** for

one contributes an important addition to that condition by posing the problem of introducing social equality on Earth. These problems are viewed from the standpoint of our ancestors' mythologic views and pageantry in the epic poems entered into the volume in question. That is why they as it were make up a mythological encyclopaedia of the Bashqort nation.

# SONUÇ

Başkort halkının destan zenginlikleri arasında mümtaz bir yer tutan mitologik destanlarda atalarımızın tabiatla mücadeleıeri, ona sığınıp onunla senli-benli uyum içinde yaşama istekleri devlet kurmak için esas şart olarak yansıtılmıştır. Bundan dolayı da atalarımıza göre, ehemmiyet arzeden bu olayların başlangıcı dünyanın insanoğlunun yaşayışına elverişli hale getirilip yaratılmasına dayandırılır. Bu cihetle Ural-batır destanı bir başka açıdan ehemmiyet arzeder. Destanın başkahramanı Ural batır toprak ile suyun birbirleriyle olan münasebetlerinin şürsel ahengini dile getirir, alemi kendisiyle bütünleştirir. Ural batır, gök tanrısı derecesındeki Samrau ile kan kardeş olur, onun kızı Homay ile evlenir, yıldız olarak parlayan Akbuzatı kendine yardımcı yapar. Toprak ile Su arasındaki münasebeti, ikisi arasındakı ilişkiyi şiirselleştirdiği zaman, orada «ebebi yaşam», «ölümsüzlük» gibi problemleri de çözüme kavuşturur. Toprak suya yanıp kavrulduğu bir anda kendisine ebebi yaşam fırsatı veren cançeşmesini serpip dünyayı diriltir. Kitap içine alınan başka destanların kahramanları Ural batırın varisleri olarak kabul edilirler. Kitapta bu varisler, Ural batırin meydana getirdiği şartlardan faydalanarak bütün insanlık karşısında problem arzeden başka meseleleri çözme yoluna gittikleri tasavvur edilir. Ural batırin, tabiat ile insan arasında cereyan eden mücadeleyi dünyanın kadıri derece ne ölçüsünde çözmeye çalışmasına karşılık; kendine göre nadir, akıl almaz ve hayret uyandırıcı bir destan olan «Mal-Davar destanı» veya Ekolojik (Doğal) destanların grubunu hasıl eden «Aksak Kola», «Kara Yurga» ne «Konur Boğa» gibi destanların kahramanları ise mal-davar ile insan arasındakı münasebeti bir tertip ve düzene oturtmaya çalışmışlardır. Ayrıca bu eserlerde Ural – batırın tanrılara eş tuttuğu, kültür kahramanlarına has fonksiyon ve rolün temel fikri, gerçek hayatta ve yaşayış planında çözülmeye çalışılmıştır. Onlara (yani

destan kahramanlarına) göre hayatın mevcudiyetinin asıl şartı-insanlarla hayvanlar arasındakı alış-veriş ve münasebetin bir tertip ve düzene koymaktır. «Akbuzat» destanında ise yeryüzünde sosyal adaletin ikamet edilmesi sorunu ortaya atılıp bu şarta önemli bir ilave getiriliyor. Kitapta toplanan destanlarda dile getirilen bütün meseleler, atalarımızın mitolojik ve mecusilik görüşleri çerçevesinde nazar-ı itibara alınmıştır.İşte bundan dolayı da bu destanlar Başkort halkının mitoloji ansiklopedisini meydana getiriyorlar.

Литературно-художественное издание

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## Том III

## Эпос

Биҙәүсе мөхәррире һәм рәссамы *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Ғ. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Ә. М. Кәримова, Ә. Ә. Дәүләтшина*

ИБ № 5294

Йыйырға бирелде 17.04.97. Баҫырға ҡул ҡуйылды 16.09.97. Ҡағыҙ форматы $60 \times 90^{1}/_{16}$. Китап-журн. ҡағыҙы. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 28,0+0,25 форз. + 0,5 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 31,5. Иҫәп-баҫма таб. 28,23+0,45 форз. + 0,43 йәбештермә. Тиражы 5500 дана. Заказ № 423. Хаҡы ирекле.

**Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.**
**Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.**

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге*
*«Почет Билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## EPOS



# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ЭПОС



# BAŞKURT HALIK FOLKLORU

## EPOS